ҠӨРЪӘН КӘРИМ ЯҠТЫҺЫНДА
ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР СЫЛБЫРЫ

# АЛЛАҺТЫҢ ҺӨЙӨКЛӨ РӘСҮЛЕ
# МӨХӘММӘТ МОСТАФА

*салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм*

*(Мәҙинә дәүере)*

Нуриман Мусин

-2-

IslamicBook
Make Room For The Life

بسم الله الرحمن الرحيم

МӘСКӘҮ - 2021

16+

УДК 28-1
ББК 86.38-124.7
Т14

**Баһалаусылар:**
А.З. Салеев
Р.Р. Фасхудинов
К.Л. Жагипаров
Р.Ш. Мамедов

**Тәржемәсе:**
Римма Мәжитова

**Редактор:**
Айҙар Хәбибуллин

ВСЕ ПРАВА ЗАЩИЩЕНЫ
**ISBN:**
ИЗДАТЕЛЬСТВО ООО “МИР ЗНАНИЙ” 2021

**Книги можно заказать:**
Тел. 8(968)7693443
Веб-сайт: www.islamicbook.ru
mirznaniy571@mail.ru

ҠӨРЬӘН КӘРИМ ЯҠТЫҺЫНДА ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР СЫЛБЫРЫ

# АЛЛАҺТЫҢ ҺӨЙӨКЛӨ РӘСҮЛЕ МӨХӘММӘТ МОСТАФА

***саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм***

# -2-

*Мәҙинә дәүере*

Нуриман Мусин

IslamicBook
Make Room For The Life

**МӘСКӘҮ - 2021**

# ҺҮҘ БАШЫ

*Пәйғәмбәрҙәр сылбырының тәүге һәм һуңғы быуыны,*
*Ике йыһандың әфәндеһе, Инсандар үә ендәр пәйғәмбәре,*
*Харам ҡалалар имамы, Бөтә барлыҡ нуры, Ғаләмдәрҙең рәхмәте*

# АЛЛАҺТЫҢ ҺӨЙӨКЛӨ РӘСҮЛЕ МӨХӘММӘТ

*салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм*

Барса мәхлүҡәттең йәшәйеш сәбәбе Мөхәммәттең нуры булғанлыҡтан, Пәйғәмбәр хәҙрәттәре салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде һәм Уның «Хәбибем» («Һөйөклөм») тип маҡтаған Илаһы менән осраштырасаҡ рәүештә кисергән тиңдәшһеҙ үә иғтибарға лайыҡ тормошон ошо меҫкен хәрефле юлдарҙа тулыһынса аңлатып биреү, асылда, мөмкин түгел. Ләкин Уны аңлау һәм аңлатыу йүнәлешендә хәленән килгәнсә юлға сығыуҙа һәр кем өсөн хисапһыҙ файҙалар бар. Бына шуны күҙҙә тотоп, яҙмаға төшөрә алғандарыбыҙ менән Пәйғәмбәр хәҙрәттәре салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең өлгө шәхесенән бер сифатын әҙ генә булһа ла үҙебеҙгә күсереүгә ирешеү, Уның әхлағынан күреп әҙәпкә өйрәнеү – беҙҙең өсөн иң ҙур дәрәжә. Юҡ икән, Уны лайыҡ бер шәкелдә аңлай һәм аңлата алыу ниәтенән бик ҡыйынһынырбыҙ. Бер лампа ҡап-ҡара кейеҙ туҡыма менән ябып ҡуйылып, шул туҡымала һуңынан энә менән бер тишек тишелгәндә, тышҡы яҡҡа уҡтай яҡтылыҡ нурҙары атылған кеүек, беҙҙең яҙған һүҙҙәребеҙ ҙә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хәҡикәте ҡаршында шул рәүешле ҡабул ителергә тейештер. Сөнки бөтә барлыҡтың Бөйөк Халиғы (Яратыусыһы):

إِنَّ اللّٰهَ وَمَلٰٓئِكَتَهُ يُصَلُّونَ عَلَى النَّبِيِّ
يَٓا اَيُّهَا الَّذٖينَ اٰمَنُوا صَلُّوا عَلَيْهِ وَسَلِّمُوا تَسْلٖيمًا

**«Һис шикһеҙ, Аллаһ һәм Уның фәрештәләре Пәйғәмбәргә** (күп итеп) **салауат әйтерҙәр. Эй мөьминдәр! Һеҙ ҙә Уға салауат әйтегеҙ һәм тулы ихласлыҡ менән сәләм юллағыҙ!»** («әл-Әхзәб», 56), **– тип, хисапһыҙ фәрештәләре менән бергә сәләм-салауат әйткән һәм:**

**«لَعَمْرُكَ»:«Һинең ғүмереӊ менән ант итербеҙ ки…»** («әл-Хижер», 72), **тип ҡәҙерләгән был Пәйғәмбәрҙәр солтанының өҫтөнлөгөн һәм камиллығын**

**лайыҡлы рәүештә аңлау һәм еткереү, һүҙҙәрҙең сикләнгәнлектәре сәбәпле, нигеҙҙә, мөмкин түгел.**

Диван әҙәбиәтенең бөйөк шағирҙарынан Шәйех Ғалиб Пәйғәмбәр хәҙрәттәре салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә мөхәббәт һәм хөрмәтен телгә алған ошо нәғти йөкмәткеле шиғыр юлдары әлеге хәҡиҡәтте ни ҡәҙәр асыҡ күрһәтәләр:

*«Рәсүлдәр солтаны, шәрәфле шаһһың, Әфәндем.*

*Сараһыҙҙар өсөн мәңгелек яклаусыһың, Әфәндем.*

*Илаһи диванда алда барыусыһың, Әфәндем.*

*«Лә ғәмрук» тип яҙылғанһың, Әфәндем...*

*Һин – Әхмәт, Мәхмүт һәм Мөхәммәтһең, Әфәндем.*

*Хаҡ Тәғәләнән беҙгә солтан итеп яҙылғанһың, Әфәндем...»*

*«Һин – пәйғәмбәрҙәрҙең солтаны, бөйөк дәрәжәле бер падишаһһың, Әфәндем! Бисара-меҫкендәр өсөн мәңгелек бер яклаусы (һәм дауа һин), Әфәндем! Илаһи диванда (ҡиәмәттең шул дәһшәтле көндәрендә өммәтеңдең) башында һәм иң алдында барған (шәфкәтле бер һаҡлаусыһың), Әфәндем! (Йәнәбе-Хаҡ) «Һинең ғүмереӊ менән ант итәм», тип вәғәҙә биргән, илаһи ант менән билдәләнгән (бөйөк бер Пәйғәмбәрһең), Әфәндем!..*

*Һин – хәҙрәти Әхмәт, Мәхмүт һәм Мөхәммәтһең, Әфәндем! ЙәнәбеХаҡ рәхмәте илә беҙгә ебәргән, илаһи билдәләнеш алған бер солтанһың, Әфәндем...»*

Пәйғәмбәр хәҙрәттәре салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Хаҡ Тәғәлә ҡатындағы ҡәҙере шул тиклем юғарылыр ки, Йәнәбе-Хаҡ Хәбибенә итәғәтте Үҙенә итәғәт ҡылыуға тиңләгән. Уға ҡаршы ҡылынған кескенә хөрмәтһеҙлекте лә ғәмәлдәрҙең әжерһеҙ ҡалдырыласағына бер сәбәп иткән. Һәм Уны ҙурлауҙы күңелдәрҙең тәҡүәлек имтиханы тип билдәләгән. Рәсүлен ярамаҫ бер рәүештә телгә алыуҙы ҙур бер наҙанлыҡ билдәһе тип һанаған. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә мул салауат һәм сәләм әйтеп, Уны һис бер заман күңелебеҙҙән һәм хәтеребеҙҙән алып ташларға ярамағанын аңлатҡан. Хатта намаҙ ҡылғанда, һәр әттәхиәттә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә:

اَلسَّلَامُ عَلَيْكَ أَيُّهَا النَّبِيُّ وَرَحْمَةُ اللهِ وَبَرَكَاتُهُ

тип, сәләм әйтергә ҡушҡан. Намаҙ ваҡытында берәй кешене сәләмләү намаҙҙы боҙасаҡ бер ғәмәл һаналһа ла, Аллаһ Тәғәлә Үҙенең Рәсүленә сәләм биреүҙе намаҙҙың вәжиб бер ғәмәле ҡылған.

Имам Ғазали хәҙрәттәре былай тигән: «Намаҙҙың тәшәһһүдендә Пәйғәмбәребеҙҙең сүрәтен һәм Уның бөйөк шәхесен күңелеңдән күҙалла! «Әс-сәләмү ғәләйкә әййүһән-нәбиййү үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ», тип әйт! Инан, һинең сәләмең Аллаһ Рәсүленә ирешер һәм Ул һиңә тағы ла яҡшыраҡ рәүештә яуап бирер» («Ихйа Голүм әд-Дин», I, 224).

Халиди Багдади хәҙрәттәре лә «Мәктубат»ындағы дүртенсе хатта мәшһүр ғалим Шиһаб ибне Хажәр әл-Мәккиҙән шуларҙы тапшыра: «Намаҙҙа уҡыла торған «Тәхиййәт»тең «әс-сәләму ғәләйкә» һөйләмендә Пәйғәмбәребеҙгә маҡтау әйтелә. Быны Аллаһ Тәғәләнең намаҙ уҡыусы өммәте хаҡында Пәйғәмбәребеҙҙе хәбәрҙар ҡылыуына ишара итеү тип ҡарарға мөмкин, ошо рәүешле «ғәләйһис-саләтү үәссәләм» Әфәндебеҙ намаҙ ҡылыусылар янында тороп, ҡиәмәт көнөндә улар файҙаһына иң фазилиәтле ғәмәлдәре менән шаһитлыҡ итәсәк. Уның ысынлап та янда булыуын иҫкә алыу күңелдә игелеклелек һәм Аллаһтан ҡурҡыу хисенең артыуына булышлыҡ итер».[1]

Ҡиммәте был ҡәҙәр юғары булған Ғаләмдәр сәрүәре саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде тулыһынса танып-төшөнөп аңлатып биреүҙең ауырлығы көн кеүек асыҡ. Ысын хәҡиҡәте өндәшмәй тороуҙың мәңгелек ҡиммәте менән асыла алған был бәйәндәге һүҙҙәребеҙҙе, бары тик Уның мөбәрәк исемен яд итеү менән ҡиммәтләндереп, билдәле бер юғарылыҡҡа күтәреү ниәт-теләгендәбеҙ. Бының өсөн ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙҙан беҙҙең әйтер һүҙҙәребеҙҙе ошбу меҫкенлегебеҙҙе, ғәйептәребеҙҙе таныу сиктәрендә ҡабул итеүҙәрен һорайбыҙ.

Әлбиттә, Уны лайыҡлы рәүештә төшөндөрөү өсөн, тулыһынса, дөрөҫ тасуир иткәндә һәм аңлатҡанда телдәр мотлаҡ бер көсһөҙлөк, кәмселек тойор. Ул – Үҙенә ҡарата мөхәббәт һәм хөрмәттәге ҡеүәт һәм самимилыҡ нисбәтендә солғай алған сикһеҙ бер нур һәм серҙәр донъяһы. Уның мөбәрәк эш-ғәмәлдәрен аңлатыу теләге менән ысынға ашасаҡ хикәйә-бәйәндәребеҙ өсөн Йомартлыҡ эйәһе Аллаһ Тәғәләнән рәхим-шәфҡәт һәм ярҙам һорайбыҙ.

Тәүге мосолмандар: «Раббым! Һин итәғәт ҡылған ҡолдарыңды ғына ғәфү итәсәкһең, гонаһкәрҙәр кемгә һыйынһындар? Раббым! Һин тәҡүә ҡолдарыңа ғына рәхмәт үә мәрхәмәт ҡыласаҡһың, енәйәтселәр кемдән ярҙам һораһындар һуң?» – тип доға-ғибәҙәт ҡылғандар.[2]

Беҙ Ғаләмдәр ғорурлығы – хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк тормошон һүҙҙәрҙең сикләнгән мөмкинлектәре менән тасуирларға йөрьәт иткәндә, зәғифлегебеҙ һәм көсһөҙлөгөбөҙ сәбәпле әҙәп үә нәзәкәт мәсьәләһендә ирекһеҙҙән ебәргән хата-кәмселектәребеҙ арҡаһында Раббыбыҙҙан ғәфү һорап, Уның мәғфирәт (ярлыҡау) дарьяһына һыйынабыҙ.

Йә Рабби! Ғаләмдәр ғорурлығы – хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙҙең абруйы (хаҡы) хөрмәтенә беҙҙе ғәфү ит! Әмин!

**Эштең уңышы бары Аллаһтан ғына булыр!..**

---

1. Мәктубати Мәүләна Халид, 118 б; Рисаләт әр-Рабыта, (Мәүләнә Сафиййүддин, «Рәшахат» өҫтәмәһендә) 225-226 б.
2. әйхаҡи, «Шуғаб әл-Иман», II, 26; Ғазали, «Ихья», I, 338.

# ҺИЖРӘТТЕҢ БЕРЕНСЕ ЙЫЛЫ

**Рәсүлүллаһтың Мәҙинәи-Мөнәүүәрәгә тәүге урынлашыуы**

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Мәҙинәгә һижрәте менән ислам һәм мосолмандар өсөн яңы бер майҙан һәм яңы бер тарихи осор башлана.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә бер эмигрант хәлендә килмәй. Киреһенсә, Ул киләсәктәге донъяның баш миғмары, лидеры, юламаны, яңы ҡоролған ислам дәүләтенең идарасыһы, ҡыҫҡаһы, һәр нәмәһе була. Уның Мәҙинәгә күсенеүе менән ислам тәблиғе һәм мосолмандарҙың эш-хәрәкәт рәүеше ҙур көс ҡаҙана.

«Мәсжиди Нәби» төҙөлгәнсе, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Әйүб әл-Ансари раҙыйаллаһу ғәнһүҙең өйөндә ете ай ҡунаҡ сифатында йәшәй. «Рәсүлде ҡунаҡ итеүсе» – Әбү Әйүб әл-Ансари хәҙрәттәренең өйөндәге мосафир булыуҙың быуаттар йыраҡлығынан килгән тарихы бар.

Ете йөҙ йыл элек Мәҙинәгә (ул ваҡыттағы исеме менән – Йәсрибкә) килгән Йәмән хөкөмдарҙарынан Түббәғ Әбү Кәриб, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Мәккәлә донъяға килеп Мәҙинәгә һижрәт ҡыласағын йәһүди ғалимдарынан белеп алғас, шунда бер өй һалдыра. Бер хат яҙып, алтын мөһөр менән мөһөрләгәс, Мәҙинә ғалимдарының иң ҙурыһына бирә, үҙенә күрергә яҙмаһа, быуындан-быуынға аманат итеп тапшырып, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһенә бирергә ҡуша.[3] Түббәғ ул заманда уҡ, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә иман килтереп, мосолман була.[4]

Ана шул өй, атанан балаға ҡала килеп, Мәҙинә ғалимдары нәҫеленән Әбү Әйүб Халид ибне Зәйд раҙыйаллаһу ғәнһүгә мираҫ сифатында күсә. Әлеге мөбәрәк өй Мәсжиди Нәбәүиҙең көнсығышында урынлашҡан була.

Түббәғтең хатын үҙҙәрендә һаҡлағандар, Аллаһ Рәсүленең Мәҙинәгә килеүен белеп ҡалғас, хатты Уға тапшырыу өсөн, Сүләйм ҡәбиләһенән ышанысլы кеше булған Әбү Ләйланы ебәрәләр. Әбү Ләйла Мәккә юлында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә осрай. Аллаһ Рәсүле уны күргәс, янына саҡырып ала ла:

*«Һин Әбү Ләйламы?»* – тип һорай.

3. Ибне Гасакир, III, 334-335; Сәмһуди, I, 188-189.
4. Әхмәт, V, 340.

Әбү Ләйла: «Эйе», – тигәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һиндә Түббәғтең хаты бар! Миңә ул хатты алып килеп бир!»* – тип бойора.

Әбү Ләйла Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде ул ваҡытта әле белмәй, танымай. Бик аптырап: «Һин кем? Мин һинең йөҙөңдә сихырсылыҡ һыҙаттары күрмәйем. Һин миндә хат барлығын ҡайҙан белдең?!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин – Мөхәммәт! Ҡая, бир миңә хатты!»* – тип белдерә.

Хатты һаҡлаған еренән сығарып, Әбү Ләйла Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә тәҡдим итә. Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү хатты уҡығас, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе өс тапҡыр:

*«Сәләм һиңә, изге ҡәрҙәш Түббәғ!»* – тип әйтә.

Рәсүлүллаһ Әбү Ләйлаға иһә Мәҙинәгә ҡайтырға ҡуша. Әбү Ләйла, Мәҙинәгә ҡайтып, уларға Йәшәйеш нурының килеүе тураһында һөйөнөслө хәбәрҙе еткерә. Был хәбәр шатлығынан мәҙинәлеләрҙең һәр ҡайһыһы уны һыйларға тырыша.[5]

**Рәсүлде ҡунаҡ итеүсе – Әбү Әйүб әл-Ансари разыйаллаһу ғәнһү**

Пәйғәмбәрҙәр солтанын ханәи сәғәҙәтендә (бәхет йортонда) ете ай ҡунаҡ итеү бәхете тәтегән Әбү Әйүб әл-Әнсари разыйаллаһу ғәнһү башта Аллаһ Рәсүлен өйҙөң өҫкө ҡатында йәшәргә бик ҡыҫтаһа ла, Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әба Әйүб! Өйҙөң аҫҡы ҡатында тороу беҙҙең өсөн яҡшыраҡ һәм ҡулайыраҡ»,* – тип, аҫҡы ҡатта урынлаша.

Хөрмәтле ҡунаҡтары – Аллаһ Рәсүленә тиңдәшһеҙ илтифат һәм мөхәббәт менән хеҙмәт күрһәткән Әбү Әйүб разыйаллаһу ғәнһү һәм уның ғаиләһе хатта яткан ерҙәре Пәйғәмбәребеҙҙең өҫтөнә тура килгәнгә лә ҡыйынһынып, диуар янына уҡ һыйынып йоҡлайҙар.

Бер көндө кувшиндары ватылып, эсендәге бөтә һыу иҙәнгә түгелә. Был һыуҙың мөбәрәк ҡунағы өҫтөнә тамып, Уны уңайһыҙлауына борсолған Әбү Әйүб, берҙән-бер ябыныр нимәләре булған бәрхәт юрғанды алып, хафалана-хафалана иҙәнде һөртөргә керешә. Иртән иртүк иһә ул Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән бик үтенеп, өҫкө ҡатҡа күсенеүен һорай.

Пәйғәмбәребеҙ:

5. Ибне Гасакир, III, 335; Гайни, IV, 176.

*«Аҫҡы ҡат уңайлыраҡ!»* – тигәс, Әбү Әйүб разыйаллаһу ғәнһү: «Һеҙ аҫҡы ҡатта булғанда, беҙ өҫкө ҡатҡа менә алмайбыҙ!» – тип белдерә. Ошо яуаптан һуң урындарҙы алмашалар.[6]

Әбү Әйүб әл-Ансари һәм уның ғаиләһе Пәйғәмбәр әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде ҡунаҡ иткән көндәрҙә ризыҡ әҙерләп, Уны һыйларға тырыша. Ризыҡтың ҡалған киҫәге кире ҡайтарылғанда, Рәсүлүллаһтың бармаҡтары ҡағылған урындарҙы эҙләп, шунан ризалыҡ, бәхет тоялар. Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙгә һуғанлымы, һарымһаҡлымы ашамлыҡ тәҡдим итәләр, ләкин Рәсүлүллаһ уны ашамай. Әбү Әйүб разыйаллаһу ғәнһү, ризыҡта Пәйғәмбәребеҙҙең бармаҡ эҙҙәрен күрмәгәс, борсолоп, Уның янына килә лә: «Йә Рәсүлүллаһ! Ул ризыҡ харамлы әллә?» – тип һорау бирә.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Юҡ! Фәҡәт иҫен оҡшатманым, сөнки мин фәрештәләр менән һөйләшәм», – тип аңлата.*

Шунан һуң Әбү Әйүб разыйаллаһу ғәнһү: «Һеҙгә хуш килмәгән нәмәне мин дә оҡшатмам!» – тип белдерә.

Әммә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һеҙ ул ризыҡты ашағыҙ!»* – тип бойора. Был хәлдән һуң Ахырзаман Пәйғәмбәре салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә башҡа ул йәшелсәнән ризыҡ бешермәйҙәр.[7]

Әлеге ваҡиға Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең кешеләрҙе һәм фәрештәләрҙе һис ваҡыт уңайһыҙламау мәсьәләһендәге нәзәкәтен, йомшаҡлығын, һиҙгерлеген бик асыҡ күрһәтеп бирә. Әбү Әйүб әл-Ансариҙың Аллаһ Рәсүленә ҡарата хөрмәте һәм иғтибары Пәйғәмбәребеҙҙе ҡунаҡ итеү мөмкинлеге тамамланғандан һуң да дауам итә. Ысында ла, Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Истанбул, әлбиттә, яулап алынасаҡ, уны еңгән ғәскәр башлығы ниндәй хуш ғәскәр башлығы, уны еңгән ғәскәр ниндәй хуш ғәскәр!»* – тип (Әхмәт, IV, 335; Хәким, IV, 468/8300), алдан хәбәр иткән һөйөнөслө ваҡиғала өлөш кертә алыу өсөн, һикһән йәшенең аръяғына сыҡҡас та, Истанбулды ҡамауҙа ике тапҡыр ҡатнаша һәм һуңынан, еңеүгә ирешкән беренсе ғәскәриҙәренән булып, йәнен ошо юлда тәслим итә. Вафаты алдынан ғына, үҙенән һуң еңеүле сәфәрҙәргә барасаҡ ислам ғәскәрҙәренә мөбәрәк жәсәде менән яңы бер маҡсат бирер өсөн, әйләнә-тирәһендәгеләргә: «Жәсәдемде үҙегеҙ аяҡ баҫасаҡ һуңғы нөктәгә ерләгеҙ!» – тип ҡушып ҡалдыра.[8]

6. Мөслим, «Әшрибә», 171; Ибне Һишам, II, 116.
7. Мөслим, «Әшрибә», 170-171; Ибне Һишам, II, 116.
8. Ҡарағыҙ: Ибне Сәғд, III, 484-485.

**Әнәс ибне Маликтың Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә хеҙмәт итеүе**

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә рәхим итеп килгән ваҡытта, Әбү Талха (үгәй атайым), ҡулымдан етәкләп, мине Аллаһ Рәсүленә килтерҙе һәм: «Йә Рәсүлүллаһ! Әнәс – аҡыллы бер балалыр, һеҙгә хеҙмәт итһен!» – тине. Шул рәүешле Рәсүлүллаһтың хеҙмәтсеһе булдым. Тыныс тормошта һәм юлда саҡта уға (ун йыл) хеҙмәт иттем. Валлаһи, эшләгән берәй кәмселек арҡаһында: «Ни өсөн былай эшләнең?» йәки башҡармаған берәй эш сәбәпле: «Быны ни өсөн эшләмәнең?» – тип һис ҡасан әйтмәгәндер» (Мөслим, «Фәзаил», 52).

Башҡа бер риүәйәткә күрә, хәҙрәти Әнәстең Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хеҙмәт итә башлауы шул рәүешле була:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән Мәҙинә шәһәренә рәхим итеп килеүен үтенгән ваҡытта, ҡатындар һәм ирҙәр – бөтә ансари кирам Рәсүлебеҙгә төрлө бүләктәр тәҡдим итә. Өмми Суләйм бирергә бер әйбере булмағанға ҡайғыра-борсола. Һуңыраҡ улы Әнәсте ҡулынан етәкләп, Аллаһ Рәсүленә килә һәм: «Йә Рәсүлүллаһ! Әнәстең Һеҙгә хеҙмәт итеүен ҡабул итерһегеҙме?» – ти. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ризалығын бирә (Сәмһуди, I, 271).

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«...Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм көндәрҙең берендә мине бер ергә ебәрергә теләне. Мин: «Валлаһи китмәм», – тинем. Әммә эсемдән барырға ҡарар ҡылған инем. Сөнки әмер итеүсе – Аллаһтың Пәйғәмбәре ине. Юлға сыҡтым, урамда уйнаған балалар янына барҙым (һәм унда күңел астым). Шул саҡта Аллаһтың Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм артымдан килеп, башымдан тотто. Артыма боролоп ҡараған ваҡытта, Ул йылмая ине.

*«Әнәс! Мин әйткән ергә барҙыңмы?»* – тип һораны.

«Хәҙер үк барам, йә Рәсүлүллаһ», – тинем» (Мөслим, «Фәзаил», 54).

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү бер иҫтә ҡалдырған башҡа ваҡиғаһын шул рәүешле аңлата:

«Бер көн Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хеҙмәт иткәндән һуң: «Пәйғәмбәребеҙ ҡайлүләлә (төш ваҡытында йоҡлап алыу) тип, балалар янына киттем. Мин уларҙың уйнағандарын ҡарап торған ваҡытта Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм килде. Уйнаған балаларға сәләм бирҙе. Миңә үҙ артынан барырға ҡушты һәм бер ергә ебәрҙе. Мин шунда киттем. Хәҙрәти Пәйғәмбәр мин кире әйләнеп ҡайтҡансыға тикле күләгәлә ултырып торҙо. Әсәйем янына һуңға ҡалып ҡына ҡайттым. Ҡайтҡас, әсәйем: «Ниңә һуңға ҡалдың?» – тип һораны. Мин: «Аллаһ Рәсүле мине эш менән ебәргән ине», – тинем. Әсәйем: «Ниндәй эш менән?» – тип һораны. Быға ҡаршы мин:

«Рәсүлүллаһтың сере!» – тип яуап бирҙем. Әсәйем: «Улайһа, Рәсүлүллаһтың серен һаҡла!» – тине.

Әлеге хәҙисте риүәйәт ҡылған Сабит былай тип асыҡлай: «Әнәс миңә: «Әгәр ул серҙе берәйһенә һөйләр булһам, һиңә һөйләр инем, Сабит!» – тине» (Әхмәт, III, 195).

Күренеүсә, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм балаларҙы үҙенең йәштәше күреп, уларҙы лайыҡлы әңгәмәләш тип ҡабул иткән. Уларға ҡайһы бер серҙәрен һөйләгән. Ул тормошоноң һәр баҫҡысында балаларға ҡарата тәрән яратыу һәм наҙлы мөнәсәбәт һаҡлаған, уларҙың һүҙҙәренә етди иғтибар биреп, улар менән бер дәрәжәгә төшөп аралашҡан. Шулай итеп, балаларҙың күңелдәренә үтеп кергән. Пәйғәмбәребеҙ хәҙис-шәрифтәрендә:

*«Берәйегеҙҙең балаһы бар икән, уның менән үҙегеҙҙе балаларса тотоғоҙ!»* (Дәйләми, III, 513).

*«Балаларығыҙҙы һыйлағыҙ, һәм уларға яҡшы тәрбиә бирегеҙ!»* – тип бойороп (Ибне Мәжә, «Әҙәп», 3), сабыйҙарыбыҙға һәм кесе йәштәгеләргә ҡарата ни рәүешле мөғәмәлә ҡылыу кәрәклеген күрһәтә.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең өлгө тормошо ла балаларҙы тәрбиә ҡылыуҙа беҙгә юл күрһәтеүсе булып тора. Ул Әнәскә шундай тәрбиә биргән ки, уны йәшәү дәүерендә һис бер ваҡыт асыуланмаған. 55 йәшлек Рәсүлүллаһ ғәләйһиссаләәтү вәссәләәм 10 йәшлек Әнәстең күңеленә шундай юл табып, уның менән иптәше кеүек шаярған һәм кәрәк ваҡытта уға серен дә һөйләгән.

Аллаһ Рәсүленең тәрбиәһендә үҫкән Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһү, бала булыуына ҡарамаҫтан, үҙен ҙур кеше кеүек тотоп, Рәсүлүллаһтың серен һис бер кемгә һөйләмәйенсә, был серҙе ҡәбергә алып китә алыр ине. Һис шикһеҙ, хәҙрәти Әнәстең шул рәүешле етлегеүе Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм өйрәткән иң өҫтөн тәрбиә ысулы менән бәйле.

**Муахат – мөһәжирҙәр һәм ансарҙар араһында ҡәрҙәшлек килешеүе**

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәблиғ (динде таратыу) эшен башлағандан бирле, ислам динен ҡабул иткәндәргә ниндәй ырыу, ҡәбилә һәм милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, уларға бер тигеҙ ҡараған һәм араларында ислам ҡәрҙәшлеге тыуҙырған. Береһе һижрәттән алда һәм икенсеһе һижрәттән һуң – ике тапҡыр «муахат», йәғни «ҡәрҙәшлек килешеүе» төҙөлгән. Мәккәләге муахат – ҡөрәйеш ҡәбиләһенә ҡараған ҡайһы бер мосолмандарҙың азат ителгән ҡолдар менән ҡәрҙәшлеген иғлан итеү ул. Мәҫәлән, Зәйд ибне Харисә менән Хәҙрәти Хәмзә, Әбү Хузәйфәнең азат ителгән ҡоло Сәлим менән Әбү Ғубәйҙә ибне Жәррах, Билали Хәбәши менән Ғубәйҙә ибне Харис ҡәрҙәшләшкән.[9]

9. Ибне Сәйединнәс, I, 321; Ибне Хабиб, 70 б.; Ибне Ғабдилбәрр, *«әд-Дүрәр»*, 90 б.

Исламдың әүәлге йылдарынан уҡ шул рәүешле бер-береһе менән яҡынайған мосолмандар, Мәҙинә ҡалаһына күсеп килгәндән һуң, икенсе бер ҡәрҙәшлек килешеүе төҙөй.

Мөһәжирҙәр Мәҙинә ҡалаһына беренсе күсенеп килгән көндәрендә үк, ансарҙар уларҙы өйҙәрендә ҡунаҡ итеү өсөн бер-береһе менән ярыша. Хатта әлеге ҡунаҡтарҙы бүлешә алмайынса, үҙ араларында шыбаға һалырға мәжбүр булалар.[10] Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә күсеп килеүенә биш ай булғас, ул мөһәжирҙәр менән ансарҙарҙы парлап-парлап туғанлаштыра. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был ҡәрҙәшлек солохон Әнәс ибне Малик өйөндә төҙөй.[11]

Мәҫәлән, хәҙрәти Әбү Бәкер – Харижә ибне Зәйд менән; хәҙрәти Ғүмәр – Ғутбан ибне Малик менән; Әбү Ғубәйҙә – Сәғд ибне Муғаҙ менән; хәҙрәти Ғосман – Әүес ибне Сабит менән;[12] хәҙрәти Билал – Ғабдуллаһ ибне Ғабдуррахман менән;[13] хәҙрәти Сәлмән – Әбуд-Дәрда менән;[14] Сәлим – Муғаҙ ибне Магис менән;[15] Ғаммар иһә Хузәйфә разыйаллаһу ғәнһүм әжмәғин менән ҡәрҙәшләшә.[16] Әлеге ҡәрҙәшлек килешеүендә яҡтарҙың холоҡ-ҡиәфәт мәсьәләһендә лә бер-береһенә оҡшауына иғтибар бирелә.

Һәр мөһәжир ғаиләне мәҙинәле бер ғаилә үҙ янына ала. Был рәүешле араларында ҡәрҙәшлек акты тормошҡа ашырыла. Улар берлектә эшләргә һәм эшләп тапҡандарын бер-береһе менән бүлешергә тейеш була. Ансарҙар артыҡ ер биләмәләрен Рәсүлүллаһҡа тапшыра һәм Пәйғәмбәребеҙ әлеге ерҙәрҙе мөһәжирҙәргә бүлеп бирә. Ансарҙар бының менән генә туҡталып ҡалмайса, тағы ла нығыраҡ йомартлыҡ күрһәтеп: «Йә Рәсүлүллаһ! Хөрмә баҡсаларыбыҙҙы ла мөһәжир ҡәрҙәштәребеҙ менән үҙ-ара бүлеп бир!» – тиҙәр.

Пәйғәмбәр әфәндебеҙ:

*«Юҡ, улай булмаҫ!»* – тип бойорғандан һуң, ансарҙар мөһәжирҙәргә: «Улайһа ағастарҙы ҡарау, һыу һибеү эштәрен үҙ өҫтөгөҙгә алығыҙ ҙа, уңышы уртаҡ булһын!» – тигән тәҡдим менән сыға. Пәйғәмбәребеҙҙән рөхсәт алғандан һуң, һәр ике яҡ: «Ишеттек һәм итәғәт иттек!» – тип, был тәҡдимде ҡабул итә (Бохари, «Харс», 5).

Был ҡәрҙәшлек бар нәмәләрен Мәккә ҡалаһында ҡалдырып, тормоштарын яңынан башлаған һәм Мәҙинәгә күсеп килгән мосолмандар менән уларҙы ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алыусы ансарҙарҙың матди һәм мәғәнәүи ярҙамлашыуына нигеҙләнгән ине. Мугаһат диндәре өсөн тыуған ерҙәрен ташлап киткән мөһәжирҙәрҙең ауыр сәфәрен еңеләйтеүҙе, ҡайғыһын уртаҡлашыуҙы, уларҙы

10. Бохари, «Жәнаиз», 3; «Мәнаҡибүл-Ансар», 46.
11. Бохари, «Әҙәп», 67.
12. 10 Ибне Һишам, II, 124-125.
13. Ибне Сәғд, III, 233, 234.
14. Бохари, «Әҙәп», 67.
15. Ибне Габдилбәрр, II, 567.
16. Хаким, III, 435/5657.

Мәҙинәгә урынлаштырып, мосолмандар араһында берҙәмлек тыуҙырыуҙы һәм хеҙмәттәшлекте маҡсат итеп ҡуя.

Күрһәтмәлелектән йыраҡ торған һәм бары тик иман дуҫлығына нигеҙләнгән мугаһат солохо, мираҫ хоҡуғы менән бергә, кешеләр араһындағы үҙ-ара хаҡтар, тигеҙлек һәм ярҙамлашыу кеүек күп ҡырлы маҡсаттарҙы ла үҙ эсенә ала.[17] Ҡәрҙәшләшкән заттар бер-береһенең ҡараусыһы, химаясыһы һәм вариҫына әүерелә. Был ҡәрҙәшлек акты һуңыраҡ та билдәле бер ҡағиҙә рәүешендә йәшәүен дауам итә. Мираҫҡа бәйле хөкөм генә Бәҙер һуғышынан һуң вәхи нигеҙендә кире ҡағыла. Вариҫ булыу бары тик нәҫелдәнлек, туғанлыҡҡа нигеҙләнеп башҡарыла башлай.[18]

Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә әлеге мәсьәләгә ҡарата былай ти:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм урынлаштырған ҡәрҙәшлек ҡағиҙәһенә нигеҙләнеп, бер мөһәжир ансари ҡәрҙәшенән ҡалған мираҫҡа, уның туғандарынан алда вариҫ булыр ине. Әммә:

وَلِكُلٍّ جَعَلْنَا مَوَالِيَ مِمَّا تَرَكَ الْوَالِدَانِ وَالْأَقْرَبُونَ

**«Әсә, ата һәм туғандарҙан ҡалған һәр әйбер өсөн бер вариҫ билдәләнек...»** – аяты («ән-Ниса», 33) иңгәндән һуң, был хөкөм юҡҡа сығарылды. Әлеге аяттың дауамындағы:

وَالَّذِينَ عَقَدَتْ أَيْمَانُكُمْ فَآتُوهُمْ نَصِيبَهُمْ

**«…Беҙ вариҫтар иттек, анттарығыҙ менән килешеүҙе нығытҡандарға иһә уларҙың өлөштәрен бирегеҙ…»** күрһәтмәһе нигеҙендә ансарҙар һәм мөһәжирҙәр араһындағы ҡәрҙәшлек хоҡуғы бары тик ярҙамлашыу, бер-береңә терәк булыуға һәм хәйерле ғәмәлдәр ҡылыуға ҡайтып ҡала. Был рәүешле хоҡуҡ нигеҙендә нәҫелдән-нәҫелгә мал күсеү ғәмәлдән сығарыла. Ләкин кеше үҙ ихтыяры менән малдарын (малының өстән бер өлөшөнән артыҡ булмау шарты менән) васыят итә ала» (Бохари, «Тәфсир», 4/7; Әбү Дауыт, «Фәраиз», 16/2922).

Муахат солохо ярҙамында исламғаса Мәҙинәлә әүес һәм хәзрәж ҡәбиләләре араһында күп йылдарҙан бирле дауам иткән һәм быуындан-быуынға күсеп килгән ҡан дошманлығы юҡҡа сығарыла, ғәҙәти ҡәрҙәшлектән дә көслөрәк туғанлыҡ урынлаша. Улар бер-береһен күрер өсөн таң атҡанын зарығып көтәләр. Улар бер-берҙәре менән күрешкән ваҡытта, эскерһеҙ һөйөү хисе менән: «Мин күрмәгән ваҡытта хәлең нисек ине?» – тип, хәл-әхүәл һорашалар. Бер-берен күрмәйсә, хәл-әхүәл һорашмайса торған ваҡыттары өс көндән артмай. Илаһи ихтирамға нигеҙләнгән был ҡәрҙәшлек тураһында Ҡөрьәни-Кәримдә лә иҫкә алынған.[19]

17. Бохари, «Кәфаләә», 2, «Әҙәп», 67.
18. Ҡарағыҙ: «әл-Әнфәл», 72-75; Бохари, «Фәраиз», 16.
19. Ҡарағыҙ: «әл-Хәшр», 9.

Пәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссаләәтү вәссәләәм Мәҙинәлә бер ислам йәмғиәтенә һәм дәүләтенә нигеҙ һала. Бының өсөн эшләнергә тейешле беренсе эш – ижтимағи берҙәмлеккә ирешеү, йәғни йәмғиәт эсендәге берҙәмлекте иң яҡшы рәүештә һаҡлаған сифаттар: үҙ-ара ихтирам, ҡәрҙәшлек һәм бер-береңә ярҙам итеүҙе булдырыу. Шул сәбәпле Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансарҙар һәм мөһәжирҙәр араһында урынлаштырған әлеге ҡәрҙәшлек үрнәге донъя тарихында тиңе һәм оҡшашы булмаған бер йәмғиәттең ойошоуында, барлыҡҡа килеүендә мөһим урын алған.

Аллаһ Рәсүле төҙөгән ислам йәмғиәте ҡәбилә, ҡәүем, ырыу, ҡоллоҡ һәм азатлыҡ, байлыҡ-фәҡирлек кеүек синфи айырмалыҡтарға нигеҙләнмәйенсә, бары тик ислам ҡәрҙәшлегенән генә сығып ҡоролған. Шунлыҡтан социаль йәмғиәттәге кешеләр араһындағы ҙур айырмалыҡтар гүйә сүлмәктә бергә ҡушып иреткәндәй юҡҡа сығарылған.

### Мөһәжирҙәр менән ансарҙарҙың фазиләттәре

«Бер ерҙән башҡа ергә күсеп киткән» мәғәнәһендәге «мөһәжир» һүҙе – ысында иһә сиктән тыш иҙеү һәм яфа сигеүҙәргә түҙер самалары ҡалмайынса, Мәккәнән Мәҙинә ҡалаһына күсеп килгән мосолмандарға бирелгән бер исем. Мөһәжирҙәр үҙҙәре менән күтәрә алған кәрәк-яраҡтарынан тыш, бар мал-мөлкәттәрен ташлап күсенеп китә. Мөшриктәр иһә мосолмандар ҡалдырып киткән малдарға шундуҡ хужа була. Мосолмандар ысынбарлыҡта бик күп малдарын юғалта. Ләкин уларҙың күҙҙәре әлеге малдарҙы ла күрмәй, улар донъялыҡ мәнфәғәттәр артынан да йөрөмәй. Сөнки әсхәбе кирам имандың ләззәтен һәм тәмен тойоп ҡараған, шул сәбәпле Аллаһ юлында бар малдарын ҡорбан итергә әҙер була.

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ниндәй ҙә булһа бойороҡ бирһә: «Ата-әсәм һиңә фиҙа булһын, йә Рәсүлүллаһ!» – тип, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең иң кескенә үтенесен дә, бойороҡ булараҡ ҡабул итеп, уны үтәргә әҙер торалар. Мәҙинәгә күсеп китеүенә ҡомасаулаған мөшриктәргә үҙенең байлығы йәшерелгән ерҙе күрһәтеп, һижрәтен тормошҡа ашыра алған, Сүһәйеб Руми исеме менән мәшһүр Сүһәйеб ибне Синан раҙыйаллаһу ғәнһү бының асыҡ бер миҫалы булып тора.

Аллаһ юлында ҙур яфалар күргән мосолмандарҙан Сүһәйеб раҙыйаллаһу ғәнһү хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһүҙән һуң Мәҙинәгә күсеп китеү маҡсаты менән юлға сыға. Мәккәлеләрҙең ҡайһы берҙәре уны артынан ҡыуып тотоп:

«...Һин бында килгәндә фәҡир һәм көсһеҙ бер кеше инең. Арабыҙҙа ҙур байлыҡҡа ирештең! Һуңынан үҙең менән байлығыңды ла алып китергә теләйһең! Валлаһи, быны һиңә рөхсәт итмәйәсәкбеҙ!» – тип әйтәләр.

Сүһәйеб атланып барған малынан шунда уҡ ергә төшә. Уҡ һауытынан уҡтарын сығара һәм: «Эй ҡөрәйеш йәмәғәте! Мин һеҙҙең арағыҙҙа иң яҡшы уҡсыларҙың береһе булыуымды яҡшы беләһегеҙ. Валлаһи, янымда булған уҡтарҙың барын да һеҙгә атырмын, улар бөткәс, ҡылысымды сығарырмын. Был ҡоралдарҙың береһе генә булһа ла ҡулымда икән, яныма яҡын килә алмаҫһығыҙ. Бары тик улар ҡулымдан төшһә, минең менән теләгәнегеҙҙе эшләй алырһығыҙ. Хәҙер үк байлығым йәшерелгән ерҙе күрһәтһәм һәм ул байлыҡтарымды һеҙгә ҡалдырһам, юлымдан китеп, мине тыныслыҡта ҡалдырырһығыҙмы?» – ти.

Мөшриктәр әлеге тәкдимде ҡабул итә. Сүһәйеб раҙыйаллаһу ғәнһү байлығы йәшерелгән ерҙе күрһәтә һәм юлын дауам итә. Рабиғүл-әүүәл айы урталарында Ҡубәгә барып, Рәсүлүллаһ менән күрешә. Ул ваҡытта хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында хәҙрәти Әбү Бәкер менән Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә лә була. Ҡаршыларында Күлсүм ибне Хидм килтергән Өмми Жирзан хөрмәһенән бер тәлгәш ята ине. Сүһәйеб раҙыйаллаһу ғәнһүҙең юлда саҡта күҙҙәре ауырта, тамағы ла бик ас була. Ул хөрмә емештәрен ашай башлай. Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү шаяртып:

«Йә Рәсүлүллаһ! Сүһәйебте күрәһегеҙме? Күҙе ауырта, ә үҙе сей (өлгөрөп етмәгән) хөрмә емеше ашай?!» – ти. Бөтә Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сүһәйебкә:

*«Үҙеңдең күҙең ауырта, үҙең өлгөрмәгән хөрмә емеше ашайһыңмы?!»* – ти.

Сүһәйеб: «Мин уны күҙемдең ауыртмаған яғы менән ашайым!» – ти.

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йылмая һәм (Сүһәйебтең үҙ ғүмерен һаҡлап ҡалыу маҡсатынан Мәккә мөшриктәренә байлығын ташлап ҡалдырыуына ишаралап):

*«Сүһәйеб отто! Сүһәйеб отто! Әй Әбү Яхья! Һатыу отошло булды! Һатыу отошло булды!»* – тип белдерә (Ибне Сәғд, III, 226-230; Хаким, III, 450, 452).[20]

Мөһәжирҙәр фиҙакәрлек ҡылып һәм яфалар сигеп Мәҙинә шәһәренә күсергә тырышҡанда, Мәҙинә мосолмандары ла әлеге иман өсөн бөйөк һуғышҡа теләктәшлек белдереп, уларҙы иман тулы бер мөхәббәт менән күкрәктәренә ҡыҫа. Ҡайһы бер мөһәжирҙәр үҙҙәрен ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алған һәм ысын күңелдән һәр нәмәләрен улар менән бүлешергә әҙер торған ансар ҡәрҙәштәренә ауырлыҡ тыуҙырырға теләмәйенсә, ихлас бирелгән әйберҙәрҙе алмайҙар, ҡай берҙәре ансарҙарҙың хөрмә баҡсаларында хеҙмәт ҡуйып аҡса эшләүҙе генә ҡабул итәләр. Ғәбдүррахман ибне Ғәүф раҙыйаллаһу ғәнһү шуларҙың береһе була. Уның менән ҡәрҙәшлеге иғлан ителгән Сәғд ибн Рәбиғ раҙыйаллаһу ғәнһү уға: «Бына малдарым, уларҙың яртыһын һиңә бирәм», – ти.

20. Шулай уҡ ҡарағыҙ: 1-се том, 332 б.

Ғәбдүррахман ибн Ғәүф разыйаллаһу ғәнһү иһә: «Аллаһ малдарыңды бәрәкәтле итһен. Ғаилә ағзаларыңа ла һаулыҡ бирһен. Һин миңә Мәҙинә шәһәре баҙарын күрһәт, шул еткән!» – тип яуап бирә. Был рәүешле сауҙа итеү менән шөғөлләнә башлаған Ғәбдүррахман ҡыҫҡа ваҡыт эсендә байый (Бохари, «Мәнакибул-Әнсар», 3).

Вәхиҙең беренсе тыңлаусылары булған, алда үҙҙәрен көтәсәк бөтә ауырлыҡтарҙы белә тороп, Аллаһ Рәсүленә иман килтергән, шул сәбәпле ҙур яфаларға дусар ителгән, һуңынан да йорттарынан ҡыуылған мөһәжирҙәр Аллаһ Тәғәләнең хәмед-сәнәләренә лайыҡ була. Сөнки улар имандарын һаҡлап ҡалыу өсөн, донъя мәнфәғәттәренән ваз кисеп, бар әйберҙәренән, малдарынан баш тартҡандар. Мөһәжирҙәр әлеге эш-ғәмәлдәре менән фиҙакәрлек кенә күрһәтеп ҡалмай, шул уҡ ваҡытта дини бурыстарын да үтәйҙәр, сөнки Ҡөрьәни-Кәрим кәрәк ваҡытта һижрәтен үтәмәүселәрҙе ғәйепләй.[21]

Йәнәбел Хаҡ Ҡөрьәни-Кәримдә мөһәжирҙәрҙең гонаһтарын ғәфү итәсәген һәм уларҙы йәннәттәре менән бүләкләйәсәген белдерә:

فَالَّذِينَ هَاجَرُوا وَأُخْرِجُوا مِنْ دِيَارِهِمْ وَأُوذُوا فِى سَبِيلِى وَقَاتَلُوا
وَقُتِلُوا لَأُكَفِّرَنَّ عَنْهُمْ سَيِّئَاتِهِمْ وَلَأُدْخِلَنَّهُمْ جَنَّاتٍ تَجْرِى مِنْ
تَحْتِهَا الْأَنْهَارُ ثَوَابًا مِنْ عِنْدِ اللّٰهِ وَاللّٰهُ عِنْدَهُ حُسْنُ الثَّوَابِ

**«...Һижрәт ҡылыусылар – тыуған ерҙәренән ҡыуылғандарҙың, Минең юлымда яфаларға дусар булғандарҙың, һуғышҡан һәм үлгәндәрҙең һис шикһеҙ гонаһтарын ғәфү итәсәкмен. Уларҙы аҫтарынан йылғалар ағып торған йәннәттәремә кертәсәкмен. Сауаптарҙың иң күркәме – Аллаһ ҡаршындағыһы»** («Әлү Ғимран», 195).

ثُمَّ إِنَّ رَبَّكَ لِلَّذِينَ هَاجَرُوا مِنْ بَعْدِ مَا فُتِنُوا ثُمَّ جَاهَدُوا
وَصَبَرُوا إِنَّ رَبَّكَ مِنْ بَعْدِهَا لَغَفُورٌ رَحِيمٌ

**«Һуңынан, дөрөҫлөктә, Раббың – яфа сигеүҙәрҙән һуң һижрәт ҡылған һәм артынан да йыһатҡа ҡуҙғалып, сабырлыҡ күрһәткән кешеләрҙең ярҙамсыһы. Бөтә быларҙан һуң Раббың, әлбиттә, гонаһтарҙы ғәфү итеүселер, бик мәрхәмәтлелер»** («ән-Нәхл», 110).

Был хаҡта Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ шулай бойора:

*«Мөһәжирҙәр, кешеләрҙән етмеш йыл алдан йәннәткә кереп, уның ниғмәттәренән файҙаланасаҡтар. Кешеләр иһә хисап биреү өсөн көттөрөп тороласаҡтар»* (Хәйсәми, X, 15).

---

21. Ҡарағыҙ: «ән-Ниса», 97.

Мөһәжирҙәр, әхирәттә бик ҙур өҫтөнлөктәргә эйә булғандары хәлдә, күрһәткән фиҙакәрлектәре өсөн, донъялыкта йәшәү дәүерендә лә Аллаһтың рәхмәтенә ирешәләр. Аяти кәримәлә:

وَالَّذِينَ هَاجَرُوا فِى اللّٰهِ مِنْ بَعْدِ مَا ظُلِمُوا لَنُبَوِّئَنَّهُمْ فِى
الدُّنْيَا حَسَنَةً وَلَأَجْرُ الْاٰخِرَةِ أَكْبَرُ لَوْ كَانُوا يَعْلَمُونَ

**«Золомға тарығандан һуң, Аллаһтың ризалығы өсөн күсеп киткән мөьминдәрҙе донъяла матур бер ергә урынлаштырасаҡбыҙ. Әхирәт көнөнөң әжере иһә ҙурыраҡ. Улар быны белһәләр ине»** («ән-Нәхл», 41).

Аллаһ Тәғәлә мөһәжирҙәргә, мәхрүм ҡалған мөлкәттәре бәрәбәренә ғәнимәттәрҙән башҡа кешеләргә ҡарағанда күберәк өлөш сығара. Был хаҡта Ҡөрьәни-Кәримдә былай тиелә:

لِلْفُقَرَاءِ الْمُهَاجِرِينَ الَّذِينَ أُخْرِجُوا مِنْ دِيَارِهِمْ وَأَمْوَالِهِمْ يَبْتَغُونَ فَضْلًا
مِّنَ اللّٰهِ وَرِضْوَانًا وَيَنْصُرُونَ اللّٰهَ وَرَسُولَهُ أُولٰٓئِكَ هُمُ الصَّادِقُونَ

**«Был ғәнимәт малдарында, бигерәк тә йорттарынан һәм малдарынан айырылған, Аллаһтың мәрхәмәтен һәм ризалығын өмөт иткән, Аллаһ** (диненә) **һәм Рәсүленә ярҙам иткән фәкир мөһәжирҙәрҙең хаҡы бар. Бына эскерһеҙ булыусылар – шуларҙыр»** («әл-Хәшр», 8).

Мөһәжирҙәр Мәҙинәгә күсеп килгәс, күргән хәсрәттәренән тыш, Мәҙинә шәһәренең һауаһына ла оҙаҡ ваҡыт эйәләшә алмайҙар. Биҙгәк һәм шуға оҡшаш сирҙәрҙән интегәләр. Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә, атаһы Әбү Бәкер Ситдыҡ һәм Билал Хәбәши раҙыйаллаһу ғәнһүмә биҙгәк тотоп, Мәккәне һағынып ыҙа сигеүҙәрен күргәс, был хаҡта Аллаһтың Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хәбәр итә. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе быға яуап итеп доға ҡыла:

*«Йә Раббым! Мәккәне беҙгә яраттырғаның кеүек Мәҙинәне лә беҙгә яраттыр! Хатта Мәккәнән дә нығыраҡ яраттыр! Ризыҡтарыңа бәрәкәт насип ит! Йә Раббым! Мәҙинәнең һауаһын яҡшырт, биҙгәк һәм малярия ауырыуҙарын Жухфәйә[22] ебәр!»* (Бохари, «Фәзаилүль-Мәҙинә», 12; Мөслим, «Хажж», 480).

❁

22. Жухфә ул осорҙа йәһүҙи йәки мөшриктәр йәшәй торған бер өлкә була. Халҡы мосолмандарға ҡаршы көрәштә кафырҙарға булышлыҡ күрһәтә, фетнә һәм ғауға сығара. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Аллаһҡа шул рәүешле доға ҡылып, уларҙың чума сире менән мәшғүл булып, кафырҙарға ярҙам итергә һәм фетнә-ғауға сығарырға мөмкинлек таба алмаҫлыҡ ҡылыуын һорай (Гайни, X, 251).

Мәккәнән күсеп килгән, күп ғазаптар күргән мөһәжирҙәрҙе ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алған, улар менән бөтә әйберҙәрен бүлешкән, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ихтирам күрһәтеп, уның дәғүәтенә терәк булған ихлас Мәҙинә мосолмандарына «ярҙам итеүселәр» мәғәнәһендә ҡулланылған «ансар» исеме бирелгән. Ансарҙарҙан бары бер кешене генә белдереү өсөн «ансари», уларҙың күпселегегә йәки бөтәһе өсөн дә «ансарийун» тәғбирҙәре ҡулланыла.

Гайлан ибне Жәрир разыйаллаһу ғәнһү риүәйәт ҡыла: Әнәс разыйаллаһу ғәнһүҙән: «Бынан алда ансар исеме ҡулланыу хоҡуҡығыҙ бар инеме, юҡһа һеҙгә был исемде Аллаһ бирҙеме?» – тип һорағас, ул: «Был исемде беҙгә Аллаһ бирҙе», – тип белдерә (Бохари, «Мәнакибул-Ансар», 1).

Ансарҙар Мәҙинә ҡалаһында йәшәүсе әүес һәм хәзрәж исемле ике ҡәбиләнән тора. Пәйғәмбәрлектең ун беренсе йылында хәзрәж ҡәбиләһенең алты кешеһенән торған делегация Мәккә ҡалаһына килә. Улар ҡөрәйеш ҡәбиләһенән әүес ҡәбиләһенә ҡаршы һуғышта ярҙам итеүҙәрен һорай. Шунда Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән дә осрашалар. Уның дәғүәте һәм тоғро юлға саҡырыуы нәтижәһендә ислам динен ҡабул итәләр. Хәзрәждәр Мәккәнән Мәҙинәгә әйләнеп ҡайтҡас, был хаҡ дин нигеҙендә араларындағы дошманлыҡ юҡҡа сығасағына һәм элекке кеүек ҡәрҙәш буласаҡтарына өмөтләнеп, әүес ҡәбиләһен дә мосолманлыҡ ҡабул итергә саҡыралар. Йылдарса дауам иткән һуғыштан күңелдәрендә тыуған арығанлыҡ тойғоһо, үҙ-ара килешеү һәм тыныслыҡ урынлаштырыу нәтижәһендә, ике ҡәбиләнең берләшеүенә һәм көсәйеүенә килтерә. Ике ҡәрҙәш ҡәбилә яңынан бергә берләшеп, пәйғәмбәрлектең ун икенсе һәм ун өсөнсө йылдарында Мәккә шәһәренә илселәр ебәрә. Унда хәҙрәти Пәйғәмбәр менән осрашалар. Беренсе һәм икенсе Ғәҡәбә анттары төҙәлә.

Икенсе Ғәҡәбә антында уларҙың тыуған еренә (йәғни Мәҙинә шәһәренә) күсеп килгән осраҡта, Аллаһ Рәсүлен һәм Мәккә мосолмандарын дошмандарҙан һаҡларға һәм уларға ярҙам итергә һүҙ бирәләр. Был ваҡиға ислам тарихының яңы бер дәүере башланыуға һәм һижрәткә сәбәп була.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөһәжирҙәр менән ансарҙарҙы парлап-парлап ҡәрҙәш тип иғлан иткән ваҡытта, ансарҙар мөһәжир ҡәрҙәштәренә Мәҙинә ҡалаһындағы үҙ йорттарын, эштәрен, баҡсаларын бүлеп биреп, ябай ҡәрҙәшлектән өҫтөн тиңдәшһеҙ берҙәмлек һәм бер-береңә терәк булыу үрнәге күрһәтәләр.

Ансарҙарҙың әлеге игелекле эштәре хаҡында Ҡөрьәни-Кәримдә:

وَالَّذِينَ تَبَوَّؤُوا الدَّارَ وَالْإِيمَانَ مِنْ قَبْلِهِمْ يُحِبُّونَ مَنْ هَاجَرَ إِلَيْهِمْ وَلَا يَجِدُونَ
فِي صُدُورِهِمْ حَاجَةً مِمَّا أُوتُوا وَيُؤْثِرُونَ عَلَى أَنْفُسِهِمْ وَلَوْ كَانَ بِهِمْ خَصَاصَةٌ

**«Тағын да алдан Мәҙинәне үҙ йорттары иткән һәм күңелдәренә иман урынлаштырған кешеләр, үҙ яндарына күсеп килгәндәрҙе һөйәләр, уларға бүләк итеп бирелгән нәмәләргә ҡарата күңелдәрендә һис бер борсоу, ҡайғы хис итмәйҙәр ине. Үҙҙәре мохтажлыкта йәшәһәләр ҙә, күсеп килеүселәрҙе үҙҙәренән өҫтөн күрәләр ине...»** («әл-Хәшр», 9).

Был аяттың иңеүенә сәбәп буларак телгә алынған ваҡиға ансарҙарҙың фиҙакәрлегенә асыҡ бер миҫал һанала:

«Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына аслыҡтан хәлһеҙләнгән бер кеше килеп, ярҙам итеүен һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Был ҡәрҙәшегеҙҙе кем ҡунаҡ итергә теләй?»* – тип һорай. Ансарҙарҙан булған Әбү Талха раҙыйаллаһу ғәнһү: «Мин ҡунаҡ итермен. Йә Рәсүлүллаһ!» – тип, ул фәкирҙе үҙ йортона алып ҡайта. Өйөнә ҡайтҡас, ҡатынынан: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мосафирын ҡунаҡ итәйек! Өйҙә ашарға берәй нәмә бармы?» – тип һорай. Ҡатыны: «Юҡ, бары тик балаларға етерлек кенә ризыҡ бар», – ти. Сәхәбә: «Улайһа, балаларҙы уйнат. Табын артына килергә теләһәләр, йоҡларға ятҡыр. Ҡунағыбыҙ өйгә кергәс, берәй сәбәп табып, лампаны һүндер. Беҙ ҙә табын артында ашаған кеүек ултырайыҡ», – ти. Табынға ултыралар. Ҡунаҡ тамағын туйҙыра, улар иһә ас килеш йоҡларға яталар. Иртән Әбү Талха Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янына бара. Аллаһ Рәсүле уны күргәс:

*«Был кис ҡунағығыҙ өсөн эшләгән ғәмәлдәрегеҙҙән Аллаһ Тәғәлә разый булды»,* – тип хәбәр еткерә (Бохари, «Тәфсир», 59/6; Мөслим, «Әшрибә», 172-173).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Мәҙинә шәһәренә күсеп килгәс, мөһәжирҙәр: «Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ күсеп килгән әлеге ҡәүемдән йомартыраҡ һәм игелеклерәк кешеләр күрмәнек. Малдары күп булғандары мул-мул малдарын бирә, малдары әҙ булғандары ла фиҙакәрлек күрһәтә, ярҙам итә. Тормош-көнкүреш өсөн бөтә кәрәк-яраҡтарҙы бирҙеләр, малдары менән уртаҡлаштылар. Барлыҡ әжер-сауапты үҙҙәренә алып бөтөрөрҙәр, тип ҡурҡабыҙ», – тиҙәр.

Рәсүлүллаһ былай тип белдерә:

*«Юҡ, улар өсөн доға ҡылған һәм эшләгән эштәре өсөн уларҙы маҡтаған ваҡытта һеҙ ҙә (сауап ҡаҙанырһығыҙ)»* (Тирмизи, «Ҡиәмәт», 44/2487).

Жәбир раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Ансарҙар хөрмә уңышын йыйып алғас, ул емештәрҙе икегә айыра инеләр. Бер яҡҡа әҙ, икенсе яҡҡа күберәк хөрмә емеше ҡуялар ине. Һуңырак хөрмә емеше әҙ булған яҡҡа хөрмә ағасы ботаҡтары ҡуйып (ул яҡтың хөрмә емешен күп итеп күрһәтеп) мөһәжирҙәргә: «Ҡайһыһын һайлайһығыҙ, һайлап алығыҙ», – тип әйтәләр ине. Улар күп күренгән хөрмә емеше өйөмө ансарҙарға

булһын, тип, аҙыраҡ күренгән өйөмдө һайлап алалар ине. Шул рәүешле хөрмә емешенең ҙурыраҡ өйөмө уларға була ине. Ансарҙар ҙа әҙ емешле хөрмә өйөмөн үҙҙәренә ҡалдыралар ине. Ансарҙарҙың был йомартлығы Хәйбәрҙе яулап алғансыға ҡәҙәр дауам итте» (Хәйсәми, X, 40).

Ансарҙарҙың мөһәжирҙәргә күрһәткән фиҙакәр мөнәсәбәтен түбәндә бәйән ителәсәк ваҡиға ла тасуирлай.

Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи вә сәлләм Бәхрәйн ерҙәрен сәхәбәләргә бүлеп бирергә теләй, башта ансарҙарҙы саҡыра. Ансарҙар баш тартып: «Йә Рәсүлүллаһ! Мөһәжир ҡәрҙәштәребеҙгә бының ике тапҡыр күберәген өлөш итмәһәгеҙ, беҙгә бер нәмә лә бирмәгеҙ!» – тиҙәр.

Быға яуап итеп Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи вә сәлләм:

*«Әй ансарҙар! Башҡаларҙы нәфсегеҙҙән өҫтөн күреп, ер алырға теләмәйһегеҙ икән: әлеге хәлдә минең менән Кәүҫәр йылғаһы янында осрашҡансыға тиклем сабыр итегеҙ! Сөнки минән һуң һеҙгә башҡалар өҫтөнлөк бирәсәк бер заман киләсәк»,* – тип белдерә (Бохари, «Манакибүл-Әнсар», 8).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансарҙарҙың әлеге яҡшы сифатын маҡтап:

*«Күреүемсә, һеҙ изге һуғышҡа һәм мохтаждарға ярҙам итергә саҡырғанда һанығыҙ арта, күп кеше булып киләһегеҙ. Донъялыҡ әйбере бирергә саҡырған сакта иһә әҙәйәһегеҙ, булғаны менән ҡәнәғәт ҡалаһығыҙ»* (Ғәли әл-Муттаҡи, XIV, 66).

Ансари кирам, ҡалаларына күсенеп килгән Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә һәм мөһәжирҙәргә хөрмәт күрһәтеү сәбәпле, Аллаһ Тәғәлә ризалығына насип була.

Аяти кәримәлә былай тиелә:

وَالسَّابِقُونَ الْأَوَّلُونَ مِنَ الْمُهَاجِرِينَ وَالْأَنْصَارِ وَالَّذِينَ اتَّبَعُوهُمْ بِإِحْسَانٍ
رَّضِيَ اللّٰهُ عَنْهُمْ وَرَضُوا عَنْهُ وَأَعَدَّ لَهُمْ جَنَّاتٍ تَجْرِى تَحْتَهَا
الْأَنْهَارُ خَالِدِينَ فِيهَا أَبَدًا ذَلِكَ الْفَوْزُ الْعَظِيمُ

«(Ислам диненә ереү хаҡында) **Алға сыҡҡан беренсе мөһәжирҙәр һәм ансарҙар менән уларға яҡшылыҡ менән эйәргәндәр бар ки, Аллаһ уларҙан ҡәнәғәт. Улар ҙа Аллаһтан риза. Аллаһ улар өсөн эсендә мәңге ҡаласаҡтары, еренән йылғалар ағып тороусы йәннәттәр әҙерләгән. Был – бөйөк бер ҡотолоу юлы»** («әт-Тәүбә», 100).

Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙҙе һаҡлау өсөн ансарҙар йәндәрен фиҙа итеүҙән дә тартынмай. Бәҙер һуғышында бик күп батырлыҡ күрһәтәләр. Өхөд һуғышында дошман мосолмандарҙың артҡы яғынан һөжүм иткәс, әлеге хәтәр ваҡытта Рәсүлүллаһ янында бөтөрсөк кеүек әйләнеп, кәүҙәләре менән уны ҡаплаған һәм Пәйғәмбәребеҙҙе һаҡларға тырышыусыларҙың күбеһе ансарҙарҙан була. Уларҙы Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә дастандарҙағылай бер мөхәббәт һәм тоғролоҡ бәйләй.

Уларҙың Пәйғәмбәребеҙгә булған мөхәббәттәрен күрһәткән һәм Әнәс разыйаллаһу ғәнһү тарафынан һөйләнгән тетрәндергес ваҡиға ла иғтибарға лайыҡ:

«Жәрир ибн Ғабдуллаһ[23] менән юлға сыҡҡан инем. Жәрир (минән өлкән булыуына ҡарамаҫтан) миңә хеҙмәт итә ине. «Былай эшләмә!» – тигәс, миңә: «Мин ансарҙарҙың Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бик күп хеҙмәт иткәнен күргәндән һуң: «Әгәр ансарҙарҙан береһе менән иптәш булһам, уға хеҙмәт итәсәкмен», – тип үҙ-үҙемә һүҙ биргәйнем», – тине» (Бохари, «Йыһат», 71; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 181).

Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләәтү үә-сәләәм:

*«Әгәр һижрәт булмаһа, Мин ансарҙарҙан береһе булыр инем»,* – тип, ансарҙарҙың үҙе өсөн ҙур ҡимматкә эйә булыуын күрһәткән (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 2).

Ансар йәмәғәтенең фазиләттәре хаҡында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ мөбәрәк ауыҙы менән әйтеп ҡалдырған ҡайһы бер хәбәрҙәр:

*«Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә иман килтергән кеше ансарҙарға асыу, нәфрәт һаҡламаһын»* (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 25/3906).

*«Уларҙы бары мөьминдәр генә ярата һәм уларға бары монафиҡтар ғына нәфрәт тоя! Ансарҙарҙы һөйөүсене Аллаһ та һөйә, уларға асыу тотоусыға Аллаһ та асыулы»* (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 25/3900).

*«Әй кешеләр! Кешеләр арта, әммә ансарҙар кәмей. Хатта ризыҡтағы тоҙ кәҙәр кәмейәсәктәр...»* (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 11).

*«Һеҙгә ансарҙарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә булырға кәңәш итәм. Улар – минең йәмәғәтем, серҙәштәрем һәм ышаныслы кешеләрем. Үҙҙәренә ҡушылған эштәрҙе еренә еткереп башҡарҙылар. Башҡарған хеҙмәттәренең хаҡы әле лә тулыһы менән бирелмәгән (әхирәттә артығы менән биреләсәк). Шул сәбәпле уларҙың яҡшылыҡ эшләгәндәренә яҡшылыҡ менән яуап бирегеҙ, насарлыҡ эшләүселәрен дә ғәфү итегеҙ»* (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 11).

23. **Жәрир ибне Ғабдуллаһ** разыйаллаһу ғәнһү Йәмәндәге Бәсилә ҡәбиләһенең рәйесе була. Һижри 10 -сы йылдың рамаҙан айында, йәғни Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең үлеменә өс ай ҡала, 150 кешелек делегация менән Мәҙинәгә килеп, исламды ҡабул итә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе бик ярата. Аллаһ Рәсүле лә уны һөйә һәм уны күргән һайын йылмайып ҡаршылай.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансарҙарға, мөһәжирҙәргә, бөтә сәхәбәләренә ҡарата тәрән бер мөхәббәт хисе тоя. Барлыҡ сәхәбәләр Аллаһ Рәсүле үҙҙәрен һәр кемдән нығыраҡ ярата, тип өмөтләнәләр.

Кәғб ибне Үжрә раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла: «Бер көндө Сәғәҙәт мәсетендә Аллаһ Рәсүле янында ултыра инек. Ансарҙарҙан, мөһәжирҙәрҙән, Һашим улдарынан берәр төркөм бар ине. «Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ арабыҙҙан ҡайһы төркөмдө тағы ла нығыраҡ ярата икән?» – тип, бер-беребеҙ менән бәхәсләшә башланыҡ. Беҙ, ансар йәмәғәте: «Беҙ Аллаһ Рәсүленә иман килтерҙек. Уға тоғро булдыҡ, дошмандарына ҡаршы Уның янында һуғыштыҡ. Бының өсөн Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм беҙҙе тағы ла нығыраҡ ярата», – тинек.

Мөһәжир ҡәрҙәштәребеҙ ҙә: «Беҙ Аллаһ һәм Уның Рәсүле өсөн Мәккәнән Мәҙинә шәһәренә күсеп киттек. Аллаһ юлында балаларыбыҙҙы, ғаиләләребеҙҙе ташланыҡ, малдарыбыҙҙан баш тарттыҡ, һеҙ ҡатнашҡан һуғыштарға беҙ ҙә ҡатнаштыҡ. Бының өсөн Аллаһ Рәсүле беҙҙе тағы ла нығыраҡ ярата», – тинеләр.

Һашим улдарынан булған ҡәрҙәштәребеҙ: «Беҙ, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең яҡындары, һеҙ булған һуғыштарҙа беҙ ҙә булдыҡ. Шуға күрә Әфәндебеҙ беҙҙе тағы ла нығыраҡ ярата», – тинеләр.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яныбыҙға килде һәм:

*«Һеҙ нәмә тураһындалыр һөйләшә инегеҙ. Нәмә хаҡында һөйләштегеҙ?»* – тип ҡыҙыҡһынды.

Һәммәбеҙ һөйләгән һүҙҙәрен ҡабаттан һөйләне. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәр төркөмгә:

*«Дөрөҫ һөйләгәнһегеҙ! Кем быны киреһен иҫбатлай алыр?»* – тип ҡеүәтләне. Артабан:

*«Арағыҙҙа хөкөм сығарыуымды теләйһегеҙме?»* – тип һораны.

«Әлбиттә, йә Рәсүлүллаһ! Аталарыбыҙ, әсәләребеҙ һиңә фиҙа булһын!» – тинек. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һеҙ, әй ансар йәмәғәте! Мин – һеҙҙең ҡәрҙәшегеҙ»,* – тине.

Ансарҙар, шатланып: «Аллаһ бөйөк! Кәғбәнең Раббыһы менән ант итәбеҙ, уны (Рәсүлүллаһты) беҙ яуланыҡ», – тинеләр.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй мөһәжир йәмәғәте! Мин һеҙҙең аранан»,* – тип белдерҙе. Мөһәжирҙәр, шатланып: «Аллаһ бөйөк! Кәғбәнең Раббыһы менән ант итәбеҙ, уны (Рәсүлүллаһты) беҙ яуланыҡ», – тинеләр.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй Һашим улдары! Һеҙгә килгәндә иһә, һеҙ Минән һәм Миңә килдегеҙ»,* – тине.

Һашим улдары шатлыҡ эсендә: «Аллаһ бөйөк! Кәғбәнең Раббыһы менән ант итәбеҙ, уны (Рәсүлүллаһты) беҙ яуланыҡ», – тинеләр. Һәммәбеҙ риза булып, урыныбыҙҙан торҙоҡ. Һәр төркөм Аллаһ Рәсүленең үҙҙәренә ихтирам күрһәтеүенә шатланды» (Хәйсәми, X, 14).

Мәҙинәлә төҙөлгән һәм яҡынса 400 ғаиләнән торған кескенә ислам шәһәр-дәүләтенең сиктәре ун йыл эсендә Ғираҡ һәм Палестинаға ҡәҙәр етә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үлгән ваҡытта, Византия һәм Иран менән һуғыш бара. Ләкин сәхәбәләрҙең ун йыл әүәлге хәле, йәшәү рәүеше, байлығы, өйҙәренең ҙурлығы үҙгәрмәй. Улар барына шөкөр итеп йәшәйҙәр. Ғәҙәттән тыш исраф ҡылыу, артығын ашау, зиннәтлек һәм күрһәтмәлек сәхәбәләргә хас булмаған бер йәшәү рәүеше була. Улар «иртәгә был нәфестең торағы ҡәбер буласағы»н һәр саҡ аңлап ғүмер итәләр. Шунлыҡтан үҙ нәфселәрен донъя ниғмәттәренә ҡыҙығыуҙан һәм артығын ҡулланыуҙан һаҡлайҙар. Имандың тәмен тойоп, ислам менән илһамланып, сәхәбәләр әлеге ниғмәттәрҙе кешеләргә тура юлды күрһәтеү һәм уларҙы бәхетле итеү өсөн ҡуллаalар. Улар Аллаһ ризалығына ирешеү өсөн йәшәйҙәр. Асылда, исламдың иҙелгән, йәберләнгән, һөрөлгән кеше йәмғиәттәре араһында таң нуры кеүек тиҙ таралыуына төп сәбәп – сәхәбәләрҙең һәр барған ерҙәрендә исламса йәшәүҙәре һәм уны башҡаларға үрнәк-өлгө итеп ҡуя белеүҙәре. Аллаһ Рәсүленең алдынғы шәкерттәре булған әсхәбе кирам – Аллаһ ҡолдарына Хаҡ Тәғәләнең шәфҡәт һәм мәрхәмәтен раҫлап күрһәткән, ғәҙел, дөрөҫ ғәмәлле, киң күңелле, хөрмәткә лайыҡ, илселек нурына эйә ысын мөьминдәр була.

**Мәҙинә шәһәре һәм Мәҙинә низамнамәһе**

Мәҙинә-Мөнәүүәрә (Нурлы Мәҙинә) – Мәккә Мөкәррәмәнең төньяғында урынлашҡан, өс яғы тауҙар менән уратып алынған, көньяғы үҙәнлектән ғибәрәт бер ҡала. Эшкәртеү өсөн яраҡлы тупраҡҡа, пак һәм уңайлы һауаға, мул хөрмә баҡсаларға эйә йәм-йәшел, пак һәм матур йәшәү урыны.

Рәсүлүллаһ Әфәндебеҙҙең һижрәте ваҡытында Мәҙинәлә әүес үә хәзрәж исемле ике ғәрәп ҡәбиләһе менән бергә Ҡәйнүҡә, Нәдир һәм Ҡурайҙа улдары булараҡ билдәле өс йәһүҙи ҡәбиләһе ғүмер кисерә. Ғәрәп ҡәбиләләре был яҡтарға «Сәйлүл-Арим» тип аталған сәл фәләкәте арҡаһында Йәмәндән, йәһүдиҙәр иһә римлыларҙың оккупацияһынан һуң, уларҙың баҫымы, ҡыҫрыҡлауҙары сәбәпле, Иерусалимдан күсеп килә.

Ваҡыттар уҙыу менән, ғәрәптәр менән йәһүдиҙәрҙең араһы боҙола. Һөҙөмтәлә, ғәрәптәр йәһүдиҙәрҙе еңеп, Мәҙинәлә идараны үҙ ҡулдарына ала. Ләкин күпмелер ваҡыттан һуң йәһүдиҙәрҙең хәйлә-мәкерҙәре сәбәпле, әлеге ике ҡәрҙәш ҡәбилә бер-береһе менән дошманлашып, күп йылдар үҙ-ара һуғыш

алып бара. Был һуғыштарҙың һуңғыһы Буас һуғышы була. Бүленә-бүленә 120 йыл дауам иткән һәм һижрәткә тиклем 5 йыл әүәл генә тамамланған был һуғышта ике яҡ та бик ҙур юғалтыуҙарға дусар булып, бик көсһөҙләнә. Шул сәбәпле һижрәт осоронда йәһүдиҙәр Мәҙинәнең хакимдары хәлендә була, айырыуса иҡтисади күҙлектән ҡарағанда, улар өҫтөн тора.

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Мәҙинәгә тантаналы күсенеүе һәм Аллаһтың рәхмәте бәрәбәренә әлеге ике ҡәрҙәш ҡәбилә араһындағы нәфрәт һәм дошманлыҡ бөтөрөлә.

Йәнәбел-Хаҡ былай ти:

وَاعْتَصِمُوا بِحَبْلِ اللهِ جَمِيعًا وَلَا تَفَرَّقُوا وَاذْكُرُوا نِعْمَتَ اللهِ عَلَيْكُمْ إِذْ كُنْتُمْ أَعْدَاءً فَأَلَّفَ بَيْنَ قُلُوبِكُمْ فَأَصْبَحْتُمْ بِنِعْمَتِهِ إِخْوَانًا وَكُنْتُمْ عَلَى شَفَا حُفْرَةٍ مِّنَ النَّارِ فَأَنْقَذَكُمْ مِّنْهَا كَذَلِكَ يُبَيِّنُ اللهُ لَكُمْ آيَاتِهِ لَعَلَّكُمْ تَهْتَدُونَ

**«Барығыҙ бергә Аллаһ бауына** (китабына, диненә) **ныҡ итеп тотоноғоҙ. Бүленешеп айырылмағыҙ. Аллаһтың һеҙгә биргән ниғмәттәре тураһында уйлап ҡарағыҙ. Бына һеҙ бер-берегеҙгә дошмандар инегеҙ һәм Ул йөрәктәрегеҙҙе берләштерҙе. Бына Уның ниғмәте арҡаһында ҡәрҙәштәргә әүерелдегеҙ. Һеҙ ут соҡоронон нәк ситенә баҫып торған саҡта, Ул һеҙҙе йәнә ҡотҡарҙы. Ана шулай Аллаһ, тура юлға керерһегеҙ, тип, һеҙгә аяттарын шул рәүешле асыҡ, аңлайышлы итеп белдерә»** («Әлү Ғимран», 103).

Һижрәттән һуң мәккәле мөшриктәр, мосолмандарҙың Мәҙинәлә урынлашып ҡалып, көсәйеп китеүҙәренә ҡомасаулар өсөн, мәҙинәле мөшриктәргә һәм йәһүдиҙәргә янау һәм ҡотортоулы хаттар ебәрә. Мәҫәлән, бер хатта Ғабдуллаһ ибне Үбәйгә, уның менән бер тарафта булған әүес һәм хәзрәж ҡәбиләһе мөшриктәренә былай тип янайҙар: «Һеҙ беҙҙең бер кешебеҙҙе үҙ янығыҙҙа тотаһығыҙ. Уны йә үлтерегеҙ, йә йортоғоҙҙан ҡыуып ебәрегеҙ! Югиһә, бөтә ғәрәп йәмәғәттәре менән бергә һеҙгә һөжүм итербеҙ, ҡаршы һуғышҡандарығыҙҙы үлтерербеҙ, ҡатындарығыҙҙы үҙебеҙгә алып китербеҙ!»

Шунан һуң Ғабдуллаһ ибн Үбәй һәм уның яғындағы мәҙинәле мөшриктәр, Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм менән көрәшеү-һуғышыу өсөн, бер урынға йыйыла. Был хаҡта хәбәр ирешкән Аллаһ Рәсүле улар янына үҙе бара һәм:

*«Ҡөрәйешлеләрҙең янауы һеҙҙе бик тәьҫирләндергән, күрәһең. Улар һеҙгә һаласаҡ зарар беҙҙең менән һуғышыуығыҙ сәбәпле үҙегеҙгә килтерәсәк зыян-зәүрәттән күберәк түгел! Тимәк, һеҙ үҙ улдарығыҙ һәм туғандарығыҙ менән һуғышырға, уларҙы үлтерергә теләйһегеҙ булып сыға?!»* – тип мөрәжәғәт итә.

Шунан һуң мөшриктәр таралыша (Әбү Дауыт, «Хараж», 22-23/3004; Ғабдүрраззаҡ, V, 358-359).

Мәккәле мөшриктәрҙең был янау-ҡотортоуҙары нәтижә бирмәй. Икенсе яҡтан ҡарағанда, теләктәренә ирешә алмаған ҡөрәйешлеләрҙең Мәҙинәгә дөйөм бер һөжүм яһау һәм унда мосолман, мөшрик һәм йәһүдиҙе айырып тормай, бөтә халыҡты үлтереп сығыу мөмкинлеге юҡ һаналмай. Был уртаҡ ҡурҡыныс мосолман булмаған мәҙинәлеләрҙең дә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә яҡынайыуына һәм Уның юлбашсылығында тупланыуҙарына килтерә.

Бынан тыш, инде бик күптән әүеслеләр, хәзрәжлеләр һәм йәһүдиҙәр һәр ҡайһы-һы үҙ йәмәғәттәренең Мәҙинәлә берҙән-бер ҡеүәтле тараф итеп күреү теләге менән яна. Мәҫәлән, хәзрәжлеләр юлбашсылары Ғабдуллаһ ибне Үбәйҙе Мәҙинә хөкөмдары итеп ҡуйырға әҙерләнә. Хәлбуки, әүеслеләр бер хәзрәж кешеһен, ә хәзрәжлеләр бер әүеслене хөкөмдар сифатында ҡабул итеүҙе күҙ алдына килтермәй. Шуға күрә Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бөтә мәҙинәлеләр өсөн берләштереүсе бер шәхескә әйләнә.

Шундай шарттарҙа Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинә идараһын үҙ ҡулына ала. Ансарҙар һәм мөһәжирҙәрҙең «Муахат» тип исемләнгән ҡәрҙәшләшеү акты нигеҙендә мосолмандар араһындағы йәмғиәт тәртибен ҡорған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оҙаҡҡа һуҙмайынса, Мәҙинәлә йәшәүсе йәһүдиҙәрҙе лә яҙыулы бер шәкелдә ватандаш итеп таный һәм Мәҙинә шәһәр-дәүләтенең бер төр конституцияһы буласаҡ ҡай бер принцип-нигеҙләмәләрҙе тәҡдим итә. «Мәҙинә низамнамәһе» тип аталған һәм ислам дәүләте ҡоролоуҙың рәсми рәүештә теркәп ҡуйылыуын белдергән был документтың ҡайһы бер маддәләре:

«Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.

1. Ҡөрәйешле һәм йәсрибле (мәҙинәле) мөьминдәр менән уларға эйәреүселәр һәм ҡушылыусылар, улар менән бергә йыһат ҡылыусылар, башҡа бәндәләрҙән ҡала, бер өммәт булып тора.

2. Эске тартыштар һәм бер-берендең өлөшөнә кереү булмаясаҡ. Тәҡүә эйәһе мөьминдәр үҙ араларында аҙғынлыҡ ҡылған, золом һәм хаҡһыҙлыҡ ҡылырға теләгән, гонаһ эшләгән, дошманлыҡ һаҡлаған һәм мөьминдәр араһында ҡаршылыҡтар сығарған заттарға ҡаршы бергәләп яуға ҡуҙғаласаҡтар һәм, был зат үҙҙәренән берәүҙең балаһы булһа ла, барыһы ла уға ҡаршы ҡул күтәрәсәк.

3. Енәйәттәр эшләнмәйәсәк, эшләнгән осраҡта мөһәжирҙәр һәм Мәҙинәләге һәр ғаилә ҡан йоломдарын араларында уртаҡ ҡабул ителгән ғөрөф-ғәҙәттәргә күрә түләйәсәк. Һәр төркөм әсирҙәр өсөн йолом аҡсаһын да мөэьминдәр араһында билдәле ғәҙел ҡағиҙәләр ҡыҫаһында уртаҡ рәүештә түләйәсәктәр.

4. Мөьминдәр бурыслыларҙы һәм ғаилә ағзалары күп булған заттарҙы иғтибарһыҙ ҡалдырмай, уларҙың йолом аҡсаларын йәки ҡан йоломдарын, улар араһында билдәле ғәҙел ҡағиҙәләр ҡыҫаһында түләйәсәктәр.

5. Мәҙинә эсендә һәм тышында именлек һаҡланасаҡ. Мәҙинәнән сығып китеүсе лә, Мәҙинәлә йәшәүсе лә именлектә буласаҡ. Бер золом йәки ғәйепле эш ҡылған зат бынан сығарма булып тора.

6. Йәһүдиҙәр дин иреге аласаҡ. Йәһүдиҙәр үҙ диндәрендә, мосолмандар иһә үҙ диндәрендә буласаҡ. Беҙгә буйһоноусы йәһүдиҙәр иһә бер ниндәй золомға тарымайса, уларға ҡаршы бер ниндәй берлек ойошторолмайынса ярҙам аласаҡтар. Ниндәй ҙә булһа һуғыш сыҡһа, тарафтар бер-береһенә булышасаҡ. Мөьминдәр менән бергә һуғышта ҡатнашҡан ваҡыт дауамында, йәһүдиҙәр һуғыш сығымдарын ҡаплауға ла тартыласаҡ.

7. Ике яҡ та мөшриктәрҙе химаяһына алмаясаҡ. Ҡөрәйешлеләргә лә, уларға ярҙам итеүселәргә лә бер нисек тә химая күрһәтелмәйәсәк.

8. Мәҙинә эсендә һуғыштар тыйыла. Йәсриб үҙәнлегенең эске яғы – әлеге таныҡлыҡ эйәләре өсөн харам (йәғни ҡағылғыһыҙ) бер территория. Тышҡы яҡтан бер һөжүм булһа, яҡтар был ерҙе һаҡлаясаҡ. Бер тараф имзалаған солохто икенсе тараф та ҡабул итәсәк (һуғыш осрағында) йәһүдиҙәрҙең үҙ сығымдары үҙҙәренә, мосолмандарҙыҡы ла уларҙың үҙҙәренә йөкләнәсәк. Шул рәүешле, улар был таныҡлыҡ эйәләренә һуғыш иғлан итеүселәргә ҡаршы үҙ араларында ярҙамлашасаҡтар һәм бер-береһенә ҡаршы мөғәмәләлә яманлыҡ урынына нәсихәт, ярҙамлашыу һәм игелек нигеҙ итеп алынасаҡ. Һис кем үҙ союзнигына яманлыҡ ҡылмаясаҡ, ҡыйырһытылғандарға һис шикһеҙ ярҙам күрһәтеләсәк.

9. Аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡһа, мәсьәлә Аллаһ һәм Уның Рәсүленә еткереләсәк, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сығарған хөкөмгә буйһоноласаҡ.

10. Аллаһтың анты һәм тәминаты бер (бер үк дәрәжәлә); уларҙың иң түбән дәрәжәлә ҡарала торғандарын да үҙ эсенә ала. Сөнки мөьминдәр, башҡа кешеләрҙән айырмалы буларaҡ, бер-береһенең мәүләһе, йәғни союзнигы һәм дуҫы булып тора.

11. Уларҙан (йәһүдиҙәрҙән) һис кем хәҙрәти Мөхәммәт салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең рөхсәтенән башҡа ғәскәри хеҙмәткә ҡушыла алмаясаҡ.

Шикһеҙ, Аллаһ Тәғәлә был сәхифәләгеләрҙе үтәмәүҙән бик һаҡланған, тоғролоҡто, дөрөҫлөктө һәм яҡшылыҡты шиғар итеп алған заттарҙан разый булыр. Әлеге яҙыу бер залимды һәм ғәйеплене язаландырыу эшенә һис ҡомасауламаясаҡ.

Аллаһ игелек ҡылыусы һәм яманлыҡтарҙан тыйылыусы заттарҙы яҡлай. Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм – Аллаһтың Рәсүле» (Ибне Һишам, II, 119-123; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 263-264; Хамидуллаһ, *«әл-Вәсаик»,* 57-64 б.).

Был маддәләрҙең йәмғиәттә ислам хөкөм-ҡағиҙәләрен ҡулланыу өсөн талап ителгән нигеҙләмәләр булыуы асыҡ аңлашыла. Бер ватандашлыҡ килешеүе булған Мәҙинә низамнамәһе – исламдың тарафһыҙ бер дин булыуы, ҡанун-хөкөмдәр барлыҡҡа килтермәйенсә, бары ғибәҙәттәрҙе генә тәртипкә һалыуы тураһындағы ялған фекерҙәргә иң ҡәтғи яуап.

Мәҙинә низамнамәһе сәйәси, иҡтисади, ижтимағи һәм дини йөкмәткеһе менән күп йүнәлештәрҙе солғаған бер шартнамә дәрәжәһендә ҡарала ала. Ошбу таныҡнамә мосолмандарҙың берҙәмлеген тәьмин итә торған берҙән-бер матдәһенең ислам икәнлеген, уларҙың бер-береһенә булышырға, үҙ араларында ғәҙеллек һәм тигеҙлекте һаҡларға, ниндәйҙер бер ҡаршылыҡ тыуған осраҡта Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә мөрәжәғәт итергә тейешлектәрен күрһәтә.

Низамнамә ғәрәптәр араһында йәшәп килгән ҡәбилә эсе мөнәсәбәттәрҙе ғәҙеллек һаҡлау ҡағиҙәһе менән сисеп, тәртипкә һала, хаҡһыҙлыҡ ҡылған берәүҙең, туған-ҡәрҙәш кеше булыуына ҡарамаҫтан, язаланасағын белдерә.

Йәһүдиҙәргә мал-милек хоҡуғы һәм дин ирекe биреү яғынан ошбу килешеү – Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең уларға ҡарата мөғәмәләһендәге иҫ киткес ғәҙеллектең бер дәлиле. Әгәр йәһүдиҙәр үҙ ҡулдары менән боҙмаһа, мосолмандар менән улар араһындағы әлеге ғәҙел килешеү дауам иткән булыр ине.

### Мәҙинәне харам ҡала тип иғлан итеү

Әлеге ҡарарҙарынан һуң, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм түбәндәге һүҙҙәр менән Мәҙинәнең харамлыҡ сиктәрен билдәләй:

*«Ибраһим ғәләйһиссәләм Мәккәне харам тип иғлан иткән ине, мин иһә Мәҙинәнең ике тауы араһын харам урын тип иғлан итәм»* (Әхмәт, IV, 141).

Был бойороҡтан һуң билдәләнгән ерҙәргә таштар ултыртылып, Мәҙинә харамының сиктәре тәғәйенләнә. Шул рәүешле сиктәре аныҡланған Мәҙинәне «Рәсүл харамы» тип атайҙар. Мәҙинәнең Айр менән Сәүр[24] тауҙары араһындағы территорияның һәр мөйөшө бер урманлыҡҡа әйләндерелә (Бохари, «Фәзаилүл-Мәҙинә», 1; Мөслим, «Хаж», 471-472).

Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәне тыйылған ҡала тип иғлан иткәс, былай тип белдерә:

24. Зөлхөләйфә тирәһендәге Айр (яки Гаир) тауы менән Өхөд тауының төньяғында урынлашҡан кескенә Сәүр ҡалҡыулығы араһындағы бер өлкә. Бындағы Сәүр ҡалҡыулығын Мәккәләге Сәүр тауы менән бутамаҫҡа кәрәк.

*«Уның ағасы киселмәç, унда гонаһ эшләнә алмаç. Кем унда Китапҡа һәм сөннәткә ҡаршы ғәмәл ҡыла, Аллаһтың, фәрештәләрҙең һәм бөтә кешеләрҙең ләғнәте шуға булыр!»* (Бохари, «Фәзаилүл-Мәҙинә», 1).

Артабан Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулдарын күтәреп, был ҡала өсөн доға ҡыла. Әлеге доға бәрәкәте менән Мәҙинә шул осорҙан был замандарға тиклем бөтә мөьминдәрҙең тыныслыҡ, шатлыҡ, рәхмәт урыны һәм ислам донъяһына һулыш өргән бәхет шәһәре булып ҡала.

Әсхәбе кирам Мәҙинәнең харамлығына (тыйыулы урын) бик ҙур иғтибар күрһәтә. Мәçәлән, Әбү Һурайра разыйаллаһу ғәнһү был мәсьәләләге мөнәсәбәтте түбәндәгесә иçкә ала: «Әгәр Мәҙинәлә утлап йөрөгән бер кейек хайуан күрһәм, уны һис борсомам! Сөнки Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм: *«Мәҙинәнең ике ҡара ташлығы араһы – харам»,* – тип бойорҙо» (Мөслим, «Хаж», 471).

Әсхәбе кирам хатта балаларының да харам ҡағиҙәләренә ҡаршы килгән эш-ғәмәлдәрен иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Ғабдуллаһ ибн Губадә разыйаллаһу ғәнһүмә һөйләгәндәрҙән: «Мин Әбү Ихаб ҡойоһо тирәһендә ҡош аулай инем. Атайым Губадә мине күреп, ҡулымдағы ҡошто ебәрттерҙе һәм: «Ибраһим ғәләйһиссәләм Мәккәне харам ҡылған кеүек, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәнең ике ҡара ташлығы араһын харам ҡылды», – тине» (Ибне Әсир, *«Үсдүл-Ғабә»,* III, 159).

### Мәҙинә баҙары һәм сауҙа эшенең тәртипкә һалыныуы

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә килгәс, мосолмандарға йәһүдиҙәрҙән айырым бер баҙар ере күрһәтеп, шунда сауҙа итергә ҡуша, сөнки сауҙа өлкәһендә ирек яулау өсөн баҙарҙарҙың әһәмиәте һәр кемгә билдәле хәҡиҡәт булып тора.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм баҙар тормошо менән яҡындан ҡыҙыҡһына, сауҙәгәрҙәрҙе һәм һатыулыҡ малдарҙы даими тикшерә. Бер көн хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм баҙарҙа бер һатыусыны осрата. Алдындағы бойҙай өйөмөнөң эсенә ҡулын тыҡҡас, еүеш икәнлеген тойоп:

*«Нәмә был?»* – тип һорай.

Теге кеше: «Ямғыр еүешләтте, йә Аллаһтың Рәсүле!» – ти.

Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үә-сәләәм:

*«Был еүеш өлөшөн өçтә ҡалдырып, һәр кем күрерлек итеп ҡуя алмай инеңме? Алдаусылар минең менән түгел»,* – тип белдерә (Мөслим, «Иман», 164).

Ҡайс ибне Гарәзә разыйаллаһу ғәнһү тапшыра:

«Беҙ Рәсүлүллаһ заманында «симсарҙар» (аралашсылар) тип атала инек. Бер ваҡыт Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙҙе осраттыҡ һәм Ул беҙгә күпкә күркәмерәк «түжжар» (сауҙагәр) исемен ҡушып, былай тип өндәште:

*«Әй сауҙагәрҙәр йәмәғәте! Һис шикһеҙ, алыш-бирештә ялған һәм вәғәҙә ҡушылып китер. Шуға күрә һеҙ ҙә уға саҙаҡа ҡушып ебәрегеҙ!»* (Әхмәт, IV, 6; Әбү Дауыт, «Бүюг», 1/3326).

Кеше ни ҡәҙәр иғтибар бирһә лә, онотоп йәиһә ғафләт тәьҫирендә уның сауҙаһында хаҡһыҙлыҡтар килеп сығырға мөмкин. Шул сәбәпле һәм ихтималлыҡҡа ҡаршы сара күреп, керемдән мул саҙаҡа биреү һәм уны Аллаһ юлында тотоу талап ителә. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм юғарылағы хәҙис шәрифтә ана шул мәсьәләгә иғтибар йүнәлтә.

Рифаға ибне Рәғфи раҙыйаллаһу ғәнһү тапшырған:

«Беҙ Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән мусалләгә[25] бара инек. Әфәндебеҙ бер төркөм кешеләрҙең сауҙа итеүен күреп ҡалды. Уларга:

*«Әй һатыусылар йәмәғәте!»* – тип өндәште. Улары иһә Аллаһ Рәсүленең мөрәжәғәтенә ҡолаҡ һалып, ҡараштарын Уға йүнәлттеләр. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Шикһеҙ, һатыусылар ҡиәмәт көнөндә гонаһлы, хаҡиҡәттән тайпылған кешеләр рәүешендә терелтелер. Ләкин Аллаһтан ҡурҡыусы, игелек ҡылыусы һәм дөрөҫлөк әһеле бынан сығарма булып тора»,* – тип белдерҙе» (Тирмизи, «Бүюг», 4/1210).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сауҙа эшендәге әхлаҡ һәм фазиләт тураһында Бәни Исраил вәкилдәренән ике кеше араһында килеп сыҡҡан түбәндәге ваҡиғаны хәтергә ала:

*«Һеҙҙән әүәл йәшәгәндәрҙән бер бәндә берәүҙән керем килтерә торған милек һатып алған. Был мөлкәтте һатып алыусы унда эсенә алтын һалынған бер сүлмәк таба. Һатҡан кеше янына барып: «Алтынды ал! Мин һинән ер һатып алдым, алтын һатып алманым!» – тигән. Һатыусы иһә: «Мин һиңә ул ерҙе эсендә булған бар нимәһе менән бергә һаттым!» – тигән. (Килешә алмағас), бер кешене хөкөм сығарыусы итеп билдәләйҙәр. Ул әҙәм (быларҙы тыңлағас): «Һеҙҙең балаларығыҙ бармы?» – тип һораған. Уларҙың береһе – улы, икенсеһе иһә ҡыҙы барлығын хәбәр иткән. Хөкөм сығарыусы: «Егет менән ҡыҙҙы өйләндерегеҙ! Был аҡсаны уларҙың икеһе өсөн тотоғоҙ һәм саҙаҡа бирегеҙ!» – тигән»* (Бохари, «Әнбиә», 54; Мөслим, «Гакдия», 21; Ибне Мәжә, «Луҡата», 4).

25. **Мусаллә** – бер ауыл-ҡала халҡының йома намаҙҙарын, байрам һәм йыназа намаҙҙарын бергә уҡый торған киң майҙан, ялан атамаһы. Элекке замандарҙа, күпселек ҡалалар ситендә йыйылып намаҙ уҡыр өсөн мусалләләр әҙерләнә. Һәм йомалар, байрам намаҙҙары хәҙерге кеүек төрлө мәсеттәрҙә түгел, ә намаҙгәһ тип аталған ана шул мусалләләрҙә уҡыла. Шул рәүешле бөтә ҡала халҡының һәр аҙна бер урынға йыйылыуы тәьмин ителә.

Йәшлегендә сауҙа каруандары менән алыҫ сәфәрҙәргә барған, оҫта сауҙагәр булған Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә килгәс, был өлкәлә бер нисә ҡағиҙә билдәләп ҡуя. Сауҙа эшенең әһәмиәте тураһында Ул былай ти:

*«Эшләп алған керемдең ундан туғыҙы – сауҙала» (*Сөюти, I, 113).

*«Бәндә ризыкланған нәмәнең иң хәләле һәм күркәме – шәхсән үҙе эшләп алған аҙығы»* (Ибне Мәжә, «Тижарат», 1).

Ризыҡтың матди тәьҫире менән бергә рухи тәьҫире лә бар. Ашамлыҡтың хәләл, харам йәки шикле юлдарҙан килеүе рухыбыҙға ла йоғонто яһай. Йәғни ашаған нәмәбеҙ рухи халәттә, хис-тойғоларыбыҙҙа ла сағылыш таба. Бөтә ғибәҙәттәрҙә, айырым алғанда, хаж ғибәҙәтендә хәләл аҡсаның әһәмиәте хәҙис-шәрифтә ошбу рәүештә аңлатыла:

*«Кем был Йортто харам керемдән алынған аҡса менән зыярат ҡылһа, Аллаһҡа итәғәттән сыҡҡан булыр. Ундай бәндә хаж ҡылырға ниәт ҡылыр ҙа, ихрамға төрөнгәс, өҙәңгеһенә баҫып, дөйәһен ҡыуалай башлағандан һуң: «Ләббәйкә, Аллаһүммә, ләббәйкә», – тиһә, күктән бер һөрәнсе былай тип өндәшер: «Һиңә ләббәйкә лә, дөрөҫлөк тә юҡ. Сөнки һинең керемең харам, аҙығың харам, атың-дөйәң харам. Һис ниндәй сауап алмайынса, гонаһ эйәһе булып ҡайт! Үҙеңә оҡшамаясаҡ нәмә менән осрашасағың арҡаһында ҡайғыр!»*

*Әгәр кеше хәләл аҡса менән хаж сәфәренә сыға икән, ат-дөйәһенең өҙәңгеһенә баҫып, хайуанын ҡуҙғатҡанда: «Ләббәйкә, Аллаһүммә, ләббәйкә», – тиһә, күктән бер һөрәнсе тауыш былай тип дәшә: «Ләббәйкә һәм дөрөҫлөк. Һинең өндәшеүеңде ҡабул иттем, сөнки һинең атың-дөйәң хәләл, кейемең хәләл, аҙығың хәләл. Әйҙә, ҙур сауаптар алып, һис гонаһһыҙ булып ҡайт! Һине риза ҡылдырасаҡ һәм һөйөндөрәсәк нәмә менән осрашасағыңа шатлан!»* (Хәйсәми, III, 209-210).

Ризыҡта һәм керемдә хәләл-харам мәсьәләһе бик мөһим һәм ул тарафта шаҡтай зыян һалына торған мәсьәлә булғанға күрә, «Баҡара» сүрәһендәге илаһи хөкөмдәр менән, ҙур ширк гонаһынан һуң иң беренсе булып, бына ошо һорауға яуап бирелә. Хатта әллә ни яңы хөкөмдәрҙе солғамаған «Әнғәм», «Әғрәф», «Йунус» һәм «Нәхл» кеүек Мәккә осоро сүрәләрендә лә, ғаҡаид тураһында аңлатмаларҙан һуң шунда уҡ ризыҡ һәм керемдәге хәләл һәм харам мәсьәләһе асыҡлана.[26]

Аллаһ Рәсүле сауҙала дөрөҫ һәм ҡыйыу эш йөрөтөү кәрәклеген белдереп, былай ти:

*«Малын һатырға ынтылған ҡыйыу сауҙагәр мәрзуҡ булыр (ризыҡландырылыр), спекулянт (халыҡҡа кәрәк нәмәне йыйып, ҡиммәт хаҡтан һатыусы) иһә мәлғүн» (*Ибне Мәжә, «Тижарат», 6).

26. «Әл-Әнғәм», 136-152; «әл-Әғрәф», 32-33, 169; «Йунус», 59-60; «ән-Нәхл», 95, 115-116. Ҡарағыҙ: Драз, *«ән-Нәбәүл-Ғазим»,* 193 б.

*«Ҡурҡаҡ сауҙагәр – мәхрүм, ҡыйыу сауҙагәр – мәрзуҡтыр» (*Дәйләми, II, 79).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ тарафынан сауҙа өлкәһендә билдәләнгән ҡағиҙәләрҙең ҡайһы берҙәре:

*«Алыш-биреш итеүсе ике кеше бер-береһенән айырылып китмәйенсә йәки хушлашып киткәнсе (һүҙенән баш тартыуҙа) һайлау мөмкинлегенә эйә. Әгәр дөрөҫ алыш-биреш алып барһалар, һәр нәмәне нисек бар, шулай итеп һатыу итһәләр, алыш-бирештәре бәрәкәтле булыр. Әгәр ҡайһы бер хәҡиҡәттәрҙе йәшереп, ялған һөйләһәләр, алыш-бирештәренең бәрәкәте ҡалмаҫ» (*Бохари, «Бүюг», 19; Мөслим, «Бүюг», 8).

*«Вәғәҙә мал менән ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыр, ләкин бәрәкәтте бөтөрөр» (*Бохари, «Бүюг», 26; Мөслим, «Мүсаҡәт», 13).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сауҙа малдарын баҙарға килтерелгәнсе, юлда уҡ ҡаршы алыныуын; һатып алынған нәмәне тулыһынса тапшырмай тороп һатыуҙы йәки янында булмаған бер малды баҙарҙан һатып алып, һатып алыусыға һатып ебәреүҙе; бер-береһенең сауҙаһына ҡыҫылып һатыуҙы; һатып алыусының асыуын килтереүҙе тыя.[27]

Сауҙала еңеллек биреүсе бер мөғәмәлә һаҡлау кәрәклеген белдереп, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип бойора:

*«Һатҡанда, алғанда, бурысын түләгәндә йомарт һәм юл биреүсән, мәрхәмәтле эш йөрөткән бәндәгә Аллаһ Үҙ рәхмәтен мул ҡылһын!»* (Бохари, «Бүюг», 16).

*«Аллаһ һеҙҙән әүәл йәшәгән берәүгә рәхмәтле мөнәсәбәттә булды, сөнки был әҙәм һатҡанда, алғанда, бурысын һорағанда, (тупаҫлыҡ һәм ҡырыҫлыҡ түгел, аңлаусанлыҡ һәм) еңеллек күрһәтә ине»* (Тирмизи, «Бүюг», 75/1320).

Малға хиреслек менән донъя мәнфәғәтенә алданып, Рәсүлуллаһ Әфәндебеҙ билдәләгән был ҡағиҙәләргә буйһонмайса, тағы ла күберәк килем аласаҡтарын уйлаусылар әхирәттә фәҡирлеккә эләгеү ҡурҡынысына тарый. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең түбәндәге һөйөнөслө хәбәре Аллаһтың ризалығын һәм әхирәт аҙығын алырға тырышҡан ғәҙел сауҙагәрҙәргә юллана:

*«Ышаныслы, тура һүҙле һәм мосолман бер сауҙагәр ҡиәмәт көнө шәһиттәр менән бергәлер»* (Ибне Мәжә, «Тижарат», 1).

### Пәйғәмбәр мәсетен һәм бәхет Йортон төҙөү

Әүәлге мәлдәрҙә Мәҙинәлә мәсет булмай. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм намаҙ ваҡыты кергәндә ҡайҙа булһа, ғибәҙәтен шунда үтәй. Оҙаҡ та үтмәй, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡубәнән һуң

27. Ҡарағыҙ: Бохари, «Бүйюэ», 70-72; Мөслим, «Бүйюэ», 29.

икенсе мәсетте лә төҙөттөрә. Был мәсет – хәҙерге Пәйғәмбәр мәсете (Мәсжиди Нәби).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәҙинәгә килгәндән һуң, Нәжжар улдары йорттары ҡаршыһына яҡынайғас, Унның дөйәһе Касва мәсет һалынасаҡ ергә сүгә. Әлеге кишәрлек ул осорҙа Нәжжар улдарынан Сәһл һәм Сүһәйл исемле ике йәтим йәшүсмерҙең хөрмә киптереү урыны була. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Касва өҫтөнән төшә лә:

*«Иншаллаһ, туҡталыш урыны ошондалыр!»* – тип белдерә. Унан:

*«Был ер кемдеке?»* – тип һорағас, Муғаз ибне Афра разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлуллаһ! Ғамр улдары Сәһл һәм Сүһәйлдеке!» – ти. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларҙы саҡырып, был ерҙе һатып алырға теләй:

*«Был кишәрлегегеҙҙең хаҡын әйтегеҙ әле миңә»,* – ти Пәйғәмбәр.

Егеттәр: «Юҡ, йә Рәсүлуллаһ! Беҙ уны Һиңә бүләк итәбеҙ! Валлаһи, беҙ унның хаҡын Аллаһтан башҡа һис кемдән һорамайбыҙ!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уларҙың ерҙе бүләк итеүҙәре менән килешмәй, хаҡын түләп, һатып ала (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 45, «Саләт», 48; Мөслим, «Мәсәжид», 9).

Был кишәрлектә мөшриктәрҙең ҡәберҙәре, соҡор-саҡырҙар, түмгәктәр һәм хөрмә ағастары була. Аллаһ Рәсүле бойороғо менән, мөшриктәрҙең ҡәберҙәре асылып, һөйәктәр башҡа ергә күсерелә, соҡор-саҡырлы урындар тигеҙләнә, ә хөрмәләр киҫелә.[28] Һуңыраҡ Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм кирбес киҫеп әҙерләргә ҡуша.[29]

Мәсет төҙөлөшөндә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә сәхәбәләре менән бергә кирбес ташый, шул саҡта:

هٰذَا الْحِمَالُ لَا حِمَالَ خَيْبَرْ

هٰذَا أَبَرُّ رَبَّنَا وَاطْهَرْ

*«Был йөк Хәйбәр йөгө түгел. Был – Раббыбыҙ хаҡына үтәлә торған иң яҡшы һәм иң пак эш»,* – тип әйтә (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 45).

Әлеге һүҙҙәре менән Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ үҙҙәре ташыған йөктөң донъяуи мәнфәғәттәр өсөн түгеллеген, кешеләрҙең Хәйбәрҙән сауҙа өсөн алып килгән хөрмә һәм кипкән йөҙөм кеүек матди малдарҙан хәйерлерәк һәм яҡшыраҡ икәнлеген белдерә.

28. Мөслим, «Мәсәжид», 9.
29. Ибне Сәғд, I, 239

Тупраҡ ташыусы бер кеше Ғаләмдәрҙең Әфәндеһен осратҡас, Уға: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Рөхсәт ит, кирбесегеҙҙе үҙем ташыйым!» – ти. Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм иһә яуабында:

*«Һин бар ҙа башҡаһын тот! Сөнки һин Аллаһҡа минән күберәк мохтаж түгел!»* – тип аңлата» (Сәмхуди, I, 333).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ рухи бурысын үтәү һәм мосолмандарҙы эшкә өндәү өсөн үҙе лә хеҙмәт ҡуя.[30] Шунан һуң сәхәбәләрҙең береһе былдай шиғыр юлдарын телгә ала:

لَئِنْ قَعَدْنَا وَالنَّبِىُّ يَعْمَلُ
لَذَاكَ مِنَّا الْعَمَلُ الْمُضَلَّلُ

*«Пәйғәмбәр эшләгәндә беҙ ултырһаҡ, тәхҡиҡ, әлеге ғәмәл беҙҙең өсөн аҙашыу буласаҡ!»* (Ибне Һишам, II, 114).

Мәсет төҙөлөшө ваҡытында Хадрамәүттән бер кеше килә, ул балсыҡты яҡшы иҙә икән. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ул бәндәгә:

*«Һөнәрен күркәм һәм яҡшы итеп башҡарған кешегә Аллаһтың рәхмәте булһын! Һин был эшеңде дауам ит, күрәм ки, һин хеҙмәтеңде яҡшы үтәйһең»,* – тип мөрәжәғәт итә (Сәмһуди, I, 333; Диярбәкри, I, 344).

Йәнәбел-Хаҡ та мосолмандарҙың һәр эше күркәм булыуын маҡсат итеп ҡуя һәм аяти кәримәлә: «أَحْسِنُوا» **Ҡылған эшегеҙҙе күркәм башҡарығыҙ, яҡшы итеп эшләгеҙ!»** – тип бойора. Шунда уҡ дауам итеп: **«Аллаһ үҙ эшен күркәм башҡарыусыларҙы һөйә», –** тип өҫтәй («әл-Бәҡара», 195).

Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәсет төҙөлөшөндә сәхәбәләре менән бергә кирбес ташығанда, бер мосолмандың түбәндәге йыр юлдарын көйләй:

اَللّٰهُمَّ إِنَّ الْاَجْرَ الْاٰخِرَهْ
فَارْحَمِ الْاَنْصَارَ وَالْمُهَاجِرَهْ

30. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ әлеге ғәмәле менән идара өлкәһендәге заттарҙың яуаплылығын бик күркәм асыҡлаған: һәр эштә беренсе булыу, башҡарылырға тейешле ни ҡәҙәр ваҡ-төйәк булһа ла, уны кәмһетеп ҡарамау, тәкәбберлектән йыраҡ тороу… Аллаһ Рәсүленең күркәм холҡонан үрнәк алған солтан Әхмәт I хәҙрәттәре лә үҙ исеме менән тарихҡа кергән архитектура шаһәҫәре (тарихи әҫәре) – Солтанәхмәт мәсете төҙөлөшөндә ҡулына кәйлә һәм көрәк тотоп, ябай бер эшсе кеүек хеҙмәт ҡуя. Вафатынан һуң Йәүһәр Нәсибә ҡатын төшөндә уны йәннәттә бик хөрмәтле урында күрә һәм ҡыҙыҡһынып һорау бирә: «Атам, ҡайһы ғәмәлең менән ошбу күркәм мәртәбәгә лайыҡ булдың?» Солтан Әхмәт: «Ҡыҙым, был мәсетте һалғанда, арҡамда таш ташыным. Әлеге урынды алыуымдың сәбәбе – шулдыр!» – тип яуап бирә. Әхмәт I былдай ислам әхлағы үрнәге күрһәткән осорҙа, Ғосманлы империяһының территория яғынан иң ҙур сиктәргә эйә сағы була. Бөтә донъя королдәре был дәүләтте хөрмәтләп баш эйә һәм вәкилдәре ҡулынан таж кейәләр.

*«Аллаһым! Ысын әжер – әхирәт әжере. Ансарға һәм мөһәжирҙәргә рәхмәт ирештер!»* (Бохари, «Мәнаҡибүл-Ансар», 45).

Һәр кем кирбестәрҙе берәм-берәм ташығанда, Ғәммәр ибн Йәсир разыйаллаһу ғәнһү, береһе – үҙе, икенсеһе – Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ өсөн тип, икешәрләп күтәрә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны күреп, туҙандарын ҡаға ла:

*«Әй Ғәммәр! Һин ниңә кирбестәрҙе иптәштәрең кеүек берәмләп ташымайһың?»* – тип һорай.

Ул иһә: «Аллаһтан бының әжерен һорайым!» – ти. Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уны арҡаһынан һыйпап, маҡтап ала:

*«Әй Сөмәййә улы! Башҡа кешеләр өсөн бер әжер, һинең өсөн иһә ике әжер яҙыла!»* (Әхмәт, III, 91; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 256).

Түбәндәге риүәйәт тә мосолман ир-аттарҙың да, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да Мәсжиди Нәби төҙөлөшөндә рухланып хеҙмәт ҡуйғанын күрһәтә:

«Ҡатыны вафат булғас, Ғабдуллаһ ибн Ғауф разыйаллаһу ғәнһү халыҡҡа былай тип мөрәжәғәт итә: «Уның табутын күтәреп барығыҙ һәм дә рухланып күтәрегеҙ! Сөнки ул һәм уның ҡолдары тәҡүәлек нигеҙендә һалынған Пәйғәмбәребеҙ мәсете таштарын төндә ташыйҙар ине. Беҙ (ир-аттар) иһә көндөҙ икешәрләп ташый инек» (Хәйсәми, II, 10).

Мәсжиди Нәби иңе һәм буйы яҡынса йөҙәр зирағ[31] тәшкил иткән дүртмөйөш рәүешендә була. Аҫҡы тарафтан өс зирағы таштан, өҫкө яғы кирбестән һалына, дөйөм бейеклеге биш-ете зирағ тәшкил итә.[32] Төҙөлөштә балсыҡ иҙмә ҡулланыла.[33] Мәсеттең ҡибла тарафына терәк сифатында хөрмә ағасы олондары теҙелә. Түшәме һәм төп терәктәре өсөн хөрмә ботаҡтарынан файҙаланалар.[34] Бер михрабы һәм өс ишеге була. Михрабы Бәйтүл-Маҡдискә (Иерусалимға) йүнәлә. Ҡибла Бәйтүл-Маҡдистән Ҡәғбәгә боролғас, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ беренсе ишекте ҡаплата. Уның урынына Дамаск тарафы диуары яғынан бүтән ишек аса.[35] Мәсет янына Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм Уның ғаиләһе өсөн ике бүлмә ҡорола.[36] Һуңыраҡ был бүлмәләрҙең һаны арттырыла.

Хәсән Басри хәҙрәттәренең әсәһе мөьминдәрҙең инәһе Өммө Сәләмәнең йәриәһе була, шуға күрә Хәсән Басри бала сағын Аллаһ Рәсүленең ханәи сәғәҙәте тирәһендә уҙҙыра, ул осорҙа был бүлмәләрҙең түшәменә ҡулын

31. Бер зирағ 75 см тәшкил итә.
32. Ибне Сәғд, I, 239.
33. Диярбәкри, I, 344.
34. Бохари, «Саләт», 62.
35. Диярбәкри, I, 346.
36. Ибне Сәғд, I, 240.

тейҙерә алыуы тураһында хәтерләй.[37] Әлеге иҫтәлектән бүлмәләрҙең әллә ни бейек булмауы аңлашыла. Әфәндебеҙҙең бүлмә ишектәре иһә ҡара йөндән баҫылған кейеҙҙән ғибәрәт була.[38]

Тәбиғиндәрҙең олуғ имамдарынан Сәғит ибне Мүсәййәб был бүлмәләрҙең Әмәүиҙәр осоронда емерелеп, Мәсжиди Нәбәүигә ҡушылыуы сәбәпле тойған һағыш хисен түбәндәгесә телгә ала: «Валлаһи, быларҙың нәҡ шул килеш ҡалдырылыуын ни ҡәҙәр теләгән инем! Яңы үҫеп килеүсе быуын һәм был тирәләрҙе зыярат ҡылырға килеүсе кешеләр ана шул рәүешле Аллаһ Рәсүленең тормошта ни менән ризаланыуын күреп, мал-мөлкәт арттырыуға һәм шуның менән маҡтаныуға ынтылмаҫ ине» (Ибне Сәғд, I, 499-500).

Мәсеттең түбәһе хөрмә ботаҡтары һәм япраҡтары менән генә ҡапланғанға, ямғыр яуғанда эске яғы ләмләнеп, еүешләнеп бөтә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ рамаҙан айында иғтикәфкә кергән саҡта яуған ямғыр мәсеттең эсенә үтә, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иртәнге намаҙҙы уҡытҡанда, маңлайына һәм йөҙөнә ләм-балсыҡ буялғанлығы күренә.[39]

Шулай тағы бер төндә йәнә ямғыр яуа, ерҙәр еүешләнә. Бер бәндә кейеме менән ҡом ташып, мәсеттең иҙәненә түшәй. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм намаҙын башҡарғас:

*«Был ни ҡәҙәр шәп эш!»* – тип, ризалығын белдерә (Әбү Дауыт, «Саләт», 15/458).

Тәмими Дари разыйаллаһу ғәнһү Дамасктан Мәҙинәгә бер нисә шәмдәл, етерлек май һәм еп-бауҙар алып ҡайта. Мәҙинәгә ҡайтҡан көнө йомаға тура килә. Хеҙмәтсеһе Әбүл-Бәррадҡаептәрҙе бәйләп, шәмдәлдәрҙе элергә, уларға һыу һәм май һалып, филтәләрен йәбештереп ҡуйырға бойора. Хеҙмәтсе ҡушҡанды үтәй һәм, ҡояш батҡас, лампаларҙы яндырып ебәрә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәсеткә килеп, эсенең яҡтырып китеүен күргәс:

*«Быны кем эшләне?»* – тип һорай.

Ундағылар: «Тәмим эше, әй Аллаһтың Рәсүле!» – ти. Быға шаҡтай һөйөнгән Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ былай тип белдерә:

*«Исламды нурландырҙың һәм уның мәсетен биҙәнең, Аллаһ та һине донъя һәм әхирәттә нурландырһын!»* (Сәмһуди, II, 596-597; Ибне Хажәр, *«әл-Исабә»,* II, 18).

Мәсжиди Нәбәүи, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ әйтеүенсә, ғибәҙәт һәм зыярат маҡсаты менән сәфәр сығырға лайыҡ хөрмәтле өс мәсеттең береһе булып тора (Бохари, «Фадлус-Саләт», 1; Мөслим, «Хаж», 505-510). Мәҫәлән, бер хәҙис шәрифтә Ул былай ти:

37. Ибне Сәғд, VII, 161; Сүһәйли, I, 248.
38. Ибне Сәғд, I, 499.
39. Бохари, «Иғтикәф», 1.

*«Өйөм менән мөнбәрем араһы йәннәт баҡсаларынан бер баҡса ул. Мөнбәрем – сулығым өҫтөндәлер»* (Бохари, «Фазлус-Саләт», 5, «Фәзаилул-Мәҙинә», 11; Мөслим, «Хаж», 502).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәсжиди Нәбәүиҙә уҡылған намаҙҙың Мәсжиди Харамдан ҡала башҡа ерҙәрҙә уҡылған намаҙҙарҙан мең мәртәбә фазиләтлерәк булғанын хәбәр итә (Бохари, «Фазлус-Саләт», 1; Мөслим, «Хаж», 505-510).

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе, бер хөрмә төбөнә таянып, йәмәғәткә вәғәз уҡый. Ихтыяж барлығы күрелеп, мөнбәр һалына, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шуның өҫтөндә хөтбә уҡый башлай. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әүәлерәк таянып хөтбә уҡыған хөрмә төбө, Әфәндебеҙ үҙенән баш тартҡанға күрә, дөйә аҡырған тауыштар сығарып, иларға керешә. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ мөнбәрҙән төшөп, төптө һыйпай. Төп иһә илауҙан туҡтап, тынып ҡала (Бохари, «Йома», 26; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 6/3627).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Ул янындағы зикруллаһтан йыраҡта ҡалғанға иланы!»* – тип аңлата (Бохари, «Мәнаҡиб», 25; Әхмәт, III, 300).

Һуңыраҡ мөнбәр аҫтына бер соҡор ҡаҙыла һәм төп шунда күмелә йәки уны түшәмгә ҡуялар. Хәҙрәти Ғосман дәүерендә мәсет яңынан төҙөү өсөн емерелгәс, был төптө Үбәй ибн Кәғб разыйаллаһу ғәнһү ала һәм, ҡорттар тамам ашап, он хәленә килтереп бөтөргәнсе, төпһәне өйөндә һаҡлай.[40]

Бөйөк Хаҡ Тәғәлә дуҫы Мәүләнә Йәләлетдин Руми ҡуддисә сырруһ был ваҡиғаны әлеге атаҡлы хөрмә төбө исеменән үҙенең бер *Мәснәүи*һендә түбәндәгесә тасуирлай:

*«Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөнбәрҙән төштө һәм мөбәрәк ҡулдары менән хөрмә төбөн һыйпап:*

*«Әй хөрмә төбө! Ни теләйһең? Был һыҡтауың нилектән? Был хәлеңдең сәбәбе ниҙә?» – тип күңел төпкөлөнә үтеп керерлек итеп һораны. Хөрмә төбө, ҡайнар күҙ йәштәре ағыҙа-ағыҙа, үҙ хәл-киәфәте менән ҡайғыһын күрһәтеп:*

*«Йә Рәсүлүллаһ! Һинең айырылып китеүең мине уттарға һалды. Үҙәгемде сикһеҙ һағыш, ҡайғы-хәсрәт менән тултырҙы. Әүәлерәк хөтбә ваҡыттарында Һин таянған ул бәхетле һәм ҡотло терәк мин инем. Хәҙер иһә мине ташлап киттең: мөнбәргә күтәрелдең. Хәҙер Һинең таянысың – шул мөнбәр. Әммә... Йә Аллаһтың Рәсүле! Зинһар, хаҡлығымды таны, донъяла ҡайһы мәхлүк Һинән айырылыуға түҙеп тора алыр икән?»*

40. Ибне Сәғд, I, 251-252.

*Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хөрмәнең әлеге ихлас мөхәббәтле илауынан туктатып йыуатыу максатында, былай тип тынысландырҙы:*

*«Әй хөрмә төбө! Әгәр һыктауҙарың шундай бер айырылыу хәсрәтенән икән, ни теләйһең, шуны һора минән!.. Теләһәң, Аллаһка ялбарайым да һине шәректең һәм мәғрибтең бөтә-бөтә кешеләренә емеш үҫтерә торған йәм-йәшел, теп-тере ағаска әйләндерһен? Йәки һине йәннәттә бер кипарис үҫентеһенә әйләндерһен дә мәңге иң матур, иң нык кәүҙәләр кеүек йәш һәм күркәм кылһын!..»*

*Шундай илтифатка лайык булған хөрмә төбө, янып-кыуырып торған мөхәббәтенең бер сағылышы буларак, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә быңдай үтенесен белдерҙе:*

*«Йә Рәсүлүллаһ! Икеһенең береһен дә һорамайым. Берҙән-бер теләгем – Һиндә фани булыу, шуның өсөн мине күмеп юк итеүең, мине был фани вөжүдемдән коткарыуың. Сөнки бер ағас ни кәҙәр нык һәм матур булһа ла, ризығын кояш һәм һыуҙан ала. Хәлбуки, ғүмерем Һинең нурың менән тукланды. Һиңә таяныс булыуҙың, Һинең йылың менән йылыныуҙың, Һиндә янып-кыуырылыуҙың ләззәтен татыны. Мин инде әлеге хуш һәм татлы хис-тойғонан айырыла алмайым. Гел, һәр даим булыуын теләйем. Мине шундай итеп күм йәки юк ит ки, Һиндә, Һинең бер нурсығыңда булһа ла терелеп мәңгелектә булайым».*

*Ул хөрмә төбө киәмәт көнөндә кеше кеүек терелһен, тип, ергә күмелде».*

❁

Мәсжиди Нәбәүи төҙөлөшө, ағзалары бер-беренә ныклы йәбешкән ислам йәмғиәте ойоштороу өсөн, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Мәҙинәгә күсенгәндән һуң кылған тәүге аҙымдарының береһе була. Сөнки мосолмандар араһында кәрҙәшлек короло ғына түгел, байлык, дәрәжә һәм абруй менән бәйле айырмалыктарҙы ситкә куйып, һәр көн биш вакыт Аллаһ йортонда осрашыуҙың бик әһәмиәтле тәьҫире һиҙелә. Шул сәбәпле ислам шәһәрҙәре, дөйөм алғанда, үҙәктән ситкә таба киңәйгән бер структуранан ғибәрәт була, үҙәктә мәсет урынлаша, уның тирәләй өйҙәр һалына.

Сәғәҙәт быуатында мәсет ғибәҙәтхана вазифаһын башкарыу менән бер үк вакытта мәктәп, шура ла булып тора. Мәсеттәге дәрес, әңгәмә һәм зекер мәжлестәренең даими тыңлаусылары – буйҙак һәм йортһоҙ сәхәбәләрҙең һыйыныу-йәшәү урыны ла шул ук мәсеттең киң эскәмйәһе була. Был яктан карағанда, Мәсжиди Нәбәүи кунакхана вазифаһын да үтәй.

## Йәмәғәт менән намаҙ кылырға өндәү

Ижтимағи тәрбиә – исламдың иң мөһим кағиҙәләренән береһе. Мосолмандың тәүге ижтимағи тәрбиәһе иһә йәмәғәт менән намаҙ кылыуҙан

башлана. Ислам йәмғиәтен йәшәтеп тотҡан беренсе төп терәк һәм изге ғәмәл ана шунан ғибәрәт. Ҡайҙа йәмәғәт менән намаҙ уҡылһа, шунда исламдың рухи һәм ижтимағи асылын төшөнә башлағандар тигән һүҙ. Әйтәйек, ағзалары араһында берҙәмлек һәм татыулыҡ урынлашыуын теләгән ислам мосолмандың айырып тора торған билдәһе – намаҙҙың йәмәғәт менән башҡарылыуын талап итә һәм мәсеткә даими йөрөүҙе мөьмин булыуҙың бер дәлиле тип һанай. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Берәүҙең мәсеттәргә йөрөүҙе ғәҙәткә әйләндереүен күрһәгеҙ, уның иманлы булғанлығына шаһитлыҡ ҡылығыҙ. Сөнки Аллаһ Тәғәлә былай тип әйтә:*

إِنَّمَا يَعْمُرُ مَسَاجِدَ اللّٰهِ مَنْ آمَنَ بِاللّٰهِ

**«Аллаһтың мәсеттәрен бары Аллаһҡа иман килтергәндәр генә йәнләндерер...»** («әт-Тәүбә», 18)» (Ибне Мәжә, «Мәсәжид», 19).

Тимәк, мәсеттәрҙең матди яҡтан төҙөү кеүек, йәмәғәт менән бергәлектә даимилыҡ аша рухи яҡтан ҡороу ҙа бик мөһим ҡоллоҡ (ғибәҙәт) вазифаһы һанала. Мәҫәлән, Әбү Һурайра раҙыйаллаһу ғәнһүҙән былдай бер риүәйәт тапшырыла:

*«Донъяла ошо дүрт нәмә ысын хәсрәткә һала: залим хәтерендәге Ҡөрьән, мосолман төбәктә булып та, эсендә намаҙ уҡылмай торған мәсет, бер өйҙөң диуарына элеп ҡуйылған Мүсхәф (Ҡөрьән) һәм боҙоҡ төркөм эсендә йәшәүсе изге зат»* (Дәйләми, III, 108/4301).

Йәнәбел-Хаҡ намаҙҙарҙың йәмәғәт менән ҡылыныуына бик ҙур әһәмиәт бирә. Хатта һуғыштарҙа ла ғәскәрҙәргә йәмәғәт менән намаҙ ҡылырға бойора һәм уны нисек уҡыясаҡтарын да Ҡөрьәни-Кәримдә тәғәйенләй.

Әбү Һурайра раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип аңлата:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер сәфәр ваҡытында Дажнан менән Усфан араһында ҡуна ҡала. Мөшриктәр: «Уларҙың бер намаҙҙары бар, ул улар өсөн аталарынан һәм балаларынан ҡәҙерлерәктер. Был – икенде намаҙы. Әҙерләнегеҙ, улар өҫтөнә бергәләп һөжүм итегеҙ!» – тиҙәр. Шунан һуң Ябраил ғәләйһиссәләм, Аллаһ Рәсүле янына килеп, һуғыш осрағында намаҙҙы нисек уҡылырға тейешлеген асыҡлаған «Ниса» сүрәһенең 102-се аятын еткерә» (Тирмизи, «Тәфсир», 4/21).[41] Йәғни ниндәй генә шарттар булмаһын, мосолмандар өсөн намаҙҙы кисектереү һәм йәмәғәт менән ҡылыуҙы туҡтатыу тураһында һүҙ ҙә була алмай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең намаҙҙы йәмәғәт менән уҡырға өндәгән хәҙис шәрифтәрҙең ҡайһы берҙәре:

41. Ҡарағыҙ: 254-се бит.

*«Йәмәғәт менән уҡылған намаҙ кешенең яңғыҙ ҡылған намаҙынан егерме ете тапҡыр фазиләтлерәк»* (Бохари, «Аҙан», 30).

*«Берәү иртә-кис мәсеткә йөрөһә, һәр барып ҡайтыуында Аллаһ Тәғәлә уға йәннәттәге һыйын әҙерләр»* (Бохари, «Аҙан», 37).

*«Һеҙҙән берегеҙ тәһәрәт алып, быны күркәм рәүештә ҡылһа һәм намаҙ өсөн юлға сыҡһа, уң аяғын күтәргән һайын, Аллаһ Тәғәлә уның өсөн бер игелек яҙыр, һул аяғын ергә төшөргән һайын, бер насарлығын һөртөп ташлар, мәсет яҡын булһа ла, йыраҡ булһа ла. Мәсеткә килеп, йәмәғәт менән намаҙ уҡыһа, гонаһтары ярлыҡаныр. Әгәр мәсеткә барғанда, намаҙҙың бер өлөшөн уҡыған булһалар, уларға эйәрер. Ҡалдырған рәкәғәттәрен һуңынан тамамлап ҡуйһа, шул уҡ әжер-сауаптар дөрөҫтөр. Әгәр мәсеткә килеүенә, йәмәғәт намаҙҙы уҡып бөтөргән икән, был зат иһә намаҙын яңғыҙ ҡылһа, йәнә шул уҡ хөкөмдәр ҡулланылыр»* (Әбү Дауыт, «Саләт», 50/563).

*«(Бер мөьмин) мәсеткә кергәс, намаҙҙы көткән ваҡыт буйы намаҙҙа тип һаналыр»* (Ибне Мәжә, «Мәсәжид», 14).

Әбү Һүрайра раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ тарафынан хаталарҙы һөртөп ташлаттыра һәм дәрәжәне күтәрттерә торған нәмәнең ни икәнен әйтәйемме?»* – тип һораны.

Әсхәбе кирам: «Әйе, йә Рәсүлүллаһ!» – тиҙәр.

Аллаһ Рәсүле былай тип дауам итә:

*«Ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан тәһәрәтте тулы рәүештә алыу, мәсеттәргә (барып етеү өсөн) яһалған аҙымдарҙы күбәйтеү һәм бер намаҙҙан һуң икенсе намаҙҙы көтөү. Бына асыл рибат[42] шуларҙыр»«* (Мөслим, «Тәһәрәт», 41).

Язид ибне Ғамир раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Аллаһ Рәсүле намаҙ уҡығанда, Уның янына килгән инем. Ултырҙым да йәмәғәткә ҡушылманым. Әфәндебеҙ намаҙҙан һуң беҙгә таба боролғас, ситтә ултырғанымды күрҙе:

*«Әй Язид, һин мосолман булманыңмы ни?»* – тип ҡыҙыҡһынды.

Мин: «Әйе, йә Рәсүлүллаһ, мосолман булдым!» – тинем.

Аллаһ Рәсүле:

*«Улайһа йәмәғәткә ҡушылырға һиңә нимә ҡомасауланы?»* – тип һораны.

42. **Рибат** – нәфесте итәғәткә буйһондороп, сик буйҙарында һаҡта тороу һәм Аллаһ юлында йыһат ҡылыу кеүек мәғәнәләр белдерер. Аят һәм хәҙистәрҙә рибат бик маҡтала һәм уның өсөн ҙур әжер-сауаптар вәғәҙә ителә.

«Һеҙ намаҙҙы уҡыған инде, тип уйлап, өйөмдә уҡып килгән инем», – тинем.

Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Әгәр намаҙға килеп, кешеләр намаҙ уҡыған ваҡытҡа тап булһаң, улар менән бергә уҡы. Әгәр әүәлдән намаҙыңды уҡығанһың икән, был һинең өсөн нәфел ғибәҙәт булыр. Өйҙә уҡығаны иһә фарыздан һаналыр»*, – тип аңлатты» (Әбү Дауыт, «Саләт», 56/577).

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ, йәмәғәт менән намаҙ уҡыу мәсьәләһенә ҡағылышлы хөкөмдәрҙе аңлатҡанда, был ғәмәлдән айырған бер генә һылтауҙы ла ҡабул итмәй, мосолмандарға эш-хеҙмәттәрен һәм шарттарын аҙанға ҡарап көйләргә ҡуша. Мәҫәлән, Ғабдуллаһ ибне Өмми Мәктум раҙыйаллаһу ғәнһү, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килеп: «Йә Рәсүлуллаһ! Күҙҙәрем күрмәй, өйөм дә мәсеттән йыраҡ. Бер юл күрһәтеүсем бар, ул да миңә ярҙамлашмай. Намаҙҙы өйөмдә уҡыуыма рөхсәт бирмәҫһегеҙме?» – тип мөрәжәғәт итә.

Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Аҙанды ишетәһеңме?»* – тип һорай һәм «эйе», тигән яуап алғас:

*«Һинең өсөн (йәмәғәт намаҙына килмәүең мәсьәләһендә) рөхсәт итерлек сәбәп таба алмайым»,* – тип белдерә (Әбү Дауыт, «Саләт», 46/552).

Алыҫ ерҙәрҙән килеп, намаҙҙа ҡатнашыуҙың фазиләте хаҡында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ былай тип әйтә:

*«Намаҙ сәбәпле кешеләрҙең иң ҙур әжергә лайыҡ булыусылары – йыраҡ аралар үтеп килеүселәр. Имам менән бергә ҡылайым, тип, намаҙҙы көтөүсе кеше лә өйөндә уҡып, шунда уҡ ятыусыларҙан ҙурыраҡ әжергә лайыҡ булыр»* (Бохари, «Аҙан», 31).

*«Берәүҙең торған ере мәсеткә ни тиклем йыраҡ булһа, намаҙға барғанда шул тиклем күберәк сауап алыр»* (Әбү Дауыт, «Саләт», 48/556).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәмәғәт намаҙын даими ҡылмаусыларға төрлө киҫәтеүҙәр яһай. Үбәй ибне Кәғб раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер көн иртәнге намаҙҙы уҡытты һәм:

*«Фәлән кеше намаҙға килдеме?»* – тип һораны. «Килмәне», – тинеләр.

*«Фәлән-фәлән килдеме?»* – тип һораны. Йәнә: «Килмәне», – тинеләр. Шунан һуң:

*«Бына был ике намаҙ – монафиктарға иң ауыр бирелә торған намаҙҙарҙан. Быларҙа ни ҡәҙәр күп әжер-сауап булғанын белһәгеҙ, мүкәйләп-шыуышып булһа ла, йәмәғәт намаҙына килер инегеҙ. Беренсе саф – фәрештәләр сафы кеүек ул. Ундағы фазиләтте белһәгеҙ, был сафҡа ярыша-ярыша баҫыр инегеҙ. Берәүҙең башҡа берәү менән уҡыған намаҙы яңғыҙ ҡылған намаҙынан бәрәкәтлерәк һәм күпкә сауаплыраҡ. Ике кеше менән уҡыған намаҙы иһә бер кеше менән ҡылған намаҙынан бәрәкәтлерәк һәм өҫтөнөрәк. Бергә ҡылыусыларҙың һаны ни ҡәҙәр күп булһа, Аллаһ Тәғәлә шул ҡәҙәр нығыраҡ оҡшатыр»* – тип асыҡланы» (Әбү Дауыт, «Саләт», 47/554).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм башҡа бер хәҙисендә әйтә:

*«Мәсеткә күрше булыусының намаҙы бары мәсеттә уҡыған осраҡта ғына (камил, тулы мәғәнәһендә) намаҙ булып һаналыр»* (Ибне Әби Шәйбә, I, 303).

Был хәҙис шәрифтә иҫкә алынған мәсет күршеһенең кем булыуы тураһында хәҙрәти Ғәлиҙән һорағас:

«Мәзинде ишетеүсе һәр кем», – тигән яуап бирә (Бәйхаки, *«әс-Сунәнүл-Күбра»,* III, 57).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең түбәндәге хәҙис шәрифтәре иһә йәмәғәт намаҙын ташлаусыларға ҡаршы бик ҡурҡыныс киҫәтеүҙәр булып яңғырай:

*«Бер ауыл йәки ҡырҙа өс кеше бергә булып та, намаҙҙы үҙ-ара йәмәғәт менән ҡылмаһалар, шайтан уларҙы ҡамап алып, еңеп сығыр. Шуға күрә йәмәғәт менән намаҙ уҡыуҙы дауам итегеҙ. Тәхҡиҡ, көтөүҙән айырылған һарыҡты бүре әләктерер»* (Әбү Дауыт, «Саләт», 46/547).

*«Бер төркөм кеше йәмәғәт намаҙына ҡарата вайымһыҙлыҡтан баш тартмаһа, Аллаһ уларҙың йөрәктәрен мөһөрләп ҡуйыр ҙа ғафилдарҙан булырҙар»* (Ибне Мәжә, «Мәсәжид», 17).

### Беренсе аҙан

Намаҙ ваҡытын йәмәғәткә ишеттереү өсөн, башта бары: «Намаҙға, намаҙға!» –тип ҡысҡыра торған булалар. Һуңыраҡ иһә рәхмәт менән Мөхәммәт аҙаны индерелә.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм халыҡты намаҙға саҡырыу рәүешенең ниндәй булырға тейешлеге тураһында сәхәбәләре менән кәңәшләшә. Ҡайһы берҙәре: «Намаҙ ваҡыты кергәс, бер байраҡ күтәрәйек, мосолмандар уны күреүгә, бер-береһенә хәбәр бирһендәр», – тип тәҡдим яһай. Ләкин Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ был тәҡдимде оҡшатмай. Йәһүд борғоһон ҡысҡыртырға, тигән тәҡдим әйтелә, уныһы ла Рәсүлуллаһ күңеленә хуш килмәй: *«Был – йәһүдиҙәр ҡоралы»,* – тип аңлата. Саң ҡағыу тураһында ла телгә алына. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ: *«Ә уныһы – христиандар ғәмәле».* – тип кире ҡаға.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хәсрәт-ҡайғыларын уртаҡлашҡан, Уны борсоған нәмәләр өсөн борсолған Ғабдуллаһ ибне Зәйд[43] разыйаллаһу ғәнһү ул мәжлестән китеп бара. Ярым йоҡо, ярым уяу хәлдә саҡта, уға илаһи рәхмәт менән Мөхәммәт аҙаны иңдерелә. Шунда уҡ Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына йүнәлә: «Мин йоҡо менән уяулыҡ араһында ваҡытта, берәү килеп миңә аҙан өйрәтте», – ти ул.

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү ҙә шул уҡ төштө күргән була… Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй Билал, тор ҙа Ғабдуллаһ ибне Зәйд әйткәндәрҙе үтә!»* – тип бойора. Билал разыйаллаһу ғәнһү Ғабдуллаһ һөйләгәндәрҙе һүҙгә-һүҙ башҡара һәм аҙан әйтә (Әбү Дауыт, «Саләт», 27/498).

Шул рәүешле аҙан вәжиб дәрәжәһендәге көслө бер сөннәт ғәмәлгә әйләнә. Сөнки ул хәбәр биреүсе төш тә, Пәйғәмбәр сөннәте лә булып тора, илаһи вәхи менән дә нығытыла. Аяти кәримәлә:

وَإِذَا نَادَيْتُمْ إِلَى الصَّلَاةِ

**«Уларҙы намаҙға саҡырған ваҡытығыҙҙа...»** – тип әйтелә («әл-Маидә», 58).

Аҙандың кертелеүендә аралашсы Ғабдуллаһ ибне Зәйд разыйаллаһу ғәнһү булһа ла, уның иңдерелеүендә төп сәбәпсе – вәхи һәм серле белемдәргә юл асылған зат, һәр замандың Йәшәйеш нуры Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ. Аҙан Ул раҫлағас ҡына шәриғәткә индерелә һәм кешеләр мәсеткә, йәмәғәт намаҙына саҡырыла башлай. Билал Хәбәши беренсе аҙанды әйткәндә, әлеге бөйөк саҡырыу Мәҙинәнең бер осонан икенсе осона ҡәҙәр ирешә. Аҙан тауышы менән күктәрҙә ҡайтауаз яңғырай. Мөьминдәр оло шатлыҡ эсендә мәсеткә йүгерә.

Намаҙға саҡырыу өсөн Йәшәйеш нурына төрлө ысулдар тәҡдим ителһә лә, Ул уларҙың береһен дә оҡшатмай. Аҙанды иһә бик ҙур ризалыҡ менән ҡабул итә, сөнки аҙан исламдың Аллаһ, Пәйғәмбәр, ғибәҙәт һәм тормош төшөнсәләрен ҡыҫҡа рәүештә асыҡлап бирә һәм улар араһында ныҡ бәйләнеш

43. **Ғабдуллаһ ибне Зәйд ибне Ғасыйм әл-ансари**, Өхөд һуғышында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе яҡындан һаҡлаған өсөн Уның маҡтауына, ҡәҙерләүенә лайыҡ була. Был һуғышта Ғабдуллаһ ҡына түгел, уның бөтә ғаиләһе батырлыҡтар күрһәтә. Аллаһ Рәсүле иһә уларҙың йәннәттә үҙенә күрше булыуҙары өсөн доға ҡыла. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ваҡыт-ваҡыт Ғабдуллаһ ибне Зәйдтең өйөнә килә һәм шунда тәһәрәт алып, намаҙ уҡый. Ғабдуллаһ ибне Зәйд әл-ансари разыйаллаһу ғәнһү Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бик бирелгән, Уны ихлас һөйгән сәхәбәләрҙән була. Әфәндебеҙҙең вафаты тураһында хәбәр алғас, ҡайғынан тетрәнгән хәҙрәти Ғабдуллаһ: «Аллаһым! Күҙемде тартып ал, берҙән-бер һөйгән затым – хәҙрәти Мөхәммәт салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән һуң башҡа һис кемде күрмәһәмсе», – тип доға ҡыла һәм шул миҙгелдә һуҡырая (Куртуби, V, 271). Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү Харрә ваҡиғаһы булараҡ билдәле һуғышта ике улы менән бергә шәһит китә.

ҡора. Тимәк, Аллаһ Рәсүле намаҙға саҡырыу мәсьәләһендә иң камил юлға өҫтөнлөк бирә.

Аят һәм хәҙистәр менән нығытылып, аҙан инде мең дүрт йөҙҙәр йылдан артыҡ мөьминдәр өсөн бөйөк бер саҡырыу булып ҡала. Донъякүләм дәрәжәләге һәм һәр кем тарафынан ҡабул ителгән намаҙ саҡырыуы ул. Ана шул сәбәпле асылына ятышһыҙ итеп, асыл булмаған рәүештә әйтелә алмай. Ул ысын-ысынлап күктәрҙең илаһи бер көйө һыман. Шағир Яхья Кәмал аҙанды үҙенең шиғыр юлдарында ни ҡәҙәр матур тасуирлаған:

*«Бөйөк әмер һин, әй Мөхәммәт аҙаны,*
*Тауышыңды һыйҙырмаҫ Мөхәммәт йыһаны,*
*Бороп алмаҫ ине әжәл Солтан Сәлим Беренсене,*
*Мөхәммәттең данлы исеме яулар ине Ғаләмде.*
*Күк нурға күмелер йөҙ мең манаранан,*
*Мөхәммәт рухы йәйгәс ҡанаттарын.*
*Әруахтар «Аллаһу әкбәр»ҙе күрер барыһы бергә,*
*Мөхәммәт исеме сағылғанда ғәрештә...»*

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм аҙан тураһында былай ти:

*«Аҙанды ишеткән саҡта мәзиндең әйткәндәрен (һүҙгә-һүҙ) ҡабатлап барығыҙ. Һуңынан миңә сәләм-салауат әйтегеҙ. Сөнки кем миңә сәләм-салауат әйтһә, Аллаһ та уға ун тапҡыр күберәк рәхмәтен ирештерер. Артабан минең өсөн «вәсилә» һорағыҙ. Ул йәннәттәге бер урын, һис шикһеҙ, Аллаһтың бер ҡолоноҡо буласаҡ. Шуға ирешәсәк зат булырға өмөтләнәм. Кем минең өсөн Аллаһтан «вәсилә» һораһа, шуға шәфәғәтем вәжиб булыр»* (Мөслим, «Саләт», 11; Әбү Дауыт, «Саләт», 36/523).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм башҡа бер хәҙис шәрифтә мәзин артынан аҙанды ҡабатлап барған заттың йәннәткә керәсәге тураһында хәбәр итә.[44] Аҙандан һуң уҡыла торған доға тураһында түбәндәгесә асыҡлыҡ кертә:

*«Кем аҙан ишетһә:*

اَللّٰهُمَّ رَبَّ هٰذِهِ الدَّعْوَةِ التَّامَّةِ وَالصَّلَاةِ الْقَائِمَةِ اٰتِ مُحَمَّدًا ِ الْوَسِيلَةَ
وَالْفَضِيلَةَ وَابْعَثْهُ مَقَامًا مَحْمُودًا ِ الَّذِى وَعَدْتَهُ

*«Әй был камил саҡырыуҙың һәм уҡыла торған намаҙҙың Раббыһы! Хәҙрәти Мөхәммәт ғәләйһис-сәләәтү үә-сәләәмгә вәсилә һәм фазиләт бир.*

44. Мөслим, «Саләт», 12.

*Уны Үҙең вәғәҙә иткән Мәхмүт (маҡтаулы) урыны өҫтөндә терелт!» – тиһә, уға ҡиәмәт көнө һис шикһеҙ шәфәғәт ҡылырмын»* (Бохари, «Аҙан», 8; Әбү Дауыт, «Саләт», 37/529).

Илаһи саҡырыу булған аҙандың фазиләте тураһында бик күп хәҙис шәриф тапшырылған. Шуларҙың бер нисәһе:

*«Ике доға бар, улар һис кире ҡағылмаҫ йәки бик һирәк кире ҡағылыр: аҙан ваҡытында ҡылынған доға менән Аллаһ юлында йыһат ҡылғанда, кешеләрҙең бер-береһе менән һуғышҡан миҙгелендәге доға»* (Әбү Дауыт, «Йыһат», 39/2540).

*«Кешеләр аҙан уҡыуҙың һәм намаҙҙа беренсе сафта тороуҙың сауабын белһәләр һәм быларҙы үтәй алыу мөмкинлеге өсөн шыбаға һалырға мәжбүр булһалар, һис шикһеҙ шулай эшләрҙәр ине»* (Бохари, «Аҙан», 9, 32; Мөслим, «Саләт», 129).

*«Намаҙ өсөн аҙан әйтелгән ваҡытта, шайтан ул ерҙән тауыш менән елдәр сығара-сығара ҡасыр, аҙанды ишетмәҫлек урынға тиклем китер. Аҙан бөткәс, кире килер. Ҡамәт башланғас, йәнә йыраҡайыр, бөткәс иһә кире ҡайтып, кеше менән уның йөрәге араһына керер ҙә: «Тегене иҫкә төшөр, быны уйла!» – тип, аҡылында әүәл һис булмаған нәмәләр менән вәсүәсә һалыр. Шулай ки (быға эләккән), кеше нисә рәкәғәт ҡылғанын белә алмаясаҡ хәлгә етер»* (Бохари, «Аҙан», 4; Мөслим, «Саләт», 19).

### Әсхәбе суффә – ғилем һәм танып белеү мәктәбе

Мәсжиди Нәбәүиҙең бер яғына ситтәре асыҡ һәм өҫтө хөрмә ботаҡтары менән ҡапланған бер суффә[45] (терраса, сатыр) ҡорола. Өйө һәм ғаиләһе булмаған фәҡир мосолмандар шунда йәшәп тора, уларҙы «Әсхәбе суффә» йәки «Суффә әһеле» тип атайҙар.[46] Араларында өйләнеүселәре, сәфәргә сығып китеп барыусылары, башҡа ергә күсенеүселәре йәки үлеүселәре булғанға, һандары үҙгәреп тора, ҡайһы саҡ күбәйәләр, ҡай саҡта әҙәйәләр. Бер ваҡыт уларҙың һаны етмешкә ҡәҙәр етә.

Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа Суффә әһеленән булғанлығы иҫкәртелгән йөҙҙән артыҡ сәхәбәнең исеме телгә алына. Быларҙың тормош ихтыяждарын Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәьмин итеп тора, хәленән килгән сәхәбәләргә уларҙы ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫҡа ҡуша.

Әсхәбе суффәнән Әбү Һурайра разыйаллаһу ғәнһү былай тип һөйләй:

«Суффә әһеле ислам ҡунаҡтары ине ул. Уларҙың һыйынасаҡ ғаиләләре лә, малдары, яҡындары-туғандары ла юҡ ине. Берәй саҙаҡа килһә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ шуларға ебәрә, үҙе унан бер нәмә лә алмай ине. Әгәр килтерелгән

45. Суффә – өй һәм ҡунаҡханаларҙағы терраса, һике, ҡәнәфи кеүек бейегерәк ултырыу йыһазы өсөн ҡулланыла торған атама. Хәҙерге заманда «софа» һүҙе рәүешендә ҡулланыла.
46. Ибне Сәғд, I, 255.

нәмә берәй һәҙиә (бүләк) икән, үҙе унан берәй киҫәк алып, ҡалғанын йәнә Әсхәбе суффәгә ебәрә ине. Шулай итеп, килтерелгән бүләкте лә улар менән бүлешә ине» (Бохари, «Риҡаҡ», 17).

Әбү Һүрайра хәҙрәттәренең тағын бер иҫтәлеге:

«Мин Суффә әһеленән етмеш кешене күрҙем. Һис ҡайһының өҫтөндә бөтә тәнен ҡапларлыҡ кейем юҡ ине. Йә билдән түбән ҡаплаған берәй алъяпҡыс йәиһә билдән юғары яҡҡа кейелгән еләндәре бар ине. Кейемдәрен муйындарына бәйләп ҡуялар ине. Был кейемдәрҙең бер өлөшө балтырҙарының яртыһына ҡәҙәр, бер өлөшө тубыҡтарына хәтле етә ине. Ғәүрәт ерҙәре күренмәһен, тип, кейемдәрен ҡулдары менән йыйып тоталар ине (Бохари, «Саләт», 58).

Фәдалә ибне Губәйд раҙыйаллаһу ғәнһү иһә былай тип тапшыра:

«Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләргә намаҙ ҡылдырғанда, уларҙың ҡайһы берҙәре аслыҡ хәлһеҙлеге арҡаһында, аяҡтарында баҫып тора алмайынса, аңһыҙ йығыла ине. Былар – Әсхәбе суффә ине. Сүлдән килеүсе бәҙәүиҙәр уларҙы тиле тип уйлайҙар ине. Намаҙҙы тамамлағас, Аллаһ Рәсүле аслыҡтан йығылғандарҙың яндарына бара һәм, уларҙы йыуатып:

*«Аллаһ Тәғәлә ҡаршында һеҙҙең өсөн ниҙәр әҙерләнгәнен белһәгеҙ ине, тағы ла ярлыраҡ һәм мохтажыраҡ булырға теләр инегеҙ»,* – ти» (Тирмиҙи, «Зөхд», 39/2368).

Ғабдуррахман ибне Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһүмә ошо ваҡиға тураһында бәйән ҡыла:

«Әсхәбе суффә шаҡтай фәҡир кешеләр ине. Бер тапҡыр Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тине :

*«Ике кешелек ризығы булған зат (Әсхәбе суффәнән) өсөнсөнө, дүрт кешелек ризығы булған зат бишенсене һәм хатта алтынсыны табынға саҡырып алып килһен!»*

Атайым Әбү Бәкер уларҙан өс кешене өйөбөҙгә алып ҡайтты. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә ун кешене ханәи сәғәҙәтенә алып ҡайтып һыйланы… Аллаһ менән ант итәм, ашаған һәр киҫәк ризыҡ артынан ашамлыҡ тағы ла арта ине. Ниһәйәт, мосафирҙар туйғансы ашаны. Ашамлыҡ иһә башта бирелгәндән дә күберәк хәлдә үҙәктә тора ине. Әбү Бәкер ризыҡҡа ҡараны ла ҡатынына һүҙ ҡатты: «Әй Бәни Фирас ҡыҙы! Был ни хәл?» – тине.

Ҡатыны иһә: «Күҙемдең нуры менән ант итәм, хәҙер ашамлыҡ баштағынан өс тапҡыр күберәк!» – тине» (Бохари, «Мавакит», 41, «Мәнаҡиб» 25, «Әҙәп», 87-88; Мөслим, «Әшрибә», 176-177).

Әлеге күренеш ихласлыҡ һәм йомартлыҡ арҡаһында иңдерелгән бәрәкәткә аныҡ бер үрнәк булып тора.

Әсхәбе суффә эш тапҡан ваҡыттарында эшләйҙәр, башҡа вакыттарҙа мәсеттә ғилем һәм ғибәҙәт менән мәшғүл булалар. Мәҫәлән, көсө-хәле булған Әсхәбе суффә тауҙарҙан утын алып ҡайтыу, һыу ташыу кеүек ҡулдарынан килгән һәр эште башҡара, эшләп тапҡан аҡсаны иптәштәренә ризыҡ алыуға тоталар.[47] Ғиффәт һәм әҙәп-әхлаҡ мәсьәләһендә бик инсафлы булған Суффә әһеле абруйҙарына тап төшөрәсәк эш-ғәмәлдәрҙән тыйыла, һис кемдән һис нимә һорамайҙар.

Әсхәбе Суффә – диндең сығанағы – Рәсүлүллаһтың мәжлестәренә иң даими йөрөүсе кешеләр була. Шуға күрә уҡыу-тәрбиәләре тиҙерәк бара. Мөғәллимдәре иң әүәл хәҙрәти Пәйғәмбәр, шулай уҡ Үбәй ибн Ҡәғб, Ибн Мәсғүд, Муғәҙ ибн Жәбәл һәм Ғубәҙә ибн Самит кеүек ғалим сәхәбәләр була. Суффә әһеле юғары дәрәжәләге һәм шаҡтай тиҙләтелгән белем-тәрбиә курстары уҙа. Әйтәйек, иң күп хәҙис шәриф риүәйәт иткән сәхәбәләр (муҡсирун), дөйөм алғанда, шулар араһынан сыҡҡан. Уларҙың иң алдынғыларынан Әбү Һүрайра хәҙрәттәре былай тип һөйләй:

«Кешеләр: «Әбү Һүрайра күп хәҙис риүәйәт итә (тапшыра)», – тип аптырай... Мөһәжир туғандарыбыҙ баҙарҙа сауҙа менән; ансар туғандарыбыҙ баҫыу-ҡырҙа, баҡсала ер эшкәртеү менән мәшғүл саҡта, Әбү Һүрайра тамаҡ туҡлығы менән генә ризаланып, Аллаһ Рәсүле янында йөрөй, улар күрмәгән күпме нәмәләргә шаһит була, улар ятлай алмағандарҙы яттан хәтеренә һала ине» (Бохари, «Ғилем», 42).

Исламды өйрәнеү өсөн ҡыҫҡа ваҡытка ғына Мәҙинәгә килеүсе делегациялар бер яҡтан Йәшәйеш нуры менән осрашып, икенсе яҡтан Әсхәбе суффәнән һорашып, белмәгән нәмәләрен өйрәнәләр. Мәҙинәнән ситтә яңы мосолман булған ҡәбиләләргә исламды өйрәтеү өсөн бер мөғәллим ебәреү ихтыяжы тыуғанда, ундай кеше Әсхәбе суффә араһынан һайлап алына.

Әсхәбе кирам араһында фазиләт яғынан тоғро хәлифтәр (хуләфә-и рашидин), Һөйөндөрөлгән ун сәхәбә (гашәрә-и мүбәшшәрә) һәм Бәҙер һуғышында ҡатнашҡан сәхәбәләрҙән (әсхәбе Бәҙер) һуң Әсхәбе суффә килә. Аллаһ Тәғәлә уларҙы төрлө аяттарҙа маҡтап зекер ала. Йәнәбел-Хаҡ әйтә:

لِلْفُقَرَاءِ الَّذِينَ أُحْصِرُوا فِى سَبِيلِ اللّٰهِ لَا يَسْتَطِيعُونَ ضَرْبًا فِى الْأَرْضِ
يَحْسَبُهُمُ الْجَاهِلُ أَغْنِيَاءَ مِنَ التَّعَفُّفِ تَعْرِفُهُمْ بِسِيمَاهُمْ لَا يَسْأَلُونَ النَّاسَ
إِلْحَافًا وَمَا تُنْفِقُوا مِنْ خَيْرٍ فَإِنَّ اللّٰهَ بِهِ عَلِيمٌ

«(Бирәсәк хәйерҙәрегеҙ) **үҙҙәрен Аллаһ юлына бағышлаған, шуға күрә ерҙә кәсеп итеп йөрөй алмаған фәкирҙәргә булһын. Белмәгәндәр уларҙы**

47. 45. Бохари, «Мәгази», 28, «Йыһат», 9; Ибне Сәғд, III, 514.

**тыйнаҡлыҡтары арҡаһында бай, тип уйлар. Һин уларҙы йөҙҙәренән таныйһың, сөнки улар оятһыҙ рәүештә һорамаҫ. Бирәсәк һәр саҙаҡағыҙҙы, һис шикһеҙ, Аллаһ белә»** («әл-Баҡара», 273).

Хаббәб разыйаллаһу ғәнһү былай тип бәйән ҡыла:

«Тәкәббер мөшриктәрҙән Акра ибн Хабис менән Уйәйнә ибн Хысн Аллаһ Рәсүле янына килде. Уны Билал, Суһәйб, Ғәммәр, Хаббәб кеүек ярлы һәм йәтим мосолмандар араһында ултырған хәлдә осраттылар. Тирәһендәге әлеге ябыҡ, хәлһеҙ мосолмандарҙан ерәнеп, уларға кәмһетеп ҡарап, Әфәндебеҙгә: «Беҙҙең өсөн быларҙан башҡа ғына, айырым бер мәжлес ойоштороуыңды теләйбеҙ. Шул рәүешле ғәрәптәр беҙҙең быларҙан өҫтөн икәнде аңлаһындар. Беләһең ки, беҙгә ғәрәп ҡәбиләләренән бер төркөм илсе һәм делегациялар килә. Уларҙың беҙҙе был ҡолдар менән күреүенән ояләбыҙ. Шуға күрә беҙ килгәс, уларҙы яныңдан йыраҡҡараҡ ебәр. Һинең менән эшебеҙ бөткәс, теләһәң, беҙҙән айырым хәлдә, йәнә улар менән бергә ултыр», – тинеләр.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ярай»,* – тип килеште.

Мөшриктәр иһә: ««Ярай», тип әйтеүең генә етмәй! Беҙҙең өсөн быны яҙыулы хәлдә раҫла», – тип үжәтләнде. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле ғәләйһиссаләәтү үәс-сәләәм хәҙрәти Ғәлиҙе саҡырҙы һәм яҙыу өсөн ҡағыҙ ҙа һораны. Беҙ бер мөйөштә ултыра инек. Шул ваҡытта Ябраил ғәләйһиссәләм ошбу аяти кәримәләрҙе алып килде:

وَلَا تَطْرُدِ الَّذِينَ يَدْعُونَ رَبَّهُمْ بِالْغَدَاةِ وَالْعَشِيِّ يُرِيدُونَ
وَجْهَهُ مَا عَلَيْكَ مِنْ حِسَابِهِمْ مِّنْ شَيْءٍ وَمَا مِنْ حِسَابِكَ
عَلَيْهِمْ مِّنْ شَيْءٍ فَتَطْرُدَهُمْ فَتَكُونَ مِنَ الظَّالِمِينَ

**«Иртә-кис Аллаһ ризалығына ынтылып, Раббыларына доға ҡылыусыларҙы яныңдан йыраҡайта күрмә! Уларҙың хисабы өсөн Һиңә бер яуаплылыҡ та йөкләнмәй. Һинең хисабыңдан да һис нәмә уларҙыҡы түгел. Әгәр уларҙы йыраҡлаштырһаң, залимдарҙан булырһың!»** («әл-Әнғәм», 52).

وَكَذَلِكَ فَتَنَّا بَعْضَهُمْ بِبَعْضٍ لِّيَقُولُوا أَهَؤُلَاءِ مَنَّ اللهُ
عَلَيْهِمْ مِّنْ بَيْنِنَا أَلَيْسَ اللهُ بِأَعْلَمَ بِالشَّاكِرِينَ

**«Беҙ уларҙың бер өлөшөн башҡалар менән: «Аллаһ арабыҙҙан быларғамы рәхмәтен лайыҡ тип тапты?» – тип әйтһендәр өсөн, бына**

**шулай һынанык. Аллаһ шөкөр итеүселәрҙе иң яҡшы белеүсе түгелмени?»** («әл-Әнғәм», 53).

وَإِذَا جَاءَكَ الَّذِينَ يُؤْمِنُونَ بِآيَاتِنَا فَقُلْ سَلَامٌ عَلَيْكُمْ كَتَبَ رَبُّكُمْ عَلَى نَفْسِهِ الرَّحْمَةَ

**«Аяттарыбыҙға иман килтереүселәр Һиңә килгән сағында әйт: «Сәләм һеҙгә! Раббығыҙ рәхмәт һәм мәрхәмәт ҡылырға вәғәҙә итте»...»** («әл-Әнғәм», 54).

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе, килешеүҙе яҙҙырыу өсөн ҡулына тотҡан ҡағыҙҙы шунда уҡ ситкә ташланы һәм беҙҙе үҙ янына саҡырҙы. Ҡаршыһына килгәс, беҙгә:

**«...Сәләм һеҙгә! Раббығыҙ рәхмәт һәм мәрхәмәт ҡылырға вәғәҙә итте...»** – тип әйтте.

Уға яҡын килдек, хатта шул ҡәҙәр яҡынайҙыҡ ки, теҙҙәребеҙҙе Уның теҙҙәренә терәнек. Был аят иңдерелгәс, беҙ элеккесә Әфәндебеҙ янында ултырыуҙы дауам иттек. Әммә Ул, үҙе теләгән саҡта, янbackbyҙҙан тороп китә ине.

وَاصْبِرْ نَفْسَكَ مَعَ الَّذِينَ يَدْعُونَ رَبَّهُمْ بِالْغَدَاةِ وَالْعَشِيِّ
يُرِيدُونَ وَجْهَهُ وَلَا تَعْدُ عَيْنَاكَ عَنْهُمْ تُرِيدُ زِينَةَ الْحَيَاةِ الدُّنْيَا

**«Иртә-кис Аллаһ ризалығын һорап, Раббыһына доға ҡылыусылар менән бергә ихлас сабыр ит! Донъялыҡ тормош биҙәктәренә ҡарап та, күҙҙәреңде уларҙан айырма!..»** – аяти кәримәһе («әл-Кәһеф», 28) иңгәс, башҡа инде улай эшләмәне. Шунан һуң беҙ тағы ла иғтибарлыраҡ булырға тырыштыҡ. Бергә ултырып, шаҡтай ваҡыт уҙғас, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡыйынһыныуһыҙ тороп китә алһын өсөн, беҙ әҙәплелек күрһәтеп, Уның янынан алданыраҡ ҡуҙғала инек» (Ибне Мәжә, «Зөхд», 7; Табари, *«Тәфсир»,* VII, 262-263).

Юғарыла иҫкә алынған һуңғы аяти кәримә иңдерелгәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шунда уҡ фәҡир сәхәбәләрҙе эҙләп сыға һәм уларҙы мәсеттең артҡы яғында Аллаһты зекер ҡылған хәлдә таба. Шунан һуң:

*«Йәнемде алғансы, өммәтемдән ошо кешеләр менән бергә сабыр итергә ҡушҡан Аллаһҡа маҡтауҙар булһын! Инде ғүмерем дә, үлемем дә һеҙҙең менән бергә»,* – тип белдерә (Вәхиди, 306 б.).

Әбү Сәғид разыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Бер төркөм мөһәжир фәҡирҙәр менән бергә ултыра инем. Уларҙың бер өлөшө (бөтә кәүҙәһен ҡапларлыҡ кейеме булмағанға күрә), башҡалар(ҙың

күләгәһенән файҙаланып) менән яҡшылабыраҡ ҡапланырға тырыша ине. Берәү беҙгә Ҡөрьән уҡый ине. Шул саҡта Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм килеп сыҡты һәм янныбыҙҙа туҡтаны. Аллаһ Рәсүле килгәндән һуң, Ҡөрьән уҡыусы зат уҡыуын туҡтатып, тынып ҡалды. Рәсүлүллаһ сәләм бирҙе лә:

*«Ни эшләйһегеҙ?»* – тип һораны.

«Йә Аллаһтың Рәсүле! Был – уҡытыусыбыҙ, беҙгә Ҡөрьән уҡый. Беҙ иһә Аллаһ Тәғәләнең китабын тыңлайбыҙ», – тинек.

Был һүҙҙәрҙән һуң Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Өммәтем араһында үҙҙәре менән бергә сабыр итеүем ҡушылған заттарҙы яралтҡан Аллаһҡа маҡтауҙар булһын!»* – тине.[48]

Артабан Аллаһ Рәсүле үҙен беҙҙең менән бер дәрәжәлә тотоп, уртабыҙға ултырҙы. Ҡулы менән ымлап:

*«Бына былай (түңәрәк яһағыҙ!)»* – тине.

Йәмәғәт шундуҡ Уның тирәһендә түңәрәкләп йыйылды һәм ҡараштарын Уға төбәне. Ниһәйәт, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм беҙгә ошо һөйөнөслө хәбәрҙе еткерҙе:

*«Әй меҫкен мөһәжирҙәр, һеҙгә һөйөнсө булһын! Һеҙгә ҡиәмәт көнөндә ып-ысын бер нур киләсәге тураһында һөйөнөслө хәбәр еткерәм. Һеҙ йәннәткә бай кешеләрҙән ярты көн алдараҡ керәсәкһегеҙ. Был ярты көн (донъя көндәре менән) биш йөҙ йылға тиң булыр»* (Әбү Дауыт, «Ғилем», 13/3666).

### Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ менән никахлашыуы

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән Ғәйшә әсәбеҙҙең никахы һижрәттән әүәл, Мәккәлә ваҡытта ҡылына, ләкин ысын ғаилә тормошо Мәҙинәлә генә башлана.

Хәҙрәти Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә былай тип иҫкә ала:

«Мәҙинәгә күсенгәндә, Аллаһ Рәсүле ҡыҙҙарын Мәккәлә ҡалдырған ине. Һуңыраҡ Зәйд ибне Харисә менән Әбү Рафиғты, ихтыяждары өсөн кәрәкле нәмәләрҙе алыу өсөн, ике дөйә һәм 500 дирһәм аҡса менән Мәккәгә ебәрә. Атайым Әбү Бәкер иһә Ғабдуллаһ ибне Урайҡытҡа ике-өс дөйә менән уларҙы оҙата барырға ҡуша. Әсәйем Өммө Руманды, мине һәм ҡыҙ туғаным Әсманы дөйәләргә ултыртып ебәрһен өсөн, туғаным Ғабдуллаһҡа хәбәр юллай.

Әбү Рафиғ Фатиманы, Өммө Гөлсөмдө һәм Сәүҙә бинте Зәмғаны; Зәйд иһә Өммө Әймәнде һәм уның улы Усамәне дөйәләргә ултыртты. Барыбыҙ

48. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ был һүҙе менән шунан бер аҙ алданыраҡ телгә алынған «Кәһеф» сүрәһенең 28-се аятын күҙ уңында тота, Унда Аллаһ Тәғәлә Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә беренселәрҙән исламға килгән фәҡир һәм ихлас бәндәләр менән бергә уларҙың башына төшөрҙәй ауырлыҡтарға сабыр итергә һәм был бәндәләргә ҡарата мөмкин ҡәҙәр йомшаҡ мөғәмәләлә булырға ҡуша.

бергәләп юлға сыҡтыҡ.[49] Минанан Бәйз тигән ергә барып еткәндә, дөйәбеҙ ҡасты. Беҙ хавдәж[50] (карета, паланкин) эсендә инек. Әсәйем: «Ай ҡыҙым, аһ киленем!» – тип ҡысҡырҙы. Аллаһ Тәғәлә дөйәбеҙҙе тынысландырып, беҙҙе һау-сәләмәт ҡотҡарып ҡалды.

Ниһәйәт, иҫән-имен Мәҙинәгә килеп еттек (Аллаһ Рәсүле менән никахыбыҙ Мәккәлә ҡылынган булһа ла), мин үҙ ғаиләмдә йәшәй инем. Ул ваҡыттарҙа мәсет һәм уның тирәһендәге бүлмәләр һалынған ине. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғаиләһе үҙ бүлмәләренә урынлашты. Бер аҙ ваҡыттан һуң атайым: «Йә Рәсүлүллаһ! Әһелең менән өйләнешеп йәшәүгә Һиңә нимә ҡомасаулай?» – тип һораны.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мәһәр»,* – тип асыҡланы.

Шунан һуң атайым Әбү Бәкер, ярҙам сифатында ун ике ярым укыййә[51] ебәргәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәһәремде биреп, шәүүәл айында миңә өйләнде.[52] Туй өсөн дөйә лә, ҡуй ҙа һуйылманы. Бары Сәғд ибне Ғубадә раҙыйаллаһу ғәнһү генә[53] Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләтү үәс-сәләмгә ҙур һауыт менән һый-ризыҡ ебәрҙе.[54]

### Мәҙинәләге хәл-әхүәлдәр

Ислам һәм мосолмандар өҫтөнлөк итә башлаған Мәҙинә осоро бөтә йыһанды яҡтыртҡан хаҡ диндең дөйөм донъя ҡағиҙәләре урынлашҡан һәм изге һуғыштарҙа шәһит һәм ғазиҙарҙың ҡандары менән нығытылған, шаҡтай хәрәкәтле, йәнле, рухи күтәренкелекле ваҡыт була.

---

49. **Хәҙрәти Зәйнәб** иһә әле мосолман булмаған ире Әбүл-Ғәс ибн Рәбиғ рөхсәт итмәгәнгә күрә, күпмелер ваҡытҡа Мәккәлә йәшәп ҡала.
50. **Хәвдәж** – ҡатындар атланып йөрөһөн өсөн дөйә өҫтөнә ҡуйылған кескенә ҡаплаулы эйәр, паланкин.
51. **Укыййә** – борон көмөш аҡса берәмеге. 1 укыййә яҡынса 128 грамм тәшкил итә. Укыййә бер үк ваҡытта ауырлыҡ үлсәү берәмеге булараҡ та ҡулланыла.
52. Ибне Сәғд, VIII, 58, 62-63.
53. **Сәғд ибне Ғубадә** раҙыйаллаһу ғәнһү Икенсе Ғәкәбә анты ваҡиғаһында мосолманға әйләнә. Унда һайлап алынған 12 вәкилдең береһе. Бик бай һәм йомарт зат. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хәлид ибне Зәйд йортонда ете ай дауамында ҡунаҡ булғанда, хәҙрәти Сәғд һәр көн ризыҡ ебәреп тора. Ҡәлғә рәүешендәге өйө була. Шунда йәшәп, һәр көн табынлы мәжлестәр уҙҙыра. Һәр кем шунда барып ашап-эсеп ҡайта. Суффә әсхәбен көн һайын һыйлай. Бик күп һуғыштарҙа хәзрәж ҡәбиләһенең байрағын күтәреп бара. Зу Карәд һуғышында ғәскәрҙе ашатыу өсөн, ун дөйә йөгө хөрмә бирә. Уның бындай хеҙмәтен баһалап, Пәйғәмбәребеҙ:
*«Аллаһым! Сәғдкә һәм Сәғд ғаиләһенә рәхмәтеңде ирештер!»* – тип доға ҡыла. Бәни Ҡурайза һуғышында Сәғд бөтә ғәскәрҙе ашата. Ғүмеренең ахырына ҡәҙәр йәне һәм малы менән дауамлы хеҙмәттә һәм йыһатта була. Мәҙинә тирәһендә бик күп ерҙәр, баҡсалар тота. Өйө Мәҙинәнең ситендәге мәхәлләлә урынлашҡан була. Мәсжиди Нәбигә йыраҡ булғанға күрә, шунда бер мәсет төҙөтә. Хәҙрәти Әбү Бәкерҙең хәлифәлегенән һуң, Дамаск яғындағы Хавран тигән ергә күсеп китә. 635 йылда шунда баҡыйлыҡҡа күсә. Гута ҡаласығында ерләнә.
54. Әхмәт, VI, 211.

Аллаһ Рәсүленә һәм мөһәжирҙәргә бөтә мөмкинлектәр тыуҙырып, ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алған Мәҙинә ҡалаһындағы шарттар башта тулыһынса ҡулай тип һанала алмай. Әле лә бер ҡосаҡ ҡурҡыныс янай, сөнки Мәҙинәлә ансар һәм мөһәжирҙәрҙән ҡала «монафиҡтар һәм йәһүдиҙәр» ҙә бар, улар иһә, һәр форсаттан файҙаланып, исламдың ҡаланы яулауына ҡомасауларға тырышалар.

Монафиҡтар, исламды тышҡы яҡтан ҡабул иткән кеүек күренһә лә, күңелдән иҫке ботпәрәслекте туҡтатмай. Нурын һис шикһеҙ тейешле урынына ирештерәсәк Аллаһ Тәғәлә уларҙы бик ҡырыҫ рәүештә киҫәтә:

وَمِمَّنْ حَوْلَكُم مِّنَ الْأَعْرَابِ مُنَافِقُونَ وَمِنْ أَهْلِ الْمَدِينَةِ مَرَدُوا عَلَى النِّفَاقِ لَا تَعْلَمُهُمْ نَحْنُ نَعْلَمُهُمْ سَنُعَذِّبُهُم مَّرَّتَيْنِ ثُمَّ يُرَدُّونَ إِلَى عَذَابٍ عَظِيمٍ

**«Әйләнә-тирәгеҙҙәге бәҙәүиҙәр араһында монафиҡтар һәм мәҙинәлеләр араһында ла монафиҡлыҡта киреләнеүселәр бар. Уларҙы Һин белмәҫһең, бары Беҙ генә белербеҙ. Уларҙы ике тапҡыр ғазапҡа тоторбоҙ, улар һуңынан да олуғ ғазапҡа тарырҙар»** («әт-Тәүбә», 101).

Ысындан да монафиҡтар ике йөҙлөлөктәрендә шул ҡәҙәр оҫталыҡҡа ирешәләр ки, уларҙың асыл хәлен ҡай сак Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә һиҙә алмай, бары Йәнәбел-Хаҡ асыҡлаған осраҡта ғына белә. Сөнки монафиҡтар үҙҙәренә әйтелә алырҙай иң ваҡ-төйәк тәнҡитте лә тойоп, шуны күҙ уңында тотоп, йәшерен һәм аҫтыртын эш йөрөтәләр.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙҙе һәм мөьминдәрҙе һижрәт ҡылырға мәжбүр хәлгә еткергән мәккәле мөшриктәр ҙә тик тормай, Мәҙинәләге монафиҡтар ҡабыҙған фетнә усағына яғыулыҡ һалып, уны көсәйтергә ынтылалар. Исламдың унда урынлашып, үҫешкә китеүе менән килешә алмайынса, Аллаһ динен һәм мосолмандарҙы юҡ итһендәр өсөн, монафиҡтарға әленән-әле хәбәр ебәреп торалар. Быны эшләмәгән осраҡта, барлыҡ ғәрәптәрҙе туплап, һөжүм яһарға, мөьминме, монафиҡмы, мөшрикме – айырып тормайынса, бөтә мәҙинәлеләрҙе ҡылыстан үткәреү менән янайҙар. Хатта уларҙың йөрәгенә ҡурҡыу һалып, мөьминдәргә ҡаршы тағы ла нығыраҡ ҡотортоу өсөн, бер юлбаҫарҙар төркөмө ебәреп, Мәҙинәләге көтөүҙәрен дә урлаттыралар.

Хәлдәр шул тиклем хәтәрләшә һәм шаҡтай ҡурҡыныс тыуҙыра. Мосолмандар төндәрен Мәҙинә урамдарында киҙеү тора һәм берәй һөжүм ихтималына ҡаршы һәр төрлө сараны алдан күрергә тырыша. Хатта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ ҙә төндәрҙе йоҡоһоҙ үткәрә. Мәҙинә ситтәренә ғәскәр төркөмдәре ебәрелеп, һәр яҡ күҙәтеп-тикшерелеп тора башлай.

Икенсе яҡтан иһә, мосолмандарҙың иң яуыз дошманы булған һәм һәр миҙгелдә форсат эҙләгән йәһүҙи ҡәбиләләре лә бар. Дини мәғлүмәттәргә тағы

ла элегерәк эйә булғанға күрә, мөьминдәр менән иң ҙур көрәште ана шулар алып бара һәм бик күп мәшәкәттәр тыуҙыра. Шул сәбәпле Мәҙинәлә иңдерелгән тәүге «Баҡара» сүрәһендә йәһүдиҙәрҙе исламға саҡырыу мәсьәләһенә айырыуса ҙур әһәмиәт бирелә. Ғөмүмән алғанда, барлыҡ кешеләрҙе дингә саҡырыу тураһында әйткәндән һуң, 40-сы менән 162-се аяттар араһында, һәм айырыуса 123-сө аятта Исраил улдары тураһында һөйләнә, сүрәнең яртыһынан күберәге тиерлек уларға бағышлана. Бында ҡай саҡ уларға мөрәжәғәт ителә, ҡай ваҡыт улар тураһында йәшерен (өсөнсө) зат исеменән бәйән ителә, ҡайһы саҡ фекерҙәре кире ҡағыла, ә ҡай ваҡыт үҙҙәренә бирелгән ниғмәттәр тураһында иҫкә төшөрөлөп, күңелдәрендә иманға ынтылыш уятыу теләге урын ала.[55]

❁

Йәһүди шағир Кәғб ибне Әшрәф, хәҙрәти Пәйғәмбәрҙән кәмһетеп көлөп, ҡөрәйеш мөшриктәрен Уға ҡаршы ҡоторта. Ҡөрәйештең мөшрик шағирҙары ла Аллаһ Рәсүленә ҡаршы шиғырҙар һөйләй. Ансарҙарҙың иң көслө шағиры Хәссән ибне Сабит раҙыйаллаһу гәнһү, мәккәле мөшриктәрҙән көлөү өсөн, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән рөхсәт һорай. Пәйғәмбәребеҙ рөхсәт бирә.[56]

Ул осорҙа шиғыр хәҙерге замандағы матбуғат кеүек ҡеүәтле йоғонтоға эйә була. Аллаһ Рәсүле, шағир Хәссән ибне Сабит өсөн мәсеттә махсус мөнбәр ҡуя. Хәссән унда, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде һүҙҙәр менән рәнйеткән кешеләрҙән көлөп, уларҙы рисуай итә. Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Аллаһтың Рәсүлен яҡлаған ваҡыт дауамында Рухүл-Ҡудүс (Ябраил) Хәссән менән бергәлер»,* – тип белдерә (Әбү Дауыт, «Әҙәп», 87/5015).

Йәһүдиҙәр һәм мөшриктәр Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ һәм сәхәбәләрҙе шул рәүешле яфалағанда, Аллаһ Тәғәлә Хәбибенә сабыр булырға һәм уларҙы ғәфү итергә ҡуша. Бәҙер һуғышына ҡәҙәр Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер көндө ауырыған Сәғд ибн Ғүбәҙәнең хәлен белергә барыу өсөн, ишәк менән юлға сыға, Усамә ибн Зәйдте артына ултырта. Юлда Ғабдуллаһ ибн Үбәй ибн Сәлүл дә ҡатнашҡан бер мәжлескә осрай. Ғабдуллаһ ибн Үбәй ул ваҡыттарҙа әле «мосолман булдым», тип ант итмәгән була (көфөрлөгөн йәшермәй, асыҡ күрһәтеп йөрөй). Мәжлестә төрлө дин вәкилдәре – мосолмандар, йәһүдиҙәр,ботҡа табыныусы мөшриктәр йыйылған. Ғабдуллаһ ибн Рәүаха ла мәжлестә була. Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ишәгенең туҙаны мәжлескә килеп еткәс, Ғабдуллаһ ибн Үбәй танауын кейем сите менән ҡаплап: «Беҙҙе туҙанға батырып йөрөмә», – ти.

55. Ҡарағыҙ: Драз, *«ән-Нәбәүл-Ғазим»,* 178 б.
56. Бохари, «Мәнаҡиб», 16; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сахабә», 156-157.

Аллаһ Рәсүле уларға сәләм биреп туҡтай, ишәгенән төшөп, уларҙы Аллаһҡа иман килтерергә саҡыра һәм Ҡөрьән уҡый.

Ғабдуллаһ ибн Үбәй: «Һәй әҙәм! Быларҙы һөйләп йөрөүең яҡшы эш түгел. Әгәр һөйләгән нәмәләрең дөрөҫ икән, мәжлесебеҙҙә беҙҙе яфалама, өйөңә ҡайт, быларҙы иһә һине тыңларға килеүселәргә аңлатырһың!» – ти.

Ғабдуллаһ ибн Рәүаха: «Киреһенсә, йә Аллаһтың Рәсүле! Һин беҙҙең мәжлестәребеҙгә кил, беҙ быны бик яратабыҙ», – тип әйтә.

Мосолмандар, мөшриктәр һәм йәһүдиҙәр бәхәсләшә-әйткеләшә башлай. Инде бер-береһенә ташланыр сиккә етә яҙалар, шул саҡ Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм уларҙы тынысландыра. Ике арала көсөргәнешлек тамамланғас, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хайуанына ултырып, юлын дауам итә һәм Сәғд ибн Ғүбәҙә янына килә. Уға ваҡиғаны бәйән итә. Сәғд: «Йә Рәсүлүллаһ! Уны ғәфү ит, юл ҡуй. Һиңә китап иңдереүсе Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ Һине Пәйғәмбәр итеп ебәргәндә, был ҡала халҡы, уны рәйес итеп һайлап, башына падишаһ тажы кейҙерергә килешкән ине. Аллаһ Һине хаҡ дин менән ебәреп, уның падишаһлығы томанда эреп юғалғас, ер йөҙө ысын-ысынлап уның өсөн тарайҙы, һулыш ала алмаҫ хәлгә килде. Моғайын, был ғәмәлдәре шуның менән бәйлелер», – тип аңлата.

Аллаһ Рәсүле Ғабдуллаһ ибн Үбәйҙең ҡыланмыштарын ғәфү итә. Әлеге ваҡиға уңайынан:

لَتُبْلَوُنَّ فِى أَمْوَالِكُمْ وَأَنْفُسِكُمْ وَلَتَسْمَعُنَّ مِنَ الَّذِينَ أُوتُوا الْكِتَابَ مِنْ قَبْلِكُمْ
وَمِنَ الَّذِينَ أَشْرَكُوا أَذًى كَثِيرًا وَإِنْ تَصْبِرُوا وَتَتَّقُوا فَإِنَّ ذَلِكَ مِنْ عَزْمِ الْأُمُورِ.

**«Тәхҡиҡ, һеҙ малдарығыҙ һәм йәндәрегеҙ мәсьәләһендә имтихан тотасаҡһығыҙ. Һеҙҙән әүәл үҙҙәренә китап бирелгәндәрҙән һәм мөшриктәрҙән йәбер-ғазап биреүсе күп һүҙҙәр ишетәсәкһегеҙ. Әгәр сабыр итһәгеҙ һәм Аллаһтан тейешенсә ҡурҡһағыҙ, дөрөҫлөктә, был – үжәтлек, маҡсатсанлыҡ талап иткән маҡтаулы эштәрҙән»,** – аяти кәримәһе («Әлү Ғимран», 186) иңдерелә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һәм сәхәбәләр әлеге аят иңгәнсе мөшриктәрҙән һәм китап әһелдәренән күргән төрлө ғазап-яфаларҙы сабырлыҡ менән ҡабул итеп, Аллаһтан ҡушылғанса, ғәфү ҡыла.[57]

### Һуғышҡа рөхсәт бирелеүе – «Һеҙгә һуғыш башлағандарға һеҙ ҙә һуғыш иғлан итегеҙ!»

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә баштағы мәлдә мөшриктәр менән һуғышырға рөхсәт бирелмәй. Мөшриктәрҙе Аллаһ Тәғәләнең берлеген

57. Бохари, «Тәфсир», 3/15.

танырға өндәү вазифаһы был юлда осраясаҡ ғазаптарға, яһилдарҙың ятышһыҙ эш-ғәмәлдәренә сабыр итеп, уларға бирешмәү, бындай ғәмәлдәргә күҙ йомоу менән бергә йөкләнгән була. Ҡөрәйеш мөшриктәре иһә Аллаһ Рәсүленә эйәреүселәрҙе диндәренән сығарыу өсөн төрлөнән-төрлө ғазаптарға, бәлә-ҡазаларға һала. Мосолмандарҙың ҡайһы берҙәре түҙә алмаҫлыҡ язалар арҡаһында диндәренән сығартыла, ҡай береһе дине хаҡына – Хәбәшистанға, ҡай береһе Мәҙинәгә күсенеп китә, тыуып-үҫкән ватандарын ташлап китергә мәжбүр була.

Ваҡиғалар сылбыры шундай бер юл менән бара башлай , Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ул көнгәсә нигеҙ итеп ҡулланған «сабырлыҡ һәм түҙемлек» сәйәсәте менән тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу мөмкин булмай. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сабырлыҡ һәм түҙемлектән һуң мөрәжәғәт иткән һаҡланыу ҡоралының да етерлек түгеллеген күреп, Раббыһына һыйына. Рәсүлүллаһ Унан вәхи көтә.

Ниһәйәт, мөшриктәр ғәйәт аҙғынлашып, Аллаһтың үҙҙәренә биргән ниғмәттәренә шөкөрһөҙлөк күрһәтеп, Рәсүлен инҡар иткән, мосолмандарҙы ауыр язаларға, ғазаптарға тотоп, үҙ тыуған ерҙәрендә тыныс йәшәргә мөмкинлек бирмәгән ваҡытта, динде, ватанды һәм мөьминдәрҙе һаҡлау өсөн бер заруриәткә әйләнгән йыһат аҙымына рөхсәт бирә торған аяти кәримәләр иңдерелә:

أُذِنَ لِلَّذِينَ يُقَاتَلُونَ بِأَنَّهُمْ ظُلِمُوا وَإِنَّ اللهَ عَلَى نَصْرِهِمْ لَقَدِيرٌ الَّذِينَ
أُخْرِجُوا مِنْ دِيَارِهِمْ بِغَيْرِ حَقٍّ إِلَّا أَنْ يَقُولُوا رَبُّنَا اللهُ وَلَوْلَا دَفْعُ اللهِ
النَّاسَ بَعْضَهُمْ بِبَعْضٍ لَهُدِّمَتْ صَوَامِعُ وَبِيَعٌ وَصَلَوَاتٌ وَمَسَاجِدُ يُذْكَرُ
فِيهَا اسْمُ اللهِ كَثِيرًا وَلَيَنْصُرَنَّ اللهُ مَنْ يَنْصُرُهُ إِنَّ اللهَ لَقَوِيٌّ عَزِيزٌ

**«Үҙҙәренә ҡаршы һуғышта булыусыларға** (мөьминдәргә), **золомға тарығанлыҡтары сәбәпле** (һуғышыу мәсьәләһендә), **рөхсәт бирелде. Һис шикһеҙ ки, Аллаһ уларға ярҙам итеүҙә ҡөҙрәтле. Улар – башҡаға ғибәҙәт ҡылмайса, «Раббыбыҙ – Аллаһ» тигән өсөн генә хаҡһыҙ рәүештә ил-йорттарынан ҡыуылған заттар. Әгәр Аллаһ бер төркөм кешеләре**(нең яманлыҡтарын) **башҡа бер төркөм менән һаҡлатмаһа, һис шикһеҙ, араларында Аллаһ исеме күп-күп телгә алынған монастырҙар, сиркәүҙәр, синагогалар һәм мәсеттәр емерелеп бөтөр ине. Аллаһ үҙенә** (free диненә) **ярҙам итеүселәрҙе бер ҡасан да ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫ. Дөрөҫлөктә, Аллаһ – ҡөҙрәтле, еңеүселер»** («әл-Хаж», 39-40).

وَقَاتِلُوا فِى سَبِيلِ اللّٰهِ الَّذِينَ يُقَاتِلُونَكُمْ وَلَا تَعْتَدُوا إِنَّ اللّٰهَ لَا يُحِبِّ الْمُعْتَدِينَ

**«Һеҙгә ҡаршы һуғыш башлағандарға һеҙ ҙә Аллаһ юлында һуғыш иғлан итегеҙ! Ләкин сикте уҙмағыҙ! Тәхҡиҡ, Аллаһ хаҡһыҙ ергә һөжүм итеүселәрҙе һөймәҫ»** («әл-Баҡара», 190).

Йәнәбел-Хаҡ һуғыштың ниндәй сәбәп һәм маҡсат менән алып барыласағы тураһында шундай хөкөмөн белдерә:

وَقَاتِلُوهُمْ حَتَّى لَا تَكُونَ فِتْنَةٌ وَيَكُونَ الدِّينُ كُلُّهُ لِلّٰهِ

**«Инде фетнә бөткәнсе һәм дин тамам Аллаһ дине генә булғансы улар менән һуғышығыҙ!..»** («әл-Әнфәл», 39).

Исламға һәм мосолмандарға ҡаршы алып барылған дошмандарса мөнәсәбәт нәтижәһендә яуға рөхсәт бирелә. Йәмғиәттең йәшәйешен һаҡлай алыу өсөн кәрәкле һәм «зарурат әл-хамсә» тип аталған биш ҡиммәттең, йәғни «мал, йән, нәҫел, аҡыл һәм дин»дең һаҡланыуы һәм дошман һөжүмдәренән яҡлау өсөн йыһат фарыз ҡылына. Әлеге илаһи әмер диндән баш тартып аҙашҡандарҙы язаға тартыуҙы һәм илаһи хәҡиҡәттәрҙең таратылыуы юлындағы ҡомасауҙарҙың алып ташланыуын маҡсат итеп ҡуя.

Ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәрелгән Пәйғәмбәрҙәр солтанының бөтә кешелекте солғаған киң мәрхәмәтенә ҡарамаҫтан, ҙур һәм ауыр яуҙарға сығыуы ижтимағи тыныслыҡ һәм именлекте тәьмин итеү һәм тәүхид көрәше өсөн заруриլыҡ менән бәйле була. Шул сәбәпле Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ бер хәҙис шәрифендә:

*«Мин – рәхмәт һәм һуғыш Пәйғәмбәремен!»* – тип белдерә (Әхмәт, IV, 396).

Йәнәбел-Хаҡ йыһатҡа рөхсәт һәм әмер биргән аяттары менән бер рәттән Рәсүлен һәм мөьминдәрҙе әлеге илаһи әмергә өндәй торған аяти кәримәләр ҙә иңдерә:

يَا أَيُّهَا النَّبِيُّ حَسْبُكَ اللّٰهُ وَمَنِ اتَّبَعَكَ مِنَ الْمُؤْمِنِينَ

يَا أَيُّهَا النَّبِيُّ حَرِّضِ الْمُؤْمِنِينَ عَلَى الْقِتَالِ

**«Әй Пәйғәмбәр! Һинең өсөн һәм Һиңә эйәреүсе мөьминдәр өсөн Аллаһ етер!** (Дошмандан бер ҡасан да ҡурҡма! Хатта,) **әй Пәйғәмбәр! Мөьминдәрҙе** (уларға ҡаршы) **һуғышҡа мауыҡтыр!..»** («әл-Әнфәл», 64-65).

أَلَا تُقَاتِلُونَ قَوْمًا نَّكَثُوا أَيْمَانَهُمْ وَهَمُّوا بِإِخْرَاجِ الرَّسُولِ وَهُمْ بَدَؤُوكُمْ أَوَّلَ مَرَّةٍ أَتَخْشَوْنَهُمْ فَاللهُ أَحَقُّ أَنْ تَخْشَوْهُ إِنْ كُنْتُمْ مُّؤْمِنِينَ قَاتِلُوهُمْ يُعَذِّبْهُمُ اللهُ بِأَيْدِيكُمْ وَيُخْزِهِمْ وَيَنْصُرْكُمْ عَلَيْهِمْ وَيَشْفِ صُدُورَ قَوْمٍ مُّؤْمِنِينَ وَيُذْهِبْ غَيْظَ قُلُوبِهِمْ.

«(Әй мөьминдәр!) **Биргән һүҙҙәрен боҙоп, Пәйғәмбәрҙе** (үҙ тыуған еренән) **ҡыуырға тырышҡан һәм, өҫтәүенә, башта үҙҙәре һеҙҙең менән һуғыша башлаған ҡәүемгә ҡаршы һуғышмайһығыҙмы? Улырҙан ҡурҡаһығыҙмы? Әгәр инанғанһығыҙ икән, белегеҙ, Аллаһ һеҙҙең Унан ҡурҡып тороуығыҙға тағы ла лайыҡ. Улар менән һуғышығыҙ, Аллаһ һеҙҙең ҡулдарығыҙ менән уларҙы яҙаландырһын, уларҙы оятҡа ҡалдырһын, һеҙҙе улар өҫтөнән еңеүсе ҡылһын, мөьминдәрҙең күңелдәрен елкендерһен һәм мөьминдәрҙең йөрәктәренән** (залимдарға ҡаршы урынлашҡан) **асыуҙы** (уларҙың хаҡын ҡайтарыу аша) **алһын!»** («әт-Тәүбә», 13-15).

Түбәндәге аяти кәримәләр менән бергә йыһаттан баш тартмау мәсьәләһендә киҫәтеүҙәр килә:

كُتِبَ عَلَيْكُمُ الْقِتَالُ وَهُوَ كُرْهٌ لَّكُمْ وَعَسَى أَنْ تَكْرَهُوا شَيْئًا وَهُوَ خَيْرٌ لَّكُمْ وَعَسَى أَنْ تُحِبُّوا شَيْئًا وَهُوَ شَرٌّ لَّكُمْ وَاللهُ يَعْلَمُ وَأَنْتُمْ لَا تَعْلَمُونَ.

**«Күңелегеҙгә хуш килмәһә лә, һуғыш һеҙгә фарыз ҡылынды. Оҡшатмаған нәмә күп осраҡта һеҙҙең өсөн хәйерле булырға мөмкин. Шулай уҡ үҙегеҙ яратҡан бер нәмә күп осраҡта һеҙҙең өсөн яманлыҡ була ала. Аллаһ белер, һеҙ белә алмаҫһығыҙ»** («әл-Баҡара», 216).

مَا كَانَ لِأَهْلِ الْمَدِينَةِ وَمَنْ حَوْلَهُمْ مِّنَ الْأَعْرَابِ أَنْ يَتَخَلَّفُوا عَنْ رَّسُولِ اللهِ وَلَا يَرْغَبُوا بِأَنْفُسِهِمْ عَنْ نَّفْسِهِ.

**«Мәҙинә халҡына һәм улар тирәһендә йәшәгән бәҙәүиҙәргә һуғышта Аллаһтың Пәйғәмбәренән артта ҡалыуҙары һәм Уның йәненән әүәл үҙ йәндәре тураһында уйлауҙары килешмәҫ!..»** («әт-Тәүбә», 120).

قُلْ إِنْ كَانَ آبَاؤُكُمْ وَأَبْنَآؤُكُمْ وَإِخْوَانُكُمْ وَأَزْوَاجُكُمْ وَعَشِيرَتُكُمْ وَأَمْوَالٌ اقْتَرَفْتُمُوهَا وَتِجَارَةٌ تَخْشَوْنَ كَسَادَهَا وَمَسَاكِنُ تَرْضَوْنَهَا أَحَبَّ إِلَيْكُمْ مِّنَ اللهِ وَرَسُولِهِ وَجِهَادٍ فِى سَبِيلِهِ فَتَرَبَّصُوا حَتَّى يَأْتِيَ اللهُ بِأَمْرِهِ وَاللهُ لَا يَهْدِى الْقَوْمَ الْفَاسِقِينَ.

«(Эй Рәсүлем!) **Әйт: «Әгәр аталарығыҙ, улдарығыҙ, туғандарығыҙ, ҡатындарығыҙ, яҡын һәм йыраҡ ҡәрҙәштәрегеҙ, эшләп алған малдарығыҙ, уңышһыҙлыҡҡа, килемһеҙлеккә тарыуынан ҡурҡҡан сауҙағыҙ, күңелегеҙгә хуш килгән йорттар һеҙгә Аллаһтан, Уның Рәсүленән һәм Аллаһ юлында йыһат ҡылыуҙан һөйөклөрәк, ҡәҙерлерәк икән, инде Аллаһ әмере килгәнсегә ҡәҙәр, көтөгөҙ! Аллаһ боҙоҡтар йәмғиәтен һидәйәткә ирештермәҫ!»** («әт-Тәүбә», 24).

Әлеге илаһи күрһәтмәләрҙән һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм Уға эйәреүсе мөьминдәр мөшриктәргә ҡаршы һуғышыу өсөн һәр яҡтан етди әҙерлеккә керешә.

**Аллаһ юлында йыһат**

Ғөмүмән алғанда, «йыһат» кешенең нәфесен ағартыу һәм тәрбиәләү менән шөғөлләнеүе, Аллаһ ҡушҡандарҙы ихлас менән үтәүе, харамдарҙан тыйылыуы,[58] мосолман ҡәрҙәшенә үгет-нәсихәт ҡылыуы, мосолман булмаған берәүгә исламды дәлилдәр менән аңлатып, уны күндереүе[59] һәм бәндәнең динен, намыҫын, йәнен, ватанын, нәҫелен, мал-мөлкәтен һаҡлау, исламды таратыу һәм быға ҡомасау тыуҙырған кәртәләрҙе алып ташлау өсөн, йән, мал, тел һәм башҡа бөтә мөмкинлектәр менән көрәшеү һәм һуғышыу тигән мәғәнәләр белдерә.[60] Шуға күрә «йыһат» һүҙе, үҙ-үҙеңде үҙгәртеп, «иғла-и кәлимәтуллаһ» (Аллаһ динен күтәреү) хаҡына шәхес һәм йәмғиәт сифатында исламды тормош рәүешенә әйләндереү маҡсаты менән, Аллаһ Тәғәлә ризалығы өсөн сарыф ителгән бөтә тырышлыҡтарҙы, башҡарылған ғәмәлдәрҙе солғай. Был тарафтан ҡарағанда, Аллаһ Рәсүленең егерме өс йыллыҡ пәйғәмбәрлек ғүмере тулыһынса шул маҡсатта уҙған, тип белдереү һис тә арттырыу һаналмаҫ.

Аллаһ Тәғәлә йән һәм мал ниғмәтен бер имтихан өсөн сәбәп итеп ҡыла һәм быларҙы Үҙ юлында йыһат ҡылыу өсөн ҡулланыуыбыҙ кәрәклеге тураһында бер нисә тапҡыр иҫкә ала. Мәҫәлән, был хаҡтағы аяти кәримәләрҙә былай тип әйтелә:

لَكِنِ الرَّسُولُ وَالَّذِينَ آمَنُوا مَعَهُ جَاهَدُوا بِأَمْوَالِهِمْ وَأَنْفُسِهِمْ
وَأُولَئِكَ لَهُمُ الْخَيْرَاتُ وَأُولَئِكَ هُمُ الْمُفْلِحُونَ

**«Пәйғәмбәр һәм Уның менән бергә иман килтереүселәр малдары һәм йәндәре менән йыһат ҡылдылар. Бына бөтә сауаптар уларҙыҡы һәм улар – ҡотолоуға ирешеүселәрҙең нәҡ үҙҙәре»** («әт-Тәүбә», 88).

58. Нәсаи, «Хаж», 4.
59. Әхмәт, III, 456.
60. Был мәсьәлә менән бәйле аяттарҙы белеү өсөн ҡарағыҙ: «ән-Ниса» , 95; «әл-Әнфәл», 72; «әт-Тәүбә», 20, 41, 44, 81, 88. Хәҙис шәрифтәрҙе ҡарағыҙ: Бохари, «Мәзалим», 33; Мөслим, «Иман», 226; Әбү Дауыт, «Сөннәт», 28-29.

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا هَلْ أَدُلُّكُمْ عَلَى تِجَارَةٍ تُنجِيكُمْ مِّنْ عَذَابٍ أَلِيمٍ. تُؤْمِنُونَ بِاللّٰهِ وَرَسُولِهِ وَتُجَاهِدُونَ فِى سَبِيلِ اللّٰهِ بِأَمْوَالِكُمْ وَأَنْفُسِكُمْ ذَلِكُمْ خَيْرٌ لَّكُمْ إِنْ كُنْتُمْ تَعْلَمُونَ.

**«Эй иман килтереүселәр! Һеҙҙе әрнеткес ғазаптан ҡотҡарасаҡ сауҙаны күрһәтәйемме? Аллаһҡа һәм Рәсүленә иман килтереп, малдарығыҙ һәм йәндәрегеҙ менән Аллаһ юлында йыһат ҡылырһығыҙ. Әгәр белһәгеҙ, был һеҙҙең өсөн хәйерлерәк»** («әс-Сафф», 10-11).

Бер көндө әсхәбе кирам Йәшәйеш нуры Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙән: «Йә Рәсүлүллаһ, хәйерле кеше кем ул?» – тип һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә:

*«Йәне һәм малы менән Аллаһ юлында йыһат ҡылған мөьмин»,* – тип асыҡлай (Бохари, «Йыһат», 2; Мөслим, «Имарәт», 122).

Аяти кәримәләрҙә һәм хәҙис шәрифтәрҙә белдерелгән мал һәм йән менән йыһаттың маҡсаты ҡорал менән һуғышыу ғына түгел. Сөнки ҡорал – золомдо бөтөрөү, хаҡлыҡты таратыу кеүек зарурат хәлдәрендә ҡулланыла торған сара. Ысын еңеү ул – күңелдәрҙе яулау, уға иһә төрлө-төрлө саралар менән, беренсе урында, һүҙле һәм яҙыулы тәблиғ (динде таратыу) ысулы менән ирешергә мөмкин.

Әйтәйек, йыһат аяттары шаҡтай күп иңгән Мәккә осоронда мөьминдәрҙең әле һуғышырлыҡ етди көсө булмай. Улар яһиллыҡ дәүере бәндәләренең терроры на ҡаршы исламды, йәғни кешелеклелекте, дөрөҫлөктө, ғәҙеллекте таратыу һәм шуларға өндәү өсөн, бары үрнәк мөьмин сифаттарын күрһәтеп кенә эш йөрөтә алалар. Ҡөрьәни-Кәрим уларҙың был хәлен «олуғ йыһат» тип атай. Аяти кәримәлә:

فَلَا تُطِعِ الْكَافِرِينَ وَجَاهِدْهُمْ بِهِ جِهَادًا كَبِيرًا

**«Кафырҙарға һис буйһонма! Һәм быното** (Ҡөрьән) **менән уларға ҡаршы олуғ йыһат үрнәге күрһәт!»** – тиелә («әл-Фурҡан», 52).

Аятта телгә алынған «جِهَادًا كَبِيرًا» тәғбире – исламдың еңеү яулауы, йәғни кешелектең һидәйәт һәм именлеккә ирешеүе юлында бөтә мөмкинлектәрҙе һәм сығанаҡтарҙы эшкә егеү һәм Аллаһ динен юғары күтәреү өсөн хәлдән-көстән килгән ҡәҙәр тәблиғ ҡылыу тигән һүҙ. Ысындан да тәблиғ ысулы менән йыһат алып барыу дошманға ҡаршы ҡорал менән һуғышыуға ҡарағанда мөһимерәк һәм файҙалыраҡ. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ҙә тәүге йылдарҙа йыһатын Ҡөрьәни-Кәрим менән генә тормошҡа ашыра.

Ҡөрьәни-Кәримдә кешеләрҙе һидәйәткә илтеү маҡсаты менән «Аллаһ юлында йыһат ҡылыу» тураһында бик күп урында телгә алына. Ләкин уларҙың сикләнгән һандағы бер өләшөндә генә «ҡайнар һуғыш» тип аталған үлтереш тураһында әйтелә, унынын да бары заруриәт осрағында ғына ҡулланыу тураһында һүҙ бара ала.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡатнашҡан бәрелештәр, дөйөм алғанда, һаҡланыу һуғышы булып тора. Бәҙер, Өхөд һәм Хәндәк һуғыштарындағы кеүек... Мөьтә һәм Тәбүк һуғыштары ихтимал һөжүмде булдырмаҫ өсөн ғәмәлгә ашырылған һаҡланыу сараһы һанала. Мәккәне яулап алыу иһә мосолмандарҙың кәмһетелгән, ҡыҫырыҡланған хаҡтарын торғоҙоу ниәте һәм мәккәлеләрҙең мосолмандар менән ҡылған килешеү шарттарын боҙоуҙары менән бәйле. Йәғни «Рәхмәт Пәйғәмбәре» булған Аллаһ Рәсүленең барлыҡ һуғыштарының нигеҙендә киң мәрхәмәт һәм ғәҙеллек төшөнсәһе ята һәм был һуғыштар кешелек өсөн рәхмәткә әйләнә. Сөнки исламда һуғыштың төп маҡсаты – кешеләрҙе үлтереү ҙә,[61] ғәниməттәр ҡулға төшөрөү ҙә, ерҙәрҙе талау, хәрәбәгә әйләндереү ҙә, шәхси мәнфәғәттәрҙе ҡайғыртыу ҙа, матди байлыҡҡа эйә булыу йәки үс алыу ҙа түгел; киреһенсә, золомдо бөтөрөү, иман иреген тәьмин итеү, кешеләрҙе һидәйәткә илтеү һәм һәр төрлө хаҡһыҙлыҡҡа нөктә ҡуйыу.

Аллаһ Рәсүленең барлыҡ һуғыштарын гөмүм күҙлектән ҡарағанда, шул раҫланыр: һаҡланыу һәм «иғла-и кәлимәтуллаһ», йәғни Аллаһ динен юғары күтәреү ниәтенән ҡала, исламда башҡа маҡсат менән алып барыла торған

---

61. Ғаләмдәргә рәхмәт итеп ебәрелгән Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғазәуат рәүешендәге 29 изге һуғыш һәм 91 хәрби отряд походы ойоштора. Ошо барлығы 120 һуғыш операцияһында Ул шундай мәрхәмәтлек сәйәсәте алып бара ки, бөтә Ғәрәп ярымутрауын үҙ ҡул аҫтына алған хәлдә лә, мосолман ғәскәрҙәрендә лә, дошман армияһында артыҡ күп ҡан түгелеүенә юл ҡуймай. Аллаһ Рәсүленең 11 йыл дауамында төрлө сәбәптәр арҡаһында тормошҡа ашырған эреле-ваҡлы 120 хәрби операцияһында, сахих (дөрөҫ) риүәйәттәргә күрә, мосолмандарҙан яҡынса 340тан артыҡ кеше шәһит китә. Дошмандарҙың юғалтыуҙары яҡынса 800ләп кеше була. Йәғни эреле-ваҡлы 120 һуғышта үлеүселәр һаны йәмғеһе ни бары 1200 кеше тәшкил итә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ шәхсән ҡатнашҡан һуғыштарҙы нигеҙ итеп алһаҡ, ысынға ашҡан 29 ғазәуаттың 16һында асылда бер ниндәй ҙә бәрелеш булмай, ләкин ҡуйылған маҡсатҡа ирешелә. 13 һуғышта иһә туранан-тура бәрелеш була һәм мосолмандарҙан 140лап кеше шәһит китә, дошман ғәскәрҙәренең яҡынса 335 кешеһе үлтерелә.

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ күп осраҡтарҙа бәрелештәр башланыуға юл ҡуймайынса, һиҙгерлек һәм үткенлек менән тулы аҡыллы сәйәсәт алып бара, шул рәүешле кешеләрҙе үҙенә эйәртеүгә ирешә. Шулай уҡ бер нисә территорияны халҡын һидәйәткә илтеү юлы менән яулап ала һәм был ысулға өҫтөнлөк биреп, ҡорал ҡулланыуҙан мөмкин ҡәҙәр тыйыла. Ҡайһы саҡ сәйәсәт һәм дипломатияны көслө разведка эшсәнлеге менән берләштереп, дошманды һуғышыуҙан баш тарттырыуҙа уңышҡа ирешә һәм шул рәүешле ҡан ҡойоуҙың иң әҙ дәрәжәлә булыуын тәьмин итә. Һуғыш уңай нәтижә менән тамамланһын өсөн, ғәскәр командирҙарының тыумышы үҙҙәре ебәрелгән төбәктән булыуына йәки дошман ҡәбилә вәкиле булыуына өҫтөнлөк бирелә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шулай уҡ ғәскәрҙәрен һүҙҙә торорға, сиктән ашмаҫҡа, анттарын боҙоп золом һалмаҫҡа, кешеләрҙе сәбәпһеҙ үлтермәҫкә, айырым алғанда, ҡолдарға, балаларға, ҡатын-ҡыҙҙарға һәм монастырҙа монахлыҡ юлын һайлағандарға ҡағылмаҫҡа, хөрмә баҡсаларына зарар килтермәҫкә, ағастарҙы киҫмәҫкә һәм биналарҙы емермәҫкә өндәй (Ҡарағыҙ: Әлшад Махмудов, *Сәбәп һәм нәтижәләре яғынан хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең һуғыштары,* 2005, Мармара университетының социаль фәндәр институты, баҫылмаған докторлыҡ диссертацияһы).

һуғыш юҡ. Бары территория яулап алыу өсөн генә барған һуғыштар – кешелектең йөҙөн ҡаралтҡан бер золом ул. Исламда һуғыш дөрөҫлөктө таратыу, һидәйәткә сәбәп булыу һәм золомдо юҡҡа сығарыу кеүек юғары маҡсаттарға нигеҙләнә. Ҡөрьән һүҙе менән әйткәндә:

مَنْ قَتَلَ نَفْسًا بِغَيْرِ نَفْسٍ أَوْ فَسَادٍ فِى الْأَرْضِ فَكَأَنَّمَا قَتَلَ
النَّاسَ جَمِيعًا وَمَنْ أَحْيَاهَا فَكَأَنَّمَا أَحْيَا النَّاسَ جَمِيعًا

**«…Кем һис берәүҙе үлтермәгән йәки ер йөҙөндә боҙоҡлоҡ таратмаған бер йәнде ҡыйһа, бөтә кешеләрҙе үлтергән кеүек булыр. Кем иһә бер йәндең иҫән ҡалыуына сәбәп булһа, бөтә кешеләргә тормош бүләк иткән кеүек булыр»** («әл-Мәидә», 32).

Бына ошо сик-ҡағиҙәләр ҡыҫаһында һәм ислами ниәттәр хаҡына мөьминдәрҙең малдары һәм йәндәре менән тормошҡа ашырасаҡ һәр төрлө тырышлығы һәм фиҙакәрлеге, йәннәтте һатып алыу кеүек, Хаҡ Тәғәлә ҡаршында олуғ илаһи бүләккә ирешергә булышасаҡ. Фәҡәт һәр мәсьәләләге кеүек, был осраҡта ла ихлас бик мөһим. Ғабдуллаһ ибн Ғәмр разыйаллаһу ғәнһү тапшырғандарҙан:

«Йә Рәсүлүллаһ! Миңә йыһат һәм ғазүә (изге һуғыш) тураһында һөйлә», – тигәс, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Эй Ғабдуллаһ! Әгәр һин Аллаһ ризалығын өмөт итеп һәм ҡыйынлыҡтарға түҙеп һуғышһаң, Аллаһ һине ҡиәмәт көндө, шул хәлеңде иҫкә алып, терелтер. Әгәр һин кеше күрһенгә һәм маҡтаныу өсөн һуғышһаң, Аллаһ та һине ҡиәмәт көнө шул хәлгә лайыҡлы итеп терелтер»*, – тип аңлатты (Әбү Дауыт, «Йыһат», 24/2519).

Башҡа бер риүәйәттә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янына бер бәҙәүи килеп: «Хөрмәт, абруй ҡаҙаныу, маҡтауҙар алыу, ғәнимәт алыу йәки кеше күрһен өсөн һуғышҡан кеше хаҡында ни әйтерһең?» – тигән һорау бирә. Башҡа береһе: «Йә Рәсүлүллаһ! Аллаһ юлында һуғышыу ни тигән һүҙ? Ҡайһыһы асыу-нәфрәт менән, ҡайһыһы ватанын, ғаиләһен яҡлау-һаҡлау өсөн һуғыша», – тип һорай.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Кем Аллаһ дине иң бөйөк дин булһын, тигән ниәт менән генә һуғышһа, бына уның йыһаты Аллаһ юлында булыр!»* – тип аңлата (Бохари, «Ғилем», 45; Мөслим, «Имарә», 149-150).

Бүтән берәү: «Йә Рәсүлүллаһ! Бер әҙәм Аллаһ юлында һуғышып, шул уҡ ваҡытта донъя малынан ниндәйҙер нәмәләр булдырырға теләһә, быға ни әйтерһегеҙ?» – тип һорағас, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Уға бер әжер-сауап та юҡ!»* – тип белдерә.

Был яуапты әсхәбе кирам бик ауыр ҡабул итә (сөнки был дәрәжә ихлас эйәһе була алыу бик ҡыйын). Улар теге һорауҙы биргән сәхәбәгә мөрәжәғәт итә: «Һин Рәсүлуллаһтан ҡабат һорап ҡара әле. Бәлки, яуапты бик яҡшы аңламағанһыңдыр» (Сөнки сәхәбәләр бер аҙ еңеллек бирә торған яуап ишетергә өмөтләнә). Бындай хәлдән һуң ул бәндә һорауын өс тапҡыр ҡабатлай. Әфәндебеҙ барыһында ла:

*«Уға сауап юҡ!»* – тип яуап бирә (Әбү Дауыт, «Йыһат», 24/2516).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең мөбәрәк ауыҙынан Аллаһ юлында йыһаттың фазиләте тураһында бик күп хәҙис шәриф әйтелә. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре:

*«Бер көн һәм бер төн сик һаҡлап киҙеү тороу – көнө ураҙалы, төнө ғибәҙәтле уҙҙырылған бер айҙан хәйерлерәк. Әгәр кеше был киҙеү ваҡытында үлһә, ул башҡара торған эш өсөн әжере һәм сауабы ҡиәмәткәсә туҡталмаç, шәһит буларак ризығы ла дауам итер һәм ҡәберҙәге һорау алыу фәрештәләре ҡаршында ла тыныслыҡта булыр»* (Мөслим, «Имарә», 163).

*«Аллаһ юлында бер көн сик һаҡлау донъянан һәм донъялағы барлыҡ нәмәләрҙән хәйерлерәк. Һеҙҙән берегеҙҙең ҡамсыһының йәннәттәге урыны донъянан һәм донъялағы барлыҡ нәмәләрҙән хәйерлерәк. Ҡолдоң кисен йәки иртә таң ваҡытында Аллаһ юлында йөрөүе лә донъянан һәм донъялағы барлыҡ нәмәләрҙән хәйерлерәк»* (Бохари, «Йыһат», 6, 73, «Рикак», 2; Мөслим, «Имарә», 113-114).

*«Аллаһ Тәғәлә үҙ юлында йыһатҡа сыҡҡан затҡа: «Уны бары Минең юлымда «йыһат», Миңә «иман», Минең рәсүлдәремде таныу изге юлға сығарҙы», – тип яҡлаусы тәьмин итеүсе булыр. Аллаһ ул кешене, шәһит китһә, йәннәткә кертергә, ғази булһа, рухи әжергә һәм донъялыҡ ғәнимәтенә ҡауыштырып өйөнә ҡайтарырға тәьмин итеүсе булыр. Мөхәммәттең йәнен Үҙ ҡөҙрәте менән ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ юлында алынған бер йәрәхәт ҡиәмәт көнөнә шул яраланған көндәгесә килер: төçө – ҡан төçө, еçе миск (хушбуй) еçе булыр»* (Мөслим, «Имарә», 103; Нәсаи, «Иман», 24).

*«Йәннәткә кереүсе һис кем донъяға кире ҡайтырға теләмәç. Ер йөҙөндәге һәр нәмә (бер нисә тапҡыр артығы менән) унда ла барҙыр. Ләкин шәһит кеше, күргән һыйҙары сәбәпле, донъяға ун тапҡыр ҡайтып, һәр тапҡырында шәһит китеүҙе теләр»* (Бохари, «Йыһат», 21; Мөслим, «Имарә», 108-109).

Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ Аллаһ юлында күрһәткән тырышлыҡтарын һәм изге һуғыштарының ниәтен былай тип белдергән:

*«Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Мөхәммәттең Аллаһ Рәсүле булғанына шаһитлыҡ килтергәс, намаҙ ҡылып, зәкәт түләй башлағансыға ҡәҙәр, кешеләр менән һуғышыу миңә әмер ителде. Улар быны ҡабул иткәс, ислам асыҡлаған язаларҙан тыш, йәндәрен һәм малдарын ҡулымдан ҡотҡарған булырҙар»* (Бохари, «Иман», 17). Шул сәбәпле Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи

үә сәлләм төндә һөжүмдәр яһамаған, иртән аҙан тауышы ишетһә, туҡтай торған була.[62] Яуға ебәргән ғәскәриҙәргә лә:

*«Бер мәсет күргән йәки мәзиндең тауышын ишеткән сакта, унда һис кемде үлтермәгеҙ!»* – тип бойора (Әбү Дауыт, «Йыһат», 91/2635; Әхмәт, III, 448-449).

Мөслим ибн Харис раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм беҙҙе бер ғәскәр төркөмө менән ебәргән ине. Һөжүм итергә тейешле ергә килеп еткәндә, атымды ҡыуалап, иптәштәремде уҙҙым. Ярҙам һорап ялбарған ҡатын-ҡыҙҙар һәм балаларҙы осраттым. Уларҙан: «Йәнегеҙҙе ҡотҡарып ҡалырға теләйһегеҙме?» – тип һораным. «Эйе», – тип раҫланылар. «Улайһа «Лә иләһә илләллаһ Мүхәммәдүн Рәсүлүллаһ», тип әйтегеҙ ҙә иҫән-имен ҡотолоғоҙ», – тинем. Улар иһә мин әйткәнде ҡабатланы. Иптәштәремдән ҡайһы берҙәре: «Һин беҙгә ғәнимәтте харам ҡылдың», – тип, был ғәмәлем арҡаһында мине шелтәләнеләр. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына ҡайтҡас, шул эшем тураһында Уға еткерҙеләр. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мине саҡырып, ғәмәлемә бәйә бирҙе лә:

*«Һис шикһеҙ, Аллаһ һиңә улар араһынан һәр кеше өсөн фәлән-фәлән хәтле сауап яҙҙы»,* – тип хәбәр итте» (Әбү Дауыт, «Әҙәп», 100-101/5080).

Бүрәйдә раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ берәй ғәскәр төркөмөн йыһат һуғышына ебәргән саҡта, уларҙың ғәскәр башлығына Аллаһ ҡаршында тәҡүәле, үҙ янындағы мосолмандарға ҡарата хәйерле булыуын һәм яҡшы мөғәмәлә һаҡлауын кәңәш итә, ахырҙа былай тип нәсихәт бирә:

*«Аллаһ исеме менән Аллаһ юлында ғаза ҡылығыҙ. Аллаһты танымаусылар менән һуғышығыҙ. Ғәнимәт малдарға хыянат итмәгеҙ. Золом ҡылмағыҙ. танауҙар, ҡолаҡтар киҫмәгеҙ. Балаларҙы үлтермәгеҙ. Мөшрик дошмандарығыҙ менән осрашкан ваҡытта, уларҙы түбәндәге өс нәмәнән береһен ҡабул итергә саҡырығыҙ:*

*1. Уларҙы исламға өндәгеҙ. Ризалыҡ бирһәләр, үҙҙәрен иреккә ебәрегеҙ.*

*2. Әгәр исламды ҡабул итмәһәләр, уларҙы жизйә түләргә саҡырығыҙ. Быға ризалашһалар, уларҙы иректә ҡалдырығыҙ.*

*3. Әгәр жизйә түләүгә лә ҡаршы килһәләр, Аллаһтан ярҙам һорап, улар менән һуғышығыҙ!..»* (Мөслим, «Йыһат», 3; Тирмизи, «Сийәр», 48/1617; Әхмәт, V, 352, 358).

## Ҡайһы бер хәрби яуҙар

Мәҙинәләге мосолмандарҙы тынысһыҙлаған, ғөмрә ҡылыуҙарына ҡомасаулаған һәм монафиҡтарҙы мөьминдәргә ҡаршы ҡотортҡан мәккәлеләрҙең

62. Бохари, «Аҙан», 6; Мөслим, «Саләт», 9.

Сүриәгә бара торған сауҙа юлдарын өҙөп,[63] Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уларҙы иҡтисади яҡтан ҡыҫырыҡлау ысулы ярҙамында, мосолмандарға ҡаршы көсәйеүҙәренә кәртә ҡуйырға теләй.[64] Һижрәттән ете ай уҙғас, рамаҙан айында, Аллаһ Рәсүле ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм шул маҡсат менән Хәҙрәти Хәмзә разыйаллаһу ғәнһүгә ярҙамға 30 мөһәжир биреп, Сыйф әл-Бәхергә[65] ебәрә (8 -се рәжәб / 629-сы йылдың ноябрь-декабрь айҙары).

Дамасктан Мәккәгә ҡайтыусы сауҙа каруанының 300 яйҙаҡ һағында Сиф-үл-Бәхергә килгән сағы. Араларында Әбү Жәһил дә була. Һуғышыу өсөн сафтарға теҙелеп баҫҡан ваҡытта, ике яҡтың да дуҫы һәм иптәше булған Мәжди ибне Ғамр, араға кереп, бәрелештән тыйып ҡала. Аллаһ Рәсүле саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәждиҙең аралашсылыҡ ҡылып, бәрелеште туҡтатып ҡалыуына ризалыҡ белдерә һәм, был ғәмәлен юғары баһалап, ул ебәргән илселәргә кейем-һалым бүләк итә.[66]

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һижрәттән һуң 8-се ай башында, шәүүәл айында, Ғубәйдә ибне Харис разыйаллаһу ғәнһүҙе шундай уҡ маҡсат менән Рабиғҡа[67] юллай. Ҡул аҫтында 60 йәки 80 тирәһе мөһәжир була. 200 кеше самаһы ҡөрәйешлеләр менән Әбү Суфьян етәкселек итә. Һуғышыу өсөн улар сафтарға ла теҙелеп тормай, ҡылыстар ҙа сығарырға өлгөрмәй. Ике арала еңелсә генә этешеп-төртөшөп, асыҡтан-асыҡ рәүештә уҡ атышып ҡына алалар. Сәғд ибн Әби Вәҡҡас разыйаллаһу ғәнһү ул көндө беренсе уҡты ата һәм шул рәүешле исламда беренсе уҡ атыусы исемен ала. Мөшриктәр мосолмандарға ярҙамсы көстәр киләсәк, тип уйлап, ҡурҡыуға төшә һәм ҡаршы яҡтар айырылыша.

Исламды ҡабул иткән хәлдә лә, шул көнгә саҡлы Аллаһ Рәсүле янына килер яй тапмаған Миҡдад ибн Ғәмр менән Ғүтбә ибн Ғәзүән, шул

63. Аллаһ Рәсүле саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәүге көндәрҙә ҡөрәйеш мөшриктәренең дошманлығын бөтөрөү өсөн, уларға ҡарата иҡтисади һәм сәйәси эмбарго ысулын ҡуллана. Ошо маҡсатта тирә-яҡтағы ҡәбиләләр менән дипломатик элемтәләр урынлаштыра, төрлө килешеүҙәр төҙөй һәм Мәккә сауҙаһы һәм иҡтисадының төп тамырын тәшкил иткән ҡөрәйеш мөшриктәре каруандарын эҙәрлекләү өсөн бер нисә газәуат ойоштора һәм һуғышсан отрядтар ебәрә.
Мөхәммәт Хәмиҙуллаһ был хаҡта былай тип бәйән ҡыла: «Ҡөрәйешлеләрҙең каруандарына һөжүмдәрҙе яп-ябай талау тип бәйәләү дөрөҫлөккә тура килмәй, сөнки ҡөрәйешлеләр ҙә гөнаһһыҙ түгел, һөжүм итеүселәр ҙә шул маҡсатта ғына тупланған төркөм булмай. Ике шәһәр-дәүләт араһында хәл бөтә шарттары менән һуғыш дәрәжәһенә килеп етә. Һуғыш хәле иһә ҡаршы яҡтар араһында йәнме, малмы йәки дошмандың башка мәнфәғәттәреме – уларға зыян һалыу хокуғын бирә.Тимәк, ике йәмғиәт араһында «һуғыш ваҡыты ҡағиҙәләре» ғәмәлгә инә. Әлеге шарттарға күрә, төрлө ғәскәри походтар ябай мәғәнәләге каруан туҡтатыу һәм талау операцияһы булыуҙан алыҫ тора. Бында иғътибар итеү кәрәкле тағын бер мәсьәлә – был маҡсат менән ҡылынған барлыҡ хәрби походтарҙа мосолмандарҙың бары каруандарға һәм бары мәккәлеләрҙең каруандарына ғына һөжүм итеүҙәре. Бындай һөжүмдәрҙән, мосолман булмаһалар ҙа, илдең бүтән халыҡтары һис зыян күрмәй (Ҡарағыҙ: Хәмиҙуллаһ, *Ислам пәйғәмбәре,* I, 219; *Хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең һуғыштары,* 56 б.)
64. Бохари, «Мәғази», 2; Әбү Дауыт, «Хараж», 22-23/3004.
65. **Сиф-үл-Бәхер** – Ғыйс төбәгендәге Жүһәйниҙәрҙең ере. Диңгеҙ ярындағы бер ялан ер булғанға, шундай исем бирелә.
66. Ваҡыди, I, 9-10; Ибне Сәғд, II, 6.
67. **Рабиғ** – Мәккәгә барғанда хажиҙар уҙып китә торған, Әбүә менән Жухфә араһында урынлашҡан бер үҙәнлек, Жухфәнән 3 миль йыраҡлыҡта.

теләктәренә ирешеү өмөтө менән мөшриктәргә эйәреп, юлға сыҡҡан булалар. Мосолмандарҙы күреүгә, мөшриктәрҙән ҡасып, мөьминдәр сафына күсәләр.[68]

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә һижрәттән 9 ай һуңыраҡ, зөлҡәғизә айында, Сәғд ибне Әби Вәҡҡас раҙыйаллаһу ғәнһүҙе 8 йәиһә 20 кеше менән Харрарға[69] ебәрә (1-се йылдың зөлҡәғизәһе / 623 йылдың майы).

Сәғд раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип һөйләй:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм миңә:

*«Әй Сәғд! Харрарға еткәнсе бар! Сөнки ҡөрәйешлеләр каруаны шунан уҙасаҡ»*, – тип бойорҙо.

Көндөҙ йәшеренеп, кистәрен алға атлау ниәте менән юлға ҡуҙғалдыҡ. Бишенсе көндөң иртәһендә Харрарға килеп етеүебеҙгә, каруан унан бер көн элек уҙып киткән булып сыҡты. Аллаһ Рәсүле Харрарҙан һуң ситкә китмәҫкә ҡушҡан ине. Әгәр ундай бойороҡ әйтелмәһә, бәлки, уларҙы ҡыуып тота алған булыр инем».

Мөжәһидтәр бер ниндәй һуғышһыҙ-бәрелешһеҙ Мәҙинәгә ҡайта.[70]

Һижрәттең ун беренсе айының баштарында, Сәфәр айында, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шәхсән үҙе Әбүә (Вәддан)[71] яуына ҡуҙғала (2-се йылдың сәфәре / 623 йыл авғусы). Был – Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡатнашҡан тәүге поход була. Ансарҙарҙан Сәғд ибн Ғүбәҙә раҙыйаллаһу ғәнһүҙе Мәҙинәлә үҙ урынына вәкил итеп ҡалдыра.

Әлеге һуғышта эш мөшриктәр менән бәрелешкә барып етмәй. Кинанә ҡәбиләһенән Дамра улдары менән килешеү генә төҙөлә. Был солох шарттары нигеҙендә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ улар менән һуғышмаясаҡ, улар ҙа Пәйғәмбәребеҙ менән һуғышҡа күтәрелмәйәсәк, мосолмандарға ҡаршы бер ниндәй ҙә берлеккә кермәйәсәк, дошманға ла ярҙам итмәйәсәк тип билдәләнә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм был уңайҙан ике арала бер яҙма шартнамә лә яҙҙыра. Әбүә походы 15 көн дауам итә.[72] Күренеүенсә, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәр мөмкинлектә солохҡа һәм именлеккә ынтыла, кешеләргә ҡарата һәр даим рәхмәтле мөнәсәбәт һаҡлай.

68. Ибне Һишам, II, 224-225; Ваҡыди, I, 10; Ибне Сәғд, II, 7.
69. **Харрар** – Хижазда Жухфә тирәһендәге бер һыу сығанағы исеме. Жухфәнән Мәккәгә барғанда, Махажжаның һул яғында, Гадири Хум янында ҡала.
70. Ибне Һишам, II, 238; Ваҡыди, I, 11; Ибне Сәғд, II, 7.
71. **Әбүә** – Фуруғ менән Жухфә араһындағы бер ауыл, Мәҙинәгә 23 миль йыраҡлыҡта. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең әсәһе хәҙрәти Әминәнең ҡәбере шул ауылда. **Вәддан** Мәҙинә менән Мәккә араһында урынлашҡан, Әбүәнән 8 миль йыраҡлыҡта, Дамра, Ғыйфар һәм Кинанәлеләр ҡәбиләләренең Жухфә тирәһендәге ерҙәренә керә.
72. Ибне Һишам, II, 223-224; Ваҡыди, I, 12; Ибне Сәғд, II, 8.

# ҺИЖРӘТТЕҢ ИКЕНСЕ ЙЫЛЫ

### Ҡайһы бер һуғыштар һәм Батн Нәхлә сәфәре

Һижрәттең ун өсөнсө айы баштарында, рабиғүл-әүүәл айы дауамында, йөҙ кешелек ғәскәр һаҡлаған, ике мең биш йөҙ дөйәнән торған ҡөрәйеш каруаны менән осрашыу маҡсатында Буват[73] походы ойошторола (2-се йылдың рабиғүл-әүүәле / 623 йылдың сентябре). Ансарҙарҙан Сәғд ибн Мөғәҙ разыйаллаһу ғәнһүҙе Мәҙинәлә үҙ урынына вәкил итеп ҡалдырып, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ике йөҙ мосолман менән юлға сыға. Мәҙинәгә бер ниндәй бәрелешһеҙ һәм осрашыуһыҙ кире ҡайталар.[74]

Шул уҡ көндәрҙә Мәҙинәнән өс миль йыраҡлыҡтағы Аҡыйҡ тигән ерҙең Жәмма тауында таралып йөрөгән дөйә һәм һыйыр көтөүен көтөүсе Күрз ибн Җабирҙы эләктереү өсөн, Сәфәуан[75] походы ҡылына (2-се йылдың рабиғүл-әүүәле / 623 йылдың сентябре). Уны «Бәҙер әл-Ула – Беренсе Бәҙер походы» тип тә атайҙар. Зәйд ибн Харисә разыйаллаһу ғәнһүҙе үҙ урынына вәкил итеп ҡалдырып сәфәр сыҡҡан Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сәфәуанға ҡәҙәр барһа ла, Күрз ҡасҡанға күрә, кире ҡайта. Был кеше һуңынан исламға керә һәм күркәм мосолман була.[76]

Һижрәттең ун алтынсы айында, йомадил-әхир айы дауамында, Зөл-Ушәйрә походына сығалар (2-се йылдың йомадил-әхире / 623 йыл ноябре), нәтижәлә Мүдлиж улдары һәм уларҙың тарафтарҙары менән килешеү төҙөлә.[77]

Ул ваҡытта вәзғиәтте күҙ уңында тотоу өсөн ебәрелеп, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең туған апаһының (атаһының һеңлеһе) улы Ғабдуллаһ ибне Жаһш разыйаллаһу ғәнһү тарафынан етәкләнгән ғәскәр берлеге Батн Нәхел тип аталған урында мәккәлеләрҙең бер каруанына һөжүм итә. Был хәлде бер форсат тип һанаған, инде күптән Мәҙинә өҫтөнә яу сабырға һылтау эҙләгән мәккәле мөшриктәр ҡотороноп китә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр һәм мосолмандарға ҡаршы ғауға ҡуптарған мөшриктәр Батн Нәхлә ваҡиғаһының харам айҙарҙан һаналған рәжәб айына тура килеүе менән бәйле рәүештә: «Харам (тыйылған) айҙы хәләлгә әйләндереп, Мөхәммәт ҡан түкте, әсирҙәр алды, мал таланы», – тип белдерәләр. Ысынында әлеге бәрелеш тураһында

73. **Буват** – Жүһәйнизәрҙең тауҙарынан бер тау, Мәҙинәнән 36 миль йыраҡлыкта.
74. Ваҡыди, I, 12; Ибне Сәғд, II, 8-9.
75. **Сәфәуан** – Бәҙер төбәгендәге бер үҙәнлек атамаһы.
76. Ибне Һишам, II, 238; Ибне Сәғд, II, 9; Ибне Әсир, *«Усдүл-Габә»,* IV, 468.
77. Ибне Сәғд, II, 9-10.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм фарман бирмәй, был ваҡиға тураһында һуңынан ишеткәс, Ғабдуллаһҡа:

*«Мин һеҙгә харам айҙа һуғышырға ҡушманым!»* – тип әйтә һәм ғәниməттән нәмә лә булһа алыуҙан баш тарта. Быға мөжәһидтәр бик ҡайғыға төшә, «һәләк ителәсәкбеҙ», тип уйлайҙар.[78] Ләкин мөшриктәрҙең был ваҡиғаны шаҡтай күпертеп, антипропаганда алып барыуы уңайынан түбәндәге аяти кәримә иңдерелә:

يَسْأَلُونَكَ عَنِ الشَّهْرِ الْحَرَامِ قِتَالٍ فِيهِ قُلْ قِتَالٌ فِيهِ كَبِيرٌ وَصَدٌّ عَنْ سَبِيلِ اللّٰهِ
وَكُفْرٌ بِهِ وَالْمَسْجِدِ الْحَرَامِ وَإِخْرَاجُ أَهْلِهِ مِنْهُ أَكْبَرُ عِنْدَ اللّٰهِ وَالْفِتْنَةُ أَكْبَرُ
مِنَ الْقَتْلِ وَلَا يَزَالُونَ يُقَاتِلُونَكُمْ حَتَّى يَرُدُّوكُمْ عَنْ دِينِكُمْ إِنِ اسْتَطَاعُوا

**«Һинән харам айы, йәғни ул айҙа һуғышыу тураһында һорайҙар. Әйт: «Ул айҙа һуғышыу – ҙур гөнаһ. Әммә** (кешеләрҙе) **Аллаһ юлынан ситкә бороу, Аллаһты инҡар итеү, Мәсжиди Харамды зыярат ҡылыуға ҡомасаулау һәм унның халҡын ҡыуып ебәреү иһә Аллаһ ҡаршында тағы ла ҙурыраҡ гөнаһ. Фетнә лә кеше үлтереүҙән ҙурыраҡ гөнаһ (**Эй Рәсүлем!) **Әгәр уларҙың көстәре етһә, динегеҙҙән йөҙ сөйөргәнсегә ҡәҙәр** (харам йәки хәләл айға ҡарап тормайынса) **һеҙҙең менән һуғышыуҙы дауам итерҙәр...»** («әл-Баҡара», 217).

Әлеге аят иңдерелгәс тынысланған Ғабдуллаһ ибн Жәһш һәм уның дуҫтары: «Йә Рәсүлүллаһ! Мөжәһидтәргә бирелә торған әжер хәтле беҙгә лә әжер бирелерме?» – тип һорайҙар. Шунан һуң түбәндәге аят иңде:

إِنَّ الَّذِينَ آمَنُوا وَالَّذِينَ هَاجَرُوا وَجَاهَدُوا فِى سَبِيلِ اللّٰهِ
أُوْلَئِكَ يَرْجُونَ رَحْمَتَ اللّٰهِ وَاللّٰهُ غَفُورٌ رَّحِيمٌ.

**«Ул заттар иман килтерҙеләр, һижрәт ҡылдылар һәм Аллаһ юлында һуғыштылар. Ана шулар Аллаһтың рәхмәтенә өмөт итә алыр. Аллаһ – күп ярлыҡаусы һәм күп мәрхәмәт ҡылыусылыр»** («әл-Баҡара», 218).

Әлеге илаһи аңлатмалар мөьминдәрҙе рухи яҡтан нығытып, мөшриктәрҙең мосолмандарға ҡаршы ярһыуын тағы ла арттыра. Хәйер, был аяттар иңмәгән осраҡта ла, мөшриктәр мөьминдәргә ҡаршы үс-нәфрәт менән тулы булыр ине, сөнки мосолмандар көндән-көн күбәйә, ислам дәүләте ҡеүәтләнә бара. Шул ваҡыттарҙа Аллаһ Рәсүле Мәҙинәлә йән иҫәбен ала. Нәтижәлә, иман килтергән ир-аттарҙың һаны мең ярымға уҡ еткәне асыҡлана.[79] Был һандың тора-бара

78. Ибне Һишам, II, 241.
79. Бохари, «Йыһат», 181.

артыуы күҙ уңында тотолһа, һис тә кәмһетеп ҡарарлыҡ һан түгел икәнлеген аңлап, мөшриктәр үҙҙәренә аҡрынлап ҡурҡыныс янауын тоя башлай. Өҫтәүенә Мәҙинә Мәккә мөшриктәренең тормошон тәьмин иткән сауҙа юлы өҫтөндә була. Шуға күрә ҡурҡыныс бик артҡансы, уны юҡ итеү сараһын уйлайҙар. Һөҙөмтәлә, Мәҙинәгә һөжүм итеү тураһында ҡарарға киләләр.

❁

Ғабдуллаһ ибн Жәһш раҙыйаллаһу ғәнһү ҡулға төшөргән әсирҙәр араһында Хакәм ибне Кәйсан да була. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ Хакәмде исламға өндәй. Исламды бөтә нескәлектәре менән оҙон-оҙаҡ аңлата. Шөбһәләрен бөтөрөү өсөн, әллә нисә мәртәбә ҡабатлай. Аллаһ Рәсүленең был ҡәҙәр тырышлыҡ ҡуйыуына ҡарамаҫтан, Хакәмдең һаман мосолманлыҡ ҡабул итмәүенә асыуы килгән хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Бының менән нимә һөйләшеп тораһың? Валлаһи, ул бер ҡасан да мосолман булмаҫ! Рөхсәт ит, муйынына бер һыҙайым да, йәһәннәмгә олаҡһын!» – тип әйтһә лә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Хакәмгә исламды аңлатыуын дауам итә. Хакәм иғтибарын туплап: «Ислам нәмә ул?» – тип һорай.

*«Аллаһҡа һис нәмәне тиңдәш ҡуймайынса, ғибәҙәт ҡылыуың һәм Мөхәммәттең иһә Уның ҡоло һәм Рәсүле булғанлығына шәһәҙәт биреүең!»* – ти яуабында Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ.

Хакәм: «Мосолман булдым», – ти.

Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәхәбәләренә боролоп:

*«Әгәр мин бынан бер аҙ ғына әүәлерәк һеҙҙе тыңлаһам, ул хәҙер йәһәннәмгә киткән булыр ине!»* – тип белдерә.

Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү әйтә: «Хакәмдең исламды ҡабул итеүен күргәс, гүйә бөтә үткән һәм киләсәк нәмәләр мине ҡыҫып алды. Үҙ-үҙемә: «Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм минән яҡшыраҡ белгәндә, мин Уға ҡаршы нимәлер әйтергә нисек йөрьәт иттем?!» – тинем. Һуңынан: «Минең маҡсатым бары Аллаһ һәм Уның Рәсүленең ризалығын алыу бит», – тип үҙемде йыуаттым. Хакәм мосолман булды. Валлаһи, мосолманлыҡты ла күркәм тотто. Аллаһ юлында йыһат ҡылды һәм Бири-Мағунәлә шәһит китте» (Ибне Сәғд, IV, 137-138; Ваҡыди, I, 15-16).

Әлеге ваҡиғанан исламды ҡыҙып китмәйсә, асыуланмайынса, йомшаҡ тел, сабырлыҡ, хикмәт һәм күркәм үгет-нәсихәт менән тәблиғ ҡылыу кәрәклеге аңлашыла.

### Ҡибланың үҙгәреүе

Һижрәттән һуң мосолмандар Мәсжиди Аҡсаға табан ҡарап намаҙ ҡыла. Был хәл һижрәттең ун алтынсы йәки ун етенсе айына хәтле дауам итә.

Ләкин йәһүдизәр, бынан үҙҙәренә бер файҙа эҙләп, өҫтөнлөктәре тураһында белдерәләр, был иһә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк күңелен ҡайғыға һала. Сөнки Унның йөрәгендәге ҡибла – Ҡәғбә. Әлеге хыялы ысынға ашҡан осраҡта, бер үк ваҡытта Мәккәне яулау өсөн дә тәүге аҙым яһалған буласаҡ. Шуның өсөн илаһи рөхсәттең килеүен зарығып көтәләр. Әлегә был рөхсәт килмәгәнгә күрә, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хыялы ла уй-ниәттәрҙән йыраҡ китмәй, ул сабырлыҡ менән көтөүен дауам итә. Ниһәйәт, рәжәб айы урталарында бер дүшәмбе көнө Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сәлимә улдарын мәсеттә намаҙ ҡылдырғанда, Йәнәбел-Хаҡ вәхи ебәрә:

قَدْ نَرَى تَقَلُّبَ وَجْهِكَ فِى السَّمَاءِ فَلَنُوَلِّيَنَّكَ قِبْلَةً تَرْضَيهَا فَوَلِّ وَجْهَكَ شَطْرَ الْمَسْجِدِ الْحَرَامِ وَحَيْثُ مَا كُنْتُمْ فَوَلُّوا وُجُوهَكُمْ شَطْرَهُ وَإِنَّ الَّذِينَ أُوْتُوا الْكِتَابَ لَيَعْلَمُونَ أَنَّهُ الْحَقُّ مِنْ رَبِّهِمْ وَمَا اللّٰهُ بِغَافِلٍ عَمَّا يَعْمَلُونَ.

«(Эй Рәсүлем!) **Беҙ Һинең йөҙөңдөң** (юғарынан хәбәр биреп) **күккә таба йүнәлгәнлеген күрәбеҙ. Бына хәҙер Һине хушландырасаҡ ҡиблаға борабыҙ. Инде йөҙөңдө Мәсжиди Харамға йүнәлт!** (Әй мосолмандар!) **Һеҙ ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа,** (намаҙҙа) **йөҙҙәрегеҙҙе шул тарафҡа бороғоҙ! Шик юҡ, әһеле китап унның Раббыларынан килгән бер хәҡиҡәт икәнен бик яҡшы белер. Аллаһ уларҙың ни ҡылып ятҡандарынан хәбәрһеҙ түгел»** («әл-Баҡара», 144).

Был ваҡытта икенсе рәкәғәттең ахырына еткән Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ шундуҡ Ҡәғбәгә таба борола. Йәмәғәттең сафтары ла бергәләп шул тарафҡа борола. Барыһы бергә яңы ҡиблаға йүнәләләр. Шул рәүешле намаҙҙың ҡалған ике рәкәғәте Ҡәғбәгә таба ҡарап ҡылына. Шул сәбәпле ул мәсетте ике ҡиблалы мәсет мәғәнәһен белдергән «Мәсжид әл-Ҡибләтәйн» тип атайҙар.[80]

Был намаҙҙы Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе менән уҡыусыларҙың береһе, ул ерҙән киткәндән һуң, башҡа мәсеткә ҡағыла. Унда йәмәғәт намаҙ ҡыла һәм нәҡ рөкуғ хәлендә була. Теге әҙәм: «Шәһәҙәт ҡылам, хәҙрәти Пәйғәмбәр менән Ҡәғбәгә йүнәлеп намаҙ уҡыныҡ!» – тип тауыш бирә. Быны ишеткәс, йәмәғәт торған ерҙәренән Ҡәғбәгә йүнәлә.

Ҡибланың үҙгәреүе мөьминдәр араһында бик шатланып ҡабул ителә, ә мөшриктәр, монафиҡтар һәм йәһүдизәр араһында төрлө ғәйбәттәргә килтерә. Ислам дошмандары урынһыҙ-кәрәкһеҙ һүҙҙәр тарата башлай. Шунан һуң түбәндәге аяти кәримәләр иңә:

80. Ибне Сәғд, I, 241-242.

سَيَقُولُ السُّفَهَاءُ مِنَ النَّاسِ مَا وَلَّيهُمْ عَنْ قِبْلَتِهِمُ الَّتِى كَانُوا عَلَيْهَا قُلْ لِلّٰهِ الْمَشْرِقُ وَالْمَغْرِبُ يَهْدِى مَنْ يَشَاءُ إِلَى صِرَاطٍ مُسْتَقِيمٍ.

**«Кешеләрҙән бер төркөм мейеһеҙ тиеләр: «Үҙҙәре йүнәлгән ҡиблаларынан уларҙы бороусы кем?» – тип әйтәсәк. Әйт: «Шәрек тә, мәғриб тә –Аллаһтыҡы. Теләгәнен Ул тура юлға килтерер»»** («әл-Баҡара», 142).[81]

Ибн Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә былай тип тапшыра:

«Хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм ҡибланы, аяти кәримә ҡушҡанса, Ҡәғбәгә таба борғас, мосолмандар: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Бәйтүл-Маҡдискә йүнәлеп намаҙ ҡылған һәм хәҙер инде үлгән ҡәрҙәштәребеҙҙең намаҙҙары менән ни буласаҡ?» – тип һорайҙар.

Был хәл Йәнәбел-Хаҡтың ошо аяттың иңеүенә килтерә:

وَكَذَلِكَ جَعَلْنَاكُمْ أُمَّةً وَسَطًا لِّتَكُونُوا شُهَدَاءَ عَلَى النَّاسِ وَيَكُونَ الرَّسُولُ عَلَيْكُمْ شَهِيدًا وَمَا جَعَلْنَا الْقِبْلَةَ الَّتِى كُنْتَ عَلَيْهَا إِلَّا لِنَعْلَمَ مَنْ يَتَّبِعُ الرَّسُولَ مِمَّنْ يَنْقَلِبُ عَلَى عَقِبَيْهِ وَإِنْ كَانَتْ لَكَبِيرَةً إِلَّا عَلَى الَّذِينَ هَدَى اللّٰهُ وَمَا كَانَ اللّٰهُ لِيُضِيعَ إِيمَانَكُمْ إِنَّ اللّٰهَ بِالنَّاسِ لَرَؤُوفٌ رَّحِيمٌ.

**«Бына шул рәүешле һеҙ кешелек өсөн шаһиттар булһын, ә Рәсүл иһә һеҙҙең өсөн шаһит булһын, тип, һеҙҙе тоғро өммәт ҡылдыҡ. Һин** (теләп тә ул миҙгелдә) **йүнәлгән ҡибланы** (Ҡәғбәне) **Беҙ бары Пәйғәмбәргә эйәреүсене үксәләре өҫтөндә киреге боролоусынан айырыу өсөн ҡибла яһаныҡ. Был, әлбиттә, Аллаһ һидәйәт ирештергән заттарҙан башҡаларға ҡыйын булыр. Аллаһ һеҙҙең иманығыҙҙы һис юҡҡа сығармаясаҡ. Сөнки Аллаһ кешеләргә ҡарата шәфҡәтле һәм мәрхәмәтлелер»** («әл-Баҡара», 143).[82]

Ҡибланың үҙгәреүе – бик әһәмиәтле, ҙур ваҡиға. Айырым алғанда, әүәлге ҡибланың ғәмәлдән сығарылыуы ваҡиғаһы шайтандар фетнә һәм боҙоҡлоҡ сығарып, бәндәләрҙе алдарға һылтау һәм форсат тип танырға мөмкин бик нескә, сетерекле мәсьәлә булып тора. Шунлыҡтан ҡибла хаҡындағы әмерҙәр бер нисә тапҡыр ҡабатлана, бер мәртәбә – хәҙрәти Пәйғәмбәргә, бер мәртәбә – мөьминдәргә, бер мәртәбә иһә һәр икеһенә бергә. Йәшәү урындарындамы,

81. Бохари, «Иман», 30, «Саләт», 31; Мөслим, «Мәсәжид», 11.
82. Тирмизи, «Тәфсир», 2/2964.

сәфәрҙәме – ҡайҙа булһалар ҙа, был ҡиблаға тоғролоҡ һаҡлау кәрәклеге көсәйтелә, ҡабатлана бара торған ентекле өслүб менән еткерелә.[83]

Түбәндәге аятта ҡайһы бер хикмәттәрҙе асыҡлау ысулы менән әлеге мәсьәләләгә ҡабатлауҙар айырым бер, мөстәҡил мәғәнә ала. Йәнәбел-Хаҡ былай тип ҡуша:

وَمِنْ حَيْثُ خَرَجْتَ فَوَلِّ وَجْهَكَ شَطْرَ الْمَسْجِدِ الْحَرَامِ وَحَيْثُ مَا كُنْتُمْ فَوَلُّوا وُجُوهَكُمْ شَطْرَهُ لِئَلَّا يَكُونَ لِلنَّاسِ عَلَيْكُمْ حُجَّةٌ إِلَّا الَّذِينَ ظَلَمُوا مِنْهُمْ فَلَا تَخْشَوْهُمْ وَاخْشَوْنِى وَلِأُتِمَّ نِعْمَتِى عَلَيْكُمْ وَلَعَلَّكُمْ تَهْتَدُونَ.

**«Ҡайҙан юлға сыҡһаң да сыҡ,** (намаҙҙа) **йөҙөңдө Мәсжиди Харамға таба йүнәлт. Ҡайҙа булһағыҙ ҙа, йөҙөгөҙҙө шул тарафҡа бороғоҙ, араларынан хаҡһыҙлыҡ ҡылыусыларҙан** (киреләнеүселәрҙән) **ҡала, кешеләрҙең һеҙгә ҡаршы** (файҙалана алырҙай) **бер дәлиле лә ҡалмаһын. Уларҙан ҡурҡа күрмәгеҙ! Бары Минән генә ҡурҡығыҙ! Шулай итеп, һеҙгә булған ниғмәтемде тамамлайым да тура юлды табырһығыҙ»** («әл-Баҡара», 150).

Иҫкә алынған илаһи күрһәтмәнән бындай мәғәнәләр сығара алабыҙ:

1. Аяти кәримәгә күрә, ҡибла үҙгәреүенең беренсе хикмәте әһеле китап һәм мөшриктәрҙең ҡулында мосолмандарға ҡаршы һис бер дәлил ҡалдырмау менән бәйле, сөнки әүәлге китаптар буйынса вәғәҙә ителгән һуңғы пәйғәмбәрҙең сифат-ғәмәлдәре араһында ҡибланы Ҡәғбәгә таба бороу ҙа телгә алына. Мәҫәлән, Иҫке Тәүраттың «Китап әл-Исайя» бүлегендә Мәккәнең киләсәге тураһында аңлатмалар быға асыҡ ишарат ҡыла. Шуға күрә әһеле китап: «Һуңғы пәйғәмбәрҙең ҡиблаһы Мәккәгә таба буласаҡ ине. Мөхәммәт һәм Уның сәхәбәләре әле һаман Бәйтил-Мәҡдискә (Мәсжиди Аҡсаға) йүнәләләр», – тип шикләнә ала.

Унан инде хәҙрәти Ибраһимдың ҡиблаһына ҡаршы килеү Аллаһ Рәсүленең «Ибраһим милләте» өсөн ебәрелеүе тураһында аңлатма менән ярашмай. Мөшриктәр быны аҡыл менән уйлап сығарылған бер дәлил сифатында алға һөрә алыр ине. Тик ҡибла үҙгәргәс, золомдо ғәҙәткә әйләндергән кире йәндәрҙән ҡала, һис кем бындай ҡаршы фекергә таяна алмаясаҡ ине.[84]

2. Ҡибла үҙгәреүҙең тағын бер хикмәте – Аллаһтың мөьминдәргә йүнәлтелгән ниғмәтенең тамамланыуы. Шуның бәрәбәренә улар һидәйәткә

83. Ҡарағыҙ: «әл-Баҡара», 148-149.
84. Ҡарағыҙ: Әлмалылы, I, 537.

ирешер һәм, тура юлдан барып, үҙҙәре хыяллаған маҡсаттарына етер. Ҡибла иһә әлеге тура юлдың бер киҫәге булып тора.

3. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең беренсе айҙарҙа Бәйтүл-Маҡдискә йүнәлеп намаҙ уҡыуындағы бер хикмәт иһә сәмауи (илаһи) диндәрҙең сығанағы бер үк булғанлығына ишара итеп, йәһүҙи һәм насараларҙың күңелдәрендә исламға ҡарата йылылыҡ тыуҙырыуҙан ғибәрәт. Шулай уҡ был ғәмәлдең ислам йәмғиәте һәм дәүләтенең ҡоролоу баҫҡысында йәһүҙи һәм насараларҙың мөнәсәбәтен, кәм тигәндә, йомшатасағын да күҙалларға мөмкин.

Бер үк ваҡытта был мәсьәлә – Ҡөрьәни-Кәримгә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тарафынан һис тыҡшыныу булмағанлығын иҫбат иткән дәлилдәрҙән дә. Сөнки хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм ҡибланың Ҡәғбәгә таба булыуын иң баштан уҡ бик теләп йөрөй. Ләкин был мәсьәләләге илаһи әмерҙең иңеүен һижрәттең ун алтынсы айына ҡәҙәр көтөргә мәжбүр була.

### Ураҙа, фытыр саҙаҡаһы һәм зәкәт

Яуҙары ярҙамында бер яҡтан үҙенең сәйәси бөтөнлөгөн нығытҡан ислам икенсе яҡтан үҙенә хас рухи тормошто әкрен-әкрен үҫтерә, камиллаштыра бара. Ошо йүнәлештә мөьминдәргә рамаҙан ураҙаһы фарыз ҡылына. Ураҙа һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙең Мәҙинәгә һижрәтенең ун һигеҙенсе айында, ҡибланың Ҡәғбәгә таба боролоуынан һуң, Хаҡ Тәғәлә тарафынан шәғбән айында әмер ителә.[85]

Йәнәбел-Хаҡ рамаҙан ураҙаһын фарыз ҡылыуы тураһында ошо аяти кәримә менән белдерә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا كُتِبَ عَلَيْكُمُ الصِّيَامُ كَمَا كُتِبَ
عَلَى الَّذِينَ مِنْ قَبْلِكُمْ لَعَلَّكُمْ تَتَّقُونَ.

**«Әй иман эйәләре! Ураҙа һеҙҙән әүәлге өммәттәргә фарыз ҡылынған кеүек, һеҙгә лә фарыз ҡылынды. Шәйәт, тәҡүәлек ҡылырһығыҙ»** («әл-Баҡара», 183).

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип аңлата:

*«Ислам биш нигеҙ өҫтөнә ҡоролған. Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Мөхәммәттең Аллаһ Рәсүле булғанлығын шәһәҙәт итеү, намаҙ уҡыу, зәкәт биреү, хажға барыу һәм рамаҙан ураҙаһын тотоу»* (Бохари, «Иман», 1, 2; «Тәфсир», 2/30; Мөслим, «Иман», 19-22).

85. Ибне Сәғд, I, 248.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ ураҙаның фазиләтен түбәндәге хәҙис шәрифтәрендә бик күркәм тасуирлаған:

*«Ғәзиз һәм Йәлил булған Аллаһ: «Кешенең ураҙанан ҡала һәр Ғәмәле үҙе өсөн. Ураҙа иһә Минең өсөн, (шуға күрә уның) әжерен дә Мин бирәсәкмен», – тип әйтә.*

*Ураҙа – ҡалҡан ул. Һеҙҙән берегеҙ ураҙа тотҡан көндә яман һүҙ һөйләмәһен һәм тауыш сығармаһын. Әгәр берәйһе уны тиргәһә йәки ҡыйнаһа: «Мин ураҙалы», – тип әйтһен.*

*Мөхәммәттең йәне ҡөҙрәтле ҡулында булған Аллаһ менән ант итәм, ураҙалы кешенең ауыҙынан килгән еҫ Аллаһ ҡаршында миск еҫенән хушлыраҡтыр. Ураҙалы кешенең ике шатлығы бар: бер шатлығы – ауыҙ асҡан ваҡыт, ә икенсеһе – ураҙа сауабы менән Раббыһы менән осрашҡан миҙгел»* (Бохари, «Саум», 9; Мөслим, «Сыям», 163).

*«Кешенең һәр ғәмәленә ҡат-ҡат сауап яҙылыр. Бер игелек ун тапҡырҙан ете йөҙ тапҡырға ҡәҙәр арттырылыр. Аллаһ Тәғәлә: «Ләкин ураҙа башҡа. Ул минең өсөн, әжер-сауабын да Мин бирермен, (сөнки) ураҙалы кеше шәһүәтен һәм ашауын Минең өсөн тыйып торор», – ти»* (Мөслим, «Сыям», 164).

*«Аллаһ юлында икеләтә саҙаҡа биреүсе (дауамлы рәүештә берәүҙе ҡайғыртыусы, ашатыусы) зат йәннәттең төрлө ҡапҡаларынан: «Әй Аллаһтың (һөйөклө) коло! Бында хәйер һәм бәрәкәт бар», – тип саҡырылыр. Даими намаҙ ҡылыусылар – намаҙ ҡапҡаһынан, мөжәһидтәр – йыһат ҡапҡаһынан, ураҙалылар – Рәйян ҡапҡаһынан, саҙаҡа бирергә яратыусылар саҙаҡа ҡапҡаһынан (йәннәткә керергә) саҡырылырҙар».*

Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү: «Ата-әсәм Һиңә фиҙа булһын, йә Аллаһтың Рәсүле! Ысынлыҡта, был ҡапҡаларҙың береһенән саҡырылған заттың башҡа ҡапҡалар аша саҡырылыу ихтыяжы юҡ, әммә ул ҡапҡаларҙың барыһынан да саҡырыласаҡ заттар бармы?» – тип һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Эйе, бар. Һинең дә шул бәхетлеләрҙән буласағыңа өмөтләнәм»,* – тип белдерә (Бохари, «Саум», 4, «Йыһат», 37; Мөслим, «Зәкәт», 85, 86).

Ураҙа – беҙгә бирелгән иҫәпһеҙ-һанһыҙ ниғмәттәрҙең ҡәҙерен белдерә торған, ул ниғмәттәрҙе рәхмәте менән ебәргән Аллаһҡа шөкрана хистәре уята торған, нәфес теләк-ынтылыштарҙы юҡҡа сығара, йөрәкте матди байлыҡ йоғонтоһонан ҡотҡарып, «сабырлыҡ» тип аталған иң юғары әхлаҡ сифатына ирештерә торған ғибәҙәт ул. Ураҙа үкһеҙҙәрҙең һәм бисараларҙың хәлен аңлау тойғоһо биргән кеүек, йөрәкте мәрхәмәт хистәре менән дә тултырыр. Мәҫәлән, үҙенә һанһыҙ хазиналар бирелгән булыуына ҡарамаҫтан, Йософ ғәләйһиссәләм, фәҡирҙәрҙең хәлен онотмаҫ өсөн, бер ҡасан да туйғансы ашамаған.

Бөтә был хикмәттәре менән ураҙа ижтимағи тормоштағы асыу, хөсөтлөк, көнсөллөк кеүек йәмғиәтте борсоуға һалған тиҫкәре күренештәрҙе бөтөрөүҙә иң нәтижәле илаһи фарман булып тора. Фани ләззәттәрҙән баш тартып, баҡый ләззәттәргә ирешеү серенә Хаҡ Тәғәлә бойорған ураҙа ниғмәте менән төшөнөргә мөмкин. Әлеге ғибәҙәт ашау-эсеүҙе, шәһүәтте тыйыу ғына түгел, нәфсенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ теләктәренән кешенең намыҫын һәм абруйын һаҡлай торған ҡалҡан ул.

Көндөҙҙәрен ураҙа менән йәнләндергән рамаҙан айының төндәрен тәрауих намаҙы менән бәрәкәтләндереү – Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙҙең сөннәте. Сөнки Ул бер хәҙис шәрифендә әйтә:

*«Аллаһ Тәғәлә рамаҙанда ураҙаны фарыз ҡылды, мин иһә (тәрауих) намаҙын сөннәт ҡылдым»* (Ибн Мәжә, «Саләт», 173).

Рамаҙандан иң күркәм шәкелдә файҙалана алыу өсөн, көндөҙҙәрен ураҙа тотоу менән бергә төндәрҙе лә ғибәҙәттәр менән йәнләндереү, һәр төрлө мәғәнәһеҙ, буш һүҙҙәрҙән тыйылып, доға һәм зекер менән телебеҙҙе, истиғфар һәм күҙ йәше менән күңелебеҙҙе йыйыу, паклау кәрәк. Һуңғы ун көндә иғтикәфкә кереү иһә бик юғары, мөһим сөннәт. Рамаҙан төндәрен йәнләндереү рәхмәт һәм мәғфирәткә бер сәбәп-этәргес булыр. Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ былай тип белдерә:

*«Кем ихлас ышанып һәм сауабын Аллаһтан өмөт итеп, рамаҙан төндәрен уяу уҙҙырһа, үткәндәге гонаһтары ярлыҡаныр»* (Бохари, «Тәрауих», 46).

Хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ былай тип тапшыра:

«Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм рамаҙан айында бер төндә мәсеттә нәфел намаҙ уҡыны. Бер нисә кеше уға ойоп намаҙ ҡылды. Иртән сәхәбәләр: «Рәсүлүллаһ төндә мәсеттә намаҙ уҡыны», – тип һөйләштеләр.

Хөрмәтле Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иртәгеһе төндә лә намаҙ ҡылды. Халыҡ араһында йәнә был хаҡта һүҙ ҡупты; намаҙға ҡатнашыусылар һаны ла шаҡтай артты. Өсөнсө йәки дүртенсе төндә кешеләр йәнә йыйылды. Шул дәрәжәлә күп инеләр ки, мәсеткә һыя алманылар. Ләкин Аллаһ Рәсүле был һуңғы төндә улар янына сыҡманы. Таң атҡас, Әфәндебеҙ:

*«Ни эшләгәнегеҙҙе күрҙем. Янығыҙға сығыуҙан мине тыйып ҡалған нимә – был намаҙҙың һеҙҙең өсөн фарызға әйләнеп ҡуйыуынан ҡурҡыуымда»*, – тип аңлатты (Бохари, «Тәрауих», 1; Мөслим, «Мүсафирин», 177).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәрауих намаҙын йәмәғәт менән уҡымай. Һәр кемдең хәленән килгәнсә ғибәҙәт ҡылыуын ҡулайыраҡ, дөрөҫөрәк тип таба. Тәрауих намаҙы хәҙрәти Әбү Бәкер хәлифәлеге осоронда шәхсән уҡыла торған була, хәҙрәти Ғүмәр хәлифәлеге ваҡытында иһә йәмәғәт менән уҡыла башлай.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм рамаҙан айҙарында бөтә ғибәҙәт һәм изге ғәмәлдәрен арттыра, Раббыһы менән һис туймаҫлыҡ ҡауышыу мөхитенә инә. Быны раҫлап, Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә былай ти: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм кешеләрҙең иң йомарты ине. Иң йомарт булған ваҡыттары иһә рамаҙанда Ябраил ғәләйһиссәләәмдең Унның менән осрашҡан саҡтары ине. Ябраил ғәләйһиссәләәм рамаҙандың һәр төнөндә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ менән күрешә, (ҡара-ҡаршы) Ҡөрьән уҡыйҙар ине. Шуға күрә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ябраил менән осрашҡанда, һис кәртә белмәйенсә иҫкән рәхмәт елдәренән дә йомартыраҡ мөғәмәлә күрһәтә ине» (Бохари, «Бәдьюль-Вахи», 5, 6, «Саум», 7; Мөслим, «Фәзаил», 48, 50).

Ураҙанан һуң **«байрам намаҙы»** һәм **«фытыр саҙаҡаһы»** тураһында фарман килә. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм фытыр саҙаҡаһын мосолмандарҙан олоһона-кесеһенә, иренә-ҡатынына, һәр ирекле затҡа йәки ҡолға бер сағ[86] хөрмә, йәиһә бер сағ арпа күләмендә фарыз ҡылынғанын белдерә.[87]

Мохтаждар хаҡында иһә:

*«Уларҙы был (байрам) көнөндә ас йөрөүҙән ҡотҡарығыҙ!»* – тип бойора (Ибне Сәғд, I, 248).

Фытыр саҙаҡаһы байрам намаҙына саҡлы бирелһә, ҡабул була торған саҙаҡа һаналыр, намаҙҙан һуң бирелгән осраҡта, фытырҙан тыш башҡа саҙаҡа урынына китер.[88]

Хәҙрәти Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә килгәс, мәҙинәлеләрҙең ике (байрам) көнө бар ине. Ул көндәрҙә уйнап күңел асалар ине. Аллаһ Рәсүле:

*«Әлеге ике көн(дөң мәғәнәһе һәм әһәмиәте) ниҙән ғибәрәт?»* – тип һораны.

Улар: «Беҙ яһилиәт осоронда был көндәрҙә күңел аса инек!» – тинеләр.

Әфәндебеҙ:

*«Аллаһ был ике байрамығыҙҙы уларҙан хәйерлерәк башҡа ике көн менән алыштырҙы: Ҡорбан байрамы һәм Фытыр (рамаҙан) байрамы!»* – тип белдерҙе» (Әбү Дауыт, «Саләт», 239/1134; Нәсаи, «Ғыйдәйн», 1).

---

86. **Сағ** –1040 дирһәм ауырлығындағы бойҙай йәки арпа була ала торған үлсәү берәмеге. 1 сағ шәриғәттә ҡабул ителгән дирһәмдә яҡынса 2,917 кг; ғәҙәти дирһәмдә иһә 3,333 кг тәшкил итә.
87. Бохари, «Зәкәт», 70-78; Мөслим, «Зәкәт», 13.
88. Ибне Мәжә, «Зәкәт», 21.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ шул уҡ йылды зөлхизә айының унынсы көнөндә байрам намаҙын уҡытҡас, мосолмандарға ҡорбан салырға ҡуша. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Мәҙинәлә ун йыл йәшәй һәм һәр йылды ҡорбан сала.[89] Аллаһ Рәсүле бер юлы ике ҡорбан сала торған була, береһе – ҡорбан салырға хәленән килмәгән өммәте исеменән, икенсеһе – үҙе һәм ғаиләһе исеменән.[90]

Ханәш раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләй:

«Хәҙрәти Ғәлиҙең ҡорбанға ике һарыҡ салғанын күрҙем. «Ник былай эшләйһең?» – тип ҡыҙыҡһынғас, ул: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафатынан һуң Үҙе өсөн дә ҡорбан салыуымды миңә васыят итеп әйтеп ҡалдырҙы. Бына мин хәҙер Уның васыятын үтәү өсөн ҡорбан һуям! Бынан һуң да шулай салыуымды дауам итәсәкмен!» – тине» (Әбү Дауыт, «Әдахи», 1-2/2790; Әхмәт, I, 107).

Ҡорбан байрамының ғәрәфә көнөндәге иртәнге намаҙҙан байрамдың дүртенсе көндөң икендеһенә саҡлы 23 ваҡыт намаҙҙа яңғыз килеш йәки йәмәғәт менән уҡылған фарыз намаҙҙар артынан берәр тапҡыр:

اَللّٰهُ اَكْبَرُ اَللّٰهُ اَكْبَرُ لَا اِلَهَ اِلَّا اللّٰهُ وَاللّٰهُ اَكْبَرُ اَللّٰهُ اَكْبَرُ وَلِلّٰهِ الْحَمْدُ

, – тип тәкбир әйтеү ир-атмы, ҡатын-ҡыҙмы, имаммы, йәмәғәтме, ерле кешеме, мосафирмы – һәр мосолманға вәжиб ғәмәл һанала. Быны тәшрик тәкбирҙәре тип атайҙар.[91]

Фытыр саҙаҡаһынан бер аҙ ваҡыт уҙғас, **«зәкәт»** тураһында әмер иңә. Аяти кәримәләрҙә әйтелә:

وَفِى أَمْوَالِهِمْ حَقٌّ لِّلسَّائِلِ وَالْمَحْرُومِ

**«Теләнсенең** (һораусының) **һәм мәхрүмдең** (тыйнаҡлығы арҡаһында һорай алмаусының) **мөлкәттә билгеле бер хаҡы бар»** («әҙ-Ҙәриәт», 19).

وَالَّذِينَ هُمْ لِلزَّكَاةِ فَاعِلُونَ

**«Зәкәтте биреүселәр** (ҙә пакланып, ҡотолоуға иреште)**»** («әл-Мөьминүн», 4).

خُذْ مِنْ أَمْوَالِهِمْ صَدَقَةً تُطَهِّرُهُمْ وَتُزَكِّيهِمْ بِهَا
وَصَلِّ عَلَيْهِمْ إِنَّ صَلَاتَكَ سَكَنٌ لَّهُمْ

89. Ибне Сәғд, I, 248-249.
90. Әбү Дауыт, «Әдахи», 3-4/2792; Ибне Сәғд, I, 249.
91. *Муватта*, «Хаж», 205.

«(Эй Пәйғәмбәр!) **Уларҙың малдарынан саҙаҡа ал; шуның менән уларҙы** (гонаһтарҙан) **пакларһың һәм юғары күтәрерһең! Һәм улар өсөн доға ҡыл! Сөнки Һинең доғаң – улар өсөн тыныслыҡтыр** (именлек сығанағы)**...»** («әт-Тәүбә», 103).

«Зәкәт» Ҡөрьәни-Кәримдә егерме алты урында намаҙ менән бергә иҫкә алына. Дүрт урында иһә мөстәҡил рәүештә осрай. Былар араһынан «Мөьминүн» сүрәһендә, намаҙ һүҙенән айырым ҡулланылыуға ҡарамаҫтан, унда ла намаҙ ҡылыусылар зәкәт биреүселәр тип телгә алына. Быны сәбәбе – «бәдәни» һәм «рухи» нигеҙҙән ике төркөмгә айырып ҡаралған ғибәҙәттәрҙә был ике ғибәҙәттең исемлектә иң алда һәм тигеҙ ҡиммәтле булыуында. Әйтәйек, бер хәҙис шәрифтә былай тип хәбәр ителә:

*«Намаҙ уҡыған хәлдә зәкәт бирмәүсе заттың намаҙы(нда хәйер) юк!»* (Хәйсәми, III, 62).

Зәкәт мәктәп, курстар, хәстәхана кеүек юридик заттарға бирелмәç. Сөнки ул, Йәнәбел-Хаҡ ҡушҡанса, һигеҙ төрлө мохтаж заттарға насип хаҡ һанала.[92] Бындай учреждениелар үҙҙәренә бирелгән зәкәтте, фәкирҙәрҙең асыл ихтыяждарынан ҡала, бүтәнгә сарыф итә алмаç. Ләкин курстарҙа белем алыусы мохтаж уҡыусыларға һәм «иғла-и кәлимәтуллаһ» маҡсаты (Аллаһ һүҙен кешеләргә еткереү өсөн) менән белем туплаусы студенттарға тоторға мөмкиндәр. Сөнки зәкәттең тормошта гажизлыҡ кисереүсе фәкирҙәрҙең асыл ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн бирелеүе һәм быны өсөн эҙләнеү-тикшерелеү уҙғарылыуы зәкәттең дөрөç шарттарынан булып тора. Шунлыҡтан үҙҙәренә зәкәт тапшырылған учреждениелар әлеге ҡағиҙәне бик иғтибар менән үтәргә тейеш. Юғиһә, Хаҡ Тәғәлә ҡаршында яуап тоторға тура киләсәк.

Ҡөрьәни-Кәримдә зәкәттең ҡайһы заттарға бирелә алыуы тураһында айырым асыҡ аңлатыла:

إِنَّمَا الصَّدَقَاتُ لِلْفُقَرَاءِ وَالْمَسَاكِينِ وَالْعَامِلِينَ عَلَيْهَا وَالْمُؤَلَّفَةِ قُلُوبُهُمْ

وَفِى الرِّقَابِ وَالْغَارِمِينَ وَفِى سَبِيلِ اللهِ وَابْنِ السَّبِيلِ

فَرِيضَةً مِّنَ اللهِ وَاللّٰهُ عَلِيمٌ حَكِيمٌ.

**«Саҙаҡалар** (зәкәттәр)**, Аллаһтан бер фарыз ғәмәл булараҡ, фәкирҙәргә** (тормошон тәьмин итә алмаусы йәки бик ауырлыҡ менән тәьмин итә алыусыларға)**, меҫкендәргә** (һис нимәһе булмағандарға)**, зәкәт мәсьәләһендә башҡарыусы булыусыларға** (зәкәт йыйыусы яуаплы заттарға)**, өлфәтле күңел эйәләренә** (йөрәктәрен исламға ҡарата йылылыҡ талап итеүселәргә)**, коллокта булғандарға, бурыслыларға, Аллаһ юлында**

92. Ҡарағыҙ: «Тәүбә», 60.

**йөрөүселәргә** (мөжәһидтәргә, дини ғилем өйрәнеүсе шәкерттәргә һ.б.ш.) **һәм малһыҙ мосафирҙарға аталған. Аллаһ – бик яҡшы белеүсе, хикмәт эйәһе»** («әт-Тәүбә», 60).

Зәкәт аятта ҡушылған һигеҙ төрлө урынға тапшырыу, еткереү шарты менән төрлө ойошма-йәмғиәт һәм вакф кеүек юридик заттарға ла бирелә ала. Был шарт иғтибар бирелергә тейешле мөһим үҙенсәлек булып тора.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм зәкәт тураһындагы илаһи әмерҙән һуң, зәкәттең нәмәләрҙән, күпме күләмдә биреләсәге һәм ни ҡәҙәр мал-мөлкәткә эйә кеше өсөн фарыз ҡылыныуы хаҡында бер яҙыу яҙҙыра һәм уны ҡылысына бәйләп ҡуя. Вафатына ҡәҙәр был яҙманы үҙе менән йөрөтә һәм шунда әйтелгәнсә ғәмәл ҡыла. Аллаһ Рәсүле донъянан кискәс, хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү һәм унан һуң хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү ҙә шул яҙыуҙағыса эш йөрөтәләр.[93]

Зәкәттең күп төрлө шәхси һәм ижтимағи хикмәттәре бар. Шулар араһында – етеш тормоштағы кешеләрҙең байлыҡҡа баш эйеүе нәтижәһендә тыуырға мөмкин боҙоҡлоҡтарға юл ҡуймау, мохтаждарҙың байҙарға ҡарата нәфрәт һәм көнсөллөк кеүек тиҫкәре хис менән яныуҙарына ҡаршы тороу, социаль тормоштоң именлеген тәьмин итеү һәм шәхестәрҙе бер-береһенә ҡарата мөхәббәт менән яҡынайтыу, бәйләү. Фәҡир һәм бай араһындағы баланс һәм мөхәббәтте тәьмин итеү күҙлегенән ҡарағанда, исламға хас ижтимағи тәртиптә «зәкәт һәм инфаҡ (Аллаһ юлында сарыф итеү)» ғибәҙәттәренең урыны бик әһәмиәтле. Зәкәт һәм инфаҡтағы хикмәттәрҙең береһе шәхси байлыҡтарҙың сиктән тыш күбәйеүенә һәм шул рәүешле зәғифтәрҙең эксплуатацияланыуына йәки ике арала нәфрәт һәм көнсөллөк барлыҡҡа килеүенә ҡомасаулауҙан ғибәрәт, сөнки байлыҡ маҡтаныу-маһайыу, ғорурланыу сәбәбенә әйләнһә, бай кешене әсе, ҡайғылы яҙмыш көтә. Шуға күрә йәмғиәттең ярҙам итеүсе һәм ярҙам алыусы бөтә ағзалары рухи һәм матди йәһәттән бер-береһенә ихтыяж кисерә.

Шуны белеү тейеш: мал-мөлкәт – тулы мәғәнәһендә Аллаһтыҡы ул. Кешеләрҙең мөлкәткә хужа булыуы иһә хәҙерге заманда уйлап табылған күренеш – мөлкәтте ҡулланышҡа биреп тороуға оҡшай, йәғни байлыҡ Аллаһтың үҙ ҡолона ваҡытлыса биреп торған бер аманаты тип ҡарарға мөмкин. Шуға күрә кешеләрҙең уны ҡулланыуы бер төркөм илаһи ҡағиҙә-үлсәүҙәргә бәйле. Мөлкәт уның ысын хужаһы ҡушҡан тәртиптә ҡулланылырға йәки сарыф ителергә тейеш. Әгәр байлыҡ илаһи әмерҙәргә ҡаршы килә торған рәүештә файҙаланылһа, кешеләрҙе аҙҙырыуға, төрлө тәкәбберлектәргә, золом һәм хаҡһыҙлыҡтарға өҫтөрәр. Бындай афәткә тартылғандарҙа малға хиреслек йөрәккә кереп урынлашыр. Йәнәбел-Хаҡтың донъя ниғмәттәре араһында мал һәм балаларҙы фетнә сығанағы булараҡ иҫкә алыуы уларҙың күңелдә урын

93. Бохари, «Зәкәт», 38; Әхмәт, II, 14.

алып, ысын-ысынлап бер табыныу объекты, бот хәленә килеү ҡурҡынысы менән генә бәйле. Бындай бәдбәхетлеккә төшкәндәрҙе киҫәтеү өсөн, Аллаһ Тәғәлә былай тип бойора:

وَالَّذِينَ يَكْنِزُونَ الذَّهَبَ وَالْفِضَّةَ وَلَا يُنْفِقُونَهَا فِى سَبِيلِ اللّٰهِ فَبَشِّرْهُمْ بِعَذَابٍ أَلِيمٍ يَوْمَ يُحْمَى عَلَيْهَا فِى نَارِ جَهَنَّمَ فَتُكْوَى بِهَا جِبَاهُهُمْ وَجُنُوبُهُمْ وَظُهُورُهُمْ هَذَا مَا كَنَزْتُمْ لِأَنْفُسِكُمْ فَذُوقُوا مَا كُنْتُمْ تَكْنِزُونَ

**«...Алтын һәм көмөш туплап та, уларҙы Аллаһ юлында тотмаусылар юҡмы, бына шуларға әрнеткес ғазаптар тураһында хәбәр ит! Ул көндө йәһәннәм утында** (был йыйылған алтын-көмөштәр) **ҡыҙҙырылып, шулар менән уларҙың маңлайҙары, яндары һәм арҡалары баҫылыр (**һәм уларға әйтелер:) **«Бына был – нәфселәрегеҙ арҡаһында йыйған байлығығыҙ. Инде туплаған нәмәләрегеҙҙең** (ғазабын) **татығыҙ!»»** («әт-Тәүбә», 34-35).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә зәкәтте иғтибарһыҙ ҡалдырыусыларҙың әсе яҙмышын түбәндәгесә асыҡлай:

*«Зәкәте бирелмәгән һәр алтын һәм көмөш ҡиәмәт көнөндә утта ҡыҙҙырылып, тимер таҡтаһы хәленә килтерелә һәм эйәһенең яндары, маңлайы һәм арҡаһы шулар менән баҫылыр. Был таҡталар һыуынғас, эйәһен ғазаплар өсөн, ҡабат ҡыҙҙырылыр. Илле мең йылға тиң бер көндә ҡолдар араһында хөкөм сығарылғансыға хәтле, был ана шулай дауам итер. Нәтижәлә, кеше бараһы юлының йәннәткә йәки йәһәннәмгә сыҡҡанын күрер».*

Сәхәбәләр: «Йә Рәсүлүллаһ! Ә зәкәте бирелмәгән дөйәләр өсөн ниндәй хәл көтөлә?» – тип һорағас, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип аңлата:

*«Дөйәләренең тейешле хаҡын түләмәгән һәр дөйә хужаһы – һыу сығанағы янына килгәндә һауылған һөттөң мохтаждарға таратылыуы ла шул хаҡтар хисабына керә – ҡиәмәт көнөндә тигеҙ һәм киң бер майҙанға ятҡырылыр. Ул дөйәләр иһә, хатта бер баланы ла ситтә ҡалдырмайынса, иң һимеҙ хәлдәрендә килеп, ул кешене аяҡтары менән иҙер һәм тештәре менән умырып тешләр. Алдағылары уҙып киткәс, арттағылары килер (шуны уҡ ҡабатлар). Илле мең йылға тиң бер көндә, кешеләр хаҡында хөкөм сығарылғансыға хәтле, ана шулай дауам итер. Нәтижәлә, кеше бараһы юлының йәннәткә йәки йәһәннәмгә сыҡҡанын күрер».*

Әсхәбе кирам һыйыр һәм һарыҡтарының зәкәтен түләмәүселәрҙең хәлен һорағанда ла, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ошоға оҡшаш яуаптар бирә (Мөслим, «Зәкәт», 24; Бохари, «Йыһат», 48).

Зәкәт һәм саҙаҡалар биргәндә, нәзәкәтлелек, йомшаҡлыҡ мәсьәләһенә лә бик иғтибар бирергә кәрәк. Изгелегең тураһында хәтергә төшөрөп тороу, насар, боҙоҡ мал менән биреү кеүек зәкәт һәм саҙаҡаның ҡиммәтен бөтөргән ғәмәлдәрҙән йыраҡ тороу зарур. Иң әүәл иһә биреүсе зат алыусыға ҡарата рәхмәт хисе тойорға тейеш, сөнки алыусы кеше биреүсене фарыз бурыстан ҡотҡарып, әжер-сауапҡа насип итә. Бирелгән саҙаҡалар иһә бер үк ваҡытта уларҙы биреүсе кешене төрлө ауырыуҙарҙан, ҡыйынлыҡтарҙан һаҡлау сараһы, үҙенә күрә йәшен үткәргес булып тора. Ысынлыҡта, меҫкендәр, ярлылар һәм ғәриптәр – байлыҡ эйәләре өсөн олуғ ниғмәт ул. Сөнки йәннәт ҡапҡалары шуларҙың доғалары менән асылыр.

Саҙаҡа биргәндә үтәлергә тейешле әҙәп ҡағиҙәләрен асыҡлаған аяттарҙа былай тип аныҡлана:

الَّذِينَ يُنْفِقُونَ أَمْوَالَهُمْ فِى سَبِيلِ اللهِ ثُمَّ لَا يُتْبِعُونَ مَا أَنْفَقُواُ مَنًّا وَلَا أَذًى لَّهُمْ أَجْرُهُمْ عِنْدَ رَبِّهِمْ وَلَا خَوْفٌ عَلَيْهِمْ وَلَا هُمْ يَحْزَنُونَ. قَوْلٌ مَّعْرُوفٌ وَمَغْفِرَةٌ خَيْرٌ مِّنْ صَدَقَةٍ يَتْبَعُهَا أَذًى وَاللهُ غَنِيٌّ حَلِيمٌ. يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تُبْطِلُوا صَدَقَاتِكُمْ بِالْمَنِّ وَالْأَذَى كَالَّذِى يُنْفِقُ مَالَهُ رِئَاءَ النَّاسِ وَلَا يُؤْمِنُ بِاللهِ وَالْيَوْمِ الْآخِرِ

**«Малдарын Аллаһ юлында сарыф итеп тә, был хаҡта иҫкә төшөрөп тормаған, фәҡирҙәрҙең күңелен ҡырмаған заттар бар, бына шуларҙың Аллаһ ҡаршыһында әжер-сауаптары булыр. Улар өсөн ҡурҡыр нәмә юҡ, ҡайғыға ла төшмәйәсәктәр. Йылы һүҙ һәм ғәфү итеү иһә артынан ғазап килтерә торған саҙаҡанан хәйерлерәк. Аллаһ һис нәмәгә мохтаж түгел, Ул – йомшаҡлыҡ, юл ҡуйыу эйәһе. Эй иман килтереүселәр! Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә ышанмаған хәлдә малын кеше күрһен өсөн генә сарыф иткән зат кеүек гел хәтерләтеп тороу һәм рәнйетеү арҡаһында, ҡылған изгелектәрегеҙ һәм биргән саҙаҡаларығыҙҙы юҡҡа сығармағыҙ!..»** («әл-Баҡара», 262-264).

**Иғтикәф**

Һүҙлектә «иғтикәф»тең үҙенде бер урынға бикләгән хәлдә көтөү; матди һәм рухи, уңай һәм тиҫкәре берәй нәмәгә ҡарата үжәт, аныҡ мөнәсәбәт һаҡлау кеүек мәғәнәләре күрһәтелә. Айырым дини термин буларак, иғтикәф ғибәҙәт ҡылыу һәм Аллаһҡа яҡынайыу ниәте менән мәсеттә билдәле бер ваҡыт йәшәп алыу тигәнде белдерә. Ваҡыт мәсьәләһендә бүтән асыҡлама булмағанға күрә, әлеге мәсеттә көтөп тороу бер сәғәт кенә булһа ла иғтикәф тип һаналыр. Быны нәфел иғтикәф тип атайҙар. Ләкин:

وَلَا تُبَاشِرُوهُنَّ وَأَنْتُمْ عَاكِفُونَ فِى الْمَسَاجِدِ

**«…Мәсеттәрҙә иғтикәфкә кергән ваҡыттарҙа ҡатындар менән яҡынлыҡ ҡылмағыҙ!..»** – аяты («әл-Баҡара», 187), иғтикәфтә ураҙаның шарт икәнлеген һәм шул сәбәпле иғтикәф ваҡытының бер көндән аҙыраҡ була алмаясағын раҫлай, шәриғәткә ярашлы ысын иғтикәф – ана шулдыр. Шул сәбәпле иғтикәф күбеһенсә рамаҙан айында һәм ураҙалы хәлдә мәсеттә тороу рәүешендә ҡабул ителә. Шулай итеп, иғтикәф көндө ураҙа менән, төндәрҙе лә ғибәҙәт һәм зекер менән мәсеттә уҙҙырып, тулы мәғәнәһендә ғибәҙәткә иғтибар йүнәлтеүгә әүерелә.

Рамаҙандың һуңғы ун көнөндә ҡылынған иғтикәф кәрәклелек яғынан сөннәти мөәккәдә һанала. Бер урында был сөннәт башҡарылғанда, бүтән мосолмандарҙан яуаплылыҡ төшөр. Нәҙер ителгән осраҡта, иғтикәф вәжиб ғәмәл хөкөмөндә була. Быларҙан ҡала, рамаҙандан тыш ваҡытта ғибәҙәт маҡсаты менән ҡылынған иғтикәфтәр мөстәхәб тип билдәләнә.

Тәһәрәт кеүек зарури ихтыяждарҙан ҡала, иғтикәф бер ниндәй сәбәп менән дә мәсеттән тышҡа сыҡмаҫҡа ынтылыуҙы талап итә.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең ҡатындары үҙ бүлмәләрендә игғтикәфкә кергәндәр. Сөнки Әфәндебеҙ үҙ ҡатындары өсөн мәсеттә ҡоролған иғтикәф сатырҙарын һүттерә. Шуға күрә мосолман ҡатындарҙың мәсеттәрҙә түгел, өйҙәрендә мәсет сифатында файҙаланған шәхси мөйөштәрендә иғтикәфкә кереүҙәре хуплана.

Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһү былай ти: «Рамаҙан айының һуңғы ун көнө еткәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм төндәрен уяу уҙҙыра, ғаилә ағзаларын уята, үҙен ғибәҙәткә бағышлап, ҡатындары менән элемтәне өҙә ине» (Бохари, «Фазлу Ләйләтил-Ҡадр», 5; Мөслим, «Иғтикәф», 7). Йәнә Ғәйшә әсәбеҙ белдергәнсә, Хөрмәтле Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙенең вафатына ҡәҙәр рамаҙандың ахырғы ун көнөндә иғтикәфкә керә, үлеме килгән йылдың рамаҙанында иһә егерме көн иғтикәф ҡыла. Уның вафатынан һуң ҡатындары ла был сөннәтте тота.[94]

Түбәндәге ваҡиға иғтикәфтең ни ҡәҙәр әһәмиәтле һәм фазиләтле булғанын раҫлау менән бергә, икенсе яҡтан, шәхси һәм ижтимағи бурыс-вазифаларҙы ла кире ҡаҡмау кәрәклеген бик күркәм күрһәтә:

«Бер көндө Мәсжиди Нәбәүиҙә иғтикәфтә сағында Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү янына бер кеше, сәләм биреп, килеп ултыра. Ибне Ғәббәс: «Ҡәрҙәшем, һине арыған һәм борсолған хәлдә күрәм!» – ти. «Әйе, Рәсүлүллаһтың ағаһының улы, борсоу-кайғылымын! Фәлән-фәләндең минең өҫтөмдә эйәлек хаҡы бар (мал бәрәбәренә мине азат иткән ине), ләкин ошо

94. Бохари, «Иғтикәф», 1, 17; Мөслим, «Иғтикәф», 5.

ҡәберҙең эйәһе (Аллаһ Рәсүле) хаҡына һөйләйем , ул кешегә ҡаршындағы бурысымды түләй алмайым», – тине.

Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә: «Һинең турала ул кеше менән һөйләшәйемме?» – тип һорағас, меҫкен бәндә: «Һин үҙең белерһең!» – тигән яуабын әйтә. Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә аяҡ кейемдәрен алып, мәсеттән сыға. Теге бәндә уға: «Иғтикәфтә булғаныңды оноттоңмо әллә?» – тип ҡысҡыра. Ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмә иһә: «Юҡ! Мин ошо ҡәберҙә ятҡан һәм арабыҙҙан әле күптән түгел генә киткән заттан (Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙән) ишеттем (Ибне Ғәббәс быларҙы әйткәндә, күҙҙәренән йәштәр аға):

*«Кем дә кем дин ҡәрҙәшенең бер эшен ҡайғыртып йөрөһә һәм ул эште хәл итһә, был – уның өсөн ун йыл иғтикәфтә ҡалыуҙан хәйерлерәк. Бер кеше Аллаһ ризалығы өсөн бер көн иғтикәфкә керһә, Йәнәбел-Хаҡ ул кеше менән ут араһында өс упҡын яралтыр, һәр упҡындың араһы шәреҡ менән мәғриб араһы кеүек йыраҡ булыр»* (Бәйхаҡи, *«Шуғабул-Иман»,* III, 424-425).

### Бөйөк Бәҙер Һуғышы

(Һижри 2-се йылдың 17 рамаҙаны / 624  йылдың 13 марты)

Һижрәттең икенсе йылында ҡөрәйешлеләрҙең ир-аты ла, ҡатын-ҡыҙҙары ла ҡатнашҡан, яҡынса 50000 динар мөлкәтле, мең дөйәнән торған бик ҙур сауҙа каруаны Дамаскның Ғаззә баҙарына ебәрелә. Каруанда Мәккәнең абруйлы, билгеле заттарынан Әбү Суфьян, Мөхәммәт ибне Нәүфәл һәм Ғамр ибне Ғас кеүек утыҙ-ҡырҡ мөшрик була.

Ҡөрәйеш мөшриктәре мосолмандарҙың хаж ҡылыуына ҡомасаулай. Мосолмандар быға бер төр ҡаршы яуап рәүешендә мәккәле мөшриктәрҙең Дамаск сауҙа юлын өҙөргә теләй, был хаҡта ҡөрәйешлеләр ҙә белә. Шуға күрә Дамаскта ҡурҡа-ҡурҡа ғына юлға сығалар. Әбү Суфьян, каруандағы Дамдам ибне Ғамрҙы егерме мыҫҡал алтын бәрәбәренә яллап, Тәбүктән бик ашығыс рәүештә Мәккәгә ебәрә.[95]

Аллаһ Рәсүленең туған апаһы Ғатикә, Дамдамдың Мәккәгә киләһенә өс төн ҡала, бер төш күрә һәм бик ҡурҡыуға ҡала. Ҡустыһы Ғәббәскә: «Ҡәрҙәшем! Күргән төшөм мине бик тетрәндерҙе. Ҡәүемеңдең башына берәй яманлыҡ килеүенән ҡурҡам. Һиңә бәйән итәһе был төшөмдө сер итеп тот, берәүгә лә һөйләмә!» – ти.

Хәҙрәти Ғәббәс: «Ни күрҙең, һөйләп бир?» – ти. Хәҙрәти Ғатикә: «Дөйәгә атланған бер әҙәм килеп, Әбтахта (Мухассаб менән Мәккә араһында) туҡтаны һәм көслө тауыш менән: «Әй вафаһыҙ йәмәғәт! Өс көн эсендә яу урынына, һуғышып еңеләсәгегеҙ ерҙәргә барырға өлгөрөгөҙ!» – тип өс тапҡыр ҡысҡырҙы.

95. Ибне Һишам, II, 244; Ваҡыди, I, 27-28.

Уны күргән кешеләр янына йыйылды. Һуңынан ул әҙәм Мәсжиди Харамға инде. Халыҡ иһә уға эйәрҙе. Кешеләр уратып алған килеш Ҡәғбәнең артында йәнә өс тапҡыр ҡысҡырҙы. Унан һуң Әбү Кубәйс тауы өҫтөнә сығып, унда ла шуны ҡабатланы. Һуңынан бер ҡыя ташты тәгәрәтеп ебәрҙе. Ул таш юғарынан түбәнгә тәгәрәп төшөп, тау итәгендә киҫәктәргә таралды. Мәккә өйҙәренән ул киҫәктәр теймәгән бер йорт та, бер урын да ҡалманы!» – ти.

Хәҙрәти Ғәббәс: «Валлаһи, был бик әһәмиәтле төш! Һаҡ бул, төшөңдө һис кемгә һөйләй күрмә!» – тип киҫәтә.

Хәҙрәти Ғәббәс хәҙрәти Ғатикә янынан китеп барғас, дуҫы Вәлид ибне Ғутбә менән осраша. Уға төштө һөйләп, сер итеп һаҡларға ҡуша. Вәлид иһә атаһына еткерә. Шул рәүешле төш бөтә Мәккәгә тарала, ҡөрәйешлеләрҙең йыйындарында шул хаҡта һөйләшә башлайҙар.

Хәҙрәти Ғәббәс былай тип тапшыра:

«Әбү Жәһил миңә: «Әй Ғәбделмотталип улдары! Һеҙҙең теге ҡатын-ҡыҙ пәйғәмбәрегеҙ ҡасан килеп сыҡты?! Ир-аттарығыҙҙың пәйғәмбәрлегенә риза булмайса, инде ҡатындарығыҙ ҙа алдан күреүсе пәйғәмбәрлеккә керештеме? Имеш, Ғатикә төшөндә берәүҙең: «Өс көн эсендә һуғышып еңеләсәгегеҙ ергә барырға өлгөрөгөҙ!» – тигәнен ишеткән. Өс көн көтәсәкбеҙ. Әгәр һөйләгән нимәһе дөрөҫ икән, әлбиттә, бер-бер нәмә килеп сығасаҡ. Әгәр өс көн уҙып та, бер нәмә лә булмаһа, хаҡығыҙҙа беҙ яҙасаҡ хәбәрҙә ғәрәптәр араһында берәүҙең дә һеҙҙең ҡатындарығыҙҙан ялғансыраҡ түгеллеген теркәп ҡуясаҡбыҙ», – тине.

Бындай нәмә булмағанын һөйләнем. Валлаһи, минең өсөн быны инҡар итеүҙән дә ауырыраҡ нәмә булмағандыр. Ғатикә төшөнөң өсөнсө көнөндә иртән ҡулымдан ысҡындырған форсатты тотоп алыу теләге менән бик ҡыҙған һәм асыулы хәлдә Мәсжиди Харамға килдем. Элек һөйләгән нәмәләремдең ҡайһы берҙәрен ҡабатлап, Әбү Жәһилде кәмһетергә ниәтләнем. Ул Мәсжиди Харамдың Сәһм улдары ишегенән осоп сығып киткәс, үҙ-үҙемә: «Аллаһтың ләғнәтенә тарыған кеүек, үҙен һүгәсәгемдән ҡурҡты ла минән ҡаса башланы», – тинем. Баҡһаң, ул Дамдамдың тауышын ишеткән икән! Мин уны ишетмәгән инем. Ни күрәйем, Дамдам дөйәһенең моронон киҫкән, эйәрен кирегә әйләндергән, күлдәген йыртҡан, Мәккә үҙәнлегенең уртаһында торған килеш, дөйә өҫтөндә бар көсөнә ҡысҡыра: «Әй ҡөрәйеш йәмәғәте! Каруан! Каруан! Мөхәммәт һәм Уның сәхәбәләре Әбү Суфьян янындағы малдарығыҙға һөжүм итте! Уға ярҙам итергә өлгөрә алырһығыҙ, тип уйламайым! Ярҙам! Ярҙам!» – тип ҡысҡыра ине ул. Башыбыҙға төшкән был бәлә мине лә, уны ла (Әбү Жәһилде) бер-беребеҙ менән ыҙғышыуҙан тотоп ҡалды» (Ибне Һишам, II, 244-247; Ваҡыди, I, 29-31).

Ҡөрәйешлеләр ашыға-ашыға хәстәрлек күрә. Әҙерлек эштәрен ике-өс көндә тамамлайҙар. Ҡоралһыҙҙар өсөн ҡоралдар һатып алалар. Байҙар зәғифтәргә хәлдәренән килгәнсә булышлыҡ күрһәтә. Сүһәйл ибне Ғамр, Зәмға

ибне Әсвәд кеүек билдәле, абруйлы кешеләр: «Дөйә һораусыға – бына дөйә! Ризыҡ һораусыға – бына ризыҡ! Барығыҙ ҙа һуғышҡа сығығыҙ! Һеҙҙән һис кем ситтә ҡалмаһын! Әгәр Мөхәммәт ҫауҙа каруанығыҙҙы ҡулға төшөрһә, һис шикһеҙ, шуның менән үҙегеҙгә һөжүм итер, Мәккәгә лә баҫып керер!» – тиҙәр.

Яуға барлыҡ ир-ат күтәрелә, ҡатнаша алмаусылар үҙ урындарына башҡа кеше яллап ебәрә. Бәҙер походына ҡуҙғалаһы көндө Әбү Жәһил кешеләргә: «Дөйәләрегеҙгә ултырығыҙ!» – тип әмер биргәс, Өмәййә ибне Хәләф Мәккәнән сығып китергә теләмәүен белдерә. Сөнки был залим мөшрик үҙенең мосолмандар тарафынан үлтереләсәге тураһында Садиҡул-Вәғдил-Әмин (биргән һүҙенә тоғро зат) булған Аллаһ Рәсүленең хәбәр иткәнлеген ишетә һәм: «Валлаһи, Мөхәммәт бер ҡасан да ялған һөйләмәҫ!» – тип, бик көслө ҡурҡыуға төшә.

Әбү Жәһил, Өмәййә ибне Хәләфте үҙҙәре менән барырға күндергәнсе, уның янынан китмәй. Өмәййә лә шундуҡ әҙерләнеп, яуға күтәрелә.

❁

Ғутбә ибне Рәбиға менән туғаны Шәйбә һуғыш ҡоралдарын тәртипләй, төҙәтә башлағас, ҡолдары Ғаддәс: «Ни эшләйһегеҙ?» – тип һорай. «Таифтәге баҡсабыҙҙа һин бер затты йөҙөм менән һыйлаған инең, һин уны беләһеңме?» – тиҙәр. Ғаддәс разыйаллаһу ғәнһү: «Эйе, беләм!» – тип яуап бирә. «Бына беҙ хәҙер Уның менән һуғышасаҡбыҙ!» – тиҙәр. Ғаддәс, һикереп тиерлек, уларҙың аяҡтарына һарыла: «Бармағыҙ! Һис шикһеҙ, Ул – Пәйғәмбәр! Һеҙ еңелеп хурлыҡҡа ғына төшәсәк урынға бараһығыҙ!» – тип илай, күҙ йәштәре яңаҡтарынан йылға булып аға. Ләкин Ғутбә һәм Шәйбә уны тыңламай, яуға китә.

❁

Мөшриктәрҙең һаны туғыҙ йөҙ илле йәки бер мең була. Йөҙ йәки ике йөҙ – атлы, ете йөҙө – дөйәле. Күбеһе көбәле. Яуға ҡөрәйештең бөтә өлкән кешеһе ҡушыла. Үҙҙәре менән йырсы йәриәләрен дә алалар, барабандар ҡаға-ҡаға, мосолмандарҙы яманлаған шиғырҙар һөйләй-һөйләй, юлға сығалар.[96]

Һижрәттең икенсе йылы, рамаҙан айының ун икенсе көнө. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, намаҙҙар ҡылдырыу өсөн Ғабдуллаһ ибне Өммө Мәктумде Мәҙинәлә үҙ урынынан вәкил итеп ҡалдырып, 313 кешелек ғәскәре менән шәһәрҙән сыға. Уларҙың 64е мөһәжир, ҡалғаны ансар була. Өсөһө атҡа, етмеше дөйәгә атланып, ҡалғандары йәйәү бара.[97]

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Мәҙинәнән бер миль йыраҡлыҡта урынлашҡан Бүйутүс-Сукьяла мөжәһидтәрҙе туҡтата. Кесе йәштәгеләрҙе кире ҡайтарып ебәрә. Сәғд ибне Әбү Вәккас разыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

96. Ваҡыди, I, 31-39; Бохари, «Мәнаҡиб», 25; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 294-295.
97. Ваҡыди, I, 23-24; Ибне Һишам, II, 250-251; Ибне Сәғд, II, 12.

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм кесе йәштәгеләрҙе кире борор алдынан, ҡустым Ғөмәйерҙең йәшеренергә, һаҡланырға маташҡанын күрҙем. «Ҡустым, һиңә ни булды?» – тинем. «Аллаһ Рәсүле мине йәш тип күрер ҙә кире борор тип ҡурҡам! Тик мин сәфәргә сығырға бик теләйем һәм Аллаһтың миңә шәһитлек насип итеүенә өмөтләнәм!» – тине. Ысынлап та, ҡустымды Рәсүлүллаһҡа тәҡдим иткәс, уның әле кескенә икәнен күреп:

*«Һин кире ҡайт!»* – тип ҡушты. Ғөмәйер илай башланы. Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм ризалыҡ бирҙе. Ғөмәйер бәләкәй булғанлыҡтан, ҡылысын үҙемә бәйләп ҡуйҙым. Бәҙерҙә шәһит киткән ваҡытында 16 йәштәр тирәһендә ине» (Ваҡиди, I, 21; Ибне Сәғд, III, 149-150).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләре менән бергә юлда барғанда, дөйәләр әҙ булғанға, бер дөйәгә сиратлашып, өс кеше ултырып бара. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ дөйәһенә хәҙрәти Ғәли үә Әбү Лүбабә раҙыйаллаһу ғәнһүмә менән сиратлашып атлана. Йәйәүләп барыу сираты Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә еткәс, иптәштәре: «Йә Рәсүлүллаһ! Зинһар, һеҙ ултырығыҙ! Беҙ Һеҙҙең урынға йәйәү барырбыҙ», – ти. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә:

*«Йәйәүләп барыу өсөн, Һеҙ минән сыҙамыраҡ түгел. Сауап алыу мәсьәләһендә мин дә һеҙҙән мохтажыраҡ түгел»,* – ти (Ибне Сәғд, II, 21; Әхмәт, I, 422).

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ бындай ғәмәле менән Аллаһҡа ҡарата сикһеҙ киң мөхәббәтен, ғибәҙәт һәм хеҙмәт итеү аша Йәнәбел-Хаҡҡа яҡынайырға ни ҡәҙәр көслө теләкле булыуын күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта, кем булыуына ҡарамаҫтан, һәр кем өсөн ғәҙеллеккә, хаҡлыҡҡа, дөрөҫлөккә тоғро булыу кәрәклеген өлгө итеп белдергән.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер аҙ ваҡыт уҙғас, Әбү Лүбабә раҙыйаллаһу ғәнһүҙе үҙ урынына вәкиллек вазифаһын йөкләп, Мәҙинәгә ҡайтарып ебәрә.[98]

Аллаһтан башҡа һыйыныр затты танымаған һәм ихтыяж тыуғанда, һәр саҡ Унан ғына һораған Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ, Бәҙергә барыусы өммәтен зәғиф һәм мохтаж хәлдә күргәс, быға түҙеп тора алмайынса, былай тип доға ҡыла:

*«Аллаһым! Быларҙың атланырға аттары, дөйәләре юҡ. Һин уларға атланыр өсөн хайуандар бир! Аллаһым! Былар шәрә, кейемһеҙ! Һин уларҙы кейендер! Аллаһым! Былар ас, Һин уларҙы туҡландыр!»*

98. Ибне Һишам, II, 251.

Ысындан да, Аллаһ Тәғәлә, Бәҙерҙә еңеү-уңышты рәхмәте менән насип ҡылғас, уларҙың һәр береһе бер йәки ике дөйә менән ҡайта, кейемле була һәм тамаҡтарын туйҙыра (Әбү Дауыт, «Йыһат», 145/2747).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм рамаҙан айына тура килгән был ауыр көндәрҙә ғәскәренә ураҙаларын боҙорға ҡуша. Сөнки һуғышта мосолмандарҙың физик яҡтан да көслө булыуы талап ителә. Шунлыҡтан яуға сыҡҡан бөтә мөьминдәр, һуңынан ҡаза ҡылып тотоп бөтөрөү шарты менән, ураҙа тотмай.

Әлеге беренсе ислам ғәскәре Бәҙергә таба юл тота. Улар Акыйк үҙәнлегенә килеп етә. Был ваҡытта Хөбәйеб ибн Йәсаф һәм Кайс ибн Мөхәррис исемле ике кеше, һуғышта ҡатнашып, ғәниməттән өлөш эләктереү маҡсаты менән, ғәскәргә килеп ҡушыла. Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм был икәүҙең береһе булған Хөбәйебтән:

*«Һеҙ беҙҙең менән сыҡтығыҙмы?»* – тип һорай.

Хөбәйеб: «Юҡ, Һин – беҙҙең ҡыҙ туғаныбыҙҙың улы һәм күршеһе. Беҙ ҡәүемебеҙ менән ғәнимәт өсөн яу сәфәренә сыҡтыҡ!» – ти.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм дауам итеп:

*«Һин Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә иман килтерҙеңме?»* – тип һорай.

Хөбәйеб: «Юҡ!» – тигән яуабын биргәс, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Улайһа, кире ҡайтып кит! Беҙ бер мөшриктең булышыуын теләмәйбеҙ!..»* – тип бойора.

Хөбәйеб, үжәтләнеп: «Ҡәүемем минең яуҙа ни ҡәҙәр ҡыйыу һуғышҡан һәм дошман бәғеренә күпме яралар һалған баһадир икәнлегемде яҡшы беләләр. Мосолман булмаһам да, ғәнимәт бәрәбәренә Һинең яҡта һуғышһам ярамаҫмы?» – ти.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Юҡ, һин башта мосолман бул, унан һуң һуғыш!»* – тип, юлын дауам итә.

Бер аҙ ваҡыттан һуң Хөбәйеб йәнә килә. Тағы шул уҡ тәкдимен белдерә. Ләкин шундай уҡ яуап ала. Ғәрәптәр араһында бик батыр һуғышсы буларак танылғанға күрә, Хөбәйеб был хәлгә бик аптырай. Тик Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уның мөшрик булыуы арҡаһында, ғәскәргә ҡушылыуына ҡаршы килә. Мөшриктәрҙең күп һанлы сиреүенә һан яғынан әҙ ғәскәр менән ҡаршы барыусы Рәсүлүллаһтың был ғәмәле Хөбәйебте бик тәрән тетрәндерә. Күңел ғаләменең төпкөлдәренә төшөп, элегерәк һис аңлап, айырып ҡарамаған бер донъяның хәҡиҡәт нурҙарын күрә ул. Бик тәьҫирләнгән хәлдә Хөбәйеб Аллаһ Рәсүленең артынан йүгерә. Был юлы мөрәжәғәте әүәлгеләренән

айырылып тора. Шуға күрә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ауыҙынан ҡабат яңғыраған:

*«Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә иман килтерҙеңме, әй Хөбәйеб?»* – тигән һорауға, бик тулҡынланып, яуап бирә:

«Эйе, йә Рәсүлүллаһ!..»

Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бик һөйөнә һәм:

*«Хәҙер инде теләгәнеңде эшлә!»* – тип белдерә (Мөслим, «Йыһат», 150; Тирмизи, «Сийәр», 10/1558; Ваҡыди, I, 47; Ибне Сәғд, III, 535).

Был ваҡиға, шәриғәткә муафиҡ ниәткә ирешеү өсөн, шарттар ни ҡәҙәр генә ауыр булмаһын, шәриғәткә тура килмәгән ысул-саралар ҡулланылмаясағын раҫлай торған дини ҡағиҙәне күрһәтә. Аллаһ ҡолона тейешлеһе – кәрәкле сараларҙы күргәс, ҡалғанын Йәнәбел-Хаҡ ихтыярына тапшырыу, Уға тәүәккәл ҡылыу. Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм дә, Хөбәйебтең иман килтермәй генә ғәскәргә ҡушылыуын ҡабул итмәйенсә, шундай ихлас дини хиссиәтен күрһәтә, өммәткә был йүнәлештә лә күркәм үрнәк, һабаҡ бирә. Сөнки бөйөк Пәйғәмбәр һәр эшендә Аллаһҡа ғына һыйына, бары Хаҡ Тәғәләгә генә йүнәлә, һәр төрлө уңыш-еңеүҙең, ярҙамдың Йәнәбел-Мәүләнән генә икәнен белә һәм шуны белдерә. Йәшәйеш нуры ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм быңдай ғәмәлдәре менән:

حَسْبُنَا اللّٰهُ وَنِعْمَ الْوَكِيلُ

**«…Аллаһ беҙҙең өсөн етер, Ул ни ҡәҙәр күркәм яҡлаусы!»** («Әлү Ғимран», 173) аятында белдерелгән илаһи бирелгәнлектең, Уға тәүәккәл ҡылыуҙың иң күркәм һәм йәнле өлгөһөн күрһәтә.

❁

Хүзәйфә разыйаллаһу ғәнһү былай тип бәйән итә:

«Атайым Хөсәйел менән юлға сыҡтыҡ. Беҙҙе ҡөрәйеш кафырҙары тотоп алдылар ҙа: «Һеҙ, ысынлыҡта, Мөхәммәт сафына ҡушылырға теләйһегеҙ», – тинеләр.

Беҙ иһә: «Юҡ, Мәҙинәгә ул сәбәп менән түгел, бүтән эш өсөн барабыҙ», – тинек. Шунан һуң беҙҙән, Аллаһ Рәсүле сафына баҫып, Уның яғында һуғышмаясағыбыҙ тураһында Аллаһ исеме менән һүҙ әйттерҙеләр. Мәҙинәгә барып, хәлде Рәсүлүллаһҡа еткергәс, Ғаләмдәр солтаны Әфәндебеҙ:

*«Барығыҙ, китегеҙ. Беҙ һеҙ биргән вәғәҙәне тотоп, уларға ҡаршы һуғышта Аллаһтан ярҙам һорарбыҙ!»* – тинеләр. Бына Бәҙер һуғышына ҡатнашмауымдың сәбәбе шул» (Мөслим, «Йыһат», 98).

Әлеге ваҡиға Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙҙең хатта дошмандары ҡаршында ла вәғәҙәгә тоғролоҡ һаҡлауына иң күркәм миҫалдарҙың береһе булып тора.

❁

Бәҙер һуғышына ҡатын-ҡыҙҙарҙан да ҡатнашырға теләүселәр табыла. Шундайҙарҙың береһе Өммө Үәраҡа Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына йүгереп килә: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Миңә рөхсәт итһәгеҙ, яралыларҙы дауалармын, ауырыуҙарҙы ҡарармын. Бәлки, Аллаһ мине шәһитлеккә ирештерер!» – ти.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә уға:

*«Һин өйөңдә ултырып, Ҡөрьән уҡы; һис шикһеҙ, Аллаһ һиңә шәһитлек насип ҡылыр!»* – тип әйтә.

Шунан һуң Өммө Үәраҡа разыйаллаһу ғәнһә сәхәбәләр араһында «Шәһиҙә» исеме менән танылы. Ул шәһит үлеменә ҙур әһәмиәт биргән шәхестәрҙән була. Ниһәйәт, хәҙрәти Ғүмәр хәлифлеге осоронда, хеҙмәтселәре тарафынан бәрхәт япма менән быуып үлтерелеп, шәһит үлеме менән баҡыйлыҡҡа күсә. Был хаҡта ишеткәс, хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Аллаһ һәм Уның Рәсүле дөрөҫ әйткән!» – ти һәм, ғәйеплеләрҙе табып, язаға тарта (Әбү Дауыт, «Саләт», 61/591; Ибне Хәжәр, *«әл-Исабә»,* IV, 505).

❁

Мосолмандарҙың Бәҙергә юл тотоуын аңлағас, Әбү Суфьян каруандың курсын үҙгәртә. Бәҙерҙе һулдараҡ ҡалдырып, ул ашыға-ашыға яр буйына таба йүнәлә.[99] Сауҙа каруанын ҡотҡарғанда, ҡөрәйеш ғәскәренә хәбәрсе ебәрә һәм: «Һеҙ каруанығыҙҙы, кешеләрегеҙҙе һәм малдарығыҙҙы һаҡлау өсөн юлға сыҡтығыҙ. Бына Аллаһ уларҙы ҡотҡарҙы, инде кире ҡайтығыҙ!» – ти.

Әбү Суфьяндың хәбәренән һуң, Әхнәс ибн Шәриктең кәңәше менән, Зүһрә улдары һәм Адий ибн Кәғб улдары ҡәүемдәре кире ҡайтып китә. Әбү Жәһл: «Бәҙергә барып етмәйенсә кире боролмайбыҙ! Беҙ унда өс көн ҡаласаҡбыҙ, дөйәләр һуйып, ашап-эсеп торасаҡбыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙар көйҙәр уйнап, йырҙар һуҙасаҡ. Тирә-яҡтағы ғәрәптәр беҙҙе ишетеп, бынан һуң беҙҙән гел ҡурҡып торасаҡ. Әйҙә, атлағыҙ!» – ти.

Әбү Суфьян ҡөрәйеш ғәскәренең, Әбү Жәһлде тыңлап, кире боролмағанын ишеткәс: «Ни ҡайғы ҡәүемемә! Был – Ғәмр ибн Һишам (Әбү Жәһл) эшелер! Кире боролорға теләмәүе кешеләргә баш булырға яратыуынан! Аһ, шул аҙғынлыҡты! Ә аҙғынлыҡ иһә уның кәмселеге һәм бәхетһеҙлегелер!» – ти (Ваҡыди, I, 43-45; Ибне Һишам, II, 258).

99. Ибне Һишам, II, 57.

Үҙгәреп торған сәйәси вәзғиәтте аҙымлап күҙәтеп барған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үлем-китемле һуғыштың инде ҡотолғоһоҙ икәнен аңлай һәм сәхәбәләренең һайлап алынғандарын ғына йыйып, уларға һорау менән мөрәжәғәт итә:

*«Һеҙҙеңсә, каруанды эҙәрлекләүме, әллә ҡөрәйеш ғәскәренә ҡаршы барыуымы муафиҡыраҡ?»*

Мөһәжирҙәр исеменән хәҙрәти Әбү Бәкер һәм хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә тороп баҫа һәм ҡөрәйеш сиреүен ҡаршыларға әҙер булғанлыҡтарын белдерә.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансарҙарҙың да фекерен белергә теләй. Ул ваҡытта ансарҙарҙан Миҡдәд ибн Әсүәд раҙыйаллаһу ғәнһү баҫып, былай тип сығыш яһай: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Йәһүдиҙәр хәҙрәти Мусаға әйткән кеүек, беҙ: **«Һин һәм Раббың, барығыҙ ҙа һуғышығыҙ!»** – тип әйтмәйбеҙ («әл-Мәидә», 24). Һиңә Ғәкәбәлә биргән һүҙгә тоғро ҡалып, беҙ Һинең уңында, һулында, алдында һәм артында дошман менән ахырғаса һуғышырға һәр ваҡыт әҙер!..»[100] (Бохари, «Магази», 4; «Тәфсир», 5/4).

Хәҙрәти Миҡдәдтән һуң Сәғд ибн Мөғәҙ раҙыйаллаһу ғәнһү аяҡҡа баҫа: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Беҙ Һиңә инандыҡ. Һин алып килгән Ҡөрьәндең дөрөҫлөгөнә шәһәҙәт бирҙек. Ни теләһәң, шуны эшлә! Әгәр диңгеҙгә сумһаң, беҙ ҙә Һинең менән бергә сумырбыҙ. Ансарҙарҙан бер кеше лә кире боролмаясаҡ!»

Был тоғролоҡ һәм илаһи итәғәтлек менән тулы һүҙҙәрҙән һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк йөҙөндә йылмайыу балҡый, хәйер-доға ҡылып, Ул былай ти:

*«Улайһа, әйҙәгеҙ, Аллаһтың сикһеҙ бәрәкәте менән йөрөгөҙ! Һеҙгә һөйөнөс булһын: Аллаһ ике төркөмдән билдәһеҙ булған береһен вәғәҙә итте.[101] Валлаһи, мин, әйтерһең, ҡөрәйешлеләр һуғыш ҡырында ятып ҡаласаҡ ерҙәрҙе күргән кеүек...»* (Мөслим, «Йыһат», 83; Ваҡыди, I, 48-49; Ибне Һишам, II, 253-254).

Ислам ғәскәре Бәҙергә килеп еткәндә, ҡөрәйеш яуы алданыраҡ килеп, бер ҡом тауының артындағы Йәлйәл үҙәнлегенең Мәҙинәгә иң йыраҡ яғында урынлашырға өлгөрә. Һыу ҡойолары иһә үҙәнлектең Мәҙинәгә иң яҡын тарафында була.[102]

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөжәһидтәр менән бергә Бәҙергә иң яҡын һыу сығанағына килгәс, туҡталыш урынын билдәләү мәсьәләһендә

100. Ибне Мәсғуд раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла: «Миҡдәд ибне Әсүәдтең шундай ҡәтғи рәүештә, ҡырыҫ һөйләшеүенә шаһит булдым, ул һүҙҙең эйәһе булыу (сауап алыу яғынан) минең өсөн уға тиңдәш булырҙай бөтә ҡиммәтле һүҙҙәрҙән һөйкөмлөрәк, йомшағыраҡтыр…» (Бохари, «Магази», 4; «Тәфсир», 5/4)

101. «Әнфәл» сүрәһенең 7-се аятында вәғәҙә ителгән ике төркөмдөң береһе – ҡөрәйештең үҙе, йәғни уларҙың еңелеп әсир төшөүе, икенсеһе иһә – ҡөрәйештең Дамасктан килгән ҙур каруаны.

102. Ибне Һишам, II, 259.

ансарҙар менән кәңәшләшә. Хубаб ибн Мөнзир разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Был тирә төнгә ҡалыу өсөн уңайлы түгел. Ҡөрәйешлеләргә иң яҡын булған һыу сығанағының башына барайыҡ һәм шунда ҡунайыҡ. Шул үҙебеҙ урынлашҡан һыуҙың аръяғындағы барлыҡ ҡойоларҙы ҡаплайыҡ. Ул һыу янында бер быуа быуайыҡ һәм эсен һыу менән тултырайыҡ», – ти. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе был тәҡдимде ҡабул итә[103] (Ибне Һишам, II, 259-260; Ибне Сәғд, II, 15).

Араларында Хәким ибн Хизам да булған бер төркөм мөшриктәр мосолмандарҙың быуаһынан һыу эсергә килә. Мосолмандар уларға ҡомасауларға йыйынғанда, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Теймәгеҙ, эсһендәр!»* – тип бойора. Килеп эсәләр. Хәкимдән ҡала һыу эсеүселәрҙең барыһы ла Бәҙерҙә үлтерелә. Хәким иһә һуңынан исламды ҡабул итә. Һүҙен ант менән нығытырға, раҫларға теләгән саҡта, ул: «Юҡ! Мине Бәҙерҙә һәләк ителеүҙән ҡотҡарып, иман ниғмәтенә ирештергән Аллаһ менән ант итәм!» – ти торған була (Ибне Һишам, II, 261).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер аҙ һуңыраҡ үҙе һуғышаһы дошманының һыу эсеүенә рөхсәт биреп, беҙгә кешелеклелек ҡағиҙәһен һәм һидәйәт ысулын өйрәтә. Сөнки бындай ғәлийәнәп ғәмәлдәр күпме ҡаты бәғерҙәрҙең йомшарыуына, артабан иһә ул күңелдәрҙә һидәйәт нурына ишек асылыуына сәбәп була.

❁

Ислам ғәскәре төнгөлөккә урынлашҡандан һуң, Сәғд ибн Мөғәҙ хәҙрәттәре: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Беҙ Һиңә бер сатыр ҡорайыҡ. Ат-дөйәләреңде лә яҡында бәйләйек. Унан инде беҙ дошман менән һуғышырбыҙ. Әгәр Аллаһ ҡеүәт биреп, еңеү насип әйләһә, бик һәйбәт! Юҡ икән, Һин атыңа атланып, беҙ артта ҡалдырған ҡәрҙәштәребеҙ янына китерһең! Йә Аллаһтың Пәйғәмбәре! Улар ҙа Һине беҙҙең кеүек үк бик яраталар. Әгәр Һинең һуғышҡа кереүеңде белһәләр, һис артта ҡалмаҫтар ине. Аллаһ Һине шулар менән һаҡлар. Улар Һиңә ихлас бәйле һәм Һинең яҡта йыһат һуғышына керерҙәр», – тине. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, хәҙрәти Сәғдте маҡтап, уға хәйер-доға ҡыла. Сәғд разыйаллаһу ғәнһү ҡылысын сығарып, сатыр ишеге төбөндә һаҡта тора (Ибне Һишам, II, 260; Ваҡыди, I, 49).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүҙе һуңғы тапҡыр ҡөрәйешлеләргә ебәреп:

*«Кире боролоп ҡайтып китегеҙ! Башҡа берәү менән һуғышыу миңә һеҙҙең менән һуғышыуҙан рәхәтерәк булыр ине!»* – тип хәбәр юллай.

103. Бәҙер халҡы һөйләүенсә, Бәҙерҙәге башҡа ҡом тауҙары биш-ун йылға бер урынын алыштырыуға ҡарамаҫтан, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡуна ҡалған ҡом тауы күсмәй торғанға әйләнә, урынын алыштырып йөрөмәй.

Хәким ибн Хизам: «Был – бик инсафлы мөнәсәбәт! Уны хәҙер үк ҡабул итегеҙ! Валлаһи, бынан һуң һеҙгә инсафлы мөғәмәлә тәтемәҫ!» – ти.

Әбү Жәһл иһә: «Ант булһын, Аллаһ[104] беҙгә форсат биргәндән һуң, үс алмай кире ҡайтмайбыҙ! Уларҙың арт һабаҡтарын уҡытасаҡбыҙ, бынан һуң күҙәтсе лә ебәрә алмаһындар, каруаныбыҙҙың юлын да бүлергә ҡыймаһындар!» – тип, мөшриктәрҙе һуғышҡа ҡоторта (Ваҡыди, I, 61-65).

Ҡөрәйешлеләр Ғөмәйр ибн Вәһб һәм яйҙаҡтарҙан Әбү Усамәне ислам ғәскәрен тикшереү-күҙәтеү өсөн ебәрәләр. Мосолман һуғышсылары тирәһендә йөрөгән был ике күҙәтсе былай тип еткерә: «Валлаһи, беҙ беселгән ҙур дөйәләр ҙә, аттар ҙа, күп һанлы ғәскәр ҙә, бик ныҡлап әҙерләнеү ҙә күрмәнек! Фәҡәт шундай бер йәмәғәт күрҙек ки, улар ғаиләләренә ҡайтып китергә түгел, үлемгә ынтылырҙар. Ҡылыстарынан ҡала үҙҙәрен һаҡлар ҡоралдары ла, һыйыныр урындары ла юҡ!» (Ваҡыди, I, 62).

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм кисен Бәҙерҙә:

*«Был урын, иншаллаһ, иртәгә фәләндәрҙең еңеләсәге ер булыр!»* – тип, мөшриктәрҙән күренекле заттарҙың үлтереләсәк урындарын берәм-берәм күрһәтеп сыға. Уны хаҡ Пәйғәмбәр итеп ебәргән Аллаһ менән ант итәм, мөшриктәрҙең һис береһе Аллаһ Рәсүле күрһәткән сиктәрҙе уҙа алманы. Һуңынан бер ҡойоға бер-береһе өҫтөнә ташландылар» (Мөслим, «Йәннәт», 76, «Йыһат», 83).

Мосолмандарҙың Бәҙерҙәге төн ҡуныу урыны ҡомлоҡҡа тура килә, шунлыҡтан атлап йөрөү еңел булмай. Өҫтәүенә, үҙҙәре менән булған һыу әҙәйә, һыу мәсьәләһе лә баш ҡалҡыта. Тәһәрәт һәм ғөсөл өсөн етерлек һыу булмау ҙа ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Шайтан да ана шул һыу менән бәйле ауырлыҡтарҙы һәм мөшриктәрҙең күп һәм көслө булыуын файҙаланып, мөьмин йөрәктәргә ҡурҡыу һалырға маташа.

Ул төндө Аллаһ Тәғәлә ямғыр яуҙыра. Үҙәнлектән силдәр аға. Мосолмандар һыу һауыттарын тултыра, тәһәрәт ала, ғөсөл ҡойона һәм малдарын эсерә. Яуған ямғыр туҙанды ла баҫа, ерҙе лә ҡатырып нығыта. Ҡөрәйеш мөшриктәре иһә ямғыр арҡаһында үҙҙәре торған ерҙән ҡуҙғала алмайынса, хәрәкәтһеҙ ҡала. Аллаһ Тәғәлә мосолмандарға тынысландыра, ял иттерә торған йоҡо халәтен дә насип ҡыла.[105]

---

104. Исламға тиклемге яһилиәт осоро ғәрәптәре Аллаһтың барлығын ҡабул итә. Ләкин улар Аллаһ янында башҡа илаһтарға ла табынғанға, тәүхид имандан тайпылып, ширккә бата. Аллаһты ҡабул иткәнгә, үрнәктәге кеүек, Аллаһ исемен телгә алып, Уның бөйөклөгөн белдергән ғибәрәләр ҡулланалар. Уларҙың ширккә батыуҙарында сәбәп, Аллаһҡа яҡынайыу, Аллаһ ҡаршында шәфәғәтсе табыу йәки ғиззәт менән абруй яулап алыу кеүек маҡсаттарҙа сиктән ашыу арҡаһында, боттарға табыныуға бәйле. (Ҡарағыҙ: «әл-Ғәнкәбут», 61; «әз-Зүмәр», 3.)

105. Табәри, *«Тәфсир»,* IX, 256-261.

Йәнәбел-Хаҡ был турала былай тип әйтә:

إِذْ يُغَشِّيكُمُ النُّعَاسَ أَمَنَةً مِّنْهُ وَيُنَزِّلُ عَلَيْكُم مِّنَ السَّمَاءِ مَاءً لِّيُطَهِّرَكُم بِهِ وَيُذْهِبَ عَنكُمْ رِجْزَ الشَّيْطَانِ وَلِيَرْبِطَ عَلَىٰ قُلُوبِكُمْ وَيُثَبِّتَ بِهِ الْأَقْدَامَ.

**«Аллаһ үҙ тарафынан бер именлек билдәһе булараҡ, һеҙҙе еңел йоҡоға талдырҙы. Һеҙҙе пакландырыу, һеҙҙән шайтан бысрағын** (ул һалған вәсүәсәне) **алып ташлау, йөрәктәрегеҙҙе нығытыу һәм ҡыйыулығығыҙҙы арттырыу өсөн күктән һеҙгә һыу индерҙе»** («әл-Әнфәл», 11).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ иһә төн буйы намаҙ уҡый һәм Аллаһҡа доға ҡыла. Был хаҡта хәҙрәти Ғәли кәррәмаллаһу вәжһәһ былай тип һөйләй:

«Бәҙер көнө Аллаһ Рәсүленән ҡала барыбыҙҙың да йоҡлағанын бик яҡшы беләм. Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ иһә, таң атҡансы, бер ағас төбөндә намаҙ уҡый-уҡый иланы» (Ибне Хузәймә, II, 52).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм таң беленеүгә:

*«Эй Аллаһ ҡолдары! Намаҙға!»* – тип тауыш бирә һәм иртәнге намаҙҙы уҡытып, мосолмандарҙы йыһатҡа өндәй (Әхмәт, I, 117).

Ҡөрәйеш мөшриктәре мосолмандар ҡаршыһына сыҡҡансы, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулындағы уҡ менән мөжәһидтәрҙе: *«Бында кил, кире сиген!»* кеүек күрһәтмәләр ярҙамында теҙгәндән һуң, һанау үткәрә. Был ваҡытта сафтан алға сыҡҡан Сәуад ибн Ғазиййәнең ҡорһағына ҡағылып:

*«Әй Сәуад! Сафҡа баҫ!»* – тип бойора. Сәуад иһә: «Йә Рәсүлүллаһ, Һин мине ауырттырҙың! Аллаһ Һине хаҡлыҡ менән ебәрҙе. Үс алырға теләйем!» – ти. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ шундуҡ ҡорһағын аса. Ансарҙар: «Әй Сәуад! Ул Аллаһтың Рәсүле бит!» – ти. Сәуад: «Ғәҙеллектә һис бер заттың башҡаһынан өҫтөнлөгө юҡ!» – ти. Аллаһ Рәсүле:

*«Әйҙә, үсеңде ҡайтар!»* – тип бойора.

Сәуад муйынын һуҙып, Йәшәйеш нурының ҡорһағын үбә. Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй Сәуад! Ниңә былай эшләнең?»* – тип һорай. Сәуад: «Күрәһегеҙ бит, һуғышҡа әҙерләнәбеҙ. Иң һуңғы иҫтәлекле миҙгелем Һинең менән уҙған миҙгел булһын, тип теләнем!» – тип яуап бирә. Шунан һуң Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе уның өсөн хәйер-доға ҡыла (Ибне Һишам, II, 266-267; Ибне Сәғд, II, 15-16).

Ике ғәскәр йома көнө, рамаҙан айының 17 һендә, Бәҙер янындағы яланда ҡара-ҡаршы сафҡа баҫа. Бик эҫе көн була. Ул ваҡытҡа хәтле ғәрәптәр нәҫел-ырыу, ҡәүем һәм ҡәбиләләр араһында туғанлыҡ кеүек милли сәбәптәр

менән генә һуғышҡа сыға. Хәҙер иһә милләт, ҡәүем урынын дин ала. Дингә бирелгәнлек хисе ғәрәптәрҙә бик көслө булған туғанлыҡ тойғоһон юҡҡа сығара. Хатта аталар, ата-әсәй яғынан ағайҙар, балалар, ағалы-ҡустылы, туған балалары кеүек бик яҡын ҡәрҙәштәр ҙә төрлө яҡта урын ала. Ул көндө хәҙрәти Әбү Бәкер – улына, Әбү Ғөбәйҙә ибн Жәррәһ – атаһына, Хәҙрәти Хәмзә ҡустыһына ҡаршы ҡылысҡа ҡылыс һуғыша. Был хәл бик ҙур ғибрәт алырлыҡ күренешкә әүерелә.

Аллаһ Тәғәлә әйтә:

قَدْ كَانَ لَكُمْ آيَةٌ فِى فِئَتَيْنِ الْتَقَتَا فِئَةٌ تُقَاتِلُ فِى سَبِيلِ اللهِ وَأُخْرَى
كَافِرَةٌ يَرَوْنَهُمْ مِّثْلَيْهِمْ رَأْىَ الْعَيْنِ وَاللهُ يُؤَيِّدُ بِنَصْرِهِ مَنْ يَشَاءُ
إِنَّ فِى ذَلِكَ لَعِبْرَةً لِّأُولِى الْأَبْصَارِ.

«(Бәҙерҙә) **ҡара-ҡаршы килгән әлеге ике төркөмдөң хәлендә һеҙҙең өсөн бик ҙур ғибрәт бар. Береһе – Аллаһ юлында һуғышыусы төркөм, былар үҙҙәренән ике тапҡыр күберәк икәнен айырым асыҡ күргән, икенсе төркөм иһә көфөр төркөмдөр. Аллаһ үҙе теләгәненә ярҙам күрһәтер. Әлбиттә, бында күрә белеүселәр өсөн ҙур ғибрәт бар»** («Әлү Ғимран», 13).

Һуғыш ҡырына ғорур ҡиәфәттә килгән мөшриктәр, маһайып, үҙҙәрен һис еңелмәҫ бер команда итеп күрәләр. Аллаһ Тәғәлә мөшриктәрҙең был хәләтен аяти кәримәләрҙә былай тасуирлай:

وَلَا تَكُونُوا كَالَّذِينَ خَرَجُوا مِنْ دِيَارِهِمْ بَطَرًا وَرِئَاءَ النَّاسِ وَيَصُدُّونَ عَنْ سَبِيلِ
اللهِ وَاللهُ بِمَا يَعْمَلُونَ مُحِيطٌ. وَإِذْ زَيَّنَ لَهُمُ الشَّيْطَانُ أَعْمَالَهُمْ قَالَ لَا غَالِبَ لَكُمُ
الْيَوْمَ مِنَ النَّاسِ وَإِنِّى جَارٌ لَّكُمْ فَلَمَّا تَرَاءَتِ الْفِئَتَانِ نَكَصَ عَلَى عَقِبَيْهِ وَقَالَ
إِنِّى بَرِىءٌ مِّنْكُمْ إِنِّى أَرَى مَا لَا تَرَوْنَ إِنِّى أَخَافُ اللهَ وَاللهُ شَدِيدُ الْعِقَابِ.

**«Үҙҙәрен өҫтөн ҡуйыу, кешеләр алдында күренеү һәм** (кешеләрҙе) **Аллаһ юлынан тайпылдырыу өсөн өйҙәренән сығыусылар кеүек булмағыҙ! Аллаһ уларҙың ҡылғандарын төрлө яҡтан солғаған** (һәм тарафын белә)**. Шайтан уларға ҡылған эштәрен матурлап күрһәтә һәм: «Бөгөн кешеләрҙән һеҙҙе еңәсәк һис кем юҡ** (Ҡурҡып тормағыҙ!) **Дөрөҫлөктә, мин дә һеҙгә ярҙамсы», – ти. Ләкин ике тарафты ҡара-ҡаршы күргәс, артына боролдо ла: «Мин һеҙҙән йыраҡ! Мин һеҙ күрмәгәндәрҙе** (фәрештәләрҙе) **күрәм, мин Аллаһтан ҡурҡам, Аллаһтың ғазабы көслөлөр», – тине»** («әл-Әнфәл», 47-48).

Илаһи сафлыҡ, бөйөк һынау уларҙың ғорурлыҡтарын да киң майҙанда тар-мар итә:

إِنَّ الَّذِينَ كَفَرُوا يُنْفِقُونَ أَمْوَالَهُمْ لِيَصُدُّوا عَنْ سَبِيلِ اللّٰهِ فَسَيُنْفِقُونَهَا ثُمَّ تَكُونُ عَلَيْهِمْ حَسْرَةً ثُمَّ يُغْلَبُونَ وَالَّذِينَ كَفَرُوا إِلَى جَهَنَّمَ يُحْشَرُونَ

**«Дөрөҫлөктә, көфөрлөк итеүселәр малдарын** (кешеләрҙе) **Аллаһ юлынан тайпылдырыу өсөн сарыф итәләр. Бынан һуң да шуға сарыф итәсәктәр. Әммә ахырҙа был улар өсөн күңел ғазабына әүереләсәк һәм иң һуңында еңелеүселәрҙән буласаҡтар. Көфөрлөктә үжәтлек күрһәтеүселәр йәһәннәмгә ташланасаҡ»** («әл-Әнфәл», 36).

**Фәрештәләр ярҙамы**

Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөшриктәргә күҙ һала, улар меңләп кеше була. Сәхәбәләр иһә өс йөҙ ун өс кеше.[106] Пәйғәмбәр шундуҡ ҡиблаға йүнәлеп, ҡулдарын доғаға күтәрә. Тауышы ишетелерлек итеп, Раббыһына ялбара башлай:

*«Йә Аллаһым! Миңә биргән вәғәҙәңде үтәһәңсе! Миңә еңеү насип итһәңсе! Йә Аллаһым! Әгәр ислам әһеленең был төркөмөн һәләк итһәң, ер йөҙөндә инде Һиңә ғибәҙәт ҡыласаҡ һис кем ҡалмаҫ!»*

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ мөбәрәк ҡулдарын күккә асҡан килеш ялбарыуын дауам итә, шул ваҡытта еләне иңбашынан шыуып төшә. Быны күреп ҡалған Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү, Уның янына килеп, еләнде күтәреп ала ла Рәсүлуллаһтың иңбашына һала: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Раббыңа етерлек ялбарғанһыңдыр. Аллаһ Тәғәлә Һиңә биргән вәғәҙәһен һис шикһеҙ үтәйәсәк», – ти ул.

Бөтә мөьмин йәндәр ялбарыу-үтенеү менән мәшғүл була. Илаһи кәләмдә Рахмандың рәхмәте тураһында быңдай һөйөнөслө хәбәр килә:

اِذْ تَسْتَغيثُونَ رَبَّكُمْ فَاسْتَجَابَ لَكُمْ اَنِّى مُمِدُّكُمْ بِاَلْفٍ مِنَ الْمَلٰٓئِكَةِ مُرْدِفِينَ. وَمَا جَعَلَهُ اللّٰهُ اِلَّا بُشْرٰى وَلِتَطْمَئِنَّ بِهِ قُلُوبُكُمْ وَمَا النَّصْرُ اِلَّا مِنْ عِنْدِ اللّٰهِ اِنَّ اللّٰهَ عَزِيزٌ حَكِيمٌ.

106. Бәра разыйаллаһу ғәнһү былай тигән: «Беҙ, Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең сәхәбәләре, арабыҙҙа Бәҙер һуғышында ҡатнашҡандарҙың һанын Талут менән бергә йылға кискән мөьмин ғәскәрҙәр һаны хәтле, йәғни өс йөҙ ун өс кеше, тип һөйләшә инек» (Бохари, «Мағази», 6; Тирмизи, «Сийәр», 38/1598).

**«Бына һеҙ Раббығыҙҙан ярҙам һорай инегеҙ, Ул иһә: «Тәхҡиҡ, Мин һеҙгә бер-бер артлы килеп торасаҡ фәрештәләр аша меңдәрсә ярҙам ебәрәсәкмен», – тип, доғағыҙҙы ҡабул итте. Аллаһ быны бары яҡшы хәбәр булһын һәм шуның менән йөрәктәрегеҙ тыныслыҡ тапһын, тип эшләне. Асылда, ярҙам бары Аллаһтан ғына, сөнки Аллаһ, һис шикһеҙ, – еңеүсе, берҙән-бер хикмәт һәм хөкөм эйәһе»** («әл-Әнфәл», 9-10).

وَلَقَدْ نَصَرَكُمُ اللهُ بِبَدْرٍ وَأَنْتُمْ أَذِلَّةٌ فَاتَّقُوا اللهَ لَعَلَّكُمْ تَشْكُرُونَ.
إِذْ تَقُولُ لِلْمُؤْمِنِينَ أَلَنْ يَكْفِيَكُمْ أَنْ يُمِدَّكُمْ رَبُّكُمْ بِثَلَاثَةِ آلَافٍ مِّنَ
الْمَلَٓئِكَةِ مُنْزَلِينَ. بَلَى إِنْ تَصْبِرُوا وَتَتَّقُوا وَيَأْتُوكُمْ مِّنْ فَوْرِهِمْ
هَذَا يُمْدِدْكُمْ رَبُّكُمْ بِخَمْسَةِ آلَافٍ مِّنَ الْمَلَٓئِكَةِ مُسَوِّمِينَ.

**«Ант итәм, һеҙ көсһөҙ булған саҡта, Аллаһ һеҙгә Бәҙерҙә ярҙам итте. Аллаһтан ҡурҡығыҙ, шул рәүешле Уға шөкөр итеүсе булырһығыҙ. Шул ваҡытта Һин мөьминдәргә: «Раббығыҙҙың күктән индерелгән өс мең фәрештә менән булышыуы һеҙгә етмәҫме?» – тиә инең. Эйе, сабыр итһәгеҙ һәм** (Аллаһтан) **ҡурҡһағыҙ, улар көтмәгәндә өҫтөгөҙгә һөжүм итһәләр ҙә, Раббығыҙ һеҙгә тамғалы биш мең фәрештә менән булышыр»** («Әлү Ғимран», 123-125).

Аллаһ Жәллә Жәләлүһү ул көндө мөьминдәргә фәрештәләр менән ярҙам итә.[107] Мөьминдәрҙең ихласына күрә, фәрештәләрҙең һанын мең, өс мең, һәм ахырҙа биш меңгә ҡәҙәр арттыра.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әүәлерәк мөшриктәрҙән күренекле кешеләрҙең ҡайһыһының ҡайҙа үлтереләсәген күрһәтеп, Аллаһтың уларға еңеү насип ҡыласағын илаһи рәхмәт менән алдан белеүенә ҡарамаҫтан, таңға ҡәҙәр төнө буйы Аллаһҡа ялбара, үҙен һәләк итер дәрәжәлә доғала уҙғара. Был күренеш – аңлы ҡоллоҡ, ғибәҙәттең мөһим сағылыштарынан. Аллаһ Тәғәлә лә беҙҙән бары ғибәҙәт кенә талап итә. Аллаһҡа яҡынайыу өсөн, түбәнселек һәм итәғәтлек менән Уға ялбарыуҙан да ныҡлыраҡ башҡа юл юҡ.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Бәҙер көнөндә:

*«Бына Ябраил! Атын йүгәненән тотҡан килеш, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән (һеҙгә ярҙамға килгән)!»* – тип хәбәр итә (Бохари, «Мағази», 11).

Хувайтыб ибн Ғабдүлғузза һөйләгәндәрҙән: «Мин Бәҙерҙә мөшриктәр менән бергә инем, ғибрәтле нәмәләргә шаһит булдым һәм фәрештәләрҙе

107. Бохари, «Мағази», 4, 6; Мөслим, «Йыһат», 58.

күрҙем. Улар күк менән ер араһында ҡөрәйешлеләрҙе үлтерә, әсир төшөрә ине. Шул саҡ үҙ-үҙемә: «Был зат (Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ), һис шикһеҙ, Аллаһ тарафынан һаҡлана!» – тинем. Күргән нәмәләрем тураһында һис кемгә һөйләмәнем» (Хаким, III, 562/6084).

Әбү Дауыт әл-Мәзини бәйән ҡыла: «Бәҙер һуғышы көнөндә мөшриктәрҙән бер кешене бәреп үлтерәйем, тип, уны эҙәрлекләнем. Ҡылысым уға тигәнсе, башының ергә төшкәнен күрҙем! Уны минән башҡа берәү (йәғни берәй фәрештә) үлтергәнен аңланым!» (Әхмәт, V, 450).

❁

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү белдергәнсә, мөшриктәр яҡынайғанда, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Киңлеге күктәр менән ер араһы ҡәҙәр булған йәннәткә кереү өсөн аяҡҡа баҫығыҙ!»* – тип бойора. Ансарҙарҙан Ғөмәйер ибн Химәм разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Киңлеге күктәр менән ер араһы ҡәҙәр булған йәннәтме?» – тип һорай. Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Эйе»*, – тип раҫлай. Ғөмәйер: «Һай әйбәт, һай шәп!» – ти.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ниңә улай тип әйттең?»* – тип һорай. Ғөмәйер разыйаллаһу ғәнһү: «Аллаһ менән ант итәм, йә Рәсүлүллаһ, йәннәт әһеленән булырға теләгәнгә күрә шулай тинем, башҡа маҡсатым юҡ», – ти.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ:

*«Шикһеҙ, һин йәннәткә билгеләнгәнһең»*, – тип белдерә.

Был һүҙҙән һуң Ғөмәйер ҡапсығынан бер нисә хөрмә сығарып ашай башлай. Артабан: «Әгәр ошо хөрмәләрҙе ашағансы йәшәһәм, был ысындан да оҙон бер ғүмер булыр», – тип ҡулындағы хөрмәләрен ташлай ҙа йыһатҡа йүгерә. Һуңынан шәһит киткәнсе, мөшриктәр менән һуғыша (Мөслим, Имарә, 145; Әхмәт, III, 137).

Бәҙер һуғышы бергә-бер һуғышыу менән башлана. Мосолмандар алышҡа сығарған Хәҙрәти Хәмзә, хәҙрәти Ғәли һәм хәҙрәти Ғөбәйҙә көндәштәрен еңә. Ләкин Ғөбәйҙә разыйаллаһу ғәнһү аяғы киҫелгән хәлдә ҡайта, бер аҙҙан ул Аллаһ Рәсүленең:

*«Һин шул бөйөк дәрәжәгә ирештең!»* – тигән шатлыҡлы хәбәрен ишетеп, шәһит китә (Ваҡыди, I, 69-70).

Бынан һуң ике армия аҡрынлап бер-береһенә яҡыная башлай. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләрҙең бер юлы һөжүмгә күтәрелеүенә рөхсәт бирмәй, сөнки ҡөрәйешле мөшриктәр араһында, каруанға инде ҡурҡыныс янамай тип, һуғышырға теләмәүселәр ҙә була. Мосолмандар

шунда уҡ һөжүм итмәүе тыныслыҡ яҡлыларҙың һанын тағы ла арттыра, мөшриктәр сафында һуғыш ынтылышының ҡаҡшауына килтерә. Бергә-бер алышҡа сыҡҡан һуғышсыларҙың отторроуы ла уларҙың күңеленә шом һала. Ләкин мәлгүн Әбү Жәһл бөтә асыуы менән ҡысҡырып ебәрә: «Һеҙ бер-ике кешенең үлеменә иғтибар итмәгеҙ! Алға барығыҙ!» (Ваҡыди, I, 71). Шунан һуң мөшриктәр дөйөм һөжүмгә күсә. Мосолман сафтарынан Хаҡ Тәғәләгә ирешкән ихлас доға-ялбарыуҙар, кафырҙарҙың сафына ҡурҡытҡыс яңғырап ишетелгән тәкбирҙәр һәм Аллаһ исемдәре һис туҡтамай, улар иманлы йөрәктәргә көс һәм илһам кертә. Ниһәйәт, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һөжүм тураһында әмер бирә. Ике ғәскәр бер-береһе менән осраша. Асыу-нәфрәтле һуғыш башлана һәм ул көсәйә бара.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Йәнәбел-Хаҡҡа һығыныуы менән бер үк ваҡытта, сәхәбәләренең көс-дәртен, ҡеүәт-ынтылышын арттырыу өсөн, шулар араһында йөрөй һәм йыш-йыш:

سَيُهْزَمُ الْجَمْعُ وَيُوَلُّونَ الدُّبُرَ.

**«Ул йәмәғәт яҡын арала еңелеүгә дусар буласаҡ һәм арттарына боролоп ҡасасаҡ!»** – тигән аяти кәримәне («әл-Ҡәмәр», 45) уҡый. Шунан һуң уҡ яҡшы хәбәрен дә ирештерә:

*«Кем бөгөн дошмандан йөҙ сөйөрмәйенсә сабыр-түҙемлек күрһәтеп, шәһит китһә, Йәнәбел-Хак уны, әлбиттә, йәннәткә кертәсәк. Бөгөн шәһит булыусыларға Фирҙәүес йәннәте әҙерләнгән. Һөжүм итегеҙ һәм алға барығыҙ!»* (Ибне Һишам, II, 267-268).

Әлеге һүҙҙәрҙән һуң, Пәйғәмбәр үҙ янындағы Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүгә боролоп:

*«Һөйөнсө! Ябраил һәм фәрештәләр ярҙамға килде»*, – тип хәбәр еткерә.

Бер ваҡыт Ул ерҙән ваҡ таштар ала ла: *«Йөҙҙәре ҡара булһын!»* – тип, дошман өҫтөнә ырғыта.[108] Шул миҙгелдә дошман яғына таба көслө ел күтәрелә. Иҫ киткес дауыл ҡуба, хатта күҙгә төртһәң дә һис ни күренмәй.

### Бәҙер арыҫландары

Хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү былай тип һөйләй: «Беҙ Бәҙерҙә Аллаһ Рәсүленә һыйына инек. Ул көндө дошманға иң яҡын торғаныбыҙ – кешеләрҙең иң ҡыйыуы, иң ныҡлыһы һәм түҙеме ине» (Әхмәт, I, 86).

Хәбиби Әкрәмдең ҡыйыулығы тураһында Бәра разыйаллаһу ғәнһү ҙә иҫкә ала: «Валлаһи, һуғыш ҡыҙышҡан саҡтарҙа, беҙ Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи

108. Ибне Һишам, II, 267.

үә сәлләмгә һыйына инек. Беҙҙең иң батырыбыҙ – Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бер рәттә тора алыусы ине» (Мөслим, «Йыһат», 79).

Әсхәбе кирам был һуғышта бик ҙур фиҙакәрлек һәм батырлыҡтар ҡыла. Айырым алғанда, Аллаһ арыҫланы – Хәҙрәти Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү ҡурҡыу белмәҫлек, ҡаһарманлыҡ үрнәге күрһәтә. Мәҫәлән, мөшриктәрҙең күренекле вәкиле Өмәййә ибне Халәф сәхәбәләрҙән Ғабдрахман ибн Ғауфҡа: «Һуғышта тамға рәүешендә күкрәгенә тәүә ҡошо ҡанаты тағып ҡуйған кеше кем ине?» – тип һорай: «Хәмзә ибн Ғәбделмотталип ул!» – тигән яуап алғас: «Беҙҙе ни эшләткән булһалар, гел ана шул эшләне лә инде!» – тип белдерә (Ибне Һишам, II, 272).

Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү ҙә ағаһы Хәмзә кеүек батырлыҡ күрһәтә, мөшриктәрҙең баштарын берәм-берәм ергә осора.[109]

Әбү Жәһл атта ултырған килеш рәжәздәр[110] һөйләп, бер һуғышта ла унан үс ала алмаясаҡтары тураһында белдереп: «Әсәм мине ошондай эштәр өсөн тыуҙырған!» – тип маҡтанып тора (Ибне Һишам, II, 275).

Ғабдрахман ибн Ғәуф раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Бәҙер һуғышы көнө уңға-һулға ҡараным да ансарҙарҙан ике йәш кеше араһында икәнлегемде күрҙем. Асылда, көслөрәк кешеләр араһында булырға теләр инем. Уларҙың береһе, икенсеһенә ишеттермәй генә, минән: «Әй абзый! Һин Әбү Жәһлде танийһыңмы?» – тип һораны. «Әйе, танийым! Ни эшләргә йыйынаһың?» – тинем. Егет: «Ишетеүемсә, ул Рәсүлүллаһты һүккән икән! Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотҡан Аллаһ менән ант итәм, уны бер күрһәм, икебеҙҙән әжәле еткән беребеҙ үлмәйсә,унан китмәйәсәкмен!» – дине.

Егеттең һүҙенә аптыраным. Икенсе егет тә шул уҡ һүҙҙәрҙе һөйләне. Был ике егет араһында булғанға, бик һөйөндөм. Бер аҙҙан Әбү Жәһлде һуғыш ҡырында әйләнеп йөрөүен күрҙем дә: «Ҡарағыҙ,  ана, һеҙ һораған әҙәм!» – тинем. Йәштәр шундуҡ ҡылыстарын тартып сығарҙы ла Әбү Җәһлгә таба саптылар һәм уны ҡылыстан үткәрҙеләр. Был егеттәр Мөғәҙ ибн Афра менән Мөғәҙ ибн Ғәмр ине» (Бохари, «Магази», 10; Мөслим, «Йыһат», 42).

109. Ибне Әсир, *«Үсдүл-Ғабә»,* IV, 97.

110. **Рәжәз** – ғәрәп ғарузындағы (шиғыр төҙөлөшөндә) бер үлсәм атамаһы.Был һүҙ «тетрәнеү» мәғәнәһен белдерә. Әлеге үлсәм тауышты ике тапҡыр түбәнерәк төшөрә ала һәм шуға күрә «рәжәз»гә, йәғни «аяҡҡа баҫҡанда, көсһөҙлөктән ҡалтыранған инә дөйәнекенә оҡшаған тауыш менән тиңләштерелеп, шундай исем бирелә. Йәки «рәжәз» шау-шыу, гөрөлтө тигән һүҙ булырға мөмкин. Боронғо замандарҙа һуғыш йырҙарында нәҡ ана шундай такт, үлсәм ҡулланыуға өстөнлөк бирелә, был йырҙар шулай тауыш, гөрөлтө менән башҡарыла. (Жәһандә, А.-Чәтин, Н. (тамамы), *М.Е.В İА,* «рәжәз» маддәһе, IX, 657). Үҙендә тиҙ һәм аҡрын темптың баҫымлы һәм ритмик рәүештә бергә урын алыуы сәбәпле, бик күп төрлө уйын ҡоралын ҡулланыу өсөн уңайлы, шуға күрә зиһен менән әҫәрҙең мәғәнәһенә иғтибар тупларга мөмкинлек бирә, борсоу-ҡайғы тойғоларын да, һөйөнөстө лә белдереү өсөн дә ҡулай. Рәжәз үлсәменең 15ләп төрө булғаны мәғлүм (Таһирул-Мәвләви, *Әдәбият Лүгаты,* 120 б, «рәжәз» маддәһе).

Мөғәҙ ибн Ғәмр былай тип асыҡлай: «Әбү Жәһлде ҡылыстан үткәргән саҡта, уның улы Икримә иһә минә ҡылыс менән һуғып, ҡулымды киҫте. Ҡулым тиреһендә генә эләгеп ҡалды! Ҡулым үҙ артымдан һөйрәлеп йөрөгән килеш, көн буйы һуғыштым. Был хәлдә һуғышыу бик ситен ине, мине тамам яфалағас, өҫтөнә аяғым менән баҫтым да ҡулымды ҡубарып алып ташланым!» (Ибне Һишам, II, 275-276).

Бер ваҡыт Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Әбү Жәһл ни эшләй икән? Кем барып ҡарай?»* – тип ҡыҙыҡһына. Ғабдуллаһ ибн Мәсғуд раҙыйаллаһу ғәнһү мөшрик мәлғүнде эҙләп китә һәм уны ерҙә ятҡан хәлдә таба. Был ваҡиғаның дауамын ул үҙе былай тип һөйләй: «Мин уға ғүмеренең һуңғы минуттарын кисергән саҡта тап булдым. Танып алдым да муйынына аяғым менән баҫтым: «Эй Аллаһтың дошманы! Аллаһ һине түбән төшөрөп, рисуай ҡылды түгелме?» – тинем. «Аллаһ мине түбән дә төшөрмәне, кәмһетмәне лә. Һинең ҡәүемең үлтергән кешеләр араһында минән өҫтөнөрәк кем бар? Эй һарыҡ көтөүсеһе! Һин ауыр һәм барып етеү бик ҡыйын булған бер эшкә сыҡҡанһың. Һин ул эште ҡалдырып кит тә, минә хәбәр бир, бөгөн донъя кемдеке?» – тине ул. «Аллаһ һәм Уның Рәсүленеке!» – тип әйттем. Уны үҙ ҡылысы менән үлтергәс, Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм янына барып: «Әбү Жәһлде үлтерҙем!» – тинем. Аллаһҡа хәмед-ҫәнәләр әйтеп, Пәйғәмбәр:

*«Ул был өммәттең Фирғәүене ине»*, – тине (Бохари, «Магази», 12; Әхмәт, I, 444; Ибне Һишам, II, 277; Ваҡыди, I, 89-90).

Бәҙер һуғышында дошман тарафынан осраҡлы рәүештә атылған бер уҡ аркаһында Өммө Харисәның улы шәһит китә. Шунан һуң әсәһе, Аллаһ Рәсүле ҡаршына килеп: «Йә Рәсүлүллаһ! Әгәр улым Харисә йәннәттә икән, сабыр итеп, сауап көтөрмөн, юғиһә, уның өсөн хәлемдән килгәнсә иламын», – ти.

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны яҡшы хәбәр менән ҡыуандыра:

*«Эй Өммө Харисә, йәннәттә бер нисә дәрәжә бар. Улың шуларҙың (иң юғарыһы булған) Фирҙәүес баҡсаларына күтәрелде»* (Бохари, «Йыһат», 14; Әхмәт, III, 272).

Был ҡыуанослы хәбәрҙән һуң Харисәнең әсәһе, йылмайыулы йөҙ менән: «Ҡара әле уны! Ҡара әле, һинә ниндәй бөйөк дәрәжә насип булған, эй Харисә!» – тип, үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә ҡайтып китә (Ибне Әсир, *«Үсдул-Габә»,* I, 426).

Бәҙер һуғышы бер үк ваҡытта ислам һәм имандың һаҡланып ҡалыу өсөн көрәше булғанға күрә, әлеге тәүге ҙур йыһатта ҡатнашҡан, һайлап алынған алдынғы сәхәбәләр мосолмандарҙың иң фазиләтлеләре дәрәжәһенә лайыҡ була. Хаҡ Тәғәлә был һуғышта фәрештәләр ғәскәрен дә «хәрби хәл режимы»на кертә. Бәҙерҙәге ошо рухи күтәрелештә үҙ өлөштәрен керткән фәрештәләр

ҙә башка фәрештәләргә ҡарағанда, юғарыраҡ дәрәжә ҡаҙана. Ысындан да, Ябраил ғәләйһиссәләм Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән: «Йә Рәсүлүллаһ! Бәҙер һуғышында ҡатнашҡандар тураһында фекерең нindәй?» – тип һорағас, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ былай тип яуап бирә:

*«Уларҙы мосолмандарҙың иң фазиләтлеләре, тип һанайбыҙ».*

Ябраил ғәләйһиссәләм иһә үҙ сиратында: «Беҙ ҙә фәрештәләрҙән Бәҙер һуғышында ҡатнашҡандарҙы шулай уҡ фәрештәләрҙең иң хәйерлеһе, тип һанайбыҙ», – тип хәбәр итә (Бохари, «Магази», 11).

❁

Ул көндө өйләгә таба һуғыш мөьминдәрҙең еңеүе менән тамамлана. Ун дүрт мосолман шәһит китә, ҡаршы яҡтан иһә етмеш мөшрик, шул иҫәптән Әбү Жәһл дә үлтерелә, етмешләбе әсир итеп алына. Шул рәүешле бәдбәхет мөшриктәр, Бәҙергә килеп ҡыйыулыҡ, егетлек күрһәтһәләр ҙә, үҙҙәренә ауыҙ итергә теләгән еңеү шарабы урынына әжәл касаһынан үлем һыуын йоторға мәжбүр булалар. Йәриәләре йыр һуҙып байрам итәһе урынға, илай-илай матәмгә сума. Үҙ сафтарындағы ғәрәптәрҙең ҡорһаҡтарын тултыраһы урынға, уларҙы асыҡҡан йәһәннәм соҡорона тултыралар.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ көбәле килеш:

سَيُهْزَمُ الْجَمْعُ وَيُوَلُّونَ الدُّبُرَ.

**«Ул йәмәғәт яҡын арала еңелеүгә дусар буласаҡ һәм арттарына боролоп ҡасасаҡ»,** – аятын («әл-Ҡәмәр», 45) уҡый-уҡый, сатырынан сыға (Бохари, «Йыһат», 89).

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү былай тип риүәйәт ҡыла: «Был аят Мәккәлә иңгән саҡта, үҙ эсемдән: «Ҡайһы йәмәғәт тар-мар ителәсәк икән һуң? Кемгә еңеләсәк ул?» – тип аптыраған инем. Бәҙер һуғышы көнө килеп, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең был аятты уҡығанын ишеткәс, еңелеүгә тарыясаҡ йәмәғәттең ҡөрәйеш мөшриктәре икәнен аңланым. Аяттың тәфсирен шул көнө белдем» (Ибне Сәғд, II, 25; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 312).

Ибне Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә:

أَلَمْ تَرَ إِلَى الَّذِينَ بَدَّلُوا نِعْمَةَ اللهِ كُفْرًا وَأَحَلُّوا قَوْمَهُمْ دَارَ الْبَوَارِ.

**«Аллаһ ниғмәтенә рәхмәтһеҙлек менән яуап биреүсе һәм ахырҙа ҡәүемдәрен һәләкәт йортона һөйрәүселәрҙе күрмәнеңме?» –** аятын (Ибраһим, 28) тәфсир ҡылғанда: «Валлаһи, улар – ҡөрәйеш кафырҙары. Рәхмәтһеҙлек менән яуап бирелгән ниғмәт – Мөхәммәт ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм ул.

Ҡәүемдәрен һәләкәт йортона һөйрәүҙәре иһә Бәҙер көнө ҡәүемдәрен утҡа һалыуҙары», – ти (Бохари, «Магази», 8; «Тәфсир», 14/3).

Ислам һәм иман еңеүе менән тамамланған Бәҙер һуғышы Аллаһтың самими, ихлас һәм тәҡүә ҡолдарына ярҙамын күрһәткән бөйөк мөғжизәләр һәм уларҙан алынырға тейешле күп ғибрәттәр менән тулы.

Әлеге олуғ еңеүҙән һуң Йәнәбел-Хаҡ, мосолмандарҙа үҙ-үҙҙәренә һоҡланыу халәте барлыҡҡа килмәһен өсөн, түбәндәге аяти кәримәне индерә:

فَلَمْ تَقْتُلُوهُمْ وَلَكِنَّ اللهَ قَتَلَهُمْ وَمَا رَمَيْتَ إِذْ رَمَيْتَ وَلَكِنَّ اللهَ
رَمَى وَلِيُبْلِىَ الْمُؤْمِنِينَ مِنْهُ بَلَاءً حَسَنًا إِنَّ اللهَ سَمِيعٌ عَلِيمٌ.

**«**(Эй Пәйғәмбәр!) **Уларҙы һеҙ түгел, ә Аллаһ үлтерҙе. Ырғытҡан саҡта ла, Һин ырғытманың, ә Аллаһ ырғытты. Һәм быны Ул, мөьминдәрҙе күркәм бер имтихан менән һынар өсөн** (эшләне)**. Дөрөҫлөктә, Аллаһ – ишетеүсе, белеүселер»** («әл-Әнфәл», 17).

Әҙәм балаһы эйә булған көс-ҡеүәт илаһи тәҡдир ҡыҫаларына керә. Шунлыҡтан:

«Олуғ һәм бөйөк Аллаһтан башҡа (һис кемдә) көс-ҡеүәт юҡ», – тип әйтелә, сөнки башланғыста булмаған хәлдә, бары Аллаһтың рәхмәте һәм йомартлығы бәрәбәренә генә барлыҡҡа килгән мәхлүкәттең сифаттары, уның малдары – Аллаһ Тәғәләнән. Шуға күрә Уның абсолют ихтыяры барлыҡ хәл-ваҡиғаларҙы һәм мәхлуҡатты солғап ала. Был иһә ихтыярын һәм көстөң асылы – Яралтыусыныҡы тигән һүҙ. Ләкин кеше был донъяға һынау өсөн ебәрелгәнлектән, уға шәхси ихтыяр бирелә һәм ул хәйерлегә йәки насарлыҡҡа һәләтле итеп билдәләнә. Был көстө ҡулланыу иһә уның үҙ ихтыярына ҡалдырыла.

**Бәҙерҙән ҡайтыу**

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дошманды еңгән осорҙа, ул төбәктең яу ҡырында өс көнгә ҡалыуҙан ғибәрәт үҙ ғәҙәт-йолаһы була. Бәҙер һуғышының өсөнсө көнө еткәс, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ дөйәһен алып килергә ҡуша. Юл йөктәре дөйәгә тейәлеп, бәйләп ҡуйыла. Аллаһ Рәсүле йәйәү юлға ҡуҙғала. Сәхәбәләре лә йәйәүләп Уның артынан бара һәм бер-береһенә: «Моғайын, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм берәй эш менән юлға сыҡҡандыр», – тиешәләр. Ниһәйәт, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ мөшриктәр ырғытылған ҡойо ситендә туҡтай һәм уларға исемдәре менән мөрәжәғәт итеп:

*«Эй Әбү Жәһл! Эй Өмәййә ибне Хәләф! Эй Ғутбә ибне Рәбиға! Эй Шәйбә ибне Рәбиға!»* – тип өндәшә һәм әйтә: *«Һеҙ Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә*

*буйһонған булһағыҙ, яҡшыраҡ түгел инеме? Раббыбыҙ беҙгә вәғәҙә иткән нәмәне дөрөҫ һәм ысын тип таптыҡ! Һеҙ ҙә Раббығыҙҙың һеҙгә вәғәҙә иткәнен хаҡ тип таптығыҙмы?»*

Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Йәнһеҙ җәсәдтәр менән һөйләшәһеңме? Улар ерәнгес үләкһәгә әйләнгәс, нисек ишетһендәр ҙә, нисек яуап бирһендәр?» – тип һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Мөхәммәттең йәнен ҡөҙрәтле ҡулында тотҡан Аллаһ менән ант итәм, улар минең һөйләгәндәремде һеҙҙән яҡшыраҡ ишетер! Ләкин яуап бирергә көс таба алмаҫтар!»* – тип асыҡлай (Бохари, «Мағази», 8; Мөслим, «Йәннәт», 77).

Бәҙерҙә һуғыш теүәлләнгәс, Ябраил ғәләйһиссәләм Әфәндебеҙ ғәләйһиссаләәтү үәс-сәләәм янына килеп: «Әй Мөхәммәт! Аллаһ Тәғәлә мине Һиңә ебәрҙе һәм Һин ризалығыңды бирмәйенсә (ярҙамдарыбыҙҙан риза булғансы) янынан китмәҫкә ҡушты. Риза булдыңмы?» – тип һүҙ ҡуша.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе:

*«Эйе! Риза булдым!»* – тип яуап биргәс, Ябраил ғәләйһиссәләм китеп бара (Ваҡыди, I, 113; Ибне Сәғд, II, 26-27).

Был олуғ еңеү менән Мәҙинәи Мөнәүүәрә шатлыҡ-һөйөнөскә төрөнә, ә Мәккә матәм-ҡайғыға сума. Хатта Әбү Ләһәб тә хәсрәтенән үлеп китә.[111] Шул рәүешле илаһи вәғәҙә ғәмәлгә ашырыла. Ләкин был ваҡытта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хөрмәтле ҡыҙы – хәҙрәти Роҡыяның вафаты сәбәпле, мосолмандар араһында Бәҙер еңеүенең һөйөнөсө оҙаҡҡа бармай.

### Әсирҙәргә ҡарата мөғәмәлә

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Бәҙерҙә өс көн торғас, Мәҙинәгә ҡайта. Ҡулға төшөрөлгән әсирҙәрҙең хәле тураһында хәҙрәти Әбү Бәкер, хәҙрәти Ғәли һәм хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүм әжмәғин менән фекер алышалар. Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Былар – туғандарыбыҙ һәм ҡәрҙәштәребеҙ. Мин уларҙан фидиә (йолом аҡсаһы) алыуҙы ҡулай күрәм. Уларҙан алғандарыбыҙ кафырҙарға ҡаршы тороу өсөн беҙгә өҫтәмә көс булыр. Бәлки, Аллаһ уларҙы һидәйәткә ирештерер һәм улар беҙҙең өсөн таяныҫҡа әүерелер», – тип сығыш яһай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ хәҙрәти Ғүмәрҙән:

*«Эй Хаттаб улы! Һинең ҡарашың нисегерәк?»* – тип һорай. Ул иһә: «Юҡ! Йә Рәсүлүллаһ, валлаһи, мин Әбү Бәкер фекерендә түгел! Уларҙың муйындарын киҫергә рөхсәт бир! Миңә мөмкинлек бир, (туғанымдан)

111. Ибне Һишам, II, 289.

фәләндең дә муйынына сабырмын. Ғәлигә рөхсәт ит, (туғаны) Ғаҡилдың муйынына сапһын. Хәмзәгә рөхсәт ит, ҡәрҙәш-фәләненең (хәҙрәти Ғәббәстең) муйынына сапһын. Аллаһ йөрәктәребеҙҙә мөшриктәргә ҡарата йомшаҡлыҡ һәм меҫкенлек булмағанлығын асып күрһәтһен! Был әсирҙәр – мөшриктәрҙең ҡотортоусылары, кафырҙарҙың юлбашсылары!» – ти.

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ хәҙрәти Әбү Бәкерҙең фекерен хуплай (Мөслим, «Йыһат», 58; Тирмизи, «Сийәр», 18/1567; Әхмәт, I, 30-31, 383-384; Ваҡыди, I, 107; Ибне Сәғд, II, 22). Сөнки уларҙың һидәйәткә лайыҡ буласаҡтарына һәм үҙҙәренән Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыла торған бер нәҫел сығасағына өмөтләнә.

Ҡулға төшөрөлгән әсирҙәр, фекер алышыу һөҙөмтәһендә, фидиә бәрәбәренә ирекkә ебәрелә. Әммә уларҙан уҡый-яҙа белгән һәр ҡайһыһына ун мәҙинәле баланы уҡырға-яҙырға өйрәтеү йөкләнә. Улар иһә фидиәләрен ана шул рәүештә түләгән һаналасаҡ, тип билгеләнә. Вәхи кәтибе (яҙыусыһы) булған һәм һуңынан Ҡөрьәнде туплаған Зәйед ибне Ҫәбит разыйаллаһу ғәнһү ҙә уҡыу-яҙыуҙы шуларҙан өйрәнә (Әхмәт, I, 247; Ваҡыди, I, 129; Ибне Сәғд, II, 22).

Аллаһ Тәғәлә әсирҙәр һәм уларҙан алынған фидиә тураһында былай тип асыҡлай:

مَا كَانَ لِنَبِيٍّ أَنْ يَكُونَ لَهُ أَسْرَى حَتَّى يُثْخِنَ فِى الْأَرْضِ تُرِيدُونَ عَرَضَ
الدُّنْيَا وَاللّٰهُ يُرِيدُ الْآخِرَةَ وَاللّٰهُ عَزِيزٌ حَكِيمٌ. لَوْلَا كِتَابٌ مِنَ اللّٰهِ
سَبَقَ لَمَسَّكُمْ فِيمَا أَخَذْتُمْ عَذَابٌ عَظِيمٌ. فَكُلُوا مِمَّا غَنِمْتُمْ
حَلَالًا طَيِّبًا وَاتَّقُوا اللّٰهَ إِنَّ اللّٰهَ غَفُورٌ رَحِيمٌ.

**«Һис бер Пәйғәмбәр, ер йөҙөндә өҫтөнлөк алмайса** (аныҡ еңеүгә ирешеп, өҫтөнлөк яуламайынса), **әсирҙәр алырға лайыҡ түгел. Һеҙ донъя малын теләрһегеҙ, ә Аллаһ әхирәттә дәрәжәгә ирешеүегеҙҙе маҡсат итеп ҡуйыр. Аллаһ – Ғәзиз, Хакимдыр. Әгәр Аллаһтан бер яҙыу** (хөкөм) **булмаһа, алған фидиә арҡаһында һеҙгә, һис шикһеҙ, оло ғазап ҡағылыр ине. Хәҙер инде ҡулығыҙға төшөргән ғәниməттән хәләл рәүештә, хушланып ашағыҙ һәм Аллаһҡа ҡаршы килеүҙән тыйылығыҙ. Тәхҡиҡ, Аллаһ – ғәфү итеүсе һәм мәрхәмәт ҡылыусылыр»** («әл-Әнфәл», 67-69).

Хәҙрәти Ғүмәр һөйләгәндәрҙән:

«Иртән Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килеүемә, Әбү Бәкер менән илап ултыралар ине. «Йә Рәсүлүллаһ! Һине һәм дуҫыңды ни илатты? Миңә һөйләһәнә! Әгәр уны иларлыҡ нәмә тип күрһәм, мин дә

илайым, иларлыҡ хәл түгел, тип уйлаһам, һеҙҙе йәш ағыҙыуҙан туҡтатыуға керешәйем?» – тинем. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ошо дуҫтарыңдың әсирҙәрҙән алған фидиәләре арҡаһында ниҙәр кисерергә тура килде! Уларға төшәсәк ғазаптың миңә бына был ағастан да яҡын булыуы күрһәтелде!»* – тип аңлатты» (Әхмәт, I, 31; Мөслим, «Йыһат», 58).

Аллаһ Тәғәлә дошмандар яҡшылап еңелмәйенсә, дин, сафлыҡ урынлашмайынса һәм фетнәләр тамам бөтөрөлмәй тороп, әсир тотоуға, уларҙы фидиә бәрәбәренә азат ҡылыуға ризаһыҙлығын белдерә, шуға күрә мосолмандарға ҡурҡыныс киҫәтеү яһала. Фидиә алыуҙа донъяуи теләк тураһында ла һүҙ бара. Юғиһә, Аллаһтың маҡсаты әхирәт сәләмәтлеген күҙәтеп тороуҙан ғибәрәт. Дин дошмандары тулыһынса баҫылмай тороп, әсир алыу мөьминдәрҙең әхирәттә һау-сәләмәт булыуын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя ала.

Ижтиһадтағы бер яңылышлыҡ арҡаһында үлтермәү, Бәҙер һуғышында ҡатнашыусыларҙы ғазапламау йәки ап-асыҡ шәкелдә тыйылмаған берәй эште ҡылыусыға ҡарата яза ҡулланмау кеүек илаһи хөкөмдәр Ләүхел-мәхфүздә яҙылғанға күрә, Аллаһ Тәғәлә мөьминдәрҙе ғәфү итә, алған ғәнимәттәрен хәләл ҡыла һәм уларҙы язаламай.

❁

Йәнәбел-Хаҡ әсир һәм ҡолдарға ҡарата шәфҡәтле мөғәмәлә күрһәтергә бойора.[112] Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙҙең дә был хаҡта күп кенә аңлатмалары бар. Хатта үлем түшәгендә ваҡыттағы һуңғы һүҙҙәре лә быңдай була:

*«Намаҙға, айырыуса намаҙға иғтибарлы булығыҙ. Һеҙҙең ҡул аҫтында булыусылар арҡаһында ла Аллаһтан ҡурҡығыҙ»* (Әбү Дауыт, «Әҙәп», 123-124/5156; Ибне Мәжә, «Васәя», 1).

Мәғрур ибне Сүвәйд тапшыра: «Мин Әбү Зәрр разыйаллаһу ғәнһүҙе өҫтөнә ҡиммәтле кейем кейгән килеш күрҙем. Шул уҡ кейемде хеҙмәтсеһе лә кейгән ине. Унан бының сәбәбен һораным. Әбү Зәрр яуабында Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм заманында бер кешене әсәһе арҡаһында ғәйепләгәнен, шуға күрә Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең былай бойорғанын һөйләне:

*«Һин үҙеңдә яһилиәт әхлағы булған кеше! Улар һеҙҙең хеҙмәтселәрегеҙ һәм шул уҡ ваҡытта ҡәрҙәштәрегеҙ ҙә. Аллаһ уларҙы һеҙҙең ҡимаяғыҙға биргән. Берегеҙҙең ҡимаяһында бер ҡәрҙәше бар икән, үҙе ашағандан уны ла ашатһын, үҙе кейгәнде уға ла кейҙерһен. Уларға хәлдәренән килә алмаясаҡ нәмәләр йөкләмәгеҙ. Әгәр йөкләргә йыйынаһығыҙ икән, уларға ярҙам итегеҙ»»* (Бохари, «Итк», 15; Мөслим, «Әйман», 40).

112. Ҡарағыҙ: «ән-Ниса», 36.

Мусғаб ибне Умәйрҙең ағаһы Әбү Ғәзиз түбәндәге ғибрәтле ваҡиғаны бәйән ҡыла:

«Бәҙер һуғышында мин дә әсир төшөп, ансарҙарҙан бер йәмәғәт ҡулына бирелгән инем. Аллаһ Рәсүле:

*«Әсирҙәргә яҡшы мөғәмәлә ҡылығыҙ!»* – тип ҡушҡан ине. Уның был әмерен үтәү өсөн, мине үҙ яндарына алған ансар йәмәғәте иртә-кис үҙҙәренә тигән икмәк өлөшөн миңә биреп, үҙҙәре иһә хөрмә менән ҡәнәғәтләнәләр ине. Мин иһә, ҡыйынһынып, икмәкте уларҙың берәйһенә бирә инем, ә ул, һис ҡағылмайынса, ҡабат миңә ҡайтара ине» (Хәйсәми, VI, 86; Ибне Һишам, II, 288).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм Уның сәхәбәләренең шундай ғәлийәнәп ғәмәлдәре золом һәм ғәҙелһеҙлек сәскә атҡан урта быуаттар кеүек осорҙа кешелек өсөн ҡиәмәткәсә үрнәк-өлгө булып ҡаласаҡ игелеклелек һәм фазиләттең бөйөк дәрәжәһенә әйләнә. Аллаһ Рәсүле кешеләргә ҡарата игелек һәм шәфҡәтлелек менән тулы күркәм мөғәмәлә күрһәтеп, уларҙы эш-ғәмәл менән дингә өндәй, шул рәүешле күңелдәрҙе йомшата, ә артабан ислам тураһында һөйләй. Бәҙер әсирҙәренең бик күбе әлеге күркәм мөғәмәләләр йоғонтоһонда исламды ҡабул итә.

Ислам ҡоллоҡ[113] институтын хупламай, кешеләрҙе лә быға өндәмәй. Ләкин йәмғиәттә бындай ысынбарлыҡты күрә, һәм ҡоллоҡ мөнәсәбәттәренең бер миҙгел эсендә бөтөрөп ташланыуы ижтимағи тормошта ризаһыҙлыҡ уятыуынан шикләнеп, был хаҡтағы хөкөмдәрҙе тулыһынса бөтөрмәй ҡала. Ләкин Уның насар ниәт менән ҡулланылыуын булдырмаҫ өсөн, әлеге мәсьәләне бер ҡосаҡ етди ҡағиҙәләргә бәйләп индереүҙе кәрәк, тип таба. Шул рәүешле ҡол хоҡуғын иң күркәм рәүешкә килтерә. Милләттәр араһында һуғыштар һис бөтмәй һәм улар ҡиәмәткә ҡәҙәр дауам итәсәк, шул ваҡытта ирекен юғалтҡан кешеләргә бәйле ҡағиҙәләргә ихтыяж да гел булып торасаҡ. Ул яҡтан ҡарағанда, ҡоллоҡто бөтөрәһе урынға ҡағиҙәләр урынлаштырыу һәм ҡол хоҡуғының тәртипкә һалыныуы кәрәк, тип табыла.

Бындай ҡағиҙәләр менән ислам ҡол менән хужаны бер-берeһенә яҡынайта, ҡолдарҙы ҡотҡарырға тырыша. Әйтәйек, бер кеше яңылышлыҡ ҡылһа һәм осраҡлы рәүештә берәй бәндәне үлтерһә, бындай ваҡытта кәфарәт сифатында иң әүәл бер ҡолдо азат итергә тейешлеге белдерелә. Икенсенән, ул, үлтерелгән кешенең ғаиләһе менән килешеп, билдәле бер күләмдә көмөш һәм дөйә хисабында йолом түләүҙе шарт итеп ҡуя. Бер мосолман, әйтәйек, хаж ғибәҙәтендә хата ҡылһа, ғибәҙәтендә яңылышлыҡ ебәрһә, йәнә иң беренсе кәфарәт юлы ҡолдо азат итеүҙән ғибәрәт. Ант итһә, зыһар[114] ҡылһа, ураҙа

113. Бында әсирлек һәм ҡоллоҡ мәсьәләләре бергә иҫкә алына, сөнки ҡоллоҡ әсирлектән килеп сыға. Һуғышта әсир итеп алынған кешеләр ҡолға әйләндерелә.

114. **Зыһар** – бер кешенең үҙ ҡатынына: «Һин миңә әсәмдең арҡаһы кеүек!» – тип, уны үҙе өсөн харам ҡылыуын (айырыу) белдерә. Был яһиллек осоро ғәҙәтен тыйып, ислам ундай эште ҡылыусыларҙың ярлыҡау йоломо түләүен талап итә.

боҙһа, былар өсөн кәфарәт сифатында иң әүәл берәй ҡолдо азат итеү талап ителәә. Бер төркөм ғәмәлдәрҙең сауабының ололоғо тураһында һөйләгәндә: «Ошо ҡәҙәр ҡолдо азат итеү кеүек!» – тип, кешеләргә ирек биреүҙең ни саҡлы фазиләтле бер ғәмәл икәнлеге белдерелә. Шул уҡ ваҡытта хаҡһыҙ рәүештә бер бәндәне ҡолға әйләндереү иһә иң ҙур гонаһтарҙан һанала. Яҙмышында яҙылғанға күрә, ҡол булған заттарға ла яҡшы мөнәсәбәт күрһәтергә бойорола.

Ислам ҡол хужаһына һәр даим: «Үҙең ашағандан ашат, үҙең эскәнде эсер, үҙең кейгәнде кейҙер, ураҙалы икән, артыҡ йөк һәм эш өймә, уның ихтыяждарын ҡайғырт!» – тип һеңдерә. Ҡол азат итеү бер мөьмин өсөн тағы ла хәйерлерәк ҡотолоу юлы тип күрһәтелә. Ҡолдар өсөн шундай хоҡуҡтар күрһәтелә икән, уларҙы үтәгәндә, ҡол хужаһы булыуға ҡарағанда, булмауың күпкә хәйерлерәк. Ҡол хужаһы булыу иһә билдәле бер ҡоллоҡта булыу тигән һүҙ.

Был осраҡта ислам ҡоллоҡҡа кереү ишеген мөмкин булғанса бикләп, сығыу ишектәрен төбөнә ҡәҙәр ҡайырып аса һәм ундай хәлгә тарыған кешеләрҙең иреккә ебәрелеүен яйы сыҡҡан һайын хуплай, алға һөрә һәм шуға өндәй.

❁

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ әсирҙәр араһындағы ағаһы Ғәббәскә:

*«Эй Ғәббәс! Һин – байлыҡ эйәһе. Үҙең, туғаныңдың улы Ғаҡил, Нәүфәл ибне Харис һәм арағыҙҙа вәғәҙә бирешкән Ғутбә ибне Ғамр өсөн фидиә түлә!»* – тип бойора.

Ғәббәс иһә: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин мосолман инем, ҡөрәйеш мине көсләп яуға алып сыҡты!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һинең мосолманлығыңды бары Аллаһ ҡына белә. Әйткән һүҙең хаҡ икән, әлбиттә, Аллаһ әжерен бирер. Ләкин һинең үҙ-үҙеңде тотошоң беҙгә ҡаршы булып күренә ине, тимәк, һин фидиә түләргә тейеш»,* – тип бойора һәм уның үҙе менән булған 800 дирһәм алтынды һуғыш ғәнимәте рәүешендә тартып ала.

Ғәббәс: «Йә Рәсүлүллаһ! Һис булмаһа, ошоно фидиә тип һана!» – ти.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Юҡ! Ул – Аллаһ беҙгә насип ҡылған ғәнимәт»*, – тип белдерә.

Ғәббәс: «Йә Рәсүлүллаһ! Тимәк, ҡалған ғүмеремдә мине теләнеп йөрөргә мәжбүр итәһең!» – ти.

Быға ҡаршы Аллаһ Рәсүле:

*«Эй Ғәббәс! Ҡатының Өммөл-Фадлға биргән алтындар нәмә һуң ул ваҡытта?»* – тип һорағас, Ғәббәс аптырап ҡала: «Ниндәй алтындар?»

Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Һин Мәккәнән юлға ҡуҙғалыр көндө, янығыҙҙа Аллаһтан башҡа һис кем булмаған бер ваҡытта, ҡатының Өммөл-Фадлға: «Был сәфәрҙә мине ни көтәсәген белмәйем. Әгәр мин берәй бәхетһеҙлек, бәләгә тарыһам, ошо тиклеме – һинеке, был тиклеме – Ғубәйдуллаһтыҡы, был тиклеме – Фадлдыҡы, был тиклеме – Ҡусәмдеке һәм быныһы – Ғабдуллаһтыҡы» – тигән алтындарың!»* – тип асыҡлай.

Бындай һүҙҙәрҙән һуң шаҡ ҡатҡан Ғәббәс: «Һине Пәйғәмбәр итеп ебәргән Аллаһ менән ант итәм, быны минең менән Өммөл-Фадлдан ҡала бер кем дә белмәй ине. Һис шикһеҙ, Һин – Аллаһтың Рәсүле!» – ти (Әхмәт, I, 353; Ибне Сәғд, IV, 13-15).

Бәҙер әсирҙәре араһында Йәшәйеш нурының кейәүе, хәҙрәти Зәйнәбтең ире Әбүл-Ғәс ибн Рәбиғ тә була. Әбүл-Ғәс – Мәккәлә байлығы һәм алдынғы сауҙагәрлеге менән билдәле ышаныслы зат. Әсәһе Халә бинт Хувәйлид хәҙрәти Хәҙисәнең һеңлеһе була. Хәҙисә әсәбеҙ туғанының улы Әбүл-Ғәсте улы кеүек яҡын итә.

Ҡөрәйеш мөшриктәре Әфәндебеҙҙең кейәүҙәренә: «Һеҙ Мөхәммәттең ҡыҙҙарын алып, Уны ауырлыҡтан ҡотҡарҙығыҙ. Ҡыҙҙарын кире ҡайтарығыҙ, шулар менән мәшғүл булһын!» – тиҙәр. Ошо уҡ һүҙҙәрҙе Әбүл-Ғәскә лә әйтәләр: «Ҡатыныңдан айырыл! Ҡөрәйеш ҡатындарының ҡайһыһын теләһәң, һине шуның менән өйләндерербеҙ!» – тип юмалайҙар. Ләкин Әбүл-Ғәс: «Юҡ! Валлаһи, мин ҡатынымдан айырылмам һәм уның урынына ҡөрәйеш ҡатындарының береһен дә алырға теләмәйем!» – ти.

Мәккәлеләр әсирҙәре өсөн фидиә ебәрә башлағас, хәҙрәти Зәйнәб тә Әбүл-Ғәс өсөн бер аҙ мал һәм, кейәүгә сыҡҡанда, уға әсәһе Хәҙисә раҙыйаллаһу ғәнһә бүләк иткән муйынсаҡты ебәрә. Аллаһ Рәсүле муйынсаҡты күреп алыуға уҡ, бик күңеле тулып, йомшап китә һәм:

*«Әгәр Зәйнәбтең әсиренә ирек биреүҙе һәм малын ҡайтарыуҙы муафиҡ тип тапһағыҙ, шулай эшләгеҙ!»* – тип бойора.

«Ярай, йә Рәсүлуллаһ!» – тип, мосолмандар Әбүл-Ғәсте азат итә. Ебәрелгән мал менән муйынсаҡты иһә хәҙрәти Зәйнәбкә ҡайтаралар. Хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, ҡыҙы Зәйнәбте Мәҙинәгә ебәреү өсөн, Әбүл-Ғәстән һүҙ бирҙерә, уны ирекә сығарып, үҙенә ана шундай шарт ҡуя. Ләкин был шарт Аллаһ Рәсүле менән икеһе араһында ҡалырға тейеш була, һис кемгә һөйләмәҫкә ҡушыла (Ибне Һишам, II, 296-297; Әбү Дауыт, «Йыһат», 121/2692; Әхмәт, VI, 276).

❀

Ғөмәйер ибн Вәһбтең улы Вәһб тә Бәҙерҙә әсирлеккә эләгә. Ғөмәйер ҡөрәйеш мөшриктәренең алдынғы фекерле һәм ҡаһарман шәхестәренең береһе була. Мәккәлә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә һәм сәхәбәләргә бик күп ғазаптар килтерә. Бер көн Ғөмәйер Хижерҙә Сафуан ибн Өмәййәгә Бәҙерҙә ҡойоға ырғытылыусылар һәм улар тарыған ауырлыҡтар тураһында һөйләгәс, Сафуан ибн Өмәййә: «Валлаһи, улар ындай хәлгә тарығандан һуң, был ғүмерҙең мәғәнәһе юҡ!» – тип белдерә. Ғөмәйер: «Валлаһи, дөрөҫ әйттең! Әгәр бурысым һәм минән һуң аслыҡтан үлерҙәр, тип ҡурҡҡан балаларым булмаһа, һис шикһеҙ, барып, Мөхәммәтте үлтерер инем. Минең улар ҡабул итерлек һылтауым да бар: «Әсир төшкән улым хаҡына килдем», – тип әйтермен. Ишетеүемсә, Ул баҙарҙарҙа ла йөрөштөрә», – ти.

Ғөмәйерҙең ошо һүҙҙәре Сафуанды һөйөндөрә: «Бурысың миңә күсер. Һинең исемдән мин түләрмен! Бала-сағаңды ла үҙ балаларым менән бергә, иҫән-һау булған ваҡыттарынса үҙем бағырмын, тормоштарын яҡшылап тәьмин итермен!» – ти ул.

Шунан һуң Ғөмәйер ҡылысын шәпләп ышҡып үткерләй. Сафуан иһә уға дөйәһен һәм юл кәрәк-яраҡтарын әҙерләтә. Ғөмәйер, Мәҙинәгә килеп, мәсеттең ишек төбөндә туҡтай, дөйәһен бәйләп, ҡылысын тағып ҡуя. Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү уны күргәс: «Был – Аллаһ дошманы Ғөмәйер! Валлаһи, берәй яманлыҡ өсөн генә килгәндер! Арабыҙҙы боҙоусы, Бәҙер көнө ҡөрәйешлеләр өсөн һаныбыҙҙы самалап йөрөүсе шул түгел инеме?» – тип, Аллаһ Рәсүле янына инеп, хәбәрен еткерә: «Йә Рәсүлүллаһ! Теге Аллаһ дошманы Ғөмәйер ҡылысын тағып килгән!»

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Уны минең яныма ебәр!»* – тип бойора. Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү кире килә. Уның муйынындағы ҡылысының ҡайышын бик ныҡлап тотоп ала. Ансарҙарҙан шул тирәлә булыусыларға:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына кереп ултырығыҙ һәм Уны был яуыздан һаҡлағыҙ! Сөнки ул ышанысло бәндә түгел!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ иһә:

*«Әй Ғүмәр, уны ирektә ҡалдыр! Ә һин, Ғөмәйер, миңә яҡыныраҡ кил!»* – тип бойора һәм Ғөмәйерҙән ни өсөн килеүе тураһында һорай. Ғөмәйер: «Һеҙ әсир итеп алған улым хаҡына килдем! Уға ҡарата шәфҡәтле булһағыҙ ине!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Улайһа муйыныңдағы ошо ҡылыстың ни кәрәге бар?!»* – тип һорау бирә.

Ғөмәйер: «Аллаһ ҡылыстарҙың бәләһен ебәрһен! Уларҙың беҙгә ни файҙаһы булды һуң?» – ти.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡабат:

*«Миңә дөрөҫөн һөйлә, һин бында ниңә килдең?»* – тип һорай.

Ғөмәйер: «Мин башҡа бер нимә өсөн дә түгел, бары Һеҙҙең ҡулда әсир тотолған улым өсөн килдем!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Һин Хижерҙә Сафуанға ниндәй шарт ҡуйған инең?»* – тип һорағас, Ғөмәйер ҡурҡа ҡала һәм: «Мин уға ниндәй шарт ҡуйҙым һуң?» – тип аптырап һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уларҙың әңгәмәләрен һүҙгә-һүҙ тапшырып:

*«Аллаһ һин ҡылырға йыйынған эш менән һинең араға кереп, ҡомасаулыҡ яһаны!»* – тип асыҡлай.

Шунан һуң Ғөмәйер: «Мин шәһәҙәт килтерәм, Һин, һис шикһеҙ, Аллаһтың Рәсүле! Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ күктәрҙән килгән хәбәр һәм Һиңә иңгән вәхи мәсьәләһендә Һине алдай инек. Был эште минән һәм Сафуандан ҡала һис кем белмәй ине. Валлаһи, был хәбәрҙе Һиңә Аллаһ ҡына биргән! Мине ислам һидәйәтенә ирештереп, бында килтереүсе Аллаһҡа маҡтауҙар булһын!» – тигәс, шәһәҙәт килтерә. Артабан Аллаһ Рәсүле:

*«Ҡәрҙәшегеҙгә динен яҡшылап төшөндөрөгөҙ! Үҙенә Ҡөрьән уҡып өйрәтегеҙ! Әсирен дә азат итегеҙ!»* – тип әмер бирә.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһенең бойороғо шундуҡ еренә еткерелә. Ғөмәйер: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин Аллаһ нурын һүндерергә маташҡан һәм мосолмандарҙы яуыздарса ғазаплаған заттарҙың береһе инем. Рөхсәт итһәң, Мәккәгә ҡайтып, мәккәле мөшриктәрҙе Аллаһҡа, Уның Рәсүленә һәм исламға саҡырайым. Аллаһ уларға һидәйәт насип итеренә өмөтләнәм», – тип мөрәжәғәт итә. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға рөхсәтен бирә.

Был ваҡытта Сафуан ибн Өмәййә уҙған хәлдәрҙән хәбәрҙар булмайынса, Мәккәле мөшриктәргә: «Бер нисә көн эсендә һеҙгә киләсәк хәбәр менән һөйөнөрһегеҙ. Ул һеҙгә Бәҙер һуғышы ҡайғыһын онотторасаҡ!» – ти, ҡайтыусы-барыусы каруансыларҙан хәбәр һораштырып тора. Ниһәйәт, бер атлы ғәскәри уға Ғөмәйерҙең мосолман булыуын белдерә.

Ғөмәйер ибн Вәһб раҙыйаллаһу ғәнһү, Мәккәгә килгәс, кешеләрҙе исламға өндәү эшенә керешә. Ҡаршы килеүселәргә һабаҡ биреп, сик-мөмкинлектәрен аңлата. Уның тырышлығы менән шаҡтай күп кеше исламды ҡабул итә. Хәҙрәти Ғөмәйер бер көндө Ҡәғбә янында Сафуан ибн Өмәййәне осратып, уға: «Һин – өлкәндәребеҙҙең береһе! Беҙҙең таштарға табынғаныбыҙҙы һәм улар өсөн ҡорбандар салыуыбыҙҙы күрмәйһеңме әллә? Ошо ла булдымы дин? Аллаһтан башҡа илаһ юҡ икәнлегенә мин шәһәҙәт килтерәм! Мөхәммәт

иһә Аллаһтың ҡоло һәм Рәсүлелер!» – ти. Сафуан уға бер һүҙ ҙә әйтә алмай, ауыҙына һыу ҡапҡандай өндәшмәй ҡала (Ибне Һишам, II, 306-309; Ваҡыди, I, 125-128; Ибне Сәғд, IV, 199-201).

Әлеге ваҡиға: «Һине үлтерергә килеүсе һиндә терелһен!» – тигән ҡағиҙәнең иң күркәм үрнәктәренән береһе булараҡ, мөьмин күңелдәрҙә урын ала.

Бәҙерҙә мөшриктәрҙең юлбашсылары үлтерелеп, әсирҙәр ҡулдары муйындарына бәйләнгән хәлдә Мәҙинәгә килтерелгәс, Аллаһ Тәғәлә Мәҙинәләге мөшрик, монафиҡ һәм йәһүдиҙәрҙе хурлыҡҡа ҡалдыра. Ғабдуллаһ ибн Үбәй һәм уның менән бергә эш йөрөткән мәҙинәле мөшриктәр: «Хәҙер инде еңеү һәм өҫтөнлөк Уға йүнәлгән!» – тип, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ислам дине өсөн ант килтерергә мәжбүр булалар.[115]

### Ғәниməттәр тураһында хөкөм

Ғәниməттәр хаҡында ислами ҡағиҙә әле асыҡланмағанға, Бәҙерҙә яуланған ғәниməттәрҙе бүлешеү мәсьәләһендә бәхәс ҡуба. Айырым алғанда, Бәҙерҙә бер туғаны шәһит киткән Сәғд ибн Әбү Вәҡҡас, үҙе үлтергән Сәғид ибн Ғәстең ҡылысын алып, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килә һәм был ҡоралдың үҙенә бирелеүен талап итә. Ана шул ваҡиға һәм талаптар менән бәйле рәүештә, әле Бәҙерҙән киткәнсе һәм ғәниməттәр бүленгәнсе үк, «Әнфәл» сүрәһенең тәүге аяты иңә:

يَسْأَلُونَكَ عَنِ الْأَنْفَالِ قُلِ الْأَنْفَالُ لِلّٰهِ وَالرَّسُولِ فَاتَّقُوا اللّٰهَ
وَأَصْلِحُوا ذَاتَ بَيْنِكُمْ وَأَطِيعُوا اللّٰهَ وَرَسُولَهُ إِنْ كُنْتُمْ مُؤْمِنِينَ.

**«Һинән ғәниməттәр тураһында һорайҙар. Әйт: «Ғәниməттәр – Аллаһтыҡы һәм Уның Рәсүленеке. Шуға күрә әгәр һеҙ ысындан да мөьминдәр икәнһегеҙ, Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм бер-берегеҙ менән араларҙы яҡшыртығыҙ. Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә итәғәт ҡылығыҙ!»** («әл-Әнфәл», 1).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был ғәниməттәрҙе һуғышта ҡатнашҡан мөжәһидтәргә Мәҙинәгә яҡын бер урында тигеҙ итеп һәм тейешенсә бүлеп бирә.[116]

Һуңыраҡ шул уҡ сүрәнең һуғыш ғәниməттәре менән бәйле тәфсилле хөкөмдәр кергән 41-се аяты иңә:

وَاعْلَمُوا أَنَّمَا غَنِمْتُمْ مِنْ شَيْءٍ فَأَنَّ لِلّٰهِ خُمُسَهُ وَلِلرَّسُولِ وَلِذِى الْقُرْبَى

115. Бохари, «Тәфсир», 3/15; Ваҡыди, I, 121.
116. Әхмәт, I, 178; V, 323-324; Әбү Дауыт, «Йыһат», 144-145/2737-2744.

وَالْيَتَامَى وَالْمَسَاكِينِ وَابْنِ السَّبِيلِ إِنْ كُنْتُمْ آمَنْتُمْ بِاللهِ وَمَا أَنْزَلْنَا عَلَى عَبْدِنَا يَوْمَ الْفُرْقَانِ يَوْمَ الْتَقَى الْجَمْعَانِ وَاللهُ عَلَى كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرٌ.

**«Шуны ла белегеҙ: ғәнимәт сифатында һеҙ алған һәр нәмәнең биштән бере, мәжбүри рәүештә, Аллаһ өсөн. Ул Пәйғәмбәргә һәм Уға яҡын булғандарға, йәтимдәргә, меҫкендәргә һәм юлда ҡалыусыларға тейеш. Әгәр һеҙ Аллаһҡа ышанһағыҙ, хаҡ менән батылды айыра торған ул көндө – ике ғәскәр осрашҡан шул** (Бәҙер) **көндө ҡолобоҙға иңдергән аяттарға иман килтерһәгеҙ, быны шулай тип танығыҙ. Һәм, белегеҙ ки, Аллаһ һәр нәмәгә ҡөҙрәтле»** («әл-Әнфәл», 41).

Әлеге аятҡа күрә, ғәнимәттәрҙең биштән бере – Аллаһтыҡы, Уның Рәсүлenеке, Пәйғәмбәрҙең туғандарыныҡы, йәтимдәрҙеке, мохтаждарҙыҡы һәм юлда ҡалыусыларҙыҡы. Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙ өлөшө менән ғаилә ағзаларының ихтыяжын ҡәнәғәтләндергәндән һуң, артып ҡалған өлөшөн ҡаҙнаға кертә һәм уны мосолмандарҙың ихтыяждары һәм ғәскәр сығымдары өсөн тота.[117]

Ғамр ибне Ғабәсә разыйаллаһу ғәнһү риүәйәт ҡыла:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡибла йүнәлешендә (пәрҙә, «сүтрә»[118] сифатында) бер ғәнимәт дөйәһен ҡуйып, беҙгә намаҙ ҡылдырҙы. Намаҙ уҡығас, хайуандың ян яғынан бер төк алды ла (ҡулына тотоп күрһәтә-күрһәтә):

*«Ғәнимәтегеҙҙең биштән беренән ҡала хатта ошо тикләһе лә миңә хәләл түгел. Өҫтәүенә, биштән бере лә һеҙгә ҡайтарыла (һеҙҙең өсөн тотола)», –* тип белдерҙе» (Әбү Дауыт, «Йыһат», 149/2755).

Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм юғын да, барын да мохтаж сәхәбәләренә бирә. Юғиһә, күп ваҡыт үҙ өйөндә усаҡ та янмай, ашарға ла бешерелмәй. Уның һәм ғаиләһенең, гөмүмән алғанда, хатта бер көнлөк ризыҡтарының да булмауы бик күп риүәйәттәрҙән аңлашыла. Уның был мәсьәләләге әҙәплелеген түбәндәге риүәйәт бик асыҡ күрһәтә.

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә Бәхрәйндән мал килтерҙеләр. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Уны мәсеткә бушатығыҙ!»* – тип бойорҙо. Әлеге мал (ошо көнгә ҡәҙәр) Аллаһ Рәсүленә алып килгәндәрҙең иң күплеһе, күләмлеһе ине. Рәсүлүллаһ

117. Бохари, «Фәраиз», 3, Хумус, 1, «Нафакат», 3; Мөслим, «Йыһат», 49.

118. **Сүтрә** – пәрҙә, япма, ҡапланасаҡ нәмә тигән мәғәнә белдерә. Намаҙ уҡыусы кешенең ҡаршына ҡуйылған һәм был ваҡытта уның алдынан уҙыусыларҙың намаҙға зарар килтереүҙәренә ҡомасаулай.

салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм намаҙға китте һәм малға бер ҙә күҙ һалманы. Намаҙ бөткәс, үтеп китешләй, мал янында туҡтаны. Күҙенә салынған һәр кемгә шунан бер өлөш бирҙе... Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һуңғы дирһәмгә ҡәҙәр таратылып бөткәнсе, шунан китмәне» (Бохари, «Саләт», 42, «Жизйә», 4, «Йыһат», 172).

❁

Ҡөрьәни-Кәримдәге «Әнфәл» сүрәһе Мәҙинәлә, һижрәттән һуң икенсе йылда иңдерелә. Зур өлөшө Бәҙер һуғышы тураһында булғанға һәм Бәҙер һуғышы көндәрендә иңдерелгәнгә, был сүрәне **«Бәҙер сүрәһе»** тип тә атайҙар.

### Шәһитлек дәрәжәһе

Шәһитлек мәртәбәһе – бер мөьмин был донъяла ирешә алырҙай иң юғары, иң һуңғы дәрәжә. Йәннәттең иң түбән дәрәжәһе лә бар донъянан хәйерлерәк булған хәлдә шәһит, был дәрәжәнең юғарылығы һәм йәннәттәге олуғ әжерҙәрҙең ҙурлығы сәбәпле, донъяға ҡабат-ҡабат ҡайтып, ҡат-ҡат шәһит китеүҙе теләр. Йәнәбел-Хаҡ былай ти:

وَلَئِنْ قُتِلْتُمْ فِى سَبِيلِ اللّٰهِ أَوْ مُتُّمْ لَمَغْفِرَةٌ مِّنَ اللّٰهِ وَرَحْمَةٌ خَيْرٌ مِّمَّا يَجْمَعُونَ.

**«Әгәр Аллаһ юлында үлтерелһәгеҙ йәки үлһәгеҙ, шуны белегеҙ: Аллаһтың мәғфирәте һәм рәхмәте улар йыйған һәр нимәнән хәйерлерәк»** («Әлү Ғимран», 157).

Сәғд ибне Әбү Вәҡҡас раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм беҙгә намаҙ уҡытҡанда берәү килде. Сафҡа баҫҡас: «Аллаһым, миңә изге ҡолдарыңа биргәндең иң фазиләтлеһен бир!» – тип доға ҡылды. Нәбиййи Әкрәм Әфәндебеҙ намаҙҙы тамамлағас:

*«Бынан бер аҙ ғына әүәлерәк доға ҡылыусы кем ине?»* – тип һораны. Теге бәндә: «Мин инем, йә Рәсүлүллаһ!» – тип ауаз һалды. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Улайһа, атың йығыласаҡ һәм һин Аллаһ юлында шәһит китәсәкһең»,* – тип белдерҙе (Хаким, I, 325/748).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәхәбәләренән ҡай берҙәренең шәһитлеге тураһында алдан хәбәр итеп һөйөндөрә. Ҡайһы бер сәхәбәләр һуғышҡа кергәндә, Ул улар өсөн Аллаһтан рәхмәт һәм мәғфирәт һорап доға ҡыла. Рәсүлүллаһтың ундай сәхәбәләренә лә шәһитлек дәрәжәһе насип ителә. Мәҫәлән, Ғамир ибне Әҡва

разыйаллаһу ғәнһү тураһында шундай доға ҡылған була, күп тә үтмәй ул Хәйбәрҙә шәһит китә.[119]

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ доғаларындағы мәғфирәт үтенесенең шәһит китеү рәүешендә ысынға ашыуы – шәһитлек мәртәбәһенең ни ҡәҙәр юғары дәрәжә булыуына тағы бер дәлил. Әфәндебеҙ доғаһының шул рәүешле үтәлеүен күргән әсхәбе кирам да был доғаларҙы шәһитлек хәбәре сифатында ҡабул итә.

Әбу Катагъдә разыйаллаһу ғәнһү риүәйәтенә күрә, бер көндө Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәхәбәләр араһында тороп баҫа ла:

*«Аллаһ юлында йыһат һәм Аллаһҡа иман килтереү – ғәмәлдәрҙең иң фазиләтлеһе»,* – тип хәтерләтә. Шунан һуң бер кеше баҫып:

«Йә Рәсүлүллаһ! Әгәр Аллаһ юлында үлтерелһәм, был минең гонаһтарыма кәфарәт булырмы?» – тип һорай.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға:

*«Эйе, әгәр һин сабыр итеп, әжерен бары Аллаһтан көтөп, һуғыш ҡырынан ҡасмайынса дошманға ҡаршы тороп Аллаһ юлында үлтерелһәң, гонаһтарың ярлыҡаныр. Ләкин бурыстарың был хисапҡа кермәй. Миңә быны Ябраил һөйләне»,* – тине (Мөслим, «Имарә», 117; Тирмизи, «Йыһат», 33/1712).

Башҡа бер риүәйәттә Пәйғәмбәребеҙҙең бындай һүҙҙәре тапшырыла:

*«Ҡол хаҡынан ҡала Аллаһ шәһиттең бөтә гонаһтарын ғәфү итер»* (Мөслим, «Имарә», 119).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер ваҡыт сәхәбәләренә былай тип һөйләй:

*«Был төн төшөмдә ике кеше күрҙем. Яныма килеп, мине бер ағасҡа мендерҙеләр, унан һуң бер өйгә алып килделәр. Ул өй бығаса һис күрмәгән матур һәм зиннәтле ине. Һуңынан теге ике кеше миңә: «Әлеге тиңһеҙ йорт – шәһиттәр һарайы ул», – тине»* (Бохари, «Йыһат», 4; «Жәнаиз», 93).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәхәбәләрҙән шәһит булыусыларға ҡарата бик яҡын, йылы мөғәмәлә һаҡлай, уларға шәхсән илтифат күрһәтә, уларҙың йәннәткә керәсәктәре тураһында һөйөнөслө хәбәрен еткерә, шул рәүешле уларҙың яҡындарын да йыуата, әсхәбе кирамында шәһитлек дәрәжәһенә ынтылыш та уятырға тырыша.

Жабир разыйаллаһу ғәнһү былай ти:

«Атайымдың «мүслә»[120] ҡылынған жәсәден алып килеп, Нәби Әкрәм Әфәндебеҙ ҡаршына ҡуйҙылар. Йөҙөн асыу өсөн алға сыҡтым. Ләкин ундағы

119. Мөслим, «Йыһат», 123, 132; Бохари, «Магази», 138.

120. **Мүслә** – үлтерелгән кешенең танауын, ҡолағын һәм башҡа ағзаларын киҫеп, күҙҙәрен соҡоп алыу. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм кешеләргә һәм хатта хайуандарға ҡарата ла мүслә ҡылыныуын ҡәтғи тыя (Бохари, «Мәзалим», 30, «Зәбаих», 25; Әбү Дауыт, «Йыһат», 110).

халыҡ, ҡайғым тағы ла нығыраҡ ауыраймаһын тип, быға юл ҡуйманы. Шунан һуң Нәби саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Фәрештәләр туҡтауһыҙ уны ҡанаттары менән күләгәләй»,* – тине» (Бохари, «Жәнаиз», 3, 35, «Йыһат», 20; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сахабә» 129-130).

Ысынында, шәһит китеү үлеү түгел, беҙ айыра, аңлай алмаған бер тормош рәүешендә мәңге ниғмәттәргә лайыҡ булыу ул. Был күҙлектән ҡарағанда, Аллаһ Тәғәлә шәһит ҡолдары тураһында «үле», тип әйтмәҫкә ҡуша. Аяти кәримәләрҙә әйтелә:

وَلَا تَقُولُوا لِمَنْ يُقْتَلُ فِى سَبِيلِ اللهِ أَمْوَاتٌ بَلْ أَحْيَاءٌ وَلَكِنْ لَّا تَشْعُرُونَ.

**«Аллаһ юлында үлтерелгәндәр тураһында «үлеләр», тимәгеҙ. Киреһенсә, улар –тереләр, ләкин һеҙ быны аңламаҫһығыҙ»** («әл-Баҡара», 154).

وَلَا تَحْسَبَنَّ الَّذِينَ قُتِلُوا فِى سَبِيلِ اللهِ أَمْوَاتًا بَلْ أَحْيَاءٌ عِنْدَ رَبِّهِمْ يُرْزَقُونَ. فَرِحِينَ بِمَا آتَاهُمُ اللهُ مِنْ فَضْلِهِ وَيَسْتَبْشِرُونَ بِالَّذِينَ لَمْ يَلْحَقُوا بِهِمْ مِّنْ خَلْفِهِمْ أَلَّا خَوْفٌ عَلَيْهِمْ وَلَا هُمْ يَحْزَنُونَ. يَسْتَبْشِرُونَ بِنِعْمَةٍ مِّنَ اللهِ وَفَضْلٍ وَأَنَّ اللهَ لَا يُضِيعُ أَجْرَ الْمُؤْمِنِينَ.

**«Аллаһ юлында үлтерелгәндәрҙе үле тип һанай күрмәгеҙ. Киреһенсә, улар тереләр! Аллаһтың рәхмәте һәм йомартлығы менән үҙҙәренә бирелгәндәргә һөйөнгән халәттә, улар Раббылары янында ризыҡландырыла. Арттарынан киләсәк һәм әле үҙ араларына кермәгән шәһит ҡәрҙәштәренә лә бер ниндәй ауыртыу һәм ҡурҡыу юҡлығы тураһында, уларҙың һис ҡайғы белмәйәсәктәре тураһында хәбәр итергә теләрҙәр. Улар Аллаһтан бирелгән ниғмәт-муллыҡҡа ҡыуанырҙар**» («Әлү Ғимран», 169-171).

Ғаләмдәрҙең Раббыһы маҡтаған шәһиттәрҙең кешеләр тарафынан да тәрән хөрмәт менән иҫкә алынырға тейешлеген Зия Паша үҙенең бер бәйетендә бик күркәм белдергән:

*«Кем кешеләргә ярҙамға йүгереп, улар өсөн йәнен ҡорбан итһә, бөтә кешелек ҡиәмәткәсә ул заттың исемен хөрмәт менән иҫкә алыр».*

Ҡиәмәт көнө шәһиттәр тәндәренән яңы ғына яраланғандай аҡҡан таҙа ҡан һәм был ҡандарҙан тирә-яҡҡа таралған мисектәй хуш еҫ менән айырылып торор. Кешеләр уларҙың фазиләт һәм дәрәжәһенә шаһитлыҡ ҡылыр. Шуға күрә шәһиттәрҙең мөбәрәк ҡаны һәм жәсәде йыуылмаҫ.

Шәһит китеү ваҡытында Хаҡ Тәғәләнең үҙ ҡолдарына биргән еңеллеге тураһында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Һеҙҙән берегеҙ ҡырмыҫҡа тешләгәндә ни ҡәҙәр ауыртыу һиҙһә, шәһит китеүсе зат та үлем миҙгелендә шул ҡәҙәр ауыртыу тойор»* (Тирмизи, «Фәзаилүл-йыһат», 26/1668; Нәсаи, «Йыһат», 35; Ибне Мәжә, «Йыһат», 16).

Аллаһ Тәғәлә ҡолдарын шәһитлеккә өндәү маҡсатында аятта әйтә:

فَلْيُقَاتِلْ فِى سَبِيلِ اللّٰهِ الَّذِينَ يَشْرُونَ الْحَيَاةَ الدُّنْيَا بِالْآخِرَةِ وَمَنْ يُقَاتِلْ
فِى سَبِيلِ اللّٰهِ فَيُقْتَلْ أَوْ يَغْلِبْ فَسَوْفَ نُؤْتِيهِ أَجْرًا عَظِيمًا.

**«Ул осраҡта** (ваҡытлы) **донъя тормошон,** (мәңгелек) **әхирәт тормошо бәрәбәренә һатасаҡ заттар Аллаһ юлында һуғышһындар. Кем Аллаһ юлында һуғышып үлтерелһә йәки еңеү яулаһа, һәр ике осраҡта ла Беҙ уға иртәгә бик ҙур әжер-бүләк бирәсәкбеҙ»** («ән-Ниса», 74).

Бар ихласлығы менән шәһитлеккә ынтылған Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ был тойғоларҙы былдай һүҙҙәр менән белдергән:

*«Өммәтемә ауырлыҡ килмәҫлек булһа, һис бер хәрби походтан ҡалмай, барыһына ла ҡатнашыр инем. Аллаһ юлында шәһит китергә, һуңынан, терелтелеп, ҡабат шәһит булырға, йәнә терелтелеп, тағын шәһит булырға теләр инем»* (Бохари, «Иман», 26; Мөслим, «Имарә», 103, 107).

❁

Бер көндө Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ хәҙрәти Ғүмәр өҫтөндә бер күлдәк күреп ҡала:

*«Был күлдәгең яңымы, әллә йыуылғанмы?»* – тип һорай. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Юҡ, яңы түгел, инде йыуылған күлдәк, йә Рәсүлүллаһ!» – тигәс:

*«Яңыны кей, хәмед-сәнәләр әйтеп йәшә, шәһит булып үл!»* – тип өндәй (Әхмәт, II, 89).

Пәйғәмбәрҙәр хөрмәтлеһе Әфәндебеҙ шул рәүешле хәҙрәти Ғүмәргә шәһитлек тураһында хәбәрен дә ирештергән булып сыға.

Йәнә бер көн хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ хәҙрәти Әбү Бәкер, Ғүмәр һәм Ғосман разыйаллаһу ғәнһүм әжмәғин менән бергә Өхөд тауына менә. Шул ваҡыт тау һелкенә башлай. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе аяғы менән ергә тибеп:

*«Һағырак бул, эй Өхөд! Һинең өҫтөңдә бер Пәйғәмбәр, бер ситдыҡ һәм ике шәһит бар»* (Бохари, «Әсхәбүн-Нәби», 6; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 18/3703; Нәсаи, «Ахбас», 4).

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Аллаһым, мине Үҙ юлында шәһит китеү һәм Рәсүлеңдең шәһәрендә үлем менән бәхетле ҡыл!» – тип ялбара торған була (Бохари, «Фәзаилүл-Мәҙинә», 12). Аллаһ уға был дәрәжәне насип ҡыла. Хәҙрәти Ғүмәрҙең ҡыҙы – Хафса әсәбеҙ һөйләгәндәрҙән:

«Атайымдың был доғаһын ишеткәс ғәжәпкә ҡалдым да:

«Нисек була инде ул? (Мәҙинәлә үлергә һәм шул уҡ ваҡытта шәһит китергә теләйһең!)» – тип һораным.

«Аллаһ теләһә, быны ысынға ашырыр», – тине».

Хәҙрәти Ғүмәр шәһит киткәнсе, кешеләр был мәсьәләлә аптырап йөрөй һәм быны нисек тормошҡа ашасағы менән ҡыҙыҡһыналар (Ибне Хәжәр, *«Фәтхул-Барый»,* IV, 101).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәр мосолмандың шәһитлеккә ынтылырға тейешлегенә ишара итеп, былай ти:

*«Аллаһ Тәғәләнән бөтә йөрәге менән шәһитлек теләүсе зат ятағында үлһә лә, Аллаһ уға шәһитлек мәртәбәһен насип ҡылыр»* (Мөслим, «Имарә», 157; Нәсаи, «Йыһат», 36).

*«Шәһитлекте күңел менән теләгән зат, шәһит үлеме менән китмәһә лә, сауабына лайыҡ булыр»* (Мөслим, «Имарә», 156).

Шул уҡ ваҡытта Аллаһ Рәсүле бер төркөм кешеләрҙе лә шәһит дәрәжәһендә ҡабул итә. Мәҫәлән, бер ваҡыт ул сәхәбәләренә ошондай һорау бирә:

*«Һеҙ кемдәрҙе шәһит тип һанайһығыҙ?»*

Сәхәбәләр: «Йә Рәсүлүллаһ! Кем Аллаһ юлында үлтерелә, шул шәһит була!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Улайһа, өммәтемдең шәһиттәре шаҡтай әҙҙер»,* – тип белдерә.

Әсхәбе кирам: «Йә Рәсүлүллаһ, улай булғас, кемдәр шәһит һуң!» – тип ҡыҙыҡһына.

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ юлында үлтерелеүсе – шәһит; Аллаһ юлында үлеүсе – шәһит; йоғошло ауырыуҙан үлеүсе – шәһит; эс китеүҙән үлеүсе – шәһит; батып үлеүсе – шәһит»,* – тип асыҡлай (Мөслим, «Имарә», 165; Ибне Мәжә, «Йыһат», 17).

Башҡа риүәйәттәрҙә Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм малы, нәҫеле, дине һәм ғаиләһен яҡлағанда үлтерелгән заттарҙың да шәһитлеккә ирешәсәген хәбәр итә.[121]

121. Ҡарағыҙ: Бохари, «Мәзалим», 33; Мөслим, «Иман», 226; Әбү Дауыт, «Сөннәт», 28-29; Тирмизи, «Дият», 21.

**Пәйғәмбәребеҙҙең ҡыҙы хәҙрәти Зәйнәбтең Мәҙинәгә килтерелеүе**

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең кейәүе, Бәҙерҙә әсирлеккә төшкән Әбүл-Ғәс, иреккә ебәрелеп, Мәккәгә ҡайтҡас, ҡатыны Зәйнәб разыйаллаһу ғәнһәнең Мәҙинәгә китеүенә рөхсәт бирә. Бәҙерҙән бер ай йәки шул сама ваҡыт уҙғас, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Зәйд ибн Харисә менән ансарҙарҙан берәүҙе ебәреп, уларҙы:

*«Зәйнәб яныгыҙға килгәнсе, Йәьжиж үҙәнлегендә торогоҙ. Зәйнәб менән шунда осрашкас, уны миңә алып килерһегеҙ»,* – тип киҫәтә.

Әбүл-Ғәс Зәйнәб разыйаллаһу ғәнһәгә атаһы янына китергә ҡуша. Ҡатыны әҙерләнә башлай. Әбүл-Ғәстең ҡустыһы Кинанә Зәйнәб атланып барасаҡ дөйәне алып килә. Хәҙрәти Зәйнәб дөйәнең үркәсе өҫтөнә ҡуйылған һәм хавдәж тип аталған ҡаплаулы эйәр өҫтөнә ултыра. Йәйәһен һәм һаҙағын (уҡ һауытын) иңбашына һалған Кинанә, дөйәнең нуҡтаһынан тотоп, Мәккәнән юлға ҡуҙғала.

Ҡөрәйеш мөшриктәре араһында был ваҡиға тураһында һүҙ таралғас, бер төркөм кешеләр хәҙрәти Зәйнәбте кире бороу өсөн шундуҡ ҡыуа сыға. Зытува тигән ерҙә уны ҡыуып тоталар. Хәббар ибн Әсвәд хавдәж эсендәге Зәйнәб разыйаллаһу ғәнһәгә һөңгөһө менән төртөп, уны бер таш өҫтөнә йығып төшөрә. Хәҙрәти Зәйнәб ул ваҡытта йөклө була. Ҡанға батҡан ҡатындың шунда балаһы төшә. Хәҙрәти Зәйнәб бик ауыр хәлдә була. Кинанә ергә теҙләнеп, һаҙағынан уҡ сығара һәм: «Берегеҙ ҙә яҡын килмәгеҙ! Югиһә, уҡ атасаҡмын!» – тигәс, ҡыуа килеүселәр, боролоп, эҙәрлекләүҙән баш тарта.

Әбү Суфьян ҡайһы бер ҡөрәйеш мөшриктәре менән шунда килә. «Эй бәндә! Беҙгә уҡ атыуҙан тыйыл! Һинең менән һөйләшеп алайыҡ!» – ти ул Кинанәгә. Кинанә ҡорал ҡулланмаҫҡа була. Әбү Суфьян, Кинанәнең янына килеп: «Һин дөрөҫ эшләмәнең! Бер ҡатынды халыҡ күҙ алдында ап-асыҡ рәүештә юлға алып сыҡтың. Юғиһә, һин беҙ күргән ауырлыҡтарҙы һәм Мөхәммәт арҡаһында башыбыҙға төшкән бәләләрҙе беләһең! Ҡыҙын халыҡ ҡаршында ошолай асыҡтан-асыҡ беҙҙең аранан алып китеп, Уға илтеп биргән осраҡта, кешеләр быны беҙ тарыған ҡыйынлыҡтар арҡаһында түбәнселек ғәләмәте, зәғифлегебеҙ һәм көсһөҙлөгөбөҙҙөң бер нәтижәһе, тип уйлаясаҡ. Ғүмерем менән ант итәм, Зәйнәбтең атаһы янына ебәрелмәйсә, Мәккәлә тотолоуы беҙҙең өсөн һис мөһим түгел. Бында ниндәйҙер үс алыу тураһында ла һүҙ бармай беҙҙең өсөн. Һин мине тыңла ла уны хәҙер Мәккәгә кире алып ҡайт! Тауыш-ғауға тынғас, кешеләр уны кире ҡайтарыуыбыҙға инанғандан һуң, йәшерен рәүештә Мәккәнән алып сығырһың да атаһына илтерһең!» – ти.

Кинанә ул әйткәнсә эшләй. Бер нисә төн Мәккәлә йәшәп, ризаһыҙлыҡ тауыштары бөткәнен көтөп тора ла бер төндө хәҙрәти Зәйнәб менән бергә

юлға сыға. Уны Йәәжиждә көтөп тороусы Зәйд ибн Харисә менән дуҫына тапшыра. Улар иһә хәҙрәти Зәйнәбте мөхтәрәм атаһы янына алып ҡайта.[122]

Һижри менән алтынсы йылда Әбүл-Ғәс үҙе етәкләгән бер ҡөрәйеш каруаны менән ҡабат әсирлеккә эләгә. Сәхәр ваҡытында Аллаһ Рәсүленең ҡыҙы хәҙрәти Зәйнәбкә: «Минең өсөн атайыңдан мәрхәмәт һора!» – тип хәбәр ебәрә. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ мосолмандарға иртәнге намаҙын уҡытҡан ваҡытта, Зәйнәб үҙенең кескенә бүлмәһенән башын сығарып: «Әй кешеләр! Мин – Рәсүлүллаһтың ҡыҙы Зәйнәб! Әбүл-Ғәсте үҙ химаяма алдым!» – тип ауаз һала. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Һин химаяға алған кешене беҙ ҙә химаябыҙға алдыҡ!»* – тип белдерә. Үҙ янына Аллаһ Рәсүле килгәс, Зәйнәб раҙыйаллаһу ғәнһә: «Әбүл-Ғәс – ҡәрҙәш кеше һәм балаларымдың атаһы. Шуға күрә уны химаяма алдым!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ мөжәһидтәргә:

*«Әгәр уға малын кире биреүҙе ярашлы тип тапһағыҙ, ҡайтарығыҙ! Бирергә теләмәһәгеҙ, уныһы – һеҙҙең хаҡ!»* – тип мөрәжәғәт итә.

Мөжәһидтәр: «Юҡ, йә Рәсүлүллаһ! Беҙ малдарҙы уға кире ҡайтарасаҡбыҙ!» – ти.

Әбүл-Ғәс кире алған мал-мөлкәте менән Мәккәгә ҡайта. Һәр кемгә малдарын тапшырып, эшен бөтөргәс: «Әй ҡөрәйеш йәмәғәте! Берәйегеҙгә малын бирмәй ҡалманыммы?» – тип һорай. «Юҡ! Валлаһи, ҡалманы!» – тиҙәр. Әбүл-Ғәс: «Һеҙгә биргән антымды үтәнемме?» – тип һорай. «Эйе! Валлаһи, үтәнең! Аллаһ һине хәйере менән бүләкләһен! Беҙ һине хөрмәтле һәм ышаныслы кеше, тип белдек!» – тип яуап бирәләр.

Әбүл-Ғәс: «Валлаһи, янығыҙға килгәнсе, Мәҙинәлә мосолман булыуыма ҡомасаулаған нәмә – малдарығыҙҙы ҡулға төшөрөү өсөн исламға кереүемде уйлауығыҙҙан ҡурҡыу ине. Мин шәһәҙәт килтерәм: Аллаһтан башҡа һис бер илаһ юҡ. Һәм йәнә шәһәҙәт килтерәм: Мөхәммәт – Аллаһтың ҡоло һәм Рәсүле!» – тип белдерә һәм Мәҙинәгә, Аллаһ Рәсүле янына ҡайта.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға, элеккесә никах йолаһы менәнме, яңыса никах менәнме, Зәйнәбте кире бирә (Ваҡыди, II, 553-554; Ибне Сәғд, VIII, 32-33).

### Йәһүдиҙәр һәм Бану Ҡәйнукәғ һуғышы

(Һижри 2-се йыл шәүүәле / 624 йылдың апреле)

Мәҙинә тирәһендә шаҡтай күпләп йәшәгән йәһүдиҙәр бер Пәйғәмбәр ебәреләсәге тураһында үҙ ваҡытында ғәрәптәргә лә һөйләп йөрөйҙәр. Уны үҙ араларынан сығасаҡ, тип уйлап, был хәбәрҙе тирә-яҡҡа сәсеү-таратыуҙан бер

122. Ибне Һишам, II, 297-299; Ибне Габдилбәрр, IV, 1854; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 362-363.

ҙә тартынмайҙар. Ләкин Ахырзаман Пәйғәмбәре хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең үҙҙәренән түгел, ғәрәптәр араһынан сығыуы бик ҙур көнләшеүгә килтерә. Шундуҡ дәррәү, һүҙҙәрен башҡаға бороп, Уның пәйғәмбәрлеген инҡар итеүгә керешәләр. Аллаһ Тәғәлә улар хаҡында былай тип белдерә:

وَإِذْ أَخَذْنَا مِيثَاقَ بَنِى إِسْرَائِيلَ لَا تَعْبُدُونَ إِلَّا اللهَ وَبِالْوَالِدَيْنِ إِحْسَانًا وَذِى الْقُرْبَى وَالْيَتَامَى وَالْمَسَاكِينِ وَقُولُوا لِلنَّاسِ حُسْنًا وَأَقِيمُوا الصَّلَوةَ وَآتُوا الزَّكَاةَ ثُمَّ تَوَلَّيْتُمْ إِلَّا قَلِيلًا مِّنْكُمْ وَأَنْتُمْ مِّعْرِضُونَ.

**«Заманында Беҙ Исраил улдарынан бары Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡыласаҡһығыҙ, ата-әсәгә, яҡын туғандарға, йәтимдәргә, меҫкендәргә игелектә буласаҡһығыҙ, тип һүҙ бирҙергән инек һәм: «Кешеләргә күркәм нәмәләр һөйләгеҙ, намаҙ ҡылығыҙ һәм зәкәт бирегеҙ!» – тип тә бойорған инек. Ахырҙа, бик әҙҙәрегеҙҙән ҡала, йөҙ сөйөреп, боролоп киттегеҙ»** («әл-Баҡара», 83).

بِئْسَمَا اشْتَرَوْا بِهِ أَنْفُسَهُمْ أَنْ يَكْفُرُوا بِمَا أَنْزَلَ اللهُ بَغْيًا أَنْ يُنَزِّلُ اللهُ مِنْ فَضْلِهِ عَلَى مَنْ يَشَاءُ مِنْ عِبَادِهِ فَبَآؤُوا بِغَضَبٍ عَلَى غَضَبٍ وَلِلْكَافِرِينَ عَذَابٌ مُّهِينٌ.

**«Аллаһтың ҡолдарынан Үҙе теләгәненә Пәйғәмбәрлек насип итеүенә көнләшкәнгә күрә, Аллаһ иңдергәнде** (Ҡөрьәнде) **инҡар итеп, үҙҙәрен сарыф итеүҙәре – ни тикле насар нәмә! Шул рәүешле ғазап өҫтөнә ғазапҡа тарынылар. Әле кафырҙар өсөн кәмһеткес ғазап та бар»** («әл-Баҡара», 90).

Йәһүдиҙәрҙең бындай ҡыланышының сәбәбе иһә донъя тормошона бирелгәнлектәренә бәйле. Бындай хиреслектәре аяти кәримәлә түбәндәгесә асыҡлана:

وَلَتَجِدَنَّهُمْ أَحْرَصَ النَّاسِ عَلَى حَيَاةٍ وَمِنَ الَّذِينَ أَشْرَكُوا يَوَدُّ أَحَدُهُمْ لَوْ يُعَمَّرُ أَلْفَ سَنَةٍ.

«(Әй Рәсүлем!) **Ант булһын, Һин уларҙы кешеләрҙең донъя тормошона иң хиресе, бирелгәне тип табырһың. Хатта ундайҙары мөшриктәрҙән күпкә күберәк ки, уларҙың һәр береһе мең йыл йәшәргә теләр!..»** («әл-Баҡара», 96).

Сауҙа баҙарын үҙ ҡулдарына эләктергәнгә күрә, матди көс-ҡеүәттәре арҡаһында шаҡтай морон сөйөргән йәһүдиҙәр үҙҙәрен өҫтөн ҡәүем итеп күрә башлай:

نَحْنُ أَبْنَاءُ اللهِ وَأَحِبَّاؤُهُ

**«...Беҙ – Аллаһтың улдары һәм һөйөклөләребеҙ...»** – ти улар («әл-Мәидә», 18).

Ҡылған әшәкелектәре арҡаһында үҙҙәренә илаһи ғазап киләсәге хәтерҙәренә төшөрөлгәс, былай тип яуап бирәләр:

لَنْ تَمَسَّنَا النَّارُ إِلَّا أَيَّامًا مَّعْدُودَةً

**«...Һанаулы бер нисә көндән ҡала, беҙгә ут ҡағылмаясаҡ!..»** («әл-Баҡара», 80).

Ләкин Йәнәбел-Хаҡ бының былай булмаясағын ошо аяти кәримә менән белдерә:

بَلٰى مَنْ كَسَبَ سَيِّئَةً وَاَحَاطَتْ بِهٖ خَطِيئَتُهُ
فَاُولٰٓئِكَ اَصْحَابُ النَّارِ هُمْ فِيهَا خَالِدُونَ

**«Юҡ! Кем әшәкелек эшләһә һәм яуызлыҡ менән үҙен уратып алһа, бына шул заттар – йәһәннәм сеймалылыр; улар шунда мәңге ҡалыусылар»** («әл-Баҡара», 81).

Мәҙинә йәһүдиҙәре Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән ни ҡәҙәр генә килешеү, солох төҙөһәләр ҙә, асыҡтан-асыҡ Уға дошманлыҡ һаҡлайҙар. Ҡәбиләләр араһындағы ыҙғыш-бәхәстәрҙе көсәйтеп, фетнә һәм боҙоҡлоҡ сығаралар. Уларҙың быңдай ғәмәлдәре тураһында Йәнәбел-Хаҡ Рәсүленә һәм мөьминдәргә былай тип асыҡлай:

يَٓا اَيُّهَا الَّذِينَ اٰمَنُوا لَا تَتَّخِذُوا بِطَانَةً مِنْ دُونِكُمْ لَا يَأْلُونَكُمْ خَبَالًا وَدُّوا مَا
عَنِتُّمْ قَدْ بَدَتِ الْبَغْضَٓاءُ مِنْ اَفْوَاهِهِمْ وَمَا تُخْفِى صُدُورُهُمْ اَكْبَرُ قَدْ بَيَّنَّا
لَكُمُ الْاٰيَاتِ اِنْ كُنْتُمْ تَعْقِلُونَ. هَٓا اَنْتُمْ اُولَٓاءِ تُحِبُّونَهُمْ وَلَا يُحِبُّونَكُمْ
وَتُؤْمِنُونَ بِالْكِتَابِ كُلِّهِ وَاِذَا لَقُوكُمْ قَالُٓوا اٰمَنَّا وَاِذَا خَلَوْا عَضُّوا عَلَيْكُمُ

الْاَنَامِلَ مِنَ الْغَيْظِ قُلْ مُوتُوا بِغَيْظِكُمْ اِنَّ اللهَ عَلِيمٌ بِذَاتِ الصُّدُورِ.
اِنْ تَمْسَسْكُمْ حَسَنَةٌ تَسُؤْهُمْ وَاِنْ تُصِبْكُمْ سَيِّئَةٌ يَفْرَحُوا بِهَا وَاِنْ تَصْبِرُوا
وَتَتَّقُوا لَا يَضُرُّكُمْ كَيْدُهُمْ شَيْئاً اِنَّ اللهَ بِمَا يَعْمَلُونَ مُحِيطٌ.

**«Эй иман килтереүселәр! Үҙ арағыҙҙа булмағандарҙы серҙәш итмәгеҙ! Сөнки улар һеҙгә әшәкелек ҡылыуҙан һис тыйылып тормаç, гел ауырлыҡҡа тарыуығыҙҙы теләрҙәр. Ысынбарлыҡта, нәфрәт һәм дошманлыҡтары ауыҙҙарынан** (сәселгән һүҙҙәрҙән) **билдәле. Күңелдәрендә һаҡлап йөрөгән** (дошманлыҡтары) **иһә тағы ла көслөрәк. Әгәр уйлап, аңлаһағыҙ аяттарыбыҙҙы һеҙгә асыҡлаған булабыҙ.**

**Бына һеҙ шундай заттар, улар һеҙҙе һөймәгән хәлдә лә уларҙы һөйәрһегеҙ** (йәғни уларҙың мосолман булыуын теләйһегеҙ)**. Һеҙ бөтә китаптарға ышанырһығыҙ; улар иһә һеҙҙең менән осрашҡанда: «Ышандыҡ!» – тиер; үҙҙәренә генә ҡалғанда, һеҙгә ҡарата нәфрәттәре арҡаһында, бармаҡ остарын тешләрҙәр. Әйт: «Асыуығыҙҙан** (ҡәһәрләнеп) **үлегеҙ!» Дөрөçлөктә, Аллаһ, күңелдәрҙәгене тулыһынса белә.**

**Һеҙгә бер игелек ҡағылһа, был уларҙы кәйефһеҙләндерер; башығыҙға бер бәлә килә икән, быға һөйөнөрҙәр. Әгәр сабыр итһәгеҙ һәм һаҡланһағыҙ, уларҙың мәкере һеҙгә һис бер зарар килтермәç. Дөрөçлөктә Аллаһ уларҙың ҡылғандарын төрлө яҡтан белеп тора»** («Әлү Ғимран», 118-120).

Аяти кәримәләрҙән күренгәнсә, мосолмандарға ҡарата йәшерен асыу, нәфрәт һәм көнсөлөк менән тулы йәһүдиҙәр, мосолмандар Бәҙер һуғышында еңгәс, ысын-ысынлап борсоуға ҡала. Хатта Бәни Ҡәйнукәғ йәһүдиҙәре, был мәсьәләләге ризаһыҙлыҡ менән сикләнеп ҡалмайынса, мосолмандар менән һуғышырға ҡарар ҡыла. Шул рәүешле үҙҙәре ант итеп биргән ватандашлыҡ килешеүен боҙалар.

Иң яҡын дуçтары – монафиҡтарҙың рәйесе булған Ғабдуллаһ ибне Үбәй менән бергә йәһүди баҙары, мосолмандарға ҡаршы ҡоролған хәйләләр өсөн, бер ҡаҙанға әйләндерелә. Әлбиттә, улар мосолмандарға ҡаршы бер ҙә яҡшы ғәмәлдәр планлаштырмай. Хатта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғүмеренә ҡул һуҙырға ниәтләйҙәр.

Әхлаҡһыҙлыҡта шаҡтай алдынғы йәһүдиҙәр бер көндө үҙ баҙарҙарындағы зәркәнсенән ниҙер алыусы бер мосолман ҡатынды кәмһетә башлай. Уға әҙәпһеҙ һүҙҙәр әйтеп, төрлөсә түбәнһетәләр. Ҡатындың ярҙамға саҡырыуынан һуң, был тирәнән үтеп барған бер мосолман, шундуҡ, ул ҡатынды яҡлар өсөн, зәркәнсе йәһүдигә ташлана. Ике арала бәреш-һуғыш ҡабынып китә. Мосолман өçтөн сығып, йәһүдиҙе үлтерә. Шунда йыйылған йәһүдиҙәр иһә мосолманды

шәһит ебәрә. Вәзғиәт бик ҡатмарлана. Ватандашлыҡ килешеүе тулыһынса боҙола. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәһүдиҙәрҙе йыя ла:

*«Эй йәһүди йәмәғәте! Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Уның, ҡөрәйешкә ебәргән кеүек, һеҙҙең башығыҙға ла ауырлыҡтар-бәләләр иңдереүенән һаҡланығыҙ һәм мосолман булығыҙ! Сөнки һеҙ минең ебәрелгән бер Пәйғәмбәр икәнлегемде беләһегеҙ. Быны китабығыҙҙа ла һәм Аллаһтың һеҙгә биргән антында ла күрәһегеҙ»,* – тип мөрәжәғәт итә.

Шулай итеп, уларға ҡылған хаталарының хаҡын да түләйәсәктәрен, үҙ яғынан солохто ла боҙорға теләмәүен белдерә. Артабан ике аралағы антты яңыртырға тәҡдим итә. Ләкин йәһүдиҙәр әҙәпһеҙ, ҡәбәхәт яуап бирә: «Әй Мөхәммәт! Һин беҙҙе һуғыштың ни икәнен белмәгән ҡөрәйештәр, тип уйланыңмы әллә? Беҙ уларҙан күпкә ныҡ, яман һуғышсылар. Беҙҙең менән яуға керешкәс, ысын һуғыштың ни икәнен белерһең!» – ти.

Шунан һуң Йәнәбел-Хаҡ ошо аятты иңдерә:

قُلْ لِلَّذِينَ كَفَرُوا سَتُغْلَبُونَ وَتُحْشَرُونَ إِلَى جَهَنَّمَ
وَبِئْسَ الْمِهَادُ. قَدْ كَانَ لَكُمْ آيَةٌ فِى فِئَتَيْنِ الْتَقَتَا

**«Ул инҡар итеүсе кафырҙарға әйт: «Һеҙ, һис шикһеҙ, еңелеүгә тарыясаҡһығыҙ һәм йыйылып йәһәннәмгә тултырыласаҡһығыҙ. Ул урын ни ҡәҙәр насар ятаҡтыр»** (Бәҙерҙә) **ҡара-ҡаршы килгән ошо ике төркөм хәлендә һеҙҙең өсөн бик ҙур ғибрәт бар...»** («Әлү Ғимран», 12-13).[123]

Йәһүди ҡәүеме үҙ ваҡытында хәҙрәти Муса ғәләйһиссәләмгә:

فَاذْهَبْ أَنْتَ وَرَبُّكَ فَقَاتِلَا إِنَّا هَاهُنَا قَاعِدُونَ

**«Һин Раббың менән барып һуғыш! Беҙ бында ултырасаҡбыҙ!»** – тип («әл-Мәидә», 24), илаһи ҡаҙанышҡа ярҙам итәсәк йыһатты кире ҡаҡҡанда, хәҙер нәҡ киреһенсә, үҙҙәренә ҡаршы һуғышты бик теләйҙәр, ниндәйҙер бер ҡыйыулыҡ менән көтәләр.

Шул рәүешле антты боҙған мәлдәрендә мосолмандарға һуғыш асыусылар тип һаналған йәһүдиҙәр ошо ғәмәлдәре менән үҙҙәренең яуыз, мәкерле ниәттәрен шаҡтай асып һала. Бындай хәл тыуғас, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәҙрәти Ғәлиҙе байраҡсыһы итеп билгеләп, Ҡәйнуҡағ йәһүдиҙәре өҫтөнә яу сыға. Улар ҡәлғәләренә бикләнә. Монафиҡтар менән бергә мосолмандарға ҡаршы төрлө хәйлә ҡорһалар ҙа, ҡәлғәләренән тышҡа ла

123. Ҡарағыҙ: Әбү Дауыт, «Хараж», 21-22/3001.

сыға, уҡ та ата алмайҙар. Сөнки Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер яҡтан бик тығыҙ итеп уратып-ҡамап ала, икенсе яҡтан иһә монафиҡтарҙың ихтимал баш күтәреүҙәренә ҡаршы саралар күрә.

Йәһүдиҙәргә ҡәлғәләренә таба сигенеп, шунда бикләнеү кәңәшен монафиҡтар башлығы Ғабдуллаһ ибне Үбәй бирә һәм үҙҙәренең дә улар менән бергә буласағын хәбәр итә. Ләкин монафиҡтарҙың юлбашсыһы ҡурҡыуы арҡаһында һүҙендә тормай һәм йәһүдиҙәрҙе ҡалдырып китә.

Ҡамалыш ун биш көн дауам итә. Ниһәйәт, бер ниндәй ниәттәрен дә тормошҡа ашыра алмаған йәһүдиҙәрҙең йөрәгенә ҡот осҡос ҡурҡыу керә. Көткән ярҙам да килмәгәс, ярлыҡау һорауҙан башҡа саралары ҡалмай. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бирәсәк язаға ризалашып, билдәрен бөгәләр.

Ҡәйнукәғлеләр элек хәзрәж ҡәбиләһе менән килешеү төҙөгәнгә күрә, монафиҡтарҙың башлығы – хәзрәжле Ғабдуллаһ ибне Үбәй – уларҙың ғәфү ителеүен һорай. Ул осорҙағы ғөрөф-ғәҙәт буйынса, уларҙы үлтерергә тейеш булалар. Фәҡәт бик үжәтләнеп ярлыҡау турында һорағас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи вә сәлләм уларҙы иҫән ҡалдыра. Яза сифатында йәһүдиҙәрҙе Сүриә тарафына һөргөнгә ебәрә. Вади әл-Ҡура тигән ергә барып еткәс, унда бер ай йәшәп алалар. Вади әл-Ҡура йәһүдиҙәре уларға ризыҡ, йәйәүлеләренә ат-дөйә бирә. һуңынан сәфәрҙәрен дауам иткән Ҡәйнукәғлеләр барып урынлашҡан ерҙәрендә лә бик әҙ генә йәшәп ала.[124]

### Сәвик һуғышы

(Һижри 2-се йылдың зөлхизәһе / 624 йылдың майы)

Әбү Жәһилдең үлеменән һуң, ҡөрәйешлеләрҙе Әбү Суфьян етәкләй башлай. Бәҙерҙә еңелеүҙең үсен аласағына ант итеп, оҙаҡҡа һуҙмайса, ул ике йөҙ яйҙаҡ менән Мәккәнән, ҡурҡа-ҡурҡа, юлға сыға. Мәҙинәгә бер сәғәтлек ара ҡалғас, туҡталыш яһай. Төн ҡараңғылығынан файҙаланып, Бәни Надир йәһүдиҙәре йорттарына ҡәҙәр бара. Уларҙың башлығы һәм ҡаҙна хужаһы Сәллам ибне Мишкәмдең өйөнә килә. Сәллам Әбү Суфьянды ашатып-эсереп, яҡшылап ҡунаҡ итә һәм мосолмандарҙың ҡайһы бер йәшерен яҡтары тураһында мәғлүмәттәр бирә.

Әбү Суфьян, унан китеп, иптәштәре янына ҡайтыр юлға сыға. Ансарҙарҙан Сәғд ибне Ғамрҙы үлтереп, бер нисә хөрмә баҡсаһын яндыра. Шуның менән антын үтәгән тип һанап һәм үҙен эҙәрлекләүҙән ҡурҡып, Әбү Суфьян ҡайтыуға таба борола. Был хәлдәр тураһында хәбәр алғас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны ҡыуа сыға. Ҡасып китеү еңел булһын өсөн, мөшриктәр

124. Ибне Һишам, II, 426-429; Ваҡыди, I, 176-180; Ибне Сәғд, II, 28-30.

ҡыҙҙырылған он (сәвик) тулы ҡапсыҡтарын ташлап ҡалдыра. Шуға күрә был изге бәрелеште «Сәвик һуғышы» тип атайҙар.[125]

**Хәҙрәти Ғәли менән хәҙрәти Фатиманың никахлашыуы**

Шулай уҡ һижрәттең икенсе йылында Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡыҙы Фатима разыйаллаһу ғәнһә менән хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү өйләнешә.

Хәҙрәти Фатиманы әүәлерәк хәҙрәти Әбү Бәкер һәм хәҙрәти Ғүмәр кеүек ҡөрәйештең шәрәфле заттарынан бер нисә кеше ҡатынлыҡҡа һорай, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин уның тураһында илаһи күрһәтмәне көтәм»,* – тип яуап бирә. Шул сәбәпле хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү, туғандары – Һашим улдарының өндәүенә ҡарамаҫтан, былдай ғәмәлгә батырсылыҡ итмәй. Күпмелер ваҡыттан һуң, яҡын кешеләре бик ҡыҫтағас, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына бара.[126]

Хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү ваҡиғаның дауамын үҙе былай тип бәйән ҡыла:

«Ниһәйәт, Аллаһ Рәсүленең ҡаршына барҙым. Килеш-ҡиәфәте ғәйәт етди, рухи олуғлыҡ бөркөлөп тора ине. Ҡаршыһына ултырҙым һәм өндәшмәй торҙом. Һөйләшергә көс таба алманым. Миңә:

*«Ниңә килдең? Берәй ихтыяжың бармы әллә? Һәр хәлдә, Фатиманы һорарға йыйынаһың!»* – тине. Мин иһә бары: «Эйе!» – тип кенә әйтә алдым» (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* III, 379).

Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмдең хәйер-фатихаһынан һуң хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү, ҡайһы бер әйберҙәрен һатып, 480 дирһәм мәһәр әҙерләй. Аллаһ Рәсүле бының өстән икеһенә хушбуйҙар, өстән беренә кейем-һалым алырға ҡуша.[127] Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Фатима разыйаллаһу ғәнһәгә бирнә итеп, бәрхәт япма, һыу һауыты һәм эсе хуш еҫле изһир үләне менән тултырылған түшәк бирә.[128] Билали Хәбәшигә:

*«Эй Билал! Өйләнешкән ваҡытта өммәтемдең ризыҡ менән һыйлауҙы сөннәткә әйләндереүҙәрен теләйем!»* – тип белдереп, ризыҡ әҙерләргә ҡуша. Шунан һуң хәҙрәти Ғәли, көбәһен бер йәһүдигә закладҡа һалып, ярым үлсәү күләмендә арпа ала. Туй һыйы «хайс»[129] тип аталған татлы ашамлыҡтан

125. Ибне Һишам, II, 422-423; Ваҡыди, I, 181-182; Ибне Сәғд, II, 30.
126. Ибне Сәғд, VIII, 19.
127. Ибне Сәғд, VIII, 19
128. Нәсаи, «Никах», 81.
129. Төшө сығарылған хөрмә, атланмай һәм һөҙөлгән йоғортто болғатып яһалған бер ашамлыҡ тураһында һүҙ бара. Ҡайһы саҡ уға ҡыҙҙырылған он да өҫтәйҙәр.

ғибәрәт була. Мөһәжирҙәр менән ансарҙар, төркөм-төркөм килеп, ашамлыҡтан ауыҙ итеп, һыйланып китә (Ибне Сәғд, VIII, 23; Ғабдүррәззаҡ, V, 487; Диярбәкри, I, 411).

Йәшәйеш нуры бер һауыт менән һыу килтертеп, тәһәрәт ала. Артабан хәҙрәти Ғәлиҙе саҡыра. Тәһәрәт һыуын бер аҙ уның күкрәгенә һәм ике елкә араһына һибә. Һуңынан Фатима разыйаллаһу ғәнһәне саҡырып ала. Уға ла шул ғәмәлдәрҙе ҡабатлағас, Үҙенең ғаиләһенә, йортондағы кешеләргә ҡыҙын иң хәйерле зат менән никахлаштырғанын белдерә. Фатима һәм Ғәли өсөн алдарынан да, арттарынан да:

*«Йә Аллаһым! Уны һәм нәҫелен таш менән ҡыуылған шайтандан һаҡлау өсөн, Һиңә һығынам!»* – тип доға ҡыла (Ибне Сәғд, VIII, 24; Диярбәкри, I, 411).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ эш бүленеше тураһында аңлатҡанда, ҡыҙы Фатимаға өй мәшәҡәттәрен ҡайғыртырға, кейәүе Ғәлигә иһә өйҙән ситтәге эштәрҙе башҡарырға кәңәш бирә.[130]

Усамә ибне Зәйд разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Мин Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында ултыра инем. Ғәли һәм Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә килеп, Уның янына kereү өсөн рөхсәт һоранылар. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ниңә килгәндәр, беләһеңме?»* – тип һораны.

«Юҡ, белмәйем!» – тинем.

*«Ә мин беләм, уларға рөхсәт бир!»* – тип белдерҙе. (Эскә инергә саҡырҙым), ҡунаҡ кешеләр инде.

«Йә Аллаһтың Рәсүле! Әһелеңдән кемдең Һинең өсөн башҡаларҙан һөйөклөрәк булғанлығын һорарға керҙек!» – тип аңлаттылар. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Фатима бинте Мөхәммәт»,* – тип белдерҙе.

«(Ҡан туғанлығы) булған ғаиләңдән кемде яратыуығыҙ тураһында һорамайбыҙ. (Уларҙан ҡала яҡындарығыҙҙан кемде һөйөүегеҙ) тураһында ҡыҙыҡһынабыҙ», – тинеләр.

*«Әһелем арҡаһында миңә иң һөйөклө булыусы – үҙенә (һидәйәт биреп) Аллаһ тарафынан нигмәтләндерелгән, (азат итеп, үҙемә уллыҡҡа алыуым менән) Мин өммәтемә бүләк иткән Усамә!»* – тип яуап бирҙе.

«Ә артабан кем?» – тип һоранылар.

*«Ғәли!»* – тип белдерҙе.

130. Касани, IV, 24.

Шунан һуң ағаһы Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Аганды иң ахырға ҡалдырзың!» – тине.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ғәли һижрәттә һинән алда эш йөрөттө!»* – тигән яуабын бирҙе» (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 40/3819).

Ибне Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә былай тип тапшыра:

«Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ергә дүрт һыҙыҡ һыҙҙы ла:

*«Был һыҙыктарҙы ник һыҙғанымды беләһегеҙме?»* – тип һораны.

Сәхәбәләр: «Аллаһ һәм Уның Рәсүле яҡшыраҡ белер», – тинеләр.

Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Йәннәт ҡатын-ҡыҙҙарының иң фазиләтлеләре – Хәҙисә бинте Хувәйлид, Фатима бинте Мөхәммәт, Мәрйәм бинте Ғимран һәм Фирғәүендең ҡатыны Асия бинте Музахим»*, – тип аңлатты» (Әхмәт, I, 293).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғаилә ағзаларын уҡыу-уҡытыу, рухи тәрбиәләү һәм мәңгелек тормошҡа әҙерләү мәсьәләһендә айырыуса талапсанлыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, «Әхзәб» сүрәһенең:

يَا نِسَاءَ النَّبِيِّ لَسْتُنَّ كَأَحَدٍ مِّنَ النِّسَاءِ إِنِ اتَّقَيْتُنَّ فَلَا تَخْضَعْنَ بِالْقَوْلِ فَيَطْمَعَ الَّذِى فِى قَلْبِهِ مَرَضٌ وَقُلْنَ قَوْلًا مَّعْرُوفًا. وَقَرْنَ فِى بُيُوتِكُنَّ وَلَا تَبَرَّجْنَ تَبَرُّجَ الْجَاهِلِيَّةِ الْأُولَى وَأَقِمْنَ الصَّلَاةَ وَآتِينَ الزَّكَاةَ وَأَطِعْنَ اللهَ وَرَسُولَهُ إِنَّمَا يُرِيدُ اللهُ لِيُذْهِبَ عَنْكُمُ الرِّجْسَ أَهْلَ الْبَيْتِ وَيُطَهِّرَكُمْ تَطْهِيرًا.

**«Эй Пәйғәмбәр ҡатындары! Һеҙ ҡатындарҙың теләһә ҡайһыһы кеүек түгелһегеҙ. Әгәр** (Аллаһтан) **ҡурҡһағыҙ,** (сит ир-аттарға ҡаршы) **йәлеп иттерә торған рәүештә һөйләшмәгеҙ; һуңынан йөрәгендә ауырыу булған затта һеҙгә ҡарата өмөт тыуыр. Күркәм һүҙҙәр менән һөйләшегеҙ! Сама һаҡлап, өйҙәрегеҙҙә тороғоҙ һәм әүәлге яһилиәт осоро ғәҙәте кеүек биҙәнеп сыҡмағыҙ! Намаҙ уҡығыҙ, зәкәт бирегеҙ, Аллаһ һәм Уның Рәсүленә итәғәт ҡылығыҙ. Эй әһли бәйт! Аллаһ һеҙҙән бары гонаһтарҙы алып ташларға һәм һеҙҙе пакларға ғына теләй», –** аяты («әл-Әхзәб», 32-33) иңгәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм алты ай буйы, иртәнге намаҙға барғанда, хәҙрәти Фатиманың ишек төбөнә килеп:

«*Намаҙ(ға тороғоҙ), әй әһли бәйт!* ***«Аллаһ һеҙҙән бары гонаһты алып ташларға һәм һеҙҙе пакларға ғына теләй»***, – тип әйтә торған була (Тирмизи, «Тәфсир», 33/3206).

Мәңгелек тормоштоң иң мөһим капиталынан береһе булған тәһәжжүд намаҙы өсөн Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ҡайһы бер төндәрҙә хәҙрәти Ғәли менән Фатиманың ишеген шаҡып:

*«Намаҙ уҡымаясаҡһығыҙмы ни?»* – тип өндәшә (Бохари, «Тәһәжжүд», 5).

Был мәсьәләлә хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү ошо иғтибарға лайыҡ ваҡиғаны иҫкә ала:

«Фатима атаһы өсөн ғаиләнең иң һөйөклө бәндәһе ине. Тирмән әйләндергән өсөн ҡулы, турһыҡ менән һыу ташығанға муйыны ярала булыр, өй һепергәнгә өстө-башы гел туҙанға батыр ине. Бер ваҡыт Аллаһ Рәсүленә бер нисә ҡол килтергәндәр ине. Фатимаға: «Атайыңа барып, берәй ҡол һораһа инең!» – тинем. Фатима китте, Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләтү үә-сәләәмдең кемдәр менәндер һөйләшеп тороуын күрҙе лә кире ҡайтты. Иртәгәһе көн Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Фатима янына килгәс:

*«Ҡыҙым, нимә кәрәк ине?»* – тип һораны. Фатима өндәшмәй ҡалды, яуап бирмәне. Мин ике араға кереп: «Үҙем аңлатайым, йә Аллаһтың Рәсүле!» – тинем һәм эште һөйләп бирҙем. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй Фатима! Аллаһтан ҡурҡ! Аллаһтың фарыздарын үтә! Ғаилә эштәрен эшлә! Ятағыңа кергәс, утыҙ өс тапҡыр «сүбхәналлаһ», утыҙ өс тапҡыр «әлхәмдүлилләһ», утыҙ дүрт тапҡыр «Аллаһу әкбәр», тип әйт! Шулай итеп, барыһы бергә йөҙ булыр. Был һинең өсөн хеҙмәтсенән хәйерлерәк»,* – тип аңлатты.

Фатима раҙыйаллаһу ғәнһә: «Аллаһтан һәм Аллаһтың Рәсүленән разыймын!» – тине. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға хеҙмәтсе бирмәне» (Әбү Дауыт, «Хараж», 19-20/2988).

Бүтән бер риүәйәттә Йәшәйеш нурының былай тигәне тапшырыла:

*«Валлаһи, Әһли суффә аслыҡтан ашҡаҙандарына таш тултырып йөрөгәндә һәм мин дә уларға сарыф итерлек һис нәмә таба алмағанда, һеҙгә хеҙмәтсе бирә алмам. Әсирҙәр өсөн фидиә аласаҡмын һәм ул керемде әсхәбе суффәгә тотасаҡмын»* (Әхмәт, I, 106).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең азат ителгән ҡоло Сәүбән раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Аллаһ Рәсүле, сәфәргә сығыр алдынан, ғаиләһенән иң ахырҙа ҡыҙы Фатима раҙыйаллаһу ғәнһү менән һаубуллаша ине. Кире ҡайтҡанда иһә, иң

беренсе булып, йәнә Фатима янына керә ине. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәнә шулай бер сәфәрҙән ҡайтҡан ине. Фатима иһә ишегенең өҫтөнә бер пәрҙә элгән, ә Хәсән менән Хөсәйенгә ике көмөш беләҙек таҡҡан ине. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Фатиманың өйө янына килә, ләкин өйгә кермәй. Фатима Рәсүлүллаһтың өйгә уҙмауының сәбәбе ана шул күҙгә ташланған нәмәләр икәнен аңланы. Шундуҡ пәрҙәне йыртып ташланы, балаларҙың ҡулындағы көмөш беләҙектәрҙе һалдырҙы. Быларҙың береһен ике балаһына бүлеп бирҙе. Хәсән менән Хөсәйен, илап, Рәсүлүллаһ янына китте. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был беләҙектәрҙе алды ла миңә:

*«Әй Сәүбән! Быларҙы фәлән ғаиләгә илтеп бир. Хәсән менән Хөсәйен – минең әһли бәйтемдән. Йәнәбел-Хаҡтың үҙҙәренә бүләк итәсәк матурлыҡтарҙы донъя тормошонда ашап-ҡулланып бөтөрөүҙәрен теләмәйем. Әй Сәүбән! Фатимаға һөйәктән яһалған бер муйынса менән (балаларға) шулай уҡ һөйәктән яһалған ике беләҙек һатып ал!»* – тип ҡушты (Әбү Дауыт, «Тәрәжжүл», 21/4213).

**Әһли бәйт һәм уның мөхәббәте**

Әһли бәйт бер йортта йәшәүсе ғаилә ағзалары тигән һүҙ. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең барса ғаилә ағзаларын белдерә. Был мәғәнәлә «әһли бәйт» – Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ һәм Уның ғаиләһе, Ғәли, Жәғфәр, Ғаҡил, Ғәббәс һәм уларҙың ғаиләләре тигән һүҙ. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә сәләм-салауат әйтеү бөтә мосолмандар өсөн вәжиб булған кеүек, әһли бәйткә хөрмәт һәм мөхәббәтле мөнәсәбәттә булыу ҙа барса мосолмандарҙың вазифаһы һанала.[131]

Аллаһ Рәсүленең әһли бәйтенә зәкәт алыу – харам. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм бер көндө хәҙрәти Хәсәндең дәүләт ҡаҙнаһына зәкәт итеп бирелгән хөрмәнең бер данаһын ауыҙына ҡапҡанын күреп ҡала. Ул шундуҡ хөрмәне ауыҙҙан сығарырға куша һәм:

*«Мөхәммәт ғаиләһенең зәкәт ашамағанын белмәйһеңмени?»* – тип киҫәтә (Бохари, «Зәкәт», 57; Әхмәт, I, 200).

Зәйд ибне Әрҡам раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип һөйләй:

«Бер көн Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәккә менән Мәҙинә араһындағы Хум шишмәһе янында баҫып, беҙгә нотоҡ тотто. Аллаһҡа хәмед-ҫәнәләр әйткәс, беҙгә өгөт-нәсихәт ҡылды. Унан һуң былай тип мөрәжәғәт итте:

*«Эй кешеләр! Мин дә – бер кеше. Яҡын арала Раббымдың илсеһе миңә лә киләсәк һәм мин, уның саҡырыуына буйһоноп, китеп барасаҡмын. Һеҙгә ике*

131. Әхмәт, VI, 323.

*мөһим нәмә ҡалдырам. Береһе – кешене дөрөҫлөккә алып бара торған юламан һәм нур булған Аллаһ Китабы – Ҡөрьән. Уға йәбешегеҙ һәм бик ныҡлап тотоноғоҙ!..»*

Шулай итеп, хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм Ҡөрьәни-Кәримгә тотонорға, уға йәбешергә ҡушты. Артабан һүҙен былай тип дауам итте:

*«Һеҙгә шулай уҡ әһли бәйтемде ҡалдырам. Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм әһли бәйтемә хөрмәт менән ҡарағыҙ!»*

«Пәйғәмбәрҙең әһли бәйте кем инде ул, әй Зәйд!? Ҡатындары ла әһли бәйтенән һаналмаймы ни?» – тип һорағас, Зәйд: «Ҡатындары ла – Уның әһли бәйтенән. Фәҡәт Уның ысын әһли бәйте – үҙенән һуң да саҙаҡа алыу харам һаналғандары», – ти. «Саҙаҡа алыу кемдәргә харам ҡылынды?» – тип һорайҙар. «Ғәли, Ғаҡил, Жәғфәр һәм Ғәббәстең ғаиләләренә», – тип асыҡлай (Мөслим, «Фәҙаилүс-Сахабә», 36).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип әйтә:

*«Аллаһты ниғмәттәре менән ризыҡландырған өсөн яратығыҙ. Мине иһә Аллаһты ратҡанға күрә һөйөгөҙ. Әһли бәйтемде иһә мине яратҡан өсөн яратығыҙ!»* (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 31/3789).

Бер көндө Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, мөбәрәк ейәндәре Хәсән менән Хөсәйендең ҡулдарынан тотоп, халыҡҡа былай тип белдерә:

*«Кем мине, был икәүҙе, быларҙың атайҙарын һәм әсәйҙәрен һөйһә, ҡиәмәт көнөндә минең менән бергә булыр»* (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 20/3733).

Әсхәбе кирам Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яҡындарына ҡарата бик ҙур хөрмәт һәм мөхәббәт һаҡлай. Сөнки ғашиҡ зат һөйгәненә ҡарата мөхәббәте аша уның дуҫтарын, хеҙмәтселәрен, ашаған ризыҡтарын, кейгән кейемдәрен, ҡыҫҡаһы, уның менән бәйле һәм уны хәтерләткән һәр нәмәне һөйөр. Мөхәббәте көсәйгән һайын, һөйөү хистәрен һөйгәне тирәһендәге һәр нәмәгә күсерер.

Аллаһ Рәсүлен йәндәренән дә нығыраҡ яратыусы, һайлап алынған сәхәбәләрҙең Аллаһ Рәсүленә яҡын торған береһе, Ул атына-дөйәһенә менергә йыйынғанда, шундуҡ өҙәңгенән тота торған була.[132] Ҡиәмәт көнө бөтә туғанлыҡ бәйләнештәре өҙөлөп, бары Уның менән бәйләнеше булғандар ғына һаҡланып ҡаласағын белгәнгә, хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең яҡындарынан берәйһе менән өйләнешеп, Рәсүлүллаһ менән туғанлыҡ элемтәһе ҡороу мөмкинлеген ысын күңелдән теләйҙәр.[133]

132. Хәйсәми, IX, 348.
133. Хәйсәми, IX, 173.

Аллаһ Рәсүленең пак нәҫеленән килгән кешеләр хәҙерге заманда ислам донъяһының төрлө тарафтарында йәшәй. Хөсәйен разыйаллаһу ғәнһү нәҫеленән килеүселәрҙе «Сәййид», Хәсән разыйаллаһу ғәнһү нәҫелен дауам итеүселәрҙе «Шәриф» тип атайҙар. Ғосманлы төрөктәре сәййидтәрҙе «әмир», баштарына сорнаған йәшел салманы «әмир салмаһы» тип йөрөтә. Йәшәйеш нурының нәҫеленән булған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йәшел баш кейеме кейеп йөрөйҙәр.

Ғосманлы төрөктәре әһли бәйткә хеҙмәт итеүҙе ҡиммәтле бер вазифа тип һанай һәм бының өсөн рәсми бер ойошма булдыра. Ғосманлы дәүләтендә әһли бәйт эштәре менән мәшғүл ошо рәсми хеҙмәткәрҙәрҙе «Накибүл-әшраф» тип атайҙар. Накибүл-әшраф Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ нәҫеленән һайлап ҡуйыла һәм улар әһли бәйттең төрлө эштәрен башҡара: уларға тейешле нәмәләрҙе теркәй, тыуыу һәм үлем тураһында мәғлүмәттәрҙе яҙып бара, уларҙың осраҡлы һөнәр менән шөғөлләнә башлауҙарына ҡаршы тора, ғәниммәттәрҙән уларға тейешле өлөштө бүлеп бирә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙҙәренә тиң булмаған ир-аттарға кейәүгә сығыуын тыя.[134]

Накибүл-әшраф Пәйғәмбәр нәҫеленең гөмүм бер химаят булып, башҡарған вазифаһы бәрәбәренә иң юғары дәрәжәләге ойошмаларҙан һанала һәм рәсми мәрасимдәрҙә хәлифәнән һуң икенсе рәттә урын ала. Падишаһтар тәхеткә ултырғанда, иң элек хөкөмдарға Накибүл-әшраф ант итеп доға ҡыла, артабан башҡа даирәләр ант килтерә. Байрам менән тәбрикләгәндә лә, Накибүл-әшраф беренсе булыу хоҡуғына эйә. Һәр ике осраҡта ла падишаһ Накибүл-әшрафҡа хөрмәт йөҙөнән, аяғүрә баҫып тыңлай.

Сәййид һәм шәрифтәр ҡанунға һәм ғәҙәт-йолаларға ҡаршы килә торған ғәмәл ҡылһа, Истанбулдағылар – Накибүл-әшраф, төбәктәрҙәгеләр иһә ерле идара рәйестәре тарафынан язаға тартыла. Язалау ваҡытында әүәл йәшел салманы алып үбәләр, яза процедураһы тамамланғас, уны кире ҡайтаралар.

134. Мәхмәт Зәки Пакалын, II, 647.

# ҺИЖРӘТТЕҢ ӨСӨНСӨ ЙЫЛЫ

## ӨХӨД ҺУҒЫШЫ – ғибрәтле күренештәр менән тулы бәрелеш

(Һижри 3-сө йылдың 7 шәүүәле / 625-се йылдың 23 марты)

Өхөд[135] һуғышы ла – Бәҙерҙәге кеүек мәккәле мөшриктәргә ҡаршы дәһшәтле һуғыштарҙың береһе. Һижрәттең өсөнсө йылында, шәүүәл айында була.

Мәккәле мөшриктәр Бәҙерҙәге еңелеүҙән һуң бик ҙур матәм эсендә йөрөй, унда һәр кем берәй яҡын кешеһен юғалтҡан була. Мөшриктәр был һуғыштың үсен алыу теләге менән яна. Ҡөрәйешлеләрҙең яңы башлығы Әбү Суфьяндың ҡатыны Һинд үс ниәте менән йөрөүселәрҙең иң беренселәренән була. Нәтижәлә, күп ваҡыт та үтмәй, үс теләге йөрәктәрен биләп алған өс мең кешелек мөшрик ғәскәре туплана. Армияны йыһазландырыу, ҡоралландырыу өсөн, Әбү Суфьян Бәҙер һуғышында ҡотҡарып ҡалған каруан малдары файҙаланыла. Тирә-яҡтағы ғәрәптәргә лә ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр.[136]

Был ваҡытта хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ағаһы Ғәббәс вәзғиәт тураһында Мәҙинәгә хәбәр итә.[137] Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кисекмәҫтән, яу тураһында кәңәшмә йыя. Мәҙинә эсендә ҡалып һаҡланыу һуғышы, әллә ҡала ситенә сығып, һөжүм яуы алып барырға кәрәкме, тигән мәсьәләлә фекер алышалар. Рәсүлүллаһ һаҡланыу һуғышы тураһында фекерҙе яҡлай.[138] Ләкин Бәҙер һуғышына ҡатнаша алмаған йәштәр һәм Хәҙрәти Хәмзә кеүек батырҙар күпселек тәшкил иткән тарафтың тауышы менән, ҡала ситенә сығып һөжүм ысулын ҡулланырға ҡарар бирелә.[139] Хатта атака яҡлыларҙың бер өлөшө: «Беҙ бындай көндө сабырһыҙланып көтә инек!» – тип белдерә.

---

135. Өхөд Мәҙинәнең төньяғында, унан бер миль алыҫлыҡта урынлашҡан.
136. Ваҡыди, I, 199-203.
137. Ибне Сәғд, II, 37.
138. Был – Әфәндебеҙ күргән бер төш арҡаһында була. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һуңынан былай тип әйтә: «*…Төшөмдә үҙемде бер осо һынған ҡылыс болғап торам, тип күрҙем. Был – Өхөд һуғышында мөьминдәр тарыған ауырлыҡтарҙы раҫлай икән. Артабан ҡылысымды тағын болғаным. Был юлы әүәлгеһенән яҡшыраҡ нәмә булды. Уныһы иһә Йәнәбел-Хаҡтың еңеү насип ҡылыуын һәм мосолмандарҙың бергә тупланыуы уңайынан рәхмәте менән ебәргән ниғмәттәрен раҫланы. Шул уҡ төштә һыйырҙар һәм Аллаһ (биргән бүтән) хәйерле нәмәне күрҙем. Һыйырҙар Өхөд көнөндә мөьминдәрҙән бер йәмәғәтте белдерҙе, (улар шәһит ителде. Мин күргән) хәйерле нәмә иһә Аллаһтың Бәҙерҙән һуң насип ҡылған еңеүҙәрҙең күркәмлеген һәм беҙгә Раббыбыҙ рәхмәте менән ебәргән (Бәҙри Мәүғид) тоғролоҡтоң сауабы булараҡ беленде*» (Бохари, «Табир», 39, 44; «Мәнаҡиб», 25; Мөслим, «Рүя», 20).
139. Ибне Һишам, III, 6-7.

Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәғәҙәтле бүлмәһенә кереп, көбәһен кейә. Ләкин Мәҙинәлә ҡалып һаҡланыу һуғышы алып барыу тарафдарҙары шул арала башҡаларҙы күндерергә өлгөрә. Сәғд ибне Муғәҙ менән Үсәйд ибне Худайр: «Мәҙинәнән сығаһы килмәгән Аллаһ Рәсүленә киреләндегеҙ. Юғиһә, Уға әмер күктән иңә. Һеҙ был эште Уның ихтыярына ҡалдырығыҙ. Ул ҡушҡанса эшләгеҙ!» – тиҙәр (Ваҡыди, I, 213-214). Һөжүм яҡлылар, кисекмәҫтән, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына йүгерә:

«Йә Рәсүлүллаһ! Һеҙҙең фекерегеҙгә ҡаршы килеп, яңылыштыҡ. Һеҙ үҙегеҙ теләгәнсә хәл ҡылығыҙ!» – ти улар.

Аллаһ Рәсүленең яуабы ҡәтғи була:

*«Пәйғәмбәр көбәһен бер кейгәс, һуғышмайынса сисмәҫ! Мин һеҙгә ни ҡушһам, шуны үтәү яғын ҡарағыҙ! Әйҙәгеҙ, Аллаһ исеме менән яуға барығыҙ! Әгәр сабыр итеп, бурысығыҙҙы үтәһәгеҙ, Аллаһ Тәғәлә еңеүҙе йәнә һеҙгә насип ҡыласаҡ!»* (Ваҡыди, I, 214; Ибне Сәғд, II, 38).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йома намаҙынан һуң, Мәҙинәлә Ғабдуллаһ ибне Өмми Мәктүмде вәкил итеп ҡалдырып, мең кешелек ғәскәр менән яуға ҡуҙғала. Ләкин монафиҡтарҙың башлығы Ғабдуллаһ ибне Үбәй өс йөҙ кешелек тарафдарҙары менән бергә кире ҡайтып киткәнгә, юлда ислам һуғышсылары һаны ете йөҙгә тиклем кәмей. Йәнәбел-Хаҡ әлеге ваҡиғанан һуң түбәндәге аяти кәримәне иңдерә:

وَمَا أَصَابَكُمْ يَوْمَ الْتَقَى الْجَمْعَانِ فَبِإِذْنِ اللهِ وَلِيَعْلَمَ الْمُؤْمِنِينَ.
وَلْيَعْلَمَ الَّذِينَ نَافَقُوا وَقِيلَ لَهُمْ تَعَالَوْا قَاتِلُوا فِى سَبِيلِ اللهِ أَوِ ادْفَعُوا
قَالُوا لَوْ نَعْلَمُ قِتَالًا لَاتَّبَعْنَاكُمْ هُمْ لِلْكُفْرِ يَوْمَئِذٍ أَقْرَبُ مِنْهُمْ لِلْإِيمَانِ
يَقُولُونَ بِأَفْوَاهِهِمْ مَّا لَيْسَ فِى قُلُوبِهِمْ وَاللهُ أَعْلَمُ بِمَا يَكْتُمُونَ.

**«Ике яу берлеге осрашҡан көндө һеҙҙең башығыҙға төшкән ауырлыҡтар бары Аллаһ рөхсәте менән генә булды, был иһә мөьминдәрҙе белдереү һәм монафиҡтарҙы айырып күрһәтеү өсөн ине. Быларға: «Килегеҙ, Аллаһ юлында һуғышығыҙ йәки һөжүмдән һаҡланығыҙ!» – тигән саҡта: «Һуғыша белһәк, әлбиттә, һеҙгә эйәреп барыр инек!» – тиҙәр. Улар ул көндә имандан бигерәк көфөрлөккә яҡын ине. Ауыҙҙары менән улар йөрәктәрендә булмағанды һөйләй ине. Ләкин Аллаһ уларҙың эстән йәшергәндәрен яҡшыраҡ белер»** («Әлү Ғимран», 166-167).

وَإِذْ غَدَوْتَ مِنْ أَهْلِكَ تُبَوِّئُ الْمُؤْمِنِينَ مَقَاعِدَ لِلْقِتَالِ وَاللَّهُ سَمِيعٌ عَلِيمٌ.
إِذْ هَمَّتْ طَائِفَتَانِ مِنْكُمْ أَنْ تَفْشَلَا وَاللَّهُ وَلِيُّهُمَا وَعَلَى اللَّهِ فَلْيَتَوَكَّلِ الْمُؤْمِنُونَ.

«(Эй Рәсүлем!) **Һин иртән-иртүк мөьминдәрҙе һуғыш ҡырында сафтарға урынлаштырыу өсөн ғаиләңде ҡалдырып киттең. Ысынында, Аллаһ – ишетеүсе һәм белеүсе. Ул ваҡытта арағыҙҙан ике төркөм тарҡаулыҡҡа йүнәлде. Ләкин Аллаһ уларҙың ярҙамсыһы булған ине. Мөьминдәр бары Аллаһҡа ғына таянып, ҡурҡыуһыҙ эш итһендәр!»** («Әлү Ғимран», 121-122).

Монафиҡтарҙың ғәскәрҙән бүленеп китеп барыуы, бер яҡтан, илаһи ниғмәт була, сөнки уларҙың был ғәмәле ғәскәрҙең көсөн кәметмәй, киреһенсә, һуғышсылар араһындағы ике йөҙлө һәм ҡурҡаҡ йәндәрҙән сафландыра. Шул рәүешле ғәскәр рухи яҡтан тағы ла нығый һәм ҡеүәтләнә генә. Сөнки ике йөҙлө бәндәләрҙең һуғыш ваҡытында хыянаты тағы ла ҙурыраҡ ҡурҡыныс тыуҙырып, мөьминдәрҙең рухи ныҡлығын емерергә мөмкин була.

**Сәхәбәләрҙең шәһитлеккә ынтылышы**

Ансарҙарҙан Сәлимә улдарының башлығы Ғәмр ибн Йәмух аҡһаҡ була. Уның барлыҡ дүрт улы ла Аллаһ Рәсүле менән бергә һуғышта ҡатнаша. Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ Өхөд һуғышына йыйынған ваҡытта, Ғәмр ҙа яуға сығырға теләй. Улдары: «Һин йыһат һуғышына барырға бурыслы түгел. Аллаһ Тәғәлә һинең ғәриплегеңде иҫәпкә алды. Һинең урынға беҙ барабыҙ», – тиҙәр.

Ғәмр: «Һеҙ Бәҙер көнө минең йәннәткә кереүемә кәртә ҡорҙоғоҙ. Валлаһи, мин бөгөн иҫән-һау ҡалһам да, һис шикһеҙ, бер көн шәһит китеп, йәннәткә керәсәкмен!» – ти. Артабан ҡатынына ла: «Һәр кем шәһит китеп, йәннәткә юл тотҡанда, мин янығыҙҙа ултырып торайыммы ни?» – тип киреләнә. Шунда уҡ ҡалҡанын ала ла: «Аллаһым! Мине ғаиләмә кире ҡайтарма!» – тип доға ҡылғас, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына бара. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә: «Балаларым мине Мәҙинәлә ҡалдырырға теләй. Мине Һинең менән бергә һуғышҡа сығыуҙан тыялар. Валлаһи, мин ошо аҡһаҡ килеш йәннәткә керергә теләйем», – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ Тәғәлә һине ғәфү итәсәк. Һиңә йыһат фарыз түгел»,* – ти.

Ғәмр разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Һин минең Аллаһ юлында йәнем сыҡҡансы һуғышып, шәһит үлеме менән үлеп, ошо аҡһаҡ аяғым менән йәннәттә йөрөүемде ярашлы, тип уйламайһыңмы?» – ти. Хөрмәтле Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Ярашлы, тип уйлайым»,* – тип белдерә лә Ғәмрҙең улдарына:

*«Атағыҙҙы бынан һуң һуғыштан тыймағыҙ. Аллаһ уға шәһитлек насип итер, тигән өмөт бар»,* – тип бойора.

Ғәмр, ҡиблаға боролоп: «Аллаһым! Миңә шәһитлек насип ит! Мине өмөтһөҙ-ышанысһыҙ килеш ғаиләм янына ҡайтарма!» – тип доға ҡыла һәм йыһат яуына ҡушыла.

Өхөд һуғышында ҡатнашҡан, шәһитлек ниәт-ынтылышы менән янған был сәхәбә йыһат яуы ваҡытында: «Валлаһи, мин йәннәтте һағынам», – тип әйтә торған була, нәтижәлә, уны һаҡларға тырышҡан улы менән бергә шул һуғышта шәһит китә. Һуңынан Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ уның тураһында:

*«Булмышым Үҙенең ҡөҙрәтле ҡулында булған Аллаһ менән ант итәм ки, Ғәмрҙең йәннәттә сатанлап йөрөгәнен күрҙем!»* – тип хәбәр итә (Ваҡыди, I, 264-265; Ибне Әсир, *«Усдул-Ғабә»,* IV, 208).

❁

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ Өхөд һуғышына ҡуҙғалыр алдынан, ғәскәрен тикшерә. Һуғышҡа ҡатнаша алырҙай йәштәргә рөхсәт бирә, йәше етмәгәндәрҙе кире бора. Сәмүрә ибн Джүндүб менән Рафиғ ибн Хәдиж дә кире бороп ебәрелгәндәр араһына эләгә. Зүһәйер ибн Рафиғ: «Йә Рәсүлүллаһ! Рафиғ йәйәнән шәп ата!» – тип, уның ғәскәрҙән ебәрелмәүен һорай. Рафиғ ибн Хәдиж ваҡиғаның дауамын былай тип бәйән ҡыла: «Аяҡтарымда сафьян сүәктәр ине. Бармаҡ остарына баҫып, оҙонораҡ булып күренергә тырыштым. Рәсүлүллаһ иһә минең ғәскәр сафына ҡушылыуыма рөхсәт бирҙе. Сәмүрә ибн Джүндүб миңә рөхсәт бирелгәнен ишеткәс, үгәй атаһы Мөрәй ибн Синанға: «Әткәйем! Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм Рафиғҡа рөхсәт бирҙе. Мине иһә кире борҙо. Юғиһә мин көрәштә уны еңә алам», – тине. Мөрәй раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Улымды кире бороп, Рафиғҡа рөхсәт бирҙегеҙ. Юғиһә, улым көрәштә Рафиғты еңә бит», – тине. Аллаһ Рәсүле Сәмүрә менән миңә:

*«Әйҙә, көрәшеп ҡарағыҙ!»* – тип бойорҙо. Беҙ көрәштек, һөҙөмтәлә, Сәмүрә мине еңде. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға ла рөхсәт бирҙе» (Табәри, *«Тарих»*, II, 505-506; Ваҡыди, I, 216).

❁

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәскәренең тылын Өхөд тауы яғына ҡарата. Айнәйн тип аталған тау түбәһенә дошмандың шул аралыҡтағы үҙәнлектән һөжүм ихтималына ҡаршы илле уҡсы урынлаштыра. Башлыҡтары итеп Ғабдуллаһ ибн Джүбәйерҙе билгеләгәс, уларға ошондай күрһәтмә бирә:

*«Һеҙ беҙҙең тылыбыҙҙы һаҡлаясаҡһығыҙ. Дошман еңеп сығамы, еңеләме, Минән хәбәр килмәйенсә, урындарығыҙҙан ҡуҙғалмағыҙ!»* (Ибне Һишам, III, 10; Әхмәт, I, 288).

Һуғыш, ғәҙәт-йола ҡушҡанса, йәнә батырҙар алышынан башлана. Аллаһ арыҫланы хәҙрәти Ғәли мөшриктәрҙең байраҡсыһы Талханы бер һуғыуҙа ергә бәрә. Ҡөрәйеш байрағын үҙенә алған, Ғосман (Талханың бер туғаны) Ғосманды иһә Хәҙрәти Хәмзә; өсөнсө байраҡсыны Сәғд ибн Әби Вәҡҡас үлтерә.

Ниһәйәт, һуғыш бар ҡеүәтенә башлана. Бәрелеш шаҡтай ҡыҙған мәлдә, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ***«Ҡурҡаҡлыҡта ғәрлек һәм хурлыҡ, алға барыуҙа шәрәф һәм ғиззәт!»*** тигән һүҙҙәр яҙылған ҡылысын күрһәтеп:

*«Быны минән кем алыр?»* – тип һорай. Сәхәбәләр: «Мин, мин!» – тип, ҡылысты алырға ҡулдарын һуҙа. Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Был ҡылысты, тейешле хаҡын бирер өсөн, кем алыр?»* – тип һорағас, ҡоралды алыуҙан тыйылып ҡалалар. Ансарҙарҙан Әбү Дүйәнә разыйаллаһу ғәнһү тороп баҫып: «Уның хаҡы ни һуң, йә Аллаһтың Рәсүле?» – тип һорай.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Уның хаҡы – ул кәкрәйгәнсе дошман менән һуғышыуың»,* – тип асыҡлай.

Әбү Дүйәнә: «Мин уның хаҡын башҡарыу шарты менән алырмын, йә Рәсүлүллаһ!» – ти. Әбү Дүйәнә ҡылысты ала, ҡыҙыл салмаһын сығарып, башына урай һәм ислам ғәскәре сафтары менән мөшриктәрҙең сафтары араһында, ҡылансыҡланып, ғорур ҡиәфәттә әрле-бирле йөрөй башлай. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уның ғорур һәм тәкәббер рәүештә йөрөүен күргәс:

*«Былай йөрөгән өсөн, бындай вәзгиәттән башҡа ваҡытта Аллаһ һис яратып бөтөрмәҫ ине!»* – тип әйтеп ҡуя (Ибне Һишам, III, 11-12; Ваҡыди, I, 259; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 128).

Һуғыш ваҡытында йәһүди ғалимдарҙан Мухайриҡ мосолманлыҡ ҡабул итә. Ул, асылда, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе Тәүратта тасуирланған сифаттары аша бик яҡшы белә. Ләкин ғилми яҡтан асыҡлаған хәҡиҡәтте Өхөдкә ҡәҙәр халыҡҡа белдерә алмай. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе Өхөд һуғышына сыҡҡас, ул йәһүдиҙәргә: «Эй йәһүҙи йәмәғәте! Валлаһи, һеҙ Мөхәммәттең Пәйғәмбәр булғанын һәм Уға ярҙам итергә тейешлегегеҙҙе бик яҡшы беләһегеҙ!» – тип мөрәжәғәт итә. Йәһүдиҙәр: «Бөгөн шәмбе, һис нәмә менән шөғөлләнмәй торған көн!» – ти. Мухайриҡ: «Һеҙҙең өсөн шәмбе тигән нәмә юҡ ул!» – тип ҡаршы сыға. Ҡылысын һәм мөһим кәрәк-яраҡтарын үҙе менән алып, туғандарының береһенә: «Әгәр бөгөн үлтерелһәм, бөтә мал-мөлкәтем – Мөхәммәттеке. Ул уларҙы Аллаһ ҡушҡанса файҙаланыр!» – тип васыят әйтә. Өхөдкә һуғышҡа сығып, шәһит китә. Үҙенән ҡалған ете хөрмә баҡсаһын Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм ҡабул итеп, уларҙы саҙаҡа ҡыла һәм:

*«Мухайриҡ – йәһүдиҙәрҙең иң хәйерлеһе!»* – тип белдерә (Ибне Һишам, III, 38; Ваҡыди, I, 263; Ибне Сәғд, I, 501-503).

Өхөд һуғышында беренән-бере ғибрәтле ваҡиғалар була:

Кузман исемле бер мәҙинәле һуғышта ете кешене үлтерә, үҙе лә ауыр яра алып, һәләк була. Шуға ҡарамаҫтан, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Кузман – йәһәннәм әһеле!»* – дип белдерә. Сөнки был бәндә һуңғы һулышында уға: «Шәһитлегең мөбәрәк булһын, эй Кузман!» – тип әйткән Ҡәтәдә ибн Нөғмәнгә: «Мин ҡәбиләм өсөн һуғыштым; шәһитлек өсөн түгел!» – ти һәм, ҡылысына ауып, үҙ-үҙенә ҡул һала (Ваҡыди, I, 263).

Ә ҡәбиләһенең исламға кереүенә башта ҡаршы сыҡҡан, унан үкенгән Усайрам баштан аяҡ ҡоралланған килеш Нәби салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килә һәм: «Йә Рәсүлүллаһ! Һеҙҙең менән бергә башта һуғышта ҡатнашайыммы, әллә мосолман булайыммы?» – тип мөрәжәғәт итә.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ:

*«Башта мосолман бул, шунан һуғыш!»* – тип бойора. Шунан һуң Усайрам мосолманлыҡ ҡабул итә, артабан һуғышка керә һәм шәһит китә. Рәсүлүллаһ салләллаһу галәйһи вә сәлләм:

*«Аҙ эшләне, ләкин бик күпкә иреште!»* – тип белдерә (Бохари, «Йыһат», 13; Мөслим, «Имарә», 144).

Яралылар араһында ятҡанда, үҙенә ҡыҙыҡһынып ҡарап тороусыларға һуңғы һулыштарын ала-ала: «Мин мосолман булыу өсөн килдем. Аллаһ һәм Уның Рәсүле өсөн һуғыштым һәм яраландым!» – тип әйтә.

Әбү Һүрайра раҙыйаллаһу ғәнһү, был бәндә тураһында йомаҡ әйткәндәй, сәхәбәләргә: «Әйтегеҙ әле миңә: ғүмерендә бер тапҡыр ҙа намаҙ уҡымайынса, йәннәткә кергән кеше кем ул?» – тип һорау бирә торған була. Кешеләр яуапты әйтә алмай, уның үҙенең аңлатып биреүен һорайҙар. Әбү Һүрайра иһә: «Ул кеше – Усайрам, йәғни Ғамр ибне Сабит!» – тип яуаплай (Ибне Һишам, III, 39-40; Ваҡыди, I, 262).

Һуғыш ваҡытында Ғабдуллаһ ибн Йәхш раҙыйаллаһу ғәнһүҙең ҡылысы һына. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ уға бер хөрмә ботағы бирә. Был ботаҡ хәҙрәти Ғабдуллаһ ҡулында бер ҡылысҡа әйләнә лә ҡуя. Ғабдуллаһ шәһит киткәнсе, шул ҡылыс менән һуғыша. «Уржун» исеме бирелгән был ҡылыс Ғабдуллаһ ибн Йәхштең вариҫтарында ваҡытта, уны төрөк мирзаларының береһе ике йөҙ динарға (алтынға) һатып ала.[140]

140. Ибне Әсир, *«Үсдул-Габә»,* III, 195; Диярбәкри, I, 433.

Мосолмандарҙың һис күрелмәгән бер йәнлелек менән дошман өҫтөнә барыуҙары тиҙ арала еңеү менән тамамлана, һан һәм ҡорал яғынан өҫтөн дошман ҡаса башлай. Ләкин мосолмандар, күпмелер ваҡыт дошманды ҡыуа барып, еңеүҙәренә тамам инанғас, ғәнимәт йыйыу эшенә керешә. Аллаһ Рәсүленең күрһәтмәләрен иҫкә төшөргән командирҙарының ҡат-ҡат киҫәтеүенә ҡарамаҫтан, хатта уҡсылар ҙа үҙ урындарын ташлап, ғәнимәт йыйырға йүгерә. Тау башында уҡсыларҙың башлығы Ғабдуллаһ менән уның ете иптәше генә ҡала.

Бына төп ғибрәтле ваҡиға шунан һуң була ла инде. Дошmegандың уяу фекерле командирҙарынан Хәлид ибн Вәлид атлы отряды менән уңайлы форсатты көтөп кенә тора. Ҡул аҫтындағы яйҙаҡтар менән ул, уҡсылар торған тау башының артынан килеп, кисекмәҫтән һөжүм итә. Ғабдуллаһ һәм башҡа уҡсылар бик тиҙ шәһит ебәрелә. Ғәнимәт туплау менән мәшғүл мосолмандарҙың тыл яғынан Хәлид ибне Вәлид отряды ҡеүәтле һөжүм башлай. Таралышып ҡасып киткән дошман ғәскәрҙәре лә, был хәлде күргәс, шунда уҡ кире боролоп, мосолмандарға ҡаршы яңынан һөжүмгә күсәләр. Ислам армияһы ике ут араһында ҡала, көтөлмәгән һөжүм сәбәпле мосолмандар араһында тарҡаулыҡ килеп сыға.

**Шәһиттәр әфәндеһе – Хәҙрәти Хәмзә**

Шул саҡта сафтар араһында әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа сабып йөрөгән ислам баһадиры, ҡыйыу йөрәкле Хәҙрәти Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү Вәхши ырғытҡан һөңгөнән шәһит китә. Әле ул ваҡытта ҡол булған Вәхши быны иреккә сығыу теләге менән эшләй. Хужабикәһе Һинд уға хөрлөк вәғәҙә иткән була. Яуыз хиреслек менән оҙаҡ ваҡыттар ошо форсатты көткән Һинд вәхшилектә шул дәрәжәгә етә ки, Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһүҙең бауырын сығарттырып, шуны умырып тешләп ала. Шуға күрә уға «Ғакиләтүл-Әкбад», йәғни «Бауыр ашаусы» ҡушаматы тағыла.

Хәҙрәти Хәмзәнең шәһит китеүе, мосолман сафтарында тулҡын-тулҡын булып таралған бер матәм еле сығара, былай ҙа шаҡтай боҙолған сафтар шаҡтай тарҡаулана. Аллаһ Тәғәлә был хәл тураһында былай тип бәйән ҡыла:

وَلَقَدْ صَدَقَكُمُ اللّٰهُ وَعْدَهُ إِذْ تَحُسُّونَهُمْ بِإِذْنِهِ حَتَّى إِذَا فَشِلْتُمْ
وَتَنَازَعْتُمْ فِى الْأَمْرِ وَعَصَيْتُمْ مِّنْ بَعْدِ مَا أَرَاكُمْ مَّا تُحِبُّونَ مِنْكُمْ مَّنْ
يُرِيدُ الدُّنْيَا وَمِنْكُمْ مَّنْ يُرِيدُ الْآخِرَةَ ثُمَّ صَرَفَكُمْ عَنْهُمْ لِيَبْتَلِيَكُمْ وَلَقَدْ
عَفَا عَنْكُمْ وَاللّٰهُ ذُو فَضْلٍ عَلَى الْمُؤْمِنِينَ.

**«Һеҙ Аллаһтың рөхсәте менән дошмандарығыҙҙы үлтергәндә, Аллаһ һеҙгә биргән вәғәҙәһен үтәне. Ниһәйәт, шундай бер ваҡыт килде ки, Аллаһ теләгәнегеҙҙе** (еңеүҙе) **һеҙгә күрһәткәндән һуң, зәғифлеккә төштөгөҙ;** (Пәйғәмбәр әйткән) **фарман тураһында бәхәсләшә башланығыҙ һәм буйһонмаусыларҙан булдығыҙ. Арағыҙҙа донъялыкты теләүселәрегеҙ ҙә бар ине, әхирәтте теләүселәрегеҙ ҙә бар ине. Артабан Аллаһ, һынау өсөн, һеҙҙе уларҙан** (уларҙы еңеүҙән) **мәхрүм итте. Һәм ант булһын, һеҙҙе ярлыҡаны. Асылда, Аллаһ мөьминдәргә ҡарата бик шәфҡәтле»** («Әлү Ғимран», 152).

Йәнәбел-Хаҡ әлеге аяти кәримәлә уҡсыларҙың үҙҙәренә билдәләнгән ерҙе ташлап киткәндәрен **«кайһығыҙ донъялыкты теләй ине»,** тип киҫәтә, был урында ҡалып шәһит китеүселәрҙе иһә **«кайһығыҙ иһә әхирәтте теләй ине»,** тип маҡтап иҫкә ала.

❁

Мөшриктәр ул көндө шаҡтай күп мөьминде шәһит ебәрә. Хатта бер төркөм мөшрик туп-тура Аллаһ Рәсүлен маҡсат итеп ҡуйып, һөжүмгә күсә. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһенә йүнәлгән атакалар шаҡтай көсәйә. Талха ибн Ғүбәйҙуллаһ тапшыра:

«Рәсүлүллаһтың сәхәбәләре таралғас, мөшриктәр һөжүмгә күсте һәм Аллаһ Рәсүлен һәр яктан ҡамап алдылар. Бер-бер артлы килгән атакаларҙан Уны алданмы, арттанмы, уңданмы, әллә һулданмы һаҡларғамы икәнен белмәй инем. Ҡылысымды сығарып, бер тапҡырында алдынан, икенсе юлы артынан килеүселәрҙе йырағайттым, ниһәйәт, дошмандар таралды» (Ваҡыди, I, 254).

Мөшриктәрҙең оҫта мәргәне Малик ибн Зүһәйер Рәсүлүллаһҡа бер уҡ ата. Талха ибн Ғүбәйҙуллаһ уҡтың Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә осоуын аңлағас, ҡулын уҡ ҡаршыһына ҡуя. Уҡ бармағын киҫеп, ҡулын йәрәхәтләй.[141]

Мөһәжир һәм ансарҙарҙан бер төркөм сәхәбәләр Аллаһ Рәсүленең тирә-яғын уратып ала. Уның ҡаршында шәһит китергә ант итеп: «Йөҙөм – Һинең йөҙөң ҡаршында ҡалҡан, тәнем – Һинең тәнеңә ҡорбан! Аллаһтың сәләме һәр даим Һиңә булһын! Һис ҡасан янынДан китмәйәсәкбеҙ», – тип ахырғаса һуғышалар (Ибне Сәғд, II, 46; Ваҡыди, I, 240).

Әбү Талха разыйаллаһу ғәнһү йәйәһен бик ҡаты итеп тарта торған уҡсы була. Өхөд көнө ҡулында икеме-өсмө йәйә һына. Үҙе янынан уҡ һаҙағы менән уҙып китеүсе һәр кемгә Аллаһ Рәсүле:

141. Ибне Сәғд, III, 217.

*«Һаҙағыңды Әбү Талха янына бушат!»* – тип ҡысҡырып ҡала. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, уның артынан мөшриктәргә күҙ һалыу өсөн, аяҡҡа баҫып башын күтәреп ҡараған һайын, Әбү Талха:

«Йә Рәсүлүллаһ! Ата-әсәм Һиңә ҡорбан булһын! Башыңды күтәрмә! Бәлки, мөшриктәрҙең берәй уғы Һиңә тейер. Күкрәгем Һинең күкрәгеңә ҡалҡан булһын. Һиңә ҡағылырға йыйынған дошман миңә ҡағылһын!» – тип оран һала (Бохари, «Магази», 18).

Ҡәтәдә ибн Нөғмән раҙыйаллаһу ғәнһү иһә Аллаһ Рәсүлен һаҡлау өсөн, Уның алдына баҫып, йәйәһенең башы кәкрәйгәнсе мөшриктәргә уҡ осора. Ахырҙа үҙ күҙенә лә бер уҡ эләгә. Күҙ бәбәге яңактарына ағып төшә. Ҡәтәдәне был хәлдә күргәс, Аллаһ Рәсүленең күҙҙәре йәшләнә. Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡәтәдәнең күҙ бәбәген ҡулы менән тотоп кире үҙ урынына кертеп ҡуя. Шунан һуң ул күҙ икенсеһенә ҡарағанда ла матурыраҡ булып, тағы ла яҡшыраҡ күрә башлай.[142]

Ҡатын-ҡыҙ сәхәбәләрҙән Өммө Ғөмәрә раҙыйаллаһу ғәнһә лә, Өхөд һуғышына ҡушылып, уҡ-йәйәһе менән дошманға ҡаршы көрәшә. Һуғыштан һуң Мәҙинәгә ҡайтҡас, Аллаһ Рәсүле:

*«Яу ваҡытында уңға-һулға ҡарағанда, гел Өммө Ғөмәрәнең янымда һуғышыуын күрә инем»,* – тип әйтә (Ибне Хәжәр, *«әл-Исабә»,* IV, 479).

Шул уңайҙан Әфәндебеҙҙең төрлө хөрмәтенә һәм доғаларына лайыҡ булған Өммө Ғөмәрә Аллаһ Рәсүленә: «Аллаһҡа доға ҡыл да йәннәттә Һиңә күрше булайым», – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Аллаһым! Быларҙы миңә йәннәттә күрше һәм иптәш итһәңсе!»* – тип доға уҡый. Шунан һуң Өммө Ғөмәрә раҙыйаллаһу ғәнһә: «Инде бынан һуң донъяла ниндәй бәлә-ҡаза килһә лә, бирешмәм!» – тип белдерә (Ваҡыди, I, 273; Ибне Сәғд, VIII, 415).

Һуғыш ҡыҙған мәлдә Аллаһ Рәсүленә ҡаршы бер һөжүмдә Сәғед ибн Әби Вәҡҡәстең мөшрик туғаны Ғутбә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә бер таш ырғыта. Атылған таш ер-күктәрҙе һелкеткән бер ваҡиғаның ысынға ашыуына сәбәп була: Рәсүлүллаһтың көбәһенән ике сыңға(ҡулса) Уның мөбәрәк йөҙөнә батып керә лә, яңағын ярып, бер тешен һындыра.[143] Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ боҙоҡ йән Әбү Ғамирҙың мосолмандарға ҡаҙыған бер соҡорона йығылып төшә. Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү Аллаһ Рәсүленең ҡулынан тота, Талха ибн Ғүбәйҙуллаһ иһә аяғына баҫтырып, соҡорҙан сығара. Әбү Ғөбәйҙә

142. Хаким, III, 334/5281; Хәйсәми, VI, 113; Ибне Сәғд, III, 453.

143. Ғутбә ибн Әби Вәҡҡәстең хыянатсы нәҫелен дауам итеүсе балаларҙың барыһы ла, илаһи ғибрәт буларак, килгән алғы тештәре китек һәм һыныҡ булып тыуа (Рамазаноглу Махмуд Сами, *«Өхөд һуғышы»,* 26 б.).

ибн-әл Йәррах, Әфәндебеҙҙең йөҙөнә батып кергән башлыҡ сыңғаларының береһен теше менән тартып сығара. Быны эшләгәндә, үҙенең дә алғы теше һына. Икенсе сыңғаны тартып алғанда, тағын бер теше кителә. Ул миҙгелдә барлыҡ һайлап алынған сәхәбәләр һәм хатта фәрештәләр ҙә тәрән матәмгә сума. Был хәл сәхәбәләрҙе бик ҡайғыға һала һәм улар Әфәндебеҙгә:«Ҡөрәйеш мөшриктәренә бәддоға ҡылмайһығыҙмы?!» – тиҙәр.

Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә:

*«Мин ләғнәт яуҙырыусы итеп ебәрелмәнем. Киреһенсә, тура юлға саҡырыусы һәм рәхмәт итеп ебәрелдем. Аллаһым! Ҡәүемемә һидәйәт бир. Сөнки улар хәҡикәтте белмәй»,* – тип доға уҡый (Бохари, «Мағази», 24; Хәйсәми, VI, 117; Ваҡыди, I, 244-247; Ҡады Ийаз, I, 95).

Яраланған сағында Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Рәсүленең йөҙөн яралаған ҡәүемгә Аллаһ бик асыуланды!»* – тип әйтә.

Сәғед ибн Әби Вәҡҡәс разыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Валлаһи, Рәсүлүллаһтың был һүҙен ишеткәс, (Уны яралаусы) туғаным Ғутбә ибн Әби Вәҡҡәсте үлтереү өсөн, шундай көслө дәрт-ынтылыш тойҙом ки, ундай үлтереү дәртен башҡа һис кемгә ҡарата тойманым!»

Шул маҡсат менән Сәғед разыйаллаһу ғәнһү мөшрик сафтарын аралай-аралай, ниәтен ысынға ашырырға күп тапҡыр тырышып ҡарай, ләкин Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сәғедкә туғанын үлтерергә ҡомасаулай.[144]

Сәғед ибн Әби Вәҡҡәс разыйаллаһу ғәнһү Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында мөшриктәргә бер туҡтауһыҙ уҡ яуҙыра, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ ҙә:

*«Ат, ат, Сәғед! Атам һәм әсәм һиңә ҡорбан булһын!»* – тип ҡеүәт бирә. Был һүҙҙәрҙең шаһиты булған хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү: «Мин Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Сәғедтән ҡала һис кемгә: *«Атам һәм әсәм һиңә ҡорбан булһын!»* – тигәнен ишеткәнем булманы», – тип иҫкә ала (Тирмизи, «Әҙәп», 61, «Мәнаҡиб», 26; Әхмәт, I, 92).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҙур болғауырлыҡ хәлендәге бәрелеш ваҡытында ла сикһеҙ иман ныҡлығы һаҡлап, Хаҡ Тәғәләгә тәүәккәл ҡыла, бер яҡтан, ҡанаған мөбәрәк йөҙөн ҡулы менән һөртөп, икенсе яҡтан иһә Йәнәбел-Хаҡтан һыйыныу-яҡлау һорап:

*«Йә Раббы! Ҡәүемем – яһилдыр, ни эшләгәндәрен белмәйҙәр. Һин уларға һидәйәт бир!»* – тип доға ҡылыуҙан туҡтамай.

Сәхл ибне Сәед разыйаллаһу ғәнһү һөйләй: «Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Өхөд һуғышы ваҡытында яраланғас, Фатима разыйаллаһу

144. Ваҡыди, I, 245.

ғәнһә Унының йөҙөнән ҡанды йыуа башланы. Хәҙрәти Ғәли Фатимаға һыу һалып тора ине. Хәҙрәти Фатима һыуҙың ҡан ағыуын тағы ла көсәйтеүен күргәс, бер киҫәк септә алды ла, шуны яндырып яҡшылап көл хәленә килтерҙе, артабан яраға һипте. Шулай итеп, ҡанды туҡтатты» (Бохари, «Йыһат», 80; «Магази», 24; Мөслим, «Йыһат», 101).

❀

Өхөд һуғышында шундай ҡайғы-борсоулы ваҡиғаларҙы солғаған күренештәр күҙәтелә. Һуғыш барышы башта мөьминдәр файҙаһына булһа, ҡушылғанға итәғәтһеҙлек күрһәтеү сәбәпле, кинәт мөшриктәр файҙаһына борола. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тирәһендә бары ун дүрт кеше генә ҡала. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе паникаға бирелгән бер төркөм мөьминдәргә:

*«Әй Аллаһ ҡолдары! Минең яныма килегеҙ, мин – Аллаһтың Рәсүлемен!»* – тип һөрән һала башлай (Ваҡыди, I, 237).

Был хәл Ҡөрьәни-Кәримдә былай тасуирлана:

إِذْ تُصْعِدُونَ وَلَا تَلْوُونَ عَلَى أَحَدٍ وَالرَّسُولُ يَدْعُوكُمْ فِى أُخْرَيكُمْ فَأَثَابَكُمْ غَمًّا بِغَمٍّ لِّكَيْلَا تَحْزَنُوا عَلَى مَا فَاتَكُمْ وَلَا مَا أَصَابَكُمْ وَاللّٰهُ خَبِيرٌ بِمَا تَعْمَلُونَ.

**«Ул ваҡытта Пәйғәмбәр артығыҙҙан һеҙҙе саҡырған саҡта, һеҙ, туктап тормайынса** (һуғыш ҡырынан) **йырағая барып, һис кемгә боролоп ҡарай алманығыҙ.** (Аллаһ) **һеҙгә бәлә өҫтөнә бәлә ебәрҙе , ҡулығыҙҙан ыскындырғанға ла, башығыҙға төшкән ауырлыктарға ла ҡайғырмағыҙ. Аллаһ ҡылғандарығыҙҙан хәбәрҙар»** («Әлү Ғимран», 153).

Мосолмандарҙың бер өлөшө хәҙрәти Пәйғәмбәр шәһит киткән, тип ишетеп, йәшен һуҡҡандай тетрәнеп ҡала. Хатта: «Аллаһ Рәсүле үлгәс, беҙ бында ни эшләйек инде!» – тип, һуғыш ҡырын ташлап китәләр. Былар, асылда, Мәҙинәне һаҡлау өсөн кире ҡайталар, әммә мосолман ҡатындар уларҙы кире бороп ебәрә.

Мосолмандарҙың башҡа бер төркөмө: «Аллаһтың Рәсүле үлһә лә, Аллаһ – мәңгелек!» – тип, һуғышты дауам итә. Быларҙан Әнәс ибн Нәдер разыйаллаһу ғәнһү (атаҡлы Әнәс ибне Маликтың ағаһы), өмөтһеҙлөк хәлендә ни эшләргә белмәй торған бер төркөм мөьминдәрҙән Ғаләмдәр Әфәндеһенең шәһит китеүе тураһында хәбәрҙе ишеткәс, Аллаһҡа бик көслө ышаныс һәм бирелгәнлек менән: «Рәсүлүллаһ шәһит киткәндән һуң, иҫән ҡалып ни ҡыла алырһығыҙ? Әйҙәгеҙ, һеҙ ҙә Унының кеүек һуғышып, шәһит булығыҙ!» – тип ҡысҡыра һәм мөшриктәр өҫтөнә һөжүмгә ҡуҙғала. Күпмелер ваҡыттан һуң ул үҙе лә,

һикһәндән артыҡ йәрәхәт алып, шәһитлек шәрбәтенән ауыҙ итә (Әхмәт, III, 253; Ибне Һишам, III, 31).

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү былай тип бәйән ҡыла:

«Ағайым Әнәс ибне Нәдер разыйаллаһу ғәнһү Бәҙер һуғышына ҡатнаша алмаған ине. Ул быны бик ауыр кисерҙе: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Мөшриктәр менән тәүге һуғышында мин була алманым. Әгәр Аллаһ Тәғәлә мөшриктәргә ҡаршы берәй һуғышҡа ҡатнашырға насип итһә, ниҙәр эшләй алғанымды, әлбиттә, күрәсәк», – тине.

Өхөд һуғышында ул да ҡатнашты. Мосолман сафтары таралып, һирәгәйгәс, иптәштәрен күҙҙә тотоп: «Раббым! Быларҙың ҡылғандары арҡаһында Һинән ярлыҡау һорайым!» – тиә-тиә, мөшриктәрҙе күҙҙә тотоп: «Быларҙың ҡылғандарынан иһә мин йыраҡ, мин – башҡа, йә Раббы!» – тиә-тиә, алға барҙы. Сәғед ибн Мөғәҙ менән осрашты ла: «Эй Сәғед! Теләгем – йәннәт. Ҡәғбәнең Раббыһы менән ант итәм, Өхөд итәктәренән үк гел шул йәннәттең еҫен һиҙәм, һауаһын һулайым», – тип белдерҙе. Сәғед һуңынан ваҡиғаны Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә ирештергәндә: «Мин ул эшләгәнде эшләй алманым, йә Рәсүлуллаһ!» – тип һөйләй.

Ағайымды шәһит итеп үлтерелгән хәлдә таптыҡ. Тәнендә ҡылыс, һөңгө һәм уҡтар һалған һикһәндән артыҡ яраһы бар ине. Мөшриктәр жәсәден мыҫҡыллап, танау-ҡолаҡ ише ағзаларын киҫкеләгәндәр ине. Шуға күрә уны һис кем танырлыҡ түгел ине. Бары һеңлеһе генә бармаҡ остарынан танып алды. Бына бу аят ағайым һәм уның кеүектәр тураһында иңдерелде:

مِنَ الْمُؤْمِنِينَ رِجَالٌ صَدَقُوا مَا عَاهَدُوا اللّٰهَ عَلَيْهِ فَمِنْهُمْ مَنْ
قَضَى نَحْبَهُ وَمِنْهُمْ مَنْ يَنْتَظِرُ وَمَا بَدَّلُوا تَبْدِيلًا.

**«Мөьминдәр араһында шундай батырҙар бар, Аллаһҡа биргән һүҙҙәренә тоғролоҡ күрһәттеләр. Уларҙан ҡайһы береһе антын үтәне** (һуғышты, шәһит китте)**, ҡайһы берҙәре** (үҙ сиратын) **көтә. Былар һис һүҙҙәренән сыҡманылар»** («әл-Әхзәб», 23)» (Бохари, «Йыһат», 12; Мөслим, «Имарә», 148).

Аллаһтың хикмәте: һуғыш мөьминдәргә ҡаршы яҡ файҙаһына боролғас, яу ҡырынан ҡасыусыларҙың күпселеге шәһәрҙән сығып һуғышыуҙы яҡлаусылар була. Шундайҙарга ишара итеп, Аллаһ Тәғәлә былай ти:

وَلَقَدْ كُنْتُمْ تَمَنَّوْنَ الْمَوْتَ مِنْ قَبْلِ أَنْ تَلْقَوْهُ فَقَدْ رَأَيْتُمُوهُ وَأَنْتُمْ تَنْظُرُونَ

**«Тәхҡиҡ, һеҙ үлем менән йөҙгә-йөҙ килгәнсе, уның менән осрашырға теләгән инегеҙ. Бына хәҙер уны ҡаршығыҙҙа күрҙегеҙ!»** («Әлү Ғимран», 143).

Үлемгә әҙер булғанлыҡтарын һөйләп йөрөһәләр ҙә, һуңынан Йәшәйеш нурының үлгәнлеге тураһында уйҙырмаға ышанып, кире сигенеп ҡасыусыларға ҡарата йүнәлгән илаһи киҫәтеү ғәйәт ҡырыҫ яңғырай:

وَمَا مُحَمَّدٌ إِلَّا رَسُولٌ قَدْ خَلَتْ مِنْ قَبْلِهِ الرُّسُلُ أَفَإِنْ مَّاتَ أَوْ قُتِلَ انْقَلَبْتُمْ عَلَى أَعْقَابِكُمْ وَمَنْ يَنْقَلِبْ عَلَى عَقِبَيْهِ فَلَنْ يَضُرَّ اللهَ شَيْئًا وَسَيَجْزِي اللهُ الشَّاكِرِينَ.

**«Мөхәммәт бары Рәсүл генә. Унан әүәл дә Пәйғәмбәрҙәр килеп киттеләр. Хәҙер Ул үлһә йәки үлтерелһә, киренең киреһенә** (иҫке динегеҙгә) **ҡайтасаҡһығыҙмы? Кем** (шулай) **кире ҡайтһа, Аллаһҡа һис нисек зарар биреүсе булмаҫ. Аллаһ шөкөр итеүселәргә әжерен насип итер»** («Әлү Ғимран», 144).

Ул дәһшәт тулы көндө, барлыҡ бәлә-ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо кеүек һис урынынан ҡуҙғалмайынса, пәйғәмбәрҙәргә хас ныҡлыҡ, түҙемлек менән дошманға ҡаршылыҡ күрһәтә. Ҡыйыулығы, ҡурҡыу белмәҫлеге, һалҡын ҡанлылығы менән сәхәбәләренә батырлыҡта ла бөйөк өлгө-үрнәк була. Сөнки Йәнәбел-Хаҡ былай тип бойора:

وَلَا تَهِنُوا وَلَا تَحْزَنُوا وَأَنْتُمُ الْأَعْلَوْنَ إِنْ كُنْتُمْ مُّؤْمِنِينَ. إِنْ يَمْسَسْكُمْ قَرْحٌ فَقَدْ مَسَّ الْقَوْمَ قَرْحٌ مِّثْلُهُ وَتِلْكَ الْأَيَّامُ نُدَاوِلُهَا بَيْنَ النَّاسِ

«(Дошманға ҡаршы) **йомшаҡлыҡ күрһәтмәгеҙ!** (Еңелдек, тип) **ҡайғыға ла төшмәгеҙ!** (Аллаһтың вәғәҙәһенә) **ышанһағыҙ, һис шикһеҙ, өҫтөн тораһығыҙ** (ахырҙа еңеүгә ирешәсәкһегеҙ)**! Әгәр һеҙҙең** (Өхөдтә), **яраланып, күңелегеҙ янған-борсолған булһа,** (ҡөрәйеш) **ҡәүеменең дә** (Бәҙерҙә) **шулай күңеле ҡырылды. Беҙ был көндәрҙе кешеләр араһында сиратлап йөрөтөрбөҙ (**Ҡайһы бер саҡта һеҙ өҫтөн сығырһығыҙ, ҡай ваҡыт иһә дошмандарығыҙ еңеүсе булыр!)**...»** («Әлү Ғимран», 139-140).

Йәнәбел-Хаҡтың Үҙ Пәйғәмбәренә һәм мөьминдәргә ҡарата мәрхәмәте һәм рәхмәте менән Өхөд яуы көнө, барса болғансыҡтарға, ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, мөшриктәр маҡсаттарына ирешә алмай. Был ваҡытта әсхәбе кирам Рәсүлүллаһтың янына әкрен-әкрен йыйыла башлай. Мөшриктәрҙең һөжүме кире ҡағыла. Мөьминдәр Аллаһ Рәсүлен бик ҙур түҙемлек һәм тырышлыҡ менән һаҡлай. Мәккәле мөшриктәр яңынан юғалтыуҙарға дусар ителә башлай. Шунан һуң, үлеүселәр һаны артмаһын өсөн, улар бер аҙ кире

сигенә. Был форсаттан файҙаланып, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә Өхөд тауына таба тартыла. Был юлы ла тау башынан мөьминдәр өҫтөнә һөжүм итергә теләгән Әбү Суфьян ниәтен ысынға ашыра алмай.

Әлеге ҡурҡыныс миҙгелдә Аллаһ Тәғәлә мөьминдәргә йоҡлап, ял итергә насип ҡыла, улар туҡтаған ерҙәрендә татлы һәм тыныс йоҡоға тала. Хатта ҡайһы берҙәре ҡулдарындағы ҡылыстарын да әллә нисә тапҡыр ергә төшөрөп ебәрә. Был йоҡо мөьминдәрҙе генә урап ала. Мосолмандар араһындағы монафиҡтарҙың һәм шөбһәле заттарҙың иһә күҙҙәренә йоҡо кермәй. Улар был ваҡытта шик-борсоу эсендә уйға бата, көтмәгәндә килеп сығып, үҙҙәрен мөшриктәр үлтереп китер, тип ҡурҡалар.[145]

Бер ваҡыт Әбү Суфьян менән хәҙрәти Ғүмәр араһында ҡыҫҡа ғына бәхәс ҡубып ала.[146] Шунан һуң кире ҡайтып китеү өсөн ҡуҙғалған Әбү Суфьян, үҙе теләгән һөҙөмтәгә ирешә алмауына асыулы үкенес тулы хистәр менән, ахырҙа: «Киләһе йылда Бәҙерҙә осрашайыҡ!» – тип белдерә.

Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү, туҡтап, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уға ни әйтер икән, тип көтә. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Ярай! Шул урын, иншаллаһ, осрашыу урыны булһын, тип әйт!»* – тип ҡуша (Ибне Һишам, III, 45; Ибне Сәғд, II, 59).

Ысынбарлыҡта иһә мөшриктәр эсенә ҡурҡыу керә, улар шуға күрә ҡайтыуға борола. Асылда, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бирелгән мөғжизәләрҙең береһе лә – дошман йөрәгенә хатта йыраҡ араларҙан да ҡурҡыу һалыу һәләте була. Йәнәбел-Хаҡ әйтә:

سَنُلْقِى فِى قُلُوبِ الَّذِينَ كَفَرُوا الرُّعْبَ بِمَا أَشْرَكُوا بِاللّٰهِ مَا لَمْ يُنَزِّلْ بِهِ
سُلْطَانًا وَمَأْوٰيهُمُ النَّارُ وَبِئْسَ مَثْوَى الظَّالِمِينَ.

**«Аллаһтың үҙҙәре тураһында бер ниндәй ҙә дәлил иңдерелмәгән нимәләрҙе Уға тиңдәш итеп ҡуйыуҙары сәбәпле, кафырҙарҙың йөрәктәренә яҡын арала ҡурҡыу индерәсәкбеҙ. Уларҙың бараһы урындары иһә йәһәннәм. Залимдар барасаҡ ер ни ҡәҙәр насар!»** («Әлү Ғимран», 151).

Ә мөшриктәр, йөрәктәренә ингән был ҡурҡыу тәьҫирендә, мосолмандарға ҡаршы яуҙа ирешкән ваҡытлы еңеүҙәренә ҡарамаҫтан, тулыһынса һаҡлауһыҙ ҡалған Мәҙинәгә бәреп керергә йөрьәт итмәй. Өҫтәүенә, яндарында бер мосолман әсир ҙә булмаған килеш, кире ҡайтырға йүнәләләр. Һис шикһеҙ , был – Аллаһтың Үҙ Пәйғәмбәренә һәм мөьминдәргә ҡарата бер шәфҡәте үә рәхмәте була.

145. Бохари, «Магази», 18, 20; Ваҡыди, I, 295-296.
146. Ибне Һишам, III, 45.

Өхөдтә мөшриктәр боролоп киткәндә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Сафҡа теҙелегеҙ, Раббыма доға һәм хәмед-сәнәлә булайыҡ!»* – тип һөрән һала.

Әсхәбе кирам Аллаһ Рәсүленең артына теҙелә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ былай тип доға ҡыла:

*«Аллаһым! Бөтә хәмед-сәнәләр Һиңә генә! Аллаһым! Һинең таратып мул ҡылғаныңды кәметәсәк, таратасаҡ зат юҡ, Һин тарайтҡанды асып, йәйәсәк-таратасаҡ зат та юҡ! Һин аҙаштырғанды дөрөҫләйәсәк, туралаясаҡ та юҡ, Һин һидәйәт биргәнде аҙаштырасаҡ зат та юҡ! Һин бирмәгәнде бирәсәк, Һин биргәнде кәртәләп, туҡтатып ҡаласаҡ зат та юҡ! Һин йыраҡайтҡанды яҡынайтасаҡ, Һин яҡын ҡылғанды йыраҡайтасаҡ зат та юҡ!*

*Аллаһым! Рәхмәтеңде һәм бәрәкәтеңде, фазылыңды һәм йомартлығыңды өҫтөмә һип! Аллаһым! Һинән һис үҙгәрмәйәсәк һәм бер ваҡытта ла юҡҡа сыҡмаясаҡ мәңгелек ниғмәттәр һорайым. Аллаһым! Һинән фәҡирлек көнөндә ниғмәт, ҡурҡыныс көндә именлек үтенәм! Аллаһым! Биргәндәреңдең дә, бирмәгәндәреңдең яуызлығынан Һиңә һығынам!*

*Аллаһым! Иманды беҙгә яраттыр, күңелдәребеҙҙе шуның менән зиннәтлә! Беҙҙе көфөрлөккә, аҙғынлыҡ һәм ғисъянға нәфрәтле ҡыл! Беҙҙе дин һәм донъя өсөн файҙалы нәмәләрҙе белеүселәрҙән, тура юлға ирешеүселәрҙән ит!*

*Аллаһым! Беҙҙең йәнебеҙҙе мосолман итеп ал, мосолман итеп йәшәт! Абруй һәм намыҫыбыҙҙы керләтмәйсә, фетнәләргә эләкмәйсә ғүмер итеп, изгеләр араһына индер!*

*Аллаһым! Һинең Пәйғәмбәрҙәреңде алдаған, кешеләрҙе Һинең юлыңдан тайпылдырған кафырҙар шайкаһын язаға тот! Уларға бәлә-ғазаптарыңды ебәр. Аллаһым! Үҙҙәренә китап бирелгән кафырҙарҙы ла язала! Йә Хаҡ һәм ысын булған Илаһ! Әмин!»* (Әхмәт, III, 424; Хаким, I, 686-687/1868; III, 26/4308).

### Аҡланыу ҡапҡаһын бикләгән сәхәбә – Сәғед ибне Рәбиғ

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сәғед ибне Рәбиғ раҙыйаллаһу ғәнһүҙе табып, ни хәлдә икәнлеген белеү өсөн, бер сәхәбәһен һуғыш ҡырына ебәрә. Ул сәхәбә, Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһүҙе ни ҡәҙәр эҙләһә лә, таба алмай, ҡысҡырып-ҡысҡырып ҡараһа ла, яуап ишетмәй. Ниһәйәт, һуңғы өмөтөн йыйып: «Эй Сәғед! Мине Рәсүлуллаһ ебәрҙе. Аллаһ Рәсүле һинең тереләр араһындамы, әллә шәһиттәр араһындамы икәнлегеңде үҙенә хәбәр итергә ҡушты!» – тип, яралылар һәм шәһиттәр ятҡан тарафҡа таба ҡысҡыра.

Ул миҙгелдә ғүмеренең ахыр минуттарын кисергән һәм яуап бирерлек рәте ҡалмаған Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһү, үҙе менән Аллаһ Рәсүле ҡыҙыҡһынғанын ишеткәс, бөтә көсөн йыйып, ыңғыраша-ыңғыраша, зәғиф тауыш менән: «Мин инде үлеләр араһында!» – тип кенә әйтә ала. Билдәле, ул инде теге донъяны күрә башлар хәлдә була. Пәйғәмбәр ебәргән сәхәбә Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһү янына йүгереп килә. Уны тәне ҡылыс яралары менән тишкеләнеп бөткән бер хәлдә күрә һәм уның ҡыҫылған, ярым бышылдаулы тауыш менән әйтелгән ошо ҡурҡыныс һүҙҙәрен ишетеп ҡала: «Валлаһи, күҙҙәрегеҙ ҡыймылдаған саҡта, Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмде дошмандарҙан һаҡламай, Уның башына берәй ҡаза килеүенә сәбәп булһағыҙ, һеҙҙең өсөн Аллаһ ҡаршында әйтеп бирә алырҙай бер ниндәй ҙә аҡланыу юҡ!» (*Мyватта*, «Йыһат», 41; Хаким, III, 221/4906; Ибне Һишам, III, 47).

Сәғед ибне Рәбиғ раҙыйаллаһу ғәнһү өммәт өсөн ып-ысын васыят дәрәжәһендәге был һүҙҙәренән һуң, фани тормош менән хушлаша.

**Өхөд шәһиттәре**

Мөшриктәр Өхөдтө тулыһынса ташлап киткәс, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Яу майҙанына төшөп, шәһиттәрҙе ерләй. Теп-теүәл етмеш шәһит ер ҡуйынына иңдерелә. Улар араһында Хәҙрәти Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү кеүек хөрмәтле заттар һәм Мөсғәб ибн Ғөмәйер раҙыйаллаһу ғәнһү кеүек ҡурҡыу белмәҫ батырҙар ҙа була.

Мосолмандарҙың байрағын күтәреп барған Мөсғәб ибн Ғөмәйер раҙыйаллаһу ғәнһү Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде һаҡлағанда шәһит китә. Шунан һуң бер фәрештә, Мөсғәб ҡиәфәтенә инеп, байраҡты тота, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ иһә, әле уның шәһитлеген белмәйенсә, байраҡсыға:

*«Алға бар, Мөсғәб!»* – тип өндәшә.

Был һүҙҙәрҙән һуң фәрештә, боролоп, Аллаһ Рәсүленә күҙ ташлай, шулай итеп, уның бер фәрештә икәнлеген аңлап алған Әфәндебеҙ ғәләйһис-салләәтү үәс-сәләәм Мөсғәбтең шәһит киткәнлеген белә. Һуңынан Мөсғәбтең мөбәрәк жәсәде табыла, ләкин уны төрөр өсөн кәфенлек таба алмайҙар (Ибне Сәғд, III, 121-122).

Мөбәрәк шәһиттең өҫтөндәге кейеме менән баш яғы ҡапланһа – аяҡтары, аяғы ҡапланһа, башы асыҡ ҡала. Сәхәбәләр ни эшләргә икәнен һорап, Аллаһ Рәсүленә мөрәжәғәт итә. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шәһиттең баш тарафын кейем менән, аяҡтарын иһә хуш еҫле үләндәр менән ҡапларға ҡуша.

Асылда, Мөсғәб раҙыйаллаһу ғәнһү Мәккәнең иң аҫыл һәм бай ғаиләләренән берәүҙең балаһы була. Бөтә Мәккә йәштәре уның тормошона ҡыҙығалар. Хатта йәш ҡыҙҙар ул уҙған юлдар өҫтөнә гөл сәскәләр һибә торған

була. Мөсғәб иһә мөшрик ғаиләһенең барлыҡ ҡыҫрыҡлау-интектереүҙәренә ҡарамаҫтан, уларҙың донъяуи мөмкинлек һәм ниғмәттәрен, хатта мираҫын ситкә ҡуйып, Аллаһ Рәсүле янында булыуҙы һайлай. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә шул саҡлы оло мөхәббәтле һәм хөрмәтле мөнәсәбәттә була , шәһит киткәс, шул фиҙакәрлеге бәрәбәренә бер фәрештә уның ҡиәфәтенә керә. Мәләктең шәһит ҡиәфәтен алыуы менән, ҡылған фиҙакәрлектәр өсөн Мөсғәбкә Аллаһтан ни ҡәҙәр ҙур рәхмәтле үә нәзәкәтле әжер-яуап бирелә.

Әлеге ҡайғылы манзара күңелдәрҙә шул тикле тәрән эҙ ҡалдыра ки, күп йылдарҙан һуң, мосолмандар ҡеүәтләнеп, абруй-дан яулаған осорҙа, әғниә-и шәкириндәрҙән (мал-мөлкәттәрен, мөмкинлектәрен Аллаһ ниәт һәм әмерҙәренә ярашлы ҡулланыусы) Ғәбдүррахман ибн Ғәүф раҙыйаллаһу ғәнһү ҡаршына, ураҙалы булған бер көнө, улы бер нисә төрлө ризыҡ килтереп ҡуя. Ул бынан бик тәьҫирләнеп, былай ти: «Мөсғәб Өхөд һуғышында шәһит китте. Ул минән фазиләтлерәк ине. Әммә кәфенлек өсөн бер еләндән башҡа бер нәмәһе лә юҡ ине. Уның менән башы ҡапланһа – аяҡтары, аяҡтары ҡапланһа, башы асыҡ ҡала ине. Һуңынан донъялыҡта беҙгә һәр нәмә насип ителде. Ысынында, хәйерле ғәмәлдәребеҙҙең әжере донъяла бирелеүенән ҡурҡам». Артабан Ғәбдүррахман раҙыйаллаһу ғәнһү илай башлай һәм, ризығын ҡалдырып, табындан сығып китә (Бохари, «Жәнаиз», 27).

Өхөд шәһиттәр араһында ислам ғәскәренең тиңһеҙ ҡаһарманы, Аллаһ арыҫланы Хәҙрәти Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү яҙмышы хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең һәм барлыҡ мөьминдәрҙең йөрәген айырыуса ҙур ҡайғы-хәсрәткә һала.

Хәҙрәти Сафия туғаны Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһүҙе күреү өсөн, шәһиттәр ятҡан яҡҡа йүнәлә. Улы Зөбәйер уны ҡаршы алып: «Рәсүлүллаһ һиңә кире ҡайтырға ҡуша», – тип хәбәр итә. Хәҙрәти Сафия иһә: «Ниңә? Туғанымды күрә алмайыммы ни? Мин уның киҫелгәне-туралғаны тураһында инде ишеттем. Ул Аллаһ юлында ошо ҡазаға юлыҡты. Инде беҙҙе бынан башҡаһы йыуата алмаҫ ине. Иншаллаһ, сабыр итеп, әжерен Аллаһтан көтәсәкмен», – ти.

Әсәһенең һөйләгәндәрен Зөбәйер Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙгә еткерә. Ғаләмдәргә рәхмәт итеп ебәрелгән Әфәндебеҙ:

*«Улайһа, ебәр, күрһен!»* – тип рөхсәт бирә. Сафия Хәҙрәти Хәмзәнең мөбәрәк жәсәде янына барып, доға ҡыла (Ибне Һишам, III, 48; Ибне Хәжәр, *«әл-Исабә»,* IV, 349).

Өхөдтәге һис ҡабатланмаҫ дини ҡәрҙәшлек күренешен Зөбәйер ибн Ғәүүәм раҙыйаллаһу ғәнһү былай тасуирлай:

«Әсәйем Сафия үҙе менән алып килгән ике еләнде сығарып: «Быларҙы туғаным Хәмзәгә кәфен итерһегеҙ, тип алып килдем», – тине. Шуларҙы алып, Хәмзә ятҡан ергә киттек. Уның янында ансарҙарҙан тағы бер кәфенһеҙ

шәһит бар ине. Ике еләнде лә Хәмзәне төрөү өсөн тотоп, ансариҙы кәфенһеҙ ҡалдырырға ояldыҡ: «Еләндең береһе Хәмзәгә, икенсеһе иһә ансариға кәфенлек булһын!» – тинек. Еләндең береһе ҙур, икенсеһе кескенә булғанға, йәрәбә һалдыҡ» (Әхмәт, I, 165).

Әлеге тәьҫирле күренеш раҫлағанса, мөьмин йөрәктәрҙән ҡан туғанлығы хисе китеп, үҙ урынын иман ҡәрҙәшлегенә ҡалдырып бара. Ҡиәмәткәсә килеп китәсәк бөтә мөьминдәргә дини ҡәрҙәшлек менән ғүмер итеүҙең тойғоһо, дәрте өлгө итеп күрһәтелә.

Шәһиттәрҙең йыназа намаҙҙарын уҡыу өсөн, Хәҙрәти Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү менән башлап, ун шәһитте алып киләләр, намаҙҙан һуң туғыҙы дәфен ҡылына. Хәзрәти Хәмзә янына тағын туғыҙ шәһит килтерелә, ҡабат йыназа намаҙы уҡыла. Шул рәүешле Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һөйөклө, яратҡан ағаһы, шәһиттәрҙең әфәндеһе булған мөбәрәк шәһиттең йыназа намаҙын әллә нисә тапҡыр ҡыла.[147]

Йәбир раҙыйаллаһу ғәнһүҙән риүәйәт ителгәнсә, Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Өхөд һуғышында шәһит китеүселәрҙе һәр ҡәбергә ике жәсәд ерләрлек итеп бер урынға килтерәләр:

*«Быларҙың ҡайһыһы Ҡөрьәнде күберәк белә ине (Ҡөрьән менән йәшәй ине)?»* – тип һорай һәм шәһиттәрҙән ҡайһыһы күрһәтелһә, шуны ҡибла яғына ҡуя (Бохари, «Жәнаиз», 73, 75).

Өхөдтәге хәл-ваҡиғалар тураһында берәй хәбәр алып булмаҫмы, тип, ҡатын-ҡыҙҙар араһында Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә лә юлға сыға. Харрә тигән ерҙә изге йәнле, иманлы ҡатын – Һинд бинт Ғәмр раҙыйаллаһу ғәнһәне осрата. Һинд ире Ғәмр ибн Йәмух, улы Һаллад һәм туғаны Ғабдуллаһтың жәсәдтәрен бер дөйәгә тейәп алып бара. Хәҙрәти Ғәйшә унан: «Артында, Өхөдтә ни хәл? Ни хәбәрҙәр бар?» – тип һорай. Һинд: «Эштәр хәйерле. Рәсүлүллаһтың хәле әйбәт. **Ул иҫән-һау булғандан һуң, һәр ҡаза-ауырлыҡ еңел тойола**», – ти. Хәҙрәти Ғәйшә дөйә өҫтөндәге жәсәдтәргә ымлап: «Кемдәр был?» – тип һорай. Изге йәнле ханым булған Һинд: «Ҡустым Ғабдуллаһ, улым Һаллад һәм ирем Ғәмр», – тип яуап бирә. Хәҙрәти Ғәйшә: «Уларҙы ҡайҙа алып бараһың?» – тип ҡыҙыҡһына. Һинд: «Мәҙинәгә илтәм. Шунда дәфен ҡыласаҡмын», – тип аңлата. Атлаһын өсөн бер аҙ ҡыуалағас, дөйә сүгә. Хәҙрәти Ғәйшә: «Дөйә йөгөнөң ауырлығы арҡаһында теҙләнәме әллә?» – тип һорай. Һинд: «Ниңә теҙләнеүен белмәйем. Юғиһә, башҡа ваҡыттарҙа ике дөйәлек йөк ташый ине. Тик хәҙер уға бер-бер хәл булғанын күрәм», – ти.

Ҡыуалағас, дөйә аяғына баҫа, ләкин Мәҙинәгә таба йүнәлткәс, йәнә сүгә. Йүнәлешен Өхөдкә таба борғанда иһә саба башлай. Һинд, Рәсүл Әкрәм

147. Ибне Мәжә, «Жәнаиз», 28.

Әфәндебеҙ янына барып, был ваҡиғаны һөйләп бирә. Остаз Нәби Әфәндебеҙ унан:

*«Дөйәгә вазифа йөкләнгән. Ғәмрҙең берәй ниндәй васыяты бар инеме?»* – тип һорай.

Һинд: «Өхөдкә китер алдынан, Ғәмр ҡиблаға боролдо ла: «Аллаһым! Миңә шәһитлек насип ит! Мине өмөтһөҙ һәм мәхрүм хәлдә ғаиләмә ҡайтарма!» – тип доға ҡылған ине», – ти.

Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип аңлата:

*«Бына шуның өсөн дөйә йөрөмәй ҙә инде. Эй ансар йәмәғәте! Һеҙҙән кем Аллаһҡа ант иткән булһа, антына тоғро ҡалһын. Эй Һинд! Ирең Ғәмр – ана шундай тоғро йәндәрҙән. Ул шәһит киткән миҙгелдән фәрештәләр ҡанаттары менән күләгә яһаны һәм ҡайҙа ерләнер икәнен ҡарап торҙолар. Эй Һинд! Ирең Ғәмр, улың Һаллад һәм ҡустың Ғабдуллаһ йәннәттә осрашасаҡ һәм иптәштәр буласаҡ».*

Был һөйөнөслө хәбәрҙән һуң Һинд садиҡ, ире менән мәңгелек тормошта ла бергә булырға теләп: «Йә Рәсүлүллаһ! Аллаһҡа доға ҡылсы, мине лә улар менән ҡауыштырһын», – тип ялбара (Ваҡыди, I, 264-265; Ибне Хәжәр, *«Фәтхул-Бари»,* III, 216; Ибне Абдилбәр, III, 1168).

Тағын бер ғибрәтле ваҡиға былай була:

Өхөд көнө Мәҙинә бик ауыр хәбәрҙән тетрәнә. «Мөхәммәт үлтерелгән!» тигән һүҙ таралғас, ҡалалағы илаған-һыҡтаған тауыштар ғәрешкә ҡәҙәр күтәрелә. Хатта ансарҙарҙан Сүмәйра ҡатын да, ике улының, атаһының, ире һәм бер туғанының шәһит китеүе тураһында хәбәр алыуға ҡарамаҫтан, быларға бик иғтибар бирмәйсә: «Уға берәр нәмә булғанмы әллә?» – тип, бары бер Аллаһ Рәсүленең хәле менән ҡыҙыҡһына.

Әсхәбе кирам яуаптарында: «Хәле яҡшы, Аллаһҡа маҡтауҙар булһын, Ул һин теләгәнсә иҫәнлектә!» – ти.

Сүмәйра ҡатын: «Уны миңә күрһәтһәгеҙ ине, йөрәгем тынысланһын», – ти. Пәйғәмбәрҙе күрһәтеүгә, шунда уҡ барып, кейеменең ситенән тота ла: «Әсәм-атам Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ! Һин иҫән-һау булғас, хәҙер инде бер нәмәгә лә борсолмам!» – тип әйтә (Ваҡыди, I, 292; Хәйсәми, VI, 115).

Бәшир ибн Әҡрәбә раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Атам Әҡрәбә Өхөд көнө шәһит булғас, илай-илай, Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына барҙым. Ул миңә:

*«Әй балаҡай! Һин ниңә илайһың? Тыныслан, илама! Һинең атаң мин булһам, әсәң иһә Ғәйшә булһа, ҡаршы килмәйһеңме?»* – тине.

Ә мин: «Әсәм-атам Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ, әлбиттә, риза булырмын!» – тип әйттем. Шунан һуң Әфәндебеҙ башымдан һыйпаны. (Хәҙерге ваҡытта) сәсем ағарҙы инде, Рәсүлүллаһтың мөбәрәк ҡулы тейгән урындары һаман да ҡап-ҡара тора» (Бохари, *«әт-Тарихул-Кәбир»,* II, 78; Ғәли әл-Муттаҡи, XIII, 298/36862).

Аллаһ менән осрашыуҙы көтөүгә бәйле шатлыҡлы тулҡынланыуҙы күрһәткән тағы бер күренеште Жабир раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Өхөд яуынан алдағы төндә атайым мине янына саҡырып әйтте: «Нәби салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең сәхәбәләренән тәүге шәһит китәсәк кеше мин булырмын, тип уйлайым. Бында ҡалдырып китә торған кешеләрем араһында, Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмдән ҡала, минең өсөн иң ҡәҙерлеһе – һин. Бурыстарым бар, уларҙы түлә. Бер туғандарыңа һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәләлә бул!»

Иртән атайым беренсе булып шәһит китте. Башҡа бер шәһит менән бергә уны уртаҡ ҡәбергә ерләнем. Һуңынан уны айырым бер урынға күсереп ерләргә теләнем. Алты айҙан һуң, уны ҡәберҙән сығарҙым. Ни күрәйем: ҡолағының бер киҫәгенән ҡала, бөтә тәне ҡәбергә ҡуйған көнгө кеүек ине! Уны үҙен генә айырым бер ҡәбергә дәфен ҡылдым» (Бохари, «Жәнаиз», 78).

Өхөд шәһиттәре иҫкә алынғанда, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Валлаһи, сәхәбәләрем менән бергә мин дә шәһит китеп, Өхөд тауы төбөндә ҡунып ҡалыуҙы ни ҡәҙәр теләр инем!»* – тип, ул мөбәрәк шәһиттәрҙең фазиләтен белдерә торған була (Әхмәт, III, 375).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер көндө Өхөд шәһиттәре ятҡан урынға килгәс:

*«Уларҙың (иман һәм тоғролоҡтарына) шаһитлыҡ ҡылам»,* – тип әйтә.

Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Аллаһтың Рәсүле, беҙ уларҙың ҡәрҙәштәре түгелмени? Улар нисек мосолман булһалар, беҙ ҙә мосолман булдыҡ, улар йыһат ҡылған кеүек, беҙ ҙә йыһат һуғышына барҙыҡ!» – ти. Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ яуабында былай ти:

*«Эйе (һөйләгән нәмәләрең дөрөҫ), фәкәт минән һуң ниндәй бидғәттәр уйлап сығарасағығыҙҙы белә алмайым».*

Хәҙрәти Әбү Бәкер илай-илай ҙа артабан: «Йәғни беҙ Һинән һуң да ҡаласаҡбыҙ?» – (тип хәсрәткә сума) (*Муватта*, «Йыһат», 32).

Хәҙрәти Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһүҙең был хәле – Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙгә ҡарата тиңһеҙ мөхәббәтенең дәрәжәһен һәм был сәхәбәнең **«өсөнсөләре – Аллаһ булған икенең икенсеһе»** булғанын раҫлаған ни ҡәҙәр матур өлгө.

Әсхәбе кирам Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде бар нәмәнән, хатта йәндәренән дә нығыраҡ ярата. Өйҙә ултырғанда Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе тураһында уйлаһалар, өй улар өсөн тар тойолор, шунда уҡ тороп, Рәсүлүллаһ янына китәләр, Уның мөбәрәк һәм айҙан нурлы йөҙөн күреп тынысланалар, Ул һөйләгәндә йөрәктәре хозурлыҡҡа ирешә.[148] Уны күрмәй торған ваҡытта, гүйә күңел ҡошо тән ситлегенә һыймай башлай. Йәннәттә Уның менән бергә була алмауҙан ҡурҡыу сәхәбәләрҙең йөҙөн һарғайта, ни эшләгәндәрен белмәҫ дәрәжәгә еткерә.[149] Әйтәйек, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хеҙмәт итеүсе Рәбиға раҙыйаллаһу ғәнһү бер көн Уның: *«Минән ни теләһәң, шуны һора!»* – тигән һүҙҙәренән һуң, ожмахта Уның менән бергә булыуҙан ҡала бер нәмә лә һорамай.[150] Сәхәбәләр, үлгәндән һуң, Аллаһ һәм Уның Рәсүле менән ҡауышасаҡтарына өмөтләнеп, оло бәхет-һөйөнөс хисе кисерәләр.[151] Шунлыҡтан, исламға кереү ниғмәтенән һуң, улар Пәйғәмбәрҙең *«Кеше үҙенең һөйгәне менән бергә»,* тигән хәбәренә һәр нәмәнән дә нығыраҡ һөйөнә.[152]

❁

«Әлү Ғимран» сүрәһенең алтмыш аяты Өхөд һуғышы менән бәйле. Мисүәр ибн Мәхрәмә, Өхөд тураһында һорағас, Ғәбдүррахман ибн Ғәүеф: ««Әлү Ғимран» сүрәһенең 120-се аятынан һуң килгәндәрен уҡы, беҙҙең менән Өхөдтә торған кеүек булырһың!» – тип яуап бирә (Ибне Һишам, III, 58; Ваҡыди, I, 319).

### «Беҙ Өхөдтө яратабыҙ, Өхөд тә беҙҙе ярата!»

Өхөд Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йөрәгендә айырым бер урын биләй. Ғаләмдәр ғорурлығы ғәләйһи әкмәлүт-тәхиййәт Әфәндебеҙ иҫән сағында Өхөдтө һәм Өхөд шәһиттәрен йыш-йыш зыярат ҡыла. Ваҡыт-ваҡыт Ул:

*«Беҙ Өхөдтө яратабыҙ, Өхөд тә беҙҙе ярата!»* – тип телгә ала (Бохари, «Йыһат», 71; Мөслим, «Хаж», 504). Бындай нәбәүи илтифат менән хөрмәтләнгән, шәһиттәр һуңғы һулыш алған Өхөд, Аллаһ Рәсүленең мөхәббәте менән мул һуғарылған бер урын сифатында, ҡиәмәткәсә килеп китәсәк өммәт өсөн ғәзиз иҫтәлектәр менән тулы бер зыярат урынына әүерелә.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һуғыштың нәтижәһе менән бәйле рәүештә Өхөдтөң ниндәйҙер бер бәхетһеҙлек урыны тип ҡаралыуына борсола, мөьмин йөрәктәргә кереп ҡалырға мөмкин асыу-нәфрәт хисенә ҡаршы тороу өсөн:

*«Беҙ Өхөдтө яратабыҙ, Өхөд тә беҙҙе ярата!»* – тип, был ергә ҡарата мөхәббәтен белдереп ҡуя. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең шундай мөхәббәте, бәрәкәте менән Өхөд, бер еңелеү урыны булараҡ түгел, Әфәндебеҙ бар күңеле

148. Касталлани, II, 104.
149. Куртуби, V, 271.
150. Мөслим, «Саләт», 226; Әхмәт, III, 500.
151. Әхмәт, I, 8; Ибне Мәжә, «Жәнаиз», 4.
152. Бохари, «Әҙәп», 96.

һәм һөйөүе менән бәйләнгән, тупрағында мөбәрәк шәһиттәр дәфен ҡылынған изге бер ер булараҡ иҫкә алына.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, Өхөдтөң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе һөйөүе һәм таныуы, нигеҙҙә бөтә мәхлуҡаттың Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙҙе белеп, Унның пәйғәмбәрлеген раҫлауына аныҡ хәҡиҡәт, асыҡ бер миҫал булып тора. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ендәрҙән һәм кешеләрҙең киреләренән ҡала, ер менән күк араһында бар булған һәр нәмә минең Аллаһтың Рәсүле икәнлегемде белә»,* – тип юҡҡа ғына әйтмәгән (Әхмәт, III, 310).

**Өхөд һуғышынан алынырға тейешле һабаҡтар**

Өхөд һуғышында ҡот осҡос ҡайғылы ваҡиғалар аша юғары дәрәжәгә ирешкән илаһи ҡоллоҡ, ғибәҙәт эсендә ғүмерҙең бик күп ауыр һәм татлы сәхифәләре кисерелә. Бер яҡтан, сабырлыҡ, Аллаһҡа тәүәккәллек, Уға үҙеңде тапшырыу һәм яҙмышҡа ризалыҡ иң олуғ юғарылыҡта, көслө иман дәрте менән күрһәтелә, икенсе яҡтан, бер миҙгеллек ғәфләт һәм донъялыҡҡа ынтылыш кеүек нәфес зәғифлектәре арҡаһында бик ауыр һынауҙар менән осрашырға тура килә.

Аллаһ Рәсүленең шәрәфле әмерен үтәүҙәге вайымһыҙлыҡ күҙ асып йомғансы һуғыштың яҙмышын үҙгәртеп ҡуя, илаһи киҫәтеү күренештәре менән еңеүҙең кисектерелеүенә килтерә. Бер нисә кешенең хатаһы ғәуамдың яҙаландырылыуы менән тамамлана, улар барыһы бер юлы ҡыйын хәлгә төшөрөлә. Сөнки был үҙе үк Аллаһтың сөннәте, илаһи ҡанундар ине. Араларында Аллаһтың Хәбибе булыу ҙа әлеге илаһи гәҙәтте үҙгәртмәй.

Юғиһә, әсхәбе кирам Бәҙерҙә Аллаһ Рәсүленә шартһыҙ-ниһеҙ эйәрә, буйһона. Пәйғәмбәргә: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Беҙ Һиңә ышандыҡ, Аллаһтан Һин алып килгән Ҡөрьәндең хаҡ икәнлегенә ихлас иман килтерҙек, Һиңә итәғәт итеү һәм эйәреү өсөн ант бирҙек. Нисек теләһәң, шулай эшлә, беҙгә әмер бир, беҙ Һинең менән. Һине ебәргән Аллаһ хаҡы өсөн, Һин диңгеҙгә керһәң, беҙ Һинең менән бергә керербеҙ, беребеҙ ҙә артта ҡалмабыҙ!..» – тигән сәхәбәләр илаһи илһамиәттең иң юғары дәрәжәһенә ирешкән хәлдә була (Ибне Һишам, II, 253-254).

Өхөд яуындағы илаһи һынауҙың сәбәбе бер төркөм мөһим, сетерекле мәсьәләләрҙә, бер миҙгеллек ғәфләт ғәмәлдәре арҡаһында мөьминдәрҙең шелтәләнеүе менән бәйле. Өхөдтөң иң мөһим хикмәттәренән береһе – мөьминдәрҙе улар араһына кереп буталған монафиҡтарҙан арындырыуҙан ғибәрәт. Тағын бер хикмәт иһә мөшриктәргә ысынлыҡта һис бер һөҙөмтә бирмәйсәк ялғансы бер еңеү насип итеп, уларҙың ғафил һәм ғәмәлһеҙ бер рәүешкә кертеү, хәрәкәтһеҙ ҡалыуҙарын тәьмин итеү. Әлеге алдауыс еңеү

сәбәпле, Бәҙер һуғышынан һуң мөшриктәр күңеленә кереп оялаған асыу-нәфрәт һүрелә, уларҙың әүәлерәк исламға ҡарата тойған ҡырыҫлығы һәм һалҡынлығы әҙәйә.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: ете йәштә булһынмы, етмештәме, Әсхәбе кирам Өхөд һуғышына ҡатнашыу һәм шәһит булыу өсөн ярыша. Ун биш йәшлек, әле бала, тип әйтерлек үҫмерҙәр, Рәсүлүллаһ ғәскәре һалдаты булыр өсөн, төрлөнән-төрлө сара күрә. Йәше ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, һәр кешенең үлемгә ашығыу сере күңелдәренең ныҡлы иман менән тулғанлығында һәм тәбиғәттең яралтылыу сәбәбе – Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡарата бар йөрәктәре менән тойған дастани мөхәббәт хисендә. Был иман һәм мөхәббәт ҡайҙа булһа, шунда һәр төрлө ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күҙәтелә. Ә ҡайҙа иман, һөйөү әҙәйә, кәмей, шунда ялҡаулыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, түбәнлек, ҡыйыуһыҙлыҡ барлыҡҡа килә. Әлеге мөхәббәтте һаҡлау һәм көсәйтеү юлы иһә зекерҙе арттырыуҙан, Рәсүлүллаһҡа салауатты күбәйтеүҙән, Аллаһ ниғмәттәре тураһында уйланыуҙан һәм Рәсүлүллаһтың тормош рәүеше һәм әхлағы менән ғүмер кисерергә тырышыуҙан ғибәрәт.

Өхөд яуында Йәшәйеш нурының яраланыуы һәм шәһит китеүе тураһында хәбәр таралыу мөьминдәр өсөн мөһим хикмәткә эйә. Сөнки улар шул рәүешле ып-ысын иман һәм ихтыяр көсө һынауы үтә. Ана шулай итеп, Аллаһ Рәсүленең дә есми яҡтан ябай бер кеше булғанлығын, ваҡыты еткәс, Уның да Раббы ҡаршыһына барасағын, Уның вафатынан һуң мөьминдәрҙең, кире боролмайса, Пәйғәмбәребеҙ күрһәткән юлды дауам итергә тейешлеген аңлап, бындай ҡайғы баштарына төшкәнсе үк, йөрәктәре менән әҙерләнеп ҡуялар.

Ҡыҫҡаһы, Өхөдтә мосолмандарға төрлө дошман менән һуғыштарҙа нисек еңеү яуларға, еңелеү һәм таралыу ҡурҡынысынан нисек ҡотолорға кеүек бик күп мәсьәләләрҙә һабаҡ һәм ғибрәт күрһәтелә.

### Хәмрә әл-Әсәд походы

(Һижри 3-сө йылдың 8 шәүүәле / 625 йылдың 24 марты)

Эстәренә ҡурҡыу кергән хәлдә Өхөдтән китеп барып, Мәккәгә таба юл тотҡан мөшриктәргә Аллаһ Жәллә Жәләлүһү оло ғәфләт, иғтибарһыҙлыҡ халәте ебәрә. Улар юлда ваҡытта ғына аҡылдарына килә. Мөшриктәр, кире ҡайтып, мөьминдәргә йәнә һөжүм итергә ниәтләй.

Был ваҡытта Мәҙинәгә ҡайтҡан Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә дошманды өркөтөргә кәрәк, тип уйлай. Аллаһ Тәғәлә бындай мәсьәләлә һис йомшаҡлыҡ, ебегәнлек күрһәтергә ярамауы тураһында аят иңдерә:

وَلَا تَهِنُوا فِى ابْتِغَاءِ الْقَوْمِ إِنْ تَكُونُوا تَأْلَمُونَ فَإِنَّهُمْ يَأْلَمُونَ كَمَا
تَأْلَمُونَ وَتَرْجُونَ مِنَ اللّٰهِ مَا لَا يَرْجُونَ وَكَانَ اللّٰهُ عَلِيمًا حَكِيمًا.

**«Дошман төркөмөн ҡыуып барыуҙа ебегәнлек, ҡурҡаҡлыҡ күрһәтмәгеҙ. Әгәр һеҙ ауыртыу тойһағыҙ, шикһеҙ, улар ҙа һеҙ ауыртыу тойған кеүек, ыҙа сигә. Ә һеҙ Аллаһтан улар өмөт итә алмаҫлыҡ нәмәләргә өмөтләнәһегеҙ. Шөбһәһеҙ, Аллаһ –һәр нәмәне белеүсе, хикмәт эйәһе»** («ән-Ниса», 104).

Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренә:

*«Дошмандарҙы кем эҙәрлекләп барырға теләй?»* – тип һорай.

Кисекмәҫтән бер төркөм әҙерлеккә керешә, улар араһына хәҙрәти Әбү Бәкер һәм Зөбәйер разыйаллаһу ғәнһүмә лә була. Дошманды эҙәрлекләп барыу өсөн юлға сығыусыларҙың барыһы ла яралы була. Әлеге яралы мөжәһидтәр, хәстәрлек эштәренән һуң, Әбү Инәбә ҡойоһо янында Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәскәренә ҡушыла.[153]

Яралыларҙы дауалау менән шөғөлләнеүен туҡтатып, Үсәйед ибн Хөдәйер разыйаллаһу ғәнһү: «Мин Аллаһтың һәм Уның Рәсүленең саҡырыуын ишеттем һәм Уға буйһондом!» – ти ҙә, ҡорал тотоп, шундуҡ Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янына килә. Сәғед ибне Ғөбәҙә разыйаллаһу ғәнһү ҙә, ашыға-ашыға йыйынып, ҡәбиләһенә хәҙер үк ҡуҙғалырға ҡуша. Улар ҙа тиҙ генә ҡоралланып, килеп етә.[154]

Составына Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙе лә ҡушылған был отряд, кисекмәҫтән, дошман артынан ҡыуа китә.

Ғабдуллаһ ибне Сәхел һәм уның бер туғаны Рафиғ разыйаллаһу ғәнһүмә Өхөдтә Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә һуғыша һәм, яраланып, Мәҙинәгә ҡайталар. Аллаһ Рәсүленең, дошманды эҙәрлекләп барыу өсөн, мосолмандарҙы саҡырыуын ишеткәс: «Валлаһи, атланыр хайуаныбыҙ юҡ, ярабыҙ ҙа ауыр. Ләкин Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм булған берәй сәфәрҙе ҡулдан ысҡындыра алабыҙмы?!» – тип, шунда уҡ юлға сығалар. Яраһы еңелерәк булғаны ауыр ялалыһының йә атлап барыуына булыша, йәки арҡаһына һалып бара. Шул рәүешле Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе янынан китмәйҙәр.[155]

Бындай фиҙакәрлектәр күрһәткән мөьминдәр илаһи хөрмәткә лайыҡ була:

**«Йәрәхәтләнгәндән һуң йәнә Аллаһтың һәм Пәйғәмбәрҙең саҡырыуына ҡолаҡ һалыусылар,** (айырыуса) **улар араһында игелек ҡылыусылар һәм тәҡүәлек эйәләре өсөн бик ҙур әжер бар»** («Әлү Ғимран», 172).

Хәрби отряд Мәҙинәнән һигеҙ саҡрым арыраҡ урынлашҡан, был походҡа исем биргән «Хәмрә әл-Әсәд» тип аталған ергә ҡәҙәр бара. Байраҡ хәҙрәти

153. Ваҡыди, I, 334-335.
154. Ваҡыди, I, 334-335.
155. Ибне Һишам, III, 53.

Ғәли разыйаллаһу ғәнһүзә була. Төн еткәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм биш йөҙ урында айырым-айырым усаҡтар яндырырға ҡуша. Иҫ киткес бер күренеш барлыҡҡа килә. Ситтән ҡараусылар унда ғәләмәт ҙур һәм ҡеүәтле армия, тип уйлай. Әйтәйек, ул ваҡытта Мәккәгә юл тотҡан, әле мосолманлыҡ ҡабул итмәгән Мәғбәд исемле бер зат, мөшрик ғәскәрҙәрҙе ҡыуып тотоп, мосолмандарҙың уларҙы ҡыуа килеүе тураһында хәбәр бирә. Мосолмандарҙың бик күп һанлы икәнен белдереү өсөн: «Ғүмеремдә шул тиклем күп кешелек ғәскәр күргәнем юҡ ине», – ти ул. Был хаҡта ишеткән мөшриктәрҙең йөрәгенә бик көслө ҡурҡыу оялай: «Мосолмандарҙың ҡыймылдарлыҡ та хәле ҡалмаған ине. Нисек булған һуң был?» – тип бер-берҙәренә ҡарашалар. Шунан һуң, үҙҙәре лә сәбәбен аңламаған бер хис менән: «Әйҙәгеҙ, бер-бер бәләгә тарығансы, бынан ҡасайыҡ!» – тиҙәр.

Улар инде хәҙер кире боролоп, һуғыш-орошҡа кереүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Ахырҙа тиҙ-тиҙ Мәккәгә таба юлдарын дауам итәләр. Улар шулай ҡурҡып ҡасҡандан һуң, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә сәхәбәләре менән бергә ҡабат Мәҙинәгә ҡайта.[156]

**Мираҫ мәсьәләһе**

Ошо ваҡытта мираҫ бүлеү менән бәйле аяти кәримә иңә, сөнки Өхөдтән һуң был мәсьәләлә күп кенә буталсыҡтар килеп сыға. Өхөдтә шәһит киткән Сәғед ибн Рәбиғ разыйаллаһу ғәнһүҙең ир-ат туғаны, уның ике ҡыҙына бер нәмә лә ҡалдырмай, бөтә мираҫты үҙенә алып ҡуя. Яһиллыҡ осоро ғәҙәте ана шулай була. Наҙанлыҡ быуатында ҡатын-ҡыҙҙарға хөрмәт күрһәтелмәгәнгә күрә, уларҙың мираҫ хаҡы ла юҡ һанала. Ислам әлеге хаҡһыҙ тәртипте бөтөрә:

يُوصِيكُمُ اللّٰهُ فِى أَوْلَادِكُمْ لِلذَّكَرِ مِثْلُ حَظِّ الْأُنْثَيَيْنِ فَإِنْ كُنَّ نِسَاءً فَوْقَ
اثْنَتَيْنِ فَلَهُنَّ ثُلُثَا مَا تَرَكَ وَإِنْ كَانَتْ وَاحِدَةً فَلَهَا النِّصْفُ وَلِأَبَوَيْهِ لِكُلِّ
وَاحِدٍ مِّنْهُمَا السُّدُسُ مِمَّا تَرَكَ إِنْ كَانَ لَهُ وَلَدٌ فَإِنْ لَّمْ يَكُنْ لَّهُ وَلَدٌ
وَوَرِثَهُ أَبَوَاهُ فَلِأُمِّهِ الثُّلُثُ فَإِنْ كَانَ لَهُ إِخْوَةٌ فَلِأُمِّهِ السُّدُسُ مِنْ بَعْدِ
وَصِيَّةٍ يُوصِى بِهَا أَوْ دَيْنٍ آبَآؤُكُمْ وَأَبنَاؤُكُمْ لَا تَدْرُونَ أَيُّهُمْ أَقْرَبُ
لَكُمْ نَفْعًا فَرِيضَةً مِّنَ اللّٰهِ إِنَّ اللّٰهَ كَانَ عَلِيمًا حَكِيمًا.

**«Аллаһ һеҙгә балаларығыҙ тураһында иҫкәртеп, ир енестәгегә ҡатын-ҡыҙ өлөшөнөң икеһе хәтле** (мираҫ бирергә) **ҡуша. Әгәр ҡыҙ балалары икенән күберәк икән, вафат булыусы ҡалдырған мираҫтың**

156. Ибне Һишам, III, 52-56; Ваҡыди, I, 334-340.

**өстән икеһе – уларҙыҡы. Әгәр** (вариç) **яңғыҙ бер ҡыҙ икән, уға мираçтың яртыһы тейеш. Үлеүсенең балаһы бар икән, ата-әсәһенән һәр ҡайһыһы мираçтың алтынан бер өлөшөнә эйә. Әгәр балаһы юҡ икән, ата-әсәһе үлеүсенең вариçы булып ҡалһа, әсәһенә өстән бере** (тейер). **Әгәр үлеүсенең ҡәрҙәштәре булһа, унының мираçтың алтынан бере** (эләгер. Барса был өлөштәр – үлеүсенең) **васыятынан һәм бурыстан һуң. Аталарығыҙ һәм улдарығыҙҙан ҡайһыһының һеҙгә файҙа яғынан яҡынырак икәнлеген белә алмаçһығыҙ. Былар – Аллаһ тарафынан ҡуйылған фарыздар** (өлөштәр)**. Дөрөçлөктә, Аллаһ – ғилем һәм хикмәт эйәһе»** («ән-Ниса», 11).

Шулай итеп, исламда тәүге мираç бүленеше Сәғед ибне Рәбиғ раҙыйаллаһу ғәнһү вариçтары араһында башҡарыла.[157]

Ислам мираç белемендә өлөштәр һәм бурыстар араһында ғәҙел бер баланс күҙәтелә. Сығымдары күберәк булған ир-атҡа ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда ҙурыраҡ өлөш бирелә, сөнки өйләнгәндә, мәһәр биреп, туй сығымдарын күтәреү менән бергә хужалыҡты тәьмин итеүгә ҡәҙәр барлыҡ матди сығымдар мәсьәләһендә ғаиләнең яуаплы ағзаһы ир-ат һанала. Йәғни ислам мираç хоҡуғындағы ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат айырмаһы яуаплылыҡ һәм вазифалағы айырмаға бәйле. Ике енес араһында билдәле бер баланс ҡорола. Ҡатын-ҡыҙ нәçел һаҡлау һәм шуға бәйле бала үçтереү, ғаиләлә тәртип һаҡлау кеүек ауыр вазифалар сәбәпле, ғаиләне тәьмин итеүҙә яуаплы тип ҡаралмай. Шул сәбәпле лә мираçтағы өлөшө лә икеләтә кәметелә. Был өлөш иһә ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейәүгә сыға алмауын йәки айырылышыу һөҙөмтәһендә яңғыҙ ҡалыуын, йәиһә башҡа күп төрлө шәхси ихыяждарын иçәпкә алып бирелә.

Ҡатын-ҡыҙҙарға хис-тойғолар тәрәнлеге, нәфислек, шәфҡәт, мәрхәмәт, оят, фиҙакәрлек, бала тәрбиәләү һәм нәçел һаҡлау кеүек сифаттар һәм вазифалар насип ителә. Уларҙың физик хәләте йомшағыраҡ, хистәре иç киткес ҡеүәтле, мәрхәмәт тойғоһо ла көслө, шуға күрә тормоштоң төрлө өлкәләрендә көтөлмәгән нимәләргә, хәлдәргә тарығанда, физик һәм рухи яҡтан ҡай саҡ бирешергә мөмкиндәр. Ана шул сәбәпле лә исламда ҡатын-ҡыҙҙың шаһитлығы ярым-йорто ғына һанала, тулы булмаç. Был хәҡиҡәтте гел сәйнәп йөрөй торған һағыҙға әйләндереп, исламға һөжүм итеүселәр, исламдың фитри һәм үҙгәрмәç үҙенсәлектәрҙе иçәпкә алыуынан тыуған әлеге ҡағиҙәһендәге камиллыҡты йә ниәттәренең әшәкелеге, йәки яһиллыҡтары арҡаһында күрмәмешкә һалышалар.

Хәҡиҡәт шул: Йәнәбел-Хаҡ һәр барлыҡты һәм ул барлыҡтың һәр киçәксеген бер маҡсат менән яралтҡан һәм уларға яралтылыу маҡсаттарын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бирә торған берәй ниндәй физик (биологик) һәм рухи (психологик) төҙөлөш насип ҡылған. Ир-атҡа тормош өсөн көрәш һәм ғаиләне тәьмин итеү вазифаһын йөкләгән Халиҡ (Яралтыусы, бар Итеүсе)

157. Әхмәт, III, 352, 375.

Тәғәлә ул был бурысын лайыҡлы башҡара алһын өсөн, бәдәнен ҡеүәтлерәк, рухын ҡырыҫыраҡ итеп яралтҡан. Ҡатын-ҡыҙ иһә нәҫелде һаҡлау, бала үҫтереү һәм сабыйҙы иң зәғиф һәм мохтаж ваҡытында ҡарау-тәрбиәләү, яҡлау эштәрендә яуаплы ителгән. Шунлыҡтан уның вазифаһы бәдәненең түгел, рухының тәрәнерәк хис-тойғолар менән тәьмин ителеүен һорай. Ана шул маҡсатта , балаһын тәүге ғажизлек осоронда уны тәрән мәрхәмәт һәм мөхәббәт менән ҡосаҡлап үҫтереү-бағыу өсөн, ҡатын-ҡыҙға илаһи бүләк сифатында айырыуса һиҙгер хислелек бирелә.

Әлеге хисле төҙөлөшө менән мәрхәмәт йылғаһына тиң әсә кешегә яралтылыу маҡсатына һәм көсөнә тура килмәгән бер вазифа йөкләнһә, тиҫкәре һөҙөмтәгә килеп сыға ала. Тимәк, ҡатын-ҡыҙҙың ғәйепле затты мәрхәмәт менән ҡыҙғанып, ғәҙел хөкөмдө яңылыш юлдан ебәреү ихтималы юғары. Ошо сифат та ҡатын-ҡыҙҙың шаһитлығының тулы һаналмауы мәсьәләһендә сығарылған илаһи хөкөмдөң хикмәттәренән береһе булып тора.

Башҡа яҡтан ҡарағанда, ислам шаһитлыҡты кешенең психологик халәтенә ҡарап тәртипкә һала. Урыны менән ир-аттың шаһитлығы күҙ уңына алынмай, урыны менән ҡатын-ҡыҙҙың шаһитлығы тулыһынса ҡабул ителә. Мәҫәлән, ир-аттар күреүе, белеүе мөмкин булмаған нәмәләрҙә бары ҡатын-ҡыҙҙарҙың шаһитлығы ғына етерлек тип һанала.[158]

Шаһитлыҡ мәсьәләһе менән ҡатын-ҡыҙҙың кәмселекле тип ҡабул ителеүен алға һөрөүселәр исламдың бындай ғәйепләүҙәрҙән ситтә торғанын, уның хоҡуҡтар һәм яуаплылыҡтар араһында ғәҙел тигеҙлек ҡороп, кешенең үҙгәрмәҫ фитри үҙенсәлектәре менән бергә йәмғәтте тулыһынса күҙ уңында тотҡанын йә аңламайҙар, йәки аңларға теләмәйҙәр.

Ҡатын-ҡыҙҙың камиллығы Аллаһ биргән күркәм сифат-һәләттәрҙе һаҡлау аша ысынға аша. Әгәр ҡатын-ҡыҙ үҙенсәлектәрен илаһи билдәләнешкә ҡапма-ҡаршы рәүештә ҡулланып, үҙ асылы менән хушлашһа, ҡиммәтен юғалта, рухи борсолоу-хәүефтә ҡалыр, бәдбәхеткә әүерелер, ғаилә усағын һүндерер. Шул рәүешле, йәмғиәт тормошо ла ярлыланыр.

Хәҙерге заманда ҡатын-ҡыҙҙар менән ир-аттар араһында яһалма һәм хаҡһыҙ тигеҙлек ярышы башланды. Ҡатын-ҡыҙҙың яратылыш үҙенсәлектәренә ҡапма-ҡаршы килгән был ярыш гүзәл заттарҙың әсә һәм ханым булыу сифатын көсһөҙләндерә, зәғифләй һәм ғаиләне яралай. Шул сәбәпле хәҙерге ваҡытта йыш күҙәтелә торған бала төшөрөү күренештәре, яһилиәт осорондағы ҡыҙ балаларҙы тереләй күмеү йолаһының замансалаштырылған бер формаһына әүерелеп, быуат енәйәте булып тора. Был быуаттың арыған һәм бетәшкән ҡатын-ҡыҙы менән яһиллыҡ осоро ҡатын-ҡыҙы араһында бары кейемһалымда, йәғни кейенеү рәүешендә генә айырмалыҡ ҡалды. Был иһә рухһыҙ материализм тәрбиәһе килтереп сығарған ижтимағи фәләкәт ул.

158. *Мәжәллә,* 1685-се маддә.

# ҺИЖРӘТТЕҢ ДҮРТЕНСЕ ЙЫЛЫ

**Рәжи ваҡиғаһы**

(Һижри 4-се йылдың сәфәр айы / 625 йылдың июле)

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, исламды таратыу һәм уны өйрәтеү маҡсаты менән, тирә-яҡтағы ҡәбиләләргә мөғәллимдәр ебәрә. Ләкин Ул юллаған ҡайһы бер уҡытыусылар хыянатҡа дусар ителә. Бындай хыянаттарҙың иң ҙурыһы – «Рәжи ваҡиғаһы».

Мәҙинә тирәләрендәге Ғәзәл һәм әл-Ҡәррә ҡәбиләләре Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән, үҙҙәренә исламды өйрәтер өсөн, мөғәллимдәр һорай. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә Ғасым ибн Ҫәбит етәкселегендә ун кешелек делегация ебәрә.

Әлеге төркөм Усфан менән Мәккә араһындағы Хүдат тип атаған ергә килеп етә. Хүзәйел ҡәбиләһе ҡул аҫтындағы Рәжи исемен йөрөткән шишмә башында ҡунырға туҡтайҙар. Мосолман мөғәллимдәрҙең әлеге урынға килеүе Хүзәйел ҡәбиләһенең бер тармағы булған Лихйән улдары ҡәбиләһенә хәбәр ителә. Лихйән улдары йөҙгә яҡын уҡсынан ғибәрәт бер төркөм менән уларҙы эҙәрлекләп килә. Ғасым һәм уның иптәштәре эҙҙәренән килеүҙәрен аңлағас, үҙҙәрен һаҡлай алырҙай бейегерәк урынға һыйыналар. Дошман уларҙы төрлө яҡтан ҡамап ала: «Аҫҡа төшөгөҙ, ҡулығыҙҙағы ҡоралдарҙы тапшырып, бирелегеҙ. Берегеҙҙе лә үлтермәҫкә һүҙ бирәбеҙ!» – ти улар.

Шунан һуң Ғасым: «Дуҫтар! Мин бер көфөрҙөң һүҙенә ышанып, аҫҡа төшмәм!» – ти. Артабан: «Аллаһым, беҙҙең хәлебеҙҙе Рәсүлеңә белдерһәңсе!» – тип доға ҡыла. Һуңыраҡ дошмандар Ғасымды һәм уға эйәргән алты кешегә уҡ атып, шәһит ебәрә.

Ғасым ибн Ҫәбит, яраланғас: «Аллаһым! Мин көн башында Һинең динеңде һаҡланым, Һин дә көн ахырында минең жәсәдемде һаҡлаһаң ине!» – тип доға уҡый.

Ҡөрәйештең ҡайһы бер күренекле кешеләре, уның шәһит китеүе тураһында хәбәр алғас, Бәҙер һуғышында үҙ араларынан берәүҙе үлтергәнгә күрә, уны таныу өсөн ярарлыҡ берәй ағзаһын алып килеү өсөн, кешеләр юллай. Фәҡәт Аллаһ Тәғәлә, Ғасым разыйаллаһу ғәнһүҙе һаҡлау өсөн бал ҡорто күсе ебәрә. Гөжләп торған ҡорт болото Ғасымдың жәсәден ҡаплай. Ҡөрәйеш бәндәләре уның тәненән һис нәмә ҡубарып ала алмайҙар (Бохари, «ЙЫһат», 170; «Магази», 10, 28; Ваҡыди, I, 354-363).

Кис етеп, ҡорттарҙың таралыуына өмөтләнгән дошман һис көтөлмәгән ваҡиға шаһиты була. Кинәт ямғыр яуа башлай, силдәр аға һәм Ғасымдың жәсәде шул ваҡытта юҡҡа сыға. Шулай итеп, дошман Ғасымдың тәненән бер кисәк тә эләктереп ҡалырға мөмкинлек тапмай. Әлеге ваҡиғанан һуң Ғасым «Бал ҡорттары һаҡлаған шәһит» тип исҡә алына (Ибне Һишам, III, 163).

Мөшриктәр йәйә керештәрен һүтеп алып, әсирлеккә бирелгән мосолмандарҙы ҡыҫып-кыҫып бәйләргә тотонғас, һигеҙенсе кеше: «Был – беҙгә ҡарата ҡылынған тәүге хыянат, алдау. Валлаһи, һеҙгә һис ҡасан бирелмәйәсәкмен. Был шәһиттәр миңә ни ҡәҙәр матур үрнәк!» – тип ҡаршылыҡ күрһәтә. Мөшриктәр уны көс менән һөйрәп алып барырға маташһалар ҙа, ул бик ныҡ ҡаршы тора. Шунан һуң уны ла үлтерәләр.

Ул ун сәхәбәнән бары икеһе – Хөбәйб һәм Зәйед раҙыйаллаһу ғәнһүмә генә иҫән ҡала. Мөшриктәр уларҙы Мәккәгә алып килеп һата. Хөбәйбте ул Бәҙер һуғышында үлтергән Харис ибне Ғамирҙың улдары һатып ала. Хөбәйб үҙен үлтереү тураһында ҡарар ҡабул ителгәнсе, шулар ҡулында әсир булып ҡала.

Әлеге нәҫел кешеләренән бер ҡатын былай тип һөйләй:

«Аллаһ менән ант итәм, үҙ ғүмеремдә Хөбәйбтән дә яҡшыраҡ әсир-ҡол күрмәнем. Валлаһи, Мәккәлә һис бер еләк-емеш булмаған бер көндө, мин уны сылбыр менән бәйләнгән килеш яңы йыйылған виноград ашап торғанын күрҙем. Был – Аллаһтың Хөбәйбкә рәхмәте менән ебәргән ризығы ине. Хөбәйб Ҡөрьән уҡый, тәһәжжүд намаҙын ҡыла ине. Ул уҡыған Ҡөрьәнде тыңлаусы ҡатын-ҡыҙҙарҙа ҡыҙғаныу хисе тыуып, илайҙар ине. «Эй Хөбәйб! Берәй төрлө ихтыяжың юҡмы?» – тип һораным унан. «Юҡ! Миңә эсергә яраҡлы һыу эсереүеңдән, боттар исеме менән һуйылған хайуандарҙың иттәрен ашатмауыңдан, һәм мине үлтерергә теләгән ваҡытта үҙемә хәбәр итеүеңдән башҡа бер нәмәгә лә мохтажлығым юҡ!» – тип белдерҙе.

Харам айҙар теүәлләнеп, уны үлтереү тураһында ҡарар сығарылғанын еткергәс, валлаһи, уның бынан һис ҡурҡҡанын һәм хәсрәтләнгәнен күрмәнем. Харис улдары, уны үлтереү өсөн харам ерҙең ситендәге Хилл тип аталған бер урынға алып килгәс, Хөбәйб уларға: «Рөхсәт итегеҙсе, ике рәкәғәт намаҙ ҡылайым», – тине. Ризалашып, уны ебәрҙеләр. Хөбәйб ике рәкәғәт намаҙ уҡыны һәм артабан: «Аллаһ менән ант итәм, үлемдән ҡурҡҡан, тип уйламаясағығыҙҙы белгән булһам, ул намаҙҙы тағы ла күберәк уҡыр инем», – тине. Шулай итеп, Хөбәйб үлемгә дусар ителгән һәр мосолмандың ике рәкәғәт намаҙ уҡыу ғәҙәтен башлап ебәргән кеше була.

Шунан һуң: «Аллаһым! Быларҙың һәр ҡайһыһын берәм-берәм юҡ ит, берәм-берәм йәндәрен ал, һис ҡайһын иҫән ҡалдырма!» – тип доға ҡылып,[159]

159. Хөбәйб доға ҡылғанда, ундағы һәр кем ҡурҡыуға ҡала. Уның доғаһының тәьҫиренән һаҡланыу өсөн, унға-һулға ҡасып, йәшеренергә тырыша, иҫән ҡалмаясаҡбыҙ, тип уйлайҙар. Бер айҙан артыҡ ваҡытта ҡөрәйеш мәжлестәрендә Хөбәйбтең бәддоғаһынан башҡа һис нәмә һөйләшмәйҙәр. Сәғид

түбəндəге мəғəнəлəге шиғыр юлдарын уҡый: «Мосолман булараҡ үлгəндəн һуң, инде нисек үлеүем тураһында һис ҡайғырмам. Быларҙың барыһы ла, əлбиттə, Аллаһ өсөн. Уны ҙурлау өсөн. Ул телəһə, киҫəктəргə телгелəнгəн тəнем менəн Хаҡ Тəғəлəнең ризалығына ирешеү бик еңел!»

Хөбəйб раҙыйаллаһу ғəнһү һуңынан Аллаһ Тəғəлəгə былай тип ялбара: «Йə Аллаһ! Бында дошман йөҙөнəн башҡа бер йөҙ ҙə күрə алмайым! Рəсүлеңə илсе итеп ебəрерлек берəү ҙə юҡ. Уға сəлəмемде Үҙең еткер!»

Шул ваҡытта сəхəбəлəре менəн Мəҙинəлə ултырып торған Аллаһ Рəсүле саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләмдең: *«Уға ла сəлəм булһын!»* мəғəнəһендəге; وَعَلَيْهِ السَّلَمُ тип əйткəнен тирə-йүндəгелəр ҙə ишетə. Əсхəбе кирам, ғəжəплəнеп: «Йə Рəсүлүллаһ! Кемдең сəлəменə яуап ҡайтарҙың?» – тип һорағас:

*«Ҡəрҙəшегеҙ Хөбəйб сəлəменə. Бына Ябраил Хөбəйбтең сəлəмен алып килде!»* – тип аңлата. Шул рəүешле Нəби саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм был сəхəбəлəрҙең шəһит ебəрелгəнен əсхəбенə шул уҡ миҙгелдə белдерə» (Бохари, «Йыһат», 170; «Магази», 10, 28; Ваҡыди, I, 354-363).

Үлтерелер алдынан, инде дар ағасына бəйлəнгəс, Хөбəйбтəн: «Ғүмереңде ҡотҡарып ҡалыу бəрəбəренə үҙ урыныңда Пəйғəмбəреңдең булыуын телəр инеңме?» – тип һорайҙар

Хөбəйб, яуапты уйлап та тормайынса, ҙур ҡыйыулыҡ һəм оло ғорурлыҡ менəн ҡəтғи һүҙен əйтə: «Һис ҡасан! Уның бында минең урында булыуын телəү түгел, Ул хəҙер торған Мəҙинəи Мөнəүүəрəлə Уның мөбəрəк аяҡтарына бер энə ҡаҙалыуына ла йəнем риза булмаҫ!»

Был яуапҡа шаҡ ҡатҡан Əбү Суфьян: «Мин донъяла Мөхəммəт кеүек дуҫтары тарафынан шул ҡəҙəр көслө һөйөлгəн бүтəн һис кемде күрмəнем!» – тийеүҙəн тыйылып ҡала алмай (Ваҡыди, I, 360; Ибне Сəғд, II, 56).

Хөбəйб раҙыйаллаһу ғəнһүҙе аҫҡан ваҡытта, йөҙөн Мəҙинə яғына боралар. «Аллаһым, был ҡылғандарым Һинең ҡаршыңда хəйерле ғəмəл икəн, йөҙөмдө ҡиблаға таба бор!» – тип доға уҡый ихлас мөьмин. Аллаһ Тəғəлə уны ҡибла тарафына бора. Мөшриктəр ни ҡəҙəр маташһалар ҙа, Хөбəйбтең йөҙөн ҡибланан башҡа тарафҡа йүнəлтə алмайҙар. Əлеге мөбəрəк сəхəбə тураһында:

يَا أَيَّتُهَا النَّفْسُ الْمُطْمَئِنَّةُ. اِرْجِعِى إِلَى رَبِّكِ رَاضِيَةً مَّرْضِيَّةً.

فَادْخُلِى فِى عِبَادِى. وَادْخُلِى جَنَّتِى.

---

ибн Ғəмир ваҡыт-ваҡыт аңын юғалта торған була. Ғүмəр раҙыйаллаһу ғəнһү үҙе хəлифəлек иткəн осорҙа, Сəғидтең был хəле тураһында ишетеп, берəй ауырыуы юҡмы икəн, тип ҡыҙыҡһына: «Əй мөьминдəр əмире! Миндə бер ниндəй ҙə сир юҡ. Лəкин мин Хөбəйб үлтерелгəн ваҡытта шунда инем, уның бəддоғаһын ишеттем. Валлаһи, быны ҡасан берəй мəжлестə иҫкə алһам, һис шикһеҙ, аңһыҙ йығылам!» – ти Сəғид (Ваҡыди, I, 359-360).

**«Әй тыныслыҡҡа ирешкән** (итәғәтле) **нәфес! Һин Унан, Ул да һинән риза булып, Раббыңа борол,** (изге) **ҡолдарың араһына ҡушыл һәм йәннәтемә кер!» –** тигән аяттар иңдерелә («әл-Фәжр», 27-30) (Куртуби, XX, 58; Галуси, XXX,133).

❁

Хөбәйб рaҙыйаллаһу ғәнһүҙән һуң шәһит киткән Зәйед раҙыйаллаһу ғәнһү ҙә шундай уҡ иман ныҡлығы менән айырылып тора. Төндәрен тәһәжжүд намаҙы уҡый, көндөҙҙәрен ураҙа тота. Боттар исеме менән һуйылғанға күрә, ит ризыҡтарын ашамай. Бының урынына һөткә өҫтөнлөк бирә. Һөт менән ураҙа тота, һөт менән ифтар ҡыла. Шәһит итеп үлтерелеү өсөн, Тәнғимгә килтерелгәндә, Хөбәйб менән осрашҡас, баштарына төшкән хәсрәт ҡаршында сабыр итеү тураһында бер-береһенә кәңәш бирәләр. Зәйед раҙыйаллаһу ғәнһү иһә ике рәкәғәт намаҙ ҡыла.

«Һинең урында Мөхәммәттең булыуын теләр инеңме?» – тигән һорауға, нәҡ Хөбәйб раҙыйаллаһу ғәнһү кеүек яуап бирә (Ваҡыди, I, 361-362).

Мосолманлыҡтан баш тартҡан осраҡта азатителәсәген белдергән ахмаҡ мөшриктәргә иһә:

«Мосолман булып үлеү – динемдән йөҙ сөйөрөп йәшәүҙән мең тапҡыр яҡшыраҡ!» – тигән яуабын әйтеп, ул мөьмин ғорурлығы эсендә шәһитлек шәрбәтен тәмләп йотоп ебәрә.

Иман ләззәтен татыған шағир, Пәйғәмбәргә ғашиҡ Юныс Әмрә, Аллаһ һәм Уның Рәсүле хаҡына йән биреү теләге менән, әхирәттә Рәсүлуллаһтың шәфәғәтенә лайыҡ булыу ынтылышын түбәндәге шиғыр юлдары менән әйтеп бирә:

*Йәнем ҡорбан булһын Һинең юлыңа,*
*Исеме гүзәл, үҙе гүзәл Мөхәммәт!*
*Кил, шәфәғәт ҡыл, түбән ҡолоңа,*
*Исеме матур, үҙе матур Мөхәммәт!..*

### Биғри Мәғүнә ваҡиғаһы

(Һижри 4-се йыл сәфәре / 625 йылдың июле)

Рәжи ваҡиғаһы менән бер үк көндәрҙә Нәжид төбәгенең байҙарынан Әбү Бәра, ҡәбиләһен дингә өндәү өсөн мөғәллимдәр һорап, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә мөрәжәғәт итә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уның был үтенесен ҡабул итергә теләмәй. Хатта үҙенә алып килгән бүләктәрҙе лә алмай:

*«Мин Нәжид халкының хыянатынан ҡурҡам, дуҫтарым өсөн борсолам!»* – тип аңлата Ул.

Шунан һуң Әбү Бәра үҙенең ҡәбиләһе исеменән мосолмандарҙың иҫәнлеге өсөн гарантия бирә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Бәра исеменән Нәжидтәге ҡәбиләләр менән етәкселек итеүсе уның туғанының балаһы – Ғамирға айырым бер хат яҙҙыра. Һуңынан иһә Әсхәбе Суффә араһынан етмеш кешелек мөғәллимдәр делегацияһы ойоштора, «Курра» исеме менән аталған был төркөмдө Рәсүлүллаһ Әбү Бәра менән бергә ебәрә.

Мөғәллимдәр төркөмө Мәҙинәгә дүрт көнлөк йыраҡлыҡта урынлашҡан Биғри Мәғүнә тигән ергә барып еткәс, ғәйәт ҡурҡыныс хыянат-мәкер менән осраша. Әбү Бәра туғанының улы Ғамир, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хатын уҡып та тормайса, ҙур сиреү менән мосолмандарға һөжүм итә. Әбү Бәраның мосолмандарҙы яҡлауы сәбәпле, Ғамирҙың үҙ ҡәбиләһе һуғышырға теләмәй, ләкин Ғамир Ғөсаййа, Риғел, Ҙәкүән, Бәни Лихйән ҡәбиләләрен күндереп, мосолмандарҙы ҡылыстан үткәрә. Араларынан берҙән-бер Ғәмир ибне Өмәййә генә ҡотолоп ҡала.[160]

Был фажиғә көнө һөжүм итеүселәр араһында булған Джәббәр ибн Сәлмә быңдай ваҡиғаны бәйән ҡыла:

«Мосолмандарҙан мине исламға саҡырыусы Ғәмир ибне Фухәйрәгә һөңгөмдө ҡаҙаным! Һөңгөм уның күкрәген тишеп сыҡҡанын күрҙем! Ә ул шул хәлдә: «Валлаһи, еңдем!» – тине. «Нәмә еңде һуң был, нәмә алды?! Мин уны үлтерҙем түгелме һуң?!» – тип уйланым күңелдән. Был ваҡытта жәсәде күккә күтәрелде һәм күҙҙән юғалды. Үҙем шаһит булған был ваҡиға мосолманлыҡ ҡабул итеүемә этәрҙе» (Ибне Һишам, III, 187; Ваҡыди, I, 349).

Ябраил ғәләйһиссәләм, Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ янына килеп, ислам өйрәтеүселәр төркөмөнөң шәһит китеп, Раббылары менән ҡауышҡандары, Раббыларының уларҙан ризалығы һәм үҙҙәрен дә разый ҡылғанлығы тураһында хәбәр еткерә.[161]

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм был ваҡиғаларҙан бик тәьҫирләнә һәм бик ҙур хәсрәт кисерә. Мөбәрәк ҡулдарын илаһи күккә асып:

*«Йә Аллаһым! Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә ҡаршы сыҡҡан Риғел, Ҙәкүән һәм Ғөсаййа (ҡәбиләләренә) ләғнәт ҡыл!»* – тип, бер ай буйы иртәнге намаҙҙан һуң доға уҡып ялбара (Бохари, «Йыһат», 9, 19, «Магази», 28; Мөслим, «Мәсәжид», 297).

Мөьминдәр ҡайғылы күҙ йәштәре түгә. Монафиҡтар һәм йәһүдиҙәр иһә бик ҙур шатлыҡ иҫереклегенә төрөнөп йөрөй, Өхөдтән бирле булып торған хәлдәрҙән улар бик ҡәнәғәтлек тоя. Мосолмандарға ҡаршы ниәттәрен Өхөдтә тулыһынса тормошҡа ашыра алмауҙары эстәрендәге асыуҙы сығара,

160. Ибне Һишам, III, 184; Хәйсәми, VI, 125-130.
161. Бохари, «Йыһат», 9.

уларҙың мәкерле пропагандаларын көсәйтә. Һуғыш барғанда ҡылған хыянат һәм мәкерлектәрҙе бик ҙур оҫталыҡ итеп күрһәтеп, араларында шаҡтай күп кеше шәһит киткән мосолмандарға: «Ул үлеүселәр беҙҙең һүҙҙе тыңлаһалар, хәҙер иҫән булырҙар ине», – тип һөйләнә башлайҙар. Уларҙың был ғәмәленә Ҡөрьәни-Кәримдә яуап бик ҡырыҫ киҫәтеү рәүешендә килә:

اَلَّذِينَ قَالُوا لِإِخْوَانِهِمْ وَقَعَدُوا لَوْ أَطَاعُونَا مَا قُتِلُوا قُلْ
فَادْرَؤُوا عَنْ أَنْفُسِكُمُ الْمَوْتَ إِنْ كُنْتُمْ صَادِقِينَ

«(Өйҙәрендә) **ултырып ҡалып та, ҡәрҙәштәре тураһында: «Беҙҙе тыңлаһалар, үлтерелмәҫтәр ине», – тиеүселәргә: «Әгәр дөрөҫ һүҙле кешеләр икәнһегеҙ, йәндәрегеҙҙе үлемдән ҡотҡарып ҡарағыҙ!» – тип әйт!»** («Әлү Ғимран», 168).

وَمَا كَانَ لِنَفْسٍ أَنْ تَمُوتَ إِلَّا بِإِذْنِ اللهِ كِتَابًا مُؤَجَّلًا

**«Үлеме Аллаһ рөхсәтенә бәйле булмаған һис кем юҡ.** (Үлем) **билдәле бер ваҡытҡа ҡәҙәр яҙылған...»** («Әлү Ғимран», 145).

❁

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү: «Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Биғри Мәғүнәлә шәһит киткән сәхәбәләре өсөн ҡайғырғандан да күберәк хәсрәтләнгәнен күрмәнем!» – тип тапшырған (Мөслим, «Мәсәжид», 302). Сөнки Биғри Мәғүнә шәһиттәренең барыһы ла – Әсхәбе Суффә әһеленән, Аллаһ Рәсүленең мәғәнәүи тәрбиәһендә үҫкән, өлгөргән Ҡөрьән һәм сөннәт мөғәллимдәре була.

Рәжи һәм Биғри Мәғүнә ваҡиғалары тәблиғ һәм остазлыҡ вазифаһының мөьминдәр өсөн ни саҡлы мөһим һәм кәрәкле бурыс булғанын күрһәтә. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренең һайлап алынғандарын, ихтимал ҡурҡыныстарҙы иҫәптә тотоп, ислам тәблиғсеһе һәм мөғәллиме итеп ебәрә. Был әһәмиәтле вазифа юлында шәһит киткән мөжәһидтәрҙе Йәнәбел-Хаҡ маҡтап телгә ала, уларҙан риза булғанын һәм уларҙың да Раббыларынан риза икәнлеген бәйән ҡыла.[162]

### Бәни Нәдирҙең мәкерле планы

Биғри Мәғүнә ваҡиғаһында ҡотолоп ҡалған Ғәмир ибн Өмәййә Мәҙинәгә ҡайтып барғанда, үҙҙәренә һөжүм иткән ҡәбиләнән ике кешенең йоҡлаған сағына тап булып, уларҙы үлтерә. Фәҡәт улар хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу

162. Бохари, «Мәғази», 28, «Йыһат», 9; Мөслим, «Мәсәжид», 297.

ғәләйһи үә сәлләм химаяһына алынған була. Мәҙинәне зыярат ҡылып ҡайтып килгән ваҡыттары. Әлеге үлтереш өсөн шуға күрә йолом түләү талап ителә. Элегерәк раҫланған килешеү нигеҙендә йоломдоң бер өлөшөн Бәни Нәдир тарафынан түләнеүе талап ителгәнгә, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер төркөм сәхәбәләре менән улар тарафына юл тота.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең шулай әҙ һандағы кеше менән яндарына килеүен күргәс, Бәни Нәдир йәһүдиҙәре был хәлде үҙҙәре өсөн мәңге башҡа булмаҫ форсат тип ҡабул итә һәм Аллаһ Рәсүленә һөжүм яһарға план ҡора. Йолом түләүенең үҙҙәренән тейешле өлөшөн бик теләп бирәсәктәрен белдереп, аҡса әҙерләгәнсе, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде бер йорт күләгәһендә ултырып торорға саҡыралар. Шул ваҡытта ҡунаҡтарҙы һыйлаясаҡтарын да әйтеп, тиҙ генә мәкерҙәрен тормошҡа ашырыу эшенә керешәләр. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе өҫтөнә, Ул күләгәһенә ултырған йорттоң түбәһенән бик ҙур ҡая киҫәге ырғытып, Унын мөбәрәк йәнен ҡыясаҡтар, йәнәһе. Әлеге ҡәүем бындай енәйәттәрҙе элгәре пәйғәмбәрҙәрҙең ҡай берҙәренә ҡарата ла ҡылғанға, был мәсьәләлә тәжрибәле була.

Ул саҡта Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ултырған еренән кинәт тороп, тиҙ-тиҙ ситкә китә. Сөнки Аллаһ Тәғәлә Рәсүленә хәлде еткерә. Рәсүлен һаҡлау рәүешендә мөьминдәргә бирелгән һыйҙы Йәнәбел-Хаҡ былай тип иҫкә ала:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا اذْكُرُوا نِعْمَتَ اللّٰهِ عَلَيْكُمْ إِذْ هَمَّ قَوْمٌ أَنْ يَبْسُطُوا إِلَيْكُمْ أَيْدِيَهُمْ فَكَفَّ أَيْدِيَهُمْ عَنْكُمْ وَاتَّقُوا اللّٰهَ وَعَلَى اللّٰهِ فَلْيَتَوَكَّلِ الْمُؤْمِنُونَ

**«Әй иман килтереүселәр! Аллаһтың һеҙгә биргән ниғмәтен онотмағыҙ! Ана бер йәмғиәт һеҙгә ҡул һуҙыр өсөн һелтәнгән ине лә, Аллаһ уларҙың ҡулын һеҙҙән тартып алды. Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Мөьмин булыусылар** (был ваҡиғанан ғибрәт алып) **бары Аллаһҡа ғына ышанһындар!»** («әл-Мәидә», 11).

Һөжүм Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә йүнәлгән булыуына ҡарамаҫтан, аяти кәримәләге ғибәрәнең **«һеҙгә ҡул һуҙыу өсөн һелтәнгән ине»,** рәүешендә иңдерелеүе, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөэминдәр өсөн йәндәре һәм ғүмерҙәренән дә ҡиммәтлерәк икәнлеген белдергән хәҡиҡәткә таяна.

Әлеге һөжүм ынтылышы тураһында Йәнәбел-Хаҡ былай ти:

وَإِمَّا تَخَافَنَّ مِنْ قَوْمٍ خِيَانَةً فَانْبِذْ إِلَيْهِمْ عَلَى سَوَاءٍ إِنَّ اللّٰهَ لَا يُحِبُّ الخَائِنِينَ

**«**(Ант биреп килешкән) **бер ҡәүемдең хыянатынан ҡурҡһаң, һин дә** (улар менән ант итеп биргән килешеүеңде) **нәк шулай уҡ боҙоуыңды үҙҙәренә әйт. Сөнки Аллаһ хаиндарҙы һөймәҫ»** («әл-Әнфәл», 58).

وَإِنْ جَنَحُوا لِلسَّلْمِ فَاجْنَحْ لَهَا وَتَوَكَّلْ عَلَى اللهِ إِنَّهُ هُوَ السَّمِيعُ الْعَلِيمُ.
وَإِنْ يُرِيدُوا أَنْ يَخْدَعُوكَ فَإِنَّ حَسْبَكَ اللهُ هُوَ الَّذِيَ أَيَّدَكَ بِنَصْرِهِ وَبِالْمُؤْمِنِينَ

**«Әгәр улар солох яҡлы булһалар, һин дә шул тарафты тот һәм Аллаһҡа тәүәккәл ҡыл! Сөнки Ул – ишетеүсе һәм белеүсе. Әгәр һиңә мәкер ҡылырға теләһәләр, шуны бел: Аллаһ һиңә етер. Ул – һиңә Үҙ ярҙамы һәм мөьминдәр менән булышыусы»** («әл-Әнфәл», 61-62).

Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Бану ән- Нәдиргә илсе ебәреп, анттарҙы яңыртыуҙарын, юғиһә, ун көн эсендә Мәҙинәнән сығып китергә тейеш буласаҡтары тураһында киҫәтеү яһай. Ләкин монафиҡтар ул ваҡытта тик ятмай, улар Мәҙинәне ташлап китергә әҙерләнгән Бану ән-Нәдиргә йәшерен хәбәр юллай. Был ҡәүемгә ярҙамға бик күп кеше туплаясаҡтарына ышандырып, Мәҙинәне һис ҡасан ташлап китмәҫкә ҡоторталар. Әлеге йәшерен хат алышыуҙы Йәнәбел-Хаҡ Ҡөрьәни-Кәримендә былай тип асып һала:

أَلَمْ تَرَ إِلَى الَّذِينَ نَافَقُوا يَقُولُونَ لِإِخْوَانِهِمُ الَّذِينَ كَفَرُوا مِنْ
أَهْلِ الْكِتَابِ لَئِنْ أُخْرِجْتُمْ لَنَخْرُجَنَّ مَعَكُمْ وَلَا نُطِيعُ فِيكُمْ أَحَدًا
أَبَدًا وَإِنْ قُوتِلْتُمْ لَنَنْصُرَنَّكُمْ وَاللهُ يَشْهَدُ إِنَّهُمْ لَكَاذِبُونَ.

**«Монафиҡтарҙың китап әһеленән хаҡты инҡар итеүсе дуҫтарына: «Әгәр һеҙ тыуған ерегеҙҙән ҡыуылһағыҙ, һис шикһеҙ, беҙ ҙә һеҙҙең менән бергә сығып китербеҙ; һеҙгә ҡаршы һис кемгә бер ваҡытта ла буйһонмабыҙ. Әгәр һуғышҡа керешһәгеҙ, һис шикһеҙ, ярҙам итербеҙ!» – тигәндәрен ишетмәнеңме? Аллаһ уларҙың ялғансы булғандарына шаһитлыҡ ҡыла»** («әл-Хәшр», 11).

Монафиҡтарҙың был ҡотортоуына бирелгән йәһүдиҙәр, үҙ-үҙҙәрендә ышаныс тойоп, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡаршы килә. Ләкин монафиҡтар вәғәҙә иткән ярҙамды күрһәтә алмаҫ ине. Быны Йәнәбел-Хаҡ түбәндәгесә аңлата:

لَئِنْ أُخْرِجُوا لَا يَخْرُجُونَ مَعَهُمْ وَلَئِنْ قُوتِلُوا لَا يَنْصُرُونَهُمْ
وَلَئِنْ نَصَرُوهُمْ لَيُوَلُّنَّ الْأَدْبَارَ ثُمَّ لَا يُنْصَرُونَ

**«Тәхҡиҡ, әгәр улар ҡыуылһа, улар менән бергә сығып китмәҫтәр; һуғыша башлаһалар, уларға ярҙам итмәҫтәр; ярҙам итһәләр ҙә, арттарына боролоп ҡасып китерҙәр, артабан үҙҙәренә лә ярҙам булмаҫ»** («әл-Хәшр», 12).

Сөнки монафиҡтар ни ҡәҙәр фетнә һәм вәсүәсә менән йәшерен соҡор ҡаҙыһалар ҙа, мөьминдәрҙән иҫ киткес ҡурҡалар. Әлеге хәҡиҡәтте иһә Ҡөрьәни-Кәрим былай асыҡлай:

لَأَنْتُمْ أَشَدُّ رَهْبَةً فِى صُدُورِهِمْ مِّنَ اللهِ ذَلِكَ بِأَنَّهُمْ قَوْمٌ لَّا يَفْقَهُونَ

**«Уларҙың күңелдәрендә һеҙгә ҡарата ҡурҡыу – Аллаһтан ҡурҡыуҙарына ҡарағанда көслөрәк. Сөнки улар – аңһыҙ бер йәмғиәт»** («әл-Хәшр», 13).

Бәни Нәдир йәһүдиҙәренең шаҡтай холоҡһоҙланып, сиктән ашыуын күргән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, инде башҡа сараһы ҡалмағас, улар йәшәгән ерҙе ҡамап ала. Башҡа йәһүҙи ҡәбиләһе – Бану Ҡурайҙа ла, антты боҙоп, Бану ән-Нәдир яғына күсә.[163]

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәһүдиҙәрҙең ишек һәм йорт өҫтөнә менеп һуғышыуҙарын, еңелгән осраҡта, шулар артына ҡасыуын күреп ала. Шунан һуң Ул йәһүҙи өйҙәрен, иң яҡынынан башлап, берәм-берәм емерергә, хөрмә ағастарының бер өлөшөн киҫергә һәм яндырырға ҡуша. Йәһүдиҙәр: «Эй Мөхәммәт! Һин боҙоҡлоҡ, мәкерҙә тыя, быларҙы ҡылыусыларҙы ғәйепләй инең. Шунан һуң былай ағастарҙы киҫеү һәм яндырыу ни тигән һүҙ?!» – тип ҡысҡыра. Йәһүдиҙәрҙең был һүҙҙәре ҡайһы бер мосолмандарҙың шик-шөбһәгә төшөүенә һәм икеләнеүгә килтерә. Был хаҡта Аллаһ Тәғәлә:

مَا قَطَعْتُمْ مِّنْ لِّينَةٍ أَوْ تَرَكْتُمُوهَا قَائِمَةً عَلَى أُصُولِهَا
فَبِإِذْنِ اللهِ وَلِيُخْزِيَ الْفَاسِقِينَ

**«Хөрмә ағастарынан теләһә ҡайһы береһен киҫеүегеҙ йәки үҫкән хәлендә ҡалдырыуығыҙ – барыһы ла Аллаһ рөхсәте менән һәм Унының юлдан тайпылыусыларҙы хурлыҡҡа ҡалдырыуы өсөн»,** – тип («әл-Хәшр», 5), мөьминдәрҙең шик-шөбһәләрен алып ташлай.[164] Шул рәүешле йәһүдиҙәрҙең хәйләһенә ҡаршы сара күрергә кәрәклеген дә белдерә.

Яҡынса егерме көн уҙғас, Бану Нәдир ҡәбиләһе, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең камил һуғыш тактикаһы һәм монафиҡтар тарафынан вәғәҙә ителгән ярҙамдар килмәү нәтижәһендә, бирелергә мәжбүр була. Аллаһ Рәсүле Бану ән-Нәдир халҡын Мәҙинәнән һөрә, ә Бану Ҡурайҙаны, яңы

163. Бохари, «Магази», 14.
164. Бохари, «Тәфсир», 59/2; Ибне Һишам, III, 192.

ант ҡабул иткәндәре өсөн, үҙ ерҙәрендә ҡалдыра. Шул рәүешле уларға мәрхәмәтлек күрһәтә.[165]

Бануән-Нәдир кешеләре, тыуған илдәрен ташлап китер алдынан, ныҡ хәлдә һаҡланып ҡалған өйҙәрен, мосолмандарға эләкмәһен өсөн, үҙ ҡулдары менән емерәләр. Ҡәбиләнең бер өлөшө – Хәйбәргә, бер өлөшө Дамаск яҡтарына күсенә.[166]

Аллаһ Тәғәлә был һуғышта мөьминдәргә ярҙамын ошо аяти кәримә менән белдерә:

هُوَ الَّذِى أَخْرَجَ الَّذِينَ كَفَرُوا مِنْ أَهْلِ الْكِتَابِ مِنْ دِيَارِهِمْ لِأَوَّلِ الْحَشْرِ
مَا ظَنَنْتُمْ أَنْ يَخْرُجُوا وَظَنُّوا أَنَّهُمْ مَّانِعَتُهُمْ حُصُونُهُمْ مِّنَ اللهِ فَأَتَيهُمُ اللهُ
مِنْ حَيْثُ لَمْ يَحْتَسِبُوا وَقَذَفَ فِى قُلُوبِهِمُ الرُّعْبَ يُخْرِبُونَ بُيُوتَهُمْ
بِأَيْدِيهِمْ وَأَيْدِى الْمُؤْمِنِينَ فَاعْتَبِرُوا يَا أُولِى الْأَبْصَارِ

**«Әһли китаптан булған инҡар итеүселәрҙе беренсе тапҡыр илдәренән сығарып ебәреүсе – Ул. Һеҙ уларҙың сығып китәсәктәренә ышанманығыҙ. Улар иһә ҡәлғәләре үҙҙәрен Аллаһ һаҡлаясаҡ, тип уйланы. Әммә Аллаһ**(тың ғазабы) **уларға көтмәгән ерҙән килде. Ул йөрәктәргә ҡурҡыу индерҙе. Шул дәрәжәлә ки, өйҙәрен үҙ ҡулдары һәм мөьминдәрҙең ҡулы менән емерәләр ине. Эй аҡыл эйәләре, ғибрәт алығыҙ!»** («әл-Хәшр», 2).

Бануән-Нәдирҙән ҡалған мал-мөлкәт, ҡорал ҡулланмайынса ғына ҡулға төшөрөлгәнгә күрә, «фәй» тип атала һәм бындай мөлкәттең хөкөмө ҡорал ҡулланып яулап алынған ғәниməттәрҙән айырылып тора:

مَّا أَفَاءَ اللهُ عَلَى رَسُولِهِ مِنْ أَهْلِ الْقُرَى فَلِلَّهِ وَلِلرَّسُولِ وَلِذِى الْقُرْبَى
وَالْيَتَامَى وَالْمَسَاكِينِ وَابْنِ السَّبِيلِ كَىْ لَا يَكُونَ دُولَةً بَيْنَ الْأَغْنِيَاءِ مِنْكُمْ
وَمَا آتَاكُمُ الرَّسُولُ فَخُذُوهُ وَمَا نَهَيكُمْ عَنْهُ فَانْتَهُوا وَاتَّقُوا اللهَ إِنَّ اللهَ
شَدِيدُ الْعِقَابِ. لِلْفُقَرَاءِ الْمُهَاجِرِينَ الَّذِينَ أُخْرِجُوا مِنْ دِيَارِهِمْ وَأَمْوَالِهِمْ
يَبْتَغُونَ فَضْلًا مِّنَ اللهِ وَرِضْوَانًا وَيَنْصُرُونَ اللهَ وَرَسُولَهُ أُوْلَئِكَ هُمُ الصَّادِقُونَ.

165. Бохари, «Мағази», 14; Мөслим, «Йыһат», 62.
166. Ибне Һишам, III, 191-194; Ваҡыди, I, 363-380.

**«Аллаһтың** (ҡорал ҡулланмайынса яуланған) **дәүләттәр халҡынан Пәйғәмбәренә биргән ғәниmәттәре – Аллаһ, Пәйғәмбәр, Уның яҡындары, йәтимдәр, ярлылар һәм юлсылар өсөн. Был – ул малдар һеҙҙән бары байҙар араһында ғына әйләнеп йөрөгән бер мөлкәткә әйләнмәһен өсөн. Пәйғәмбәр һеҙгә ни бирһә, шуны алығыҙ, һеҙгә нәмәне тыйһа, шунан тыйылығыҙ. Аллаһтан ҡурҡығыҙ, сөнки Аллаһтың ғазабы ауыр. Шулай уҡ һижрәт ҡылыусы фәҡирҙәргә тейеш, улар илдәренән һәм малдарынан ҡыуып ебәрелгән. Улар Аллаһтың рәхмәтен һәм ризалығын эҙләп йөрөйҙәр, Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә ярҙам итәләр. Тоғро булыусылар – ана шулар»** («әл-Хәшр», 7-8).

Аяти кәримәлә Аллаһ хаҡы рәүешендә айырып телгә алынған «фәй» Ҡәғбә һәм башҡа мәсеттәрҙең төҙөкләндерелеүендә файҙаланыу өсөн билдәләнә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә үҙенә эләккән фәйҙе ярлы сәхәбәләр араһында тарата. Фәйҙең ошо рәүештә бүленешендә хикмәт, юғарылағы аяти кәримәлә лә асыҡланғанса, байлыҡтың билдәле бер кешеләр ҡулында ғына йыйылып, бары шундайҙар араһында ғына әйләнештә йөрөүенә кәртә ҡуйыуҙан ғибәрәт. Сөнки исламдың финанс мәсьәләләрендәге принцибы кешеләрҙең бер-береһе менән ярҙамлашыуын, ҡулдарындағы ниғмәттәрҙән фәҡирҙәргә һәм көсһөҙ, зәғиф кешеләргә ҡулланыу мөмкинлеге биреүен күҙ алдында тота. Шул рәүешле төрлө ҡатламдарҙы бер-береһенә яҡынайтҡан ғәҙел йәмғиәт ҡорола һәм унда башҡа берәүҙе эксплуатациялаусы төркөм, ҡатлам була алмай.

Шуға күрә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Бану ән-Нәдирҙән алынған ғәниmәттәрҙе мөһәжирҙәр араһында бүлә, мохтажлыҡ кисергән өс кешенән ҡала ансарҙарҙан башҡа берәүгә лә бирмәй. Ғәнимәт бүленгәнсе, ансарҙарға мөрәжәғәт итеп, Ул:

*«Теләһәгеҙ, элек мөһәжирҙәргә биргән нәмәләрегеҙ уларҙа ҡалыр, һеҙ иһә был ғәнимәттән өлөш алырһығыҙ. Теләһәгеҙ, биргән нәмәләрегеҙҙе кире һорап алырһығыҙ, ә был ғәнимәтте тулыһынса уларға ҡалдырырһығыҙ»,* – тип белдерә.

Шунан һуң ансар раҙыйаллаһу ғәнһүм әжмәғин иҫ киткес күркәм яуап бирә: «Малдарыбыҙ һәм йорттарыбыҙҙан биргәндәрҙе лә кире алмайбыҙ, ғәнимәтте лә уларға ҡалдырырбыҙ, бүлешеүҙә ҡатнашмайбыҙ».

Ансари кирамдың әлеге тиңдәшһеҙ, ҡабатланмаҫ ҡәрҙәшлек үрнәге түбәндәге аяти кәримәнең иңеү сәбәптәренән береһе була:

وَالَّذِينَ تَبَوَّؤُوا الدَّارَ وَالْإِيمَانَ مِنْ قَبْلِهِمْ يُحِبُّونَ مَنْ هَاجَرَ إِلَيْهِمْ وَلَا يَجِدُونَ

فِى صُدُورِهِمْ حَاجَةً مِمَّا أُوتُوا وَيُؤْثِرُونَ عَلَى أَنْفُسِهِمْ وَلَوْ كَانَ بِهِمْ خَصَاصَةٌ

**«Әүәлдән Мәҙинәне үҙ иле иткән һәм күңелдәренә иман урынлаштырған заттар үҙҙәре янына һижрәт ҡылып килеүселәрҙе һөйөр, уларға биргән нәмәләре өсөн һис бер көнсөлөк тоймаҫтар, үҙҙәре мохтажлыкта булһалар ҙа, мөһәжирҙәрҙе өҫтөн ҡуйырҙар...»** («әл-Хәшр», 9), (Рази, XXIX, 250; Куртуби, XVIII, 25).

**Хәмер һәм ҡомарҙың тыйылыуы**

Билдәле булғанса, хәмер һәм ҡомар тураһындағы хөкөмдәр исламдың беренсе йылдарында әйтелмәй, айырым бер шарттар менән һуңғараҡ ҡалдырыла. Хәмерҙең харам тип билдәләнеүе түбәндәге этаптарҙан һуң тормошҡа ашырыла:

1. Мәккәлә:

وَمِنْ ثَمَرَاتِ النَّخِيلِ وَالْأَعْنَابِ تَتَّخِذُونَ مِنْهُ سَكَرًا
وَرِزْقًا حَسَنًا إِنَّ فِى ذَلِكَ لَآيَةً لِّقَوْمٍ يَعْقِلُونَ.

**«Хөрмә һәм йөҙөмдән иҫерткес хәмер ҙә, яҡшы ризыктар ҙа яһай алаһығыҙ. Шөбһәһеҙ, бында аҡылын ҡуллана алыусы заттар өсөн алыр һабаҡ бар», –** аяти кәримәһе («ән-Нәхел», 67) индерелә. Был аятта хөрмә һәм йөҙөмдән, яҡшы ризыҡтарҙан айырмалы булараҡ, иҫерткес матдә лә яһалыуы белдерелә. Шул рәүешле иҫерткес тәьҫир бирә торған нәмәләрҙең күркәм һәм дин тарафынан ҡабул ителерлек эсемлек һаналмағанлығын һиҙҙереп, уның киләсәктә тыйыласағына ишара яһала. Мәккә осоронда хәмер тураһында башҡа аят индерелмәй.

2. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Мәҙинәгә һижрәт ҡылғас, кешеләрҙең һорауҙары менән бәйле рәүештә Аллаһ Тәғәлә былай тип асыҡлай:

يَسْأَلُونَكَ عَنِ الْخَمْرِ وَالْمَيْسِرِ قُلْ فِيهِمَا إِثْمٌ كَبِيرٌ
وَمَنَافِعُ لِلنَّاسِ وَإِثْمُهُمَا أَكْبَرُ مِنْ نَّفْعِهِمَا.

**«Һинән хәмер һәм ҡомар тураһында һорарҙар. Әйт: «Уларҙа ҙур гонаһ та, кешеләр өсөн бер өлөш файҙалар ҙа бар. Ләкин икеһенең дә гонаһы файҙаларынан ҙурыраҡ…»** («әл-Баҡара», 219.)

Әлеге аят иңгәс, мосолмандарҙың күпселеге хәмерҙе ташлай, бер өлөшө иһә эсеүен дауам итә.

3. Әсхәбе кирамдан берәү, аҡшам намаҙын алып барғанда, бер аятты мәғәнәһе боҙолорлоҡ дәрәжәлә яңылыш уҡый. Шунан һуң:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَقْرَبُوا الصَّلَاةَ وَأَنْتُمْ سُكَارَى حَتَّى تَعْلَمُوا مَا تَقُولُونَ

**«Эй иман эйәләре! Һеҙ иҫерек икән, ни һөйләгәнегеҙҙе белә башламайса, намаҙға яҡын килмәгеҙ!..»** – тигән («ән-Ниса», 43) аят иңә.

Ана шунан һуң мосолмандар араһында хәмер эсеүселәр шаҡтай әҙәйә. Намаҙ уҡыр ваҡыт еткәс, Аллаһ Рәсүленең һөрәнсеһе: «Сәрхүштәр һис бер нисек тә намаҙға яҡын килмәһен!» – тип ҡысҡыра. Мосолмандар инде хәмерҙең ҡәтғи рәүештә тыйыласағын аңлайҙар һәм быға әҙер булалар.

4. Ахыр һөҙөмтәлә мосолмандарҙың күп өлөшө хәмерҙе ташлай. Ҡайһы берҙәре иһә хәмер арҡаһында үҙҙәре тарыған тиҫкәре хәлдәрҙән интеккән була. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Аллаһым! Хәмер тураһында беҙгә аныҡ һәм ҡәтғи бер аңлатма бир!» – тип доға уҡый. Ниһәйәт, бер хәмер мәжлесенән һуң ҡупҡан бәхәс-ызғыш менән хәмерҙең насарлығы тағы ла асыҡланып, был мәсьәләләге тыйыу бик еңел аңлатып биреү өсөн нигеҙ тапҡас, әлеге вәзғиәт аят иңеү өсөн бер сәбәпкә әйләнеп, илаһи тыйыу барлыҡҡа килде. Аллаһ Тәғәлә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِنَّمَا الْخَمْرُ وَالْمَيْسِرُ وَالْأَنْصَابُ وَالْأَزْلَامُ رِجْسٌ
مِّنْ عَمَلِ الشَّيْطَانِ فَاجْتَنِبُوهُ لَعَلَّكُمْ تُفْلِحُونَ. إِنَّمَا يُرِيدُ الشَّيْطَانُ
أَنْ يُوقِعَ بَيْنَكُمُ الْعَدَاوَةَ وَالْبَغْضَاءَ فِى الْخَمْرِ وَالْمَيْسِرِ وَيَصُدَّكُمْ
عَنْ ذِكْرِ اللهِ وَعَنِ الصَّلَاةِ فَهَلْ أَنْتُمْ مُّنْتَهُونَ.

**«Эй иман эйәләре! Хәмер, ҡомар, баҫтырылған таштар** (боттар), **фал һәм бәхетле осраҡ уҡтары – шайтан эше, әшәкелек ул. Быларҙан йыраҡ булығыҙ, бәхеткә тейенерһегеҙ. Шайтан хәмер һәм ҡомар юлы менән бары арағыҙға дошманлыҡ һәм асыу кертергә; һеҙҙе Аллаһты зекер итеүҙән һәм намаҙҙан айырырға теләй. Инде баш тарттығыҙ түгелме?» –** аяттарын («әл-Мәидә», 90-91) индерә.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ хәҙрәти Ғүмәрҙе саҡырып, уға ошо аяттарҙы уҡый. **«Инде баш тарттығыҙ түгелме?»** тигән өлөшөнә еткәс, Ғүмәр: «Баш тарттыҡ! Баш тарттыҡ, йә Раббы!» – тип әйтә. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү генә түгел, барлыҡ мосолмандар ҙа: «Инде хәмерҙән, ҡомарҙан баш тарттыҡ, йә Раббыбыҙ!» – тиҙәр.

Был аяттар иңгәс, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡушҡанса, уның бер һөрәнсеһе: «Белеп тороғоҙ, хәмер харам ҡылынды!» – тип хәбәр

һала. Турһыҡтарҙы тишеп бушатылған, кувшиндарҙы ватып түгелгән хәмерҙәр Мәҙинә урамдарында ташҡын һымаҡ аға!..

Хәмер эсеүсе мосолмандар әлеге тыйыу аятынан һуң ҡулдарындағы шараптарының барыһын да юҡ итәләр. Башҡа бер тапҡыр ҙа эсмәйҙәр. Һуңыраҡ Әфәндебеҙ:

*«Һис шикһеҙ, Аллаһ хәмерҙе, уны әҙерләүсене, ул әҙерләнә торған ерҙе, эсеүсене, эсереүсене, ташыусыны, һатыусыны, һатып алыусыны, шуны һатып алған аҡсаға һәм шунан алған керемгә ашау-эсеүсене ләғнәт ҡылды!»* – тип белдерә (Әхмәт, I, 53; II, 351; Нәсаи, «Әшрибә», 1-2; Хаким, II, 305/3101).

Әнәс разыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Әбү Талха өйөндә кешеләргә шарап һалған саҡта хәмер харам ҡылынды. Аллаһ Рәсүле бер һөрәнсегә әмер бирҙе, ә ул иһә кешеләргә хәбәр итте. Беҙ өйҙә ваҡытта һөрәнсе тауышы ишетелде. Әбү Талха: «Сығып ҡара әле, ниндәй тауыш ул?» – тине. Сығып, күҙ һалдым һәм: «Бер нидасы: «Иғтибар, иғтибар: хәмер харам ҡылынды!» – тип һөрән һала», – тип әйттем. Миңә: «Улайһа бар, быны түк!» – тине. Шул миҙгелдән башлап Мәҙинә урамдарынан хәмер аҡты» (Бохари, «Тәфсир», 5/11).

Әлеге ваҡиға – әсхәбе кирамдың Аллаһ Тәғәлә ҡушканға буйһоноуҙағы үҙ-үҙҙәренә ҡарата талапсанлығына бик матур бер үрнәк. Бер ниндәй ҙә протест һәм кирелек белдермәй, һылтау-аҡланыу эҙләмәй, ҡулдарындағы хәмер кувшиндарын һәм турһыҡтарын шундуҡ түгәләр, был илаһи әмергә ҡарата бик ҙур буйһоноусанлыҡ һәм ихлас итәғәтлек күрһәтеп, Аллаһ ризалығын алырға ашығалар.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙис шәрифтәрендә әйтә:

*«Иҫертә торған һәр нәмә – харам. Ҙур күләмдә иҫертә торған нәмәнең әҙе лә – харам»* (Ибне Мәжә, «Әшрибә», 10; Нәсаи, «Әшрибә», 24, 48).

*«Хәмер – һәр әшәкелектең башы ул»* (Әхмәт, V, 238).

*«Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә иман килтергән зат хәмер ҡуйылған табынға ултырмаһын!»* (Тирмизи, «Әҙәп», 43/2801).

*«Өммәтемдән бер төркөм заттар, хәмергә башҡа исемдәр ҡушып, уны бары- бер эсәсәк!»* (Әхмәт, IV, 237).

Хәмер һәм ҡомарҙың тыйылыуында әһәмиәтле эшкә мөнәсәбәтле һалмаҡлыҡҡа, баҫҡыс-баҫҡыс күтәрелеп барыу ысулын ҡулланыу исламда тәблиғ, өйрәтеү һәм яманлыҡтар менән көрәш методын билдәләүҙә нигеҙле таяныс булып тора. Аллаһ Тәғәлә мәңгелек һәм сикһеҙ киң ғилем эйәһе булыуға ҡарамаҫтан, ислам хөкөмдәрен билдәләгәндә һәм асыҡлағанда, әлеге хөкөм йүнәлтелгән кешеләрҙең хәлен, ихтыяр көсөн һәм ул хөкөмдәрҙе үтәү

өсөн үҫешен дә күҙ уңында тота. Бының иң мөһим сағылышы – иғтиҡадҡа ҡараған аяттар, Ҡөрьәни-Кәримдең бөгөнгө тәртибенә һис ярашмаған рәүештә, Мәккә осоронда һәм беренсе сиратта иңдерелә. Ҡөрьәни-Кәрим иңә башлағансы, Ләүхел-мәхфүздә инде билдәләп ҡуйылғанға күрә, бында уның иңдерелеүендәге алғараҡ сығарыу һәм кисектерелеүҙәрҙең теге йәки был әһәмиәтле мәсьәлә менән бәйле рәүештә килеп сығыуы бик еңел аңлашыла. Бында эш кешенең Ҡөрьәнгә буйһоноу, эйәреү мәсьәләһендәге тәбиғи теләге һәм ихтыяр көсөн, был йүнәлештәге үҫешен күҙҙә тотоуҙан ғибәрәт. Әйтәйек, бер балаға йөкләнә торған вазифаларҙың, ул үҫә барған һайын, арттырыла килеүе кеүек...

Иң камил рәүештә сәғәҙәт быуатында ҡулланылған һалмаҡлылыҡ принцибы, илаһи мәрхәмәт сағылышы булараҡ, Йәнәбел-Хаҡ тарафынан билдәләнгән иҫ киткес ҡиммәтле сөннәтуллаһ ул. Был сөннәт ислам тәблиғендә һәр заман өсөн яраҡлы бер ысул – кеше өлгөрөш-үҫешенең үҙенсәлектәре өсөн дә иң муафиҡ метод булып тора. Сөнки исламға иң әүәл фекер-ышаныстарҙы дөрөҫләү аша керәләр. Әлеге этапты үткәндән һуң, сират ғәмәлдәргә етә. Ғәмәлдәрҙе тәрбиәләү мәсьәләһендә иһә кешенең көсөнә, ихтыярына күрә һалмаҡ эш йөрөтөлә. Был ысул ислам тәблиғе өсөн генә түгел, кешеләрҙе төрлөсә нәсихәтләү һәм уларға тормошта юл күрһәтеү өсөн дә ярашлы. Шуға күрә Аллаһтың Әҙәм ғәләйһиссәләм менән башлаған илаһи тәблиғәтендә лә, инаныу, иман хөкөмдәре үҙгәрешһеҙ ҡалған хәлдә, социаль ҡағиҙәләрҙә әҙәм балалары күреп торған үҫеш барышы өсөн шарт – рухи өлгөргәнлек барлыҡҡа килә һәм был өлгөргәнлек ислам диненДә камиллыҡҡа ирешә. Әлеге хәл кеше тәбиғәтен һәм көсөн иҫәпкә алыу ни тикле мөһим метод икәнен раҫлай.

## Ҙәт әр-Риҡағ[167]

(Һижри 5-се йыл мөхәррәме / 626 йылдың июне)

Ғәтәфән ҡәбиләләренән Мухариб улдары һәм Саһләбә улдары берләшеп, мосолмандарға һуғыш асырға әҙерләнгән сағында, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм дүрт йөҙ кешелек ғәскәр менән уларға һөжүм итә. Ҡаршыларында мөьминдәрҙе күргәс, мөшриктәр ҡурҡып сигенә. Бер аҙҙан мөьминдәр ваҡыты кергән өйлә намаҙына керешә. Йыраҡтан уларҙы күҙәтеп торған дошман, был хәлдән файҙаланып, мосолмандарға намаҙ ваҡытында һөжүм итмәгәнлектәренә үкенә. Араларынан берәү: «Ҡайғырмағыҙ! Уларҙың бер намаҙҙары бар, улар өсөн аталарынан һәм балаларынан да ҡиммәтлерәк. Был намаҙ – икенде намаҙы», – ти. Мөшриктәр көтә башлай.

Йәнәбел-Хаҡ шул саҡ Ябраил ғәләйһиссәләмде ебәрә. Дошмандың планын емергән түбәндәге илаһи әмер ирешә:

167. Был һуғыштың Хәндәк яки Хәйбәр яуынан һуң булғанлығы тураһында риүәйәттәр бар. Ләкин беҙ «сийяр» ғалимдарының күпселеге ҡабул иткән фекергә буйһоноп, бында шул фекерҙе иҫкә алдыҡ.

وَإِذَا كُنْتَ فِيهِمْ فَأَقَمْتَ لَهُمُ الصَّلَاةَ فَلْتَقُمْ طَآئِفَةٌ مِّنْهُمْ مَّعَكَ وَلْيَأْخُذُوا
أَسْلِحَتَهُمْ فَإِذَا سَجَدُوا فَلْيَكُونُوا مِنْ وَرَآئِكُمْ وَلْتَأْتِ طَآئِفَةٌ أُخْرَى لَمْ
يُصَلُّوا فَلْيُصَلُّوا مَعَكَ وَلْيَأْخُذُوا حِذْرَهُمْ وَأَسْلِحَتَهُمْ وَدَّ الَّذِينَ
كَفَرُوا لَوْ تَغْفُلُونَ عَنْ أَسْلِحَتِكُمْ وَأَمْتِعَتِكُمْ فَيَمِيلُونَ عَلَيْكُمْ مَّيْلَةً وَاحِدَةً

**«**(Эй Рәсүлем!) **Һин дә араларында үҙең булған килеш намаҙ ҡылдырған ваҡытта, уларҙың бер өлөшө Һинең менән бергә намаҙға баҫһындар, ҡоралдарын** (үҙҙәре менән) **алһындар, шул рәүешле** (намаҙҙы уҡып) **сәждә ҡылған саҡта,** (башҡалары) **артығыҙҙа торһондар! Артабан әле намаҙын уҡымаған икенсе төркөм килеп, Һинең менән намаҙҙарын ҡылһындар, улар ҙа именлек сараһын күрһен һәм ҡоралдарын алһындар! Ул кафырҙар һеҙҙең ҡоралдарығыҙҙан һәм әйберҙәрегеҙҙән хәбәрһеҙ булыуығыҙҙы теләйҙәр һәм өҫтөгөҙгә көтмәгәндә һөжүм яһарға ниәтләйҙәр...»** («ән-Ниса» , 102) (Тирмизи, «Тәфсир», 4/3035).

Шул рәүешле уҡыла торған намаҙ «Саләти-хәүеф» (ҡурҡыу намаҙы) тип атала.[168] Нисек уҡырға кәрәклеген Ябраил ғәләйһиссәләм өйрәтә. Ул көндө икенде намаҙы ана шулай башҡарыла һәм һөжүм өсөн форсат сығыуын һағалап торған дошмандың көтөүе бушҡа китә. Әлеге хәрби сәфәр, ун биш көн дауам итеп, дошмандың ҡурҡып кире сигенеүе менән тамамлана.[169]

Әбү Муса әл-Әшғари разыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

«Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә сәфәргә сыҡҡан инек. Алты кеше, сиратлашып, бер дөйәгә атланып барҙыҡ. Йәйәү барыу арҡаһында аяҡтарыбыҙ ярылған ине. Минең аяҡтарым да ярылып, тырнаҡтарым төштө. Аяҡтарыбыҙға туҡыма киҫәктәре урай инек. Ана шул туҡыма киҫәктәре арҡаһында ул походҡа «Ҙәт әр-Риҡағ» исеме бирелде».

Был ваҡиға хаҡында риүәйәт ҡылған Әбү Бүрдә былай ти: «Әбү Муса әл-Әшғари ошоларҙы һөйләне, фәҡәт һуңынан үҙ ғәмәлен оҡшатманы һәм:

168. **Ҡурҡыу намаҙы** – дошман һөжүме көтөлгән йәки ҡурҡыныс осрағында йәмәғәттең ике төркөмгә бүленеп, имам артында фард намаҙҙы сиратлап уҡыуҙары ул. Ике рәкәғәтле намаҙҙың тәүге рәкәғәтен, дүрт рәкәғәтле намаҙҙың беренсе ике рәкәғәтен имам менән бергә уҡыған беренсе группа икенсе сәждәнән йәки беренсе тапҡырҙағы ултырып тороуҙан һуң йәмәғәт хисабынан сығып, үҙҙәренә йөкләнгән һуғыш эшенә керешер. Икенсе төркөм килеп, имам менән бергә ҡалған рәкәғәттәрҙе тамамлай һәм кире үҙ эштәренә ҡайта. Имам бер үҙе сәләм бирер. Артабан беренсе төркөм, «лахик» тип аталған хөкөмдә булғанға, ҡираәтһеҙ (Ҡөрьән аят-сүрәһе уҡымайынса ғына), икенсе иһә «мәсбук» тип аталған хәлдә булып, ҡираәт менән сиратлаша-сиратлаша намаҙҙарын тамамлайҙар. Шулай итеп, һәр йәмәғәт менән намаҙ башҡарыла һәм йөкләнгән хәрби бурыс та үтәлә (Комитет, *Диәнәт Гыйльмихали,* I, 334; Хамди Дөндүрән, «*Дәлилдәре менән ислам «Гыйльмихали»*, 377-378 б.)

169. Ибне Һишам, III, 214-221; Ибне Сәғд, II, 61.

«Быларҙы һөйләп биреүем бер ҙә әйбәт түгел», – тип үкенгәнен белдерҙе. Моғайын, Әбү Муса Аллаһ өсөн ҡылған бер батырлыҡты таратып, сәсеп һөйләп йөрөү арҡаһында үҙен ғәйепле һиҙеп борсолғандыр» (Бохари, «Мәгази», 31).

Ярлылыҡ һәм мохтажлыҡ, мөмкинлектәр сикләнгәнлеге әсхәбе кирамды вазифаларын үтәүҙән һәм Аллаһ юлында йыһат ҡылыуҙан туҡтатып ҡалмай. Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәренең изге ғәмәлдәрен йәшереүҙә, Аллаһҡа буйһоноу, итәғәт юлында кисергән ғазап-ауырлыҡтарҙы асып-һөйләп йөрөмәүҙә тырышлыҡ ҡуялар. Бындай нәмәләрҙе бары кәрәк осраҡта ғына, берәй маҡсатты күҙҙә тотоп, әйтәйек, ғибрәт алынһын, эйәреп ғәмәл ҡылынһын йәки ауыр хәлдә ҡалыусыларға йыуаныс булһын, тип һөйләйҙәр.

Был сәфәр ваҡытында Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәһәрәт өсөн һыу һорай. Тик берәүҙә лә һыу табылмай. Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөбәрәк ҡулдарын төбөндә әҙ генә һыу булған бер һауытҡа ҡуйыуға, бармаҡтарынан – ни мөғжизә – торбалағы кран асылғандай, һыуҙар аға. Шул һыу менән бөтә ғәскәр һыуһынын баҫа. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулдарын алғас та, кәсә һаман да һыу менән туп-тулы ҡала.[170]

Зат әр-Рикағ һуғышынан ҡайтҡанда, өйлә ваҡытында ағаслы бер үҙәнлеккә еткәс, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәнәфес иғлан итә, күләгәгә кереү өсөн, мөжәһидтәр тирә-яҡҡа тарала. Әфәндебеҙ «Сәмурә» тип аталған ҡуйы япраҡлы бер ағас аҫтында ял итергә ултыра, ҡылысын ағасҡа элеп ҡуя. Сәхәбәләр бер аҙ йоҡлап ала, тик Рәсүлүллаһтың уларҙы саҡырыуын ишетеп, шунда уҡ Уның янына йүгерәләр. Унда бер бәҙәүиҙе күреп ҡалалар. Аллаһ Рәсүле былай ти:

*«Мин йоҡлағанда, был бәҙәүи ҡылысымды алған. Уянып китеүемә, ҡылыс ҡынынан сығарылған килеш уның ҡулында ине. Миңә: «Һине хәҙер минең ҡулымдан кем ҡотҡарасаҡ?» – тине. Мин иһә өс тапҡыр: «Аллаһ!» – тип яуап бирҙем»* (Бохари, «Йыһат», 84, 87; Мөслим, «Фәзаил», 13).

Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Уға үлем менән янаған был бәҙәүиҙе язалау юлын һайламай, киреһенсә, уны исламға саҡыра. Бындай юғары мөнәсәбәт сәбәпле күңеле ысын-ысынлап йомшап киткән бәҙәүи, ҡәүеме янына ҡайтҡас: «Мин кешеләрҙең иң хәйерлеһе янынан ҡайтып барам», – тип әйтеүҙән тыйылып ҡала алмай (Хаким, III, 31/4322).

Шулай уҡ Мәҙинәгә ҡайтҡанда бер төн ҡуныу урынына туҡтағас, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Был төндә беҙҙе кем һаҡлаясаҡ?»* – тип һорай. Мөһәжирҙәрҙән Ғәммәр ибне Ясир һәм ансарҙарҙан Ғәббәд ибне Бишр шундуҡ: «Беҙ һаҡларбыҙ, йә Рәсүлүллаһ!» – ти.

170. Бохари, «Вуду», 32; «Мәнаҡиб», 25; Мөслим, «Фәдаил», 5.

Ғәббәд разыйаллаһу ғәнһү Ғәммәргә: «Һин төндөң ҡайһы өлөшөндә дежур торорға теләйһең – башындамы әллә ахырындамы?» – тип һорай. Ғәммәр разыйаллаһу ғәнһү: «Ахырғы өлөшөндә һаҡларға теләйем!» – ти һәм ян тарафына ятып йоҡлап китә. Ғәббәд иһә намаҙ уҡырға керешә. Шул ваҡытта бер мөшрик килә. Аяғөҫтө торған бер шәүлә күреүгә, уның дежур күҙәтсе икәнен аңлап, тиҙерәк уҡ осора. Уҡ Ғәббәдкә элгә. Ғәббәд уҡты тартып сығара ла намаҙын дауам итә. Сит әҙәм икенсе, өсөнсө мәртәбә атып та, уҡтары төбәгән еренә тейә. Һәр тапҡырында ла Ғәббәд разыйаллаһу ғәнһү, аяҡта ныҡ тороп, уҡтарҙы тартып сығара һәм намаҙын дауам итә. Нәҡ шул саҡта рөкуғ һәм сәждә ҡыла. Сәләм биргәс, иптәшен уятып: «Тор! Мин яраландым!» – ти. Ғәммәр һикереп тора. Мөшрик уларҙы күргәс, үҙен һиҙеп алғанлыҡтарын төшөнөп, ҡасыу яғын ҡарай. Ғәббәдтең ҡан эсендә булыуын күргәс, Ғәммәр: «Сүбханаллаһ! Беренсе уҡ атылғас та, мине уятҡан булһаңсы!» – ти. Ғәббәд намаҙға ҡарата мөхәббәтен һәм ныҡ ынтылышын раҫлаған түбәндәге иҫ киткес күркәм яуабын бирә: «Бер сүрә уҡый инем, уны уҡып бөтөрмәй тороп, намаҙҙы боҙаһым килмәне. Әммә уҡтар бер-бер артлы килгәс, уҡыуымды туҡтатып, рөкуғҡа киттем. Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ Рәсүле үҙен һаҡларға ҡушып йөкләгән ошо дәрәжәле вазифаны юғалтыу тураһында борсолмаһам, сүрәне яртыһында ҡалдырып, намаҙҙы боҙоуға ҡарағанда, үлемде өҫтөн ҡуйыр инем» (Әбү Дауыт, «Тәһәрәт», 78/198; Әхмәт, III, 344; Ибне Һишам, III, 219; Ваҡыди, I, 397).

Сәфәр барышында Жабир разыйаллаһу ғәнһү дөйәһенең хәлһеҙлеге арҡаһында иптәштәренән артҡа ҡала. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уның янына килеп:

*«Эй Жабир! Һиңә ни булды, ниңә артта ҡалдың?»* – тип һүҙ ҡата. Хәҙрәти Жабир хәлде аңлатып биргәс, Әфәндебеҙ бер таяҡ алып, дөйәгә бер нисә тапҡыр еңелсә генә ҡағылып ҡуя. Шулай итеп, дөйә Аллаһ Рәсүленең дөйәһе менән ярышырлыҡ көс ала.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм юлда хәҙрәти Жабир менән һөйләшеп бара. Уның яңы ғына өйләнеүен, шунлыҡтан бик күп бурысы йыйылғанын белеп алған Аллаһ Рәсүле Жабирҙан ҡулында ниндәй мал барлығын һорай. Тегеһе иһә берҙән-бер дөйәһе генә булғанын әйтә. Шунан һуң Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, уны бурыстан ҡотҡарыу өсөн, дөйәһен үҙенә һатып алырға теләй. Хәҙрәти Жабир разыйаллаһу ғәнһү, Мәҙинәгә ҡәҙәр шуға ултырып ҡайтыу шарты менән, һатырға ризалаша. Мәҙинәгә ҡайтып еткәс, дөйәне тапшырыу өсөн, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килә. Шул саҡ ул үҙен бик һөйөндөргән һәм башҡа кешеләрҙе шаҡ ҡатырған ғәжәп мөғәмәләнең туранан-тура шаһиты була. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, дөйәнең хаҡын түләп, уны Жабирға бүләк итеп ҡайтара (Бохари, «Йыһат», 49; «Бүюғ» 34; Мөслим, «Мүсаҡәт», 109).

Жабир разыйаллаһу ғәнһү былай тип бәйән ҡыла:

«Аллаһ Рәсүле, дөйәнең бәйәһен түләп, уны миңә бүләк иткән ваҡытта, таныш бер йәһүдиҙе осраттым. Был ваҡиғаны уға һөйләнем. Йәһүҙи, ғәжәпкә ҡалып: «Тимәк, дөйәнең аҡсаһын да бирҙе, шунан уны һиңә кире бүләк иттеме?!» – тип ҡабат-ҡабат һораны. Мин иһә һәр һораған һайын: «Эйе!» – тип торҙом» (Әхмәт, III, 303).

Аллаһ Рәсүленең әлеге тиңдәшһеҙ нәзәҡәтлелеге, йомартлығы һәм нәфислеге мосолмандарҙы шул дәрәжәлә тетрәндерә ки, был ваҡиға булған төн шунан һуң «Ләйләтүл-Баир», йәғни «Дөйә төнө» тип иҫкә алына башлай.

### Бәдри Сугра

(Һижри 4-се йыл зөлҡәғиҙәһе / 626 йыл апреле)

Өхөд көнөндә төҙөлгән килешеү шарты ҡушҡанса, мәккәле мөшриктәр менән мосолмандар бер йылдан һуң ҡабат һуғышырға тейеш була. Әлеге килешеү сәбәпле яуға сыҡҡан Әбү Суфьян, ғәскәрен эйәртеп, Мәрру әз-Заһран тип аталған урынға саҡлы килә, ләкин йөрәген йәнә ҡурҡыу биләп ала һәм ул кире ҡайтып китергә мәжбүр була. Ләкин абруйын төшөрөргә теләмәгәнгә, Мәҙинәгә бер кеше ебәрә. Мосолмандарға ҡаршы уларҙан күпкә ҙурыраҡ ғәскәр менән яу сыҡҡандарын хәбәр иттереп, үҙенсә мөьминдәрҙе ҡурҡытырға һәм уларҙың һуғышҡа сығыуҙан тыйылып ҡалыуын тәьмин итергә ниәтләй.

Хәбәр Мәҙинәгә килеп еткәндә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һуғышҡа әҙерлек эштәрен күптән теүәлләп, юлға сығыр өсөн фарман да биргән була. Әбү Суфьяндың ҡурҡып кире боролоуын белгәнгә, хәбәрсе кеше мосолмандарҙы шәпләп борсоуға һалыштырып, һуғыштан ҡурҡытыр өсөн, яуға ҡуҙғалыуҙарына кәртә ҡорор өсөн, хәленән килгәнде эшләй. Үҙҙәренә өйрәтеп ебәрелгән ялғандар өҫтөнә яңыларын да өҫтәй, әгәр мосолмандар мәккәлеләр менән ҡаланан сығып һуғыша ҡалһалар, бик насар яҙмышҡа дусар ителәсәктәрен аңлата. Уның ялғандары һәм монафиҡтарҙың тырышлығы һөҙөмтәһендә ҡайһы бер мосолмандарҙың күңеленә ҡурҡыу төшә һәм улар яуға сығырға бер ҙә теләмәй башлай. Был хәлдән һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип белдерә:

*«Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотҡан Аллаһ менән ант итәм, янымда һис кем булмаһа ла, мин бер үҙем Бәҙергә барасаҡмын!»* Шунан һуң Аллаһ Тәғәлә мосолмандарға ярҙамлашып, йөрәктәренә ныҡлыҡ, ҡыйыулыҡ насип итә (Ибне Сәғд, II, 59; Ваҡыди, I, 386-387).

Ахырҙа ислам ғәскәре Бәҙергә бара. Ләкин унда дошмандың эҙе лә юҡ. Яу урынында ҡороп ҡуйылған бер йәрминкәнән башҡа һис нәмә осрата алмайҙар. Был хәлдә мөьминдәргә сауҙанан башҡа бер эш тә булмай. Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Бәҙерҙә Әбү Суфьянды һәм уның ғәскәре

килгәнен һигеҙ көн көткәс, бер ниндәй ҙә күңелһеҙ хәлгә тарымайса, алыш-бирештән кергән табыш менән Мәҙинәгә ҡайта.[171]

Мөьминдәрҙең был ҡыйыулығы һәм батырлығы Ҡөрьәни-Кәримдә былай тип маҡтала:

اَلَّذِينَ قَالَ لَهُمُ النَّاسُ إِنَّ النَّاسَ قَدْ جَمَعُوا لَكُمْ فَاخْشَوْهُمْ فَزَادَهُمْ
إِيمَانًا وَقَالُوا حَسْبُنَا اللهُ وَنِعْمَ الْوَكِيلُ. فَانْقَلَبُوا بِنِعْمَةٍ مِّنَ اللهِ
وَفَضْلٍ لَّمْ يَمْسَسْهُمْ سُوءٌ وَاتَّبَعُوا رِضْوَانَ اللهِ وَاللهُ ذُو فَضْلٍ عَظِيمٍ

**«Бер төркөм кешеләр мөьминдәргә: «Дошмандарығыҙ һеҙгә ҡаршы йыйылды, һәй уларҙан һаҡланығыҙ!» – тигәндә, был уларҙың имандарын тағын да арттырҙы һәм: «Аллаһ беҙҙең өсөн етер. Ул ни ҡәҙәр яҡшы яҡлаусы!» – тинеләр. Шунан һуң үҙҙәренә һис бер насарлыҡ тимәйенсә, Аллаһтың ниғмәт һәм йомартлығы менән кире килделәр. Шул рәүешле Аллаһтың ризалығына буйһондолар. Аллаһ – бик ҙур рәхмәт һәм ҡайғыртыусанлыҡ эйәһе»** («Әлү Ғимран», 173-174).

Ғабдуллаһ ибне Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһүмәнең риүәйәтенән:

**«Аллаһ беҙҙең өсөн етер. Ул ни ҡәҙәр яҡшы яҡлаусы»** тигән һүҙҙәрҙе Ибраһим ғәләйһиссәләм утҡа ташланғанда әйтә. Пәйғәмбәребеҙ иһә был һүҙҙәрҙе: «Мөшриктәр һеҙгә ҡаршы йыйылды, башығыҙҙы һаҡлап ҡалыу сараһын күрегеҙ!» – тигән саҡта телгә ала. Шунан һуң мосолмандарҙың имандары арта һәм улар бер ауыҙҙан: **«Аллаһ беҙҙең өсөн етер. Ул ни ҡәҙәр яҡшы яҡлаусы!»** – тип, Аллаһ ҡаршында олуғ буйһонғанлыҡ, бирелгәнлек үрнәге күрһәтә.[172]

171. Ибне Һишам, III, 221; Ибне Сәғд, II, 59; Ваҡыди, I, 384-389.
172. Ҡарағыҙ: Бохари, «Тәфсир», 3/13.

# ҺИЖРӘТТЕҢ БИШЕНСЕ ЙЫЛЫ

## Сәлмән әл-Фәрисиҙең мосолманлыҡ ҡабул итеүе һәм ирекҡә сығарылыуы

Мәҙинәле бер йәһүдиҙең ҡоло булған Сәлмән Фәриси раҙыйаллаһу ғәнһү ислам ниғмәте менән тәрбиәләнеүе тураһында хисапһыҙ ғибрәттәр менән тулы тарихын Ибне Ғәббәс хәҙрәттәренә былай тип бәйән ҡыла:

«Мин Исфахандың Жәйй исемле ауылында йәшәүсе бер бәндә инем. Атам ауылыбыҙҙың абруйлы кешеһе ине. Ғүмерендә минән дә нығыраҡ һис кемде яратмағандыр. Әлеге сиктән тыш көслө һөйөүе сәбәпле, мине һис янынан ебәрмәй, ҡыҙ балаһы кеүек гел өйҙә тота, тышҡа сығармай ине. Атайымдың дине – мәжүсилеккә (утпәрәслеккә) шул ҡәҙәр бирелгән инем ки, ут ғибәҙәтханаһын ҡарап тороу, унда ут яндырыу кеүек эштәрҙе лә үҙ өҫтөмә алған инем. Ғибәҙәтханалағы уттың бер миҙгелгә лә һүнеүенә юл ҡуйманым. Атайымдың ҙур хужалығы бар ине. Бер көн ул төҙөлөш эштәре менән маташа ине. Миңә: «Улым! Мин бөгөн гел төҙөлөш менән мәшғүл буласаҡмын, хужалыҡҡа бара алмайым. Һин шунда бар!» – тине һәм үтәйһе ҡайһы бер эштәрҙе аңлатты. Артабан миңә: «Һаҡ бул, ул тирәләрҙә бик мауығып китеп, мине борсоуға һалма! Әгәр һуңлаһаң, һине уйлап, бөтә эштәрем туҡтап ҡалыр!» – тип әйтте.

Үҙ биләмәбеҙгә барыу өсөн юлға сыҡтым. Шунда бер христиан сиркәүенә юлыҡтым. Тауыштарын ишеттем, эстә ғибәҙәт ҡылалар ине. Атайым мине гел өйҙә тотҡанга күрә, кешеләрҙең ни эшләгәндәрен дә белмәй инем. Шунлыҡтан, ҡыҙыҡһынып, ни эшләйҙәр икән тип, улар янына килдем. Ҡылғандарын ҡарап торҙом һәм үҙ-үҙемә: «Валлаһи, был – беҙҙең динебеҙҙән хәйерлерәк», – тинем. Ҡояш батҡансы, ул ерҙән китә алманым. Хужалыҡҡа бөтөнләй барманым. Сиркәү кешеләренән: «Был диндең нигеҙе ҡайҙа?» – тип һораным. «Дамаскта», – тинеләр. Кис атайым янына ҡайттым. Ул эшен-хеҙмәтен ташлап, кискә ҡәҙәр мине эҙләткән. Янына ҡайтҡас: «Балаҡайым! Ҡайҙа инең? Мин һиңә ни эшләргә тейешлегеңде әйтмәнемме әллә?» – тине. Уға: «Әткәйем! Сиркәүҙәрендә ғибәҙәт ҡылып ятҡан бер нисә кешене осраттым. Уларҙың ғибәҙәттәрен ҡараным, бик оҡшаттым. Ҡояш батҡансы, шулар янынан китә алманым», – тинем. Атайым: «Улым, ул диндә хәйер юҡ, һинең һәм аталарыңдың дине унан хәйерлерәк», – тине.

Ҡасыуымдан ҡурҡып, атайым аяғыма бығау һалды, һуңынан мине өйгә бикләп ҡуйҙы. Сиркәүҙәге христиандарға: «Янығыҙға Дамасктан берәй

сауҙа каруаны килгән ваҡытта, миңә хәбәр һалығыҙ!» – тип кеше ебәрҙем. Дамасктан христиан сауҙагәрҙәр килгәс, хәбәр бирҙеләр. Аяғымдан тимер бығауҙы һалып ташланым. Теге сауҙагәрҙәр менән бергә Дамасҡҡа юл тоттом. Унда барып еткәс: «Дин әһелдәренең ғилем яғынан иң өҫтөнө кем?» – тип һораным. «Сиркәүҙәге епископ», – тип әйттеләр. Уның янына киттем: «Мин был дингә керергә, һинең янында булырға, сиркәүҙә хеҙмәт итергә, һинән христианлыҡ тәртиптәрен өйрәнергә һәм һинең менән бергә ғибәҙәт ҡылырға теләйем», – тинем. Миңә: «Сиркәүгә кер!» – тип өндәште. Уның менән бергә эскә үттем. Дамаск епискобы йүнһеҙ кеше ине. Христиандарға саҙаҡа бирергә ҡуша, йыйылған нәмәләрҙе үҙенә туплай, ярлыларға һис ни бирмәй ине. Хатта шулай итеп ете сүлмәк туп-тулы алтын-көмөш йыйған ине. Ҡылғандарын күргәс, уға бик асыуым сыҡты. Ахырҙа ул бәндә үлде. Христиандар уны ерләү өсөн йыйылды. Уларға: «Ул әшәке кеше ине. Һеҙгә саҙаҡа бирергә ҡуша, шуға өндәй, ә үҙе һеҙ алып килгәндәрҙе үҙе өсөн һаҡлай, фәҡирҙәргә бер нәмә лә бирмәй ине!» – тип аңлаттым. «Һин быны ҡаян беләһең һуң?» – тип һоранылар минән. «Һеҙгә уның хазинаһын күрһәтә алам», – тинем.

Мин күрһәткән ерҙән алтын менән көмөш тулы ете кувшин сығарҙылар. Быны күргәс: «Валлаһи, беҙ уны күммәйәсәкбеҙ», – тинеләр. Мәйетен аҫып ҡуйып, таш утына тоттолар! Уның урынына сиркәүгә башҡа бер дин әһеле килтерҙеләр. Биш ваҡыт намаҙ уҡымаусылар араһында унан фазиләтлерәк, шул бәндә кеүек донъялыҡҡа һис иғтибар бирмәгән, әхирәт тураһында ҡайғыртҡан, төн-көн ғибәҙәт ҡылған башҡа бер кеше күрмәнем. Һуңынан ошо зат үлем түшәгенә йығылды. Уға: «Әй фәлән-фәлән! Мин һинең янында булдым. Һиңә тикле бер кемде лә һине һөйгән ҡәҙәр һөймәнем! Күреп тораһың ки, һиңә Аллаһтың әмере килгән хәлдәһең. Миңә ни эшләргә һәм ҡая барырға кәңәш бирерһең?» – тип һораным. «Улым! Бөгөн минең юлдан барыусы һис кемде белмәйем. Изге бәндәләр үлеп китеп бөттөләр. Иҫәндәре лә диндең әллә ҡасан ҡуйылған хөкөмдәрен үҙгәртеп, күбеһен кире ҡаҡтылар. Бары Мосул тигән төбәктәге зат ҡына бар. Ул мин уҙған юлдан бара. Һин шуның янына кит!» – тине.

Ошбу хөрмәтле зат үлгәс, Мосулдағы дуҫы янына юл тоттом. Ул үлгәс, уның кәңәше менән Нусайбиндәге, ә артабан Аммуриялағы (Иҫкешәһәр тирәһендәге бер ер) бер кеше янына киттем. Аммурияла ла әҙме-күпме белемдәр алдым. Хатта бер аҙ һыйыр-һарыҡтарым да бар ине. Иң ахырҙа аммуриялы дин әһеленә лә Аллаһтан әмер килде. Ул мине саҡырып алды ла: «Улым! Валлаһи, бөгөн ер йөҙөндәге кешеләрҙән һиңә барырға ҡушырлыҡ, шул кешегә бар һин, тип кәңәш бирерлек, беҙҙең фекерҙәшебеҙ булған һис кемде белмәйем! Фәҡәт Ахырзаман Пәйғәмбәренең килер сағы бик яҡынайҙы, инде күләгәһе өҫтөбөҙгә төшә! Ул Пәйғәмбәр Ибраһим ғәләйһиссәләм дине менән ебәреләсәк. Ул ғәрәп ерҙәрендә донъяға киләсәк, ике ҡара ташлыҡ араһындағы хөрмә баҡсалары булған бер урынға һижрәт ҡыласаҡ. Ул бүләк

ителгән менән йәшәр, саҙаҡа менән тормош итмәҫ. Уның ике ҡалаҡ һөйәге араһында Пәйғәмбәрлек мөһөрө бар. Әгәр ул төбәктәргә барырға хәлеңдән килһә, бар, хәҙер үк юлда бул!» – тине.

Ахырҙа ул да үлеп китте. Мин әле күпмелер ваҡыт, Аллаһ теләгән ҡәҙәр, шунда йәшәнем. Артабан Ҡәлб ҡәбиләһенән ҡайһы бер сауҙагәрҙәр менән осраштым. Уларға: «Мине ғәрәп иленә алып барығыҙ, мин шуның өсөн ошо мал-тыуарҙарымды һеҙгә бирермен», – тинем, был тәкдимгә ризалаштылар. Малдарымды уларға бирҙем һәм мине үҙҙәре менән алып киттеләр. Вади әл-Кураға килеп еткәс, был бәндәләрҙең яуызлығына тарыным, мине ҡол итеп, бер йәһүҙигә һаттылар. Йәһүҙи янында бер аҙ ваҡыт йәшәнем. Вади әл-Куралағы хөрмә ағастарын күргәс: «Был ерҙәр Аммуриялағы остазым миңә тасуирлап күрһәткән, Ахырзаман Пәйғәмбәренең һижрәт илеме әллә?» – тип өмөтләнһәм дә, йөрәгем быға тулыһынса ышанып бөтмәне.

Вади әл-Курала йәшәгән ваҡытымда хужамдың Ҡурайҙа улдарынан булған бер ағаһының улы килде һәм мине һатып алып, Мәҙинәгә килтерҙе. Валлаһи, Мәҙинәне күргәнсе үк, Аммуриялағы остазым миңә тасуирлап күрһәткән Ахырзаман Пәйғәмбәренең һижрәт ҡыласағы ерҙең ошо икәнлеген аңланым. Инде Мәҙинәлә йәшәп ҡалдым. Хәлбуки, инде Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм пәйғәмбәр итеп ебәрелгән, Мәккәлә күпмелер ваҡыт йәшәгән булған. Ләкин ҡоллоҡта эш менән мәшғүллегем арҡаһында, Уның тураһында һис нәмә ишетмәгәнмен. Һуңынан Мәҙинәгә күсенеп килгән, йәнә хәбәрһеҙ ҡалғанмын. Бер көндө хөрмә ағасында эшләй инем, ә хужам иһә ағас күләгәһендә ултыра. Шул саҡ ағаһының улы килеп, хужама: «Әй фәлән-фәлән! Аллаһ Кайлә улдарына (әүес һәм хәзрәжгә) ҡазалар ебәрһен! Валлаһи, улар Ҡубә ауылында, Мәккәнән улар янына килгән һәм үҙҙәре Пәйғәмбәр тип атаған берәүҙең янына йыйылғандар!» – тине.

Быны ишетеүгә мине шундай бизгәк тотто ки, саҡ-саҡ хужамдың өҫтөнә йығылмай ҡалдым: «Ни тинең? Нәмә тип әйттең?» – тип, шундуҡ хөрмә ағасынан төштөм. Хужам ҡыҙып китте, миңә асыу менән һуғып ебәрҙе лә: «Ә һин ниңә ҡыҙыҡһынаһың? Эшеңде ҡара!» – тине. Мин иһә: «Бер нәмә лә юҡ! Бары уның ни әйткәнен генә аңларға теләнем», – тинем.

Минең бер аҙ йыйып һаҡлаған ризығым бар ине. Кис еткәс, шуны алып, Ҡубәләге Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына киттем. Уға: «Һинең изге кеше икәнеңде ишеттем. Янында мохтаж һәм үкһеҙ сәхәбәләрең бар икән! Үҙем менән саҙаҡа итеп йыйған ҡай бер нәмәләрем бар. Хәл-әхүәлегеҙҙе белгәс, был нәмәләр һеҙгә кәрәк булыр!» – тип, ризыҡтарҙы тәкдим иттем. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ашамлыҡтарҙы:

*«Алығыҙ, ашағыҙ быларҙы!»* – тип сәхәбәләренә бирҙе, үҙе ашаманы. Үҙ-үҙемә: «Быныһы – бер!» – тинем. Унан Пәйғәмбәр янынан китеп барҙым һәм өйөмә ҡайттым. Тағын ниндәйҙер ризыҡтар йыйҙым. Ул ваҡытта Аллаһ

Рәсүле лә Мәҙинәгә килгән ине. Янына барҙым да: «Һинең саҙаҡа итеп биргән ризыҡты ашамағаныңды күрҙем. Был – һине һыйлар өсөн әҙерләнгән бүләгем!» – тип әйттем. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был юлы ризыҡты ауыҙ итте, сәхәбәләренә ашарға ҡушты. Үҙ-үҙемә: «Быныһы – ике!» – тинем.

Һуңыраҡ иһә Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ янына Ул Баҡый әл-Гаркад зыяратында булған саҡта барҙым. Пәйғәмбәр бер сәхәбәһенең йыназаһы сәбәпле килгән ине һәм сәхәбәләре араһында ултыра ине. Өҫтөндә һәр яғын ҡаплаған ике ихрам кейеме ине. Уға сәләм бирҙем. Шунан һуң Аммуриялағы остазым миңә аңлатҡан **Пәйғәмбәрлек мөһөрөн** күрә алмаҫмынмы, тип, артҡы яғына сыҡтым. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ниәтемде аңланы һәм арҡаһындағы еләнен шыуҙырҙы. Пәйғәмбәрлек мөһөрөн күреүгә үк таныным! Шуның өҫтөнә ҡапланып, үбеп алдым һәм илап ебәрҙем. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе миңә:

*«Был яҡҡа сыҡ!»* – тип бойорҙо. Сығып, ҡаршыһына ултырҙым».

Артабан Сәлмән разыйаллаһу ғәнһү Ибн Ғәббәс хәҙрәттәренә былай тип белдерҙе: «Эй Ибн Ғәббәс! Һиңә һөйләгән кеүек, башымдан кисергәндәрҙе Аллаһ Рәсүленә лә бәйән ҡылдым. Минең был ҡиссамды сәхәбәләрҙең дә ишетеп тороуы Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бик оҡшаны. Ҡоллоҡ арҡаһында мин, Сәлмән, мәшғүл булғанға, Бәҙер һәм Өхөд һуғыштарында Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә булыу мөмкинлеге сыҡманы» (Әхмәт, V, 441-444; Ибне Һишам, I, 233-242; Ибне Сәғд, IV, 75-80).

Сәлмән разыйаллаһу ғәнһү, ғүмер буйы эҙләнеүҙә булған өсөн, Аллаһ Рәсүле менән ҡауыша. Хәҙер инде уның берҙән бер теләге – һәр даим Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янында булыу, Уның әмере менән йәшәү. Хәҙрәти Сәлмән разыйаллаһу ғәнһүҙең был ынтылышын күргән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер көн унан:

*«Эй Сәлмән! Ҡоллоҡтан ҡотолоу өсөн хужаң менән килешеү төҙөп булмаймы?»* – тип һорай. Шунан һуң Сәлмән разыйаллаһу ғәнһү, ултыртаһы соҡорҙарын да үҙе ҡаҙыу шарты менән, өс йөҙ хөрмә ағасы ултыртыу һәм ҡырҡ уҡыййә[173] алтын биреү бәрәбәренә ирекҡә сығыу тураһында хужаһы менән килешә. Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә сәхәбәләренә:

*«Ҡәрҙәшегеҙгә ярҙам итегеҙ!»* – тип бойора. Ҡайһыны ун, ҡайһыны ун биш, ҡайһыны егерме үҫенте алып килеп, һәр кем хәленән килгәнсә булышлыҡ күрһәтә һәм Сәлмән разыйаллаһу ғәнһүгә кәрәк өс йөҙ хөрмә үҫентеһе йыйыла.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

173. 1 уҡыййә яҡынса 128 грамм тип ҡабул ителгән ауырлыҡ үлсәме һанала.

*«Әй Сәлмән! Үҫентеләр өсөн соҡорҙар ҡаҙы! Соҡорҙарҙы тамамлағас, миңә хәбәр ит, үҫентеләрҙе үҙ ҡулым менән ултыртайым»,* – тип ҡуша.

Сәлмән Фәрисий раҙыйаллаһу ғәнһү ваҡиғаның дауамын түбәндәгесә бәйән ҡыла:

«Хөрмә үҫентеләре өсөн соҡорҙар ҡаҙый башланым. Иптәштәрем миңә ярҙам итте. Теүәлләгәс, хәбәр һалдым, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҫентеләр ултыртылырға тейешле урынға минең менән бергә килде. Беҙ үҫентеләрҙе Уға биреп торҙоҡ, Ул иһә ултыртып бара ине. Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотҡан Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ Рәсүле тарафынан ултыртылған хөрмә үҫентеләренән үҫеп китмәгән бер ағас та булманы. Шулай итеп, «ағас» бурысымды түләнем. Үҫентеләр тейешле йылында емеш бирергә кереште һәм емештәрҙе ашай башланылар.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер һуғыштан тауыҡ йомортҡаһы ҙурлығындағы бер алтын ҡойолмаһы алып ҡайтҡан ине.

*«Сәлмән ни эшләне?»* – тип һораны.

Аллаһ Рәсүле янына барғас, миңә:

*«Эй Сәлмән! Быны ал да бурысыңды түлә!»* – тип бойорҙо.

«Йә Рәсүлүллаһ! Өҫтөмдәге шул хәтле бурыс өсөн был ҡәҙәр генә алтын киҫәге нисек етә алһын?!» – тинем.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм алтын ҡойолмаһын ҡулына алып, теленә тейҙереп алғандан һуң:

*«Ал быны! Аллаһ Тәғәлә бурысыңды ошоноң менән түләйәсәк!»* – тип белдерҙе.

Алтынды алдым. Бурысымды алырға тейешле затҡа шул алтындан үлсәп-үлсәп бирҙем. Сәлмәндың булмышын ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, әлеге алтын ҡойолмаһынан ҡырҡ уҡыййә үлсәп алдым. Ул шул ҡәҙәр бәрәкәтле ине ки, әгәр үлсәүҙең бер яғына Өхөд тауы ҡуйылһа, һис шикһеҙ, тауҙан ауырыраҡ булып сығыр ине!»

Сәлмән раҙыйаллаһу ғәнһү ҡоллоҡтан ҡотолғас, Хәндәк һуғышына ирекле бәндә булараҡ ҡатнаша һәм шунан һуң бер һуғышта ла Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янында булыу мөмкинлеген ҡулынан ысҡындырмай.[174]

Сәлмән Фәрисий раҙыйаллаһу ғәнһү һәр ғәмәле менән шул ҡәҙәр күркәм үрнәк шәхескә, үҙенә ғәжәйеп рәүештә башҡаларҙы тартып тора торған затҡа әйләнә ки, ансарҙар ҙа, мөһәжирҙәр ҙә: «Сәлмән – беҙҙән ул», – тип уны хатта бүлешә алмай башлайҙар.

174. Ҡарағыҙ: Әхмәт, V, 443-444; Ибне Әсир, «Үсдүл-Габә , II, 419; Ибне Габдилбәрр, II, 634-638.

Шунан һуң Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Сәлмән – беҙҙән ул, әһли Бәйттән»,* – тип, әлеге мөбәрәк сәхәбәһен рәхмәтенең иң күркәме менән бүләкләй (Ибне Һишам, III, 241).

Был мөбәрәк сәхәбә ғүмер буйы ислам әҙәбенең матурлығын сағылдырған хисапһыҙ эш-ғәмәлдәр күрһәтеп, мөьминдәр өсөн үрнәк шәхескә әйләнә. Әйтәйек, уның фазиләтен белдергән бер миҫал:

«Ислам дәүләте, яуланған еңеүҙәр менән киң территорияға хакимлыҡ урынлаштырғас, заманында бер йәһүдиҙең ҡоло булған Сәлмән раҙыйаллаһу ғәнһү Мәдаин төбәгенә вәли (губернатор) итеп билдәләнә. Шул саҡ Дамасктан Тәйм улдары ҡәбиләһенә ҡараған бер кеше Мәдаингә килә. Үҙе менән бер йөк инжир килтерә. Сәлмән раҙыйаллаһу ғәнһү шаҡтай тупаҫ бурка кейгән була. Дамасклы зат хәҙрәти Сәлмәнде танымай, белмәй. Уны ошо ҡиәфәттә күргәс: «Кил бында, ташы быларҙы!» – тип бойора. Сәлмән раҙыйаллаһу ғәнһү иһә килеп, йөктө һыртына һала. Халыҡ уны күргәс, шундуҡ танып ала. Теге кешегә: «Һинең йөгөңдө күтәргән зат вәли бит!» – тиҙәр.

Дамасклы бәндә шунда уҡ: «Һине таный алманым», – тип ғәфү һорай һәм Сәлмәндең һыртына аҫҡан йөгөн алырға маташа. Сәлмән иһә: «Зыян юҡ, йөктө өйөңә килтереп еткергәнсе һыртымдан төшөрмәм», – тип яуап бирә (Ибне Сәғд, IV, 88).

**Баланы уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыу ғәҙәтенең бөтөрөлөүе**

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, Пәйғәмбәр булғансы, һөйөклө ҡатыны хәҙрәти Хәҙисә тарафынан бүләк ителгән Зәйд хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең азат итеүе менән хөрлөккә ирешә. Зәйд раҙыйаллаһу ғәнһү, атаһы янына китмәйенсә, Рәсүлуллаһ менән ҡалырға теләй һәм хәҙрәти Пәйғәмбәр уны уллыҡҡа ала.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Зәйдте бик ятатҡанға күрә, уны башта азат йәриәһе Өммө Әймәнгә, һуңыраҡ туғандан туғаны (атаһының апаһының ҡыҙы) Зәйнәб бинт Жаһшҡа өйләндерә. Ләкин, араларындағы тигеҙлектең тулы булмауы сәбәпле, хәҙрәти Зәйнәб баштараҡ Зәйд раҙыйаллаһу ғәнһүгә кейәүгә сығырға теләмәһә лә, хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең теләге һәм:

إِنَّ أَكْرَمَكُمْ عِنْدَ اللهِ أَتْقَيكُمْ

**«...Һеҙҙең Аллаһ алдында иң ҡәҙерлегеҙ – тәҡүәлеге менән иң өҫтөн булыусығыҙ...»** («әл-Хужурат», 13);

وَمَا كَانَ لِمُؤْمِنٍ وَلَا مُؤْمِنَةٍ إِذَا قَضَى اللّٰهُ وَرَسُولُهُ أَمْرًا أَنْ يَكُونَ
لَهُمُ الْخِيَرَةُ مِنْ أَمْرِهِمْ وَمَنْ يَعْصِ اللّٰهَ وَرَسُولَهُ فَقَدْ ضَلَّ ضَلَالًا مُبِينًا

**«Аллаһ һәм Уның Рәсүле берәй эшкә ҡарар ҡылһалар, иман килтергән берәй ир йәки ҡатын-ҡыҙ ул эште үҙ теләктәре менән һайлау хоҡуғына эйә түгел. Әгәр берәй кеше Аллаһ һәм Уның Рәсүленә ҡаршы килә торған булһа, асыҡтан-асыҡ тәкәбберлеккә бирелгән була»** («әл-Әхзәб», 36) – тиелгән аяти кәримәләр быны тулыһынса раҫлай. Ләкин уның күңеле Зәйдкә ҡарата бер нисек тә йомшара алмаған, өйләнешеп оҙаҡ йәшәй алмағандар. Зәйд тә уның тураһында шикәйәт белдергән. Ләкин Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә килеп, ул үҙ хәлен аңлатҡас:

*«Ҡатыныңды яныңда тот һәм Аллаһтан ҡурҡ!»* – тигән яуап ишеткән.

Шул уҡ ваҡытта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яңы ирешкән илаһи вәхи менән Аллаһ тарафынан Зәйнәбтең үҙенә ҡатын итеп биреләсәген белә. Ләкин халыҡ араһында монафиҡтарҙың: «Мөхәммәт үгәй улы айырған ҡатынға өйләнде!» – тип ғауға сығарыуҙарынан уңайһыҙланғанға күрә, көтөргә була. Сөнки ул осорҙоң ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса, берәй кеше йәтим баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа алһа, кешеләр ул балаға уның исеме менән өндәшәләр, үҙ балалары кеүек күрәләр һәм мираҫтан өлөш сығаралар.

Ниһәйәт, хәҙрәти Зәйд менән Зәйнәб раҙыйаллаһу ғәнһә айырылыша һәм шунан һуң тағын бер вәхи иңдерелә. Илаһи фарман бер үк ваҡытта Аллаһ Рәсүленә хәҙрәти Зәйнәбкә өйләнергә ҡуша һәм был мәсьәләләге беренсе үрнәкте шәхсән хәҙрәти Пәйғәмбәр башҡарып күрһәтеп, яһили ғәҙәт булған уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыу мәсьәләһен юҡҡа сығара:

وَإِذْ تَقُولُ لِلَّذِى أَنْعَمَ اللهُ عَلَيْهِ وَأَنْعَمْتَ عَلَيْهِ أَمْسِكْ عَلَيْكَ زَوْجَكَ
وَاتَّقِ اللهَ وَتُخْفِى فِى نَفْسِكَ مَا اللهُ مُبْدِيهِ وَتَخْشَى النَّاسَ وَاللهُ أَحَقُّ أَنْ تَخْشَيهُ
فَلَمَّا قَضَى زَيْدٌ مِّنْهَا وَطَرًا زَوَّجْنَاكَهَا لِكَيْ لَا يَكُونَ عَلَى الْمُؤْمِنِينَ حَرَجٌ فِى
أَزْوَاجِ أَدْعِيَائِهِمْ إِذَا قَضَوْا مِنْهُنَّ وَطَرًا وَكَانَ أَمْرُ اللهِ مَفْعُولًا

«(Эй Рәсүлем!) **Аллаһ ниғмәт биргән, һин дә үҙенә яҡшылыҡ эшләгән кешегә: «Ҡатыныңды яныңда тот, Аллаһтан ҡурҡ!» – тигән инең. Аллаһтың ап-асыҡ күрһәтәсәк нәмәне, уңайһыҙланып, сер итеп һаҡланың. Асылда, һин ҡурҡырға тейешле бары тик Аллаһ ҡына. Зәйд, ул ҡатын менән ҡыҙыҡһынмай башлағас, Беҙ уны һиңә никахланыҡ һәм шуның менән үгәй улдары ҡатындарынан һыуынған саҡта** (ул ҡатындарға өйләнергә теләһәләр), **мөьминдәргә бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ булмаһын. Аллаһтың әмере үтәлде»** («әл-Әхзәб», 37).

Был илаһи әмерҙе үтәп, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә кейәүгә сыҡҡан хәҙрәти Зәйнәб әсәбеҙ: «Минең никахымды Раббым уҡыны!..» – тип, Йәнәбел-Хаҡҡа шөкрана ҡыла (Тирмизи, «Тәфсир», 33/3213).

Ләкин был хәл монафиҡтар араһында бик күп ғәйбәттәр таралыуға сәбәп була. Яһиллыҡ һәм ике йөҙлөлөк менән улар хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде: «Улының айырылған ҡатынын алды!» – тип ғәйепләп, был ғәмәлгә ҡаршы сыға. Быға яуап итеп, Ҡөрьәни-Кәримдә әйтелә:

مَّا كَانَ مُحَمَّدٌ أَبَا أَحَدٍ مِّنْ رِّجَالِكُمْ وَلَكِنْ
رَّسُولَ اللهِ وَخَاتَمَ النَّبِيِّينَ وَكَانَ اللهُ بِكُلِّ شَيْءٍ عَلِيمًا

**«Мөхәммәт һеҙҙең ирҙәрегеҙҙән береһененең дә атаһы түгел. Ул бары тик Аллаһтың Рәсүле һәм Пәйғәмбәрҙәрҙең һуңғыһы. Аллаһ – һәр нәмәне асылы менән белеүселер»** («әл-Әхзәб», 40).

Шулай итеп, был ваҡиға менән яһил дәүерҙән бирле йәшәп килгән «уллыҡҡа алыу» ғәҙәте юҡ ителә.

Бөгөнгө динһеҙҙәр һәм монафиҡтарҙың да: «Хәҙрәти Пәйғәмбәр Зәйнәбкә уның матурлығына ҡыҙығып өйләнгән», – кеүек фекерҙәре тулайым яһиллыҡ сафсатаһы булып сыға. Сөнки Зәйнәб разыйаллаһу ғәнһә Аллаһ Рәсүленең апаһының (атаһының апаһының) ҡыҙы була һәм Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм уны электән күреп белә. Әгәр Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең бындай теләге булһа, хәҙрәти Зәйнәбте Зәйдтән алда уҡ үҙенә никахлай ала, хәҙрәти Зәйнәб тә быға рәхәтләнеп риза булыр ине.

Өйләнеүҙе бары тик шәһүәткә генә бәйләп ҡараусы тар ҡарашлы һәм һай фекерле бәндәләр Пәйғәмбәребеҙҙең ғаилә хәлдәренең асылын аңлауҙан ғажиздар. Зиһендәрен һәм күңелдәрен нәфес ҡолдары итеүселәрҙең хаҡһыҙ һәм ахмаҡ хөкөмдәре үҙҙәренең ҡараңғы донъяла булыуҙарын раҫлай. Сөнки хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғаилә тормошонда йәшлегенә һәм көслө ваҡытына тура килгән беренсе 24 йыл бары тик хәҙрәти Хәҙисә разыйаллаһу ғәнһә әсәбеҙ менән уҙған. Унан һуңғы никахтары иһә тулыһынса ислами, сәйәси һәм ижтимағи маҡсаттарҙа ҡылына. Йәмәғәттәренең күбеһе үҙенән олораҡ һәм тол ҡатындар була. Улар араһында ғиффәтле һәм йәш килеш алған бер генә ҡыҙ – хәҙрәти Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә бар ине. Бының сәбәбе иһә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылышлы фиҡһ мәсьәләләренең ныҡ, шикһеҙ һәм асыҡтан-асыҡ булыуын тәьмин итеүҙән ғибәрәт. Ысындан да, ул аҡылы һәм һиҙгерлеге ярҙамында ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылышлы шәриғәт мәсьәләләренә камил рәүештә төшөнгән һәм хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафатынан һуң оҙаҡ йылдар дауамында мосолман ҡатындарын был ғилемдәре менән тура юлға күндереп йәшәй, шәриғәт хөкөмдәренең

бер өлөшөнөң ышаныслы нигеҙҙәренән береһен формалаштыра. Сәхәбәләр араһында айырылып торған ете фәҡиһтән береһе булғанға, ҡатын-ҡыҙҙар араһында фиҡһ ғилеме күбеһенсә уның ярҙамында таралыш ала.

Яман ниәтле бәндәләр белдергәнсә, был никахтарҙың ҡылыныуы сәбәбе шәһүәт булһа, Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ ғүмеренең иң йәш һәм иң көслө осорон үҙенән ун биш йәшкә олораҡ, тол һәм балалы бер ҡатын менән үткәрмәҫ ине. Был никахтарҙың ниндәй бөйөк маҡсаттар һәм нескә хикмәттәр менән ҡылыныуын бары тик иман мантиғына эйә булған әһеле-ғирфан менән әһеле-выждан ғына бәйәләй ала.

### Ғәүрәт ҡаплауҙың фарыз ҡылыныуы

Исламға тиклемге осорҙа ғәрәптәрҙә ғәүрәтте ҡаплау тигән ғәҙәт булмаған. Исламдың беренсе йылдарында ла, тәбиғи булараҡ, элеккеге ғәҙәттәре дауам иттерелгән. Ләкин юғарыла иҫерткестәр һәм ҡомарлы уйындар тураһында һөйләнгәндә тәҡдим ителгән тора-бара эйәләнеү ысулының әлеге зарури сифатының былай дауам итмәйәсәге хаҡ ине. Ниһәйәт, ғәүрәтте ҡаплау тураһында аят иңдерелә һәм был аят менән ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе күтәрелә. Хөрмәте һәм ҡәҙере һаҡланып, әһәмиәте арта. Әлеге аят ғиффәтлелеккә һәйкәл дәрәжәһенә тиң. Ҡатын-ҡыҙ вәҡәр һәм ғиззәт эйәһе булған шәхес итеп ҡабул ителә башлай.

Икенсе яҡтан, ғәүрәт ҡаплауға бәйле хөкөм бары тик ҡатын-ҡыҙҙарға ғына түгел, ирҙәргә лә ҡағыла. Йәғни был хосустағы әмер ҡатындарҙы ла, ирҙәрҙе лә – һәр мөьминде лә үҙенә буйһондора. Аллаһ Тәғәлә әйтә:

قُلْ لِّلْمُؤْمِنِينَ يَغُضُّوا مِنْ أَبْصَارِهِمْ وَيَحْفَظُوا فُرُوجَهُمْ ذَلِكَ أَزْكَى لَهُمْ إِنَّ اللهَ خَبِيرٌ بِمَا يَصْنَعُونَ. وَقُلْ لِّلْمُؤْمِنَاتِ يَغْضُضْنَ مِنْ أَبْصَارِهِنَّ وَيَحْفَظْنَ فُرُوجَهُنَّ وَلَا يُبْدِينَ زِينَتَهُنَّ إِلَّا مَا ظَهَرَ مِنْهَا وَلْيَضْرِبْنَ بِخُمُرِهِنَّ عَلَى جُيُوبِهِنَّ

«(Эй Рәсүлем!) **Мөьмин ирҙәргә күҙҙәрен** (харамға) **төшөрмәүҙәре, намыҫтарын да һаҡлауҙары тураһында һөйлә! Сөнки был – уларҙың үҙҙәре өсөн иң саф ғәмәл. Һис шикһеҙ, Аллаһ уларҙың ни ҡылғандары тураһында хәбәрҙар. Мөьминә ҡатын-ҡыҙҙарга ла әйт: «Күҙҙәрен** (харамға ҡарауҙан) **һаҡлаһындар; намыҫ һәм ғиффәттәрен һаҡлаһындар. Күренгән өлөштәрҙән** (йөҙ, ҡул, аяҡ) **тыш башҡа зиннәттәрен күрһәтмәһендәр. Баш яулыҡтарын яғаларына** (ҡәҙәр) **ҡаплаһындар...»** («ән-Нур», 30-31).

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡапланып йөрөүе уларҙың шәхесен һаҡлай. Ғәүрәтен ҡаплаған ҡатын-ҡыҙ ҡаршыһындағы кешелә нәфислек һәм нәзәкәтлелек хистәре уята. Киреһенсә булғанда иһә ҡатын-ҡыҙ нәфесте тыйырға ирек

бирмәй торған шәһүәт сараһына әүерелә. Был уның шәхесен кәмһетә һәм абруйын түбәнһетә, әсә булыу дәрәжәһен ҡаҡшата.

Был осраҡта һис шикһеҙ айырып асыҡларға кәрәк булғаны шул: яратылыш әһәмиәте яғынан ҡатын-ҡыҙ менән ирҙең нәфестәре араһында айырма бар. Ул ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ирҙәргә хас илаһи билдәләнеш менән насип булған вазифа һәм шуға бәйле хосусиәт айырмаһынан барлыҡҡа килгән. Шуға күрә ғәүрәтте ҡаплағанда, ҡатын-ҡыҙҙарға хас ҡиәфәт ирҙәрҙекенән һиҙелерлек айырылып тора. Сөнки ҡатын-ҡыҙ яратылышы менән ирҙәргә ҡарағанда күркәмерәк. Ғәүрәтте ҡапламайынса йөрөп, үҙен йәмғиәткә бер төрлө яңы ҡиәфәттә тәҡдим иткәнгә, нәзәкәтлелеге һәм нәфислеге кәмей. Әсә булыу үҙлеге һәм нәҫелде һаҡлау хосусиәте түбәнһетелә. Был уңайҙан уның күркәмлеге ғәүрәтте ҡаплау әмере менән бары тик үҙ иренә генә билдәләнә. Сөнки ҡатын-ҡыҙ менән ир араһында, нәҫелдең дауамы өсөн, бер-берҙәренә ҡарата үҙгәрмәй һәм яратылыштан бирле дауам иттерелә торған һәүәҫлек бар. Ғәүрәтте ҡаплау әмере үтәлмәгән осраҡта, был һәүәҫлек илаһи сиктәрҙе уҙыу кеүек һәләкәттәргә дусар итерлек дәрәжәлә ҡурҡыныс әхлаҡи түбәнлеккә сәбәп була. Шуға күрә Йәнәбел-Хаҡтың:

وَلَا تَقْرَبُوا الزِّنٰى

**«Зина ҡылмағыҙ!..»** – тигән («әл-Исра», 32) илаһи әмеренең зирәклеге: «Ғәүрәтте ҡапламайынса йөрөп, зинаға юл асмағыҙ, уның өсөн мөмкинлек булдырмағыҙ!» тигән фекерҙе аңлата.

Был – абсолют хөкөм. Иғтибар биргәндә, шуны ла күрербеҙ: исламда тышҡы матурлығы булмаған ҡатындарға ла ғәүрәттәрен ҡаплап йөрөргә ҡушыла. Йәғни: «Был ҡатын башын, ҡулдарын һәм аяҡтарын асһа ла, асмаһа ла, бер ни үҙгәрмәй. Уға барыбер берәү ҙә ҡыҙыҡмай», – тиелмәгән. Бының асылы ҡатын-ҡыҙҙың ғәүрәт ҡаплауы менән ҡатын-ҡыҙ дәрәжәһе һаҡланыуынан ғибәрәт.

Кешенең холҡон иҫәпкә алып, уның өсөн тейешле хөкөмдәр сығарылған исламда ҡатын-ҡыҙҙар һәм ирҙәрҙең хәжәттәренә лә иғтибар бирелә. Бының өсөн Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡатын-ҡыҙҙарға оҡшарға тырышҡан ирҙәрҙе, ирҙәргә оҡшарға тырышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы ләғнәтләй.[175] Был афәттән һаҡланыу өсөн ҡатын-ҡыҙҙар изгелекле ҡатын-ҡыҙҙарҙың мәжлестәренә йөрөргә тырышырға тейеш, сөнки кешенең, кемгә эйәрһә, шуға оҡшай торған ғәҙәте бар. Был – психологик ҡанун. Ҡатын-ҡыҙ, ирҙәр менән буталып, урам тормошона эйәләшһә, ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас хис-тойғоларҙы һәм үҙенең гүзәл хосусиәттәрен юғалта.

175. Ҡарағыҙ: Бохари, «Либас», 61.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәр менән кейем мәсьәләһендә лә бер-берҙәренә оҡшауҙары тыйыла. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡатындар кеүек кейенгән ирҙәрҙең һәм ирҙәр кеүек кейенгән ҡатындарҙың илаһи мәрхәмәттән мәхрүм ҡаласаҡтарын белдерә.[176] Сөнки һәр ике тарафтың да ҡатынлыҡ һәм ирлек ҡиммәттәрен һаҡлауҙары кәрәк.

Ҡапма-ҡаршы енестең кейемдәрен кейергә эйәләнеү шәхес һәм холоҡ боҙоҡлоҡтарына ла килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, үҙ енесенең кейемдәре урынына, теләһә ниндәй сәбәп менән, башҡа енескә яраған кейемдәрҙе оҡшатып кейгән кешеләрҙең ғәҙәттәрендә лә, ваҡыт уҙыу менән, үҙгәрештәр күҙәтелә башлай. Был иһә тыумыштан бирелгән холоҡтоң боҙолоуына килтерә.

### Мүрәйси бәрелеше

(Һижри 5-се йылдың шәғбәне-рамазаны / 627 йылдың ғинуар-февраль айҙары)

Был бәрелеште Бәни Мусталик һуғышы тип тә атайҙар. Мусталик улдары, Мәккә мөшриктәренең ҡотҡоларына бирелеп, Мәҙинәгә һөжүм итеү өсөн, күп һанлы ғәскәр туплай башлай. Был турала белеп ҡалған Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ете йөҙ кешелек ғәскәр менән уларға ҡаршы сыға. Аллаһ Рәсүле, хәҙрәти Ғүмәргә бойороп, Мусталик улдарына мөрәжәғәт итергә: «Лә иләһә илләллаһ», – тип әйтегеҙ ҙә, йәндәрегеҙҙе һәм малдарығыҙҙы һаҡлап ҡалығыҙ!» – тип әйтергә ҡуша. Ләкин Мусталик улдары был тәҡдимде ҡабул итмәйҙәр һәм беренсе уҡты ла улар араһынан берәү ата.[177]

Мосолмандар Мүрәйси һыуы янында булған көслө һөжүм менән дошманды еңә. Дошмандарҙан ун кеше үлә, мосолмандарҙан бер кеше шәһит китә. Бәрелеш аҙағында бик күп ғәнимәт малы ҡулға төшөрөлөп, күп кеше әсирлеккә алына. Әсирҙәр араһында ҡәбилә башлығының ҡыҙы Жүвәйриә лә була.

Әсирҙәргә фидиә (йолом) бәрәбәренә ирек бирелә. Жүвәйриә иһә Сабит ибне Ҡайстың өлөшөнә эләгә. Ҡотолоу фидиәһе мәсьәләһендә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә мөрәжәғәт итә. Шул арала атаһы ла килеп етә. Үҙҙәренең аҫыл нәҫелдән булыуҙарын аңлатып, ҡыҙының йәриә булмаясағын белдерә һәм уның намыҫын һаҡлап ҡалырға үтенә. Үҙе менән эйәртеп килгән бер нисә дөйәгә күрһәтеп:

«Был дөйәләр – ҡыҙым өсөн түләү. Уны азат итегеҙ!» – ти ул. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә, ата өсөн һис көтөлмәгәнсә:

*«Йәшереп ҡалдырған ике дөйәң ҡайҙа? Уларын ниңә килтермәнең?»* – тип һорай.

Үҙәнлектә йәшереп ҡалдырған ике дөйә тураһында үҙенән башҡа берәү ҙә белмәй, тип уйлаған Харис, аптырап һәм ғәжизланып:

176. Ҡарағыҙ: Әбү Дауыт, «Либас», 28/4098.
177. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, I, 407.

«Валлаһи, быны минән башҡа белгән кеше юҡ ине!..» – ти. Был ап-асыҡ мөғжизә менән Жүвәйриәнең атаһы һидәйәткә ирешә һәм уның менән килеүселәр ҙә иман килтерә.[178]

Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Жүвәйриәнең фекерен һорай. Уның үҙе янында ҡалырға теләгәнен белгәс, фидиәһен үҙе түләп, иреккә ебәрә (Ибне Сәғд, VIII, 118). Азат ителгән Жүвәйриә лә үҙ теләге менән мосолман була. Бер аҙҙан ул Йәнәбел-Хаҡтың рәхмәте менән хәҙрәти Пәйғәмбәргә саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм кейәүгә сығыу бәхетенә ирешә. Шуның менән уның элегерәк күргән төшө ысынға аша. Уның өсөн фидиә түләп, атаһының ҡотҡарып ҡалыу мөмкинлегенә ҡарамаҫтан, Жүвәйриәнең Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында ҡалырға теләүе лә шул сәбәпле була.

Жүвәйриәнең хәҙрәти Пәйғәмбәр менән никахланыуы тураһында ишеткән Әсхәбе кирам хәҙрәттәре лә: «Пәйғәмбәр туғанының әсир булыуы дөрөҫ түгел!» – тип ҡулдарындағы барлыҡ әсирҙәрҙе лә фидиә түләтмәй генә азат итәләр. Был турала хәҙрәти Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә былай ти: «Ҡәүеме өсөн Жүвәйриәнән дә хәйерлерәк ҡатын-ҡыҙ күрмәнек. Шуға күрә Бәни Мусталиктән йөҙ ғаиләнән кешеләр азат ителде» (Әбү Дауыт, «Итк», 2/3931).

Ошо һүҙҙәрҙән аңлашылғанса, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең Жүвәйриә әсәбеҙгә өйләнеүе тулыһынса сәйәси маҡсатҡа нигеҙләнә һәм:

وَمَا يَنْطِقُ عَنِ الْهَوَى. إِنْ هُوَ إِلَّا وَحْيٌ يُوحَى.

**«Ул үҙ ирege менән түгел, вәхиҙә ҡушылғанса һөйләй** (һәм эш итә)», – тигән аят («ән-Нәжм», 3-4) аңлатҡанса, нәфесенә буйһоноп түгел, Аллаһ Рәсүленең күңеленә индерелгән илаһи маҡсатҡа ирешеү өсөн тормошҡа ашырыла. Шуға күрә был никахтан һуң Бәни Мусталик әсирҙәре азат ителә, ә иң мөһиме, бөтә бер ҡәүем исламды ҡабул итә.

**Тәйәммүм**

Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә әсәбеҙ былай тип тапшыра:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән (Мүрәйси) походында бергә булдыҡ. Бәйда исеме менән иҫкә алынған ергәме, әллә Зат әл-Жәйш тип аталған урынғамы килгән инек, минең бер муйынсағым өҙөлдө. Рәсүлүллаһ шуны эҙләү өсөн бер аҙ шунда ҡалды, башҡа кешеләр ҙә Уның менән туҡталдылар. Яҡын-тирәлә һыу юҡ, үҙҙәренең дә һыуы бөткән ине. Бер төркөм кеше Әбү Бәкер янына барып: «Ғәйшәнең ни эшләгәнен күрҙеңме? Рәсүлүлләһты ла, башҡа бәндәләрҙе лә ошонда тотҡарланы. Улар бер шишмә-

178. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, III, 340.

ҡойо янында түгел, үҙҙәре менән дә һыу юҡ!» – тигәндәр. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм башын теҙҙәрем өҫтөнә ҡуйып йоҡлағанда, атайым Әбү Бәкер килеп сыҡты: «Һин Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде лә, кешеләрҙе лә бында бикләп ҡуйҙың. Тирә-яҡта һыу юҡ, үҙҙәре менән алып килгән һыу ҙа бөттө!» – тип мине ғәйепләп, төрлөсә орошто. Хатта асыуын тыя алмайынса, ҡулын да уйнатып, миңә һуғып алды. Рәсүлүллаһтың башы теҙем өҫтөндә булғанға, һелкенмәҫкә тырыштым.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иртән торғанда, бөтөнләй һыу юҡ ине. Бер аҙҙан Аллаһ Тәғәлә тәйәммүм аятын индерҙе:

وَإِنْ كُنْتُمْ مَّرْضَى أَوْ عَلَى سَفَرٍ أَوْ جَاءَ أَحَدٌ مِّنْكُمْ
مِّنَ الْغَائِطِ أَوْ لاَمَسْتُمُ النِّسَاءَ فَلَمْ تَجِدُوا مَاءً فَتَيَمَّمُوا صَعِيدًا طَيِّبًا
فَامْسَحُوا بِوُجُوهِكُمْ وَأَيْدِيكُمْ مِّنْهُ مَا يُرِيدُ اللّٰهُ لِيَجْعَلَ عَلَيْكُمْ مِّنْ حَرَجٍ
وَلَكِنْ يُرِيدُ لِيُطَهِّرَكُمْ وَلِيُتِمَّ نِعْمَتَهُ عَلَيْكُمْ لَعَلَّكُمْ تَشْكُرُونَ

**«...Ауырыу йәки мосафир хәлендә булһағыҙ, йәки берегеҙ йомошон үтәп, тәһәрәтен боҙоп килһә, йәки ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылған булһағыҙ һәм шул осраҡтарҙа һыу таба алмаһағыҙ, таҙа тупраҡ менән тәйәммүм алығыҙ: йөҙөгөҙҙө һәм** (терһәктәргә тиклем) **ҡулдарығыҙҙы шуның менән мәсех ҡылығыҙ! Аллаһ һеҙгә бер ниндәй ҙә ауырлыҡ килтерергә ынтылмай, бары һеҙҙе пак итергә һәм һеҙгә** (насип иткән) **ниғмәтен тамамларға теләй; шәйәт, һеҙ шөкөр итерһегеҙ»** («әл-Мәидә», 6).

Үсәйд ибне Худайр раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип әйтә: «Эй Әбү Бәкер ғаиләһе! Был – өммәт өсөн һеҙҙең хисапһыҙ бәрәкәттәрегеҙҙән береһе генә». Үҙем ултырып килгән дөйәне аяҡҡа баҫтырғас, уның аҫтынан муйынсаҡ сыҡты» (Бохари, «Тәйәммүм», 1; «Әсхәбүн-Нәби», 5, 30).

Үсәйд раҙыйаллаһу ғәнһү Ғәйшә әсәбеҙгә: «Аллаһ һине хәйере менән бүләкләһен! Валлаһи, һинең башыңа һис күңелгә ятмаҫлыҡ бер бәлә килһә, Аллаһ уны һинең өсөн дә, мосолмандар өсөн дә хәйерле ҡыла», – тигән (Бохари, «Тәйәммүм», 1).

### Яла (ифтира) ваҡиғаһы

Мүрәйси бәрелешенән ҡайтып барған саҡ. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең намыҫлы ҡатыны хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә[179] ғәскәр ҡунырға туҡтаған урындан үҙ хәжәте менән бер аҙ ситкәрәк китә.

179. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙе сыҡҡан һәр һуғышҡа мөбәрәк ҡатындарынан береһен йәрәбә һалып алып бара. Мүрәйси һуғышына шыбаға тотҡанда хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙгә сыға, үҙҙәре менән уны ла алалар.

Әйләнеп ҡайтҡанда, ғәскәрҙең күптән ҡуҙғалып киткәнлеге асыҡлана. Ул ваҡытта ғәүрәтте ҡаплау тураһында аят иңдерелгән була һәм мөьминдәрҙең әсәләре, берәй ергә киткәндә, дөйәнең үркәсе өҫтөнә атландырылып, хавдәж тип аталған һөжрә эсендә йөрөтөлә башлай. Шуға күрә ғәскәр хәрәкәт иткәндә, мөьминдәрҙең әсәһе хәҙрәти Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә лә, дөйәнең өҫтөнә атланып, хавдәждә бара, тип уйлаған булғандар.

Хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ, урҙанан артта ҡалғанға, аҙашыуҙан ҡурҡып, булған урынында көтөргә ҡарар ҡыла. Оҙаҡ та үтмәй йоҡоға тала. Шул арала каруандан артта ҡалыусыларҙы йыйып ҡайтыу вазифаһы йөкләнгән Сафуан ибне Муғаттал разыйаллаһу ғәнһү хәҙрәти Ғәйшәне күреп ҡала:

إِنَّا لِلّٰهِ وَإِنَّا إِلَيْهِ رَاجِعُونَ

**«...Беҙ Аллаһтың бәндәләре һәм яңынан Уға әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ»,** – аятын («әл-Баҡара», 156) уҡып, үҙенең шунда булыуын белгертә.

Был тауышҡа хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ уянып китә. Сафуан разыйаллаһу ғәнһү, бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә, дөйәһен сүктерә лә хәҙрәти Ғәйшә анабыҙ менеп атлана. Өйлә ваҡытында ғәскәрҙе ҡыуып етәләр. Был хәлде күреп ҡалған монафиҡтар, ҡулдарына ысҡындырырға ярамаған уңайлы форсат килеп кергәндәй был юлы ла ауыҙҙарын сирҡаныс яман ғәйбәт менән бысраталар: «Валлаһи, Ғәйшә лә унан, ул да Ғәйшәнән ҡотола алмаған», – тиҙәр. Хатта Ғабдуллаһ ибне Үбәй алғараҡ сығып, мөьминдәргә: «Бына Пәйғәмбәрегеҙҙең ҡатыны бер әҙәм менән төн ҡунған...» – тип мәкерле көлмәксе була.

Фетнә бер миҙгел эсендә бөтә урҙаға тарала. Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү ҡурҡыныс тауыш сығарып һөрән һала: «Валлаһи, беҙҙең быңдай ғәйбәтте яһилиәт осоронда ла ишеткәнебеҙ булманы!..»

Хәҙрәти Сафуан разыйаллаһу ғәнһү иһә бик ныҡ борсола, сөнки ул Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Уның тураһында хәйерленән башҡа бер ни ҙә белмәйем!..»* – тигән, һайлап алынған сәхәбәләрҙән була.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хәленә килгәндә иһә, иң ҙур хәсрәт, һис шикһеҙ, уның изге күңеленә төшә. Күп тапҡырҙар өйөндә бикләнеп ята, кешеләр менән бик аралашмаҫ була. Был мәсьәләлә бер аҙ һораштырыу уҙғара. Хәҙрәти Ғәйшәнең ғәйепле булыуын раҫларлыҡ әҙ генә лә дәлил табылмай. Ләкин монафиҡтарҙың ғәйбәте туҡтамай.

Был ваҡиға тураһында иң һуңғы булып Ғәйшә әсәбеҙ ишетә. Ошо ауыр ғәйбәт уны бик ныҡ тәьҫирләндерә. Һүҙ менән генә аңлатып булмаҫлыҡ хәсрәтле хәлдә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙән рөхсәт алып, атаһының өйөнә кәңәш

һорарға китә. Таралған ғәйбәтте уларҙан да ишеткәс, көҙгө япраҡ кеүек һарғайып, һулып ҡала.

Шул ваҡытта Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм был хәл тураһында Ғәйшә әсәбеҙ менән аңлашырға теләй. Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүҙең өйөнә барып, мөбәрәк ҡатынына:

*«Эй Ғәйшә! Һинең турала миңә хәбәр еткерҙеләр. Әгәр ғәйебең булмаһа, Аллаһ һине аҡлаясаҡ»,* – тине.

Ғаләмдәр Әфәндеһенең дә ғәйбәттәр алдында бер аҙ вәсүәсәләнеүен тойоп алған һиҙгер һәм нескә күңелле хәҙрәти Ғәйшә анабыҙ үҙ әсәһе менән атаһына ҡарай. Уларҙың өндәшмәүен күргәс, күҙҙәре йәшләнгән килеш Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә әйтә: «Валлаһи, мин аңланым: һеҙ ситтәр һөйләгән һүҙҙәрҙе ишеткәнһегеҙ, шуларға ышанғанһығыҙ. Хәҙер: «Мин ғәйепһеҙ», – тиһәм, – Аллаһ быны белә – ышанмаясаҡһығыҙ. Киреһен әйтһәм, шунда уҡ ышана алаһығыҙ. Әммә Аллаһ ғәйепһеҙ булыуымды белә. Был хәлдә мин, шул ғәйбәттәрҙән яҡлау һорап, Аллаһтан ярҙам һорайым».

Ул көндәрҙә Әбү Әйүб әл-ансари хәҙрәттәренең ҡатыны Өммө Әйүб үҙ иренән: «Кешеләрҙең Ғәйшә тураһында һөйләгәндәрен ишеттеңме?» – тип һорай. Әбү Әйүб: «Эйе! Ишеттем. Уларҙың барыһы ла ялған һәм уйҙырма!» – ти. Унан һуң ҡатынына: «Һин быңдай яманлыҡ эшләр инеңме?» – тип һорай. Ул: «Юҡ! Валлаһи, мин һис ҡасан ундай яманлыҡ ҡылмам!» – ти. Быға ҡаршы Әбү Әйүб разыйаллаһу ғәнһү: «Һин дә шулай ныҡ булғас, валлаһи, Ғәйшә һинән дә хәйерлерәк!» – ти (Ибне Һишам, III, 347; Ваҡыди, II, 434).

Бынан һуң эштең асыҡланыуы бары тик илаһи вәхигә бәйле булып ҡала. Ысындан да, күп тә үтмәй, Йәнәбел-Хаҡ ошо ваҡиғаға ҡарата аяти кәримәләрҙе индерә. Һөйләнгән һүҙҙәрҙең монафиҡтар ғәйбәтенән барлыҡҡа килеүе асыҡлана. Әлеге илаһи аңлатмалар Ғәйшә әсәбеҙҙе лә паклай, монафиҡтарҙың хаҡһыҙ ғәйепләүҙәрен йөҙҙәренә бәреп, уның өсөн уларҙың ғазапҡа дусар ителәсәктәрен дә хәбәр итә, ошо ғәйбәтте телдәренә алып һөйләп йөрөгән ғафилдарҙы ла киҫәтә.

Йәнәбел-Хаҡ был мәсьәләгә бәйле аяти кәримәләрҙә былай тип белдерә:

إِنَّ الَّذِينَ جَاؤُوا بِالْإِفْكِ عُصْبَةٌ مِّنْكُمْ لَا تَحْسَبُوهُ شَرًّا لَّكُمْ بَلْ هُوَ خَيْرٌ لَّكُمْ لِكُلِّ امْرِئٍ مِّنْهُمْ مَّا اكْتَسَبَ مِنَ الْإِثْمِ وَالَّذِى تَوَلَّى كِبْرَهُ مِنْهُمْ لَهُ عَذَابٌ عَظِيمٌ.

«(Пәйғәмбәрҙең саф һәм мөбәрәк ҡатыны тураһында) **был ауыр ифтираны таратыусылар, һис шикһеҙ, һеҙҙең арағыҙҙан бер төркөм. Һеҙ был** (ифтира ваҡиғаһын) **үҙегеҙ өсөн насар, тип уйламағыҙ, киреһенсә, ул һеҙҙең өсөн хәйерле. Ифтирасыларҙың һәр ҡайһыһы ҡылған гонаһының**

(язаһын) **татыясаҡ. Уларҙан** (башлыҡ булып) **был гонаһтың ҙурыһын башҡарған кеше өсөн дә ғазаптың олоһо бар.**

لَوْلَا إِذْ سَمِعْتُمُوهُ ظَنَّ الْمُؤْمِنُونَ وَالْمُؤْمِنَاتُ بِأَنْفُسِهِمْ خَيْرًا وَقَالُوا هَذَا
إِفْكٌ مُّبِينٌ. لَوْلَا جَاؤُوا عَلَيْهِ بِأَرْبَعَةِ شُهَدَاءَ فَإِذْ لَمْ يَأْتُوا بِالشُّهَدَاءِ
فَأُولَٓئِكَ عِنْدَ اللّٰهِ هُمُ الْكَاذِبُونَ. وَلَوْلَا فَضْلُ اللّٰهِ عَلَيْكُمْ وَرَحْمَتُهُ فِى الدُّنْيَا
وَالْآخِرَةِ لَمَسَّكُمْ فِى مَا أَفَضْتُمْ فِيهِ عَذَابٌ عَظِيمٌ. إِذْ تَلَقَّوْنَهُ بِأَلْسِنَتِكُمْ
وَتَقُولُونَ بِأَفْوَاهِكُمْ مَّا لَيْسَ لَكُمْ بِهِ عِلْمٌ وَتَحْسَبُونَهُ هَيِّنًا وَهُوَ عِنْدَ اللّٰهِ عَظِيمٌ.

**Был ифтираны ишеткән ваҡытта ир һәм ҡатын-ҡыҙ мөьминдәрҙең үҙ выждандары менән яҡшы уйҙа булып: «Был – ап-асыҡ ғәйбәт!» – тип әйтеүҙәре кәрәкмәҫ инеме? Ғәйбәтселәрҙең дә был мәсьәләлә дүрт шаһит килтереүҙәре кәрәкмәҫ инеме? Шаһиттар килтерә алмайҙар икән, тимәк, улар Аллаһ ҡаршында ялғансыларҙың нәҡ үҙҙәре була. Әгәр донъяла һәм әхирәттә Аллаһтың рәхмәте һәм мәрхәмәте һеҙгә иңмәһә, эсенә кереп сумған был ғәйбәттәрҙән һеҙгә, һис шикһеҙ, оло ғазап ирешер ине. Сөнки һеҙ был ғәйбәтте телдән-телгә бер-берегеҙгә тапшырҙығыҙ, асылын белмәгән килеш ауыҙҙарығыҙҙа сәйнәп йөрөттөгөҙ. Быны әһәмиәтһеҙ** (һәм язаһыҙ) **бер эш тип һанайһығыҙ. Ләкин был Аллаһ ҡаршында** (әлбәттә) **бик ҙур** (бер гонаһ)**.**

وَلَوْلَا إِذْ سَمِعْتُمُوهُ قُلْتُمْ مَّا يَكُونُ لَنَا
أَنْ نَّتَكَلَّمَ بِهَذَا سُبْحَانَكَ هَذَا بُهْتَانٌ عَظِيمٌ.

**Уны ишеткәндә: «Быны һөйләп таратыу беҙгә килешмәй. Аллаһ һаҡлаһын! Был – бик ҙур яла!» – тиергә тиеш түгел инегеҙме?**

يَعِظُكُمُ اللّٰهُ أَنْ تَعُودُوا لِمِثْلِهِ أَبَدًا إِنْ كُنْتُمْ مُّؤْمِنِينَ.
وَيُبَيِّنُ اللّٰهُ لَكُمُ الْآيَاتِ وَاللّٰهُ عَلِيمٌ حَكِيمٌ.

**Аллаһ һеҙгә үгет бирә: әгәр һеҙ инанған кешеләр икәнһегеҙ, быға оҡшаған берәй хәлде бүтән һис ҡабатламағыҙ. Һәм Аллаһ аяттары һеҙгә асыҡлай. Аллаһ** (һәр эштең асылын) **бик яҡшы белә, Ул – хөкөм һәм хикмәт эйәһе.**

إِنَّ الَّذِينَ يُحِبُّونَ أَنْ تَشِيعَ الْفَاحِشَةُ فِى الَّذِينَ آمَنُوا لَهُمْ عَذَابٌ أَلِيمٌ
فِى الدُّنْيَا وَالْآخِرَةِ وَاللهُ يَعْلَمُ وَأَنْتُمْ لَا تَعْلَمُونَ. وَلَوْلَا فَضْلُ اللهِ
عَلَيْكُمْ وَرَحْمَتُهُ وَأَنَّ اللهَ رَؤُوفٌ رَحِيمٌ.

**Кешеләр араһында ерәнгес нәмәләрҙең таралыуын теләгән кешеләр өсөн донъяла ла, әхирәттә лә йән өҙгөс ғазап бар. Аллаһ беләһ, һеҙ белмәйһегеҙ. Әгәр һеҙгә Аллаһтың рәхмәте һәм мәрхәмәте иңмәһә, Аллаһ бик шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле булмаһа** (хәлегеҙ нисек булыр ине)**!..**

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَتَّبِعُوا خُطُوَاتِ الشَّيْطَانِ وَمَنْ يَتَّبِعْ خُطُوَاتِ الشَّيْطَانِ
فَإِنَّهُ يَأْمُرُ بِالْفَحْشَاءِ وَالْمُنْكَرِ وَلَوْلَا فَضْلُ اللهِ عَلَيْكُمْ وَرَحْمَتُهُ مَا زَكَا
مِنْكُمْ مِنْ أَحَدٍ أَبَدًا وَلَكِنَّ اللهَ يُزَكِّى مَنْ يَشَاءُ وَاللهُ سَمِيعٌ عَلِيمٌ

**«Эй иман килтереүселәр! Шайтан артынан эйәрмәгеҙ! Кем шайтан артынан эйәрһә, һис шикһеҙ, ул әҙәпһеҙлекте** (йөҙҙәрҙе ҡыҙартырлыҡ ғәйептәрҙе) **һәм яманлыҡтарҙы ҡылырға әмер итер. Әгәр һеҙгә Аллаһтың рәхмәте һәм мәрхәмәте йүнәлгән булмаһа, арағыҙҙан берәү ҙә паклана алмаç ине. Ләкин Аллаһ теләгән кешене арындыра. Аллаһ ишетә һәм белә»** («ән-Нур», 11-21).

Был бөйөк хәҡиҡәттәрҙән һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йылмайып, хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙгә:

*«Һөйөнсө, эй Ғәйшә! Аллаһ һине ифтираларҙан пакланы!»* – ти.

Ғәйшә әсәбеҙ аяти кәримәләр менән ғәйбәттәрҙән арынғандан һәм аҡланғандан һуң: «Минең кеүек ғажиз ҡалған бер ҡол хаҡында аят иңәсәген һис уйламаған инем. Тик Аллаһ Рәсүленең күңеленә берәй илһам киләсәк тә, минең гонаһһыҙ булыуым асыҡланыр тип өмөтләндем!» – тип, Йәнәбел-Хаҡҡа маҡтауҙар уҡый. Үҙен башынан үбеп, Рәсүлүллаһтың янына китергә ишаралаған атаһы Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүгә иһә: «Мин Аллаһтан башҡа берәүгә лә хәмед һәм шөкөр итмәм. Минең ғәйепһеҙлегемде Аллаһ белдерҙе!» – тип, еңелсә үпкәһен белдереп ала.

Был хәлде күреп ҡалған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йылмайып ҡуя. Бер ай дауам иткән борсоу-ҡайғылар Аллаһтың рәхмәте һәм мәрхәмәте ярҙамында юҡҡа сығарыла (Бохари, «Шәһаҙәт», 15, 30, «Йыһат», 64, «Магази», 11, 34; Мөслим, «Тәүбә», 56; Әхмәт, VI, 60, 195).

Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә – Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғәйбәт ҡорбаны булған ҡатыны, өммәттең әсәһе, хәзрәти Пәйғәмбәрзең салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең иң яҡын дуҫының ҡызы һәм бер үк ваҡытта өммәттең иң ғиффәтле ханымдарынан береһе. Был ваҡиға ғына ла Пәйғәмбәрзәрзең бәләләр һәм бәхетһезлектәр алдында сабыр итеү көсөн күрһәтеү өсөн етерлек. Был – яла-ғәйбәттән зарар күргән мәзлүмдәр өсөн ҡиәмәткә ҡәзәр зур йыуаныс тип һанала.

Барса ошо ғилми һәм тарихи факттарға ҡарамаҫтан, Ҡөрьәни-Кәримдең был ваҡиғаны «ифкүн мүбин – асыҡ ғәйбәт» һәм «бүһтанун ғазим – зур ғәйбәт» рәүешендә белдереп, хәзрәти Ғәйшә әсәбеззе ҡәтғи рәүештә яланан арындырыуына һәм аҡлауына ҡарамаҫтан, әлеге гонаһ ғәмәлдең һуңыраҡ Жәмәл ваҡиғаһында ҡабатланыуын дауам иттергән бер төркөм вайымһыззарға ни тиергә кәрәк ине!?

Яла ваҡиғаһына сәбәп булған ғәйепле кешеләр, намыҫлы ханымдың зина ҡылыуы тураһында һүз тараткан өсөн язаға тартыла. Шулай итеп, яла яғыусыларзың һәр береһенә һикһән тапҡыр таяҡ менән һуғалар.[180]

Ибне Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә әйтеүенсә, Аллаһ Тәғәлә дүрт кешене аҡлай:

1. Йософ ғәләйһиссәләмде – үзенә яла яҡҡан ҡатын ғаиләһенән бер шаһит теле менән;[181]

2. Муса ғәләйһиссәләмде – йәһүдизәр ғәйбәтенән;[182]

3. Хәзрәти Мәрйәмде ҡосағындағы яңы тыуған баланы һөйләштереү ярзамында;[183]

4. Хәзрәти Ғәйшә иһә ҡиәмәткә ҡәзәр уҡыласаҡ Ҡөрьәни-Кәримдәге ошо олуғ аяттар менән аҡлана. Былдай пакланыузың был дәрәжәлә матур һәм төзөк итеп һөйләнгәне булмай. Аллаһ Тәғәлә быны Рәсүленең ни саҡлы бөйөк мәртәбәгә эйә булыуын күрһәтеү өсөн эшләй.

Әлеге хәсрәтле осорза вәхизең озаҡҡа кисектерелеп иңдерелеүе Пәйғәмбәребеззең Рәсүл (Илсе) һәм Нәби (Пәйғәмбәр) булыуы менән бер рәттән кешелек сифаттарының барлығын күрһәтеү, вәхизең уның аҡылы һәм нәфесе ярзамында тыуған бер хәл булмауын раҫлау һәм мосолмандарзың самимиәтен һынап ҡарау өсөн талап ителә.

Хәзрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү Мыстах исемле бер фәҡиргә даими булышып тора. Әлеге яла ваҡиғаһында уның да ғәйбәтселәр араһында булыуын күргәс, башҡа уға һәм ғаиләһенә яҡшылыҡ эшләмәйәсәгенә ант

180. Әхмәт, VI, 35.
181. Ҡарағыз: «Йусуф», 26-29.
182. Ҡарағыз: «әл-Әхзәб», 69.
183. Ҡарағыз: «Мәрйәм», 29-33.

итә. Хәҙрәти Әбү Бәкерҙең ярҙамы туҡтағас, Мыстах һәм уның ғаиләһе бисара хәлдә ҡала. Бындай ярҙам туҡтатылғас, Аллаһ Тәғәлә түбәндәге аяти кәримәләрне иңдерә:

وَلَا يَأْتَلِ أُولُوا الْفَضْلِ مِنْكُمْ وَالسَّعَةِ أَنْ يُؤْتُوا أُوْلِى الْقُرْبَى
وَالْمَسَاكِينَ وَالْمُهَاجِرِينَ فِى سَبِيلِ اللهِ وَلْيَعْفُوا وَلْيَصْفَحُوا أَلَا
تُحِبُّونَ أَنْ يَغْفِرَ اللهُ لَكُمْ وَاللهُ غَفُورٌ رَّحِيمٌ.

**«Арағыҙҙан фазиләтле һәм байлыҡ эйәһе заттар тугандарға, ярлыларға, Аллаһ юлында һижрәт ҡылыусыларға** (малдарынан) **һис нәмә бирмәйәсәктәре тураһында ант итмәһендәр; ғәфү итһендәр, кисерһендәр. Аллаһтың һеҙҙе ярлыҡауын теләмәç инегеҙме? Аллаһ – күп ярлыҡаусы, бик мәрхәмәтле»** («ән-Нур», 22).

وَلَا تَجْعَلُوا اللهَ عُرْضَةً لِّأَيْمَانِكُمْ أَنْ تَبَرُّوا
وَتَتَّقُوا وَتُصْلِحُوا بَيْنَ النَّاسِ وَاللهُ سَمِيعٌ عَلِيمٌ.

**«Анттарығыҙ арҡаһында Аллаһты** (Уның исемен) **игелек ҡылыуығыҙға, Унан ҡурҡыуға һәм кешеләрҙең араһын төҙәтеү, дуçлаштырыуҙы бер кәртәгә әйләндермәгеҙ! Аллаһ һәр нәмәне ишетеүсе һәм һәр нәмәне белеүсе»** («әл-Баҡара», 224).

Был аяти кәримәләр Йәнәбел-Хаҡтың ҡолдарына ҡарата мәрхәмәтенең иң аныҡ үрнәге булып тора. Икенсе яҡтан ҡарағанда иһә, фазиләтле бәндәләрҙе тағы ла юғары күтәрәсәк бер маҡсатты күрһәтә.

Юғарылағы аяттар иңдерелгәс, Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Мин, әлбиттә, Аллаһтың мине ярлыҡауын һөйөрмөн!» – ти. Артабан ант өсөн тейешле кәфарәт йоломо биреп, бығаса ҡылған хәйерле эшен дауам итә (Бохари, «Магази», 34; Мөслим, «Тәүбә», 56; Табәри, *«Тәфсир»,* II, 546).

Йәғни хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү үҙ ҡыҙына яла яҡҡан кешегә лә ярҙам күрһәтеүҙән тыйылмай. Был да ул мөбәрәк сәхәбәнең тиңдәшһеҙ фазиләтен күрһәткән яҡты үрнәк булып тора.

### Улар – дошман; уларҙан һаҡлан!

Монафиҡтарҙың Мүрәйси һуғышында тараҡкан уйҙырмалары, әшәкелектәре яла ваҡиғаһы менән генә бөтмәй. Мөһәжирҙәр һәм ансарҙарҙан ике кеше араһында сыҡҡан бер бәхәс сәбәпле, монафиҡтар башлығы

Ғабдуллаһ ибне Үбәй, мөһәжирҙәргә ишара ҡылып, тирә-йүндәгеләргә: «Күрҙегеҙме уларҙың ни эшләгәнен? Илебеҙҙә беҙҙән өҫтөнлөк яуланылар, артабан беҙҙе танымай башланылар. Әгәр Мәҙинәгә ҡайтһаҡ, ғәзиз, хөрмәтле зат кәмһетелгәндәрҙе унан ҡыуып сығарасаҡ», – тип мөрәжәғәт итә. Шул саҡ тыңлап тороусылар араһында булған изге мөьмин Зәйд ибне Әрҡам хәҡиҡәтте белдереп ҡысҡыра: «Ҡәүемең эсендә хурлыҡҡа ҡалдырылған һин үҙең! Аллаһ Тәғәлә Рәсүле Мөхәммәт ғәләйһис-сәләтү үә-сәләәмде ғәзиз, хөрмәтле ҡылды!»

Ваҡиға Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә еткерелгәс, монафиҡтар, әйткәндәренән баш тартып, ант итә-итә һүҙҙәрен кире ҡағалар. Хатта шуға барып етә ки, хәҙрәти Зәйдте алдаҡсы итеп күрһәтәләр. Былдай мөнәсәбәт хәҙрәти Зәйдте бик борсоуға һала. Хәҙрәти Ғүмәр иһә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән монафиҡтарҙы, беренсе сиратта Ғабдуллаһ ибне Үбәйҙе үлтереү өсөн рөхсәт һорай. Ләкин Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һиҙгер аҡыллылығын раҫлап:

*«Йә Ғүмәр! Эштең асылын белмәүселәр: «Мөхәммәт сәхәбәләрен үлтерә!» – тип әйтәсәк. Юҡ! Былдай ғәмәл ҡылмаясаҡмын! Һин хәҙер үк мосолмандарға хәбәр һал, сәфәргә әҙерләнһендәр!»* – тип белдерә.

Шунан һуң мосолмандар юлға сыға. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ул көндө кискә ҡәҙәр һәм бөтә төн буйы өҙлөкһеҙ юлын дауам итә. Таң атып, ҡояш эҫеһе көсәйә башлағас, ялға туҡтайҙар. Мосолмандар арығанлыҡ һәм йоҡоһоҙлоҡ арҡаһында, ергә һуҙылып, шунда уҡ йоҡоға тала. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең әлеге ғәмәле мосолмандарҙы Ғабдуллаһ ибне Үбәйҙең сығыштары, ҡотортоуы тәьҫиренән айырыу өсөн була.[184] Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең был йүнәлештә нескә эш итеүе кешеләрҙең уй-фекер һөрөшөн, бар төҙөлөшөн бик яҡшы белгәнлеген раҫлай.

Күпмелер ваҡыттан һуң монафиҡтарҙың хәле аяти кәримәләрҙә былай тип белдерелә:

إِذَا جَاءَكَ الْمُنَافِقُونَ قَالُوا نَشْهَدُ إِنَّكَ لَرَسُولُ اللهِ وَاللّٰهُ يَعْلَمُ إِنَّكَ
لَرَسُولُهُ وَاللّٰهُ يَشْهَدُ إِنَّ الْمُنَافِقِينَ لَكَاذِبُونَ. اِتَّخَذُوا أَيْمَانَهُمْ جُنَّةً
فَصَدُّوا عَنْ سَبِيلِ اللهِ إِنَّهُمْ سَاءَ مَا كَانُوا يَعْمَلُونَ. ذٰلِكَ بِأَنَّهُمْ
آمَنُوا ثُمَّ كَفَرُوا فَطُبِعَ عَلَى قُلُوبِهِمْ فَهُمْ لَا يَفْقَهُونَ.

184. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, III, 335-336.

«(Әй Рәсүлем!) **Монафиҡтар Һинең янына килгән сағында: «Шаһитлыҡ ҡылабыҙ: Һин – Аллаһтың Рәсүле!» – тип әйтер. Аллаһ белә, Һин, әлбиттә, Уның Рәсүле. Фәкәт Аллаһ, ул монафиҡтарҙың ялғансы булыуын да белә. Улар анттарын ҡалҡан итеп ҡапланып, Аллаһ юлынан тайпылдылар. Ысын-ысынлап уларҙың ҡылғандары ни тиклем насар! Бының сәбәбе уларҙың башта иман килтереп, һуңынан инҡар итеүҙәрендә. Шуға күрә йөрәктәре мөһөрләнде. Хәҙер инде улар һис аңламаҫ.**

وَإِذَا رَأَيْتَهُمْ تُعْجِبُكَ أَجْسَامُهُمْ وَإِنْ يَقُولُوا تَسْمَعْ لِقَوْلِهِمْ كَأَنَّهُمْ خُشُبٌ مُسَنَّدَةٌ
يَحْسَبُونَ كُلَّ صَيْحَةٍ عَلَيْهِمْ هُمُ الْعَدُوُّ فَاحْذَرْهُمْ قَاتَلَهُمُ اللهُ أَنَّى يُؤْفَكُونَ.

**Уларға күҙ һалған сағында, килеш-килбәттәрен оҡшатаһың. Һөйләһәләр, һүҙҙәрен тыңлайһың. Тик улар диуарға һөйәлгән** (йәки кейем кейҙерелгән, эсе буш, серек) **бүрәнәләр кеүек. Һәр тауыш-гөрөлтөнө үҙҙәренә ҡаршы тип һанайҙар. Дошмандар – ана шулар, уларҙан һаҡлан! Аллаһ уларҙың йәнен алһын! Нисек улар** (хаҡлыҡтан) **ситкә тайпыла һуң?!**

وَإِذَا قِيلَ لَهُمْ تَعَالَوْا يَسْتَغْفِرْ لَكُمْ رَسُولُ اللهِ لَوَّوْا رُؤُوسَهُمْ وَرَأَيْتَهُمْ
يَصُدُّونَ وَهُمْ مُسْتَكْبِرُونَ. سَوَاءٌ عَلَيْهِمْ أَسْتَغْفَرْتَ لَهُمْ أَمْ لَمْ تَسْتَغْفِرْ
لَهُمْ لَنْ يَغْفِرَ اللهُ لَهُمْ إِنَّ اللهَ لَا يَهْدِى الْقَوْمَ الْفَاسِقِينَ.

**Уларға: «Килегеҙ, Аллаһтың Рәсүле һеҙҙең өсөн мәғфирәт һораһын!» – тигән ваҡытта, баштарын ситкә борорҙар һәм Һин уларҙың тәкәбберләнеп йырағайғанын күрерһең! Уларға мәғфирәт һораһаң да, һорамаһаң да – бары бер. Аллаһ уларҙы, һис шикһеҙ, ярлыҡамаясаҡ. Сөнки Аллаһ юлдан яҙған бер гонаһлыға һидәйәт ҡылмаҫ!**

هُمُ الَّذِينَ يَقُولُونَ لَا تُنْفِقُوا عَلَى مَنْ عِنْدَ رَسُولِ اللهِ حَتَّى يَنْفَضُّوا
وَلِلَّهِ خَزَائِنُ السَّمَاوَاتِ وَالْأَرْضِ وَلَكِنَّ الْمُنَافِقِينَ لَا يَفْقَهُونَ. يَقُولُونَ
لَئِنْ رَجَعْنَا إِلَى الْمَدِينَةِ لَيُخْرِجَنَّ الْأَعَزُّ مِنْهَا الْأَذَلَّ وَلِلَّهِ الْعِزَّةُ وَلِرَسُولِهِ
وَلِلْمُؤْمِنِينَ وَلَكِنَّ الْمُنَافِقِينَ لَا يَعْلَمُونَ.

**Улар – «Рәсүлүллаһ тирәһендә булыусылар өсөн бер нәмә лә сарыф итмәгеҙ, таралып китеп бөтһөндәр!» тиеүселәр. Юғиһә, күктәрҙең һәм ерҙең хазиналары – Аллаһтыкылыр. Ләкин монафиҡтар быны аңламаҫ. Улар: «Тәхҡиҡ, әгәр Мәҙинәгә ҡайтһаҡ, көслө, өҫтөн булыусы зәғифте унан, һис шикһеҙ, ҡыуып ебәрәсәк», – тиҙәр. Тик асыл өҫтөнлөк – бары Аллаһта, Уның Рәсүлендә һәм** (тоғролоҡ, хаҡлыҡ әһеле) **мөьминдәрҙә. Ә монафиҡтар быны белмәйҙәр»** («әл-Мүнафиҡун», 1-8).

«Мүнафиҡун» сүрәһе иңгәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Зәйд ибне Әрҡамды саҡырып, был аяттарҙы уҡый һәм:

*«Әй Зәйд! Аллаһ Тәғәлә һине раҫланы!»* – тип белдерә (Бохари, «Тәфсир», 63/1-2; Мөслим, «Сыфатүл-Мүнафиҡун», 1).

Артабан Зәйдтең ҡолағын тотоп:

*«Бына ул – Аллаһ юлында ҡолағы менән үҙенә йөкләнгән бурысты үтәгән егет»,* – тип әйтә (Ибне Һишам, III, 336).

❁

Аллаһтың хикмәте – монафиҡтар башлығы Ғабдуллаһ ибне Үбәйҙең Ғабдуллаһ исемле бер улы самими мөьмин була. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бик бирелгән, ихлас бағланған йәштәрҙән һанала. Ул атаһының ҡылған ғәмәлдәренә бик ҡайғыра, хатта түҙеп тора алмай башлай. Һуңғы ваҡиғалар иһә күңелендәге хәсрәтте тағы ла көсәйткәнгә күрә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килә:

«Әй Аллаһтың Рәсүле! Әгәр теләһәң, атайымды үлтерәйем!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм быға рөхсәт бирмәй һәм:

*«Юҡ! Киреһенсә, уға йомшаҡ мөғәмәлә күрһәт. Ул беҙҙең янда булған ваҡытта, үҙе менән яҡшы аралашырбыҙ!»* – тип әйтә. Шунан һуң Ғабдуллаһ ислам ғәскәре составындағы атаһы янына йүгерә һәм дөйәһенең ауыҙлығын тотоп, ҡысҡырып һүҙ ҡата: «Ғиззәт һәм ҡөҙрәттең Аллаһта һәм Уның Рәсүлендә икәнлеген әйтмәй тороп, һине ошо урындан бер ҡайҙа ла ебәрмәйем!..»

Монафиҡтар башлығы аптырап ҡала. Шул ҡәҙәр кеше араһында улының үҙенә ҡарата бындай ғәмәле мин-минлегенә тейә: «Хәҙер һин миңә шул ҡәҙәр кеше араһында Мәҙинәгә барырга ирек бирмәҫкә йыйынаһыңмы?» – ти ул.

Улы олуғ иман батырлығы менән: «Эйе, бөгөн кешеләр араһында кемдең иң оятһыҙ, ә кемдең иң хөрмәтле һәм ғәзиз булыуын һиңә төшөндөрмәй тороп, ебәрмәясәкмен. Хәҡиҡәтте танымаһаң, башыңды ергә осорормон...» – тип һүҙенең ҡәтғилеген белдерә.

Хыянатсы монафиҡтың гүйә ҡулы-аяғы бәйләп ҡуйыла. Улының әйткәнен эшләргә әҙер етдилеген аңлағас, йәне-тәненә ҡурҡыу йүгерә. Элек һөйләгән

һүҙҙәрен кире алып, теләр-теләмәҫ кенә телен әйләндереүгә ҡарамаҫтан, хәҡиҡәтте раҫларға һәм: «Шәһәҙәт ҡылам, ғиззәт һәм ҡөҙрәт – Аллаһтыҡы, Рәсүленеке һәм мөьминдәрҙеке», – тип әйтергә мәжбүр була.

Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм Ғабдуллаһҡа:

*«Аллаһ һине Рәсүле һәм мөьминдәре хаҡына әжере менән бүләкләһен!»* – тип доға ҡыла һәм атаһының юлын асырға ҡуша (Ибне Һишам, III, 334-337; Ибне Сәғд, II, 65; Хәйсәми, IX, 317-318; Зәмахшәри, VI, 117).

Әсхәбе кирам Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе хәҙрәти Мөхәммәт Мостафаны шул ҡәҙәр ныҡ ярата ки, Уның туранан-тура үҙенә түгел, шәхесенә, хатта бер төгөнә лә зыян килеү менән һис килешә алмайҙар. Берәй кешенең Уға ҡырын ҡарауы йәки хөрмәтһеҙлек күрһәтеүе лә уларҙы сығырҙан сығара, быны эшләгән кеше хатта аталары булһа ла, уны күҙ ҙә йоммайынса үлтерергә әҙер халәт кисерәләр.

## ХӘНДӘК ҺУҒЫШЫ – сыҙап булмаҫлыҡ ауырлыҡтар, бәлә өҫтөнә бәлә

(Һижри 5-се йылдың шәүүәле-зөлкәғиҙәһе / 627 йылдың марты)

Хәндәк һуғышы – мөшриктәрҙең мосолмандарға ҡаршы иң ҡурҡыныс һәм иң ауыр һуғышы. Әлеге бәрелеш мосолмандарҙы һәм ислам дәүләте Мәҙинәне тарихтан һыҙып ташлауға йүнәлтелгән була.

Һөргөнгә ҡыуылған Бану ән-Нәдир йәһүдиҙәрҙең бер төркөм күренекле заттары Хәйбәргә һыйына. Улар мосолмандарға ҡарата үс теләге менән яна. Был йәһүдиҙәр ҡөрәйешлеләргә бергә эш йөрөтөргә тәҡдим яһай. Хатта уларҙың боттарға табыныуы мосолманлыҡтан өҫтөнөрәк булыуын белдереп, боттарға баш эйәләр. Шунан һуң Аллаһ Тәғәлә былай тип белдерә:

أَلَمْ تَرَ إِلَى الَّذِينَ أُوتُوا نَصِيبًا مِّنَ الْكِتَابِ يُؤْمِنُونَ بِالْجِبْتِ
وَالطَّاغُوتِ وَيَقُولُونَ لِلَّذِينَ كَفَرُوا هَؤُلَاءِ أَهْدَى مِنَ الَّذِينَ آمَنُوا سَبِيلًا.
أُولَئِكَ الَّذِينَ لَعَنَهُمُ اللّٰهُ وَمَنْ يَلْعَنِ اللّٰهُ فَلَنْ تَجِدَ لَهُ نَصِيرًا.

**«Үҙҙәренә китап насип ителгәндәрҙе күрмәнеңме? Боттарға һәм тағутҡа ышаналар, шунан кафырҙарға: «Былар – Аллаһҡа иман килтереүселәрҙән дөрөҫөрәк юлда», – тип әйтәләр. Улар – Аллаһ ләғнәт ҡылған заттар. Аллаһтың ләғнәте төшкән затҡа ярҙамсы таба алмаҫһың»** («ән-Ниса», 51-52).[185]

185. Ҡарағыҙ: Ваһиди, 160 б.

Шундай форсатты көтөп кенә торған мөшриктәр кисекмәҫтән хәрәкәт башлай. Мосолмандарҙың Өхөд һуғышында әллә ни етди еңеү яуламағанлығынан, башҡа ғәрәп ҡәбиләләренең дә ҡыйыуланып китеүенән файҙаланып, шаҡтай яҡлаусы тапҡан ҡөрәйешлеләр, ун меңдән артыҡ кешеле ғәскәр туплауға ирешә.[186]

Был турала хәбәрҙар Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләре менән кәңәшмә үткәрә. Аллаһтың әмерҙәренә ҡаршы килмәгән, Аллаһ юлындағы ауырлыҡтарҙы сабырлыҡ менән кисергән осраҡта, уларға илаһи ярҙам киләсәгенә вәғәҙә бирә. Пәйғәмбәр Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә буйһонорға, эйәрергә бойора.

Аллаһ Тәғәлә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе оҙон соҡор ҡаҙырға илһамландыра. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренә һорау менән мөрәжәғәт итә: улар Мәҙинәнән сығып һуғышыуҙы хуплайҙармы, әллә һаҡланыу өсөн шәһәрҙең тирә-яғына ур ҡаҙырға теләйҙәрме? Сәлмән Фәрисий раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ иһә Фарс илендә дошман яйҙаҡтарының һөжүмдәренән ҡурҡҡан саҡта, тирә-яғыбыҙҙы соҡорҙар менән әйләндереп ала инек», – ти.

Сәлмән раҙыйаллаһу ғәнһүҙең Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ кәңәшен хуплаған был һүҙе мосолмандарға оҡшаны.[187]

Әсхәбе кирам бер үк ваҡытта Аллаһ Рәсүленең, Өхөд һуғышы осрағында шәһәрҙән сыҡмайынса, Мәҙинәлә бикләнеп һаҡланырға теләгәнен иҫкә төшөрәләр. Шул рәүешле Мәҙинә тирәһенә оҙон ур ҡаҙырға ҡарар ҡылына.

Мәҙинә бер яҡтан ғына асыҡ һәм ҡурҡыныс аҫтында була. Башҡа яҡтары бер-береһенә ҡушылып төҙөлгән биналар менән, әйтерһең, бер ҡәлғә кеүек уратып алына. Шулай уҡ ҡуйы хөрмә ағастары ла үтеп булмаҫлыҡ кәртә яһай. Рәсүлуллаһ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм соҡорҙо шәһәрҙең дошман өсөн асыҡ тарафына ҡаҙырға ҡарар бирә. Шәйхайн ҡәлғәнән Мәзад тип аталған ергә хәтле бер һыҙыҡ һыҙғас, һәр ун кешегә: *«Ошонан шунда ҡәҙәр»*, – тип күрһәтеп, ур ҡаҙыр өсөн кишәрлектәр бүлеп бирә.[188]

Ур ҡаҙыу эшендә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙе лә эшләй. Хатта ризыҡ менән бәйле ҡыҫынҡылыҡ килеп тыуғас, мөбәрәк ҡарынын сикләргә, билен быуырға мәжбүр була.[189] Ләкин Пәйғәмбәрҙәр солтаны булған Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм хатта ошо хәлдә лә Раббыһына шөкөр итеүҙән туҡтамай.

Бәра ибне Ғазиб раҙыйаллаһу ғәнһү бәйән ҡыла:

186. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 444; Ибне Сәғд, II, 66.
187. Ибне Һишам, III, 231; Ваҡыди, II, 445.
188. Табәри, «Тарих», II, 568; Диярбәкри, I, 482.
189. Бохари, «Магази», 29.

«Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде Әхзәб көнө[190] беҙҙең менән тупраҡ-ер ташығанда күрҙем. Ул ваҡытта Ғабдуллаһ ибне Рәуаһаның ошо шиғырын көйләй ине:

اَللّٰهُمَّ الَوْلَا اَنْتَ مَا اهْتَدَيْنَا

وَلَا تَصَدَّقْنَا وَلَا صَلَّيْنَا

فَأَنْزِلَنْ سَكِينَةً عَلَيْنَا

وَثَبِّتِ الْأَقْدَامَ إِنْ لَاقَيْنَا

إِنَّ الْأُلٰى قَدْ بَغَوْا عَلَيْنَا

وَإِنْ أَرَادُوا فِتْنَةً اَبَيْنَا

«Аллаһым, Һин беҙгә һидәйәт ҡылмаған булһаң, саҙаҡа ла бирә алмаç, намаҙ ҙа уҡый алмаç инек! Йә Раббы! Дошман менән осрашҡанда беҙгә тыныслыҡ, ышаныс иңдер! Аяҡтарыбыҙ шыумаһын, таймаһын! Улар беҙгә һөжүм итте. Беҙҙе фетнә-ғауғаға сумдырырға теләгәндә, ҡасмайбыҙ, ныҡ торорбоҙ!»

Шиғыр ахырындағы «әбәйнә» һүҙен әйткәндә, йәғни «ҡасмайбыҙ, ныҡ торорбоҙ», тигәндә, тауышын көсәйтә ине» (Бохари, «Магази», 29).

Әсхәбе кирам шул ҡәҙәр ауыр хәлдә ҡала ки, туйғансы ашау бөтөнләй эләкмәй. Әнәс разыйаллаһу ғәнһү был көндәрҙе былай иҫкә ала: «Сәхәбәләр ашаһын өсөн, бер ус арпа килтерелә: ул еҫе-тәме насарланған бер май менән бешерелеп, улар алдына ҡуйыла ине. Һәр кем ас булһа ла, ауыҙҙары был майҙың әселегән, ҡатылығын һәм боҙолған тәмен тоя ине. Ризыҡтың ауыр, күңелгә тейә торған еҫе була ине» (Бохари, «Магази», 29).

Мосолмандарҙың олоһо-кесеһе, йәше-ҡарты – барыһы ла траншея ҡаҙыу эшендә көс ҡуя. Ун биш йәштәр тирәһендәге Зәйд ибн Сабит исемле үҫмер бер ваҡыт йоҡоға тала. Мосолмандар уны соҡор ситендә йоҡлаған хәлдә ҡалдырып китәләр. Малай янына килгән Ғөмәрә ибн Хәзм разыйаллаһу ғәнһү, шаяртып, уның ҡоралдарын йәшереп ҡуя. Уянғас, ҡоралдарын таба алмайынса, Зәйд разыйаллаһу ғәнһү бик борсоуға ҡала һәм ҡурҡа. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм быны ишеткәс, Зәйдте үҙ янына саҡыра һәм уға:

190. Хәндәк һуғышында төрлө ҡәбиләләр мосолмандарға ҡаршы бергә йыйылғанға күрә, был һуғышҡа «Әхзәб» исеме бирелә.

*«Эй йоҡо сүлмәге! Һин йоҡоға киткәнһең, ә ҡоралдарың юғалған!»* – тигәс: *«Был малайҙың ҡоралдары ҡайҙа икәнен белеүсе бармы?»* – тип һорай.

Ғөмәрә разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ, мин беләм, ҡоралдар миндә», – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ҡоралдарын үҙенә ҡайтар!»* – тип бойора һәм бынан һуң шаяртып булһа ла мосолмандарҙы ҡурҡытмаҫҡа ҡуша һәм уларҙың әйберҙәрен йәшереүҙе тыя (Ваҡыди, II, 448).

**Хәндәктә бирелгән хәйерле хәбәр**

Ул ваҡытта әсхәбе кирам, бик ҙур һәм ҡаты ташҡа тура килеп, уны вата алмауҙары хаҡында Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хәбәр еткерә. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе, осло ауыр сүкешен ҡулына алып, «бисмилләһ» менән шул ташҡа өс тапҡыр һуға. Ҡыяташ ваҡ ҡом кеүек таралып төшә.[191] Рәсүлүллаһ һәр һуғыуында мөьминдәргә олуғ хәбәрҙәр ирештерә. Беренсе тапҡыр һуғыуында үҙенә Дамаск (Византия), икенсеһендә – Иран, өсөнсө һуғыуында иһә Йәмән асҡыстарының бирелгәнен, был дәүләттәрҙең һарайҙарын хәҙер үҙе баҫып торған ерҙә килеш күреүен белдерә. Телгә алынған илдәрҙең Аллаһ һүҙен таныу менән хөрмәтләнәсәге тураһында шатлыҡлы хәбәр биреп, киләсәктәге еңеүҙәр менән рухландырып, мөьмин йөрәктәргә өмөт кертә.[192] Хаҡ Тәғәләнең яҡын киләсәктә батылды һис шикһеҙ юҡҡа сығарасағын белдереп, һис була алмаҫ, тип һаналған бик күп эштәрҙең бер-бер артлы ысынға ашасағын раҫлағандай, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе донъякүләм бер һидәйәт картаһын һыҙа.

Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ Кисраның Мәдаиндәге аҡ һарайын тасуирлап биргәс, Сәлмән Фәрисий разыйаллаһу ғәнһү: «Дөрөҫ һөйләнең! Һине хаҡ дин һәм китап менән ебәргән Аллаһ менән ант итәм, ул нәҡ бына һин һүрәтләгән кеүек! Һинең Рәсүлүллаһ икәнлегеңә (тағы бер ҡат) шәһәҙәт килтерәм!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әй Сәлмән! Был еңеүҙәрҙе Аллаһ һеҙгә минән һуң насип итәсәк! Дамаск, һис шикһеҙ, яулап алынасаҡ! Ираклий үҙ иленең иң йыраҡ мөйөшөнә ҡәҙәр ҡасасаҡ! Һеҙ бөтә Дамаскҡа хаким буласаҡһығыҙ! Һис кем һеҙгә ҡаршы тора алмаясаҡ! Йәмән, һис шикһеҙ, яулап алынасаҡ! Унан һуң Кисра үлтереләсәк!»* – ти.

Һуңыраҡ Сәлмән разыйаллаһу ғәнһү: «Мин быларҙың барыһының да ысынға ашҡанын күрҙем!» – тип әйтә (Ваҡыди, II, 450).

191. Бохари, «Магази», 29.
192. Ҡарағыҙ: Әхмәт, IV, 303; Ибне Сәғд, IV, 83, 84.

Телгә алынған дәүләттәр берәм-берәм яулап алынғас, Әбү Һүрайра разыйаллаһу ғәнһү ҙә:

«Был еңеүҙәрегеҙ һеҙҙең өсөн бер башланғыс ул! Әбү Һүрайраның булмышын ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, һеҙ яулап алған һәм ҡиәмәткәсә ҡулығыҙға төшәсәк бөтә ҡалаларҙың асҡыстарын Аллаһ Тәғәлә, Мөхәммәт ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмгә алдан уҡ биргән!» – тип раҫлай (Ибне Һишам, III, 235).

Аллаһ Рәсүленең ошбу хәйерле хәбәрҙәре мосолмандарҙы алда көткән ауырлыҡтарҙы еңелерәк кисерер өсөн бик ҙур рухи таяныс, ярҙам була. Нәтижәнең мөьминдәр файҙаһына, ислам дошмандарына ҡаршы буласағы тураһында хәҡиҡәттең алдан уҡ белдереп ҡуйылыуы иманлы күңелдәрҙең сабырлығын һәм ныҡлығын көсәйтә. Сөнки Хәндәк һуғышы, ауыртыуҙар, арығанлыҡ, аслыҡ, һыуыҡ һәм ҡараңғылыҡҡа ҡаршы көрәш сәбәпле лә, сыҙап булмаҫлыҡ ауырлыҡ һәм бәләләр менән һынай. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһым! Ысын тормош – бары әхирәт тормошолор. Ансарҙар һәм мөһәжирҙәргә илаһи ярҙам ебәр!..»* – тип ялбарып (Бохари, «Магази», 29), донъялағы бөтә ғазап-ыҙаларҙың, арыу-талыуҙарҙың мәңгелек бәхет тулы бер ғүмер ҡаршында ҡиммәте юҡлығын белдереп, сәхәбәләренә әхирәтте маҡсат итеп күрһәтә.

**Хәҙрәти Жабирҙың бәрәкәтле ризығы**

Хәҙрәти Жабир разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Беҙ Хәндәк һуғышы көнө соҡор ҡаҙый инек. Сокойһо урында бик ҡаты таш тура килде. Сәхәбәләр Нәби саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына барып: «Ҡаҙып ятҡан соҡоробоҙҙа ҡаты ташҡа килеп сыҡтыҡ», – тип хәбәр итәләр.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ:

*«Мин соҡорға төшәйем»,* – тине лә аяғүрә баҫты, аслыҡтан эсе-эскә йәбешкән ине. Беҙ унда өс көн бер ниндәй ризыҡһыҙ йәшәнек. Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм кәйләне ҡулына алды ла ҡаты ташҡа килтереп һуҡты, ул таш, ваҡланып, ҡом өйөмөнә әйләнде. Мин: «Йә Рәсүлуллаһ! Өйөмә ҡайтырға рөхсәт итһәгеҙ!» – тинем. Өйөмә ҡайтыуға: «Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде түҙә алмаҫлыҡ бер хәлдә күрҙем, берәй ризыҡ юҡмы?» – тип ҡатынымдан һораным. Йәмәғәтем: «Бер аҙ арпа һәм бер кәзә бәрәсе бар», – тине.

Кәзә бәрәсен һуйҙым, арпаны тарттым. Итте кәструлгә һалдыҡ. Икмәк бешеп, ит менән кәструл таштар өҫтөндә ҡайнаған саҡта, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына юл тоттом: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Бер аҙ ғына ризығым бар ине, бер-ике кеше менән бергә беҙгә рәхим итегеҙ», – тип өндәштем.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ:

*«Ризығың күпме?»* – тип һораны. Мин ни бар, шуны һөйләп бирҙем. Шунан һуң Рәсүлүллаһ:

*«Күп тә, яҡшы ла икән! Ҡатыныңа әйт: мин килгәнсе, кәстрүлде уттан алмаһын, икмәкте лә мейестән сығармаһын!»* – тип бойорҙо. Артабан сәхәбәләренә:

*«Эй соҡор эйәләре! Жабир беҙгә табын әҙерләгән, әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ!»* – тип ҡысҡырып һөрән һалды. Ундағылар барыһы ла тороп баҫты.

Мин аптыраған-борсолған хәлдә, ҡатыным янына саптым: «Һай башыбыҙға бәлә! Пәйғәмбәребеҙ мөһәжирҙәре, ансарҙар һәм янындағы бар кеше менән килә», – тип хәбәр иттем. Йәмәғәтем иһә: «Аллаһ Рәсүле һиңә күпме ризығыбыҙ барлығын һоранымы?» – тип ҡыҙыҡһынды. Мин: «Эйе», – тинем. Шунан һуң: «Улайһа, хафаланма, Ул һинән яҡшыраҡ белер», – тип тынысландырҙы ул.

Бер аҙҙан ҡунаҡтарым килеп тә етте. Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ сәхәбәләренә:

*«Бер-берегеҙгә ҡомасауламай, этешмәй-төртөшмәй генә керегеҙ!»* – тип бойорҙо. Улар унар-унар керҙе. Әфәндебеҙ икмәкте һындырып ала, өҫтөнә ит ҡуя һәм һәр тапҡырында кәстрүлде лә, мейесте лә кире ҡаплай ине, унан алған ризыҡты сәхәбәләренә бирҙе. Һуңынан йәнә шуны уҡ ҡабатлай ине. Барлығы мең кеше килгән ине. Ундағыларҙың һәр ҡайһыһы ашап туйғансы, икмәкте һындырып, өҫтөнә ит ҡуйып биреүен дауам итте. Ахырҙа әле бер аҙ ризыҡ та артып ҡалды. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡатыныма өндәште:

*«Быны ашағыҙ, күршеләрегеҙҙе лә һыйлағыҙ, сөнки аслыҡ кешеләрҙе бик хәлһеҙләндерҙе!»* (Бохари, «Магази», 29; Мөслим, «Әшрибә», 141; Ваҡыди, II, 452).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Аллаһ рөхсәте менән насип ителгән ап-асыҡ мөғжизәһе аша, бер нисә кешелек ашамлыҡ хатта тиҫтәнән артыҡ күршеләрҙе лә һыйларға етерлек була.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡулына кергән барлыҡ нәмәһен Аллаһ юлында сарыф иткәнгә күрә, үҙендә әллә ни артыҡ мал-мөлкәт булмай. Мохтажлығы тыуғанда ла, быны сәхәбәләренән йәшерә, һис кемгә йөк булырға теләмәй. Ләкин әсхәбе кирам Ғаләмдәр Әфәндеһенең хәленә бик иғтибар менән ҡарай, берәй ниндәй ихтыяжы барлығын һиҙһәләр, шунда уҡ уны хәл итергә, ярҙамлашырға тырышалар. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең аслыҡ арҡаһында тауышы әкрен, хәлһеҙерәк сығыуын тойһалар, тиҙерәк өйҙәренә йүгереп, ниндәй ризыҡ бар, шуны Уға алып килеп, Пәйғәмбәргә тәҡдим итәләр.[193] Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙҙең йөҙө һулып

193. Ҡарағыҙ: Бохари, «Әтғимә», 6; Мөслим, «Әшрибә», 142.

киткәнен күреүгә, Уны туҡландырырлыҡ берәй нәмә табырға тырышалар, таба алмаһалар, дөйәгә һыу эсереү йомошон үтәп булһа ла, бер нисә хөрмә эшләп алалар һәм шуның менән Пәйғәмбәребеҙҙе һыйлайҙар.

Шулай бер көн Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ сәхәбәләре янына сыға. Ансарҙарҙан берәү менән осраша. «Йә Рәсүлүллаһ! Ата-әсәм Һиңә ҡорбан булһын, йөҙөгөҙҙәге был хәлһеҙлек мине бик борсой, быныӊ сәбәбе нимәлә?» – тип һорай ансар вәкиле.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, ҡыҙыҡһыныусының йөҙөнә бер аҙ ҡарап торғас, әйтеп ҡуя:

*«Аслыҡ ул».*

Сәхәбә шунда уҡ сығып китә лә йүгерә-йүгерә өйөнә ҡайта, ашарға берәй нәмә эҙләй, тик таба алмай. Тиҙерәк Бану Ҡурайҙа ҡәүеме янына юл тота. Ҡойонан алған һәр силәк һыу бәрәбәренә бер хөрмә алырға килешә. Бер ус хөрмә туплағас, шуларҙы алып, хөрмәтле Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына бара. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уны шул уҡ хәлдә ҡаршылай. «Эй Аллаһтың Рәсүле, ашағыҙ быларҙы!» – тип, сәхәбә хөрмәләрҙе тәҡдим итә.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе хөрмәләрҙең ҡайҙан сыҡҡаны тураһында һорай, сәхәбә иһә ысынбарлыҡтағыса аңлатып бирә. Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Һин Аллаһты һәм Уның Рәсүлен яратаһың, тип уйлайым!»* – тип әйтә.

Теге сәхәбә: «Эйе, Һине хаҡлыҡ өсөн ебәргән Аллаһ менән ант итәм, Һин миңә үҙемдән, баламдан, ғаиләмдән һәм малымдан да һөйөклөрәк», – тип белдерә.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Әгәр шулай икән, фәҡирлектә сабыр бул, бәләләргә ҡаршы үҙеңә бер һаҡлаусы ҡалҡан әҙерлә! Мине хаҡлыҡ өсөн ебәргән Аллаһ менән ант итәм, был ике нәмә (фәҡирлек һәм бәләләр) мине һөйөүсе кешегә һыуҙың тау түбәһенән аҫҡа төшөүенә ҡарағанда тиҙерәк килеп етер»* (Хәйсәми, X, 313; Зәхәби, *«Сийәр»,* III, 54; Ибне Хәжәр, *«әл-Исабә»,* III, 298).

**Хәндәктә кисерелгән ауырлыҡтар**

Ҡыш фасылы була. Мөшриктәр Мәҙинәне ҡамап ала. Фәҡәт ҡаршыларында пәйҙә булған үтеп сыҡҡыһыҙ соҡорҙарҙы күреп, аптырап ҡалалар һәм Мәҙинәгә керә алмайҙар.

Мөшриктәрҙең ғәскәрҙәре тирмә-ҡыуыштарын ҡорғас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәҙинәлә үҙ урынына Ибн Өмми Мәктумды вәкил итеп ҡалдырып, өс мең ислам мөжәһиде менән кисекмәҫтән Хәндәккә

таба йүнәлә. Сәл тауы артҡы яҡтан ышыҡлаптлыҡ итеп, Пәйғәмбәр ғәскәре тау итәгендә штаб ҡора. Ҡалала ҡалған балаларҙы һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡәлғәләргә һәм нығытмаларға урынлаштырырға бойора.[194] Ун биш йәшкә ҡәҙәрге балаларҙы ҡәлғәләргә, йәғни үҙҙәренең ғаиләләренә ҡайтарып ебәрә. Ун биш йәше тулған Ибн Ғүмәр, Зәйед ибн Сабит һәм Бәра ибн Ғазиб кеүек сәхәбәләргә иһә ғәскәрҙә ҡалырға рөхсәт бирә.[195]

Ул арала Бану Ҡурайҙа йәһүдтәре лә баш күтәреп, Рәсүлүллаһ менән ике аралағы анттарын боҙа. Шулай итеп, бындай анттарын инде икенсе тапҡыр боҙалар, был уларҙың икенсе хыянаты була. Мосолмандар ике ут араһында ҡала. Йәһүдтәр, мөшриктәр башлығы Әбү Суфьян янына илсе ебәреп: «Һеҙ ныҡ тороғоҙ! Беҙ мосолмандарға артҡы яҡтан һөжүм итәсәкбеҙ, уларҙың тамырын ҡоротасаҡбыҙ!» – тип хәбәр еткерәләр.[196]

Әлеге хыянат Аллаһ Рәсүлен бик ҙур хәсрәткә һала, ләкин Ул һәр даим Аллаһҡа тәүәккәл ҡылып, бар эшен Аллаһ ихтыярына тапшырып эш итә. Шуға күрә бындай мөшкөл хәлдә лә:

*«Хәсбуналлаһ үә ниғмәл-вәкил: беҙҙең өсөн Аллаһ етер! Ул ни ҡәҙәр күркәм Вәкил»* – тип әйтергә көс таба (Ваҡыди, II, 457; Ибне Сәғд, II, 67).

Артабан:

*«Беҙгә Бану Ҡурайҙа тураһында хәбәр алып ҡайтырлыҡ берәйһе юҡмы?»* – тип һорай.

Зөбәйр ибн Ғәүәм разыйаллаһу ғәнһү: «Мин барайым, йә Рәсүлүллаһ!» – ти һәм юлға сыға.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәл мөшкөлләнеп, бик ҡурҡыныс вәзғиәт килеп тыуғас, йәһүдиҙәрҙең ғәмәлдәрен, позицияларын белер өсөн, хәҙрәти Зөбәйерҙе бер нисә тапҡыр разведкаға ебәрә. Зөбәйер разыйаллаһу ғәнһүҙең бындай хеҙмәтенән ҡәнәғәт ҡалыуы тураһында:

*«Һәр Пәйғәмбәрҙең бер ярҙамсыһы, апостолы бар. Минең ярҙамсым иһә Зөбәйер!»* – тигән һүҙҙәр менән иҫкә ала (Әхмәт, III, 314).

Артабан Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ йәһүдиҙәргә бер делегация ебәрә. Әлеге делегацияға ул бындай кәңәш-нәсихәттәр бирә:

*«Барығыҙ, ҡарағыҙ! Беҙгә килеп еткән хәбәрҙәр дөрөҫмө, түгелме? Әгәр дөрөҫ икән, уны миңә йәшерен бер рәүештә белдерерһегеҙ. Асыҡтан-асыҡ һөйләп, кешеләр йөрәгенә ҡурҡыу һалмағыҙ, уларҙы өмөтһөҙлөккә, көсһөҙлөк хәләтенә төшөрмәгеҙ! Әгәр улар ике аралағы антҡа тоғро икән, быны халыҡ ҡаршыһында әйтә алаһығыҙ!»*

194. Ибне Һишам, III, 235.
195. Ваҡыди, II, 453.
196. Ғәбдерраззаҡ, V, 368.

Илселәр Бану Ҡурайҙа ҡәүеме янына йүнәлә һәм вәзғиәттең ишетелгәндән дә насарыраҡ икәнен күрәләр (Ибне Һишам, III, 237).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ теләһә ниндәй һөжүмдән ҡаланы һаҡлау өсөн, Сәләмә ибне Әсләм разыйаллаһу ғәнһүҙе – ике йөҙ, Зәйд разыйаллаһу ғәнһүҙе өс йөҙ кешелек ғәскәр менән Мәҙинәлә ҡалдыра. Улар Мәҙинәлә ҡарауыл торорға һәм ҡысҡырып тәкбир әйтеп, ҡала урамдарында йөрөргәләп торорға тейеш була.[197]

Бану Ҡурайҙа йәһүдиҙәренең һөжүменә эләкмәйенсә төн сыҡҡан ваҡытта, мөьминдәр иркен һулап ҡуя. Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Мәҙинәләге бала-сағабыҙ арҡаһында Бану Ҡурайҙаларҙан ҡурҡыу ҡөрәйеш һәм Ғәтәфән ғәскәренән ҡурҡыуға ҡарағанда көслөрәк ине. Ваҡыт-ваҡыт Сәл тауының түбәһенә менеп, Мәҙинә йорттарына күҙ һала, уларҙы имен һәм тыныс хәлдә күргәс, Аллаһҡа хәмед-сәнә һәм шөкөр итә инем!» – тип иҫкә ала (Ваҡыди, II, 460).

Өммө Сәләмә әсәбеҙ былай тип тапшырған:

«Мин төрлө бәрелештәр һәм ҡурҡыныс миҙгелдәр кисерелгән Мүрәйси, Хәйбәр, Хөдәйбиә, Мәккәне яулау, Хөнәйен кеүек күп кенә һуғыштарҙа Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында инем. Быларҙың береһе лә Рәсүлуллаһ өсөн Хәндәктән ҡыйыныраҡ һәм ҡурҡыныраҡ булмағандыр. Бану Ҡурайҙаның бала-сағаларыбыҙға һөжүм итмәйәсәгенә ышанысыбыҙ юҡ ине» (Ваҡыди, II, 467).

Икенсе яҡтан, соҡор тирәһенә мөшриктәр тарафынан һөжүмдәр яһала, ҡараңғы төнгә саҡлы ҡыҙыу бәрелештәр дауам итә, ваҡыт-ваҡыт Аллаһ Рәсүленең сатыры ла утҡа тотола.

Мөшриктәр бер көндө Аллаһ Рәсүле торған ергә бар көстәре менән атакаға күтәрелә. Ул көндө Пәйғәмбәребеҙ ҙә, әсхәбе кирам да намаҙҙарын уҡырға форсат тапмай. Кис етеп, ғәскәрҙәр үҙ позицияларына ҡайтҡас, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Билалға аҙан әйтергә ҡуша. Һәр намаҙ өсөн ҡамәт төшөрөп, өйлә, икенде һәм аҡшам намаҙҙарын ҡаза итеп уҡыта.[198] Быға бик борсолған Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙе «күҙемдең нуры» тип атаған намаҙ ғибәҙәтенән айырған мөшриктәргә:

*«Улар беҙҙе ҡояш батҡансы нисек мәшғүл ҡылып, намаҙҙан айырған булһалар, Аллаһ та уларҙың өйҙәренә, ҡорһаҡтарына, ҡәберҙәренә ут тултырһын!»* – тип бәддоға уҡый (Бохари, «Магази», 29; Ибне Сәғд, II, 68-69; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 112).

197. Ибне Сәғд, II, 67.
198. Әлеге ваҡиға ваҡытында уҡыла алмаған намаҙҙарҙың ҡаза ҡылына алыуына дәлил була.

**Хәндәк һуғышындағы ҡаһарманлыҡтар**

Һуғышта йәше-ҡарты, олоһо-кесеһе берәй вазифа башҡара, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм соҡорҙоң тар урынында шәхсән үҙе һаҡта тора.[199]

Өммө Сәләмә разыйаллаһу ғәнһә анабыҙ тапшырғандарҙан:

«Хәндәк һуғышында Рәсүлүллаһ менән бергә булдым. Унда һәм Ул булған башҡа ерҙәрҙә Рәсүлүллаһтан бер ҙә айырылманым. Аллаһ Рәсүле соҡорҙо шәхсән үҙе һаҡлай ине. Шул ваҡытта көслө һыуыҡ тейҙерҙек. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде ҡарап, тәрбиәләп тора инем. Намаҙға торған ине. Шунан барып, бер аҙ урға күҙ һалды ла:

*«Былар, моғайын, мөшриктәрҙең яйҙаҡтарылыр, ур тирәһендә йөрөйҙәр! Уларға ҡаршы барырға кем бар?»* – тине. Шунан һуң:

*«Әй Ғәббәд ибн Бишр!»* – тип ҡысҡырҙы. Ғәббәд разыйаллаһу ғәнһү: «Баш өҫтө, бойор, йә Рәсүлүллаһ!» – тине.

Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ унан:

*«Яныңда берәйһе бармы?»* – тип һораны.

Ғәббәд разыйаллаһу ғәнһү: «Эйе! Мин һәм сәхәбәләрегеҙҙән ҡай берәүҙәр сатырығыҙ тирәһендә торабыҙ!» – тип яуап бирҙе.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Иптәштәрең менән барып, соҡор буйлап йөрөгөҙ! Ана, теге күренеп киткән атлы ғәскәриҙәр дошман яйҙаҡтары булһа кәрәк, иғтибарһыҙлығығыҙҙан файҙаланып, көтмәгәндә һөжүм итергә, кемдәрҙелер үлтереп китергә өмөтләнәләр!»* – тип бойорҙо һәм:

*«Йә Аллаһым! Уларҙың яуызлығын беҙҙән йыраҡайт! Уларға ҡаршы беҙгә ярҙам ит һәм уларҙы еңергә насип ҡыл! Беҙҙе Һинән башҡа еңеүсе ҡыласаҡ зат юҡ!»* – тип доға уҡыны.

Ғәббәд ибн Бишр разыйаллаһу ғәнһү иптәштәре менән бергә китте. Шул саҡ мөшриктәр башлығы Әбү Суфьян бер атлы отряд менән соҡорҙоң тар урыны тирәһендә йөрөй ине. Мосолмандар килеп етеп, уларҙы уҡҡа тота, таш осора башланы. Мин дә улар менән бер рәттән баҫып, мөшрик атлыларына таш һәм уҡ атыуҙа ҡатнаштым. Ниһәйәт, мөшриктәрҙе көсһөҙләндерҙек, йонсоттоҡ. Бер аҙҙан улар таралып, кире үҙ урындарына боролоп китергә мәжбүр булды. Рәсүлүллаһ янына ҡайтҡанда, уның намаҙҙа сағына тура килдем… Аллаһ Ғәббәд ибн Бишргә рәхмәтен бирһен! Ул һәр ваҡыт Аллаһ Рәсүле сатырын һаҡлаусы сәхәбәләрҙән ине» (Ваҡыди, II, 464).

199. Ваҡыди, II, 463-464.

Аллаһ Рәсүленең туған апаһы – хәҙрәти Сафия был ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар менән бергә Хәсән ибн Сабиттың Фари тип аталған һарайында була. Йәһүдиҙәрҙән ун кешелек бер төркөм килеп, һарайҙы уҡҡа тота һәм эскә керергә маташа. Уларҙың береһе һарай тирәләй йөрөп, керер тишек, асыҡ урын эҙләй. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм сәхәбәләр был ваҡытта Хәндәктә дошман менән һуғыш алып бара.

Хәҙрәти Сафия раҙыйаллаһу ғәнһә, сараһыҙ ҡалып, әлеге ҡаза-ауырлыҡты кисеүҙә үҙенән башҡа уға һис кем булыша алмағанын күргәс, башын йоҡа батист яулыҡ менән ҡыҫып бәйләп, ҡулына бер таяҡ алып, һарайҙан аҫҡа төшә. Ишекте асып, һиҙҙермәй генә, шул тирәлә йөрөгән йәһүдиҙең артынан килә лә, ҡулындағы таяғы менән һуғып, уны үлтерә. Иптәштәренең үлгәнлеген күргән йәһүдиҙәрҙең эсенә ҡурҡыу керә: «Беҙгә бындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙы һаҡлап тороусы юҡ, тигәндәр ине бит!» – тип таралышалар (Хәйсәми, VI, 133-134; Ваҡыди, II, 462).

Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә әсәбеҙ ҙә сәхәбәләрҙең йыһатҡа ынтылышын раҫлап, түбәндәге хәтирәләрен тапшыра:

«Хәндәк һуғышы көндө кешеләр артынан киттем. Артымдан бер тауыш ишетелде. Боролоп ҡарағас, Сәғед ибн Мөғәҙ менән уның бер туғанының улы Хәрисә ибне Әүесте күрҙем. Баҫҡан еремдә сүгәләнем. Сәғед тар көбә кейгән, ҡулдары шул көбәнән сығып тора ине. Йыһатҡа ҡатнашыуға өндәгән һәм әжәл килгәндә үлемдең ни ҡәҙәр күркәм икәнлеге тураһында шиғыр һөйләй ине. Әсәһе уға: «Улыҡайым! Йүгер, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде ҡыуып тот! Һуңланың, валлаһи!» – ти ине.

Сәғедтең әсәһенә: «Сәғедтең көбәһе бөтә кәүҙәһен, хатта бармаҡтарына хәтле ҡаплаһын ине», – тинем. Уның асыҡ ҡалған ҡулдарына уҡ тейә алыуына борсолдом.

Сәғедтең әсәһе: «Аллаһ үҙ хөкөмөн башҡарыр!» – тине. Сәғед ул көндө яраланды» (Әхмәт, VI, 141; Ибне Һишам, III, 244).

Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһү, йәрәхәтенең ауырлығын, үлем яраһы икәнлеген аңлағас: «Аллаһым! Әгәр ҡөрәйеш мөшриктәре менән тағын берәй бәрелеш яҙған булһаң, мине лә шул һуғышта ҡатнашыр өсөн һау-иҫән ҡалдыр! Сөнки Рәсүләңә яманлыҡ һәм йәбер-золом һалған, уны алдаған һәм йәшәгән иленән ҡыуған ул ҡөрәйеш ҡәүеме менән һуғышыу теләгем башҡа бөтә ҡәүемдәр менән һуғышыу теләгенән ҡеүәтлерәк. Әгәр беҙҙең менән улар араһындағы бәрелештәр ошоноң менән бөтә икән, ярамды шәһитлеккә сәбәп ит! Мине үҙ хозурыңа ирешергә бойор! Ҡурайҙа улдарының язаға тартылғанын күреп һөйөнмәйенсә, йәнемде алма!» – тип доғала ялбара (Ваҡыди, II, 525; Ибне Сәғд, III, 423).

Сәғед разыйаллаһу ғәнһү доғаһын бөтөрөргә өлгөрмәй, ҡаны туҡтай, бер тамсы ҡаны ла аҡмай.[200]

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сәғед разыйаллаһу ғәнһү өсөн мәсеттә бер сатыр ҡорҙора. Шул рәүешле Ул уның хәлен йышыраҡ белеп, аралашып торорға ниәтләй.[201]

❀

Тәрән канауҙарҙы бары бер нисә мөшрик кенә үтә ала. Шуларҙың береһе – Ғәмр ибн Ғәбдүәдди бөтә Ғәрәбстан төбәгенең иң атаклы бәһлеүәндәренән һанала. Уның ҡаршына хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү сыға һәм, Аллаһ рөхсәте менән, уны үлтерә. Башҡаларҙы ла шундай уҡ яҙмыш көтә.

Һуғыш оҙаҡҡа һуҙыла. Мөьминдәр шундай ауыр хәлдә ҡала ки, илаһи ярҙам ҡасан килә инде, тип көтә башлайҙар. Был хәлде Аллаһ Тәғәлә аяти кәримәләрҙә түбәндәгесә тасуирлай:

إِذْ جَاؤُوكُمْ مِّنْ فَوْقِكُمْ وَمِنْ أَسْفَلَ مِنْكُمْ وَإِذْ زَاغَتْ الْأَبْصَارُ وَبَلَغَتِ الْقُلُوبُ الْحَنَاجِرَ وَتَظُنُّونَ بِاللهِ الظُّنُونَا. هُنَالِكَ ابْتُلِيَ الْمُؤْمِنُونَ وَزُلْزِلُوا زِلْزَالًا شَدِيدًا.

**«Улар юғары тарафығыҙҙан да, түбәндән дә** (үҙәнлектең өҫкө яғынан да, аҫҡы яғынан да) **өҫтөгөҙгә һөжүм иткән сағында, күҙҙәр йүгерешкән, йөрәктәр ҡурҡыуҙан боғаҙға килгән һәм һеҙ Аллаһ тураһында төрлө уйҙарға сумған ваҡытта, бына шунда иман эйәләре һынауҙан уҙҙырылды һәм ҡеүәтле тетрәнеү кисереүгә мәжбүр ителде.**

وَإِذْ يَقُولُ الْمُنَافِقُونَ وَالَّذِينَ فِى قُلُوبِهِمْ مَّرَضٌ مَّا وَعَدَنَا اللهُ وَرَسُولُهُ إِلَّا غُرُورًا. وَإِذْ قَالَتْ طَّائِفَةٌ مِّنْهُمْ يَا أَهْلَ يَثْرِبَ لَا مُقَامَ لَكُمْ فَارْجِعُوا وَيَسْتَأْذِنُ فَرِيقٌ مِّنْهُمُ النَّبِيَّ يَقُولُونَ إِنَّ بُيُوتَنَا عَوْرَةٌ وَمَا هِيَ بِعَوْرَةٍ إِنْ يُرِيدُونَ إِلَّا فِرَارًا. وَلَوْ دُخِلَتْ عَلَيْهِمْ مِّنْ أَقْطَارِهَا ثُمَّ سُئِلُوا الْفِتْنَةَ لَآتَوْهَا وَمَا تَلَبَّثُوا بِهَا إِلَّا يَسِيرًا. وَلَقَدْ كَانُوا عَاهَدُوا اللهَ مِنْ قَبْلُ لَا يُوَلُّونَ الْأَدْبَارَ وَكَانَ عَهْدُ اللهِ مَسْؤُولًا. قُلْ لَّنْ يَنْفَعَكُمُ الْفِرَارُ إِنْ فَرَرْتُمْ مِّنَ الْمَوْتِ أَوِ الْقَتْلِ

200. Тирмизи, «Сийяр», 29/1582; Әхмәт, III, 350.
201. Бохари, «Магази», 30.

**Ул ваҡытта монафиҡтар менән йөрәктәрендә ауырыу булғандар: «Әллә Аллаһ һәм Уның Рәсүле беҙгә ҡоро вәғәҙә генә биргәндәр инде!» – тиҙәр ине. Уларҙан бер төркөм әйтте: «Эй йәсриблеләр** (мәҙинәлеләр)**! Инде ҡаршы торор өсөн һеҙҙең сират түгел, барығыҙ ҡайтығыҙ!» Аранан бер төркөмө иһә: «Ысындан да, йорттарыбыҙ именлектә түгел!» – тип, Пәйғәмбәрҙән китер өсөн рөхсәт һорай ине. Юғиһә, өйҙәренә ҡурҡыныс янамай, бары ҡасып китергә генә теләйҙәр ине. Әгәр фетнә ҡуптарырға** (диндән йөҙ сөйөрөргә) **ҡушылһа, быны шунда уҡ эшләрҙәр ине. Тәхҡиҡ, әүәлерәк улар арттарын бороп ҡасмаясаҡтары тураһында Аллаһҡа һүҙ биргәндәр ине. Аллаһҡа бирелгән һүҙ өсөн яуаплылыҡ тейеш!** (Рәсүлем!) **Әйт: «Әгәр үлемдән йәки үлтерелеүҙән ҡасаһығыҙ икән, ҡасып китеүҙең һеҙгә һис файҙаһы булмаҫ!..»** («әл-Әхзәб», 10-16).

وَلَمَّا رَأَى الْمُؤْمِنُونَ الْأَحْزَابَ قَالُوا هَذَا مَا وَعَدَنَا اللهُ وَرَسُولُهُ
وَصَدَقَ اللهُ وَرَسُولُهُ وَمَا زَادَهُمْ إِلَّا إِيمَانًا وَتَسْلِيمًا

**«Мөьминдәр иһә, дошман отрядтарын күргәс; «Бына Аллаһ һәм Уның Рәсүле беҙгә вәғәҙә иткән нәмә! Аллаһ һәм Рәсүле дөрөҫ әйткән!» – тиҙәр. Был** (ғәскәрҙәрҙең килеүе) **уларҙың имандарын һәм Аллаһҡа буйһонғанлыҡтарын, тоғролоҡтарын арттырҙы ғына»** («әл-Әхзәб», 22).

**Һуғыш – хәйлә ул**

Шулай итеп, мөьминдәр бар көстәренә һуғыша. Ғәтәфән ҡәбиләһенең күренекле кешеләренең береһе, мосолманлыҡ ҡабул итеп тә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең *«Һуғыш – хәйлә ул»,* тәғлимәте нигеҙендә (Бохари, «Йыһат», 157; Мөслим, «Йыһат», 17) үҙенең динен йәшергән Нөғәйм раҙыйаллаһу ғәнһү мөшриктәр менән Бану Ҡурайҙа ҡәүеменең мөнәсәбәттәрен боҙоуға ирешә. Мәҙинәне солғанышта тотҡан ҡәбиләләр һүҙгә килә, ыҙғыша, һәр ҡайһыһы бер-береһенән шикләнә башлай. Ахырҙа йәһүдиҙәр, Нөғәймдең хәйләһенә бирелеп, үҙ ҡәлғәләренә сигенә. Һуғыш ҡырында мосолманға ҡаршы дошман булып, мөшриктәр генә ҡала. Ләкин мөьминдәр барыбер ҙә шаҡтай ситен, мөшкөл хәлдә була. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һәм сәхәбәләр мөшриктәр солғанышы аҫтында ауыр һынау уҙған һәм йөрәктәр ҡурҡыуҙан ысын-ысынлап боғаҙға килгән был ваҡытта, түбәндәге аяти кәримә индерелә:

أَمْ حَسِبْتُمْ أَنْ تَدْخُلُوا الْجَنَّةَ وَلَمَّا يَأْتِكُمْ مَثَلُ الَّذِينَ خَلَوْا مِنْ
قَبْلِكُمْ مَسَّتْهُمُ الْبَأْسَاءُ وَالضَّرَّاءُ وَزُلْزِلُوا حَتَّى يَقُولَ الرَّسُولُ
وَالَّذِينَ آمَنُوا مَعَهُ مَتَى نَصْرُ اللهِ أَلَا إِنَّ نَصْرَ اللهِ قَرِيبٌ.

**«Юҡһа, һеҙ үҙегеҙҙән әүәл килеп киткәндәрҙең һынауҙарын** (улар кисергән ҡыйынлыҡтарҙы) **уҙмай ғына йәннәткә керәсәкбеҙ, тип уйлайығыҙ? Уларға шундай фәкирлектәр, шундай ауырлыҡтар эләкте, шундай тетрәнеүҙәр кисерҙеләр ки, хатта Пәйғәмбәр һәм Уның менән бергә иман килтереүселәр ҙә: «Аллаһ ярҙамы ҡасан була?» – тиәләр ине. Бына ҡара! Ысынлыҡта, Аллаһтың ярҙамы яҡында»** («әл-Бәҡара», 214).[202]

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡулдарын юғары күтәреп, былай тип ялбара:

*«Йә Раббым! Йә Олуғ хөрмәтле Ҡөрьәнде ебәреүсе Аллаһым! Йә дошмандар менән хисапты тиҙ ҡылыусы Раббым! Һин Мәҙинә ҡаршында йыйылған был ғәрәп ҡәбиләләрен тарат! Аллаһым! Уларҙың йәмғиәттәрен емер, теләк-ихтыярҙарын йомшарт, тетрәндер, баҫҡан ерҙәрендә тора алмаһындар!»* (Бохари, «Мағази», 29).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был доғаһын тамамларға ла өлгөрмәй, Уның мөбәрәк йөҙөн яҡты йылмайыу менән биҙәп һөйөндөргән илаһи ярҙам килеп ирешә. Ҡеүәтле һәм киҫкен дауыл дошман сафтарына таба иҫә башлай. Ҡаршына ни тура килһә, шуны күтәреп осорған шаҡ ҡатҡыс өйөрмә Мәҙинә үҙәнлегенең туҙанын-тупрағын мөшриктәрҙең биттәренә һылай, күҙҙәренә тултыра. Сатырҙарын емереп осора. Ризыҡ ҡаҙандарын әйләндереп ҡаплай, усаҡтарын һүндерә. Йөк дөйәләре һәм ғәскәри аттары бер-береһе менән боталып бөтә.[203]

Әлеге күк афәте һәм илаһи ғазап өҫтәренә ишелеп төшкән мөшриктәр аптырап ҡала. Һуғышҡа иң хирес, иң ынтылған Әбү Суфьян да хатта сараһыҙлыҡ тойоп, ғәскәрҙәренә: «Мин кире боролам. Һеҙ ҙә юлға ҡуҙғалығыҙ!» – тип мөрәжәғәт итә лә, дөйәһенә ултырып, Мәккәгә таба юл тота.[204]

Йәнәбел-Хаҡ иман килтереүселәргә ана шулай үҙ ярҙамын ебәрә.

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا اذْكُرُوا نِعْمَةَ اللّٰهِ عَلَيْكُمْ إِذْ جَاءَتْكُمْ جُنُودٌ فَأَرْسَلْنَا
عَلَيْهِمْ رِيحًا وَجُنُودًا لَّمْ تَرَوْهَا وَكَانَ اللّٰهُ بِمَا تَعْمَلُونَ بَصِيرًا.

**«Эй иман килтереүселәр! Аллаһтың һеҙгә биргән ниғмәтен иҫкә төшөрөгөҙ: һеҙгә ғәскәрҙәр һөжүм иткән ине лә беҙ уларға ҡаршы ел һәм һеҙ күрмәгән ғәскәрҙәр ебәргән инек. Аллаһ ни эшләгәнегеҙҙе бик яҡшы күрә ине»** («әл-Әхзәб», 9).

202. Ҡарағыҙ: Табәри, «Тәфсир», II, 464.
203. Ҡарағыҙ: Ибне Сәғд, II, 71.
204. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, III, 251.

وَرَدَّ اللّٰهُ الَّذِينَ كَفَرُوا بِغَيْظِهِمْ لَمْ يَنَالُوا خَيْرًا
وَكَفَى اللّٰهُ الْمُؤْمِنِينَ الْقِتَالَ وَكَانَ اللّٰهُ قَوِيًّا عَزِيزًا.

**«Аллаһ ул инҡар итеүселәрҙе, һис бер файҙа ала алмай, асыу-нәфрәттәре менән кире боролорға мәжбүр итте. Һуғышта Аллаһ** (ярҙамы) **мөьминдәргә етерлек булды. Аллаһ – көслө, һәр ваҡыт еңеүселер»** («әл-Әхзәб», 25), – тиелә аяти кәримәләрҙә.

Бисара, аптырашҡан хәлдә ҡасҡан мөшриктәр үҙҙәренән һуң шаҡтай күп ат-дөйә, һуғыш кәрәк-яраҡтары, ризыҡ һәм әйберҙәр ҡалдырып китә. Шулар бәрәбәренә Мәҙинәләге ҡытлыҡ та хәл ителә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әлеге илаһи рәхмәт һәм олуғ еңеүҙән һуң сәхәбәләренә:

*«Хәҙер инде һеҙҙең сират! Бынан һуң ҡөрәйеш һеҙгә яу менән килә алмаç!»* – тип мөрәжәғәт итә (Бохари, «Магази», 29).

Шулай итеп, Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙер уларҙың һаҡланыуҙан сығып, һөжүмгә лә күсә алғанын белдерә. Сөнки мөшриктәрҙең дәрт-дарманы ла һүндерелә, атакаға барырлыҡ ҡеүәттәре лә тамам бөтөрөлә. Инде барлыҡ мөьмин йәндәрҙә Аллаһ Рәсүленең ана шул хаҡиҡәтте белдергән һүҙҙәре яңғырай:

*«Бынан һуң беҙ уларға яу менән барасаҡбыҙ!»*

### Бану Ҡурайҙа һуғышы

(Һижри 5-се йылдың 23 зөлҡәғиҙәһе / 627 йылдың 15 апреле)

Хәндәк һуғышында еңеү яулана, ә дошман, хәсрәткә сумып, Мәккәгә ҡайтып китә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә сәғәҙәт йортона ҡайтып, ғәҙәтенсә көбәһен һала һәм йыуына, шул ваҡыт Ябраил ғәләйһиссәләм килеп инә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә: «Ҡоралыңды ташланыңмы? Беҙ әле ҡулдан төшөрмәнек!» – ти.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Улайһа, беҙҙе сәфәр көтә тигән һүҙ. Ҡайҙа?»* – тип һорай.

Ябраил ғәләйһиссәләм иһә һуғыш ваҡытында хыянат иткән Бану Ҡурайҙа яғына ишаралап:

«Ана, тегендә!» – ти (Бохари, «Магази», 30).

Сөнки әүәлге йәһүдиҙәр кеүек Бану Ҡурайҙа вәкилдәре лә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән төҙөгән килешеү-солох антын үтәмәйҙәр, иң ҡыйын саҡта вәғәҙәгә хыянат итәләр. Бирелгән анттары шартынса, улар Мәҙинәгә һөжүм иткән мөшриктәргә ҡаршы һаҡланыу һуғышында ҡатнашырға

тейеш була. Ләкин, киреһенсә, форсат сығыуға, уларҙың ҡылмаған насарлығы, боҙмаған анты ҡалмай, шул рәүешле үҙ ҡулдары менән үҙҙәрен һәләкәткә өҫтөрәйҙәр.

Илаһи әмер алған хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кисекмәҫтән, мөьминдәрҙе йыйып, Бану Ҡурайҙаға яу менән сыға. Хатта:

*«Ишетеүсе һәм итәғәт итеүсе һәр кем, Бану Ҡурайҙа еренә бармайса тороп, икенде намаҙын уҡымаһын!»* – тип бойороп, йәһүдиҙәр иҫ-аңдарын йыйғансы, яуға ҡуҙғала (Бохари, «Магази», 30).

Хәҙрәти Ғәли етәкселегендәге авангард һуғышсыларҙы күргәс, йәһүдиҙәр, ҡылған ғәмәлдәренә үкенәһе урынға, киреһенсә, ярһып-нәфрәтләнеп, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тураһында йәмһеҙ-йәмһеҙ һүҙҙәр һөйләргә керешәләр.[205] Ләкин күп тә үтмәй, шәхсән Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм командалығындағы өс мең кешелек ислам ғәскәрен ҡаршыларында күргәс, ысын-ысынлап телдәре көрмәкләнә. Аллаһ Рәсүленең ғәйрәтле килеш-килбәтенән ҡурҡып, әйткән һүҙҙәрен кире ҡағалар.

Үсәйд ибн Хөдәйр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Эй Аллаһ дошмандары! Һеҙ аслыҡтан үлгәнсе, ҡалағыҙҙы солғаныштта тотасаҡбыҙ. Һеҙ хәҙер ояһына ҡыҫрыҡланған төлкө кеүек!» – ти. Бәни Ҡурайҙа йәһүдиҙәре, ҡурҡа-ҡурҡа яуап бирә: «Эй Ибн Хөдәйр! Беҙ хәзрәжлеләр яҡлы түгел, һеҙ, әүслеләр яғында!». Үсәйд раҙыйаллаһу ғәнһү: «Инде һеҙҙең менән ике арала килешеү ҙә, ант та юҡ!» – тип белдерә (Ваҡыди, II, 499).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йәһүдиҙәр менән һуғышҡансы, ҡәлғәләрҙең иң ситенә ҡәҙәр килеп, уларҙы исламға керергә саҡыра. Ләкин был тәкдимде ҡабул итмәйҙәр.[206]

Ҡамалыш оҙаҡҡа китеп, йәһүдиҙәр шаҡтай ҡыйын хәлдә ҡалғас, уларҙың башлыҡтарынан Кәғб ибн Әсәд: «Йәһүди йәмәғәте! Ошо үҙегеҙ күргән фәлакәт (катастрофа) башыбыҙға төштө. Мин һеҙгә өс юл тәкдим итәм, ҡайһыһын теләһәгеҙ, шуныһын эшләгеҙ!» – ти.

«Ниндәйҙәр улар?» – тип һорайҙар унан.

Кәғб: «Беренсеһе – был әҙәмгә буйһонабыҙ, Пәйғәмбәрлеген танылйбыҙ! Валлаһи, был хаҡиҡәт анык рәүештә раҫланды: Ул – һеҙҙең өсөн ебәрелгән бер Пәйғәмбәр, китабығыҙҙа сифаттары яҙылған зат. Үҙенә иман килтерһәгеҙ, ҡанығыҙҙы, малығыҙҙы, балаларығыҙҙы һәм ҡатындарығыҙҙы һаҡлап ҡалырһығыҙ!» – ти.

«Беҙ бер ҡасан да Тәүрат хөкөмөнән сыҡмаясаҡбыҙ. Уны башҡа китапҡа ла алыштырмаясаҡбыҙ!» – ти йәһүдиҙәр.

205. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 499.
206. Ҡарағыҙ: Ғабдүррәззаҡ, V, 216, 370.

Шунан һуң Кәғб, балаларҙы һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы үлтереп, һуғышҡа керергә йәки шәмбе төнөндә, йәғни мосолмандар атака көтмәгән бер миҙгелдә һөжүм яһарға тәҡдим итә. Быларҙың береһен дә ҡабул итмәйҙәр,[207] сөнки Аллаһ йөрәктәренә ҡурҡыу кертә.

Сағләбә, Үсәйд һәм Әсәд исемле өс егет йәһүҙи ғалимдар, һуңғы Пәйғәмбәр тураһында һөйләгән үҙенсәлектәрҙең Аллаһ Рәсүлендә булғанын күреп, мосолманлыҡ ҡабул итә. Улар, төндә ҡалғанән төшөп, Әфәндебеҙ янына килә.[208]

Йәһүдиҙәр ул көндө шартһыҙ-ниһеҙ бирелергә мәжбүр була. Бану Ҡурайҙа йәһүдиҙәре әүс ҡәбиләһенең химаяһында йәшәгәнгә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ул ҡәбиләнең хөрмәтле кешеһе булған хәҙрәти Сәғедте хөкөм ҡылыу өсөн саҡыра. Хәҙрәти Сәғед, һуғышта яраланыуына ҡарамаҫтан, Пәйғәмбәрҙең әмеренә буйһоноп, саҡырған ергә бик теләп килә. Сөнки яуҙа яраланған саҡта ул Йәнәбел-Хаҡҡа: «Йә Раббы! Бану Ҡурайҙанан үс алмайса, йәнемде алып китмә!» – тип ялбарған була. Хәҙрәти Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһү, йәһүдиҙәр теләге менән, уларҙы Муса ғәләйһиссәләм шәриғәте ҡушҡанса хөкөм итә.[209] Ул сығарған хөкөмдө Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дә раҫлай һәм:

*«Эй Сәғед! Ант итәм, һин Аллаһтың ете ҡат күге өҫтөндәге хөкөмөнә тура килерлек итеп хөкөм ҡылдың!»* – тип белдерә (Бохари, «Магази», 30; Ибне Сәғд, III, 426).

Хәҙрәти Сәғедтең ысын күңелдән ҡылған доғаһы ҡабул була һәм һуғышта мөьминдәргә арттан хәнйәр ҡаҙаған хаин йәһүдиҙәргә ҡарата хөкөмөн белдергәс, яраһы асыла. Пәйғәмбәрҙе ихлас һөйгән әлеге сәхәбә, бер аҙҙан, йәнен Аллаһ хөкөмөнә тапшырып, илаһи рәхмәткә ирешеп, шәһит китә.[210]

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Сәғед ибн Мөғәҙҙең вафаты сәбәпле Рахмандың ғәрше тетрәнде»,* – тип әйтә (Бохари, «Мәнаҡибул-Ансар», 12; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 125).

Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһү ҙур кәүҙәле булһа ла, йыназала жәсәден күтәреп барған кешеләр уның бик еңел икәнен тоялар. Аллаһ Рәсүле быны хикмәтен былай тип аңлата:

*«Уны башҡалар күтәреп бара! Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотҡан Аллаһ менән ант итәм, фәрештәләр Сәғедтең йәне менән һөйөнөскә тейенделәр!»* (Ибне Һишам, III, 271; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 50/3848).

207. Ибне Һишам, III, 254.
208. Ибне Һишам, III, 256.
209. Тәүрат хөкөмөнә ярашлы рәүештә, былай ғәмәл ҡылыусыларҙың язаһы ҡулына ҡорал тотҡан ир-аттарҙың үлтерелеүен, малдарының тартып алыныуын һәм ҡатын-ҡыҙҙарын, балаларын әсир итеп алыныуҙы күҙҙә тота (Ҡарағыҙ: «Гаһди Гатик», Тәнсиә, 20/10-15)
210. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, III, 271.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, Сәғед раҙыйаллаһу ғәнһүҙең йыназа намаҙын ҡылдырғас, уны ҡәберенә ҡуйып, өҫтөн тупраҡ менән ҡаплағандан һуң, шаҡтай оҙаҡ тәсбих әйтә. Әсхәбе кирам да Аллаһ Рәсүленә эйәреп, тәсбих ҡыла. Артабан Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм тәкбир әйтә. Сәхәбәләр тәкбиргә лә эйәрә. Һуңынан сәхәбәләр: «Йә Рәсүлүллаһ! Ниңә тәсбих һәм тәкбир әйттегеҙ?» – тип ҡыҙыҡһыналар. Аллаһ Рәсүле:

*«Аллаһ уға иркенлек, киңлек биргәнсе, кәбер был изге колдо кыҫты ла кыҫты»,* – тип асыҡлай (Әхмәт, III, 360). Шунан һүҙҙәрен дауам итә:

*«Әгәр берәү ҡәбер фетнәһенән котола алһа, шөбһәһеҙ, Сәғед котолор ине. Ләкин уны ҡәбер башта кыҫты, һуңынан иһә Аллаһ уға иркенлек насип кылды»* (Табәрани, *«Мугжәмул-Кәбир»,* X, 334).

Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡиммәтле ебәктән тегелгән бер жөббә (елән) бүләк иткәндәр ине. Был кейем кешеләргә бик оҡшаны, уның матурлығына һәм йомшаҡлығына шаҡ ҡаттылар. Аллаһ Рәсүле:

*«Мөхәммәттең нәфесе ҡөҙрәтле ҡулында булған Зат менән ант итәм, Сәғед ибн Мөғәҙҙең йәннәттәге яулыҡтары бынан матурыраҡ һәм хәйерлерәк»*, – тип әйтте» (Бохари, «Бәдғул-Халҡ», 8; Мөслим, «Фәзаил», 126).

❁

Хәндәк һуғышында илаһи рәхмәт менән насип ителгән уңышты Ҡөрьәни-Кәрим былай һүрәтләй:

وَأَنْزَلَ الَّذِينَ ظَاهَرُوهُمْ مِّنْ أَهْلِ الْكِتَابِ مِنْ صَيَاصِيهِمْ وَقَذَفَ فِى قُلُوبِهِمُ الرُّعْبَ فَرِيقًا تَقْتُلُونَ وَتَأْسِرُونَ فَرِيقًا. وَأَوْرَثَكُمْ أَرْضَهُمْ وَدِيَارَهُمْ وَأَمْوَالَهُمْ وَأَرْضًا لَّمْ تَطَؤُوهَا وَكَانَ اللهُ عَلَى كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرًا.

**«Аллаһ китап әһелдәренең уларға** (мөшрик ғәскәрҙәренә) **булышыусыларҙы кәлғәләренән сығарҙы һәм йөрәктәренә ҡурҡыу һалды. Бер өлөшөн үлтерҙегеҙ, бер өлөшөн иһә әсир итеп алдығыҙ.** (Шул рәүешле) **Аллаһ уларҙың ерҙәренә, йорттарына, мөлкәттәренә һәм үҙегеҙ аяҡ баҫмаған тупраҡтарға һеҙҙе вариҫ итеп ҡуйҙы. Аллаһтың һәр нәмәгә ҡеүәте етер!»** («әл-Әхзәб», 26-27).

# ҺИЖРӘТТЕҢ АЛТЫНСЫ ЙЫЛЫ

**Хөдәйбиә килешеүе – еңеүҙәр аскысы. Ҡәғбә сағышы менән башланған сәфәр**

Бер төш күргәндән һуң, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мосолмандарҙы сәфәр сығырға – Ҡәғбәне зыярат һәм тауаф ҡылырға саҡыра.[211] Әлеге саҡырыуға буйһонған мең дүрт йөҙ[212] сәхәбәһе менән бергә Ул һижрәттең алтынсы йылында, зөлҡәғизә айының беренсе дүшәмбеһендә Мәккәгә табан юлға ҡуҙғала. Һуғышҡа тип сыҡмағанға күрә, үҙҙәре менән бары юлсы ҡоралы ғына алалар. Етмешләп ҡорбанлыҡ дөйә лә алып баралар.[213]

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Әбү Суфьяндың һәм уның кешеләренең беҙгә һөжүм итеүҙәренән шикләнмәйһеңме? Кәрәге сыға ҡалһа, һуғышыу өсөн үҙебеҙ менән ҡоралдарыбыҙҙы ла алмайыҡмы?» – тип һорай.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Белмәйем! Мин ғөмрә ҡылырға ниәтләгәнмен икән, ҡорал йөрөтөргә теләмәйем!»* – тип әйтә (Ваҡыди, II, 573).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, миҡат урыны булған «Зүлхуләйфә»гә еткәс, ихрамға кереп, ғөмрә ҡылырға ниәтләй. Әсхәбе кирам да шуны уҡ ҡабатлай. Ҡысҡырып тәлбиә әйтә башлайҙар. Йөрәктәр тиҙҙән Олуғ Ҡәғбә менән күрешеү һағышы менән яна. Рухи дәрт һәм ынтылыш мөьминдәрҙе аҙым-аҙым шунда яҡынайта. Ләкин мосолмандарҙың Мәккәгә табан юлға сығыуы тураһында ишеткән ҡөрәйешләр бик ныҡ борсола, асыуҙан ҡыҙа. Үҙ-ара йыйылып, мөьминдәрҙе Мәккәгә индермәҫкә ҡарар ҡабул итәләр. Халид ибне Вәлид һәм Икримә етәкселегендә бик ашығыс әҙерләнгән ике йөҙ кешелек ғәскәр отряды юлға ҡуҙғала.

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сәниййә үҙәнлегенә килеп етә. Унан ҡөрәйешлеләр йәшәгән ергә табан төшөргә мөмкин була. Әммә Әфәндебеҙҙең дөйәһе Касва шунда сүгәләй. Бәндәләр: «Тор, тор, атла, атла!» – тип ҡыуһалар ҙа, дөйә аяғына баҫырға йыйынмай. Был юлы инде кешеләр:

211. Ваҡыди, II, 572.
212. Ибне Сәғд, II, 95. Һуңынан был һандың юлда ваҡытта бәҙәүи ғәрәптәр килеп ҡушылыу хисабына артыуы, мең биш йөҙ, хатта мең ете йөҙгә тиклем етеүе риүәйәт ҡылына.
213. Ибне Сәғд, II, 95.

«Касва киреләнеп, ултырып ҡалды. Касва ултырып ҡалды!» – ти. Быға яуап итеп, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Юҡ! Касва ултырып ҡалманы. Уның улай эшләй торған ғәҙәте юҡ. Тик уны ҡасандыр филде (Мәккәгә кереүҙән тыйып ҡалған) Зат (йәғни Йәнәбел-Хаҡ) туҡтатты!»* – тип асыҡлай.

Артабан Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һүҙҙәрен былай дауам итә:

*«Йәнемде ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы ул Зат менән ант итәм, Аллаһ үҙенең Харамында (һуғышыу, ҡан түгеү һәм туғанлыҡ хаҡтарын һаҡламау кеүек) ҡылыуҙы тыйған нәмәләргә хөрмәт күрһәтеү маҡсаты менән, ҡөрәйеш мөшриктәре Миңә ни ҡәҙәр ауыр талаптар ҡуйһалар ҡуйһындар, (солох өсөн) һис шикһеҙ, уларҙы ҡабул итәсәкмен!»*

Шунан һуң дөйәгә баҫырға ҡуша, Касва һикереп тора. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йүнәлешен ҡөрәйештәрҙән башҡа тарафҡа бора һәм әҙ һыулы бер ҡойо янына төшә. Хөдәйбиә тип аталған ерҙең иң йыраҡ нөктәһе була ул. Ҡойоноң һыуы әҙ. Оҙаҡ та үтмәй был һыу ҙа ҡорой. Аллаһ Рәсүленә һыуһыҙлыҡтан зарланалар. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һаҙағынан бер уҡ сығара ла уны ҡойо төбөнә атырға ҡуша. Бер аҙҙан, Аллаһ рәхмәте менән, һыу һиптерә башлай һәм, сәхәбәләр был ерҙән киткәнсе, ағып тороуҙан туҡтамай.

Улар ошо хәлдә ваҡытта Хөзәғә ҡәбиләһе башлығы Будәйл ҡәбиләһенән бер төркөм кеше менән килеп сыға. Ул мәккәлеләрҙең тынысһыҙланыуы һәм һуғышҡа әҙерләнеүе тураһында һөйләй. Уларҙың был борсолоуына яуап итеп, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Будәйлгә үҙенең килеү маҡсатын аңлата:

*«Беҙ берәү менән дә һуғышырға килмәнек. Маҡсатыбыҙ – Бәйтуллаһты зыярат ҡылыу, ғөмрә хажы. Һуғыш ҡөрәйеште йонсотто, уларға бик ҙур зарар килтерҙе. Теләһәләр (ике арабыҙҙағы һуғышты бөтөрөү өсөн) улар менән билдәле бер срокҡа килешеү төҙөйөк. Был осраҡта улар минең менән кешеләр араһына кереүҙән тыйылыр. Әгәр мин бүтән кешеләрҙе яулап алһам, теләһәләр, кешеләр кергән исламға ҡөрәйешлеләр ҙә керер. Әгәр мин еңеүсе була алмаһам (ҡөрәйешлеләр минең менән һуғышыу ауырлығынан ҡотолоп), тыныслыҡҡа ирешерҙәр. Әгәр ҡөрәйеш был тәҡдимде ҡабул итмәһә, валлаһи, мин был дин өсөн башым кәүҙәнән айырылғансы һуғышасаҡмын. Һис шикһеҙ, Аллаһ вәғәҙәһен үтәйәсәк».*

Будәйл Мәккәгә ҡайта һәм Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең был һүҙҙәрен ҡөрәйешкә тапшыра. Шунан һуң Ғөрүә ибн Мәсғуд тороп баҫып: «Ул кеше һеҙгә хәйерле нәмәне һәм изгелек юлын күрһәтә. Уны ҡабул итегеҙ һәм мине, килешеү төҙөр өсөн, Уның янына ебәрегеҙ!» – ти.

Ҡөрәйешлеләр: «Яҡшы, бар!» – тип ризалыҡ бирә. Ғөрүә Аллаһ Рәсүле янына килә. Әфәндебеҙ ғәләйһис-салаәту үәс-сәләәм уға ла Будәйлгә әйткәндәргә

яҡын һүҙҙәрҙе ҡабатлай. Ғөрүә был ваҡытта күҙ сите менән Рәсүлүллаһтың сәхәбәләрен ентекләп күҙәтә. Ҡайтҡас, күргәндәрен ҡөрәйешлеләргә һөйләп бирә: «Эй ҡәүемем, яҡшылап тыңлағыҙ! Валлаһи, мин бик күп король ҡаршыһына илсе булараҡ барҙым: Хөсрәү, Ҡайсәр, Нәжәши янында булдым. Әммә мосолмандарҙың Мөхәммәткә ҡарата олуғ хөрмәтен һәм бәйлелеген һис бер милләттә күрмәнем… Берәй нәмә ҡушһа, барыһы ла тороп сабалар. Тәһәрәт алһа, Уның ҡалган һыуын алыу өсөн бер-береһе менән көрәшә башлайҙар. Мөхәммәт берәй нәмә һөйләһә, шундуҡ тауыштарын туҡтаталар. Уға ҡарата тойған ихтирам сәбәпле, йөҙөнә туранан текәлеп ҡарамайҙар, баштарын эйәләр. Уның башынан бер сәс бөртөгө төшһә, шундуҡ уны алып һаҡлайҙар. Был зат һеҙгә ҡулай бер тәҡдим яһай, уны ҡабул итегеҙ!»[214]

Ғөрүәнең был мөрәжәғәтенән һуң Кинанә улдары ҡәбиләһенән берәү: «Рөхсәт итегеҙ, Уға мин дә барып ҡарайым!» – ти. Рәсүлүллаһ сәлләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм Уның сәхәбәләренә яҡынайғас, Әфәндебеҙ:

*«Бына фәлән кеше килә! Ул – хаж һәм ғөмрә өсөн билдәләнгән ҡорбанлыҡ дөйәләргә хөрмәт менән ҡарай торған ҡәүемдән. Ҡорбанлыҡ малдарығыҙҙы ҡаршына сығарып ҡуйығыҙ, күрһен!»* – тип бойора. Сәхәбәләр ул бәндәне тәлбиәләр әйтеп ҡаршы ала. Ул кеше был манзараны күргәс, шаҡ ҡатып: «Быларға Бәйтуллаһҡа юлды бикләү – дөрөҫ булмаҫ!» – ти (Бохари, «Шурут», 15; Әхмәт, IV, 323-324).

Әмма мөшриктәр был илселәрҙе тыңламайынса, һөжүм итер өсөн бер отряд ебәрә. Әлеге отряд мосолмандар тарафынан әсир төшөрөлһә лә, Аллаһ Рәсүле сәлләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һуғышырға тип килмәүҙәре, бары ғөмрә ҡылып ҡайтып китәсәктәре аңлашылһын, тип, ҡулға алынған мөшриктәрҙе иреккә ебәрә.[215]

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сатыры Хөдәйбиәлә, Мәккә харамы территорияһына кермәгән ерҙә ҡоролған була. Ләкин Аллаһ Рәсүле сәлләллаһу ғәләйһи вә сәлләм бында йәшәп торган ваҡыт дауамында барлыҡ намаҙҙарын Мәккә харамы территорияһына кергән урынға барып уҡый.[216] Сөнки Мәсжиди Харамда уҡылған бер намаҙ башҡа ерҙәрҙә укылған йөҙ мең намаҙҙан фазиләтлерәк.[217]

### Бәйғәт әр-Ридуан – Аллаһ разыйлығын ҡаҙанған ант

Ул ваҡытта мөшриктәрҙән тағын бер нисә илсе килеп китә. Әммә береһе менән дә ант бирешеү һәм солох килешеүе өсөн аныҡ нәтижәгә килә алмағанға, был юлы Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәлләллаһу ғәләйһи үә сәлләм,

214. Көнбайыш әҙибе Томас Карлейль был хаҡиҡәтте раҫларға, танырға мәжбүр була: «Башында тaж торған бер император ҙа үҙ ҡулы менән ямаған елән кейгән хәҙрәти Мөхәммәт ҡәҙәр хөрмәт ителмәгән», – тип яҙа ул.
215. Мөслим, «Йыһат», 132, 133.
216. Ваҡыди, II, 614; Әхмәт, IV, 326.
217. Ҡарағыҙ: Ибне Мажә, «Икамә», 195.

мөшриктәр менән осрашып, мәсьәләне хәл итеү өсөн, Мәккәгә хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһүҙе ебәрә һәм уға:

*«Ҡөрәйешлеләр янына бар! Уларға беҙҙең бында һис кем менән һуғышырға килмәгәнлегебеҙҙе хәбәр ит! Беҙ бары ошо Бәйтуллаһты зыярат ҡылыу, уның харамлылығына хөрмәт һәм итәғәтебеҙҙе белдереү өсөн килдек. Үҙебеҙ менән алып килгән ҡорбанлыҡ дөйәләрҙе салып, ҡайтып китәсәкбеҙ! Шунан уларҙы исламға өндә!»* – тип бойора. Шул уҡ ваҡытта Мәккәләге ир-атмы, ҡатын-ҡыҙмы – барлыҡ мөьминдәр менән көрешергә, Мәккәнең яҡын арала яулап алынасағы тураһында һөйөнөслө хәбәр тапшырырға, Аллаһ Тәғәләнең үҙ диненә ярҙам итәсәге, Мәккәлә имандың иркенгә сығарыласаҡ көндөң яҡынлашҡаны тураһында әйтергә ҡуша (Ибне Сәғд, II, 97; Ибне Ҡаййум, III, 290).

Хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү, Рәсүлүллаһ ҡушҡанса, кисекмәҫтән эшкә керешеп, Мәккәгә юл тота. Үҙ ниәттәренең ғөмрә ҡылып ҡайтып китеүҙән ғибәрәт икәнлеген мөшриктәргә аңлатып бирә. Шуға ла ҡарамаҫтан, мөшриктәр йәнә рөхсәт итмәй. Хәҙрәти Ғосманды күҙ уңынан ысҡындырмайынса, үҙенә тәҡдим яһайҙар: «Теләһәң, һин тауаф ҡыла алаһың!..» Фәҡәт үҙен Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә бағышлаған мөбәрәк сәхәбә – хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү: «Хәҙрәти Пәйғәмбәр Ҡәғбәне тауаф ҡылмайынса, мин дә ҡыла алмайым! Мин Бәйтуллаһты бары Уның артынан ғына зыярат ҡыласаҡмын...» – тип, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә тоғролоғон белдерә (Әхмәт, IV, 324).

Әлеге һөйләшеүҙәр сәбәпле Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһүҙең кире ҡайтышы һуңарғас, уның тураһында «үлтерелгән икән», тип, имеш-мимеш тарала. Шунан һуң мосолмандар менән мөшриктәр араһында хәлдәр киҫкенләшә башлай. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Уның вәкиле булып киткән хәҙрәти Ғосмандың үлтерелеү ихтималы менән бәйле рәүештә, кисекмәҫтән сәхәбәләрен йыя ла:

*«Аңлашыла ки, мөшриктәр менән һуғышмайса, бынан китә алмаясаҡбыҙ!»* – тип белдерә (Ибне Һишам, III, 364).

Артабан Аллаһ юлында йәндәрен ҡорбан итергә әҙер булыуҙары тураһында бөтә сәхәбәләрҙең ант килтереүен һорай. Ир-ат булһынмы, ҡатын-ҡыҙмы – бөтә мөьминдәр: «Аллаһ Рәсүленең күңелендә ниндәй маҡсат булһа, шулар хаҡына ант итәм», – тигән һүҙҙәр менән Рәсүлүллаһтың әлеге теләген һөйөнә-һөйөнә үтәйҙәр (Ваҡыди, II, 603).

Мөьминдәр Аллаһ юлында үлгәнсе һуғышырға һүҙ бирә. Улар хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк ҡулдарын тотоп ант итә. Ант ахырында Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер ҡулы менән икенсеһен тотҡан килеш:

*«Ә быныһы – Ғосмандың анты!»* – тип, Ғосман разыйаллаһу ғәнһүгә ҡарата ышанысын һәм мөхәббәтен асыҡ бер рәүештә күрһәтә (Бохари, «Әсхәбүн-Нәби», 7).

Бер ағас аҫтында бирелгән был антты «Бәйғәт әр-Ридуан» йәки «Хөдәйбиә анты» тип атайҙар. Ул көндө бер монафиҡтан ҡала бөтә сәхәбәләр ҙә ант килтерә. Был ант әсхәбе кирам өсөн Йәнәбел-Хаҡтың олуғ ризалығын алырға бер этәргес, сәбәп була:

لَقَدْ رَضِيَ اللّٰهُ عَنِ الْمُؤْمِنِينَ إِذْ يُبَايِعُونَكَ تَحْتَ الشَّجَرَةِ فَعَلِمَ مَا فِى قُلُوبِهِمْ فَأَنْزَلَ السَّكِينَةَ عَلَيْهِمْ وَأَثَابَهُمْ فَتْحًا قَرِيبًا

**«Тәхҡиҡ, ул ағас аҫтында Һиңә ант килтергәндә, Аллаһ ул мөьминдәрҙән разый булды. Йөрәктәрендәге нәмәне белеп, уларға хозурлыҡ һәм именлек иңдерҙе...»** («әл-Фәтх», 18).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер ваҡыт хәҙрәти Хафса инәбеҙ янында:

*«Иншаллаһ, ағас аҫтында ант иткән Әсхәбе шәжәрәнән (Ағас сәхәбәләре) берәү ҙә йәһәннәмгә кермәйәсәк!»* – тип белдерә.

Был һүҙҙәрҙән һуң башына бер һорау килгән Хафса инәбеҙ: «Улайһа, йә Рәсүлүллаһ, Йәнәбел-Хаҡ ниңә:

وَإِنْ مِّنْكُمْ إِلَّا وَارِدُهَا كَانَ عَلَى رَبِّكَ حَتْمًا مَّقْضِيًّا.

**«Арағыҙҙан һис кемгә сығарма яһалмайынса, һис шикһеҙ, һәр кем йәһәннәмгә китәсәк...»** – тип әйтә («Мәрйәм», 71). Нисек улай була инде?» – тип ҡыҙыҡһына.

Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ Тәғәлә былай ҙа тип әйтте»,* – тип, шунан һуң килгән аятты уҡый:

ثُمَّ نُنَجِّى الَّذِينَ اتَّقَوا وَّنَذَرُ الظَّالِمِينَ فِيهَا جِثِيًّا.

**«Артабан тәҡүәлек эйәләрен ҡотҡарырбыҙ ҙа, залимдарҙы теҙләнгән хәлдә шунда ҡалдырырбыҙ»** («Мәрйәм», 72).

Шунан һуң ундағы «йәһәннәмгә китеү» ғибәрәһенең асылда сират күперенән уҙғанда йәһәннәм янынан үтеү икәнлеген, тамуҡ эсенә кереү мәғәнәһен белдермәүен аңлата (Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 163).

❀

Хәҙрәти Жабир раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Хөдәйбиә көнө кешеләр һыуһаны һәм Әфәндебеҙ янына килде. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм алдында тиренән яһалған бер һыу һауыты бар ине. Әфәндебеҙ тәһәрәт алды. Халыҡ уға таба тартылды. Шунан һуң Ул:

*«Ниндәй һорауығыҙ бар?»* – тип һораны.

«Тәһәрәт алыр һәм эсер өсөн Һеҙҙең алдығыҙҙағынан ҡала бүтән һыуыбыҙ ҡалманы», – тинеләр.

Аллаһ Рәсүле шундуҡ ҡулдарын һауытҡа тыҡты. Шул миҙгелдә бармаҡтары араһынан шишмә бәреп сыҡҡандай, ҡайнай-ҡайнай һыу аға башлай. Һәр беребеҙ унан һыуһыныбыҙҙы баҫтыҡ һәм тәһәрәт алдыҡ».

Хәҙрәти Жабирҙан: «Ул көндә нисә кеше инегеҙ?» – тип һорағас, ул: «Әгәр йөҙ мең кеше булһаҡ та һыу етәсәк ине, ләкин беҙ барлығы мең ярым кеше инек!» – тигән яуабын бирә (Бохари, «Мәнаҡиб», 25).

**Хөдәйбиә килешеүе – исламға өндәүҙең яңы этабы**

Йәнде фиҙа ҡылырға әҙер булыу шарты менән бирелгән Ридуан анты тураһында ишеткән мөшриктәр бик ҡурҡыу-борсоуға сума. Эштең шаҡтай етди төҫ алыуы йөрәктәренә бик ҡаты ҡурҡыу кертә. Шунда уҡ солох килешеүе тураһында ҡарар ҡабул итеп, Сүһәйел ибн Ғәмрҙе хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына ебәрәләр. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, Сүһәйелде күргәс, уның исеменең «еңеллек» мәғәнәһен белдереүен яҡшыға юрап:

*«Эшегеҙ инде еңеләйтелде, һеҙгә Сүһәйел килде»,* – тип әйтә. Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хаҡ Тәғәләнең:

وَإِنْ جَنَحُوا لِلسَّلْمِ فَاجْنَحْ لَهَا

**«Улар солох яҡлы булһалар, һин дә шул яҡты һайла!..»** – аятында («әл-Әнфәл», 61) ҡушылғанса эш йөрөтә.

Мөшриктәрҙең беренсе маҡсаты ул йылды мосолмандарға ғөмрә ҡылырға юл ҡуймау була. Шул уҡ ваҡытта улар беренсе ҡарашҡа шаҡтай ауыр булып күренгән бер ҡосаҡ шарттар ҙа ҡуя. Оҙон-оҙаҡ һәм ҡайнар бәхәс-һөйләшеүҙәрҙән һуң солох шарттары ҡабул ителә.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм килешеү шарттарын яҙыу вазифаһын хәҙрәти Ғәлигә йөкләй. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әмере менән хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү әүәл «Бисмиллә-Шәрифә»

яҙырға тейеш була, ләкин Сүһәйел ҡаршы сыға. «Бисмилла» урынына « بِاسْمِكَ اللّٰهُمَّ » тип яҙып ҡуйыла.

Был һүҙҙәрҙән һуң Сүһәйел хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Аллаһ Рәсүле икәнлеген белдергән ғибәрәне яҙыуға ла ризаһыҙлыҡ белдерә: «Аллаһтың Рәсүле икәнлегеңде ҡабул итһәк, Һинең менән һуғышыр инекме, бөгөн Ҡәғбәне зыярат ҡылыуҙан тыйыр инекме?» – ти ул.

Солох шарттары арҡаһында былай ҙа асыуҙары ҡабарған сәхәбәләр шунан һуң шаҡтай ҡыҙып китә. Хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү, ҡулындағы ҡәләмде ташлап: «Аллаһ менән ант итәм, мин – «Аллаһтың Рәсүле» тигән һүҙҙәрҙе һөртөп ташлай алмайым, йә Рәсүлүллаһ!..» – ти.

Шул ваҡыт хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сүһәйелгә:

*«Һеҙ кире ҡаҡһағыҙ ҙа, мин – Аллаһтың Рәсүлемен»*, – тип, яҙылған һөйләмде Уның үҙенә күрһәтергә ҡушты. Шул урынды мөбәрәк ҡулдары менән һөртөп, унда Мөхәммәт ибне Ғабдуллаһ исемен яҙҙыра.

Ул көндө Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер нисә хикмәт менән килешеүҙе имзалай. Килешеүҙәге маддәләрҙең ҡайһы берҙәре түбәндәгесә була:

1. Килешеү ваҡыты – ун йыл.

2. Мосолмандар Ҡәғбәне быйыл зыярат ҡыла алмаясаҡ: был зыярат киләһе йылға күсерелә. Сираттағы йылда зыярат ҡылыу өсөн килеүселәр Мәккәлә өс көнгә ҡаласаҡ, ул ваҡыт дауамында мөшриктәр Мәккәнән сығып торасаҡ, мосолмандар менән элемтә тотмаясаҡ.

3. Ҡөрәйешлеләрҙән берәй кеше, мосолман булып та Мәҙинәгә һыйынған осраҡта, кире ҡайтарыласаҡ, әммә Мәҙинәнән Мәккәгә һыйыныусылар кире ҡайтарылмаясаҡ.

4. Бүтән ғәрәп ҡәбиләләре, теләһәләр, мосолмандар тарафына, теләһәләр, ҡөрәйешлеләр сафына ҡушыла ала.

Килешеү маддәләре яҙылып бөткән миҙгелдә ҡөрәйеш вәкиле Сүһәйел ибн Ғәмрҙең улы Әбү Жәндәл, аяҡтарындағы сылбырҙарҙы һөйрәй-һөйрәй, әкрен генә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янына килә. Әбү Жәндәл разыйаллаһу ғәнһү, мосолман булған өсөн, мөшриктәрҙән бик ныҡ яфа сигә. Бер форсат табып, уларҙың ҡулдарынан ысҡына һәм үҙен мосолмандар араһына кертә. Сүһәйел килешеү талабы нигеҙендә беренсе булып ҡайтарылырға тейеш заттың үҙ улы икәнлеген белдерә һәм ҡулындағы таяғы менән Әбү Жәндәлдең йөҙөнә һуға. Әлеге ваҡиғаны хәсрәтләнеп күҙәткән Рәхмәт Пәйғәмбәре саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Жәндәлде килешеүҙән сығарма итеп ҡалдырыу һәм уны үҙенә биреү тураһында Сүһәйелгә үтенес менән мөрәжәғәт итә. Ләкин

таш йөрәкле мөшрик быға ризалашмай. Әбү Жәндәл разыйаллаһу ғәнһү иһә, мөшриктәр ҡулына тапшырылған саҡта, үтенә-үтенә мосолмандарға ялбара һәм ярҙам һорай. Бик ҡайғыға батҡан хәлдә: «Мине ҡабат шул уҡ золом утына ташлайһығыҙмы ни?» – тип һорағанда, мөьминдәрҙең, әйтерһең, йөрәктәре ярыла. Мосолмандар уны ҡыҙғанып, түҙеп тора алмай, илай башлай. Шул ваҡыт Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Жәндәлгә:

*«Эй Әбү Жәндәл! Тағы бер аҙ сабыр ит, түҙ! Аллаһ Тәғәләнән быный әжерен көт! Һис шикһеҙ, Аллаһ Тәғәлә һинең өсөн һәм яныңдағы зәғиф, үкһеҙ мосолмандар өсөн иркенлек һәм бер сығыу юлы булдырасаҡ. Беҙ ул ҡәүем менән солох килешеүе төҙөнөк һәм был мәсьәләлә уларға Аллаһ менән ант итеп һүҙ бирҙек. Улар ҙа беҙгә Аллаһ менән ант итеп һүҙ бирҙе. Вәғәҙәбеҙгә хыянат итә алмайбыҙ, сөнки биргән һүҙҙә тормау – беҙгә килешмәҫ!»* – тип уны йыуата (Әхмәт, IV, 325; Ибне Һишам, III, 367).

Артабан мәрхәмәт диңгеҙенә тиң Әфәндебеҙ Сүһәйелгә:

*«Киреләнмә, һин уны миңә бүләк ит!»* – тип үтенесен ҡабатлай. Ләкин Сүһәйл бер тәҡдимде лә ҡабул итмәй. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе:

*«Улайһа, уны минең өсөн үҙ химаяңа ал!»* – тип һорай. Сүһәйел быға ла ризалашмай. Уның был үжәтлеген күргәс, ҡөрәйеш вәкилдәренән Хувәйтиб менән Микрәз: «Әй Мөхәммәт! Һиңә хөрмәт йөҙөнән уны беҙ үҙ химаябыҙға алабыҙ, уны ғазаплауға юл ҡуймабыҙ», – тиҙәр (Ваҡыди, II, 608; Белазури, I, 220).

Шул рәүешле Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер аҙ булһа ла тынысланып ҡайтып китә.

Мөшриктәрҙең быдай тәкәббер һәм мин-минлекле мөнәсәбәтенә инде түҙеп тора алмаған хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү ул көндә күңелендәге иман дәрте менән бик ҡыҙып-ярһып ала, уны көс-хәл менән тынысландыралар. Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүҙән ҡала, башҡа сәхәбәләрҙең дә хәлдәре хәҙрәти Ғүмәрҙекенән әллә ни айырылмай. Беренсе ҡарашҡа отторооу кеүек күренгән әлеге солохта хәҙрәти Ғүмәрҙең нәбиҙәр әмеренә ҡарата ризаһыҙлыҡ фекерен белдереүенә яуап итеп, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин – Аллаһ илсеһе, Уға ҡаршы килә алмам. Ярҙамсым да – Ул!»* – тип, ҡылған эшенең илаһи сығанаҡлы булғанлығын күрһәтә (Бохари, «Мағази», 35; Мөслим, «Йыһат», 90-97).

❀

Ант бирешеү эштәре бөткәндән һуң, улын алып, Сүһәйел шатлыҡ һәм ҡәнәғәтлек менән Мәккәгә ҡайтҡанда, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙенең һайлап алынған сәхәбәләренә:

*«Әйҙәгеҙ, хәҙер инде ҡорбандарығыҙҙы салығыҙ һәм сәстәрегеҙҙе алдырып, баштарығыҙҙы ҡырығыҙ!..»* – тип бойора.

Ләкин әсхәбе кирамдан был әмерҙе үтәр өсөн һис кем ҡымшанып та ҡарамай. Улар серен сисә алмаған бер мәсьәләнең томанына сумған халәттә ҡайғы-борсоу эсендә була. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бойороғон өс тапҡыр ҡабатлай. Йәнә берәү ҙә ҡымшанмай. Был – һис тә ҡаршы сығыу, кирелек түгел, ә Ҡәғбәне зыярат ҡылыу теләгенең йөрәктәрен яндырыу һөҙөмтәһендә, әле яңы ғына төҙөлгән солох килешеүен кире ҡағыр өсөн, кескенә генә булһа ла өмөт саткыһын көтөү хисе. Юғиһә, һәр ҡайһыһы бер көн элек кенә: «Аллаһ Рәсүленең күңелендә ниндәй маҡсаты булһа, шулар менән ант итәм», – тип, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә буйһоноу һәм итәғәт тураһында һүҙ биргән бит.

Сәхәбәләренең былай хәрәкәтһеҙ тороуына ҡаршы Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бик нык хәсрәтләнә. Тәрән ҡайғыға баткан хәлдә, ҡәҙерле ҡатыны Өммө Сәләмә сатырына юл тота. Вәзғиәтте Өммө Сәләмәгә аңлатҡас, мөбәрәк инәбеҙ, Аллаһ Рәсүлен йыуатып, былай ти: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Һин сәхәбәләреңә бер нәмә лә әйтмәйенсә, ҡорбандарыңды сал, сәсеңде алдыр! Улар үҙҙәренә бик ауырға тура килгән рухи йөк аҫтында хәсрәткә сумһалар ҙа, был хәлдә Һиңә эйәреп, ҡылғаныңды эшләйәсәктәр, уларҙы ғәфү итегеҙ!»

Шулай кәңәшләшеп, сатырҙан сыҡҡас, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һөйләшкәнсә ғәмәл ҡыла. Был эште күргән сәхәбәләр килешеүҙең үҙгәрмәйәсәген аңлай һәм барыһы ла Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғәмәлдәренә эйәрә: ҡорбан салалар, сәстәрен ҡырҙырып алдыралар. Был ваҡиғаның шаһиты булған Өммө Сәләмә раҙыйаллаһу ғәнһә: «Мосолмандар ҡорбанлыҡ малдарына таба шундай йүгерештеләр , бер-береһен иҙеп бөтөрәләр инде, тип ҡурҡыуға ҡалдым», – тип иҫкә ала (Бохари, «Шурут», 15; Әхмәт, IV, 326, 331; Ваҡыди, II, 613).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән сәхәбәләр, ҡорбандарын салып, сәстәрен алдырғандан һуң, Аллаһ Тәғәлә бер дауыл ебәрә. Өйөрмә уларҙың сәсен күтәреп алып, Харам ерҙәр эсенә илтә. Сәхәбәләр быны ғөмрәләренең ҡабул ителеүенә бер билдә, тип һөйөнә.[218] Шунан һуң улар Мәҙинәгә таба ҡайтыр юлға ҡуҙғалалар.

Солох килешеүенең хикмәтен баштағы мәлдә төшөнөп етмәгәнгә күрә, ҡәнәғәтһеҙлек белдереү һәм был эште күңелдәренә ауыр ҡабул итеү сәбәпле, мосолмандар ҡурҡыуға төшә. Үҙҙәре тураһында вәхи киләсәге һәм һәләк ителәсәктәре тураһында уйҙар пәйҙә була. Шул саҡта «Фәтх» сүрәһе иңдерелә:

218. Ибне Сәғд, II, 104; Халәби, II, 713.

إِنَّا فَتَحْنَا لَكَ فَتْحًا مُّبِينًا. لِيَغْفِرَ لَكَ اللّٰهُ مَا تَقَدَّمَ مِنْ ذَنْبِكَ وَمَا تَأَخَّرَ وَيُتِمَّ
نِعْمَتَهُ عَلَيْكَ وَيَهْدِيَكَ صِرَاطًا مُّسْتَقِيمًا. وَيَنْصُرَكَ اللّٰهُ نَصْرًا عَزِيزًا.

«(Эй Рәсүлем!) **Тәхҡиҡ, Беҙ Һиңә ап-асыҡ бер еңеү насип иттек. Шул рәүешле Аллаһ Һинең үткәндәге һәм киләсәктәге хаталарыңды ярлыҡаясаҡ, Һиңә тигән ниғмәтен тамамлаясаҡ һәм Һине** (һәр ваҡыт) **тура юлға ебәрәсәк. Һәм Һиңә данлы бер еңеү менән булышасаҡ»** («әл-Фәтх», 1-3).

Мүжәмми ибн Жария раҙыйаллаһу ғәнһү «Фәтх» сүрәһе иңгән ваҡытта сәхәбәләрҙең ниндәй ҡурҡыуҙар кисергәнен түбәндәгесә тасуирлай:

«Кешеләр, ҡурҡа-ҡурҡа, дөйәләре янына таралған ине. Бер-береһенә: «Бәндәләргә ни булыр икән?» – тип һорайҙар ине. «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә вәхи килгән!» – тиҙәр. Беҙ ҙә барса халыҡ менән бергә, ҡурҡа-ҡурҡа, туп-тура Аллаһ Рәсүле янына киттек. Сәхәбәләр йыйылғас, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе «Фәтх» сүрәһен уҡыны» (Ибне Сәғд, II, 105).

Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү иһә былай тип тапшыра: «Теге көнө Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡаршы әйткән һүҙҙәрем арҡаһында тойған ҡурҡыу сәбәпле, яҙмышым хәйерле хәл ҡылынһын өсөн, мин гел ураҙалар тоттом, саҙаҡалар өләштем, нәфел намаҙҙар уҡыным һәм бик күп ҡолдо азат иттем» (Ибне Сәййидиннәс, II, 167).

«Фәтх» сүрәһе мөьминдәргә Хөдәйбиә ваҡиғаһы менән асылған еңеү ҡапҡалары тураһында һөйөнөслө хәбәр еткерә. Ысынлап та, оҙаҡ та үтмәй, был хәйерле хәбәрҙәр берәм-берәм тормошҡа аша башлай. Яҡын-тирә ҡәбиләләр Рәсүлүллаһтың Ҡәғбәне зыярат ҡылыу өсөн сыҡҡан сәфәрен «ҡайтыуы булмаған сәфәр» тип атаған була. Әммә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хатта тырнаҡ осо хәтле лә зарар күрмәйенсә, һау-сәләмәт хәлдә кире ҡайтҡанын күргәс, ҡурҡыуға баталар һәм Уның янына килеп ғәфү үтенәләр. Аллаһ Тәғәлә уларҙың был ғәмәлен аяти кәримәләрҙә түбәндәгесә телгә ала:

بَلْ ظَنَنْتُمْ أَنْ لَّنْ يَنْقَلِبَ الرَّسُولُ وَالْمُؤْمِنُونَ إِلَى أَهْلِيهِمْ أَبَدًا
وَزُيِّنَ ذَلِكَ فِى قُلُوبِكُمْ وَظَنَنْتُمْ ظَنَّ السَّوْءِ وَكُنْتُمْ قَوْمًا بُورًا.
وَمَنْ لَّمْ يُؤْمِنْ بِاللّٰهِ وَرَسُولِهِ فَإِنَّا أَعْتَدْنَا لِلْكَافِرِينَ سَعِيرًا.

**«Асылда, һеҙ, Пәйғәмбәрҙең һәм мөьминдәрҙең ғаиләләре башҡа кире ҡайтмаҫ, тип уйлаған инегеҙ. Был һеҙҙең күңелдәрегеҙгә хуш күренде ки, насар фекерҙә торҙоғоҙ һәм һәләкәткә лайыҡ бер йәмғиәт булдығыҙ. Кем**

**Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә иман килтермәһә, белһен, Беҙ кафырҙар өсөн бик ҙур ут әҙерләнек»** («әл-Фәтх», 12-13).

❁

Ул көндө Хөдәйбиәлә мөшриктәр менән төҙөлгән солох килешеүе ҡарарҙары, беренсе ҡарашҡа, мосолмандарға ҡаршы кеүек була. Ахырҙа иһә «Фәтх» сүрәһе иңдерелә һәм был эштәге олуғ хикмәттәр менән хәйерле хәбәрҙәр белдерелә. Һуңынан шул аңлашыла: тәүге ҡарашҡа оттороу һәм юҡ ителеү тип ҡабул ителгән әлеге кире ҡайтыу ап-асыҡ еңеү һәм отош булып сыға икән... Аяти кәримәлә лә шул асыҡ аныҡлана:

وَعَسَى أَنْ تَكْرَهُوا شَيْئًا وَهُوَ خَيْرٌ لَّكُمْ وَعَسَى أَنْ تُحِبُّوا
شَيْئًا وَهُوَ شَرٌّ لَّكُمْ وَاللّٰهُ يَعْلَمُ وَأَنْتُمْ لَا تَعْلَمُونَ

**«…Ҡайһы саҡ һеҙ берәй нәмәне оҡшатмайһығыҙ, ләкин ул һеҙҙең өсөн хәйерлелер. Ҡай саҡ бер нәмәне һөйәрһегеҙ, уны бик теләрһегеҙ, ләкин ул ысынлыҡта һеҙҙең өсөн бер яманлыҡтыр. Аллаһ белер, һеҙ белмәйһегеҙ»** («әл-Баҡара», 216).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм баштараҡ аңлатма биреүҙә ауырһынған әлеге мәғлүм ваҡиға ике йыл эсендә генә асыҡланып бөтә. Ысындан да, әлеге килешеү бәрәбәренә ирешелгән тыныслыҡ ваҡытында шаҡтай кеше ислам дине менән хөрмәтләнә, ике йыл эсендә мосолманлыҡ ҡабул итеүселәр һаны шул ваҡытҡа ҡәҙәр мосолман булғандарҙың дөйөм һанынан артып китә.

Ул йылды, бәлки, мосолмандар ғөмрә ҡыла ла алмаҫ йәки ҡай бер ауыр шарттарға күпмелер ваҡыт сабыр итергә тейеш хәлдә ҡалыр ине. Ләкин шунан һуң эҙлекле рәүештә киләсәк еңеүҙәр, табыштар күпкә ҙурыраҡ була. Сөнки был килешеү менән исламдың барлыҡҡа килеүе, булмышы рәсми рәүештә таныпла. Бер йыл һуңыраҡ Ҡәғбәне зыярат ҡылырға мөмкинлек бирелә. Ғәрәп ҡәбиләләренән теләгән кешеләр мосолмандарҙың ҡул аҫтына, улар химаяһына күсә ала башлай. Был иһә ҡөрәйештең үҙ позицияларын юғалтыуын, ә мөьминдәр өсөн ислам дәғүәтен ҡулай рәүештә алып барыу мөмкинлеген белдерә.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең әлеге солохҡа өҫтөнлөк биреү сәбәптәренән береһе Мәккәлә ул ваҡытта йәшерен мосолманлыҡ алған шаҡтай кеше йәшәүе менән бәйле, фәҡәт улар тыныслыҡ, именлек һаҡлау маҡсатынан, был хаҡта асыҡ белдермәйҙәр. Әгәр мөшриктәр менән мосолмандар араһында һуғыш ҡупһа, әлеге мөьминдәрҙең дине асылып, ахыр сиктә үлтерелеү ихтималы була.

Нәтижәлә, «рәхмәт Пәйғәмбәре» тип сифатландырылған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккәлә һәм бүтән ғәрәп ҡәбиләләре араһында мосолманлыҡ ҡабул итерҙәй кешеләргә был ғәмәлдәре менән йәшерен хәбәр ебәрә, уларҙа исламға ҡарата йылы мөнәсәбәт уята. Ысындан да, бының емештәре алға таба асыҡ рәүештә күренә башлай.

**Ап-асыҡ еңеү – ҡат-ҡат артҡан һидәйәт бәрәкәте**

Хөдәйбиә солохо шарттарына тышҡы яҡтан ҡарап һөйөнгән мөшриктәр, асылда, үҙҙәре лә аңламайса, мөьминдәрҙең юлында торған кәртәләрҙе алып ташлайҙар, мөьминдәрҙе үҙҙәренән өҫтөнөрәк дәрәжәгә күтәреп ҡуялар. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән ҡала һәр сәхәбәнең был килешеүҙе үҙҙәренә ҡаршы тип табып, ҡабул итеү яҡлы булмауҙары иһә мөшриктәрҙең күҙен тағын бер ҡат пәрҙә менән ҡаплай, бик ҙур уңыш ҡаҙаныу ниәте менән, улар, шарттарҙы кәметмәй, һыҙмайынса, килешеүҙе имзалап ҡуя. Ләкин әүәлдә сере мөьминдәргә лә йәшерелгән булған был солохтоң ысын асылы, шартнамә ғәмәлгә ингәс, әкренләп үҙен күрһәтә башлай.

Әлеге солох алып киләсәк бәрәкәт тураһында иң баштан уҡ белгән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хөдәйбиә килешеүе шарттарын үтәүгә бик яуаплы ҡарай, ундағы кәмселектәрҙән файҙаланыу мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмай. Әйтәйек, Ул Мәҙинәгә һыйынған ҡайһы бер мәккәле мөьминәләрҙе ҡайтарыу тураһында мөшриктәрҙең талабын кире ҡаға, сөнки килешеүҙәге маддә бары ир-аттарға ғына ҡағыла. Шулай уҡ Йәнәбел-Хаҡ та ҡатындарҙы кире тапшырмау тураһында бойороғон белдерә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِذَا جَاءَكُمُ الْمُؤْمِنَاتُ مُهَاجِرَاتٍ فَامْتَحِنُوهُنَّ اَللّٰهُ أَعْلَمُ بِإِيمَانِهِنَّ فَإِنْ عَلِمْتُمُوهُنَّ مُؤْمِنَاتٍ فَلَا تَرْجِعُوهُنَّ إِلَى الْكُفَّارِ لَا هُنَّ حِلٌّ لَّهُمْ وَلَا هُمْ يَحِلُّونَ لَهُنَّ وَآتُوهُمْ مَّا أَنْفَقُوا وَلَا جُنَاحَ عَلَيْكُمْ أَنْ تَنْكِحُوهُنَّ إِذَا آتَيْتُمُوهُنَّ أُجُورَهُنَّ وَلَا تُمْسِكُوا بِعِصَمِ الْكَوَافِرِ وَاسْأَلُوا مَا أَنْفَقْتُمْ وَلْيَسْأَلُوا مَا أَنْفَقُوا ذَلِكُمْ حُكْمُ اللّٰهِ يَحْكُمُ بَيْنَكُمْ وَاللّٰهُ عَلِيمٌ حَكِيمٌ.

**«Эй иман эйәләре! Мөьмин ҡатындар һижрәт итеп, һеҙгә килгән ваҡытта, уларҙы һынағыҙ! Аллаһ уларҙың имандарын яҡшыраҡ белә. Әгәр һеҙ ҙә уларҙың инанған ҡатындар икәнлеген аңлаһағыҙ, уларҙы кафырҙарға кире ҡайтармағыҙ! Улар кафырҙарға хәләл түгел. Улар ҙа быларға хәләл булмаҫ. Уларҙың** (ирҙәренең) **сарыф иткән** (мәһәрҙәрен) **кире бирегеҙ. Мәһәрҙәрен үҙҙәренә ҡайтарған осраҡта, улар менән өйләнешеүегеҙҙә һеҙгә гонаһ юҡ. Көфөр ҡатындарҙы** (иһә) **никахта тотмағыҙ, үҙегеҙ уларға сарыф иткәнде һорағыҙ! Улар ҙа сарыф иткән**

**нәмәләрен һораһындар. Аллаһтың хөкөмө ошо. Арағыҙҙа хөкөмдө Ул сығара. Аллаһ – һәр нәмәне белеүсе, хикмәт эйәһе»** («әл-Мүмтәхинә», 10)[219]

Шул ваҡыттарҙа Әбү Басир исемендә мосолманлыҡ ҡабул иткән бер мәккәле лә Мәҙинәгә һыйына. Ләкин хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шартнамә ҡушҡанса, уны мөшриктәргә тапшырырға мәжбүр була. Әбү Басир иһә башта Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең был ғәмәлендә мәғәнә күрмәй, уның асылын аңламай: «Мине ботҡа табынырға, тип ҡайтарып ебәрергә теләйһеңмени?» – тип аптырауын белдерә. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны:

*«Эй Әбү Басир! Беҙ антыбыҙҙы боҙа алмайбыҙ. Тик һин бер аҙ сабыр ит, Аллаһ Тәғәлә һиңә һәм һинең кеүектәргә, әлбиттә, ҡотолоу юлын күрһәтәсәк»,* – тип тынысландыра.

Был һүҙҙәрҙән һуң Әбү Басир, тауыш-тынһыҙ ғына, Пәйғәмбәрҙең хөкөмөнә буйһона. Ғөмүм мосолмандарҙың хәлен уйлап, ул мөшриктәр ҡулына ҡайта. Фәҡәт ул Мәккәгә түгел, ә үлемгә ебәрелә. Быны үҙе лә белгәнгә күрә, уңайлы форсат табып, үҙен алып китеүселәргә һөжүм итә һәм үҙ йәнен һаҡлай. Үҙен һаҡлап барған ике кешенең береһен – Хунәйесте үлтерә, икенсеһе иһә ҡасып өлгөрә. Әбү Басир Хунәйестең кейемен, әйберҙәрен һәм ҡылысын ала ла Аллаһ Рәсүленә килтереп бирә:

«Йә Рәсүлүллаһ! Быларҙың биштән берен айырып, үҙеңә ал!». Әфәндебеҙ:

*«Мин бының биштән берен алған осраҡта, улар менән төҙөгән килешеүҙе үтәмәгән булып сығам. Ләкин һинең хәлең дә, һин үлтергән кешенең әйберҙәре лә үҙ ҡарамағыңда»,* – тип белдерә (Ваҡыди, II, 626-627).

Ҡасып киткән мөшрик килеп, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән йәнә Әбү Басирҙы ҡайтарыуын талап итә. Был юлы Әбү Басир: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Һеҙ мине быларға тапшырып, килешеү антын үтәнегеҙ. Әммә мин йәнемде ҡотҡарҙым», – тип әйтә.

Артабан Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һүҙҙәрендәге хикмәтте айыҡ аҡыл менән төшөнөп, Әбү Басир Мәҙинәнән сығып китә. Мәккә менән Дамаск араһындағы Ғис тип аталған урынға, диңгеҙ буйына барып урынлаша. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул тирә нейтраль, бер яҡҡа ла ҡарамаған территория сифатында ышаныслы һыйыныр мөйөшкә әйләнә. Әбү Жәндәл дә, Мәккәнән ҡасып ҡотолоп, ошонда һыйыныр урын таба. Был ерҙәге мосолмандар һаны, оҙаҡ та үтмәй, өс йөҙгә етә. Мәккәлеләрҙең Дамаск ауҙа юлы ҡурҡыныс аҫтында ҡала. Шунан һуң мәккәле мөшриктәр, сараһын таба алмайынса, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән был хаҡтағы маддәнең килешеүҙән алып ташланыуын һорайҙар. Йәғни мосолманлыҡ ҡабул итеп, Мәккәнән ҡасыусыларҙы Мәҙинәгә ҡабул ителеүен үтенәләр. Шулай итеп, мосолмандар

219. Ҡарағыҙ: Бохари, «Шурут», 15; Ваҡыди, II, 631-632.

өсөн уңайһыҙ, уларға ҡаршы булған бер маддә тиҙ арала мөьминдәр файҙаһына боролоп ҡуя.[220]

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Басир йәмәғәтенә хат ебәрә. Ләкин Әбү Басир инде үлем түшәгендә ята. Хатты уҡый ҙа, шул хатты ҡулында тотҡан килеш йән тәслим ҡыла. Әбү Жәндәл уны шул үлгән ерендә ерләп, ҡәбере янына мәсет һала. Әбү Жәндәл үҙе янындағы мосолмандар менән бергә Мәҙинәгә килә һәм Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә бик күп йыһат һуғыштарында ҡатнаша.[221]

❁

Хөдәйбиәлә ысынға ашҡан әлеге тыныслыҡ, именлек хәле ислам тәблиғе эшенең тиҙләнеше өсөн боролош нөктәһенә әйләнә. Шунлыҡтан Аллаһ Тәғәлә уны «ап-асыҡ еңеү», тип баһалай.[222]

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хөдәйбиәнең оло еңеү икәнлеген белдергәндә, сәхәбәләрҙән берәү: «Бәйтуллаһты тауаф ҡылыуҙан тыйҙылар, ҡорбандарыбыҙҙы Харам ерҙә салыуға кәртә ҡуйҙылар. Мосолман булып, беҙгә килеп һыйыныу эҙләгән ике кешене лә Рәсүлүллаһ кире ҡайтарҙы. Был ниндәй еңеү булһын инде?» – тип һөйләнә.

Унаң был һүҙҙәре Әфәндебеҙгә ишетелгәс, Рәсүл Әкрәм әлеге солох килешеүенең ҡайһы яҡтан ҙур еңеү икәнлеген түбәндәгесә шәрехләй:

*«Эйе! Был солох килешеүе – иң ҙур еңеү. Мөшриктәр һеҙҙең үҙ ҡалаларына килеп-киткәләүегеҙ һәм үҙ эштәрегеҙҙе хәл итеп йөрөүегеҙ менән ризалашты, шулай йөрөгән сағығыҙҙа, иҫән-имен хәлдә булыуығыҙ тәьмин ителде. Улар быға саҡлы һис теләмәгән, оҡшатмаған исламды шул рәүешле һеҙҙән күрәсәк һәм өйрәнәсәк. Аллаһ һеҙҙе еңеүсе итәсәк, барған ерегеҙҙән иҫән-һау һәм табыш менән ҡайтасаҡһығыҙ. Был иһә еңеүҙәрҙең иң ҙурыһы»* (Хәләби, II, 715).

Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү Хөдәйбиә солохо тураһындағы фекерен түбәндәгесә аңлата:

«Исламда Хөдәйбиә солохонан да ҙурыраҡ еңеү булмағандыр. Фәҡәт халыҡ, тар һәм сикле ҡарашлы булғанға, был килешеүгә ҡаршы сыҡты. Кешеләр Аллаһ менән Уның Пәйғәмбәре араһындағы эштәрҙә ашығыусылар-ҡабаланыусылар булып тора. Аллаһ Тәғәлә иһә улар кеүек ашыҡмаҫ, теләгән эшен иң кәрәкле ваҡыты килмәй, өлгөрөп етмәйенсә ҡылмаҫ» (Ваҡыди, II, 610; Хәләби, II, 721).

Хөдәйбиә солохоноң беренсе ыңғай һөҙөмтәһе – исламдың тиҙ йәйелә, тарала башлауы. Әлеге тыныслыҡ осоронда ислам тәблиғе өсөн яңы

220. Ҡарағыҙ: Бохари, «Шурут», 15; Ибне Һишам, III, 372.
221. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 629.
222. Ҡарағыҙ: «әл-Фәтех», 1.

мөмкинлектәр һәм таралыу территориялары асыла. Шул килешеү бәрәбәренә мосолмандар мөшриктәр менән осрашып, уларға Ҡөрьәни-Кәрим уҡый һәм ислам тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләй башлай. Мосолманлыҡтарын йәшереп йөрөгәндәр ҙә хәҙер инде диндәрен ҡурҡмайынса иғлан итә ала.[223]

Ысындан да, быға тиклем был ике яҡ бер-береһе менән шул ҡәҙәр еңел осраша, күрешә алмаған була. Солох иғлан ителгәс, мөшриктәр Мәҙинәгә иркенле рәүештә килеп йөрөй, мосолмандар ҙа Мәккәгә сикләүҙәрһеҙ сәфәр ҡыла. Ундағы ғаиләләре, иптәштәре һәм башҡа кешеләр менән осрашып-күрешеп әңгәмә ҡороу мөмкинлеге табалар. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең сифаттары һәм ғәмәлдәре, мөғжизәләре, әхлағы һәм Ул барған юлдың күркәмлеге тураһында мосолмандар биргән белем-мәғлүмәткә, үгеттәргә хәҙер ҡолаҡ һалыусылар арта, шул рәүешле мөшриктәрҙең йөрәктәре йомшап, улар исламға ауыша башлай. Асылда, сүлдәрҙә йәшәүсе ғәрәптәр ҙә, мосолман булыу өсөн, ҡөрәйеш мөшриктәренең иман килтереүҙәрен көтә. Ошо ваҡыт аралығында хатта мөшриктәрҙең күренекле кешеләренән Ғәмр ибн әл-Ғәс, Хәлид ибн Вәлид һәм Ғосман ибн Талха ла мосолманлыҡҡа килә.[224]

Ислам вәкилдәре именлектә, ҡурҡыныс тоймайынса, төрлө төбәктәргә бара башлайҙар, һәр уңайлы ваҡытта кешеләргә ислам тураһында һөйләү мөмкинлеге алалар. Был осорҙа мосолман булыусыларҙың һаны бер нисә мәртәбә арта.

Имам Зүхри Хөдәйбиә солохо нәтижәләрен Аллаһ Рәсүленең был мәсьәләләге хәҙис шәрифтәренән файҙаланып, түбәндәгесә йомғаҡлап күрһәтә: «Элегерәк мосолмандар һәм мөшриктәр осрашҡан һәр ерҙә һуғышҡандар, тартҡылашҡандар, ыҙғышҡандар. Хөдәйбиә солохо имзаланғас, һуғыш-бәрелештәр тамамлана. Ике яҡ араһында күрешеү-аралашыу мөмкинлеге табыла. Хатта төрлө мәсьәләләрҙә бер-береһенә булыша башлайҙар. Был ваҡытта берәйһенә ислам тураһында һөйләһәләр, ул бер аҙ уйлағандан һуң, хәҡиҡәтте аңлап ала һәм шунда уҡ мосолманлыҡ ҡабул итә. Шул дәрәжәлә , Хөдәйбиә ваҡиғаһынан Мәккәне яулағансыға ҡәҙәр ике йыл эсендә мосолманлыҡҡа килеүселәр һаны Хөдәйбиә солохона ҡәҙәр уҙған ун туғыҙ йыллыҡ осорҙа исламға өндәү һөҙөмтәһендә мосолманлыҡ ҡабул итеүселәрҙән күпкә артыҡ була».

Ибн Һишам быға ошо һүҙҙәрҙе лә өҫтәп ҡуя:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хөдәйбиәгә мең дүрт йөҙ кеше менән юлға сыҡҡан ине. Шунан ике йыл уҙғас, Мәккәне яулағанда, Уның янында ун мең, башҡа бер риүәйәткә күрә, юлда ҡушылған ике мең кеше менән барыһы ун ике мең мосолман була. Был һандар Зүхри белдергәндәрҙең ни саҡлы теүәл, дөрөҫ икәнен раҫлай» (Хәйсәми, VI, 170; Ибне Һишам, III, 372).

223. Ҡарағыҙ: Ибне Ҡаййим, III, 309-310.
224. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 624.

# ҺИЖРӘТТЕҢ ЕТЕНСЕ ЙЫЛЫ

**Хөкөмдарҙарҙы исламға саҡырыу**

Бөтә кешелеккә ебәрелгән берҙән-бер «Рәсүл» – Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яҡындағы һәм йыраҡтағы барып етеү мөмкинлеге булған барлыҡ илдәрҙе Хөдәйбиә килешеүенән һуң исламға саҡырыу эшен башлай. Сөнки илаһи әмер ҙә шулай ҡуша:

قُلْ يَا أَيُّهَا النَّاسُ إِنِّى رَسُولُ اللّٰهِ إِلَيْكُمْ
جَمِيعًا الَّذِى لَهُ مُلْكُ السَّمَاوَاتِ وَالْأَرْضِ

**«**(Рәсүлем!) **Әйт: «Эй кешеләр! Ысындан да мин – һеҙҙең барығыҙ өсөн дә күктәр һәм ер хужаһы булған Аллаһтың илсеһемен...»** («әл-Әғрәф», 158).

يَا أَيُّهَا الرَّسُولُ بَلِّغْ مَا أُنْزِلَ إِلَيْكَ مِنْ رَبِّكَ وَإِنْ لَمْ تَفْعَلْ
فَمَا بَلَّغْتَ رِسَالَتَهُ وَاللّٰهُ يَعْصِمُكَ مِنَ النَّاسِ

**«Эй Рәсүл! Раббыңдан Һиңә иңдерелгәнде** (бөтә кешеләргә) **тәблиғ ҡыл! Әгәр быны эшләмәһәң, Уның** (Һиңә йөкләгән) **Пәйғәмбәрлек вазифаһын үтәмәгән булырһың! Аллаһ Һине кешеләрҙән һаҡлаясаҡ...»** («әл-Мәида», 67).

وَمَا أَرْسَلْنَاكَ إِلَّا كَافَّةً لِلنَّاسِ بَشِيرًا وَنَذِيرًا وَلَكِنَّ أَكْثَرَ النَّاسِ لَا يَعْلَمُونَ

**«Беҙ Һине бөтә кешеләр өсөн хәйерле хәбәрсе һәм Аллаһтың ғазабы менән ҡурҡытыусы булыр өсөн ебәрҙек. Ләкин кешеләрҙең күбеһе быны белмәҫ»** («Сәба», 28).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең донъялағы дәүләттәрҙе исламға өндәүе хаттар яҙыу ысулы менән башҡарыла. Был хаттарҙың алтыһы йәки һигеҙе иң танылғандарҙан һанала. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәр хатты һайлап алынған сәхәбәләренән береһенә биреп ебәрә. Ғәләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ хөкөмдарҙарға хат яҙҙырырға теләгәндә, әсхәбе кирам: «Йә Рәсүлүллаһ! Мөһөрлө булмаһа, улар хатты уҡып та тормаҫ», – ти. Шунан һуң Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм бер

көмөш йөҙөк яһата. Уның ҡашына өс юллыҡ итеп «Аллаһ-Рәсүл-Мөхәммәт» һүҙҙәрен яҙҙырта һәм был йөҙөктө хаттарында мөһөр сифатында ҡуллана.[225]

Йөҙөктөң ҡашына «Мөхәммәдүн Рәсүлүллаһ» һүҙбәйләнеше ҡырып яҙылған була, ләкин, хөрмәт йөҙөнән, бөйөк «Аллаһ» исеме иң өҫтә, уртала – «Рәсүл» һүҙе һәм аҫҡы юлда «Мөхәммәт» исеме урын ала.

❁

Әсхәбе кирамдан Дыхйәтүл-Кәлби раҙыйаллаһу ғәнһү Византия императоры Ираклийға Аллаһ Рәсүленең хатын алып килә. Фарсыларҙы тар-мар иткән Византия императоры Ираклий ҡулына хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең исламға өндәгән хаты, еңеү походынан ҡайтып барған ваҡытта Сүриәлә туҡталғас килеп ирешә. Византия императоры был хатҡа асыу-нәфрәт белдермәй, киреһенсә, унда ҡыҙыҡһыныу уяна, айырым алғанда, тәблиғтең асылын белергә теләй. Был мәсьәләлә һорау бирә алыу өсөн, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәмләкәттәштәренең ҡайһы берҙәрен үҙе янына килтерергә ҡуша.

Ул ваҡыттарҙа хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең иң яуыз дошмандарынан береһе – Әбү Суфьян да Дамаскҡа барыусы бер төркөм мәккәле сауҙагәрҙәргә етәкселек итә. Ул саҡтарҙа хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән ҡөрәйешлеләр солох хәлендә була. Ираклий кешеләре уларҙы осрата һәм император алдына килтерә. Ираклий һәм уның кешеләре был ваҡытта «Илйә»лә, йәғни Бәйтүл-Маҡдистә була. Ираклий ҡөрәйешлеләрҙе үҙе янында күренекле гректар булған саҡта ҡабул итә һәм берәй тәржемәсе саҡырырға бойора. Ираклийҙың әмеренән һуң тәржемәсе: «Мин – пәйғәмбәр, тип белдергән был затҡа нәҫел-туғанлыҡ яғынан иң яҡыны ҡайһығыҙ?» – тип һорай.

Әбү Суфьян: «Иң яҡыны – мин!» – ти.

Шунан һуң Ираклий: «Уны һәм иптәштәрен минең яныма алып килегеҙ! Мин уның менән һөйләшкәндә, иптәштәре шунда булһын!» – ти. Артабан тәржемәсегә боролоп: «Быларға әйт; мин Ул зат тураһында был кешенән ҡай бер нәмәләр һораясаҡмын. Миңә ялған һөйләһә, «алдай, ялғанлай», тиһендәр!» – тип әйтә.

«Валлаһи, иптәштәрем ялған һөйләүемде уңға-һулға сәсеп йөрөрҙәр, тип оялмаһам, Уның тураһында дөрөҫлөктө һөйләмәҫ инем!» – тип белдергән Әбү Суфьян һуңыраҡ сығыштарында былай тип тапшыра:

«Шунан һуң Ираклийҙың миңә биргән беренсе һорауы бындай ине:

«Арағыҙҙа Уның нәҫел-нәсәбе ниндәйерәк?»

225. Ҡарағыҙ: Бохари, «Илим», 7; Мөслим, «Либас», 57, 58; Ибне Сәғд, I, 258.

Мин: «Уның беҙҙең аралағы нәҫеле бик ҙур, затлы!» – тинем.

«Һеҙҙән бындай һүҙҙе (Пәйғәмбәрлек тураһында белдереү) Уға хәтле берәйһенең һөйләгәне бар инеме?» – тине.

«Юҡ ине», – тинем.

«Ата-бабалары араһында берәй батша-хөкөмдар бар инеме?» – тине.

«Юҡ!» – тинем.

«Уға эйәреүселәр халыҡтың алдынғы, затлы кешеләреме, әллә түбән ҡатлаумы?» – тине.

«Түбән ҡатлау», – тип яуап бирҙем.

«Уға эйәреүселәр артамы әллә кәмейме?» – тине.

«Арталар...» – тинем.

«Араларында Уның диненә кергәс, һуңынан оҡшатмай кире әүәлге диненә ҡайтыусы бармы?» – тине.

«Юҡ!» – тинем.

«Бындай фекер белдергәнсе, Уны берәй ваҡыт ялғанда тотҡан инегеҙме?» – тине.

«Юҡ!» – тинем.

«Берәй ваҡыт һүҙендә тормағаны булдымы?» – тине.

«Юҡ! Биргән һүҙен тота, ләкин беҙ хәҙер Уның менән ваҡытлы солох килешеү төҙөгән хәлдә. Был ваҡыт дауамында ни эшләйәсәгебеҙҙе белмәйбеҙ!» – тинем. Уны хурлау өсөн өҫтәп булырҙай башҡа һүҙ таба алманым!

«Уның менән һуғышҡанығыҙ булдымы?» – тине.

«Эйе», – тинем.

«Был һуғыштар нисек тамамланды?» – тине.

«Ҡайһы саҡта Ул беҙҙе еңә, ҡай саҡ беҙ – Уны!» – тинем.

«Ярай, һеҙгә нәмәләр ҡуша?» – тине.

«Беҙгә: «Берҙән-бер Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылығыҙ, һис нәмәне Уға тиңдәш ҡуймағыҙ; ата-бабаларығыҙ табынған боттарҙан баш тартығыҙ!» – ти. Намаҙлы, тоғролоҡло, ғиффәтле һәм намыҫлы булырға, туғандарҙы, яҡындарҙы зыярат ҡылып йөрөргә ҡуша», – тинем».

Шунан һуң Ираклий тәржемәсегә әйтә:

«Уға әйт. Уның нәҫеле тураһында һораным, арағыҙҙа нәҫел-нәсәбенең бик юғары, затлы икәнен һөйләнең. Пәйғәмбәрҙәр ҙә ана шулай, ҡәүемдәренең

затлылары араһынан ебәрелә. Арағыҙҙан Уға хәтле быҙдай белдереү, хәбәр әйткән башҡа берәйһе бар инеме, тип һораным; юҡ, тинең. Унан әүәлерәк быҙдай фекер белдергән берәй башҡа кеше булһа, шунан үрнәк ала, тиер инем. Ата-бабалары араһында берәй батша-хөкөмдар бар инеме, тип һораным; юҡ, тинең. Әгәр ата-бабаһынан идарасы берәйһе булһа ине, атаһының мөлкәтен ҡайтарырға тырыша, тиер инем. Быҙдай фекер белдергәнсе, Уны берәй ваҡыт ялған һөйләгәнен күргәнегеҙ булдымы, тип һораным; юҡ, тинең. Мин беләм, кешеләргә ҡарата ялған һөйләмәгән зат Аллаһ тураһында ла ялған һөйләмәҫ! Уға эйәреүселәр халыҡтың алдынғы, затлы кешеләреме, әллә түбән ҡатлаумы, тип һораным. Түбән ҡатлау икәнлеген белдерҙең. Асылда, баштағы мәлдә Пәйғәмбәрҙәргә шундайыраҡ ҡатлауҙағы кешеләр эйәрә. Уға эйәреүселәр артамы әллә кәмейме, тип һораным; арталар, тинең. Хаҡ диндәрҙең бер үҙенсәлеге лә – уларға эйәреүселәрҙең күбәйә барыуы. Араларында Уның диненә кергәс, һуңынан оҡшатмайынса кире әүәлге диненә ҡайтыусы бармы, тип һораным; юҡ, тинең. Иман бәрәбәренә барлыҡҡа килгән күңел күтәренкелеге йөрәккә кереп урынлашҡас, ана шулай була ла. Берәй ваҡыт һүҙендә тормағаны булдымы, тип һораным; юҡ, тинең. Пәйғәмбәрҙәр ҙә шулай. Һүҙҙәренән кире ҡайтмаҫтар. Уның менән һуғышҡанығыҙ булдымы, тип һораным. Һуғышҡанығыҙҙы һәм ҡайһы саҡ Уның һеҙҙе еңгәнен, ә ҡай саҡ һеҙҙең Унан өҫтөн сыҡҡанығыҙҙы белдерҙең. Асылда, Пәйғәмбәрҙәр ҙә шундай: бәлә-ҡазалар менән һыналыр, ахырҙа уларҙы яҡшы яҙмыш көтә. Һеҙгә нәмәләр ҡуша, тип һораным. Берҙән-бер Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылырға, һис нәмәне Уға тиңдәш ҡуймаҫҡа; боттарға табыныуҙан баш тартырға, шулай уҡ намаҙлы, тоғролоҡло, ғиффәтле һәм намыҫлы булырға бойорғанын һөйләнең.

Әгәр был һөйләгәндәрең дөрөҫ икән, Ул зат бик яҡын арала ошо аяҡтарым баҫҡан ерҙәргә лә хөкөмдар буласаҡ. Нигеҙҙә, мин был Пәйғәмбәрҙең барлыҡҡа киләсәген белдем, фәҡәт һеҙҙең ҡәүемдән буласағын күҙ алдына ла килтермәгән инем. Уның ҡаршыһына бара алыуымды белһәм, үҙе менән күрешеү мөмкинлеге өсөн һәр төрлө ауырлыҡтарға түҙер инем. Уның янында булһам, аяҡтарын йыуыр инем».

Шунан һуң Ираклий Дыхйә разыйаллаһу ғәнһү аша Бусра әмиренә ебәрелгән һәм үҙенә адресланған хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең хатын һоратып ала. Хатты килтергән кеше биргәс, Ираклий уны уҡый. Хатта былай тип яҙылған була:

*«Аллаһтың ҡоло һәм Рәсүле Мөхәммәттән византиялылар хөкөмдары Ираклийға!..*

*Һидәйәткә эйәреүселәргә сәләм булһын! Мин һине ислам ҡабул итергә саҡырам. Исламға кер ҙә сәләмәтлеккә ирешерһең һәм Аллаһ та һиңә әжерен ике тапҡыр күберәк бирһен! Әгәр ҡабул итмәһәң, (һиңә буйһоноусы) игенселәрҙең гонаһы һинең муйыныңа аҫылыр».*

قُلْ يَا أَهْلَ الْكِتَابِ تَعَالَوْا إِلَى كَلِمَةٍ سَوَاءٍ بَيْنَنَا وَبَيْنَكُمْ أَلَّا نَعْبُدَ إِلَّا اللهَ وَلَا نُشْرِكَ بِهِ شَيْئًا وَلَا يَتَّخِذَ بَعْضُنَا بَعْضًا أَرْبَابًا مِّنْ دُونِ اللهِ فَإِنْ تَوَلَّوْا فَقُولُوا اشْهَدُوا بِأَنَّا مُسْلِمُونَ

**«Әйт: «Эй китап әһеле! Һеҙҙең менән беҙҙең арабыҙҙа уртаҡ булған бер һүҙгә** (Тәүхид кәлимәһенә) **килегеҙ. Аллаһтан башҡаға табынмағыҙ, Уға һис нәмәне тиңдәш тотмайыҡ һәм Аллаһты ҡалдырып, кемдер кемделер илаһҡа тиңләмәһен! Әгәр йөҙ сөйөрһәләр, ана шул ваҡытта: «Шаһит булығыҙ: беҙ – мосолмандарҙан!» – тип әйтегеҙ!»** («Әлү Ғимран», 64)».

Әбү Суфьян һөйләгәндәрҙән:

«Ираклий әйтәһе һүҙен әйткәс һәм хатты уҡып бөтөргәс, шау-гөр килештеләр, тауыш ҡупты. Шунан һуң мине тышҡа сығарып ебәрҙеләр. Иптәштәремә әйттем: «Әбү Кәбшә улының[226] эше шаҡтай алға китте. Ҡарағыҙ, хатта Бәни Асфар башлығы (Ираклий) ла Унан ҡурҡа!..» Бына шул ваҡыттан бирле Уның тиҙҙән уңышҡа ирешәсәгенә ышанысым бер ваҡытта ла бөтмәне. Һәм, ахырҙа, Аллаһ миңә лә исламды насип ҡылды...»

Ираклий үҙе янына йәмәғәтенең асыл заттарын, аҡһөйәктәрен саҡырып ала. Уның бер һарайында йыйылалар. Хөкөмдар уларға: «Византия йәмәғәте! Мәңгелек ҡотолоуға һәм ошо мәмләкәтегеҙҙең һәр ваҡыт йәшәүенә ни тип әйтерһегеҙ?» – тип мөрәжәғәт итә (исламға керергә тәҡдим яһай). Шунан һуң барыһы бергә ҡырағай ишәктәр кеүек ҡурҡып, ишеккә таба йүгерә. Ләкин бөтә ишектәрҙең бикләп ҡуйылғанын аңлап алалар. Ираклий яҡын-тирәһендәге дәүләт түрәләренең ислам ҡабул итеү яҡлы түгеллеген аңлағас, уларҙы кире саҡырып ала һәм әйткән һүҙҙәренең асылын, мәғәнәһен үҙгәртеп: «Мин христианлыҡтағы ныҡлыҡ һәм ысын күңелдән бирелгәнлегегеҙҙе күрер өсөн генә һеҙҙе һынаным. Һеҙҙең был ғәмәлегеҙҙе бик оҡшаттым!» – ти. Артабан дәүләт түрәләре уға сәждә ҡыла һәм унан ҡәнәғәтлек белдерә (Бохари, «Бәдғүл-Вәхи», 1, 5-6, «Иман», 37, «Шәһәҙәт», 28, «Йыһат», 102; Мөслим, «Йыһат», 74; Әхмәт, I, 262).

Византия императоры Ираклий танау төбөнә ҡәҙәр килгән ислам ниғмәтен шәхсән үҙе күреп, хәҡиҡәтте тулыһынса төшөнһә лә, донъя мәнфәғәттәренең тормош үлсәүендә ауырыраҡ тартыуы сәбәпле, әлеге олуғ мөмкинселекте ҡулдан ысҡындырып, мәңгелек дәүләтенә һәм бәхетенә зыян һала.

❁

Иран Хосройына (Кисраға) ебәрелгән хатты иһә Ғабдуллаһ ибн Хузафә раҙыйаллаһу ғәнһү илтә. Тик Хосрой үҙен Ираклий кеүек тотмай. Хатта хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм исеменең үҙ исеменән

226. Пәйғәмбәребеҙ өсөн ҡулланылған был исем тураһында ҡарағыҙ: том 1, 284 б.

алдараҡ яҙылыуына асыуы килеп, әлеге мөбәрәк хатты умырып йыртып ташлай, илсене иһә төрлөсә мәсхәрәләргә күмә.

Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү Хосройға һәм уның кешеләренә былай тип мөрәжәғәт итә:

«Эй Фарсы йәмәғәте! Һеҙ – пәйғәмбәрһеҙ, китапһыҙ һәм, ер йөҙөнөң бары ҡулығыҙға эләккән бер өлөшөнә хужа булып, һанаулы көндәрегеҙҙе уҙҙыраһығыҙ. Һеҙҙең тормошоғоҙ бер төш кеүек кенә! Хәлбүки, ер йөҙөнөң һеҙ хаким булмаған өлөшө күпкә артыҡ.

Эй Хосрой! Һинән әүәл донъялыҡты йәки әхирәтте солғап алырға теләгән күпме хөкөмдар килеп киткән һәм идара иткән. Улар араһынан әхирәт бәхетен теләүселәр донъялыҡта ла үҙҙәренә насипты алған. Донъялыҡҡа мөкиббәндәр иһә әхирәттә уларға насип булырға тейешлене юғалттылар. Һиңә беҙ тәҡдим иткән был динде кәмһетеп ҡарайһың, әммә, валлаһи, ҡайҙа булһаң да, кәмһетеп ҡараған нәмәң килгәс, унан ҡурҡасаҡһың һәм унан һаҡлана алмаясаҡһың!»

Хосрой иһә яуабында мөлкәт һәм батшалыҡтың үҙенә генә бирелгәнен, еңелеүҙән дә, үҙенә тиң башҡа бер зат килеп сығыуынан да ҡурҡмағанын белдерә (Сүһәйли, VI, 589-590). Артабан үҙ кешеләренә Ғабдуллаһ ибн Хузафәне тышҡа сығарып ебәрергә ҡуша.

Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү, Хосрой янынан сығыуға уҡ, атланып килгән малына ултырып, Мәҙинә тарафына ҡайтыр юлға ҡуҙғала. «Валлаһи, минең өсөн ике юлдан (үлем йәки ҡотолоу) ҡайһыһы насип булһа ла, хәсрәтләнмәм. Рәсүлуллаһтың хатын тейешле еренә еткерҙем һәм үҙемә йөкләнгән бурысты үтәгән булып сығам», – ти ул үҙ-үҙенә (Әхмәт, I, 305; Ибне Сәғд, I, 260, IV, 189; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 263-6; Хамидуллаһ, *«әл-Вәсаик»,* 140 б.).

Ғабдуллаһ ибн Хузафә разыйаллаһу ғәнһүҙең тиңдәшһеҙ фазиләтен һәм иман ныҡлығын, батырлығын күрһәткән, бик күп ғибрәткә эйә ҡиссаһы бар:

«Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү хәлифәлеге осоронда Дамасктың Кайсәриә тарафында гректар өҫтөнә бер ислам ғәскәре ебәрелә. Ғабдуллаһ ибн Хузафә разыйаллаһу ғәнһү ҙә шул ғәскәр составында була. Гректар уны әсирлеккә ала. Византиялылар Ғабдуллаһ ибн Хузафәне королдәре янына алып килә һәм: «Был – Мөхәммәттең сәхәбәләренән!» – тиҙәр.

Король, хәҙрәти Ғабдуллаһты бер өйгә бикләп, бер нисә көн ашатмай-эсермәй тотҡас, уға бер аҙ шарап һәм дуңғыҙ ите ебәрә. Мөьмин бәндәне өс көн күҙәтәләр. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү шарапҡа ла, дуңғыҙ итенә лә һис яҡын килеп ҡарамай. Королгә: «Уның муйыны-һыны шаҡтай бөгөлдө, хәлһеҙләнде. Унан сығармаһаҡ, һис шикһеҙ, үләсәк!» – тип хәбәр еткерәләр. Король, Ғабдуллаһты килтертә лә: «Ризыҡтан һәм эсемлектән һине нәмә тыйып тора?» – тип һорай. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү: «Асыл заруриәт

уларҙан ауыҙ итеүемде миңә хәләл ҡылған ине, әммә һинең минән һәм исламдан көлөүеңде теләмәнем!» – ти.

Король уның үҙен шундай лайыҡлы тотоуын күрә лә: «Һин христианлыҡ ҡабул итеп, милкемдең яртыһын һиңә тапшырһам, һине мөлкәт һәм батшалығыма пайҙашым итеп ҡуйһам, ҡыҙымды иһә һиңә ҡатынлыҡҡа бирһәм, ни тиерһең?» – тип тәкдим яһай. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү: «Һин миңә, күҙ асып йомғансыға хәтле булһа ла, Мөхәммәт ғәләйһиссәләм диненән сыҡҡан осраҡта, барлыҡ милкеңде һәм бөтә ғәрәптәрҙең мөлкәтен бирһәң дә, быны һис ваҡыт эшләй алмам», – тине. Король: «Улайһа, һине үлтерермен», – ти. Хәҙрәти Ғабдуллаһ: «Уныһы инде һин белә торған нәмә!» – ти.

Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү тәре рәүешендәге ағасҡа ҡаҙаҡлап ҡуйыла. Уҡсылар башта уға төбәмәйсә генә, ҡурҡытыр өсөн, бер нисә уҡ ата. Шунан Ғабдуллаһҡа тағы христианлыҡ ҡабул итергә тәкдим яңғырай. Мөбәрәк сәхәбә хаҡ юлдан хатта бик әҙгә генә лә тайпылмай.

Король: «Йә христиан булаһың йәиһә һине ҡайнап торған ҡаҙанға ташлаттырам», – ти. Был шартты ҡабул итмәгәс, бер баҡыр ҡаҙан алып киләләр, уға зәйтүн майы йәки һыу һалып ҡайнаталар. Король мосолмандарҙан бер әсирҙе килтерттерә. Уға христианлыҡҡа күсергә тәкдим итә. Әсир был тәкдимде ҡабул итмәгәс, уны ҡаҙан эсенә ташларға бойора. Тоткон мосолманды ҡаҙанға ырғыталар. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү был хәлде ҡарап тора. Меҫкен мөьминдең һөйәктәре миҙгел эсендә итенән һуйылып таралып төшә.

Король Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһүгә христианлыҡҡа күсергә йәнә тәкдим яһай. Тегеһе ризалашмағас, уны ҡаҙанға ташларға әмер бирә. Хәҙрәти Ғабдуллаһ ҡаҙанға ырғытылыр алдынан илап ебәрә. Король, уның фекере үҙгәрҙе, тип уйлап, Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһүҙе үҙ янына килтертә һәм суҡыныу тәкдимен ҡабатлай. Был тәкдименең асыу менән кире ҡағылғанын күргәс, аптырап: «Улайһа, ниңә иланың?» – тип һорай. Хәҙрәти Ғабдуллаһ ибн Хуҙафә разыйаллаһу ғәнһү түбәндәге ғәжәп яуабын бирә: «Һинең миңә ҡарата эшләргә теләгән яҙаңдан ҡурҡып иланым, тип уйлама! Мин Аллаһ юлында бары тик йәнемде генә бирә алғаныма иланым. Үҙ-үҙемә: «Һин хәҙер бары йән генә һаҡлайһың, ошо ҡаҙанға ырғытылғас, Аллаһ юлында бер миҙгелдә үлеп китәсәкһең. Хәлбүки, мин тәнемдәге төктәр һанынса йәнем булыуын һәм уларҙың һәр береһе өсөн был ғазаптың Аллаһ юлында миңә ҡабат-ҡабат һалыныуын ни ҡәҙәр теләр инем», – тинем».

Хәҙрәти Ғабдуллаһтың иман ҡаһарманлығын һәм рухи затлылығын күрһәткән быңдай шаҡ ҡатҡыс мөнәсәбәт королдең күңеленә бик хуш килә һәм падишаһ уны иреккә ебәрергә теләй. «Башымды үп тә һине ирекә ҡалдырам», – ти ул. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү: «Минең менән бергә бөтә

мосолман әсирҙәрҙе лә азатлыҡҡа сығараһыңмы?» – тип һорау бирә. «Эйе, сығарам», – ти король. «Ул осраҡта, була», – тип ризалаша мөьмин бәндә.

Хәҙрәти Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән: «Үҙ-үҙемә: «Йәнемде лә, мосолман әсирҙәрен йәнен дә ҡотҡарыу өсөн, Аллаһ дошмандарынан бер дошмандың башын үбеүҙә ни ғәйеп булыр? Үбәм дә – бөттө-китте!» – тинем».

Ул көндө һикһән мосолман иреккә сығарыла. Улар хәҙрәти Ғүмәр янына барып, был хәлде һөйләп бирәләр. Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Ғабдуллаһ ибн Хузафәнең башын үбеү – һәр мосолманға йөкләнгән вазифа! Был эште үтәүҙе мин үҙемдән башлайым», – ти. Тороп, уның янына бара һәм башын үбә (Ибне Әсир, *«Усдул-Габә»,* III, 212-213; Зәхәби, *«Сийәр»,* II, 14-15).

Ана шул мөбәрәк сәхәбә Аллаһ Рәсүленең исламға өндәү хатын Иран идарасыһы Хосройға тапшырыу дәрәжәһенә лайыҡ табыла. Хөкөмдарҙың бер ымын ғына көтөп торған йәлләттәр алдында олуғ иман ҡыйыулығы күрһәтеп, ул Хосройҙы һәм уның кешеләрен исламға саҡыра.

Хосройҙың хатты йыртып ташлағанын һәм исламға өндәүгә ҡарата нәфрәтле мөнәсәбәт белдергәнен ишеткәс, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһым! Һин дә уның мөлкәтен шулай талап-тарҡатып бөтөр!»* – ти (Бохари, «Ғилем», 7; Ибне Әсир, *«Усдул-Габә»,* III, 212).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең был мөғжизәһе тоғролоҡло хәлифәләр осоронда ысынға аша һәм Хосройҙың ерҙәре тулыһынса мосолмандар ҡулына күсә.

Йәмән губернаторы Базанға бер яҙыулы хәбәр ебәреп, Хосрой Пәйғәмбәр ғәләйһис-салатү үә-сәләәмде үҙе янына алып килергә талап итә. Базандың илселәре Аллаһ Рәсүле янына килә. Хәлде аңлатып, хатты тапшыралар. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе хатты уҡығас, йылмайып ҡуя. Ул илселәрҙе ислам ҡабул итергә өндәй. Базандың илселәре Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә: «Әгәр беҙҙең менән бармаһаң, вәли Базан хатына яуап яҙ!» – ти. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Йәнәбел-Хаҡтан иңгән вәхи нигеҙендә уларға былай тип белдерә:

*«Аллаһ Тәғәлә, Хосройға улы Ширәүәйеһте башына бер бәлә итеп ебәрҙе. Ширәүәйеһ уны фәлән айҙа, фәлән төндә һәм шул фәлән-фәлән сәғәтендә үлтерҙе!»*

Илселәр ғәжәпкә ҡала һәм: «Беҙ Һинән ишеткән был һүҙҙе яҙып, вәлигә тапшырайыҡмы?» – тип һорайҙар.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Эйе! Минән ишеткән нәмәләрҙе уға еткерегеҙ! Һәм уға әйтегеҙ: «Минең динем һәм хакимиәтем Хосройҙың милке һәм батшалығы еткән ерҙәргә ҡәҙәр таралаcаҡ, аттар һәм дөйәләр аяҡ баҫасаҡ иң йыраҡ ерҙәргә ҡәҙәр барып етәсәк!» Уға шуны ла тапшырығыҙ: «Әгәр һин мосолман булһаң, ҡул аҫтыңдағы ерҙәрҙе һиңә бирәсәкмен! Һине Әбналар, йәғни Йәмәндәге фарсылар ҡәүемменә хөкөмдар итеп ҡуясаҡмын!»* – тип әйтә.

Базан был хәбәрҙе алғас: «Валлаһи, уның һүҙе бер ҙә хөкөмдар һүҙе түгел! Мин был зат, үҙе әйткәнсә, бер пәйғәмбәрҙер тип һанайым! Уның Хосрой тураһында әйткән һүҙҙәренең нәтижәһен көтәйек. Әгәр был хаҡтағы һүҙе дөрөҫ булып сыҡһа, Ул, ысындан да, Аллаһ тарафынан ебәрелгән пәйғәмбәрҙер. Әгәр һөйләгәндәре дөрөҫ булып сыҡмаһа, ул осраҡта Уның тураһында тейешлеһен уйларбыҙ!» – ти. Илселәргә боролоп: «Һеҙ Уның тураһында ниндәй фекерҙә?» – тип һорай. «Унан олуғыраҡ, тыйнағыраҡ, Уның кеүек һис нәмәнән ҡурҡмаған, һаҡсыларһыҙ килеш кенә халыҡ араһында йәйәү йөрөгән башҡа хөкөмдар күргәнебеҙ булманы! Сәхәбәләре Уның янында тауыштарын күтәрмәй, тыныс тауыш менән генә һөйләшәләр...» – тип, күргәндәрен шаҡҡатып һөйләй башлай.

Ширәүәйеһтең атаһын үлтергәнлеге тураһында хат килгәс, ҡараһалар, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм белдергән ваҡыт сәғәте-минуты менән тура килә. Вәли Базан Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тураһында: «Был зат, һис шикһеҙ, Аллаһ тарафынан кешеләргә ебәрелгән бер Пәйғәмбәр!» – тип, мосолманлыҡ ҡабул итә. Асылда, фарсы булып, Йәмәндә йәшәгән Әбналар ҙа мосолманлыҡҡа күсә (Ибне Сәғд, I, 260; Әбү Нуғайм, *«Дәлаил»,* II, 349-350; Диярбәкри, II, 35-37).

❁

Аллаһ Рәсүленең исламға саҡырыу хатын һәм уны алып килгән илсене иң яҡшы ҡаршы алыусы иһә Эфиопия Нәжәшие була. Ғәмр ибн Өмәййә раҙыйаллаһу ғәнһү арҡылы Нәжәшигә ирештерелгән хатта исламға саҡырыу менән бергә хәҙрәти Мәрйәм һәм хәҙрәти Ғайса тураһында ла ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт була. Исламды элегерәк Эфиопияға һижрәт ҡылған мосолмандарҙан әҙме-күпме өйрәнгән, был мәсьәләлә баштан уҡ ыңғай мөнәсәбәт күрһәткән Нәжәши әлеге саҡырыу хаты менән иман офоҡтарына күңел ҡанатын йәйеп ебәрә. Ул ваҡытта янында булған Әбү Талиптың өлкән улы хәҙрәти Жәғфәр ҡаршында шәһәҙәт кәлимәһен ҡабатлап, мосолманлыҡҡа күсә. Артабан Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм үтенесе сәбәпле, үҙ мәмләкәтендәге мөһәжирҙәрҙе ике корабҡа тейәп оҙата. Шулай уҡ хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә иман килтереүен белдергән хат та ебәрә. Хатта быңдай юлдар бар:

«Аллаһтың Рәсүле Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә Нәжәшиҙән.

Йә Рәсүлүллаһ! Һиңә сәләм булһын, Аллаһтың рәхмәт һәм бәрәкәте Һиңә ирешһен! Үҙенән башҡа һис бер илаһ булмаған Аллаһ мине исламға һидәйәт ҡылды.

Йә Рәсүлүллаһ! Хәҙрәти Ғайсаның хәлен иҫкә алған хатығыҙ миңә иреште. Ерҙең һәм күктең Раббыһы менән ант итәм, хәҙрәти Ғайса ла үҙе тураһында Һин иҫкә алғандарҙан артыҡ бер нәмә лә һөйләмәгән. Уның хаҡты тәблиғ ҡылыуы ла нәҡ Һин әйткән кеүек. Беҙгә аңлатыуҙа Һиңә вазифа йөкләнгән ислам нигеҙҙәрен өйрәндек. Ағайыңдың улы (Жәғфәри Таййяр) менән илебеҙгә һижрәт ҡылған сәхәбәләреңде ҡунаҡ иттек. Мин шәһәҙәт килтерәм: Һин – Аллаһтың Рәсүле. Һүҙеңдә тоғро. Һин хаҡ һәм раҫланған зат.

Йә Рәсүлүллаһ! Мин Һиңә вәкилең булған ағайыңдың улы аша ант бирҙем. Уның ҡаршында Ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһҡа үҙемде тапшырҙым. Һиңә улым Әрханы ебәрәм. Мин бары үҙ-үҙемә генә хужа, әгәр килеүемде теләһәң, йә Аллаһтың Рәсүле, шунда уҡ килеп етермен. Мин Һин һөйләгәндәрҙең хаҡлығына шәһәҙәт килтерәм. Йә Аллаһтың Рәсүле, Һиңә сәләм булһын!..» (Ибне Сәғд, I, 259; Ибне Каййум, III, 689; Хамидуллаһ, *«әл-Вәсаик»,* 100, 104-105 б.).

❁

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер көндө:

*«Эй кешеләр! Әжер-сауабын Аллаһтан өмөт итеп, ошо хатты Александрия (Искәндәриә) Муҡауҡисына[227] кайһығыҙ илтер?»* – тип һорағас, Хатиб ибн Әби Бәлтаға раҙыйаллаһу ғәнһү һикереп тора ла Әфәндебеҙ ҡаршына килә: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин илтермен», – ти ул.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Эй Хатиб! Аллаһ был вазифаны һинең өсөн мөбәрәк ҡылһын!»* – тип ризалығын белдерә.

Хатиб раҙыйаллаһу ғәнһү Әфәндебеҙҙең хатын Александрия Муҡауҡисына тапшыра. Хатта былай тип яҙылған була:

*«Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.*

*Аллаһтың ҡоло һәм Рәсүле Мөхәммәттән, Ҡыбтыйҙарҙың хөкөмдары Муҡауҡиска. Һидәйәткә буйһоноусыларға, тура юлдан барыусыларға сәләм булһын.*

227. Византия императорҙары өсөн Цезарь һәм Византия Кайзеры, фарсы хөкөмдарҙары өсөн Хосрой, Эфиопия хөкөмдарҙары өсөн Нәжәши, Мысыр хөкөмдарҙары өсөн Фирғәүен, Искәндәриә (Александрия) хөкөмдарҙары өсөн Муҡауҡис, Йәмән һәм Шыхихр хөкөмдарҙары өсөн Түббағ, Һинд хөкөмдарҙары өсөн Батлымус титулы, дәрәжәһе ҡулланыла. Былар исем түгел, хөкөмдарҙарға тағылған ғөмүми титул (Ибне Кәсир, «әл-Бидая», XI, 228).

*Һине исламға саҡырам. Мосолманлыҡ ҡабул ит, сәләмәтлек тап та Аллаһ һиңә әжерен, бүләген икеләтә бирһен. Әгәр был саҡырыуымды ҡабул итмәһәң, Ҡыбтыйҙарҙың гонаһы һинең муйыныңа аҫылыр».*

قُلْ يَا أَهْلَ الْكِتَابِ تَعَالَوْاْ إِلَى كَلَمَةٍ سَوَاءٍ بَيْنَنَا وَبَيْنَكُمْ أَلَّا نَعْبُدَ إِلَّا
اللهَ وَلَا نُشْرِكَ بِهِ شَيْئًا وَلَا يَتَّخِذَ بَعْضُنَا بَعْضًا أَرْبَابًا مِّنْ دُونِ
اللهِ فَإِنْ تَوَلَّوْاْ فَقُولُوا اشْهَدُوا بِأَنَّا مُسْلِمُونَ

**«Әйт: «Эй китап әһеле! Һеҙҙең менән беҙҙең арабыҙҙа уртаҡ булған бер һүҙгә** (Тәүхид кәлимәһенә) **килегеҙ. Аллаһтан башҡаға табынмағыҙ, Уға һис нәмәне тиңдәш тотмайыҡ һәм Аллаһты ҡалдырып, кемдер кемделер илаһҡа тиңләмәһен! Әгәр йөҙ сөйөрһәләр, ана шул ваҡытта: «Шаһит булығыҙ: беҙ – мосолмандарҙан!» – тип әйтегеҙ!»** («Әлү Ғимран», 64).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең хаты уҡылғас, Муҡауҡис, Хатиб раҙыйаллаһу ғәнһүҙе янына саҡырып, дин әһелдәрен йыя. Ваҡиғаның дауамын Хатиб раҙыйаллаһу ғәнһү түбәндәгесә бәйән ҡыла:

«Муҡауҡис миңә: «Аңларға теләгән ҡайһы бер нәмәләрҙе һинән һораясаҡмын һәм ундай нәмәләр тураһында һинең менән һөйләшәсәкмен», – тине. Уға: «Бойороғоҙ, һөйләшәйек», – тип әйттем. Муҡауҡис: «Һинең Әфәндең – Пәйғәмбәр, шулаймы?» – тип һораны. «Эйе, Ул – Аллаһтың Рәсүле», – тип раҫланым. «Ул ысындан да шундай Пәйғәмбәр икән, үҙен тыуған иленән ҡыуып, башҡа ергә һыйынырға мәжбүр иткән ҡәүеменә ҡаршы ниңә Аллаһҡа доға ҡылманы?» – тип һорағас, уға: «Һин Ғайса ибн Мәрйәмдең Аллаһ Пәйғәмбәре булғанлығына шәһәҙәт килтерәһең, шулай бит? Ул ысындан да Пәйғәмбәр булғас, ҡәүеме уны тотоп алып, аҫып ҡуйырға теләгәндә, үҙен ошо донъя күгенә күтәреләһе урынға, ҡәүемен һәләк итһен өсөн, Аллаһҡа ялбарһа ярамай инеме?» – тинем. Муҡауҡис әйтер һүҙ таба алманы. Бер аҙ ваҡыт өндәшмәй торғандан һуң: «Һүҙеңде ҡабатла!» – тине. Ҡабатланым. Муҡауҡис йәнә тынып ҡалды. Ахырҙа: «Матур әйттең. Һин аҡыллы зат, бик урынлы әйтәһең һәм аҡыллы, зирәк зат янынан килгәнһең», – тине. Мин иһә шунан һуң Муҡауҡисҡа: «Һинән әүәл бында бер әҙәм үҙен иң бөйөк илаһ, тип белдергән ине. Аллаһ Тәғәлә ул Фирғәүенде донъя һәм әхирәт ғазабына тотоп, язаһын бирҙе. Һин үҙеңдән әүәлгеләрҙән ғибрәт ал һәм башҡалар өсөн ғибрәт булма!»[228] – тип әйттем. Муҡауҡис: «Беҙҙең үҙ динебеҙ бар, хәйерлерәген күрмәй тороп, уны ташламаясаҡбыҙ!» – тине.

228. Был тәрән мәғәнәле ғибәрәне шағир бик матур итеп әйтеп бирә:
Үткәндәрҙән ғибрәт алмаһа кеше,
Киләсәк өсөн ғибрәт булыр эше…

Шул ваҡыт мин: «Ислам һин эйәргән диндән, һис шикһеҙ, өҫтөнөрәк! Беҙ һине Аллаһ Тәғәлә кешеләргә хаҡ дин итеп һайлаған исламға саҡырабыҙ. Мөхәммәт Мостафа салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һине генә түгел, бөтә кешеләрҙе саҡыра. Улар араһында Уға ҡарата иң ҡырыҫ һәм әшәке ғәмәл ҡылыусылар ҡөрәйешлеләр булды. Уға ҡаршы иң күп дошманлыҡты йәһүдиҙәр ҡылды. Кешеләрҙән иң ҙур яҡынлыҡ күрһәтеүселәр иһә христиандар булды. Хәҙрәти Муса хәҙрәти Ғайса тураһында нисек һөйөнөслө хәбәр еткергән булһа, хәҙрәти Ғайса иһә хәҙрәти Мөхәммәт ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм тураһында хәбәр итә. Беҙҙең һине Ҡөрьәнгә өндәшеүебеҙ, һинең Тәүратҡа эйәреүселәрҙе Инжилгә саҡырыуың кеүек. Һәр кеше үҙ ваҡытында килгән Пәйғәмбәргә өммәт булып тора. Һин – хәҙрәти Мөхәммәт ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм осоронда тыуып-үҫкәндәрҙән. Тимәк, беҙ һине исламға өндәүебеҙ менән Ғайса ғәләйһиссәләм диненән айырмайбыҙ, йыраҡлайтмайбыҙ. Киреһенсә, уның пәйғәмбәрлегенә ярашлы рәүештә ғәмәл ҡылырға тәҡдим иткән булабыҙ», – тинем. Муҡауҡис: «Мин ул Пәйғәмбәрҙең динен тикшерҙем. Унда донъялыҡтан баш тартырға ла ҡушмай, хупланған һәм рөхсәт ителгән нәмәләрҙе лә тыймай. Ул юлынан яҙған сихырсы ла, йәшерен ғилем белеүе тураһында хәбәр таратыусы ялғансы ла түгел. Киреһенсә, үҙендә йәшерен, серле нәмәне асып, хәбәр биреү кеүек пәйғәмбәрлек сифаттары бар. Шуға ла ҡарамаҫтан, тағын бер аҙ уйларға теләйем», – тине.

Һуңынан Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ хатына былдай яуап яҙҙырҙы:

«Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.

Мөхәммәт ибн Ғабдуллаһҡа Муҡауҡистан.

Һиңә сәләм булһын! Хатыңды алдым. Һин бәйән ҡылған һәм мине өндәгән нәмәләрҙе аңланым. Тағы бер Пәйғәмбәр киләсәген белә инем, ләкин ул Дамаскта донъяға килер, тип уйланым. Илсеңде ҡабул иттем. Һиңә Ҡыбтыйҙар өсөн дәрәжәләре юғары ике йәриә менән кейем-һалым ебәрәм. Атланып йөрөргә тип, Һиңә бер ҡасыр ҙа бүләк итәм. Һиңә сәләм булһын!»

Муҡауҡис шунан артыҡ һис бер ни эшләмәне, мосолманлыҡ та ҡабул итмәне. Миңә иһә: «Һаҡ бул! Ҡыбтыйҙар һинең ауыҙыңдан бер һүҙ ҙә ишетмәһен!» – тип киҫәтеп ҡуйҙы» (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 266-267; Ибне Сәғд, I, 260-261; Ибне Хажәр, *«әл-Исабә»,* III, 530-531).

Күренгәнсә, Муҡауҡис Аллаһ Рәсүленең саҡырыуын хуш ҡаршылай. Ул һуңғы Пәйғәмбәр әле донъяға киләсәген белә, фәҡәт уның Дамаск төбәгендә барлыҡҡа киләсәген фаразлай. Был ялған уй уның хаҡиҡәткә эйәреүенә кәртә ҡора һәм Муҡауҡис иманға килә алмай. Ләкин хатты килтергән Хатиб менән төрлө бүләктәр, атланыр өсөн яраҡлы хайуан һәм ике йәриә (хәҙрәти Мария менән уның һеңлеһе Ширинде) ебәрә.

Юлда ваҡытта Хатиб раҙыйаллаһу ғәнһү әлеге апай-һеңелгә ислам тураһында һөйләй һәм уларҙы мосолман булырға өндәй, ҡыҫтай. Йәриәләр,

иманға килеп, хаҡ дин менән хөрмәтләнә.[229] Шул рәүешле, әле Мәҙинәгә килгәнсе үк, мәңгелек хаҡиҡәткә ирешәләр.

Хатиб раҙыйаллаһу ғәнһү Муҡауҡистың һүҙҙәрен тапшырғанда, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Кире бәндә, батшалығын ҡыҙғанды! Үҙе һаҡлаған батшалығы иһә уға ҡалмаясаҡ!»* – тип белдерә (Ибне Сәғд, I, 260-261; Диярбәкри, II, 38).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йәриә ҡыҙ Ширинде никах менән Хассән ибн Сабитҡа бирә, хәҙрәти Марияны иһә үҙенә ҡатынлыҡҡа ала. Рәсүлүллаһтың улы Ибраһим – ошо ҡатынынан. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм илаһи маҡсат менән ғәмәлгә ашырған был никахтың да бер төркөм сәйәси файҙалары күренә. Мәҫәлән, был хәл мысырлыларға бик уңай тәьҫир яһай, ислам менән Византия араһында унан һуңғы йылдарҙағы һуғыштарҙа Мысыр халҡы византиялыларҙы яңғыҙ ҡалдырып, ислам ғәскәренең еңеүгә таба ышаныслыраҡ аҙымдар менән барыуына булыша.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм туғандарға ҡарата мөғәмәләнең күркәм үрнәген күрһәтеп, сәхәбәләренә былай ти:

*«Һеҙ кырат тип аталған үлсәү бермәмеген ҡулланған Мысырҙы яулаясаҡһығыҙ. Уның халҡына якшы мөғәмәлә һаҡларға кәңәш итәм, васыятымды үтәгеҙ. Сөнки улар менән нәҫел-нәсәп туғанлығы ла, никах бәйләнеше лә бар»* (Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 226-227).

Билдәле булғанса, Аллаһ Рәсүленең нәҫеле хәҙрәти Исмәғилгә барып тоташа. Исмәғил ғәләйһиссәләмдең әсәһе хәҙрәти Һәжәр мысырлы булғанға күрә, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе мысырлыларҙы туған тип һанай. Никах бәйләнеше иһә Мария инәбеҙҙән башлана.[230]

❁

Сүриәле Ғәссәни ғәрәптәренең башлығы булған Харис иһә Шужағ ибн Вәһб раҙыйаллаһу ғәнһү алып килгән Пәйғәмбәр хатына ҡарата ҡәбәхәт, әҙәпһеҙ ҡылана. Хатта мосолмандар өҫтөнә яу менән барыу өсөн Византия императорынан рөхсәт тә һорай. Ләкин император быға ҡаршы килә, кире ҡаға.[231]

Пәйғәмбәрҙең хатын Сәлит ибн Ғумәйр раҙыйаллаһу ғәнһү тапшырған Йәмамә идарасыһы Хәүзә лә илаһи саҡырыуҙы ҡабул итмәй. Оҙаҡ та үтмәй, ул шул ғәфләт эсендә үлеп тә китә.[232]

❁

229. Ибне Сәғд, VIII, 212.
230. Ибне Һишам, I, 4.
231. Ибне Сәғд, I, 261.
232. Ибне Сәғд, I, 262.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм төрлө төбәктәргә ебәрә торған илселәренә ҡайһы мәсьәләләргә иғтибар итеү кәрәклеге тураһында кәңәштәр бирә. Мәҫәлән, Аллаһ Рәсүле Химйәрҙә йәшәүсе кешеләргә бер хат яҙа. Хатты хәҙрәти Ғыйаш раҙыйаллаһу ғәнһү менән ебәргәндә, уға былдай кәңәштәрен еткерә:

*«Унда барғас, төндә кермә, таң атыуын көт. Шунан иң күркәм рәүештә тәһәрәтеңде ал, ике рәкәғәт намаҙ уҡы. Һиңә уңыш насип итһен һәм матур ҡабул итһендәр өсөн, Аллаһ Тәғәләгә доға ҡыл. Һуңынан яҡшылап әҙерлән, хатыңды уң ҡулыңа тот һәм уны уң ҡулың менән уларҙың уң ҡулына бир. Шулай эшләһәң, һине ҡабул итәсәктәр...»*

Ғыйаш раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип иҫкә ала: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡушҡанса эшләнем, исламды ҡабул иттеләр. Унан һуңғы ваҡиғалар ҙа Аллаһ Рәсүле белдергәнсә раҫланды» (Ибне Сәғд, I, 282-283).

Был саҡырыуҙар Мәҙинәнән тороп барлыҡ йыһанды солғау юлында исламдың тәүге аҙымдары була. Шул рәүешле Ғәрәп ярымутрауында донъяға килгән ислам һәр тыуыр көн менән киңерәк таралыуын дауам итә. Сөнки олуғ еңеүҙәрҙең ныҡ нигеҙҙәре шәхсән хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк ҡулдары менән һалына.

### Йәһүдиҙәрҙең Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә сихыр һалыуы

Йәһүдиҙәрҙең абруйлы заттары, үҙен мосолман тип иғлан итһә лә, асылда монафиҡ булған, сихырсылыҡ эшендә бик оҫта йәһүди Ләбид ибн Ғәсәмгә мөрәжәғәт итә: «Һин беҙҙең иң күренекле сихырсыбыҙ! Мөхәммәт ирҙәребеҙҙе һәм ҡатындарыбыҙҙы сихырланы. Беҙ Уға ҡаршы бер ни ҙә эшләй алманыҡ. Һин Уның беҙгә ҡарата ниҙәр эшләгәнен, динебеҙгә нисек ҡаршы төшкәнен, арабыҙҙан кемдәрҙе үлтергәнен йәки һөргөнгә ҡыуғанын үҙ күҙҙәрең менән күрҙең. Беҙ Уны бөтә ҡылғандары өсөн сихырлап яҙалау эшен һиңә йөкләйбеҙ!» Һәм Йәшәйеш нурын сихырлау өсөн, өс динар (алтын) бирәләр.

Ләбид Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең бер нисә сәс бөртөгөн эләктереү юлын эҙләй башлай. Теләгене ысынға ашырғас, унда әллә нисә төйөн яһап, әфсенләп өрә. Әлеге төйнәлгән һәм әфсенләнгән сәстәрҙе ата хөрмәнең ҡороған сәскә тажы эсенә ҡуя. Һуңынан уны алып китеп, бер ҡойо эсендәге баҫма ташының аҫтына урынлаштыра. Ләбид сихыр һалғас, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ауырып китә. Күҙҙәренең нуры һүрелә. Ауырыуы көндәр буйы дауам итә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ашау-эсеүҙән ҡала.

Аллаһ Тәғәлә Рәсүленә был сихырҙың кем тарафынан, нисек һалынғанын һәм ҡая йәшерелгәнен күрһәтә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Ғәли менән Ғәммәрҙе Зәруан ҡойоһона ебәрә. Ҡойоноң һыуы ҡынаға буялып бөткән, уның янындағы хөрмә ағастарының остары ла шайтан башына

оҡшап ҡалған була. Хәҙрәти Ғәли менән Ғәммәр ҡойоноң һыуын түгеп, уны бушаталар, эсендәге баҫма ташын күтәреп, сихыр төйөнсөгөн табалар.

Был ваҡытта Ябраил ғәләйһиссәләм «Фәләҡ» һәм «Нәс» сүрәләрен алып килә. Һәр аятты уҡыған һайын, бер төйөн сиселә. Иң һуңғы төйөн сиселгәндә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ бауҙан ҡотолған кеүек асылып, яҡтырып китә. Ризыҡтан ауыҙ итә, һыу эсә башлай. Аллаһ Рәсүле Зәруан ҡойоһон күмдерә. Сихыр һалған йәһүҙи Ләбидте саҡырып та тормай, был ғәйебен иҫкә алып, уны язаға ла тартмай. Үҙенең тормошона ҡул күтәргән Ләбидте һәм уның ҡәүеме – Бәни Зурайк йәһүдиҙәренең дә һис береһен үлтерергә бойормай.[233]

Хәҙрәти Нәби саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер ваҡыт:

*«Ете һәләк итеүсе нәмәнән ҡасығыҙ!»* – тип белдерә.

Сәхәбәләр: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Ниҙәр ул?» – тип һорайҙар.

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ:

*«Аллаһҡа тиңдәш ҡуйыу, сихыр (боҙом) һалыу, Аллаһ (ҡағылыуҙы) харам ҡылған бер йәнде хаҡһыҙ үлтереү, риба мал ашау, йәтим малын ашау, һуғыш ҡырынан ҡасыу, намыҫлы һәм әҙәпле ҡатындарҙы зинала ғәйепләү»,* – тип асыҡлай (Бохари, «Васәя», 23; Мөслим, «Иман», 145).

Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм башҡа хәҙис шәрифтәрендә былай ти:

*«Кем бер төйөн һалып, һуңынан уны әфсенләп өрһә, сихыр һалған булыр. Кем сихыр һала, ширккә батыр...»* (Нәсаи, «Тахрим», 19).

*«Кем урланған йәки юғалған берәй малдың урынын хәбәр итеүсе затҡа (аррафҡа)*[234] *барып, ундайҙарҙан берәй нәмә һорар һәм әйткән һүҙҙәрен дә раҫлаһа, был кешенең ҡырҡ көн бер намаҙы ла ҡабул ителмәҫ»* (Мөслим, «Сәләм», 125).

### Хаин һәм фетнәсе йәһүҙигә һуңғы һөжүм – Хәйбәрҙе яулау

(Һижри 7-се йылдың сәфәр-рабиғүл-әүүәл айҙары / 628 йылдың июнь-июль айҙары).

Мосолмандар менән мәккәле мөшриктәр араһындағы Хөдәйбиә килешеүен, тышҡы күренешенән сығып, ислам фронтының көсһөҙлөгөн белдерә, тип уйлаған монафиҡтарҙың ҡарашына Хәйбәр йәһүдиҙәре лә эйәрә. Элегерәк ситкә һөрөлгән йәһүҙи ҡәбиләләре араһына һыйынғандарҙың

233. Ҡарағыҙ: Ибне Сәғд, II, 197; Бохари, «Тыйб», 47, 49; Мөслим, «Сәләм», 43; Нәсаи, «Тахрим», 20; Әхмәт, IV, 367, VI, 57; Ғайни, XXI, 282.

234. Ҡәһин – киләсәкте әйтеп бирә алыуы тураһында һөйләп йөрөй торған фал асыусы. Гарраф та бер мәғәнәһе менән ҡәһин тигәнде белдерә. Ләкин арраф тип, күберәк урланған йәки юғалған берәй нәмә тураһында әйтеп биреүсе заттарҙы атайҙар. Тағын мүнәжжимдәр (астрологтар) бар, улар ҙа асылда ҡәһин. Айырма шунда: мүнәжжим киләсәк ваҡиғаларҙы йондоҙҙарға ҡарап белеүен раҫларға тырыша.

ҡотортоуы сәбәпле, күпмелер ваҡыттан һуң Хәйбәрҙә ҙур фетнә усағы ҡабына. Йәһүдиҙәр Ғәтәфән ҡәбиләһенә, бергә эш йөрөткән осраҡта, бер йыллыҡ уңыштарының яртыһын бирергә вәғәҙә итә. Йәһүдиҙәр тарафына Ғәтәфән ҡәбиләһе лә ҡушылғас, барыһы бергә яман ниәттәрен тормошҡа ашырыу өсөн эшкә керешәләр. Улар Мәҙинәгә бер ғәскәр ебәрергә план ҡора.[235]

Йәһүдиҙәрҙең былдай ғәмәленә ҡаршы Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренән Ғабдуллаһ ибн Рәүәхәне, тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн, Хәйбәргә ебәрә. Ләкин йәһүдиҙәрҙән тиҫкәре яуап алынғас, сәхәбәләренә:

*«Беҙҙең менән бары йыһатҡа ынтылыусылар ғына барһын!»,* – тип, изге Хәйбәр һуғышына сығасаҡтары тураһында иғлан итә (Ибне Сәғд, II, 92, 106).

Сөнки һуғыш инде ҡотолғоһоҙ була. Икенсе яҡтан ҡарағанда иһә, Мәҙинә Хәйбәр менән Мәккә араһындағы ҡала. Тимәк, мөшриктәр менән бер һуғыш ҡупһа, Хәйбәр мосолмандарҙың тылында бик ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра.

Пәйғәмбәрҙең фарманын ишеткән әсхәбе кирам, һөйөнә-һөйөнә, изге һуғыш өндәүенә эйәрә. Ләкин Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер яҡтан сәхәбәләрен йыһатҡа күтәрһә, икенсе яҡтан иһә Хөдәйбиәлә булмағандарҙы ғәскәренә ҡабул итмәй. Сөнки элеккерәк һуғыштарҙа араларына ғәнимәт алыу маҡсаты менән үтеп кергән монафиҡтарҙың иң ситен саҡтарҙа хыянаты иман ғәскәре өсөн айырыуса талсыҡтырғыс, ауыр була. Хәҙер иһә тағы шул уҡ бәндәләр бай йәһүдиҙәрҙең күҙ ҡамаштырырлыҡ байлыҡтарынан өлөш алыу уйы менән һуғышта ҡатнашырға теләйҙәр. Шуға күрә Хөдәйбиәлә булғандарҙан ҡала, башҡаларҙа ҡалҡып сыҡҡан ынтылыш – һуғышта ҡатнашыу теләге кире ҡағыла. Асылда, Йәнәбел-Хаҡ әмере лә шул йүнәлештә була:

قُلْ لَّنْ تَتَّبِعُونَا

**«…**(Әй Рәсүлем! Уларға) **әйт: «Һеҙ һис беҙгә эйәрмәйәсәкһегеҙ!..»** («әл-Фәтех», 15).

Мосолмандарҙың Хәйбәргә яу сабыу өсөн әҙерләнеүе Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ менән антлы килешеүҙә булған Мәҙинә йәһүдиҙәрен бик борсоуға һала һәм хәрәкәткә этәрә. Улар Әфәндебеҙ Ҡәйнүҡәғ, Нәдир һәм Ҡурайҙа йәһүдиҙәрен еңгән кеүек, Хәйбәр йәһүдиҙәрен дә еңелеүгә дусар итәсәген аңлай. Ул ваҡытта мосолмандарҙа әҙме-күпме аласаҡ бурысы булып, шуны ҡайтартыр өсөн мөьминдәрҙең яғаһына йәбешмәгән бер йәһүҙи ҙә ҡалмай. Түбәндәге ваҡиға был хәлде бик яҡшы асып һала, шул уҡ ваҡытта Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡол хаҡы мәсьәләһенә ни тикле иғтибарлы булғанлығын да раҫлай.

Йәһүҙи Әбү Шаһмдың Ғабдуллаһ ибн Әби Хадрәд разыйаллаһу ғәнһүҙән биш дирһәм алаһы бурысы була. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү ғаиләһе өсөн

235. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 530-531, 566, 640; Ибне Сәғд, II, 92.

был йәһүдиҙән арпа һатып ала. Әбү Шаһм яғаһына йәбешкәс, ул: «Миңә бер аҙ ваҡыт бир, иншаллаһ, бурысымды түләрмен. Сөнки Аллаһ Тәғәлә Пәйғәмбәренә Хәйбәр ғәниммәтен бирергә вәғәҙә итте. Әй Әбү Шаһм! Беҙ Хижаздың ризыҡ һәм зиннәт яғынан иң бай ҡалаһына барабыҙ», – ти.

Йәһүҙи Әбү Шаһмдың көнсөлөгө һәм боҙоҡлоғо тағы ла көсәйә: «Һин Хәйбәр йәһүдиҙәрен үҙегеҙ элек һуғышҡан ғәрәптәр, тип уйлайһыңмы әллә? Тәүрат менән ант итәм, унда ун мең һуғышсы бар», – тип белдерә.

Ғабдуллаһ: «Эй Аллаһ дошманы! Һин беҙҙең химаябыҙҙа йәшәйһең. Валлаһи, һине Рәсүлүллаһ ҡаршына алып барасаҡмын!» – ти һәм уны тотоп алып, Аллаһ Рәсүле янына килтерә: «Йә Рәсүлүллаһ! Был йәһүдиҙең ни һөйләгәнен тыңла әле!» – тип, Әбү Шаһмдың әйткәндәре тураһында хәбәр еткерә. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һис нәмә әйтмәй, өндәшмәй тора. Бары ирендәренең генә һелкенгәне күренеп ҡала. Ләкин ни әйткәне ишетерлек булмай.

Йәһүҙи: «Эй Әбүл-Ҡасим! Был бәндә миңә ҡарата хаҡһыҙлыҡ ҡылды, бурысын түләмәне», – тип аңлата.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ғабдуллаһҡа:

*«Бир уның тейешле хаҡын!»* – тип бойора.

Ғабдуллаһ бурысын Хәйбәр ғәниммәте менән түләйәсәге тураһында белдерһә лә, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ шул уҡ әмерен тағын ике тапҡыр ҡабатлай. Шунан һуң Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү тороп, баҙарға китеп бара. Арҡаһындағы еләнен һалып, салмаһына төрөнә лә йәһүҙигә: «Ошо кейемемде минән һатып ал!» – ти.

Йәһүҙи еләнде дүрт дирһәмгә һатып ала. Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү ҡалған аҡсаны ла табып, бурысын түләй (Әхмәт, III, 423; Ваҡыди, II, 634-635).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәскәре менән юлға сыҡҡанда, һәр һуғышындағы кеүек, Йәнәбел-Хаҡҡа түбәндәге доға менән мөрәжәғәт итә:

اَللّٰهُمَّ رَبَّ السَّمٰوَاتِ السَّبْعِ وَمَا أَظْلَلْنَ وَرَبَّ الْاَرَضِينَ السَّبْعِ وَمَا أَقْلَلْنَ
وَرَبَّ الشَّيَاطِينِ وَمَا أَضْلَلْنَ وَرَبَّ الرِّيَاحِ وَمَا ذَرَيْنَ أَسْأَلُكَ خَيْرَ هٰذِهِ الْقَرْيَةِ
وَخَيْرَ أَهْلِهَا وَخَيْرَ مَا فِيهَا وَنَعُوذُ بِكَ مِنْ شَرِّهَا وَشَرِّ أَهْلِهَا وَشَرِّ مَا فِيهَا

*«Эй ете ҡат күктәрҙең һәм уның аҫтындағыларҙың, ете ҡат ерҙәрҙең һәм уның эсендәгеләрҙең, шайтандарҙың һәм улар аҙаштырғандарҙың, елдәрҙең һәм улар осороп алып киткәндәрҙең Раббыһы булған Аллаһым! Беҙ Һинән был ҡала, уның халҡы һәм уның эсендәге нәмәләр өсөн хәйерлене һорайбыҙ! Был*

*ҡаланың, уның халҡының һәм уның эсендәге нәмәләрҙең яуызлығынан Һиңә һығынабыҙ!»*[236] (Ибне Һишам, III, 379; Ваҡыди, II, 642).

Юлда барғанда, мосолмандар: «Аллаһу әкбәр! Аллаһу әкбәр! Лә иләһә илләллаһу үаллаһу әкбәр!» – тип барыһы бер юлы ҡысҡырып тәкбир әйтә башлай. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип әйтә:

*«Үҙ нәфестәрегеҙгә ҡарата мәрхәмәтле булығыҙ! Сөнки һеҙ суҡраҡ затҡа мөрәжәғәт итмәйһегеҙ, һеҙ өндәшкән зат йәшерен дә түгел. Һеҙ күреүсе, ишетеүсе, (ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа) һеҙҙең менән булған бер Затҡа – Аллаһҡа мөрәжәғәт итәһегеҙ. Һеҙ доға менән ялбарған Зат һәр ҡайһығыҙға атланған ат-дөйәгеҙҙең муйынынан да яҡыныраҡ»* (Бохари, «Дәғүәт» 50, 67; Мөслим, «Зикер», 44).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм Хәйбәргә төндә килеп етә һәм шунда көтөп тора, сөнки Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ төн ҡараңғылығында дошманға һөжүм итмәй, таң атҡанын көтә. Иртән йәһүдиҙәр кәйлә, көрәк һәм үрелгән кәрзиндәр күтәреп, ҡәлғә ситенә сыға. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде күргәс: «Мөхәммәт бит был! Валлаһи, Мөхәммәт һәм Уның ғәскәре!» – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡәлғәләренә кереп китәләр. Шунан һуң Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр! Емерелеү юлын һайланы Хәйбәр! Беҙ бер дошман ҡәүемдең иленә һөжүм яһап килеп керһәк, алдан киҫәтелгән кафырҙарҙың хәле яман булыр!»* – тип белдерә (Бохари, «Мағази», 38; Ибне Һишам, III, 380).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм урҙаһын Ғәтәфән менән Хәйбәр араһындағы Рәжи тигән урында ҡора. Шул рәүешле ике союзниктың бер-береһенә булышыу өсөн берләшеүҙәренә кәртә ҡуя. Ысындан да, Хәйбәр йәһүдиҙәре ярҙам һорағандан һуң сәфәргә ҡуҙғалған ғәтәфәнлеләр, юлдарының өҙөлгәнлеген күргәс, ҡурҡып, кире борола. Шулай итеп, үҙҙәре генә һуғышҡа сығырға мәжбүр булған Хәйбәр йәһүдиҙәренә ҡәлғәгә бикләнеп һаҡланыуҙан башҡа сара ҡалмай.

Солғаныш ваҡытында йәһүдиҙәрҙе һуғышҡа ҡотортоу өсөн, бер фетнәсе төрлө ялған-уйҙырмалар һөйләй. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Йәһүдиҙәргә бер шайтан килгән дә: «Мөхәммәт малдарығыҙҙы ҡулға төшөрөү өсөн генә һеҙҙең менән һуғыша!» – тигән. «Һеҙ «Лә иләһә илләллаһ», тип кенә әйтегеҙ, шуның менән малдарығыҙҙы һәм ҡандарығыҙҙы һаҡлағыҙ. Әхирәттәге хисабығыҙ иһә Аллаһ ихтыярында!» – ул йәһүдиҙәргә шулай тип ҡысҡырығыҙ әле»,* – тип бойора.

---

236. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ниндәйҙер бер торлаҡ пунктҡа аяҡ баҫырға йыйынғанда, уны күргәс, һәр ваҡыт ошо доғаны уҡый торған була (Хаким, I, 614/1634).

Йәһүдиҙәргә Рәсүлүллаһ ҡушҡанса хәбәр һалалар. Улары иһә: «Мусаның беҙҙең аралағы китабы – Тәүрат менән ант итәбеҙ, беҙ һеҙ талап иткәнде лә эшләмәйәсәкбеҙ, динебеҙҙе лә ташламайбыҙ!» – тип ҡаршы сыға (Ваҡыди, II, 653).

Солғаныш әллә нисә көн дауам итә. Мосолмандарҙың ризыҡтары бөтөп килә. Һуғыш шарттары шаҡтай ауырая. Мосолмандарҙан шәһит китеүселәр, яраланыусылар ҙа була, төрлө ҡыйынлыҡтарға түҙергә тура килә. Ләкин Аллаһ Рәсүле һәр мөмкинлектә кешеләрҙе исламға һәм Аллаһҡа иман килтереүгә саҡырыуҙан туҡтамай.

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм исламға өндәү мәсьәләһендә берәүҙе лә кәмһетеп, аҙһынып ҡарамай. Әйтәйек, Хәйбәрҙе яулаған саҡта быны раҫлаған бер үрнәк күренеш була. Аллаһ Рәсүле бер йәһүдиҙең һарыҡтарын көтөүсе бер ҡолға ла ислам тураһында оҙон-оҙаҡлап һөйләй һәм, шулай итеп, ул ҡолдоң һидәйәткә ирешеүенә этәрә.[237] Ваҡиға былай була:

Бер күренекле йәһүдиҙең ҡуйҙарын көтөп тормош алып барған Йәсар, иртәнге яҡта ҡала ситендә ҡуйҙар һаҡлағанда, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ менән осраша. Күпмелер ваҡыт ғәпләшкәс, Йәсар ислам динен ҡабул итә. Аллаһ Рәсүле уның исемен Әсләм тип үҙгәртә. Һуңыраҡ көтөүсе үҙ ҡарамағындағы ҡуйҙарҙы ни эшләтергә тейешлеге тураһында Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙән һорай. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә:

*«Уларҙы кире бор һәм ҡыуып ебәр! Шигең булмаһын, барыһы ла хужаларына ҡайтасаҡ»,* – тип әйтә. Әсләм бер ус ваҡ таш алып, ҡуйҙарға ырғыта һәм: «Хужағыҙға ҡайтығыҙ! Валлаһи, бынан һуң мәңге һеҙҙең менән бергә булмаясаҡмын», – ти. Һарыҡтар йыйылып, әйтерһең, уларҙы оҙата-ҡыуа барыусы кемдер бар кеүек, ҡәлғәгә кереп китә. Көтөүсе иһә, мосолмандар менән бергә һуғышыу өсөн, ҡәлғәгә таба юл тота.[238]

Мосолманлыҡҡа күсеүгә үк, шунда уҡ йыһатҡа ынтылған Әсләм разыйаллаһу ғәнһү бер аҙҙан шәһит китә. Уның жәсәде Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килтерелә. Аллаһ Рәсүле бер төркөм сәхәбәләре менән бергә уға таба йүнәлә лә, кинәт йөҙөн башҡа яҡҡа бора. Бының сәбәбен һорағас:

*«Шул миҙгелдә ожмах хурҙарынан (хур әл-ғин) ике ҡатыны уның янында тора ине!»* – тип аңлата (Ибне Һишам, III, 398; Ибне Хажәр, *«әл-Исабә»,* I, 38-39).

❁

Мосолмандар шаҡтай йонсоған, уларҙың һөжүме кире ҡайтарылған, арыған һәм хәлһеҙләнгән бер ваҡытта, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип мөрәжәғәт итә:

---

237. Ибне Һишам, III, 398.
238. Ибне Һишам, III, 397-398; Ибне Хажәр, «әл-Исабә», I, 38-39.

*«Иртәгә байрағымды шундай затҡа бирәсәкмен, уның ҡулдары менән Аллаһ Хәйбәр ҡәлғәһен яулап алыуҙы насип ҡыласаҡ. Ул зат Аллаһты һәм Уның Рәсүлен ярата, Аллаһ һәм Уның Рәсүле лә ул кешене ярата!»*

Һуғышта ҡатнашыусылар байраҡтың үҙ araларынан кемгә биреләсәге тураһында уйлай-уйлай һөйләшеп, төн уҙҙыра. Таң атҡас, Аллаһ һәм Уның Рәсүленең мөхәббәтенә лайыҡ булыу өмөтө менән байраҡтың үҙенә бирелеүен теләгән бөтә сәхәбәләр Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршыһына йүгерә. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Командирлыҡҡа ул көнгә ҡәҙәр бер ҡасан да ынтылманым, мине саҡырыр, тигән өмөт менән Рәсүлүллаһҡа үҙемде күрһәтергә тырыштым», – тип иҫкә ала.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, байраҡты биреү өсөн, хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһүҙе саҡыра. Хәҙрәти Ғәлиҙең күҙҙәре ауыртҡанға, уны ҡулынан етәкләп алып киләләр. Хасталығы арҡаһында ул ҡая баҫҡанын да күрә алмаҫлыҡ хәлдә була. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Ғәли разыйаллаһу ғәнһүҙең был хәләтен күргәс, уның ауыртҡан күҙҙәренә доға уҡып, мөбәрәк һулышы менән өрөп ебәрә. Аллаһ Арысланы хәҙрәти Ғәли Аллаһ рөхсәте менән шифа ала. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға көбә кейҙереп, байраҡты тоттора ла күрһәтмәһен бирә:

*«Йә Ғәли! Алға бар! Аллаһ еңеүҙе насип иткәнсе, уңға-һулға ҡарама!»*

Хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү кисекмәҫтән яуға ҡуҙғала ла туҡтап ҡала, һәм артына боролмайынса ғына: «Йә Аллаһ Рәсүле! Улар менән ни (эшләһендәр) өсөн һуғышайым?» – тип ауаз һала.

Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм түбәндәгесә аңлата:

*«Улар менән Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Мөхәммәттең Аллаһ Рәсүле икәнлегенә шәһәҙәт килтергәнсе һуғыш. Быны эшләгән саҡта дин тыйғандарға ҡаршы килмәһәләр, ҡандарын һәм малдарын һинән һаҡлаған булырҙар. Ысын хисаптарын иһә Аллаһ ҡаршында күрә алырҙар. Ашыҡмайынса, бик һаҡ рәүештә улар янына бар. Башта уларҙы исламға килергә саҡыр! Әгәр әлеге саҡырыуыңдан һуң берәй кеше мосолманлыҡҡа килһә, был һиңә ҡыҙыл дөйәләр бирелеүҙән дә хәйерлерәк!..»* (Бохари, «Әсхәбүн-Нәби», 9; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 32-34; Хәйсәми, VI, 151).

Ул көндө йәһүдиҙәрҙең иң атаҡлы һуғышсылары үлтерелә. Хәйбәр яулап алына. Хәйбәрҙең һигеҙ ҡәлғәһе була, уларҙың икеһен йәһүдиҙәр бер ниндәй бәрелешһеҙ тапшыра. Шул рәүешле Пәйғәмбәрҙең мөғжизәһе ысынға аша. Был һуғышта йәһүдиҙәр туҡһан өс кеше юғалта, мөьминдәрҙән ун биш кеше шәһит китә.[239]

239. Сәйед Сәйфуллаһ, әлеге ваҡиғаға ишаралап, былай ти: «Бер телем икмәк өсөн яман һәм наҙан заттарҙы маҡтама, сөнки ысын яһиллыҡ – ана шул. Хәйбәр ҡәлғәһе кеүек ҡеүәтле нәфесеңде ең, хәҙрәти Ғәли шикелле ҡаһарман булырһың».

Әбү Һурайра разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә Хәйбәр һуғышында ҡатнаштыҡ. Мосолманлыҡ ҡабул итеүе тураһында иғлан яһаған бер бәндә тураһында Аллаһ Рәсүле:

*«Ул – ут (йәһәннәм) әһеленән!»* – тип белдерә. Бәрелеш башланғас, ул бәндә батырҙарса һуғыша һәм яралана. Ҡайһы бер сәхәбәләр: «Йә Аллаһ Рәсүле! Әле күптән түгел генә Һин уның тамуҡ әһеле икәнен белдергән ул бәндә бик ярһып һуғышты һәм үлде!» – тиҙәр.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәнә:

*«Ул йәһәннәмгә киткәндер!»* – тип ҡабатлай.

Был яуаптан һуң ҡайһы бер мосолмандар шик-шөбһәгә сума яҙа. Ғәскәрҙәр быңдай хәлдә саҡта, Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмгә: «Ул яугир әле үлмәгән, тик яраһы бик ауыр!» – тип хәбәр итәләр. Төн еткәс, ул бәндә яраһының ауыртыуына түҙә алмайынса, ҡылысының осло башына ауып, үҙ-үҙен һәләк итә. Ошо хәл тураһында Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә хәбәр итәләр. Шунан һуң:

*«Аллаһу әкбәр! Шәһәҙәт килтерәм, мин – Аллаһтың ҡоло һәм Рәсүлемен!»* – тип белдерә. Артабан Билал разыйаллаһу ғәнһүгә кешеләр араһында түбәндәге хәбәрҙе таратырға бойора:

*«Йәннәткә бары мосолман заттар ғына керәсәк. Шуныһы хаҡ ки, Аллаһ был диндә гонаһлы, аҙашҡан берәй зат менән дә көсәйтер»* (Бохари, «Йыһат», 182, «Магази», 38, «Кадәр», 5; Мөслим, «Иман», 178).

❁

Хәйбәр еңеүенән һуң йәһүдиҙәр үҙ ерҙәрендә уртаҡ файҙаланыусы, арендатор сифатында ҡалырға теләй. Шуға күрә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бөтә йәһүдтәрҙе лә һөргөнгә ҡыуып ебәрмәй. Теләгән ваҡытта сығарып ебәреү, был уңдырышлы ерҙәрҙе эшкәртеп, йыллыҡ керемдәренең яртыһын биреп барыу шарты менән, йәһүдтәргә арендатор булырға рөхсәт бирә. Был йәһүдтәр хәҙрәти Ғүмәр хәлифәлеге осорона хәтле ошо шарттарҙа был урында йәшәп тора.[240]

Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә разыйаллаһу ғәнһү һәр йыл был төбәккә килеп, буласаҡ уңыш миҡдарын хисаплай һәм уның яртыһына тиң хаҡты ала. Йәһүдиҙәр Ғабдуллаһтың фаразлауҙағы иғтибарлығы, теүәллеге арҡаһында бошаманға төшә. Уларға ҡарата хәйерхаҡлы мөнәсәбәттә булһын өсөн, хатта бер ваҡыт ришүәт тә бирергә маташалар. Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә разыйаллаһу ғәнһү уларға: «Валлаһи, миңә ҡарата (яман ғәмәлдәрегеҙ сәбәпле), һеҙ – Аллаһ яралтҡандар араһында иң һөйкөмһөҙө. Шуға ҡарамаҫтан, минең һеҙҙе

240. Мөслим, «Мүсакәт», 5; Әбү Дауыт, «Хараж», 23-24/3007.

яратмауым, һеҙҙән хуш булмауым, һеҙгә ҡарата ғәҙел ғәмәл ҡылыуыма ҡомасауламай. Һеҙҙең миңә тәҡдим иткән нәмәгеҙ – ришүәт. Ә ришүәт ул – харам, беҙ иһә харам ашамайбыҙ!» – ти.

Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһүҙе хуплап, йәһүдиҙәр: «Бына был ғәҙеллек һәм дөрөҫлөк менән күктә һәм ерҙә тәртип һаҡланыр, күктәр үә ерҙәр шуның менән йәшәр», – ти (*Муватта*, «Мүсакәт», 2).

### Ҡол хаҡы мәсьәләһендә талапсанлыҡ

Хәйбәрҙә ҡулға төшөрөлгән ғәнимәт, уны яулауҙа ҡатнашыу-ҡатнашмауына ҡарамаҫтан, Хөдәйбиә яуында булғандар араһында бүленә, сөнки Аллаһ Тәғәлә Хәйбәр ғәнимәтен Хөдәйбиә сәфәрендә ҡатнашҡан мосолмандарға «Фәтех» сүрәһенең егерменсе аяты менән вәғәҙә итә.[241]

Ғүмәр ибн Хаттаб раҙыйаллаһу ғәнһү түбәндәгесә бәйән ҡыла:

«Хәйбәр һуғышы көнө ине. Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең сәхәбәләренән бер төркөм килде һәм: «Фәлән кем шәһит, фәлән кем дә шәһит!» – тип һөйләне. Шунан һуң бер кеше янынан уҙғанда: «Фәлән-фәлән дә шәһит киткән!» – тинеләр.

Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Юҡ! Мин уны ғәнимәт малдарынан хаҡһыҙ алған бер елән кейгән килеш йәһәннәмдә күрҙем»,* – тип белдерә» (Мөслим, «Иман», 182).

Иң юғары дәрәжәләрҙең береһе булған шәһитлек кешенең бик күп гонаһына кәфарәт булһа ла, өммәттең мал-мөлкәтенә хыянатты һәм ҡол хаҡын юҡка сығара алмай. Шул сәбәпле Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, шәһит киткәнлеге тураһында хәбәр ителгән был сәхәбәнең, ғәнимәт малдары бүленгәнсе, улар араһынан бер еләнде алыуы арҡаһында, йәһәннәмдә яныуын белдерә, шул рәүешле Ул йәмәғәт малына хыянаттың һәм ҡол хаҡына кереүҙең ғәфү ителмәйәсәген өммәтенә аңлата.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә хеҙмәт итеүсе Мидғам исемле ҡара тәнле ҡол була. Уны Рифаға ибн Зәйд бүләк итә. Әфәндебеҙҙең йөгөн төшөргән саҡта ҡайҙан осоп килгәне билдәһеҙ бер уҡ тейеп, уның үлеменә килтерә. Мосолмандар: «Эй Мидғам! Йәннәт һиңә мөбәрәк булһын! Йә Рәсүлүллаһ, хеҙмәтсеңә шәһитлек мөбәрәк булһын!» – тип көнләшеүҙәрен дә, хәсрәтләнеүҙәрен дә белдергәс, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Юҡ! Улай түгел. Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, Хәйбәр көнөндә ғәнимәт малдары бүленгәнсе алған бер келәм ошо миҙгелдә уның өҫтөндә ялҡынланып яна!»* – тип хәбәр һала.

241. Ваҡыди, II, 684.

Быны ишеткән мосолмандар бик ҡурҡып ҡала. Бер бәндә Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙгә берме-икеме аяҡ кейеме бауы килтереп бирә: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин дә ғәнимәт малдары бүлешкәнсе аяҡ кейемдәремә тип, ошо бауҙарҙы алған инем», – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Һиңә лә йәһәннәм утынан бер йәки ике бау (йәғни шулар арҡаһында ғазап) бар»,* – тип белдерә (Бохари, «Әйман», 33; Мөслим, «Иман», 183).

❁

Хәйбәр яуланған көндә берәү Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ янына килеп: «Йә Аллаһтың Рәсүле, бөгөн мин шундай керем алдым, был тиклемде әлеге үҙәнлектә йәшәүселәрҙең береһе лә эшләй алмағандыр», – тип маҡтана.

Әфәндебеҙ:

*«Ҡара һин, ә! Ниҙәр эшләй алдың?»* – тип һорай.

Теге әҙәм: «Мин һис туҡтамай алыш-биреш иттем. Шулай итеп, өс йөҙ уҡыййә керем алдым», – ти.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һиңә керемдәрҙең иң хәйерлеһе тураһында хәбәр бирәйемме?»* – тип һорай.

Ул бәндә: «Нимә ул, йә Аллаһтың Рәсүле?» – тип ҡыҙыҡһына.

Нәбиййи Әкрәм Әфәндебеҙ былай тип яуап бирә:

*«(Фарыз) намаҙҙан һуң уҡыясаҡ ике рәкәғәт нәфел намаҙың»* (Әбү Дауыт, «Йыһат», 168/2785).

Мөһәжирҙәр Хәйбәр ғәнимәтенән үҙҙәренә тигән мал һәм хөрмәлектәрҙе алғас, матди хәлдәре шаҡтай яҡшыра. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансарҙар уларға элегерәк бушлай биргән йәки файҙаланып тороу өсөн аманат итеп тапшырған хөрмә баҡсаларын һәм ағастарҙы ансарҙарҙың үҙҙәренә кире ҡайтара.[242]

**Дәүеслеләрҙең Мәҙинәгә килеүе**

Был ваҡытта Дәүес ҡәбиләһенән бер төркөм Мәҙинәгә килә. Уларҙы етәкләгән Туфәйл ибне Ғәмр, исламдың тәүге йылдарында Мәккәлә Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ менән осрашып, мосолманлыҡ ҡабул иткән була. Артабан иһә, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән рөхсәт алып, ҡәбиләһенә ҡайтып китә һәм уларҙы исламға өндәй. Уның дәғүәтенә беренсе булып Әбү Һурайра хәҙрәттәре эйәрә, буйһона.[243] Һуңыраҡ мосолмандарҙың

242. Ибне Ҡаййим, III, 359.
243. Ибне Хажәр, «әл-Исабә», II, 226.

һаны артып, етмеш-һикһән хужалыҡҡа тарала. Былар Хәйбәрҙе яулаған саҡта һижрәт ҡылып, Мәҙинәгә килә. Шунан Хәйбәргә барып, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән осрашалар һәм йыһатҡа ҡатнашыу теләген белдерәләр.

Сәфәр ваҡытында Әбү Һүрайра раҙыйаллаһу ғәнһү бик тыносһыҙлана, борсола, бик тиҙҙән Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе менән тәүге тапҡыр осрашыуы өсөн сабырһыҙлана. Бер яҡтан иһә:

*«Әй сәфәр төнө! Һинең оҙонлоғоңдан һәм күңелһеҙлегеңдән ялҡтым!*

*Ләкин ҡоткарыусы ла һинһең мине көфөр һәм инҡар иленән!»* – тигән бәйет юлдарын уҡый (Бохари, «Магази», 75; Ваҡыди, II, 636).

Әбү Һүрайра раҙыйаллаһу ғәнһү дәүеслеләр менән бергә Хәйбәргә килгән сағында, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уны инде яулап алған була.[244] Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Әбү Һүрайраны күргәс:

*«Һин кемдәрҙән?»* – тип һорай.

Әбү Һүрайра раҙыйаллаһу ғәнһү: «Дәүестән мин», – тип яуап бирә.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Мин Дәүестән кем менән генә осрашһам да, шуңарҙа хәйерле мөнәсәбәт күрҙем!»* – тип белдерә (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 46/3838).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дәүеслеләргә Хәйбәр ғәнимәтенән өлөш сығара.[245]

### Эфиопия мөһәжирҙәренең ҡайтыуы

Хәйбәрҙе яулап алыу тамамланып килгәндә, Эфиопиянан ун алты кешелек һижрәт төркөмө хәҙрәти Жәғфәр етәкселегендә Мәҙинәгә ҡайта. Төркөмдәгеләр Рәсүлүллаһтың Хәйбәргә киткәнен белгәс, юлдарын дауам итеп, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән осрашалар. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Жәғфәрҙе башта:

*«Холоҡ-тәбиғәтең һәм әхлағың менән шул ҡәҙәр Миңә оҡшағанһың!»* – тип маҡтай. Артабан хәҙрәти Жәғфәрҙе маңлайынан үбеп:

*«Хәйбәрҙе яулағанғамы, Жәғфәрҙең килеүенә һөйөнөргәме, белмәйем!»* – тип әйтеп ҡуя (Ибне Һишам, III, 414).

Жәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһү Пәйғәмбәрҙең быңдай хөрмәте ҡаршында бик тәьҫирләнә, тулҡынлана. Һөйөнөсөнән бер гонаһһыҙ сабый кеүек бер аяғында

244. Ибне Сәғд, IV, 328.
245. Ибне Сәғд, I, 353.

һикерә-һикерә, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ тирәһендә әйләнеп йөрөй башлай һәм һуштан яҙа.[246]

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Жәғфәр разыйаллаһу ғәнһүҙең был халәтенә ҡомасауламай. Әлеге дини һушһыҙлыҡ, экстаз халәте ҡайһы бер тәриҡәттәрҙә сөннәт дәрәжәһендәге ҡағиҙә булараҡ ҡабул ителә һәм ундай һушһыҙлыҡ, экстаз халәте үҙе иһә бер әҙерлек, шарт тип һанала.[247]

Шағир хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә мөхәббәт менән тулы былдай һушһыҙлыҡ халәтен бик күркәм һүрәтләй:

*«Йә Рәсүлуллаһ! Ғашиҡтарҙы (һушһыҙ ҡалдырып) тилерткән, (әлбиттә) Һинең (Хак Тәғәләнең көҙгөһө булған һәм өҫтөндә сикһеҙлек нурын ялтыратҡан мөбәрәк) йөҙөңдөң тиңһеҙ матурлығылыр...»*

❁

Эфиопия мөһәжирҙәре менән бергә Йәмән ҡәбиләләренән әшғариҙар ҙа Хәйбәргә килә. Шуларҙың береһе – Әбү Муса әл-Әшғари бәйән ҡыла:

«Беҙ, әшғариҙар, Йәмәндә ваҡытта, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең донъяға килеүе тураһында хәбәр алған инек. Шунан һуң ҡәүемебеҙҙән 52ме, 53мө кеше менән бергә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына һижрәт ҡылыу өсөн юлға сыҡтыҡ. Сәфәрҙә һауа торошо боҙолғанға, корабыбыҙ беҙҙе Эфиопия Нәжәшие мәмләкәтендә ҡалдырҙы. Унда Жәғфәр разыйаллаһу ғәнһү һәм уның янындағы иптәштәре менән күрештек.

Жәғфәр разыйаллаһу ғәнһү: «Бында беҙҙе Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ебәрҙе һәм күпмелер ваҡыт ошонда ҡалырға ҡушты. Һеҙ ҙә беҙҙең менән ҡалығыҙ!» – тине.

Ахырҙа унан корабҡа ултырып юлға ҡуҙғалдыҡ. Барыбыҙ бергә Мәҙинәгә килдек. Хәйбәрҙе яулаған саҡта, Аллаһ Рәсүле менән осраштыҡ. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ беҙгә Хәйбәр ғәнимәтенән өлөш сығарҙы» (Бохари, «Магази», 38; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сахәбә», 169).

### Йәһүдиҙәрҙең Пәйғәмбәребеҙҙе ағыуларға маташыуҙары

Был ваҡытта мосолмандарҙың үҙҙәренә ҡарата кешелекле мөғәмәлә күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, йәһүдиҙәр хаинлыҡтан тыйылмай. Йәшерен план ҡороп, улар хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде үлтерергә ҡарар бирә. Был ҡәбәхәттәр әле әүәлге хаталарының нәтижәләре күҙ алдында торһа ла, үҙҙәрен ғәфү иткән, башҡа йәһүҙи ҡәбиләләре шикелле һөргөнгә

246. Әхмәт, I, 108; Ибне Сәғд, IV, 35

247. Мәүләүи вәкилдәренең зекерҙә транс хәленә кергәс бөтөрөлөүҙәре лә ошо ваҡиға менән бәйле.

ҡыумаған бөйөк Пәйғәмбәргә ҡарата шундай хыянатсыл аҙымға барып, тағы бер тапҡыр анттарын боҙалар.

Әлеге мәкерле хыянатты ысынға ашырыу өсөн, йәһүҙи башлыҡтарынан Хәриҫтең ҡыҙы Зәйнәб Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде сәхәбәләре менән бергә мәжлескә саҡыра. Бер ҡуй ҡыҙҙырып, уның һәр яғына ағыу һылай. Әфәндебеҙҙең айырыуса ҡалаҡ һөйәге тирәһен яратҡанын белеп, ул урынды тағы ла күберәк итеп ағыулай. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәүге киҫәкте мөбәрәк ауыҙына ҡапҡанда, уны кире сығарып, сәхәбәләрен:

*«Был ит, Миңә үҙенең ағыулы икәнен хәбәр итә, һаҡ булығыҙ, ашамағыҙ!»* – тип киҫәтә. Ләкин сәхәбәләрҙән Бишер ибн әл-Бәрә, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ризыҡтан ауыҙ итә башлауға, иттән бер киҫәк алып, хәҙрәти Пәйғәмбәрҙең киҫәтеүе яңғырағансы, сәйнәп йотоп ебәрә. Унан ҡала башҡалар ризыҡҡа ҡағылмай.

Һатлыҡйән ҡатын, оҙаҡ та үтмәй ҡулға алынып, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршына килтерелә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ унан:

*«Ул ҡуйҙы һин ағыуланыңмы?»* – тип һорай.

Зәйнәб: «Ағыулауым тураһында һиңә кем хәбәр итте?» – тип ҡыҙыҡһына.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Шул ҡаршымдағы ҡалаҡ һөйәге еткерҙе»,* – тип асыҡлай.

Зәйнәб: «Эйе, мин ағыуланым!» – тип ғәйебен таный.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм быны ник эшләгәнде һорағас: «Һин минең атайымды, ағайымды һәм иремде үлтерҙең! Ҡәүемемә ҡарата ҡылмаған ғәмәлең ҡалманы! «Әгәр ул ысындан да Пәйғәмбәр икән, мин эшләгән нәмә, һис шикһеҙ, Уға Аллаһ тарафынан белдерелмәй ҡалмаҫ һәм ағыу зарар килтермәҫ. Әгәр ул ялғансы йәки бер хөкөмдар икән, был ағыуҙан үлеп китер, шулай итеп, Унан ҡотолорбоҙ!» – тип күңелемдән уйланым!» – ти.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Аллаһ быны эшләйәсәк көс-ҡеүәтте һиңә бирмәгән!»* – тип белдерә.

Ҡатын бер яҡтан гонаһын таныһа, икенсе яҡтан үҙе шаһит булған мөғжизә тәьҫирендә иман килтереп, үкенеүен аңлата. Ул ғәфү итеүҙәрен һорай. Ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәрелгән Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ үҙен үлтерергә маташыуҙы ғәфү итә. Әммә күпмелер ваҡыттан һуң, Бишер раҙыйаллаһу ғәнһүҙең ағыу тәьҫирендә үлеп китеүе арҡаһында, уның вариҫтары үс алырға теләй. Хәриҫтең ҡыҙына шул уҡ ағыуҙы эсертеп, улар үс алыуға ирешә.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм иһә, ағыуҙың зарарлы йоғонтоһонан арыныу өсөн, ике иңбашының араһынан ҡан алдыра (Бохари, «Жизйә», 7; Мөслим, «Сәләм», 45; Ибне Һишам, III, 390; Ваҡыди, II, 678-679; Хәйсәми, VI, 153).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өс йыл уҙып, үлем түшәгенә ятҡанда, сиренең ана шул ағыуҙан икәнлеген белдерә (Хаким, III, 242/4966).

**Мүтғә мәсьәләһе**

Хәйбәрҙе яулаған ваҡытта, ул саҡтарҙа йыш ҡулланылған, «мүтғә никахы» тигән исем менән ваҡытлыса өйләнешеүҙәр тыйыла, ә элегерәк иһә был мәсьәләлә бер ниндәй ҙә киҫәтеү сығарылмаған була.

Хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хәйбәр һуғышында ҡатындар менән мүтғәне һәм ишәк итен ашауҙы харам ҡылды» (Бохари, «Мағази», 38, «Никах», 31, «Зәбаих», 28, «Хийәл», 3; Мөслим, «Никах», 29-32; Муватта, «Никах», 41; Нәсаи, «Никах», 71).

Мүтғә – түләү бәрәбәренә билдәле бер ваҡыт аралығына берәй ҡатын-ҡыҙ менән никахлашыу тигән һүҙ. Яһилиәт осоронан ҡалған бер никах рәүеше һанала. Мүтғә никахы башта уҡ билдәләп ҡуйылған ваҡыт сығыу менән тамамлана. Вариҫлыҡ, алимент, ғиддәт (билдәле бер ваҡыт үтмәйенсә, никахлашыуҙан тыйылып тороу) кеүек ғәҙәти никах менән бәйле рәүештә барлыҡҡа килә торған хаҡтар-хоҡуҡтар мүтғәгә хас түгел. Шуға күрә Хәйбәрҙе яулаған ваҡыттан башлап, бик күп хәҙис шәрифтәр менән был йола харам тип иғлан ителә. Был мәсьәләгә ҡағылышлы бер риүәйәттә былай тип белдерелә:

*«...Хәҙер Аллаһ Жәллә Жәләлүһү уны ҡиәмәткәсә харам ҡылды. Ҡайһығыҙҙың янында мүтғә никахлы берәй ҡатын булһа, инде уға юл ҡуйһын! Уларға түләү сифатында биргәндәрегеҙҙән бер нәмәне лә кире алмағыҙ!»* (Мөслим, «Никах», 21; Ибне Мажә, «Никах», 44; Дарими, «Никах», 16; Әхмәт, III, 406).

Тәбүк походында саҡта хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сәнийәтү әл-Вәдә тип аталған ерҙә ялға туҡтай. Унда илап торған ҡатындарҙы күрә һәм уларҙың ни сәбәпле йәш түгеүен һорай. «Былар – мүтғә никахында тороусы ҡатындар!» – тип яуап бирәләр. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мүтғәне исламдың никах, талаҡ, ғиддәт һәм мираҫ менән бәйле хөкөмдәре харам ҡылды!»* – тип белдерә (Ибне Бәлбан, VI, 178; Дәракутни, III, 259).

Был күҙлектән ҡарағанда, мүтғә ысулы менән никахланған ҡатын-ҡыҙ ысын ҡатын да, йәриә лә түгел. Мүтғә сөннәт әһеле ғалимдарының уртаҡ фекере нигеҙендә «зина» тип ҡабул ителә.

Ибне Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүмә һөйләгәндәрҙән:

«Исламдың башланғыс соронда мүтғә күренеше бар ине. Үҙе белмәгән берәй ҡалаға килгәс, кеше шундағы бер ҡатын-ҡыҙ менән, был ҡалала йәшәп торасағын фаразлаған ваҡыт аралығына ҡәҙәр, никах ҡора ине. Ул ҡатын шул рәүешле уның әйберҙәрен һаҡлай, тейешле эштәрен ҡайғырта. Был хәл:

وَالَّذِينَ هُمْ لِفُرُوجِهِمْ حَافِظُونَ إِلَّا عَلَى
أَزْوَاجِهِمْ أَوْ مَا مَلَكَتْ أَيْمَانُهُمْ فَإِنَّهُمْ غَيْرُ مَلُومِينَ

**«Улар намыҫтарын һаҡлаҙар. Ләкин ҡатындары һәм йәриәләре менән яҡынлыҡтары өсөн шелтәләнмәҫтәр»,** – тигән аят («әл-Мөъминүн», 5-6) иңдерелгәнсе дауам итә (Был аят ирештерелгәс, мүтғә харам тип иғлан ителә). Юғарыла телгә алынған ике осраҡтан (никахлы ҡатын һәм йәриә) ҡала, башҡа барлыҡ яҡынлыҡ мөнәсәбәттәре харам тип билдәләнә» (Тирмизи, «Никах», 29/1122).

Мүтғәнең йәмғиәттәге тиҫкәре нәтижәләре бындай:

а) Балаларҙың зыян күреүе. Был балалар атайһыҙ үҫкәнгә, зина емеше булараҡ, тейешле тәрбиәнән мәхрүм ҡала. Ҡыҙ балаларҙа был фажиғә тағы ла ҡурҡынысыраҡ төҫ ала.

б) Ата кеше яҡын мөнәсәбәттәргә кергән ҡатындың мүтғә аша йәки ғәҙәти никах аша, үҙе лә белмәйенсә, шул атаның улы менән ғаилә ҡороу ихтималы бар. Хатта бер атаның үҙ ҡыҙы менән, ҡыҙының ҡыҙы менән, улының ҡыҙы менән, һеңлеһенең ҡыҙы менән, йәғни өйләнешеү мәңге харам һаналған заттар менән, үҙе лә белештермәйенсә, енси яҡынлыҡ ҡылыу ихтималы ла юҡ түгел. Был – иң ҡурҡыныс, иң йәмһеҙ күренештәрҙең береһе. Тарихта быны бик күп аяныс миҫалдары теркәлгән.

в) Күп тапҡыр мүтғә ысулы менән өйләнгән зат мираҫының тейешенсә бүленә алмауы. Сөнки был кешенең вариҫтарының һаны ла, исемдәре лә, йәшәгән-тыуған ерҙәре лә билдәле булмаҫ.

Мүтғә никахы килтереп сығара торған бындай күренештәр ысындан да бик ҡурҡыныс. Нәҫелде юҡҡа сығарыуҙан ҡала башҡа һүҙ менән атау – дөрөҫ тә түгелдер. Мүтғә юлы менән кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙың рухи донъяһына бик ҙур зарар килә, сөнки кешене ваҡытлыса файҙаланып тороу – иң күңел ҡыра торған нәмә. Был яҡтан ҡарағанда, мүтғәне намыҫ фетнәһе, тиергә мөмкин. Шундай бысраҡлығына, ерәнгеслегенә ҡарамаҫтан, кем үҙ ҡыҙының йәки әсәһенең мүтғә ысулын һайлауын теләр икән? Хатта бына шул да – мүтғәнең фажиғәлелеген күрһәтеү өсөн етерлек дәлил.[248]

### Хәйбәрҙән ҡайтҡанда

Хәйбәр еңеүенән һуң, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә ике көнлөк юл йыраҡлығындағы Фәдәк тигән ергә бер вәкил ебәрә. Ул төбәкте һуғышһыҙ ғына ислам ерҙәре составына ҡушалар.

248. Мүтғә мәсьәләһе менән бәйле тәфсиллерәк мәғлүмәт өсөн ҡарағыҙ: Ибраһим Жанан, «Намыҫ фетнәһе – Мүтғә», Истанбул, 1993.

Ахырҙа иһә Хәйбәрҙән ҡайтыу юлында урынлашҡан, йәһүдиҙәрҙең кескенә үҙәге һаналған Вәди әл-Ҡура бер көнлөк солғанышта тотоу һөҙөмтәһендә яулап алына. Улар ҙа хәйбәрле йәһүдиҙәр кеүек үҙ ерҙәрендә уртаҡ ҡулланыусы, арендатор итеп ҡалдырыла.

Тәймә йәһүдиҙәре иһә, йән башынан жизйә (яһаҡ) һәм хараж һалымын үҙҙәре килтереп бирергә ризалашып, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән килешеү төҙөй. Шул рәүешле улар үҙ шәһәр-ҡалаларында ҡалдырыла, ерҙәрен дә һаҡлап ҡала. Был йәһүҙи ҡәбиләләре, әүәлерәк Хәйбәр йәһүдиҙәре менән һөйләшеп-килешеп, Мәҙинәгә һөжүм тураһында ҡарар ҡабул иткән булалар.[249]

Хәйбәрҙе һәм уның тирә-яғын яулап алғас, мосолмандарға Мәккәне ҡулға төшөрөү өсөн юл асыла. Сөнки Бану Ҡәйнүҡәғ, Бану ән-Нәдир, Бану Ҡурайҙа һәм, ниһәйәт, Хәйбәр йәһүдиҙәренең еңелеүе кешеләрҙең күңеленә ҡурҡыу кертә, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең уңышҡа ирешәсәгенә инде һис кемдең шиге ҡалмай. Сөнки уларҙың барыһы ла Хижәз йәһүдиҙәренең иң бай һәм иң көслөләре һанала, батырлыҡтары һәм ҡыйыулыҡтары дастандарҙа һөйләнә. Үтеп сыға алмаҫлыҡ, кереп булмаҫлыҡ ҡәлғәләргә, бик уңдырышлы хөрмә баҡсаларына хужа булып торалар. Бөтә ғәрәптәр уларға яҡлау, химая һорап мөрәжәғәт итһә лә, уларҙы һаҡларлыҡ көскә эйә булалар. Ләкин Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тарафынан солғанышта тотолоп, Уға әсир төшкән ваҡытта ул ҡыйыулыҡ, ул ҡаһарманлыҡтарының нисек ирептюҡҡа сығыуын, үҙҙәренә ниндәй ауыр шарттар тағылыуын һәр кем күрә. Шуға күрә мосолмандарға ел уңай иҫә, уңыш йылмая.[250]

Шулай уҡ Хәйбәр яуы ваҡытында тағын бер ваҡиға була: Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ире һуғышта үлеп тол ҡалған Сафия инәбеҙ менән өйләнешә.[251] Сафия Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмдең Хәйбәргә килеренә бер нисә көн ҡала, бер билдәле йәһүҙи кешеһенә кейәүгә сыға. Зөфаф төнөндә төштә бер айҙың, Мәҙинә яғынан килеп, уның ҡосағына төшкәнен күрә, быны иренә һөйләгәс, йәмәғәте асыулана: «Һин Хижәз хөкөмдары Мөхәммәт менән ҡауышырға теләйһең!» – тип йөҙөнә һуғып, күҙ төбөн күгәртә. Ире үлеп Аллаһ Рәсүленә сыҡҡанда, хәҙрәти Сафияның күҙ төбөндә ул күгәргән эҙ әле бөтмәгән була. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Нимә был?»* – тип һорағас, хәҙрәти Сафия ваҡиғаны һөйләп бирә.

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны ислам менән таныштырғас:

*«Беҙ һине үҙ динеңде тотаһың, тип, ғазапларға йыйынмайбыҙ! Әгәр һин Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә өҫтөнлөк бирһәң, һине ҡатынлыҡҡа алам.*

249. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, III, 391; Ваҡыди, II, 707, 711.
250. Ҡарағыҙ: Ваҡыди, II, 729-731; Ибне Кәсир, «әл-Бидая», IV, 234.
251. Ибне Сәғд, VIII, 121-126.

*Әгәр йәһүҙи динен һайлаһаң, һине азат итәм, кәүемеңә кайтып китерһең»,* – тип тәкдим яһай. Сафия инәбеҙ исламды һайлай һәм «өммөхәти мөьминин» (мөьминдәрҙең инәләре) тигән мактаулы ханымдар араһына керә (Вакыди, II, 674, 707; Ибне Сәғд, VIII, 123; Әхмәт, III, 138).

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙҙең күренекле йәһүдиҙәрҙең береһе булған Хувәй кыҙы Сафия менән өйләнешеүе Хәйбәр йәһүдиҙәре менән якынлыкка, ике аралағы һалкынлыктың кәмеүенә һәм дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙең үҫеүенә булыша. Сафия инәбеҙ иғтибарға лайык һәм шикәйәттәргә килтерерлек дәрәжәлә йәһүдиҙәр менән якын мөғәмәлә һаклай, асылда, сәғәҙәт йортонда уларҙың вәкиленә әүерелә.

Бер вакыт хәҙрәти Сафия разыйаллаһу ғәнһәнең йәриәһе хәлифә Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүгә: «Эй мөьминдәрҙең әмире! Сафия шәмбе көндө ярата һәм йәһүдиҙәр менән элемтәһен өҙмәй», – тип зарлана.

Шунан һуң хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү, бер кеше ебәреп, хәлдең дөрөҫлөгөн тикшерә. Хөрмәтле инәбеҙ: «Шәмбе көн тураһында кыҙыкһынаһың. Аллаһ уның урынына миңә йоманы насип иткәндән бирле, ул көндө яратмайым. Йәһүдиҙәр тураһындағы һорауға килгәндә иһә, улар араһында минең туғандарым бар, силаи рәхим һаклайым», – тип яуап бирә (Ибне Хажәр, *«әл-Исабә»,* IV, 347). Артабан Сафия инәбеҙ йәриәһенә боролоп, ниңә шундай яла яғыуы тураһында һорай. Тегеһе иһә: «Шайтанға эйәрҙем», – тип ғәйебен таный. Сафия инәбеҙҙең яуабы уның ислам әҙәп-әхлағын ни тиклем күркәм рәүештә үҙләштергәнен күрһәтә торған олуғ үрнәк була. Сөнки үҙенә карата хакһыҙ ғәйепләү белдергән ул колона:

«Бар кит, һине азат итәм!» – тип, уға ирек бирә (Ибне Хажәр, *«әл-Исабә»,* IV, 347).

**Каза ғөмрәһе** (Һижри 7-се йыл зөлкәғиҙәһе / 629 йылдың марты)

Бер йыл элегерәк ихрамға кергән килеш, Мәккә мөшриктәре рөхсәт бирмәү сәбәпле үтәлмәй калған ғөмрә урынына башкарылғанға, был ғөмрәгә «ғөмрәтүл-каза» (каза ғөмрәһе, казаға калдырылып үтәлгән ғөмрә) тип атайҙар.

Хөдәйбиә килешеүе кыҫаларында бер йыл һуңырак үтәләсәк ғөмрәнең вакыты килеп етә. Һижри етенсе йылдың зөлкәғиҙә айы кергәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хөдәйбиә сәфәрендә катнашкандарҙың барыһына ла ғөмрәгә әҙерләнергә куша. Халыкка ла хәстәрлек күрергә бойора. Тирә-яктарҙан килеп, шул вакытта Мәҙинәлә булған ғәрәптәр: «Валлаһи, йә Рәсүлүллаһ, беҙҙең ризығыбыҙ ҙа, беҙҙе ашатасак кешебеҙ ҙә юк!» – ти.

Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ, мәҙинәлеләргә мөрәжәғәт итеп, мохтаждарға Аллаһ ризалығы өсөн саҙака бирергә һәм уларҙы кайғыртырға куша. Мохтаждарға ярҙам кулы һуҙмаған осракта, уларҙың һәләк буласағын белдерә.

Мәҙинәлеләр иһә: «Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ саҙаҡа итеп ни бирәйек һуң, бер нәмә лә таба алмайбыҙ бит?» – тип хәлдәрен аңлаталар.

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ:

*«Нәмәгеҙ бар, шуны! Әйтәйек, ярты хөрмә булһа ла...»* – тип бойора (Ваҡыди, II, 731-732).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, ике мең сәхәбәһен эйәртеп, ғөмрә ниәте менән Мәҙинәнән юлға сыға. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тимер шлем, көбә һәм һөңгө кеүек һуғыш кәрәк-яраҡтары менән йөҙгә яҡын ат та ала. Әсхәбе кирам: «Йә Рәсүлүллаһ! Ҡөрәйешлеләр юлсы ҡоралынан ҡала башҡа ҡорал алмауҙы шарт итеп ҡуйҙы!» – ти.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе:

*«Беҙ Харамға ул ҡоралдар менән кермәйәсәкбеҙ. Ләкин былар бер-бер ихтимал һөжүмгә ҡаршы тороу өсөн, үҙ яныбыҙҙа буласаҡ!»* – тип белдерә һәм ике йөҙ кеше менән бергә ҡоралдарҙы Мәккәгә өс миль йыраҡлыҡтағы Батны Йәғжәж тигән ергә оҙата (Ваҡыди, II, 733-734).

Сәфәр ваҡытында мөьминдәр Әбүәгә ҡағылып уҙа. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Йәнәбел-Хаҡтан рөхсәт һорап,әсәһенең ҡәберен зыярат ҡыла. Шул зыяратында ҡәберҙе ҡулы менән матурлап тигеҙләгәс, хисләнеп илай. Уның илағанын күргән мосолмандар ҙа күҙ йәштәрен тыйып тора алмай. Һуңынан ниңә шулай күңеле тулғанын һорағандарға Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ:

*«Әсәйемдең миңә ҡарата шәфҡәт-мәрхәмәтен иҫкә төшөрҙөм дә шуға иланым»,* – тип аңлата (Ибне Сәғд, I, 116-117).

Хөдәйбиә килешеүе ҡушҡанса, мөшриктәр, Мәккәне бушатып, бөтә ҡаланы өс көнгә мөьминдәр ихтыярына ҡалдыра. Үҙҙәре иһә тауҙарға менеп, мосолмандар ни эшләр икән, тип, ҡыҙыҡһынып күҙәтә башлай. Ете йыл дауам иткән оҙон-оҙаҡ айырылышыуҙан һуң Ҡәғбәне күреү бәхетенә ирешкән мөьмин йәндәр дәртләнеп, тулҡынланып, барыһы бер юлы:

لَبَّيْكَ اللَّهُمَّ لَبَّيْكَ، لَبَّيْكَ لَا شَرِيكَ لَكَ لَبَّيْكَ،
إِنَّ الْحَمْدَ وَالنِّعْمَةَ لَكَ وَالْمُلْكَ، لَا شَرِيكَ لَكَ

тип тәлбиә әйтергә керешә.

Ибн Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү тапшырғанса, хәҙрәти Пәйғәмбәр ғәләйһиссаләәтү үәс-сәләәм Мәккәгә килгәс, Уны Мотталиб улдары ҡәүеменең баласағаһы ҡаршылай. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларҙың береһен (атланған хайуанының) алдына, икенсеһен артына ултырта.[252]

252. Бохари, «Ғөмрә», 13; «Либас», 99.

Мәҙинә биҙгәгенең мөьминдәрҙе хәлһеҙләндереүе тураһында имеш-мимеш сығарған мөшриктәргә хәлдең улай түгеллеген күрһәтер өсөн, Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ мосолмандарға тиҙ-тиҙ һәм ғорур ҡиәфәттә барырға бойора.[253]

*«Бөгөн үҙен ҡөрәйешлеләргә көслө, ныҡлы итеп күрһәткән кешегә Аллаһтың рәхмәте булһын»,* – ти Ул (Ибне Һишам, III, 424-425).

Ул заман шарттарында Мәҙинәнән Мәккә дүрт йөҙҙән артыҡ саҡрым ара уҙып, Ҡәғбәне зыярат ҡылырға килгән мосолмандар, бик арыу-талыуҙарына ҡарамаҫтан, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм киҫәткәнсә, ғөмрәләрен ғәйәт ғорур ҡиәфәттә, баштарын юғары күтәреп башҡара. Хатта тауафтың тәүге өс әйләнәһендә һәм сәғи йолаһын үтәгәндә бөгөнгө ике йәшел бағана араһында ҡылансыҡланып йүгерешеп тә алалар.

Был ваҡытта мөшриктәр тау түбәләренән мосолмандарҙы күҙәтә. Әгәр уларҙа ниндәйҙер арығанлыҡ һәм хәлһеҙлек салымдары күрһәләр, төрлө нәмәләр уйлап сығара ла алған булырҙар ине. Әммә мөшриктәр үҙ күҙҙәре менән күргән был йәнлелеккә, терелеккә ғәжәпкә ҡала: «Ошолармы биҙгәк арҡаһында хәлһеҙләнгән, бөтөрөнгән тигән кешеләр! Улар беҙҙән көслөрәк тә, тererәк тә әле!» (Мөслим, «Хаж», 240).

Ул көндө Билали Хәбәши Ҡәғбә түбәһенә менеп әйткән Мөхәммәт аҙанының иҫ киткес моңо мөьмин йөрәктәрҙе дәртләндереп ебәрә, мөшриктәрҙе иһә аптыраған, ни эшләргә белмәгән бер хәлдә ҡалдыра.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләре менән бергә тауаф ҡылғанда, Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә разыйаллаһу ғәнһү шиғыр һөйләй башлай. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү уны: «Һин Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршында һәм Аллаһтың Харам йортонда шулай шиғыр уҡып тораһыңмы әллә?» – тип шелтәләй.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Ғүмәргә:

*«Уға ҡомасаулама! Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, уның һүҙҙәре ҡөрәйеш мөшриктәренә уҡ яуҙырыуға ҡарағанда ла тәьҫирлерәк. Эй Ибне Рәүәхә, дауам ит!»* – тип бойорғас, Ғабдуллаһҡа:

*«Аллаһтан башҡа һис бер илаһ һәм табыныр зат юҡ. Ул – берҙән-бер. Ул – вәғәҙәһен үтәүсе. Был ҡолона ярҙам итеүсе лә – Ул. Ғәскәрҙәренә ҡеүәт биреүсе лә – Ул. Йыйылған ҡәбиләләрҙе тарҡатыусы ла бары Ул ғына, тип әйт!»* – тип әмер бирә.

Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә разыйаллаһу ғәнһү быны тәҡрарлап һөйләргә керешкәс, мосолмандар ҙа уның әйткәндәрен ҡабатлай башлай (Ваҡыди, II, 736; Ибн Сәғд, II, 122-123).

253. Бохари, «Хаж», 55; Мөслим, «Хаж», 240; Әхмәт, I, 305-306.

Өс көндән һуң Мәҙинәи Мөнәүүәрәгә ҡайтҡанда, һәр кемдең йөҙөндә үҙенә күрә һөйкөмлөлөк, мөләйемлек балҡый. Тәүге тапҡыр Ҡәғбә зыярат ҡылына, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер йыл элек күргән төшөндәге һөйөнөслө хәбәр ысынға аша. Аятта Хәйбәр еңеүенә лә ишара итеп, шулай уҡ яҡын арала Мәккәне лә яулап алыу насип ҡылынасаҡ икәнлеге тураһында хәйерле хәбәрен дә ирештереп, Аллаһ Тәғәлә был хәҡиҡәтте Ҡөрьәни-Кәримендә былай тип белдерә:

لَقَدْ صَدَقَ اللّٰهُ رَسُولَهُ الرُّؤْيَا بِالْحَقِّ لَتَدْخُلُنَّ الْمَسْجِدَ الْحَرَامَ إِنْ شَاءَ اللّٰهُ آمِنِينَ مُحَلِّقِينَ رُؤُوسَكُمْ وَمُقَصِّرِينَ لَا تَخَافُونَ فَعَلِمَ مَا لَمْ تَعْلَمُوا فَجَعَلَ مِنْ دُونِ ذَلِكَ فَتْحًا قَرِيبًا هُوَ الَّذِى أَرْسَلَ رَسُولَهُ بِالْهُدَى وَدِينِ الْحَقِّ لِيُظْهِرَهُ عَلَى الدِّينِ كُلِّهِ وَكَفَى بِاللّٰهِ شَهِيدًا

**«Тәхҡиҡ, Аллаһ үҙ илсеһенең төшөн раҫланы. Аллаһ теләһә, һеҙ именлек эсендә, сәстәрегеҙҙе алдырған һәм баштарығыҙҙы ҡырҙырған килеш Мәсжиди Харамға ҡурҡмайынса керәсәкһегеҙ. Аллаһ һеҙ белмәгәнде белер. Бына бынан әүәл һеҙгә яҡын бер еңеү бирелде. Бөтә диндәрҙән өҫтөн сығыу өсөн, Пәйғәмбәрен һиҙәйәт һәм хаҡ дин менән ебәреүсе – Ул. Шаһитлыҡ өсөн Аллаһ етә!»** («әл-Фәтех», 27-28).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең сәхәбәләре менән башҡарған ҡаза ғөмрәһе мәккәләләргә бик көслө тәьҫир ҡалдыра. Оҙаҡ та үтмәй ҡөрәйештең алдынғы, абруйлы кешеләренән Хәлид ибн Вәлид (киләсәктә Сүриәне яулап аласаҡ), Ғосман ибн Талха, киләсәктә Мысырҙы яулаясаҡ Ғәмр ибн Ғәс кеүектәр иман килтереүселәр каруанына ҡушыла.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккәнән сыҡҡанда, Хәҙрәти Хәмзәнең ҡыҙы Өмәмә раҙыйаллаһу ғәнһә Уға эйәрә һәм: «Абзыҡайым, абзыҡайым!» – тип ялбара. Хәҙрәти Ғәли уны ҡулынан тотоп, Фатима раҙыйаллаһу ғәнһәгә: «Ағайыңдың ҡыҙын үҙең менән ал!» – ти. Мәҙинәгә ҡайтҡас, Өмәмәне кем ҡараясаҡ тигән мәсьәләлә, хәҙрәти Ғәли, Зәйед һәм Йәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһүм әжмәғин араһында бәхәс ҡуба. Хәҙрәти Ғәли: «Ул минең ағайымдың ҡыҙы!» – тип белдерә. Йәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Ул ағайымдың ҡыҙы ла, ә уның туған апаһы (әсәһенең бер туғаны) – минең ҡатыным!» – тип үҙ һүҙен әйтә. Зәйед иһә: «Ул минең ҡустымдың ҡыҙы!» – ти (Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ уны Хәмзә раҙыйаллаһу ғәнһү менән ҡәрҙәш тип иғлан иткән була). Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Өмәмә туған апайы менән ҡалырға тейеш, тип хөкөм сығара һәм:

*«Әсәйҙең бер туғаны» – әсә дәрәжәһендә!»* – тип белдерә. Артабан хәҙрәти Ғәли разыйаллаһу ғәнһүгә өндәшә:

*«Һин минең кеүек, мин иһә һинең кеүек!»*

Йәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһүгә боролоп:

*«Холоҡ-тәбиғәтең шул хәтле минекенә оҡшаған»,* – тип маҡтай.

Зәйед раҙыйаллаһу ғәнһүгә, боролоп:

*«Һин беҙҙең ҡәрҙәшебеҙ ҙә, иреккә сығарылған ҡолобоҙ ҙа!»* – тип, шул рәүешле һәр береһенә айырым-айырым хөрмәт күрһәтә (Бохари, «Магази», 43, «Умрә» 3; Мөслим, «Йыһат», 90).

Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип иҫкә ала:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Зәйедте хөрмәтләп өндәшкәндә, Зәйед шул ҡәҙәр һөйөндө ки, шунда уҡ тороп баҫып, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ тирәләй бер аяғында һикереп йөрөй башланы. Йәғфәрҙе маҡтағас, ул да Зәйед артынан нәҡ шул рәүештә әйләнде. Мине хөрмәтләп телгә алғас, үҙем дә Йәғфәр артына баҫып, шатлығымдан бер аяҡта һикерә башланым» (Әхмәт, I, 108; Ваҡыди, II, 739).

# ҺИЖРӘТТЕҢ ҺИГЕҘЕНСЕ ЙЫЛЫ

**Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең ҡыҙы хәҙрәти Зәйнәбтең вафаты**

Хәҙрәти Зәйнәб раҙыйаллаһу ғәнһә, Мәккәнән килтерелгән ваҡытта дөйәнән йығылғанға күрә ауырый башлап, һаман да сихәтләнә алмай. Ул һижри һигеҙенсе йылдың башында вафат була. Уны Өммө Әймән, ансар ҡатындарынан Өммө Ғәтиййә һәм әсәләребеҙҙән хәҙрәти Сәүдә менән Өммө Сәләмә йыуа. Был ваҡытта Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе яндарына барып:

*«Уны уң яғынан һәм тәһәрәтләнергә тейешле ағзаларынан йыуа башлағыҙ! Һыу һәм сидр[254] менән таҡ тапҡыр: өс, биш йәки ете ҡат, кәрәк тип һанаһағыҙ, тағы ла артығыраҡ тапҡыр йыуығыҙ! Һуңғы тапҡыр йыуғанда һыуға камфара ла өҫтәгеҙ! Йыуып бөткәс, мине саҡырығыҙ!»* – ти.

Хәҙрәти Зәйнәбтең сәстәрен тарайҙар, өскә айырып, һәр ҡайһыһын айырып бөтөрәләр. Уларҙың икеһе хәҙрәти Зәйнәбтең – ян яғындағы, береһе алғы яғындағы сәстәре була. Йыуып бөткәндән һуң, Аллаһ Рәсүле биленә бәйләгән һөлгөнө уларға биреп:

*«Бынан Зәйнәбкә эске күлдәк яһағыҙ!»* – тип әйтә[255] (Бохари, «Жәнаиз», 9, 13, 17; Мөслим, «Жәнаиз», 36; Ибне Сәғд, VIII, 34-36).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йыназа намаҙын уҡығас, ҡайғы-хәсрәтле хәлдә ҡәбергә төшә. Бер аҙ торғандан һуң, һөйөнөслө йөҙ менән өҫкә менә лә:

*«Зәйнәбтең зәғифлеген иҫтә тотоп, уға ҡәбер ғазаптарын һәм ҡыҙыулыҡты еңеләйтеүен һорап, Аллаһҡа доға ҡылдым. Аллаһ Тәғәлә, был теләгемде ҡабул итеп, уның ҡәбер ғазаптарын еңеләйтте»,* – ти (Ибне Әсир, *«Үсдүл-Габә»,* VII, 131).

**МӨЬТӘ ҺУҒЫШЫ (Жәйшүл-Үмәра) – бер төркөм сәхәбә яҙған дастан**

(Һижри 8-се йылдың йомадил-әүүәле / 629 йылдың август-сентябрь айҙары)

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең, исламға өндәп, хөкөмдарҙарға һәм губернаторҙарға хат менән ебәргән илселәре киткән

254. Сидр – Ғәрәбстанда үҫә торған, ҡуйы сатырлы, еңел һәм нәфис япраҡлы сөсө сейә ағасы. Төрөктәр Трабзон хөрмәһе тип йөрөткән ағас та шул төргә ҡарай. Сидр ағасының япраҡтары менән мәйет йыуалар (Ғасыйм Әфәнде, «Ҡамус», II, 385).
255. Сөннәт буйынса, кәфенлек ир-аттар өсөн өс киҫәктән тора: изар (алъяпҡыс), күлдәк (ҡамис) һәм жәсәдте төрөү өсөн туҡыма (лифафә). Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн кәфенлек биш киҫәктән тора: изар, баш яулығы, жәсәд төрөү өсөн туҡыма (лифафә), хирка (күкрәктәре мнлән ҡорһаҡ өлөшөн ҡаплау өсөн ҡулланылған туҡыма) һәм күлдәк.

ерҙәренән, королдәр үҙҙәрен мыҫҡыл итһә лә, «Илсегә үлем юҡ» ҡағиҙәһе нигеҙендә, иҫән-һау ғына Мәҙинәгә ҡайталар. Ләкин Бүсрә әмире янына йүнәлгән Хәриҫ ибне Ғөмәйерҙең хәле башҡаса була. Хәриҫ разыйаллаһу ғәнһү Мөьтәгә барғанда, Ғәссәни әмирҙәренән Шәрәхбил ибн Ғәмер уның юлын киҫеп, ҡая барыуын һорай. Хәриҫ разыйаллаһу ғәнһү үҙенең Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм илсеһе булыуын әйткәс, хәйерһеҙ яуыз Шәрәхбил, илсенең ҡағылғыһыҙлығы тураһындағы ҡанунды һанға һуҡмайынса, мөбәрәк сәхәбәне ҡанһыҙҙарса шәһит ебәрә.[256]

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Хәриҫтең был рәүешле үлтерелеүенә бик ныҡ хәсрәтләнә. Исламға ҡаршы асыҡтан-асыҡ һөжүм сифатындағы был ғәмәл мосолмандарҙы иғтибарға алмау мәғәнәһенә тура килгәнгә, шул миҙгелдә үк өс мең кешелек ғәскәр туплай. Юғиһә, Мәҙинә ислам дәүләтенең дәрәжәһенә зыян килтерелер, ахыры насар бөтә алыр ине.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яһилиәт осорондағы синыф айырмалыҡтарын бөтөргән исламдың донъякүләм ынтылышына нигеҙләнеп, ирекле ҡоло Зәйед разыйаллаһу ғәнһүҙе тупланған ғәскәрҙең башлығы итеп билдәләй. Шунан һуң:

*«Әгәр был һуғышта Зәйед шәһит ителһә, ғәскәр башына Йәғфәр баҫһын! Йәғфәр ҙә шәһит китһә, Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә ғәскәр менән идара итһен! Ул да шәһит булһа, мосолмандар үҙ араларынан берәүҙе башлыҡ итеп һайлап ҡуйһындар!..»* – тип бойора.

Был һүҙҙәрҙе тыңлап торған бер йәһүҙи әлеге бойороҡто үлем ҡарары итеп ҡабул итә. Һуңынан хәҙрәти Зәйед разыйаллаһу ғәнһү янына килеп: «Васыятыңды әйтеп ҡалдыр! Әгәр Мөхәммәт пәйғәмбәр икән, һин Уның янына әйләнеп ҡайта алмаясаҡһың! Сөнки Бәни Исраил пәйғәмбәрҙәре атаған кешеләр ҙә, һуғышта үлеп ҡалып, иҫән ҡайта алмайҙар ине...» – тип, был һайлап алынған изге йәндең йөрәгенә ҡурҡыу һеңдерергә теләһә лә, хәҙрәти Зәйед разыйаллаһу ғәнһү уға бирешмәй. Хатта һөйөнә лә әле (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 238).

Ул фетнәсе йәһүҙи хәҙрәти Зәйед разыйаллаһу ғәнһүҙең, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең барлыҡ сәхәбәләре кеүек, шәһитлеккә ғишыҡ менән янғанын белмәй шул.

Барса әҙерлектәрҙе күреп бөтөргәс, Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә разыйаллаһу ғәнһү, күркәм йөҙөн хәсрәт баҫҡан Аллаһ Рәсүле янына килеп хушлашҡандан һуң: «Йә Рәсүлүллаһ! Миңә иҫтә тоторға тейешле берәй нәмә кәңәш ит», – ти. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уға:

*«Һин иртәгә Аллаһҡа сәждә бик әҙ ҡылына торған илгә бараһың. Унда сәждәләрҙе һәм намаҙҙарҙы күбәйт»,* – тип бойора.

256. Ваҡыди, II, 755; Ибне Каййим, III, 381.

«Йә Рәсүлүллаһ! Миңә бер аҙ нәсихәт тә бир!» – ти.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһты даими зекер ит! Сөнки Аллаһты зекер итеү – өмөтләнгәндәреңә ирешеүҙә һиңә ярҙамсы булыр!»* – тип әйтә (Ваҡыди, II, 758).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғәскәрҙе Мәҙинәнең ситендә урынлашҡан Сәнийәтүл-Вәдәғ тигән урынға саҡлы оҙата барып, доғалар менән дошман тарафына йүнәлтә. Хәриҫ үлтерелгән урынға ҡәҙәр барырға, унда булған кешеләрҙе исламға өндәргә, мосолман булырға теләмәгән осраҡта, Аллаһтан ярҙам һорап, улар менән һуғышырға әмер бирә.[257]

Ислам ғәскәренең үҙҙәренә таба хәрәкәт итеүе тураһында хәбәр алған залим Шәрәхбил Византияның ярҙамы менән йөҙ мең кешелек ғәскәр туплай. Христиан динендәге ғәрәптәрҙән дә йөҙ мең кешелек бер ғәскәр уларға килеп ҡушыла.[258]

Дошмандың был ҡәҙәр күплеге тураһында ислам ғәскәре бары тик Сүриә ерҙәренә килеп кергәс кенә белеп ҡала. Вәзғиәттең былай булырын көтмәгәнгә күрә, үҙ-ара кәңәшкә тупланалар. Бер нисәүһе, хәлде хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә белдереп, унан килгән кәңәш менән эш итеү яғында була. Сөнки көстәр сағыштырғыһыҙ дәрәжәлә айырыла. Тарихта бындай хәлдәрҙең булғаны юҡ. Шуға күрә лә улар хәлде Аллаһ Рәсүленә еткереү фекерен яҡлай. Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә: «Ошо миҙгелдә сигенеүебеҙ ҡулыбыҙға төшөрөр өсөн юлға сыҡҡан нәмә түгелме һуң? Беҙ дошманға күп һанлы булыуыбыҙ һәм көс яғынан өҫтөнлөгөбөҙ менән ҡаршы торабыҙмыни? Юҡ! Беҙ Аллаһтың беҙгә изгелек ҡылған был диндең көсө менән көрәшәбеҙ. Ниңә туҡтаныҡ? Беҙҙе ике күркәм нәтижә көтә: йә шәһит китәбеҙ, йә ғази булып еңәбеҙ!» Шунан һуң һуғышҡа керергә ҡарар ҡылына һәм юл дауам иттерелә.

Зәйед ибн Әрҡам разыйаллаһу ғәнһү риүәйәт ҡыла:

«Мин Ғабдуллаһ ибн Рәүәхәнең тәрбиәһен алған йәтим инем. Мөьтә сәфәренә сыҡҡанда, мине лә ҡалған дөйәһенә атландырҙы. Төндә, бер аҙ юл алғас, бындай (мәғәнәләге) бәйеттәрҙе һөйләгәнен ишеттем: «Эй дөйәм! Мине һәм йөгөмдө ҡомлоҡтағы ҡойоға еткәндән һуң, тағын дүрт тапҡыр ҡунырлыҡ араға итһәң, шунан һине башҡа сәфәргә сығармаясаҡмын! Һин эйәһеҙ һәм ирекле булып ҡаласаҡһың! Мин, һәр хәлдә, ғаиләм янына әйләнеп ҡайтмаясаҡмын! Шәһит булырмын, тип өмөтләнәм! Мосолмандар килде, мине мәңгелеккә бында ҡалырға ҡыҙыҡтырып, Дамаск ерҙәренә килтерҙеләр. Инде хәҙер хөрмәләр күренә башлаһа ла, ямғыр һыуы менән ағастар дымға туйынһа ла, төптәре һуғарылған хөрмә ағастарына ла иҫем китмәй!»

257. Ибне Сәғд, II, 128.
258. Ибне Һишам, III, 429.

Был һүҙҙәрҙе тыңлағанда иланым. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү миңә ҡамсыһы менән ҡағылып: «Эй йүнһеҙ! Аллаһтың миңә шәһитлек насип итеп, ә һинең дөйә өҫтөндә, ғәниматтәр араһында кире ҡайтып китеүеңдән һиңә ни зарар? Шуның менән был донъяның михнәттәренән, ҡайғы-хәсрәттәренән ҡотолған булырмын!» – тине.

Төндә, дөйәһенән төшөп, ике рәҡәғәт намаҙ уҡыны. Намаҙҙан һуң оҙаҡ итеп доға ҡылды ла: «Был сәфәрҙә, иншаллаһ, миңә шәһитлек насип буласаҡ!» – тине» (Ибне Һишам, III, 431-432; Ваҡыди, II, 759).

Мөьтә ауылында ислам ғәскәре хәҙрәти Зәйедтең етәкселеге аҫтында, күҙҙәрен дә йоммайынса, дошман сафтарына һөжүм итә. Тәүхидкә күңелдәрен биргән мосолмандар хәҙер ҙә Аллаһ юлында йәндәрен ҡыҙғанмайынса дан ҡаҙана. Һуғыш шаҡтай көсәйеп барған бер ваҡытта, Аллаһ Рәсүленең уң ҡулы һәм мәккәле тәүге һигеҙ мосолмандың береһе булған ғәскәр башы Зәйед разыйаллаһу ғәнһү, дошман һөңгөләре ҡаҙалып, шәһит китә.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең әмере буйынса, байраҡты шунда уҡ Йәғфәр разыйаллаһу ғәнһү күтәреп ала. Ул да ҡаһармандарса дошман араһына керә. Ҡылыслы бәрелештә ике ҡулын да юғалта. Рәсүлүллаһтың байрағын ергә төшөрмәҫ өсөн, киҫек ҡулдары менән уны күкрәгенә ҡыҫырға тырыша. Бер аҙҙан ул да шәһит китә. Хәҙрәти Йәғфәр разыйаллаһу ғәнһү Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә мөхәббәте менән әсирләнгән хәлдә була. Шуға күрә был юлда йәнен фиҙа ҡылырға тырышып, илаһи ризалыҡҡа ирешә.

Сират Ғабдуллаһ ибн Рәүәхәгә етә. Ул да шундай уҡ ашҡыныу, дәрт менән байраҡты алып, уны дошман сафтары араһында елферҙәтә. Нәфесен борсоп тормаһын өсөн, яҡындағыларға васыятын әйтә: «Шәһит булғас, Мәҙинәләге барлыҡ малдарымды ҡаҙнаға ҡалдырам!» Артабан иһә шәһит киткәнсегә тиклем, ҡаһармандарса һуғыша. Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә лә һәләк булғас, әле яңы ғына мосолманлыҡ ҡабул иткән һәм беренсе тапҡыр ислам сафтарында һуғышҡа кергән хәҙрәти Хәлид ибн Вәлид разыйаллаһу ғәнһү, байраҡты күтәреп алып, көрәште дауам иттерә. Бер төркөм сәхәбә саранча көтөүе кеүек күп һанлы дошманға ҙур сыҙамлыҡ менән ҡаршы тора.

Был ваҡытта Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәсет мөнбәрендә торған килеш ваҡиғаның барлыҡ нескәлектәрен әсхәбе кирамға һөйләп бара. Һуғыш майҙаны Уның күҙ алдында була. Яуҙа бер-бер артлы шәһит китеүселәр тураһында хәсрәтле һәм күңелһеҙ хәбәрҙәрҙе миҙгелендә еткереп тора Ул:

*«Зәйед ибн Хәриҫ байраҡты ҡулына алды. Шайтан шунда уҡ уның янына килде. Тормошто һәм донъяны уға матур итеп, ә үлемде йәмһеҙ һәм сирҡаныс итеп күрһәтте. Зәйед иһә: «Был миҙгел – мөьминдәрҙең ҡәлебтәрендә имандары нығый торған ваҡыт! Ә һин миңә донъяны яратырға ҡушаһың!» –*

*тине лә алға ырғылды. Һуғыша башланы һәм ахырҙа шәһит булды. Уның өсөн Аллаһтан ғәфү һәм кисереү һорағыҙ».*

Шунан һуң былай тип дауам итә:

*«Ул хәҙер йәннәткә керҙе, унда йүгереп йөрөй! Хәҙер байраҡты Йәғфәр алды. Шайтан шунда уҡ уның янына килде. Тормошто һәм донъяны уға күркәм, ә үлемде йәмһеҙ һәм ирҡаныс итеп күрһәтергә теләне. Ә Йәғфәр: «Был миҙгел – мөьминдәрҙең ҡәлебтәрендә имандары нығый торған ваҡыт!» – тине лә алға ырғылды. Дошман ғәскәренә һөжүм итте, һуғышты һәм, ниһәйәт, ул да шәһит китте. Мин уның шәһит булыуына шаһитлыҡ ҡылам».*[259]

Шунан һуң:

*«Ҡәрҙәшегеҙ өсөн Аллаһтан кисереү һорағыҙ. Ул шәһит булараҡ йәннәткә керҙе. Хәҙер ул йәннәттә яҡуттан ике ҡанат менән теләгәнсә осоп йөрөй»,* – ти.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Йәғфәрҙән һуң байраҡты Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә алды!»* – тигәндән һуң, бер аҙ өндәшмәйенсә тора. Ансарҙарҙың йөҙҙәре үҙгәреп, һарғайып китә. Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә Аллаһҡа һәм Рәсүлгә оҡшамаҫлыҡ берәй ғәмәл ҡылған, тип уйлай башлайҙар. Ә ул арала хәҙрәти Ғабдуллаһ, байраҡты алып, атына атлана ла дошманға ҡаршы йүнәлә, шул уҡ ваҡытта буйһонмаҫ нәфесен теҙгенләү өсөн дә көрәшә ине. «Әй нәфесем! Мин һине үҙемә буйһондорасаҡмын, тип ант иттем. Һин быға йә үҙең риза булаһың, йәиһә һиңә быны көсләп ҡабул иттерәсәкмен! Күрәм: һин йәннәттән бик хушланмайһың! Һин кәүҙә эсендәге бер тамсы һыу ғына түгелме һуң? Эй нәфесем! Һин хәҙер үлтерелмәһәң, һис үлмәйәсәкһеңме? Әгәр шул ике кеше эшләгәнде эшләһәң, шәһитлекте өҫтөн күреп, дөрөҫ ғәмәл ҡылған булырһың! Әгәр кисекһәң, бәдбәхет булырһың!»

Был миҙгелдә бармағы яраланған Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү атынан төшә лә яралы бармағын аяғының аҫтына ҡуйып: «Һин бары тик ҡанаған бармаҡ ҡына түгелме? Был ҡазаға ла Аллаһ юлында юлыҡҡан булаһың!» – тигән һүҙҙәрҙе әйтә лә, ҡулын тиҙ генә тартып алып, ҡаны һарҡып торған бармағын өҙә. Шунан һуң йәнә һуғышҡа керешә. Бер яҡтан дошманға ҡаршы кескенә йыһатта булып, икенсе яҡтан иһә нәфесенә ҡаршы ҙур йыһатты дауам итә: «Эй нәфесем! Әгәр вәсүәсәң ҡатынымдан мәхрүм ҡалыуҙа булһа, тотам да уны өс тапҡыр талаҡ менән бөтөнләй айырып ебәрәм. Әгәр ҡолдарыңдан

259. Ибн Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә һөйләгәндәрҙән:
«Йәғфәрҙе эҙләнек. Уны шәһиттәр араһында таптыҡ. Ул ауыр хәлдә ине, тәненең алғы яғында туҡһандан артыҡ уҡ һәм һөңгө яраһы һананыҡ. Уларҙың һис бере арҡаһында түгел ине» (Бохари, «Мағази», 44). Йәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһү утыҙ өс йәшендә шәһит китә (Ибне Һишам, III, 434). Тимәк, Эфиопияға һижрәт ҡылып, Нәжәши ҡаршында ғилем һәм хикмәт менән әңгәмә ҡорғанда, ун ете йәштәрҙәге ҡыйыу егет була.

йыраҡ ҡалыуҙан ҡурҡаһың икән, уларҙы ла азат итәм. Әгәр инде хәсрәтең емеш һәм йәшелсә баҡсаларынан мәхрүм ҡалыуҙа икән, уларҙы ла Аллаһҡа һәм Рәсүлемә тапшырырмын».

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һуғыш сәхнәләрен тасуирлауҙы дауам итә:

*«Ғабдуллаһ ибн Рәүәхә, бар ҡыйыулығын йыйып, ҡулына байраҡ тотҡан хәлдә дошмандар менән көрәште һәм шәһит булды. Ҡаршылыҡлы иҫкәрмә менән йәннәткә керҙе. Уның өсөн дә Аллаһтан ғәфү һәм кисереү һорағыҙ!»* – ти.

Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһүҙең йәннәткә ҡаршылыҡ менән кереүе ансарҙарға бик ауыр тойола: «Йә Рәсүлүллаһ! Уның ҡаршылығы нәмәлә ине?» – тип һорайҙар.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Үҙе яраланған саҡта дошман менән һуғышыуҙан туҡтаны. Шунан һуң нәфесен ауыҙлыҡланы, ҡыйыулығын йыйҙы ла шәһит китте! Йәннәткә керҙе. Улар миңә йәннәттә алтын тәхеттәр өҫтөндә килеш күрһәтелде. Ғабдуллаһтың тәхете иптәштәренекенән шаҡтай түбәндәрәк һәм кәкре булыуын күрҙем. Сәбәбен һорағас: «Ғабдуллаһ һуғышҡан саҡта ҡайһы бер шик-шөбһәләргә бирелде, шунан һуң ғына көрәшеүен дауам итте!» – тинеләр»,* – тип асыҡлай.

Хәҙрәти Ғабдуллаһтың шәһит булып йәннәткә кереүе ансарҙарҙы һөйөндөрә.

Быларҙы һөйләгән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең моңһоулығы арта, мөбәрәк күҙҙәренән ынйы бөртөгөләй йәштәре ағыла башлай. Шунан һуң:

*«Хәҙер байраҡты Аллаһтың ҡылыстарынан бер ҡылыс ҡулына алды. Нәтижәлә, Аллаһ мөжәһидтәргә еңеү насип итте»,* – ти (Бохари, «Магази», 44; Әхмәт, V, 299; III, 113; Ибне Һишам, III, 433-436; Ваҡыди, II, 762; Ибне Сәғд, III, 46, 530; Ибне Әсир, *«Үсдүл-Габә»,* III, 237).

Һуңынан күҙҙәре йәшләнгән килеш Хаҡ Тәғәләгә:

*«Аллаһым! Хәлид – Һинең ҡылыстарыңдың береһе. Һин уға еңергә ярҙам ит!»* – тип ялбарып, доға ҡыла (Әхмәт, V, 299).

### Хәлид ибн Вәлидтең командирлыҡ оҫталығы

Хәҙрәти Хәлид ибн Вәлид, кис етеп, ғәскәрҙәр кире сафтарына сигенгәнсе, бәрелеш менән камил рәүештә идара итә. Төндә иһә һуғыш тәртибен тулыһынса үҙгәртә, уң флангтағыларҙы – һулға, һул флангтағыларҙы – уртаға, тылдағыларҙы – авангардҡа, алдағыларҙы арткы яҡҡа ҡуя. Иртәгеһе

көндө әлеге үҙгәргән һуғыш тактикаһы дошманды аптырашҡа ҡалдыра. Ҡаршыларында яңы йөҙҙәр күргәс, мосолмандарға өҫтәмә көстәр килгән, тип уйлап, күңелдәренә шик-шөбһә керә. «Аллаһтың ҡылысы» тигән ҡушамат алған Хәлид раҙыйаллаһу ғәнһү ҙә был ҡарарһыҙлыҡтан ғәйәт шәп файҙаланып, ҡеүәтле һөжүм яһай. Бындай атаканы көтмәгән дошман өҫтәренә ишелгән иман ташҡынына түҙеп тора алмай. Ғәскәр сафтары араһында тарҡаулыҡ салымдары һиҙелә башлай, ахырҙа иһә дошман, һаҡлыҡ, киләсәк тураһында уйлап, сигенергә мәжбүр була.

Ул көндө ҡулында теп-теүәл туғыҙ ҡылыс һындырған хәҙрәти Хәлид раҙыйаллаһу ғәнһү,[260] дошман ғәскәре араһындағы тарҡаулыҡ форсатынан файҙаланып, үҙе лә, дошманға һиҙҙермәйсә генә, кире сигенә. Бындай сәйәси манёвр уның ғәскәри оҫталығын нығытҡан икенсе бер ғәмәл була. Шул рәүешле ике армия, бер-береһен еңмәйсә, һуғышты туҡтата. Хәҙрәти Хәлид раҙыйаллаһу ғәнһү әллә ни зыян-зәүрәт килтермәй генә, ғәскәрҙе Мәҙинәгә алып ҡайта. Ете көн дауам иткән һуғышта ун дүрт кеше шәһит китә. Дошман араһында үлтерелгәндәр иһә бик күп була. Мосолман армияһы, сигенгәндә, әҙме-күпме ғәнимәт алыуға ла ирешә (Ваҡыди, II, 764, 768; Ибне Сәғд, III, 407).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ мосолмандарға:

*«Йыйылығыҙ һәм ҡәрҙәштәрегеҙҙе ҡаршы алығыҙ!»* – тип бойорғас, көндөң бик эҫелегенә ҡарамаҫтан, бөтә мосолмандар йыйыла. Аллаһ Рәсүле, ат-дөйәһенә атланып, мөжәһидтәрҙе ҡаршы алырға сыға. Арттарынан балалар ҙа эйәргәс, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Балаларҙы ла атландырып ултыртығыҙ! Йәғфәрҙең улын Миңә бирегеҙ!»* – тип мөрәжәғәт итә. Артабан Ғабдуллаһты алып, алдына ултырта (Әхмәт, V, 299; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 244).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Хәлидтең был уңышын юғары баһалай. Мәҙинәгә ҡайтҡан һуғышсыларҙы, мәсьәләнең асылын белмәгәнлектән, «ҡасаҡтар» тип атаған кешеләргә Аллаһ Рәсүле махсус аңлатма яһап:

*«Улар Аллаһ юлында яуҙан ҡасыусылар түгел, ә кабат-кабат һөжүм итеп һуғышыусылар!»* – тип яуап бирә (Ибне Һишам, III, 438; Ваҡыди, II, 765).

Сөнки был һуғышта ислам яуы һан яғынан бик әҙ ғәскәр менән ҙур ҡеүәткә эйә дошманды ҡурҡытыуға ирешә. Аллаһ белдергән түбәндәге олуғ хәҡиҡәт раҫлана:

كَمْ مِّنْ فِئَةٍ قَلِيلَةٍ غَلَبَتْ فِئَةً كَثِيرَةً بِإِذْنِ اللّٰهِ وَاللّٰهُ مَعَ الصَّابِرِينَ

---

260. Хәлид ибн Вәлид былай тигән: «Ант итәм, Мөьтә һуғышы көнө ҡулымда туғыҙ ҡылыс һынды. Бары тик Йәмәндә яһалған киң йөҙлө ҡылыс ҡына сыҙаны» (Бохари, «Мағази», 44).

**«…Әҙ һанлы бер төркөм, Аллаһ рөхсәте менән, ни ҡәҙәр күп һанлы бер төркөмдө еңде.** (Әлбиттә) **Аллаһ сабыр итеүселәр менән бергә булыр»** («әл-Баҡара», 249).

Мөьтә һуғышы исламдың әһли китап вәкиле – христиандар менән тәүге бәрелеше була. Өс мең кешелек бер иман осҡоно йөҙ мең йәки ике йөҙ мең кешелек бер батыл көстө юҡ итеүҙә уңышҡа ирешә.

❀

Хәҙрәти Йәғфәрҙең ҡатыны Әсма бинт Өмәйес һөйләгәндәрҙән:

«Йәғфәр һәм уның иптәштәре шәһит киткән ваҡытта, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яныбыҙға килде. Ул көн ҡырҡ тире эшкәрткән инем. Икмәк өсөн ҡамыр баҫҡас, балаларымдың биттәрен йыуҙырҙым, сәстәрен тарап майланым. Аллаһ Рәсүле минән:

*« Әсма! Йәғфәрҙең балалары ҡайҙа?»* – тип һораны. Уларҙы күкрәгенә ҡыҫты, үбеп-ҡосаҡлап еҫкәне. Был ваҡытта күҙҙәренән йәш аға башланы: «Йә Рәсүлуллаһ! Ата-әсәм һиңә ҡорбан булһын! Ниңә илайһың? Ниңә сабыйҙарыма, гүйә йәтимдәрҙе йыуатҡан кеүек, бер мөғәмәлә күрһәтәһең? Әллә Йәғфәр һәм иптәштәренән ҡайғылы берәй хәбәр килдеме?» – тинем.

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Эйе! Улар бөгөн шәһит киттеләр!»* – тип, ауыр хәбәрен еткерҙе.

«Аһ, әфәндем! Аһ, Йәғфәрем!» – тип үкереп илай башланым.

Йәшәйеш нуры аяғына баҫып, ҡыҙы Фатима янына китте:

*Йәғфәрҙең ғаиләһе өсөн ризыҡ әҙерләгеҙ! Уларҙың аҡылы-зиһене бөгөн үҙҙәренә килгән ҡайғы менән мәшғүл»,* – тине».

Йәғфәр раҙыйаллаһу ғәнһү ғаиләһенә өс көн ашарға килтерәләр. Ғаләмдәрҙең мәңгелек маҡтанысы булған Рәсүлуллаһ Йәғфәрҙең өйөнә өс көн бармай, уларҙы үҙҙәрен генә тынyслыҡта ҡалдырып тора. Аҙаҡ, яндарына барып:

*«Инде ҡәрҙәшем өсөн ҡайғырып иламағыҙ! Бөгөндән һуң ҡәрҙәшемдең балаларын ҡарауҙы үҙ өҫтөмә алам!»* – тип бойора.

Хәҙрәти Йәғфәрҙең улы Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһүмә тапшыра:

«Аллаһ Рәсүле беҙҙе ҡош ояһы кеүек өйөнә алып килде һәм:

*«Миңә бер сәстараш саҡырығыҙ!»* – тип бойорҙо. Сәстараш килеп, башыбыҙҙы ҡырҙы. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡулдарын күтәреп:

*«Аллаһым! Йәғфәрҙең ғаиләһенә хәйерең менән яҡлаусы бул! Ғабдуллаһтың ҡулын сауҙала бәрәкәтле ҡыл!»* – тип доға уҡыны һәм быны өс тапҡыр ҡабатланы.

Әсәйебеҙ килгәс, булған хәлде уға һөйләнем, ул бик һөйөндө. Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ уға:

*«Һин был балаларҙың тәрбиәһе һәм уларҙы тәьмин итеү тураһында бер ҙә борсолма! Донъяла һәм әхирәттә уларҙың вәлие – Мин үҙем!»* – тип белдерҙе» (Әхмәт, I, 204-205; Әбү Дауыт, «Тәрәжжүл», 13/4192; Ибне Һишам, III, 436; Ваҡыди, II, 766; Ибне Сәғд, IV, 37).

Ғабдуллаһ ибн Йәғфәр разыйаллаһу ғәнһүмә Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең үҙе менән яҡындан ҡыҙыҡһынғанлығын раҫлаған бындай бик матур хәтирә менән уртаҡлаша:

«Яҡшы хәтерләйем: хәҙрәти Ғәббәстең ике улы – Ҡусәм менән Ғөбәйҙуллаһ һәм мин бала ғына инек әле, бер көндө урамда уйнай инек. Аллаһ Рәсүле бер хайуанға атланып, беҙҙең янға килде. Миңә ишаралап:

*«Быны миңә күтәреп бирегеҙ!»* – тине һәм мине үҙ алдына атландырып ултыртты. Ҡусәмгә күрһәтеп:

*«Быны ла күтәреп бирегеҙ!»* – тине. Уны артҡы яғына алды.

Ағаһы Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүҙең улдары Ҡусәм менән Ғөбәйҙуллаһ араһынан Аллаһ Рәсүле Ғөбәйҙуллаһты нығыраҡ ярата ине. Шуға ҡарамаҫтан, Рәсүлуллаһ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, ағаһынан ҡыйынһынып тормайса, артына Ҡусәмде ултырта. Артабан өс мәртәбә башымды һыйпаны һәм һыйпаған һайын:

*«Аллаһым! Йәғфәрҙең балаларына Үҙең хужа бул!»* – тип, доға ҡылды»[261] (Әхмәт, I, 205; Хаким, III, 655/6411).

## Хаҡ килде, батыл сигенде. МӘККӘНЕ ЯУЛАП АЛЫУ

(Һижри 8-се йылдың 20 рамаҙаны / 630 йылдың 10 ғинуары)

Мәҙинәле мосолмандар менән мәккәле мөшриктәр араһында ҡылынған Хөдәйбиә килешеүе нигеҙендә, солох ваҡыты ун йыл була. Ләкин мөшриктәр исламдың көндән-көн бөтә Ғәрәбстанға йәйелә барыуына хәсрәтләнә. Шуға күрә әкренләп солох маддәләрен боҙа башлайҙар. Ваҡыт уҙған һайын, солох маддәләренә ҡарата ихтирамһыҙлыҡты һәм был мәсьәләлә ҡыйыулыҡтарын шаҡтай арттыра төшәләр. Хөдәйбиә килешеүе төҙөлгәндән 17–18 ай ҡәҙәр

261. Хәҙис риүәйәт ҡылыусыларҙан берәү тапшыра: «Ғабдуллаһ ибн Йәғфәрҙән: «Ҡусәмгә һуңынан ни булды?» – тип һораным. Ул иһә: «Шәһит китте», – тине. Шунан һуң: «Аллаһ һәм Уның Рәсүле – хәйерлерәк нәмәне иң яҡшы белеүселәр», – тинем. Ғабдуллаһ ибн Йәғфәр: «Эйе!» – тип йөпләне (Хаким, III, 655/6411).

ваҡыт уҙғас, мөшриктәр, үҙҙәренә бәйле булған Бану Бәкр ҡәбиләһен ҡотортоп, мосолман булған хөзәғәлеләрҙең өҫтөнә һөжүм итәләр. Мәккәле мөшриктәр араһынан да ҡай берәүҙәр был енәйәткә ҡатнаша.[262]

Аллаһ Рәсүленә саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә буйһонған Хөзәғә ҡәбиләһенә һөжүм ителгәндә, улар намаҙ уҡыған була. Яуыздарса ҡан ҡойош барышында кемдер сәждәлә, кемдер рөҡуғта, кемдер ҡыямда саҡта шәһит ебәрелә. Хатта мөьминдәр Харамға һыйынғас та, ҡөрәйешлеләр һәм Бану Бәкр вәкилдәре, был урындың харамлығын боҙоп, золомдарын дауам итә. Был хәл кисекмәҫтән Аллаһ Рәсүленә саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә белдерелә.[263]

Хәсрәтле хәбәрҙе килтергән Ғәмер ибн Сәлим раҙыйаллаһу ғәнһүҙе тыңлағанда, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләтү үә-сәләәмдең мөбәрәк күҙҙәренән һарҡып сыҡҡан ынйы бөртөктәреләй күҙ йәштәре гөлдәй яңаҡтарын дымландыра. Пәйғәмбәрҙәр солтаны Әфәндебеҙ бик ныҡ ҡайғыра. Күңеле яраланған сәхәбәһе Ғәмер ибн Сәлимде йыуатырға теләп:

*«Һин ярҙам иттең, әй Ғәмер!»* – ти (Ибне Һишам, IV, 12; Ваҡыди, II, 784-785).

Бер нимәгә лә ҡарамай, мөшриктәр менән араларында ҡылынған килешеүҙе иҫтә тотоп, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хөзәғәлеләргә ҡылынған һөжүм сәбәпле, мәккәлеләргә башта бер илсе ебәрә. Сөнки улар Хөдәйбиә килешеүен шаҡтай ныҡ боҙған була бит. Шуға күрә улар йә үлтерелгән хөзәғәлеләргә йоломон түләргә, йәиһә Бану Бәкр ҡәбиләһен үҙ химаяларынан сығарырға, был ике тәкдимде лә ҡабул итмәгән осраҡта, Хөдәйбиә килешеүен ғәмәлдән сығарылған, тип һанарға тейештәр ине. Күҙҙәрен ҡан һәм нәфрәт баҫҡан ҡәбәхәт мөшриктәр Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең был өс тәкдименән һуңғыһын, йәғни килешеүҙе рәсми рәүештә өҙөүҙе ҡабул итәләр.[264] Шулай итеп, уларҙың был ғәмәле мосолмандар өсөн Мәккәне яулап алырға өндәүгә тиң бер саҡырыу булып яңғырай.

Һуңынан мөшриктәр аҡылдарына килә лә, тик эш уҙған була. Килешеү ике тарафтан да өҙөлә. Вәзғиәтте төҙәтеү өсөн, ҡөрәйешлеләрҙең башлығы Әбү Суфьян сараһыҙ һәм бик ныҡ борсоулы ҡиәфәттә Мәҙинәгә юл тота. Уның солохто яңыртыу маҡсаты менән Мәккәнән сығыуын Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, илаһи вәхи индерелеү сәбәпле белеп, шул миҙгелдә үк сәхәбәләренә еткерә.[265] Мөшриктәрҙең мәкерле енәйәте арҡаһындағы матәм һәм хәсрәт ҙур көсөргәнешлек тыуҙыра, шунлыҡтан Мәҙинәлә Әбү Суфьянды берәү ҙә асыҡ йөҙ менән ҡаршы алмай. Хатта хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡатындарынан Өммө Хәбибә, Әбү Суфъяндың ҡыҙы булһа ла, өйөнә ҡәҙәр килгән атаһының ултырырға теләгән мендәрен дә аҫтынан

262. Ибне Һишам, IV, 4; Бәйхаҡи, «Дәлаил», V, 6.
263. Ибне Һишам, IV, 11; Ваҡыди, II, 783.
264. Ваҡыди, II, 787.
265. Ибне Һишам, IV, 12.

тартып ала. Әбү Суфъян быға бик ныҡ ғәжәпләнә. Аптыраған ҡиәфәттә: «Ҡыҙым, мендәрҙе миңәме, мине мендәргәме лайыҡ күрмәйһең?» – тип һорай.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең һөйөклө ҡатыны булған Өммө Хәбибә әсәбеҙ былай тип яуап ҡайтара: «Был мендәр – Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдеке. Шуға күрә һин, нәжес бер мөшрик булараҡ, уға ултырырға һис лайыҡ түгелһең!» Әбү Суфъян был яуаптан аптырап ҡала: «Ҡыҙым, һин беҙҙән киткәс, иҫ киткес үҙгәргәнһең!» – ти ул. Ләкин Өммө Хәбибә: «Юҡ, Аллаһ мине ислам менән хөрмәтләне», – тип, имандың һәр нәмәнән өҫтөн булыуын иҫенә төшөрә (Ибне Һишам, IV, 12-13).

Беренсе сиратта Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм барлыҡ сәхәбәләр күрһәткән бындай мөнәсәбәт алдында сараһыҙ ҡалып, Мәккәгә әйләнеп ҡайтырға мәжбүр Әбү Суфъян, үҙен уратып алған мәккәлеләргә солохто яңыртыуҙың мөмкин булмауын һөйләгәндә, ғәжәпләнеүен йәшерә алмай: «Мин ҡәлебтәре берҙәм булған бер ҡәүем янынан ҡайтып киләм. Валлаһи, уларҙан файҙа өмөт итеп, олоһо-кесеһе, ҡатыны-ире – һәр кайһыһы менән һөйләштем, ләкин бер ҙә нәтижәһе булманы!» – ти (Ғабдүррәззаҡ, V, 375).

Шул ваҡытта хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәфәргә әҙерләнергә әмер бирә. Яҡын ҡәбиләләрҙе Мәҙинәгә саҡырып, йыраҡтағылар үҙ ерҙәрендә көтөп торорға, ғәскәргә юлда ҡушылырға тейеш, тигән әмер бирә. Бик йәшерен рәүештә эш итәләр. Дошман Мәҙинәләге был ашығыс йыйыныуҙарҙан шөбһәләнмәһен өсөн, Сүриә тарафтарына бер төркөм ғәскәр ебәргән хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәр яҡты ҡырыҫ күҙәтеү аҫтына ала. Йәнәбел-Хаҡтың ярҙамына өмөтләнеп, мөьминдәр ҙур еңеүгә ҡан түкмәй генә ирешеү теләге менән яналар. Шуға күрә бер ни ҡәҙәр стратегик саралар ҙа күрелә.

Быларҙың беренсеһе: сәхәбәләренә сәфәр хәстәрлеге күрергә ҡушһа ла, ҡайҙа барасағын асып һалмай, Пәйғәмбәр асыл ниәтен йәшереп ҡала.[266] Хатта иң яҡын дуҫы һәм серҙәше Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү ҙә Мәккәгә барасаҡтарын төшөнмәй, сәфәрҙең ҡайһы тарафҡа буласағы тураһында ҡыҙы һәм Рәсүлуллаһтың ҡатыны хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһәнән һорай. Ул иһә: «Белмәйем. Бәлки Бану Сөләйемдәргә, бәлки саҡифтәргә, йә лә Хәүәзиндәргә барырға ниәтләргә мөмкин!» – ти (Ибне Һишам, IV, 14).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәнә мәккәлеләр бер ниндәй ҙә һуғыш әҙерлеге тураһында уйламаһын һәм еңеүҙең солох ысулы менән яуланыуын ысынға ашырыр өсөн, юлдарҙы бикләп, Мәккәгә берәй ниндәй хәбәр, күҙәтселәр-агенттар китеү мөмкинлеген ябып ҡуя һәм түбәндәгесә доға ҡыла:

*«Аллаһым! Илдәренә көтмәгәндә килеп сыҡҡансыға тиклем, ҡөрәйешлеләрҙең күҙәтселәрен һәм хәбәрселәрен туҡтатып тор, уларҙы*

266. Ибне Сәғд, II, 134.

*күрмәҫ һәм ишетмәҫ хәлгә килтер. Ҡөрәйешлеләрҙең күҙҙәрен бәйлә, Миңә көтмәгәндә юлыҡһындар»* (Ибне Һишам, IV, 14).

Мәҙинәнән юлға ҡуҙғалғанда, ҡөрәйешлеләрҙе аптыраштa ҡалдырыу өсөн, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ бөтөнләй кире йүнәлештәге – уға тарафдар ҡәбиләләргә ҡағылып сыға, әйләнә рәүешендәге бер маршрут буйынса барып, маҡсатының ниндәй булыуына бәйле билдәһеҙлекте шаҡтай көсәйтә. Мәккә тирәләренә еткәс, һәр һуғышсынан айырым бер усаҡ яҡтыртып, психологик яҡтан уларҙың һанын күберәк итеп күрһәтеү маҡсатын да ҡайғырта.[267]

Йәнә шундай уҡ йәшеренлек мораты менән, миҡат урыны булған Зөлхүләйфәлә ихрамға кермәйенсә, сәфәрҙең асыл йүнәлеше мәсьәләһендәге серлелекте һаҡлап ҡала.[268]

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм көс-ҡеүәт йыйғас, был көстөң кешеләрҙе ҡырып-үлтереп илдәрен яулау өсөн түгел, уларҙың күңелдәрен Аллаһҡа асыу, ысын бәхеткә, йәғни һидәйәткә ирешеүҙәрен тәьмин итеү өсөн файҙалана. Сөнки Ул – ғаләмдәргә рәхмәт һәм һидәйәт булараҡ ебәрелгән бер «Рәхмәт Пәйғәмбәре».

Аллаһ Тәғәлә мосолмандарҙың һуғыш һәм тыныслыҡ мәсьәләһендәге быңдай ҡараштарын аяти кәримәлә түбәндәгесә асып бирә:

الَّذِينَ إِنْ مَّكَّنَّاهُمْ فِى الْأَرْضِ أَقَامُوا الصَّلَاةَ وَآتَوُا الزَّكَاةَ وَأَمَرُوا
بِالْمَعْرُوفِ وَنَهَوْا عَنِ الْمُنْكَرِ وَلِلَّهِ عَاقِبَةُ الْأُمُورِ

**«Беҙ мөьминдәргә ер йөҙөндә бер хакимлыҡ биргәс, улар намаҙҙы дөрөҫ, тейешенсә ҡылырҙар, зәкәттәрен бирерҙәр, хәйерлегә өндәрҙәр һәм яманлыкты тыйырҙар. Бөтә эштәренең ахыры – бары Аллаһтан ғына»** («әл-Хаж», 41).

Бөтә әсхәбе кирам әлеге йәшеренлеккә буйһонған ваҡытта, Бәҙер ғазиҙарынан Хатиб ибн Әби Бәлтаға, ошо хәлдәр тураһында хәбәр итеп, Мәккәгә хат яҙа һәм уны бер ҡатын менән ебәрә. Илаһи вәхи аша Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был хаҡта белеп ҡала һәм, ҡатындың ҡайҙа икәнен аңлатып, хәҙрәти Ғәли, Зөбәйер һәм Миҡдад разыйаллаһу ғәнһүм әжмәғингә ул ҡатынды тотоп килтереү эшен йөкләй. Әлеге ҡатынды Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм күрһәткән урында эләктерәләр. Ундағы хатты алып, Рәсүлүллаһҡа килтерәләр. Хатта былай тип яҙылған була: «Эй ҡөрәйеш! Аллаһтың Рәсүле һеҙҙең өҫкә шундай ҙур көс менән килә, төн ҡараңғылығы кеүек ҡурҡыныс был ғәскәр ташҡындай ағасаҡ. Аллаһ менән ант итәм, Рәсүлүллаһ өҫтөгөҙгә бер үҙе генә һөжүм итһә лә, Аллаһ Уны һеҙҙән

267. Хәмидуллаһ, I, 264-265.
268. Нәби Бозкурт, DİA, «Мәккә» маддәһе, XXVIII, 557.

өҫтөн ҡыласаҡ, вәғәҙәһен үтәйәсәк. Хәҙер үк башығыҙҙы һаҡлау сараһын күрегеҙ!» (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 278).

Асылда, был һүҙҙәр ялған да түгел, хыянат, тип тә әйтелә алмай. Ләкин йәшерен ҡалыуҙы күҙ уңында тотҡан хәҡиҡәт дошманға асып бирелә. Шуға күрә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был хатты яҙған Хатибты янына саҡыртып, һорау бирә:

*«Эй Хатиб! Ниңә былай эшләнең?»*

Бәҙер ғазизарының береһе булған Хатиб бик ҙур үкенес менән: «Йә Рәсүлүллаһ! Янығыҙҙағы мөһәжирҙәрҙең Мәккәлә ғаилә һәм малдарын һаҡларлыҡ кешеләре бар. Минең һис кемем юҡ. Мин был хат менән улар араһында рәхмәт, дәрәжә яулап, ғаиләмде, бала-сағамды һаҡларға теләгән инем. Валлаһи, мин уларҙың шпионы түгелмен. Мин был эште динемдән йөҙ сөйөрөү кеүек бер яман ниәт менән эшләмәнем. Мосолман булғандан һуң, мин бер ҡасан да көфөрлөк юлына баҫмам. Валлаһи, минең Аллаһ һәм Уның Рәсүленә ҡарата иманым сикһеҙҙер. Һис динемде үҙгәртмәнем...» – ти. Шунан һуң мәрхәмәт диңгеҙенә тиң хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Хатиб үҙен дөрөҫ яҡлай»,* – тип нәтижә сығара һәм уны ғәфү итә.

Хатибтың муйынын сабырға теләгән хәҙрәти Ғүмәргә иһә Бәҙер һуғышында ҡатнашыусыларҙың хата-яңылыштарын Йәнәбел-Хаҡтың кисерергә ҡушҡанын иҫенә төшөрөп, түбәндәгесә яуап бирә:

*«Әммә ул Бәҙер яуында ҡатнашҡан ине. Һин ҡайҙан беләһең, бәлки Аллаһ Тәғәлә хәҙрәттәре Бәҙер әһеленең хәлен белеп-күреп: «Үҙегеҙ теләгәнсә эшләгеҙ, һеҙҙе ғәфү ҡылдым!» – тип әйткәндер»* (Бохари, «Магази», 9; Мөслим, «Фәҙаилүс-Сәхәбә», 161).

Шуның менән бергә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, был ваҡытта иңдерелгән түбәндәге аяти кәримәләр асыҡлағанса, Аллаһ дошмандары менән дуҫлыҡ һаҡларға ярамағанлығы тураһында, беренсе сиратта – Хатибҡа, ә артабан бөтә әсхәбе кирамға хәбәр еткерә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَتَّخِذُوا عَدُوِّي وَعَدُوَّكُمْ أَوْلِيَاءَ تُلْقُونَ إِلَيْهِمْ بِالْمَوَدَّةِ
وَقَدْ كَفَرُوا بِمَا جَاءَكُمْ مِنَ الْحَقِّ يُخْرِجُونَ الرَّسُولَ وَإِيَّاكُمْ أَنْ تُؤْمِنُوا بِاللَّهِ رَبِّكُمْ
إِنْ كُنْتُمْ خَرَجْتُمْ جِهَادًا فِي سَبِيلِي وَابْتِغَاءَ مَرْضَاتِي تُسِرُّونَ إِلَيْهِمْ بِالْمَوَدَّةِ وَأَنَا
أَعْلَمُ بِمَا أَخْفَيْتُمْ وَمَا أَعْلَنْتُمْ وَمَنْ يَفْعَلْهُ مِنْكُمْ فَقَدْ ضَلَّ سَوَاءَ السَّبِيلِ

**«Эй иман килтереүселәр! Әгәр Минең юлымда һуғышырға һәм ризалығымды алырға сыҡҡанһығыҙ икән, Минең дә дошманым, һеҙҙең дә дошманығыҙ булғандарҙы яратып, уларға йәшерен генә мөхәббәт**

**һаҡлап, уларҙы дуҫ итмәгеҙ! Сөнки улар һеҙгә ебәрелгән ысынбарлыҡты инҡар иткәндәр ине.** (Улар) **Раббығыҙ Аллаһҡа инанғанлығығыҙ сәбәпле, Пәйғәмбәрҙе лә, һеҙҙе лә туған ерегеҙҙән ҡыуҙылар. Мин һеҙҙең йәшереп йөрөткәнде лә, асып һалғанды ла бик яҡшы беләм. Арағыҙҙан быны эшләүсе** (уларҙы дуҫ итеүсе)**, тура юлдан тайпылған булыр.**

إِنْ يَثْقَفُوكُمْ يَكُونُوا لَكُمْ أَعْدَاءً وَيَبْسُطُوا إِلَيْكُمْ أَيْدِيَهُمْ وَأَلْسِنَتَهُمْ بِالسُّوءِ وَوَدُّوا لَوْ تَكْفُرُونَ. لَنْ تَنْفَعَكُمْ أَرْحَامُكُمْ وَلَا أَوْلَادُكُمْ يَوْمَ الْقِيَامَةِ يَفْصِلُ بَيْنَكُمْ وَاللّٰهُ بِمَا تَعْمَلُونَ بَصِيرٌ

(Белегеҙ), **әгәр улар һеҙҙе ҡулға төшөрһәләр, һеҙгә дошман булып сығасаҡтар, һеҙгә ҡулдарын һәм телдәрен яманлыҡ ҡылыу өсөн тотасаҡтар. Ысынбарлыҡта** (улар, һис шикһеҙ, һеҙҙең имандан ваз кисеп), **инҡар итеүегеҙҙе теләйҙәр.** (Тағы шуны белегеҙ): **ҡиәмәт көндө яҡындарығыҙ һәм балаларығыҙ һеҙгә файҙа бирмәҫ. Сөнки Аллаһ арағыҙҙы айырыр. Аллаһ – ҡылғандарығыҙҙы күреүсе»** («әл-Мүмтәхана», 1-3).[269]

Был аяти кәримәләр аша мосолмандарҙың бала-саға, мал-мөлкәт шикелле сәбәптәр арҡаһында кафырҙар менән дуҫлыҡ урынлаштырыуы тыйыла. Мәҫәлән, хәҙрәти Нух ғәләйһис-сәләмдең улы Кәнан иманһыҙҙар араһында йөрөгән өсөн һәләк ителә. Шулай уҡ Лут ғәләйһис-сәләмдең ҡатыны ла, боҙоҡ, оятһыҙ заттар менән аралашҡан-күрешкәнгә күрә, үҙе лә боҙоҡлоҡҡа сума һәм илаһи ҡәһәргә дусар була. Тимәк, уларҙың бер пәйғәмбәр менән матди, есми яҡынлыҡтары бер ниндәй ҙә роль уйнамаған.

❁

Һижрәттең һигеҙенсе йылында, рамаҙан айының унынсы көнөндә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ун мең кешелек ҡеүәтле иман ғәскәре менән Мәҙинәнән ҡуҙғалып китә. «Йыһат» ниәте менән яуға сыҡҡанға күрә, Рәсүлуллаһ юлда ураҙаһын туҡтатып, ауыҙ аса. Сәхәбәләргә лә шундай уҡ әмер бирә.[270]

Жухфә тип йөрөтөлгән урынға килеп еткәс, хәҙрәти Ғәббәс менән осрашалар. Бынан әүәлерәк мосолманлыҡ ҡабул иткән Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү, динен йәшереп, Мәккәлә ҡала, шунда йәшәгән килеш, ҡөрәйешлеләрҙең эш-ғәмәлдәре тураһында һәр заман Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә тапшырып тора. Мәккәи Мөкәррәмәлә йәшәүенең бер сәбәбе иһә үҙенә йөкләнгән вазифа – хажиҙарға һыу таратыу эшен башҡарыу була. Ниһәйәт, тейешле ваҡыттың еткәнен уйлап, ул да һижрәт ҡылыу өсөн ғаиләһе менән бергә юлға сыға.[271] Быға бик һөйөнгән Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

269. Бохари, «Тәфсир», 60.
270. Бохари, «Магази», 47.
271. Ибне Һишам, IV, 18.

*«Мин Пәйғәмбәрҙәрҙең ахырғыһы булған кеүек, һин дә мөһәжирҙәрҙең һуңғыһы булдың!»* – тип белдерә (Ғәли әл-Мүттаҡи, XI, 699/33387).

Мәккәне яулау ниәте менән ҡылынған был яу сәфәре ваҡытында, бөтә кешелек өсөн ғибрәт булырлыҡ бер ваҡиға ысынға аша. Был – Яралтыусы Аллаһ күҙлегенән мәхлүҡатҡа мөнәсәбәттең бер сағылышы була. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәскәре сил кеүек ағып бара. Әле яңы ғына мосолманлыҡ ҡабул иткән ҡәбиләләр Ғәрәбстандың дүрт тарафынан ислам армияһына төркөм-төркөм ҡушыла. Был, ысын мәғәнәһендә, мәхшәр көнөн хәтерләтә. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе әлеге иҫ киткес армияһы менән Арж тигән ерҙән ҡуҙғалып, Талубҡа таба йүнәлә. Юлда көсөктәре өсөн һуҙылып, уларҙы имеҙеп ятҡан бер этте күреп ҡала. Шунда уҡ сәхәбәләрҙән Жуғайл ибн Сүраҡаны үҙ янына саҡырып, уны шул эт һәм көсөктәргә һаҡсы итеп ҡуя. Еңеү дәрте менән уҙып барған ислам ғәскәре инә этте һәм уның көсөктәрен ҡурҡыта күрмәһен, тип киҫәтеү яһай.[272]

Ни ҡәҙәр ғәжәп күренеш! Кешелек тарихының бындай мәрхәмәтлелек үрнәген элгәре күргәне бар инеме икән?[273]

Мәккәне яулау кеүек, тарихи күҙлектән ҡарағанда, бик мөһим боролош нөктәһе булырға тейешле олуғ ваҡиға ваҡытында, бәлки, ваҡ-төйәк тип баһалана алһа ла, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иң кешелекле мәсьәләгә иғтибар юнәлтә, шуның менән мәшғүл була. Ул үҙен шул эт һәм көсөктәр өсөн яуаплы тип тоя. Был ваҡиғанан беҙ алырға тейешле һабаҡ иһә шунан ғибәрәт: юғары урындарҙа ултырыусы идарасылар ҙа һәр нәмәгә, хатта иң ваҡ мәсьәлә өсөн дә яуаплы икәнлектәрен аңларға һәм ихтимал ваҡиғаларға ҡаршы даими уяулыҡ һаҡларға тейеш.[274]

❁

272. Ваҡыди, II, 804.

273. Бындай вәзғиәттә бер төркөм ислам дошмандары бөйөк диндә хәҙерге замандағы кешелек фажиғәләренең береһе булған терроризм төшөнсәһе менән йәнәшә ҡуя. Юғиһә, террор һәм анархизм ҡаты күңеллелек нигеҙендә ҡорола һәм уларға әхлаҡ кеүек юғары хис-тойғолар бөтөнләй хас та, кәрәк тә түгел. Ислам иһә тыуған көнөнән бирле һәр төрлө террор һәм анархизмға ҡарата тиҫкәре мөнәсәбәттә тора һәм көфөрмө, мөьминме – һәр кешенең, хатта йәнле һәм йәнһеҙ бөтә мәхлүҡтәрҙең хаҡ үә хоҡуғын һаҡлауҙы нигеҙ итеп ала. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең егерме өс йыллыҡ нәбилек тормошо терроруға ҡаршы көрәш менән уҙа.

274. Шағир Мәхмәд Ғакиф Әрсой, хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүҙең идара эшендәге иҫ киткес яуаплылыҡ тойғоһон шул саҡлы күркәм сағылдыра:
Тигр йылғаһы ярында бер бүре ашаһа бер һарыҡты,
Килер ҙә илаһи ғәҙеллек эйәһе Ғүмәрҙән һорар уны!
Бер ҡарт ҡатын яңғыҙ ҡала икән, Ғүмәр яуаплы!
Йәтим күҙ йәшенә батһа, Ғүмәр яуаплы!
Бер фәҡирлек йорто ҡараусыһыҙ емерелһә:
Ғүмәр ҡалыр йәнә уның аҫтында, һис башҡа берәү түгел!
Тупраҡҡа хаинлыҡ менән бер тамсы ҡан түкһә берәү,
Ул тамсы бер ҙур йырғанаҡҡа әйләнеп, батырыр Ғүмәрҙе!
Ғүмәр һүҙе ишетелә һәр күңел ҡырылыуҙан;
Ғүмәр ҡыуыла һәр матәм ситенән!
Ғүмәр хәлифә икән, башҡа кем алыр яуаплылыҡ?
Ғүмәр ни ҡылһын, Илаһи, бәндә бик яуыз һәм бик наҙан!
Ғүмәрҙән һорайҙар Мөхәммәттән киткәнде...
Ғүмәр! Ғүмәр! Нисек үҙ өҫтөңә алдың бындай йөктө?

Ул саҡта мәккәлеләр тирә-яҡта барған хәлдәрҙән хәбәрһеҙ була. Ислам ғәскәренең ҡалаларына бер көнлөк юл йыраҡлығындағы Мәрру әҙ-Ҙәһрән үҙәнлегенә урынлашҡандарын белгәс, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әмере менән һәр ғәскәриҙең айырым-айырым усаҡ яғыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән мөһәбәт манзараны күреп, ҡоттары оса. Шаҡ ҡатҡан мөшриктәр ни эшләргә белмәй.

Әбү Суфъян үҙенең фекерҙәштәре Хәким ибн Хизам һәм Бүдәйелде янына саҡыра ла, ҡыҙыҡһынып, тирә-яҡтағы хәл-әхүәлде өйрәнеү өсөн Мәккәнән сыға. Ислам ғәскәрҙәре ҡабыҙған меңдәрсә утты күргәс, ғәжәпкә ҡалалар. Уларҙың ҡайһы ҡәүем-ҡәбиләнән икәнлеген самаларға тырышалар. Ләкин унда ҡуна ҡалыусыларҙың Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ һәм Уның сәхәбәләре булыу ихтималы аҡылдарына килеп тә ҡарамай. Мәккә бар яҡтан да ҡулсалай ҡамап алынғанға, Әбү Суфъян һәм иптәштәре бик тиҙ мөьминдәр ҡулына эләгә һәм уларҙы Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килтерәләр.[275]

Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү, Әбү Суфъяндың үлтерелергә тейешлеген белдереп, Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тирәһендә йөрөгәндә, ағаһы Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү иһә әсирҙе ғәфү итеүен һорай. Тиңһеҙ сәйәси даһилығы менән иҫ киткес оҫта һуғыш тактикаһы алып барған Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ағаһына мөрәжәғәт итеп:

*«Әбү Суфъянды ал да ғәскәр уҙасаҡ ергә илт! Ислам армияһының ҙурлығын күрһәт!»* – тип бойора.

Был иһә – ҡөрәйешлеләр башлығы Әбү Суфъянда мөшриктәрҙең мосолмандарға ҡаршы кәрәкһеҙгә, юҡҡа көрәшеп ятыуына ҡомасаулаясаҡ рухи халәт тыуҙырырға ынтылыш тигән һүҙ. Шул рәүешле мөшриктәрҙең ҡаршылыҡ күрһәтмәүенә, ҡан түгелмәүенә ирешеп була.

Хәҙрәти Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү, Әбү Суфъянды Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм күрһәткән күсенеү урынына алып бара. Ул саҡта ислам армияһы ҡуҙғалған була, отряд-отряд алға барған сағы. Һәр төркөмдөң иманлы йөрәктәренән ташып сыҡҡан اَللّٰهُ أَكْبَرُ шиғарҙары ғәрешкә ҡәҙәр ишетерлек булып яңғырай.

Быңдай манзара ҡаршында Әбү Суфъяндың күҙҙәре ҡамаша. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәскәре уҙғанда ла, ул үҙенең ҡурҡыуын һәм ғәжәпләнеүен йәшермәйенсә: «Вәт Ғәббәс! Туғаныңдың улы, батшалығын ни ҡәҙәр ҙурайтҡан бит!..» – ти. Ғәббәс раҙыйаллаһу ғәнһү был һүҙҙәргә ҡаршы төшә: «Юҡ, был батшалыҡ түгел, пәйғәмбәрлек...» – тип асыҡлай.

Әбү Суфъян иһә: «Эйе, шулай!» – тип раҫлай (Бохари, «Мағази», 48; Хәйсәми, VI, 164; Ибне Сәғд, II, 135; Ибне Әсир, *«әл-Камил»,* II, 242). Артабан ул күсеш юлы

275. Бохари, «Мағази», 48.

тирәһенән китеп, йәнә хәзрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына киләләр. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе:

*«Эй Әбү Суфъян! Әле һаман да* لَا اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ *,тип әйтер ваҡытың етмәнеме әле?»* – тип һорай.

Бер аҙ уйлап торғандан һуң, Әбү Суфъян тәүхид кәлимәһен ҡабатлай. Ләкин хәзрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде таныҡанлығы тураһында ғибәрәне әйтмәй. Хәзрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йәнә һорау бирә:

*«Минең Аллаһтың Рәсүле икәнлегемде әйтер ваҡытың етмәнеме әле?»*[276]

Әбү Суфъян, был һорауға яуап биреү өсөн бер аҙ ваҡыт һораһа ла, хәзрәти Ғәббәс киҫәткәс, шәһәҙәт кәлимәһен тулыһынса ҡабатлай. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны маҡтап-бүләкләп ебәреү һәм йөрәген исламға ҡарата йылытыу өсөн, Мәккә халҡы именлектә-тыныслыҡта буласаҡ ерҙәрҙе һанағанда, Әбү Суфъяндың өйөн дә иҫкә алып, былай ти:

*«Кем Мәсжиди Харамға инһә, шул именлектә булыр. Кем өйөнән ситкә сыҡмаһа, шул именлектә булыр. Кем Әбү Суфъян өйөнә һыйынһа, ул да именлектә булыр!»* (Әбү Дауыт, «Хараж», 24-25/3021-3022; Хәйсәми, VI, 164-166; Ибне Һишам, IV, 22).

Иректә ҡалдырылған Әбү Суфъян Мәккәгә ҡайтҡанда, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренә түбәндәге һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә:

*«Һеҙгә ҡаршы ниндәйҙер бер һөжүм булмайынса тороп, һис кемгә ҡылыс күтәрмәгеҙ!»* (Ибне Һишам, IV, 28).

Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дүрт өлөшкә бүленгән ислам ғәскәренә ҡуҙғалырға бойора. Шул рәүешле Мәккә дүрт яҡтан тәкбир һүҙҙәре менән тула.

---

276. Йәнәбел-Хаҡтың Ҡөрьәни-Кәримдәге:

قُلْ اَطِيعُوا اللّٰهَ وَالرَّسُولَ فَاِنْ تَوَلَّوْا فَاِنَّ اللّٰهَ لَا يُحِبُّ الْكَافِرِينَ

«(Әй Рәсүлем!) Әйт: «Аллаһҡа һәм Рәсүлгә итәғәт ҡылығыҙ! Әгәр йөҙ сөйөрһәгеҙ, ысынлыҡта, Аллаһ кафырҙарҙы һөймәҫ!» – аятынан да («Әлү Ғимран», 32) бары Аллаһҡа иман һәм итәғәттең генә етерлек түгеллеге аныҡ аңлашыла. Тимәк, бары Аллаһҡа йәки бары Рәсүлгә генә иман һәм итәғәт ҡылыусы заттар, аятҡа күрә, Аллаһ һөймәгән кафырҙар булараҡ билдәләнә. Сөнки иң мөһиме – ҡолдоң ғажиз һәм кәмселекле аңына, ҡабул итеүенә күрә түгел, илаһи ихтыярҙың теләге һәм әмере йүнәлешендә иманға килеү. Аллаһ Тәғәлә Рәсүленә диндең бер бағанаһы рәүешендә шундай дәрәжәне бирә һәм мөьминдәргә, имандың бер шарты булараҡ, Уға шәһәҙәт килтереүҙе һәм итәғәт ҡылыуҙы бойора. Бөгөн бер төркөм ғафилдарҙың, илаһи фарманға ҡарамаҫтан, Рәсүлгә итәғәтте кире ҡағыу тиң ғәмәл – сөннәти сәнийәне ҡабул итмәүҙәре һәм үҙҙәренең зәғиф аҡылдары менән: «Беҙгә Ҡөрьән генә лә етер!» – тип әйтеүҙәре, тышҡы яҡтан Ҡөрьәнгә бағлылыҡты белдергән ошо һүҙҙәренә лә ни саҡлы ҡаршы килә, наҙан һәм, тағы ла дөрөҫөрәге, хыянатсыл бер эш-ғәмәл булып тора.

Һигеҙ йыл әүәл ике дөйә һәм өс кеше менән Мәккәнән меҫкен ҡиәфәттә сығып киткән хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бөгөн иһә, Аллаһ рәхмәте менән ун мең кешелек ҡеүәтле һәм һоҡланғыс ғәскәр етәкләп, мөбәрәк ҡалаға инеп бара. Ул көндө тыуған еренән ҡыуылған меҫкен бәндә бөгөн иһә тыуған ҡалаһын яулаған еңеүсегә әйләнә. Ләкин Ул бының менән һис тә ғорурлыҡҡа, тәкәбберлеккә бирелмәйенсә, дөйәһенең муйынына сәждә ҡыла-ҡыла, йәғни ошбу ниғмәтте насип ҡылған Аллаһҡа шөкөр итә-итә Мәккәгә аяҡ баҫа. Башын Аллаһ Тәғәлә ҡаршында шул ҡәҙәр ихласлыҡ, тәҡүәлек менән эйә ки, һаҡалының остары дөйәләге эйәргә тейә яҙа. Был ваҡытта Ул туҡтауһыҙ:

اَللّٰهُمَّ لَا عَيْشَ اِلَّا عَيْشُ الْاٰخِرَةِ

*«Йә Аллаһым! Ысын тормош – бары әхирәт тормошо ғына!»* – тип тәкрарлай[277] (Ваҡыди, II, 824; Бохари, «Риҡаҡ», 1).

Нәбәүи әхлаҡ менән тәрбиәләнгән әсхәбе кирамдың ғәмәлдәре лә Аллаһ Рәсүленекенән әллә ни айырылмай.

Ислам ғәскәре бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ осратмай тиерлек. Был мәсьәләлә Әбү Суфъян арҡылы ҡулланылған тактик хәйләкәрлек – мәккәлеләр мосолмандарға ҡаршы күтәрелмәһен өсөн күрелгән сара шаҡтай һөҙөмтә бирә: ҡеүәтле ислам ғәскәре менән һуғышырға берәү ҙә йөрьәт итмәй. Бары Хәлид ибн Вәлид Мәккәгә кергән ерҙә генә әҙ-мәҙ бәрелеш булып ала. Уныһы ла тиҙ генә хәл ителә.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, «Фәтх» сүрәһен уҡып, әсхәбе кирам менән бергә Изге Ҡәғбәгә йүнәлә. Дөйәһенән төшмәйенсә генә, Ҡәғбәне тауаф ҡылғас:

جَاءَ الْحَقُّ وَزَهَقَ الْبَاطِلُ

**«…Хаҡ килде, батыл юҡҡа сыҡты!..»** – аяти кәримәһен («әл-Исра», 81) уҡып, ҡулындағы таяҡ менән Ҡәғбәләге боттарҙы шәхсән үҙе ҡыра-ауҙара башлай (Бохари, «Магази», 48; Мөслим, «Йыһат», 87; Ваҡыди, II, 831-832).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Бәйтүллаһта һүрәттәр күргәс, эскә кермәй. Башта уларҙы юҡ итергә ҡуша. Сәхәбәләр шунда уҡ уның әмерен үтәй.

277. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, донъя тормошо менән сағыштырғанда, әхирәттең ни хәтле әһәмиәтле икәнлеген белдергән был һүҙҙәрҙе ғүмер буйы йыш-йыш ҡабатлай. Риүәйәттәрҙә, Мәсжиди Нәбәүи төҙөлгәндә, Хәндәк һуғышы өсөн окоп-урҙар ҡаҙылғанда, Фәтех көнө Мәккәгә кергәндә һәм Хушлашыу хажы ваҡытында ғәрәфә көнө мөьминдәрҙең күплеген күргәс әйткәнлеге аныҡ мәғлүм (Ҡарағыҙ: Бохари, «Йыһат», 33, 110, «Мәнаҡибул-ансар», 9, «Магази», 29; Мөслим «Йыһат», 126, 129; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 55; Ибне Мажә, «Мәсәжид», 3).

Эске яҡта хәҙрәти Ибраһим һәм хәҙрәти Исмәғил ғәләйһимәссәләмдәрҙең ҡулдарына фал уҡтары тотҡан хәлдәге һүрәттәрен күргәндән һуң, Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм былай тип белдерә:

*«Аллаһ был һүрәттәрҙе яһаған мөшриктәрҙең йәнен алһын. Валлаһи, был Пәйғәмбәрҙәр һис ҡасан уктар менән күрәҙәлек ҡылманы. (Киреһенсә, быны кире ҡаҡтылар)»* (Бохари, «Әнбиә», 8, «Хаж», 54, «Магази», 48).

Башҡа һыймаҫлыҡ ауырлыҡтарға бирешмәйенсә, боттарҙы емергән Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ғүмер буйы рәхмәтле булырға тейешлегебеҙ тураһында Хаҡ дуҫы Мәүләнә ҡуддисә сирруһ былай тип аңлата: «Һай бөгөн мосолман булған зат! Әгәр хәҙрәти Әхмәт ғәләйһис-салəтү үә-сәләәмдең олуғ тырышлығы һәм боттарҙы ҡырып төшөрөү мәсьәләһендәге ярҙамы булмаһа, һин дә ата-бабаларың кеүек боттарға табынып йәшәр инең».

Мәккә яуланған көн мосолмандар таң атҡансы тәкбир һәм тәһлил әйтә, туҡтауһыҙ Ҡәғбәне тауаф ҡыла. Быны күреп торған Әбү Суфъян ҡатыны Һиндкә: «Һин быны Аллаһтан икәнлеген уйлап ҡарайһыңмы?» – тип һорай. Һинд: «Эйе! Был – Аллаһ тарафынан бойоролған бер эш!» – ти.

Икенсе көндө иртә таңдан Әбү Суфъян Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына бара. Аллаһ Рәсүле уға кис ҡатыны менән икеһе араһындағы әңгәмәне һөйләп күрһәтә. Әбү Суфъян: «Шәһәҙәт ҡылам, Һин – Аллаһтың Рәсүле! Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, был һүҙемде Аллаһ менән Һиндтән башҡа берәү ҙә ишетмәгән ине!» – ти (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 296).

Еңеүҙән һуң мәккәлеләр балаларын Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә алып килә, Ул иһә, баштарынан һыйпап, улар өсөн доға ҡыла (Әхмәт, IV, 32).

**Ғәфү итеү байрамы**

Был ваҡытта ҡөрәйешлеләр Мәсжиди Харамға тула, үҙҙәре хаҡында сығарыласаҡ хөкөмдө көтәләр. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ундағыларға ғына түгел, бөтә кешелеккә адресланған ошбу олуғ хөтбәһен һөйләй:

*«Аллаһтан башка илаһ юк. Берҙән-бер Ул ғына бар. Уның һис бер тиңдәше һәм оҡшашы юк. Аллаһ вәғәҙәһен үтәне, ҡолона ярҙам итте һәм бөтә дошмандарыбыҙҙы таратты. Ҡәғбә хеҙмәте һәм хажиҙарға һыу таратыу эшенән ҡала бөтә иҫке ғәҙәт-йолалар, мал һәм ҡан дәғүәләре бөгөн ошо ике аяғым аҫтында.*

*Эй ҡөрәйешлеләр! Аллаһ һеҙҙән яһилиәт тәкәбберлеген, ата-бабалар, нәҫел менән (маҡтанып) танау сөйөүҙе алып ташланы. Бөтә кешеләр – Әҙәмдән, ә Әҙәм иһә тупраҡтан яратылған.*

(Әфәндебеҙ ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм был һүҙҙәренән һуң, түбәндәге аяти кәримәне уҡыны:)

يَا أَيُّهَا النَّاسُ إِنَّا خَلَقْنَاكُمْ مِّنْ ذَكَرٍ وَأُنْثَى وَجَعَلْنَاكُمْ شُعُوبًا وَقَبَائِلَ لِتَعَارَفُوا إِنَّ أَكْرَمَكُمْ عِنْدَ اللّٰهِ أَتْقَاكُمْ إِنَّ اللّٰهَ عَلِيمٌ خَبِيرٌ

**«Эй кешеләр! Дөрөҫлөктә, Беҙ һеҙҙе бер ир-ат менән бер ҡатын-ҡыҙҙан яраттыҡ. Һәм һеҙҙе** (тәкәбберләнеп маҡтаныуығыҙ өсөн түгел) **бер-берегеҙҙе таныр өсөн тип, милләттәргә һәм ҡәбиләләргә айырҙыҡ. Аллаһ ҡаршында иң өҫтөнөгөҙ, һис шикһеҙ, Унан иң нык ҡурҡҡанығыҙ. Шөбһәһеҙ, Аллаһ – белеүсе, һәр нәмәнән хәбәрҙар»** («әл-Хужурат», 13; Ибне Мажә, «Дият», 5; Әхмәт, II, 11; Тирмизи, «Тәфсир», 49/3270).

Инде Мәккәи Мөкәррәмә, Хөдәйбиәлә ирештерелгән һөйөнөслө хәбәр булараҡ, ғәфү ҡылыу, солох, именлек һәм һидәйәтте берләштергән рухи еңеү ярҙамында ысын хужаларына, йәғни уны йәндәй яҡын күргән мөьминдәргә ҡоластарын аса. Мең дә бер ғазап, золом һәм ҡыйынлыҡтар менән тулы Мәккә һағышы ла тамамлана. Йылдарса дауам иткән хәсрәт шатлыҡҡа әйләнә. Ана шуның шөкранаһы сифатында тарихтағы иң олуғ ярлыҡау үрнәген күрһәтеп, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккә халҡынан:

*«Эй ҡөрәйеш йәмәғәте! Хәҙер Минең һеҙҙе ни эшләтәсәгем тураһында нәмә уйлайһығыҙ?»* – тип һорай.

Ҡөрәйешлеләр: «Беҙ Һинең хәйерле ғәмәл һәм игелек ҡыласағыңа өмөтләнеп: «Хәйерлене эшләрһең!» – тибеҙ. Һин киң күңеллелек һәм игелек эйәһе булған ҡәрҙәш! Киң күңеллелек һәм игелек эйәһе булған ҡәрҙәштең улы ла Һин!..» – тиҙәр.

Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Хәҙрәти Йософ туғандарына әйткән кеүек, Мин дә:*

لَا تَثْرِيبَ عَلَيْكُمُ الْيَوْمَ يَغْفِرُ اللّٰهُ لَكُمْ وَهُوَ أَرْحَمُ الرَّاحِمِينَ

**«…Һеҙҙе бөгөн һис ғәйепләмәйем һәм кәмһетмәйем! Аллаһ һеҙҙе ғәфү итһен! Дөрөҫлөктә, Ул – мәрхәмәтлеләрҙең иң мәрхәмәтлеһе»** («Йософ», 92), – *тим. Барығыҙ, китегеҙ, һеҙ хәҙер ирекле!»* – тип белдерә.

Башҡа бер мөрәжәғәтендә Ул:

*«Бөгөн – мәрхәмәт көнө. Бөгөн – Аллаһ ҡөрәйешлеләрҙе исламиәт менән кеүәтләндерәсәк, өҫтөн ҡыласаҡ бер көн»,* – тип әйтә.

Мәккәне еңгәнсе бик күп мосолмандың йәнен һәм малын ҡыйған заттар ҙа әлеге киң күңеллелек һөҙөмтәһендә һидәйәт бөйөклөгөнә ирешә. Аллаһ Тәғәлә ҡөрәйеш мөшриктәрен Рәсүленең ҡулына тоттора, Уға баш эйҙерә. Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә уларҙы ғәфү итеп, ireккә ебәрә. Шул сәбәпле мәккәлеләргә «туләка», йәғни «азат ителгәндәр» тигән ҡушамат тағыла.[278]

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙҙең иң ҙур теләге, бер кеше лә сығарма итеп ҡаралмау шарты менән, барлыҡ кешеләрҙең дә мосолманлыҡҡа килеүенән ғибәрәт була. Мәккәне яулағандан һуң, көс-ҡеүәттең иң юғары нөктәһенә еткән бер миҙгелдә, төрлө золом һәм язаға лайыҡ бәндәләрҙән үс алырҙай хәлдә булыуға ҡарамаҫтан, Рәсүлуллаһтың былай эшләмәй, дөйөм ғәуамды ғәфү ҡылыуы тураһындағы иғланы – Хаҡ Тәғәлә күҙлегенән мәхлүҡәткә ҡарата мөнәсәбәт рәүешенең иҫ киткес сағылышы.

Оҙаҡ йылдар дауамында шаяртыу-кәмһетеүҙәр, мыҫҡыллауҙар, золом һәм дошманлыҡтан башҡа бер нәмә лә күрмәгән Мәккә Ул көндө шаһит булған олуғ ғәфү байрамы менән тиңһеҙ мөхәббәт һәм мәрхәмәт ваҡиғаһын күреү бәхетенә ирешә. Ләкин был матурлыҡҡа күләгә төшөрөргә теләгән Фәдалә исемле бер Мәккә кешеһе, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде үлтереү ниәте менән, Уның янына килә. Мәкерленең ниәтен күңеле менән белгән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер ниндәй ҙә борсолоу, тулҡынланыу һәм асыу-нәфрәт күрһәтмәйсә, шәфҡәт һәм рәхмәт ҡанаттарын асып, Фәдаләнән:

*«Һин Фәдаләме?»* – тип һорай.

«Эйе!» – ти тегеһе. Артабан Ғаләмдәр рәхмәте:

*«Әй Фәдалә! Уйыңда ҡорған ниәтеңдән тәүбә-истиғфар ҡыл!»* – тип бойора һәм мөбәрәк ҡулдарын уның күкрәгенә ҡуя. Шул рәүешле аң-зиһененләгә үлтереү уйы юҡҡа сыҡҡан Фәдаләнең йөрәге йомшарып китә, иман нуры менән тула һәм Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм миҙгел эсендә уның ҡаршында иң һөйөклө затҡа әүерелә (Ибне Һишам, IV, 37; Ибне Кәсир, *«әс-Сирә»,* III, 583).

Әбү Суфъян ибн Харб Мәсжиди Харамда уйланып ултыра. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең алда, мосолмандарҙың иһә Уның артынан теҙелеп барыуҙарын күргәс: «Әллә Мөхәммәткә ҡаршы ғәскәр туплайым микән, был кеше менән тағын һуғышҡа сығайым микән, ни эшләргә һуң?!» – тип уйлап ҡуя. Ул ваҡытта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм килеп етеп, уның баш осонда туҡтай һәм ике ҡалаҡ һөйәге араһына һуғып:

278. Ҡарағыҙ: Ибне Һишам, IV, 32; Ваҡыди, II, 835; Ибне Сәғд, II, 142-143.

*«Аллаһ ул осрақта һине түбән һәм һис кем һөймәҫ итеп ҡылыр!»* – ти. Әбү Суфъян, башын күтәреп, Аллаһ Рәсүлен күргәс: «Ошо миҙгелгә ҡәҙәр Һинең Пәйғәмбәр булғанлығыңа тулыһынса ышанып бөтә алмай инем. Күңелемдән уйлаған фекер-ниәттәр арҡаһында Аллаһҡа тәүбә итәм, Унан ярлыҡау һорайым!» – ти (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* IV, 296).

❁

Өхөд һуғышында хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ағаһы Хәҙрәти Хәмзәнең бауырын ҡомһоҙланып тешләп алған Һинд тә, Мәккәне яулаған көндө иман килтереп, дөйөм ярлыҡауға лайыҡ була. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тәүхид кәлимәһенең дәрәжәһе хөрмәтенә уны ла ғәфү итә.[279]

Әбү Жәһелдең улы Икримә исламдың һирәк дошмандарының береһе була. Мәккәне яулағандан һуң, Йәмәнгә ҡаса. Ҡатыны, мосолман булараҡ, уны хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына алып килә. Ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәрелгән Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Икримәне асыҡ йөҙ менән:

*«Эй күсмә яйҙаҡ, хуш килдең!»* – тип ҡаршы ала һәм мосолмандарға ҡарата ҡылған золом-яуызлыҡтарын йөҙөнә бәреп әйтмәйенсә, уны ла ғәфү итә (Хаким, III, 271/5059; Ваҡыди, II, 851-852).

Хәббар ибн Әсүәд ислам дошмандарының иң алдынғыларынан, яуыздарынан була. Мәккәнән Мәҙинәгә дөйә өҫтөндә һижрәт ҡылғанда, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡыҙы Зәйнәб раҙыйаллаһу ғәнһәне дөйәнән һөңгө менән төртөп төшөрә. Ул саҡта йөклө хәҙрәти Зәйнәбтең балаһы төшә, үҙе лә бик ауыр яралана. Был яра һуңынан уның үлеменә килтерә. Хәббар шуның кеүек башҡа бик күп ғәйеп эштәр, яманлыҡтар эшләй. Мәккәне яулағандан һуң, Хәббар ҡаса һәм ҡулға төшөрөлмәй ҡала. Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәлә сәхәбәләре менән ултырған саҡта, ул, сәғәҙәт йортона килеп, мосолманлыҡ ҡабул итеүен белдерә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны ла ғәфү итә. Уны кәмһетеү-ғәйепләүҙе һәм уға төрлөсә һөжүм итеүҙе тыя.[280] Сөнки Ҡөрьәни-Кәримдә:

خُذِ الْعَفْوَ وَأْمُرْ بِالْعُرْفِ وَأَعْرِضْ عَنِ الْجَاهِلِينَ

«(Әй Рәсүлем!) **Һин ғәфү итеү юлынан бар, ярлыҡа, ҡулай булғанды ҡуш, яһилдарға иғтибар итмә, уларҙан йөҙ сөйөр!»** – тип әйтелә («әл-Әғрәф», 199).

279. Ваҡыди, II, 850.
280. Ваҡыди, II, 857-858.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡөрьәндең тере кәүҙәләнеше була. Ҡөрьән әхлағы ла иң күркәм рәүештә Унда күрһәтелә. Үҙенә ҡарата эшләнгән барлыҡ ғәйеп-яфаларҙы Ул һис икеләнеп тормайса, ихлас йөрәктән ғәфү итә. Ләкин ғәуамға ҡаршы ҡылынған ғәйептәр, гонаһтар өсөн, хаҡлыҡ ирешмәйенсә һәм рәнйетелгән зат үҙ хаҡын алмайынса тороп, Уны берәү ҙә тынысландыра алмай. Мәҫәлән, Мәккәлә тиңдәшһеҙ, йыһанды солғарлыҡ ғәфү итеү ваҡиғаһы менән бер ваҡытта, ҡайһы бер баш бирмәҫ, төҙәлмәҫ хаин мөшриктәрҙе ҡулға төшкән ерҙә үк өммәт мәнфәғәтен иҫтә тотоп үлтерелеүе мәсьәләһендә лә Пәйғәмбәрҙең әмере бирелә.[281]

Мәккәнән ғәнимәт сифатында бер нәмә лә алынмай.[282] Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ, ислам ғәскәренең шаҡтай ҙур суммаға төшкән зарури ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн, Мәккә байҙарынан бурысҡа аҡса һәм һаҡлағыс көбә ала. Һуңынан иһә быларҙы Хәүәзин ғәнимәттәренән тулыһынса түләй ҙә:

*«Бурыстың яуабы – рәхмәт әйтеү һәм уны түләү!»* – тип асыҡлай (Ваҡыди, II, 863; Әбү Дауыт, «Бүюғ», 88/3562; *Муватта,* «Никах», 44).

❁

Мәккәлеләр хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бөтә кешелеккә үрнәк булараҡ күрһәткән Ғәфү байрамының шатлығын кисергән саҡта, өйлә ваҡыты керә. Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәр ваҡыттағыса, хәҙрәти Билалға аҙан әйтергә ҡуша. Билал раҙыйаллаһу ғәнһү үҙенең заманында бер ҡол булып, аҡылға һыймаҫлыҡ яфалар кисереп, «әхәд, әхәд» тип илаған көндәрен иҫкә төшөрә, хәҙер инде золомға сик ҡуйыла. Хәҙер ул ирекле ҡол һәм еңеү яулаған бер иман ғәскәре менән Мәккәлә була. Аллаһҡа шөкөр әйтеп, Изге Ҡәғбәнең түбәһенә менә. Өтөп ала торған көй-мәҡам менән аҙан әйтә башлай. Шундай мәғәнәле һәм яңғырауыҡ аҙан әйтелә ки, әлеге бөйөк саҡырыу бөтә Мәккә тауҙары һәм күге ҡайтауаз менән яуап ҡайтара. Күктәр, әйтерһең, йылмая, ерҙәр шатлыҡҡа күмелә. Ул көн әйтелгән Мөхәммәт аҙаны мөьминдәргә мәңгелек хәтирә буласаҡ. Әлеге манзараны күргән мөшриктәренән бер нисәүһе: «Беҙгә яҙыҡтар булһын!.. Ҡолдар хәтле лә булдыра алманыҡ. Улар ҡайҙарға барып етте, ә беҙ ниндәй хәлдә ҡалдыҡ?» – тип, элек эшләгән ғәмәлдәренә, йәғни Ул миҙгелгә ҡәҙәр иңгән хәҡиҡәттән ғафил ҡалыуҙарына үкенесен белдерә.

### Мәккәлеләр анты

Өйлә намаҙын уҡығас, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Сафа тауына менеп, мәккәлеләрҙең антын ҡабул итә. Башта ир-аттар «мосолманлыҡтары һәм йыһатҡа әҙер булыуҙары» хаҡында хәҙрәти Пәйғәмбәр

281. Әбү Дауыт, «Йыһат», 117/2683; Нәсаи, «Тахримү әд-Дәм», 14.
282. Әбү Дауыт, «Харaж», 24-25/3023.

салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ант бирә. Артабан ҡатын-ҡыҙҙар ант әйтә.[283] Ҡатын-ҡыҙҙарҙың анты тураһында Аллаһ Тәғәлә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә былай тип асыҡлай:

يَا أَيُّهَا النَّبِيُّ إِذَا جَاءَكَ الْمُؤْمِنَاتُ يُبَايِعْنَكَ عَلَى أَنْ لَّا يُشْرِكْنَ بِاللّٰهِ شَيْئًا وَلَا يَسْرِقْنَ وَلَا يَزْنِينَ وَلَا يَقْتُلْنَ أَوْلَادَهُنَّ وَلَا يَأْتِينَ بِبُهْتَانٍ يَفْتَرِينَهُ بَيْنَ أَيْدِيهِنَّ وَأَرْجُلِهِنَّ وَلَا يَعْصِينَكَ فِى مَعْرُوفٍ فَبَايِعْهُنَّ وَاسْتَغْفِرْ لَهُنَّ اللّٰهَ إِنَّ اللّٰهَ غَفُورٌ رَّحِيمٌ

**«Әй Пәйғәмбәр! Иман килтергән ҡатындар Һиңә килеп Аллаһҡа тиңдәш ҡуймау, урлашмау, зина ҡылмау, балаларын үлтермәү, ҡулдары менән аяҡтары араһында бер яла сығармау** (бер сәбәпһеҙ ялған уйлап сығарып, яла-ғәйбәт таратмау, башҡа берәүҙең балаһын үҙләштереп, уны иренеке, тип ялған таратмау йәки шәриғәткә ҡаршы ысул менән бала тыуҙырып, уны иренән үҫтертеү)**, һис бер күркәм эштә Һиңә кәртә ҡормау тураһында ант биргәндә, уларҙың антын ҡабул ит; улар өсөн Аллаһтан мәғфирәт һора!.. Дөрөҫлөктә, Аллаһ – Ғәфур (гонаһтарҙы Кисереүсе), Рәхим (мәрхәмәт-шәфҡәт Эйәһе) ул»** («әл-Мүмтәхинә», 12).

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың анты һүҙ менән һәм Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулын тыҡҡан һыу һауытына ҡулдарын тығып алыу рәүешендә башҡарыла, уларҙың ант итеү мәрасимы бер ваҡытта ла ҡул бирешеү, күрешеү шәкелендә үткәрелмәй.

Өмәймә бинт Руҡайҡа раҙыйаллаһу ғәнһә һөйләгәндәрҙән:

«Ансарҙарҙан бер төркөм ҡатын-ҡыҙ менән Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм янына барып: «Аллаһҡа бер нәмәне лә тиң ҡуймаҫҡа, урлашмаҫҡа, зина ҡылмаҫҡа, балаларыбыҙҙы үлтермәҫкә, бер ҡасан да яла яҡмаҫҡа, шәриғәткә тура килгән әмерҙәреңдә Һиңә ҡаршы килмәҫкә ант итәбеҙ», – тигәс, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе шунда уҡ:

*«Көсөгөҙ еткән һәм тәҡәтегеҙҙән килгән мәсьәләләрҙә!»* – тип асыҡланы. Был шәфҡәт һәм мәрхәмәт тулы һүҙенән һуң беҙ: «Аллаһ һәм Уның Рәсүле беҙгә ҡаршы беҙҙән мәрхәмәтлерәк, әйҙәгеҙ, ант итәйек!» – тинек. Ҡатындар, ҡул бирешеп ант итергә теләне. Ләкин Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин ҡатындар менән ҡул биреп күрешмәм! Минең йөҙ ҡатынға бер юлы әйткән һүҙем һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн айырым-айырым әйтелгән тип һаналыр»,* – тип белдерҙе (Муватта*,* «Ант», 2; Тирмизи, «Сийәр», 37/1597).

283. Әхмәт, III, 415; Бохари, «Магази», 53.

**Аманатты эйәһенә тапшырығыҙ!**

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Ҡәғбәгә килгәс, Мәсжиди Харамдың бер мөйөшөнә, ә мөжәһидтәр иһә Уның тирәһенә ултыра. Ҡәғбәнең асҡысын алып килһен өсөн, Аллаһ Рәсүле хәҙрәти Билалды Ғосман ибн Талхаға ебәрә. Ғосман разыйаллаһу ғәнһү янына барып, хәҙрәти Билал: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡәғбәнең асҡысын алып килергә ҡуша!» – ти. Ғосман: «Ярай!» – тип, әсәһе Сүлафә янына китә. Ул ваҡытта асҡыс уның әсәһендә була. «Әсәкәйем! Асҡысты миңә бир! Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм миңә бер кеше ебәрҙе һәм асҡысты алып килергә ҡушты», – ти Ғосман разыйаллаһу ғәнһү.

Сүлафә: «Ҡәүемен данлаған, ҡәүеме шуның менән маҡтанған әйберҙе һинең ҡулың менән тапшырыуҙан Аллаһҡа һыйынам! Был асҡысты һеҙҙән алғас, Ул инде бер ҡасан да уны кире бирмәйәсәк!» – ти. Ғосман разыйаллаһу ғәнһү бер аҙ өгөтләгәс, тырышҡас, асҡысты әсәһенән алып, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә килтерә лә: «Быны Һиңә Аллаһтың аманаты итеп бирәм!» – ти. Ул асҡыстың үҙенә кире ҡайтарылмаясағынан ҡурҡа (Ваҡыди, II, 833; Хәйсәми, VI, 177).

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе Ҡәғбәне асып, эскә керә лә, ишекте тыштан ябып ҡуйырға ҡуша. Рәсүлүллаһ шаҡтай оҙаҡ ваҡыт шунда ҡала, ике рәкәғәт намаҙ уҡып ала (Ваҡыди, II, 835; Ибне Сәғд, II, 137). Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡәғбәнән сыға. Еңеү хөтбәһен һөйләгәс:

*«Ғосман ҡайҙа?»* – тип һорай. Ғосман ибне Талха тороп баҫа. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

إِنَّ اللهَ يَأْمُرُكُمْ أَنْ تُؤَدُّوا الْأَمَانَاتِ إِلَى أَهْلِهَا وَإِذَا حَكَمْتُمْ بَيْنَ

النَّاسِ أَنْ تَحْكُمُوا بِالْعَدْلِ إِنَّ اللهَ نِعِمَّا يَعِظُكُمْ بِهِ إِنَّ اللهَ كَانَ سَمِيعًا بَصِيرًا

**«Аллаһ һеҙгә аманаттарҙы хужаһына бирергә, кешеләр араһында хөкөм сығарған ваҡытта ғәҙеллек менән хөкөм итергә бойора. Аллаһ һеҙгә шул рәүешле ниндәй күркәм өгөт бирә. Шөбһәһеҙ, Аллаһ – ишетеүсе** (һәм) **күреүсе», –** аятын («ән-Ниса», 58) уҡығас:

*«Эй Әбү Талха улдары! Даими хәлдә һеҙҙә ҡалһын һәм дөрөҫ ғәмәл ҡылыу өсөн Аллаһ Тәғәләнең аманатын үҙегеҙгә алығыҙ! Уны, залим булмаһа, һис кем ҡулығыҙҙан тартып ала алмаҫ! Бөгөн – игелек һәм антҡа тоғролоҡ көнө», –* тип белдерә (Ибне Һишам, IV, 31-32; Ваҡыди, II, 837-838; Ибне Сәғд, II, 137).

Әлеге ваҡиғанан да күренеүенсә, аманаттарҙың эйәһенә ҡайтарып бирелеүе бик мөһим мәсьәлә һанала. Сөнки аманаттар эйәһенә ҡайтарылған ваҡытта, шәхестең үҙендә, ғаиләлә һәм дәүләттә тыныслыҡ һәм именлек

һаҡлана, был әмер үтәлмәһә, хатта ҙур-ҙур империялар ҙа тарҡалып юҡҡа сыға. Тарихта бының бихисап миҫалдары туп-тулы.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм аманат мәсьәләһенең нескәлеген һәм әһәмиәтен бер хәҙис шәрифендә бик күркәм сағылдыра:

*«Аманат эйәһенә бирелмәгән икән, ана шул ваҡытта ҡиәмәт көнөн көт!»* (Бохари, «Ғылим», 2; Әхмәт, II, 361).

Ҡыҫҡаһы, аманаттың эйәһенә тапшырылмауы – ҡиәмәт билдәләренең иң мөһимдәренең береһе булып тора.

Үҙенә инде күптән сикайә (хажиҙарҙы һыу менән тәьмин итеү) вазифаһы йөкләнгән хәҙрәти Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһү Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән хижәбә[284] эшен дә биреүен һорай. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ағаһына:

*«Мин һеҙгә кешеләр Бәйтуллаһҡа ебәрәсәк япма кеүек нәмәләрҙән тормош алып барыуҙы түгел, хажиҙарҙың һыу менән тәьмин итеү һәм башҡа ихтыяждарын кәнәғәтләндереү өсөн мөлкәтегеҙҙән сығым сығарып, шул рәүешле әжер-сауапҡа ирешеү кеүек мәшәҡәтле вазифаны йөкләйем!»* – тип бойора һәм хажиҙарҙы һыу менән һыйлау эшен дауам итергә ҡуша.

Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүҙең Таифтә йөҙөм баҡсаһы була. Исламға саҡлы ла, унан һуң да шул ерҙән йөҙөм ташый, Зәмзәм һыуы эсенә һалып, хажиҙарҙы һыйлай. Үҙенән һуң улдары һәм ейәндәре лә гел шулай эшләйҙәр (Ибне Һишам, IV, 32; Ибне Сәғд, II, 137; Ваҡыди, II, 838).

❁

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм еңеүҙең икенсе көнөндә өйлә намаҙынан һуң кешеләр араһында аяғүрә тороп баҫа. Аллаһ Тәғәләгә хәмед-ҫәнә әйткәс, былай тип дауам итә:

*«Эй кешеләр! Шикһеҙ, Аллаһ күктәр менән ерҙе, ҡояш менән айҙы яралтҡан көндө Мәккәне лә харам һәм ҡағылғыһыҙ итеп ҡылды! Ҡиәмәт көнөнә тиклем харам һәм ҡағылғыһыҙ булып ҡаласаҡ! Шөбһәһеҙ, Аллаһ Фил ғәскәрен Мәккәгә кереүҙән туҡтата, Рәсүленә һәм мөьминдәргә иһә был эштә уңыш насип итә. Мәккә Минән һуң һис кемгә хәләл түгел. Мәккәнең хайуандары ҡурҡытылмаясаҡ, әнәле күгәне киҫелмәйәсәк, юғалған әйберҙе табыусының был әйбер хужаһын эҙләү ниәтенән ҡала, юғалған нәмәне үҙенә алыу хәләл булмаясаҡ. Берәүҙең яҡын кешеһе үлтерелһә, ике нәмәнән ҡайһыһы – йолом түләү йәки үс алыу – хәйерлерәк, шуны һорай ала».*

Шунан һуң хәҙрәти Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһү: «Изһир (үләненең йолҡоноуы) сығарма булһын, сөнки уны ҡәберҙәребеҙҙә һәм өйҙәребеҙҙә ҡулланабыҙ», – ти.

284. «Хижәбә» (пәрҙәһе) тураһында ҡарағыҙ: том 1, 42 б.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ:

*«Изһир сығарма булыр!»* – тип асыҡлай[285] (Бохари, «Луҡата», 7; «Магази», 53; Әхмәт, IV, 31-32; II, 238).

❁

Мәккәне яулаған көндөң түбәндәге күренеше лә сәхәбәләрҙең камиллашҡан рухи дәрәжәһен күрһәтә:

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәсжиди Харамда ултырғанда, хәҙрәти Әбү Бәкер атаһы Әбү Ҡуһафәне алып килә. Аллаһ Рәсүле уны күргәс:

*«Эй Әбү Бәкер! Өлкән йәштәге атаңды бында хәтле килтереп арытмаған булһаң ине, мин уның янына үҙем дә барыр инем!»* – тип әйтә.

Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Уның Һинең янына килеүе Һинең уның янына барыуыңдан ҡулайлыраҡ», – тип яуап бирә.

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әбү Ҡуһафәне ҡаршыһына ултырта, ҡулын уның йөрәге турыһына ҡуйып:

*«Әбү Ҡуһафә! Мосолман бул, сәләмәтлек табырһың!»* – ти. Әбү Ҡуһафә мосолманлыҡ ҡабул итә, эскерһеҙ рәүештә шәһәҙәт кәлимәләрен әйтә (Ибне Сәғд, V, 451).

Әбү Ҡуһафә разыйаллаһу ғәнһү, ант килтереү өсөн, ҡулын Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк ҡулына һуҙғас, Пәйғәмбәргә ихлас ғашиҡ Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү, үҙен тыйып тора алмай, илап ебәрә. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғәжәпкә ҡалып, ниңә илағанын һорағас, хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү күҙ йәштәренә быуыла-быуыла яуап бирә: «Йә Рәсүлүллаһ, Һиңә ант итеү өсөн һуҙылған ошо ҡул, минең атайымдың ҡулы түгел, Һинең ағайың Әбү Талип ҡулы булһа, шул сәбәп менән Аллаһ Тәғәлә минең урынға Һине һөйөндөрһә, әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур шатлыҡ кисерер инем. Сөнки Һин уны бик ярата инең» (Хәйсәми, VI, 174).

Бына ул бөйөк Пәйғәмбәрҙең юғары әхлағынан лайыҡлы, тейешле рәүештә файҙаланыуҙың һәм Унда иреп юғалыуҙың тиңһеҙ, ҡарап туймаҫлыҡ

285. Изһир – Мәккәи Мөкәррәмәлә үҫкән киң япраҡлы һәм хуш еҫле бер үҫемлек. Терлектәргә аҙыҡ булараҡ та, шулай уҡ өйҙәрҙә һәм ҡәберҙәрҙә лә ҡулланыла. Фиҡһ ғалимдары харам ерҙә киҫеү тыйылған ағастарҙы «үҙенән-үҙе үҫә торғандар» исеме менән атай. Кеше хеҙмәте менән үҫтерелгәндәренең киҫелә алыуы мәсьәләһендә бәхәстәр ҡуба, хөкүмәт был рөхсәт ителә, тигән фекергә килә. Мисүәк киҫеп алыу, ағасҡа зарар килтермәгән осраҡта, япраҡ һәм емештәрен өҙөп алыу тыйылмағанлығы әйтелә (Ҡарағыҙ: Ибраһим Жанан, «Хадис Ансиклопедиси», XII, 525-526). Мәҙинәнең харам территорияһында йәшел ағастарҙың һәм үҫемлектәрҙең, ихтыяж тыуғанда, киҫелеүе рөхсәт ителә. Мәҙинә ауыл хужалығы төбәге булғанға күрә, хәҙрәти Пәйғәмбәрҙән был мәсьәләлә рөхсәт һорайҙар. Мәккә харамындағы ҡай бер үҫемлектәрҙең зарурият тыуғанда йолҡоноуына, сабылыуына юл ҡуйылған кеүек, Мәҙинәлә тағы ла киңерәк рөхсәт бирелә. Шулай уҡ Мәҙинәнән ситтә аусылыҡҡа ла ирек ҡуйыла (Ҡарағыҙ: Хамди Дөндүрән, «Шамил ислам ансиклопедиси», «Харам» маддәһе).

үрнәге... Бындай бөйөк һоҡланыу, хөрмәт һәм мөхәббәт шарлауығын тарихта нисә тапҡыр күрә алабыҙ икән?

**Тиңдәшһеҙ тоғролоҡ**

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, еңеү яулағандан һуң, Мәккәлә ун биш көн йәшәй. Был ваҡытта ансарҙарҙың ҡайһы берҙәре борсола башлай, уларҙы хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә бүтән ҡайтырмы-юҡмы, тигән уйҙар бимазалай. Сөнки Аллаһ Тәғәлә Уға тыуып-үҫкән төбәген, мөбәрәк һәм изге ерҙе яулап алыуҙы насип ҡыла бит. Сафа тауында доға уҡып торған хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ансари-кирамдың был шик-шөбһәләрен тойоп ҡала. Доғаларын тамамлағас, улар янына килә лә:

*«Ни турала һөйләшәһегеҙ?»* – тип һорай.

Ансарҙар үҙ борсоуҙарын асып һалғас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло тоғролоҡ үрнәге күрһәтеп, былай тип белдерә:

*«Эй ансарҙар! Ундай нәмә ҡылыуҙан Аллаһҡа һыйынам. Мин һеҙҙең мәмләкәтегеҙгә һижрәт ҡылдым. Ғүмерем дә һеҙҙең менән бергә; үлемем дә һеҙҙең янығыҙҙа».*

Бындай һүҙҙәрҙән һуң ансарҙарҙың борсоу-шиктәре тарала (Мөслим, «Йыһат», 84, 86; Әхмәт, II, 538).

❁

Мәккәне яулап алғандан һуң, Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙ Аллаһҡа ҡарата шөкөрҙәрен һәм маҡтауҙарын тағы ла йышайта:

سُبْحَانَ اللهِ وَبِحَمْدِهِ أَسْتَغْفِرُ اللهَ وَأَتُوبُ اِلَيْهِ

*«Мин Аллаһтың кәмселектәрҙән пак асылын һәр яҡтан, йәғни затында, сифатында, ғәмәлдәрендә, исемдәрендә Уның бөйөклөгөнә килешмәгән кәмселектәр юҡлығына инанам һәм Уның сафлығын, бөйөклөгөн танийым. Уға лайыҡ һәр төрлө маҡтау һәм рәхмәт менән хәмед-ҫәнәләр әйтәм. Аллаһтан Мине ярлыҡауын һорайым һәм гонаһтарымдан тәүбә итәм»,* – тигән зекерҙе намаҙҙарында, айырыуса рөкүғ һәм сәждәләрҙә күп-күп уҡый башлай. Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә бының сәбәбен һорағас, Әфәндебеҙ:

*«Раббым Миңә өммәтемдә бер билдә күрәсәгемде белдерҙе, уны күргәс иһә был зикерҙе күп итеп әйтергә ҡушты. Мин ул билдә-хәбәрҙе күрҙем»,* – тип аңлата (Мөслим, «Саләт», 220).

Уға ярҙам һәм еңеү килгәндә һәм кешеләрҙең күпләп-күпләп исламға килеүҙәрен күргәндә, Аллаһты иҫкә алып тәсбих әйтеүҙе арттырыу һәм тәүбә-истиғфар һорау тураһында «Нәср» сүрәһендә лә бойорола.

«Нәср» сүрәһендә телгә алынған «нәср» (ярҙам) һүҙенең бөтә ғәрәптәрҙән өҫтөн сығыуҙы, «фәтх» һүҙенең иһә Мәккәне яулауға ишара итеүе тураһында әйтелә. «Фәтх» һүҙенең «асыу, асып ебәреү» мәғәнәһенән сығып, Ибне Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһү Мәккәне яулауға «Фәтхүль-Фүтух» тип исем бирә. Сөнки был осраҡтағы еңеү, дошман ҡулындағы бер шәһәрҙе яулап алыу ғына түгел, Мәсжиди Харамды контролдә тотоу һәм Ҡәғбәне яулау тигән һүҙ. Бер үк ваҡытта йөрәктәрҙең Аллаһ диненә, ислам ҡапҡаһының бөтә кешелек өсөн асылыуын да белдерә. Йәғни Пәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ул көндө үтеп кергән ҡаланан бигерәк, күңелдәрҙе, йөрәктәрҙе яулап ала. Шул сәбәпле Мәккәнең яулап алыныуы ислам диненең донъяны яулап алыуының башланғысы тип ҡарала. Ниңә тигәндә, бөтә Ғәрәбстанға һәм шунан бөтә йыһанға таралған исламдың матди һәм рухи еңеүҙәре Ҡәғбә ишегенең асылыуы менән башлана. Сөнки барса ҡәбиләләр ҙә исламға кереү өсөн бер этәргес буларaҡ, Мәккәнең яуланыуын көтөп, күҙәтеп тора: «Уны ҡәүеме менән бер үҙен ҡалдырығыҙ. Әгәр уларҙан өҫтөн сыға алһа, Ул – Пәйғәмбәрҙер», – ти улар (Бохари, «Магази», 53).

Хәсән Басриҙан тапшырылғанса, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккәне яулағас, ғәрәптәр: «Аллаһ Тәғәлә мәккәлеләрҙе Фил хужалары ғәскәрҙәренән һаҡланы, ә Мөхәммәт ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм мәккәлеләрҙән өҫтөн сыҡты түгелме, улайһа һеҙҙең ҡулығыҙ Уға етә алмаç», – тиҙәр һәм төркөм-төркөм Аллаһ диненә күсәләр (Әлмалылы, IX, 6236-6238).

### Хөнәйен һуғышы

(Һижри 8-се йылдың 11 шәүүәле / 630 йылдың 1 феврале)

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәккәне яулағандан һуң, бары Ҡәғбәләге боттарҙы емереү менән генә сикләнмәй, тирә-яҡтағыларын да юҡ итеү өсөн, мөжәһид төркөмдәр йыйып, күп аллалыҡтың йәнһеҙ таштарын ҡырырға, ватырға ебәрә, йәғни тәүхид таҙалығына керешә.[286] Фәҡәт был

286. Ваҡыди, III, 873. Хәлид ибн Вәлид разыйаллаһу ғәнһү, Ғуззә исемле ботто йығып төшөрөп, Мәккәгә ҡайтҡас, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уны 350 кешелек бер хәрби отряд башлығы итеп ҡуя һәм Аллаһҡа иман килтерергә өндәү өсөн, Бәни Жәзимә ҡәбиләһенә ебәрә. Хәҙрәти Хәлид әлеге походта яңылышлыҡ менән утыҙ кешене үлтерә. Был хаҡта хәбәр Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә килеп еткәс, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе бик ҡайғыға ҡала. Ҡулдарын күккә йүнәлтеп, ике тапҡыр:
«Аллаһым! Хәлид ҡылған нәмәнән йыраҡ булыуымды Һиңә белдерәм!» – тип ялбарып, Аллаһҡа һыйына. Хәҙрәти Ғәлиҙе ҙур күләмдәге аҡса менән Бәни Жәзимә ҡәбиләһенә ебәреп, Рәсүлүллаһ үлтерелгән кешеләр өсөн йолом түләтә. Хәҙрәти Ғәли, ғәнимәт сифатында алынған һәм юҡҡа сығарылған, тар-мар ителгән бөтә мал-мөлкәттең, хатта эт ашата торған һауыттарҙың да хаҡын ҡайтара. Артып ҡалған аҡсаны ла, ихтимал зыянды ҡаплау өсөн, Бәни Жәзимә ҡәбиләһенә ҡалдыра. Ғәли разыйаллаһу ғәнһү, ҡайтып, ҡылғандарын Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә һөйләп биргәс, Ғаләмдәр рәхмәте булған Әфәндебеҙ:

ғәмәлде Хөнәйендә йәшәй торған Хәүәзин ҡәбиләһе менән Таифтә ғүмер кисереүсе Бану ҫәҡиф вәкилдәре генә ҡабул итә алмай. Улар мосолмандарға һөжүм итергә ҡарар ҡыла. Шуның өсөн бик ҙур ғәскәр әҙерләйҙәр. Бер үлем-китем һуғышына сыҡҡан шикелле, һәр нәмәне үҙҙәре менән алалар.[287]

Уларҙың был ғәмәлдәрен белеп ҡалған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙ армияһына Мәккәнән тағын ике мең кеше өҫтәп, һөжүмгә ҡуҙғала. Ниндәй хикмәтле күренеш, был ғәскәрҙә күп йылдар буйы ширк – күп аллалыҡ хаҡына мосолмандар менән һуғышҡан һәм уларға мең дә бер ғазап һалған Әбү Суфьян да була. Хәҙер иһә ислам сиреүе сафтарының еңеүе өсөн һуғышырға йыйына. Хатта һикһәнләп мәккәле мөшрик тә ғәскәр составына ҡушыла.[288]

Ислам армияһы һәр яҡтан ҡарағанда ла камил, өҫтөн була. Күҙ ҡамаштырғыс бер бөйөклөк, олуғлыҡ менән Хөнәйенгә таба бара. Һәр кем шулай яҡшы йыһазландырылған һәм шундай күп кешелек ғәскәрҙең Ғәрәбстанда был көнгә тиклем һис ҡасан күренмәгәнлеге тураһында уйлай. Был халәт әсхәбе кирам күңеленә бер миҙгелгә ышаныс, ғорурлыҡ хисе кертә һәм: «Былдай армия бер ҡасан да еңелмәҫ!» – тип дошманды кәмһетеп, кесерәйтеп ҡарауҙарына, матди көскә таянып еңеүҙең шикһеҙлегенә ышаныуҙарына килтерә. Ана шул миҙгеллек тәкәбберлек һәм үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтлек мосолмандарҙың илаһи һынауға тотолоуҙарына сәбәп була.

Ислам армияһының алдынғы ҡеүәттәре Хөнәйенгә илтә торған тар юлдар буйлап үҙ-үҙҙәренә ышаныс менән тыныс ҡына барған саҡта, иртәнге ҡараңғылыҡта көтөлмәгән засадаға эләгә. Бик көслө паника ҡуба. Мосолмандар өҫтәренә ямғыр кеүек яуған уҡтар ташҡынында туҡтарға мәжбүр була. Ислам ғәскәрҙәре ни эшләргә белмәй аптырап ҡала, ҡурҡыу, ҡыйыуһыҙлыҡ баш ҡалҡыта. Был халәт арттан килеүселәргә лә күскәс, мосолман сафтары боҙола, тарала, сигенә башлай. Хәүәзин һәм ҫәҡиф ҡәбиләләре уларҙы эҙәрлекләргә керешә.

Ул дәһшәтле ығы-зығыла берҙән-бер Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм генә баҫҡан еренән бер аҙым да сигенмәй, туҡтауһыҙ дошманға һөжүм итә һәм, атын даими алға ҡыуалап, дошман ғәскәренең үҙәгенә үтеп керә. Ул көн Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тиңһеҙ батырлыҡ һәм дастандарға лайыҡ ҡаһарманлыҡ үрнәге күрһәтә. Хатта ағаһы хәҙрәти Ғәббәс һәм Әбү Суфьян ибне Харис раҙыйаллаһу ғәнһүмә, Уның мөбәрәк йәненә

«Бик яҡшы, дөрөҫ эшләгәнһең!» – тип хуплай (Бохари, «Магази», 58, «Әхкәм», 35; Нәсаи, «Әҙәп әл Кудәт», 16; Ибне Һишам, IV, 53-57; Ваҡыди, III, 875-884). Был ваҡиға Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм эйә булған киң шәфҡәтлелектең һәм мәрхәмәттең сикһеҙ офоғон раҫлай һәм Уның мәхлүҡәткә Яралтыусы күҙлегенән ҡарау рәүешен күрһәтә. Ватылған эт һауыттарының да хаҡы түләнеп, шул рәүешле хатта хайуандарҙың да хаҡтарын һаҡлау беҙҙең өсөн ниндәй юғары үрнәк булып тора.

287. Ибне Һишам, IV, 65; Ибне Сәғд, II, 150.

288. Ибне Һишам, IV, 68; Ваҡыди, III, 890.

ҡурҡыныс янамаһын өсөн, атының йүгәненә йәбешеп, артыҡ алға китеүенә ҡомасауларға тырышалар.[289]

Икенсе яҡтан, ислам ғәскәре составында буталсыҡлыҡ, тарҡаулыҡ, юғалып ҡалыу һаҡлана. «Бөгөн сихыр боҙолдо», тип һөрән һалыусылар ҙа, «был боҙоҡтоң ахыры-һуңы булмаç», тип өмөтһеҙләккә бирелеүселәр ҙә була. Ҡайһы бер мәккәлеләр араһында: «Хәҙрәти Пәйғәмбәр үлде. Ғәрәптәр элекке диндәренә ҡайтасаҡ!» – тигән имеш-мимештәр ишетелгеләй. Юғиһә, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иҫән-һау була һәм, дошманға ҡаршылыҡ күрһәтеп, атланған хайуаны өҫтөндә ныҡ ултыра. Аллаһҡа тәүәккәлләп һәм үҙен Уға тапшырып, сәхәбәләренә мөрәжәғәт итә:

*«Ансарҙар! Мөһәжирҙәр! Әй Аллаһ ҡолдары! Бында килегеҙ! Мин Аллаһтың ҡоло һәм Пәйғәмбәре!..»*

Һуңынан хөр тауышлы ағаһы Ғәббәс разыйаллаһу ғәнһүгә ым ҡағып, ислам ғәскәрен саҡырыуҙы дауам итергә ҡуша. Хәҙрәти Ғәббәс: «Эй Ғәҡәбәлә ант итеүселәр! Эй Ридуан ағасы төбөндә һүҙ биреүселәр! (Йүгерегеҙ), Аллаһтың Рәсүле бында!..» – тип һөрән һалып, ҡысҡыра башлай.

Был саҡырыуҙы ишеткән сәхәбәләр: «لَبَّيْكَ لَبَّيْكَ» – тип Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына йүгерә. Иҫкән ел менән таратылған күбәләктәр, ҡеүәтле тартылыу көсө менән ҡабат-ҡабат яҡтылыҡ нуры тирәһенә йыйылған кеүек, Йәшәйеш нуры янына сафҡа туплана башлаған мөьмин йәндәр, үҙҙәрен солғап алған ҡурҡыуҙан арынып, именлек һәм тыныслыҡҡа ирешә. Аҡрын-аҡрын Аллаһ рәхмәте менән бөтә ислам сафтары тигеҙләнә, нығый. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулдарын күтәреп:

*«Аллаһым! Миңә вәғәҙә иткән еңеүеңде насип ит!»* – тип ялбара.

Нәҡ Бәҙер һуғышындағы кеүек, ерҙән мөбәрәк ҡулдары менән бер ус тупраҡ алып, Рәсүлүллаһ дошман сафтары яғына ырғыта һәм алдынғы сәхәбәләргә:

*«Әйҙәгеҙ, хәҙер тоғролоҡ һәм ихлас күңел менән һөжүмгә барығыҙ!»* – тип мөрәжәғәт итә (Мөслим, «Йыһат», 76-81; Әхмәт, III, 157, V, 286; Ибне Һишам, IV, 72; Ваҡыди, III, 897-899).

Был юлы ислам ғәскәре, әйтерһең, бәрелеш әле генә башланғандай, бик тиҙ мөшриктәр өҫтөнә һөжүмгә күсә. Көслө атака нәтижәһендә, оҙаҡ та үтмәй дошманды тар-мар ҡылып, еңелеүгә дусар итәләр. Был ваҡытта ни бары дүрт кеше шәһит китә, ә ҡаршы яҡ – мөшриктәрҙән етмеш кеше үлтерелә. Дошман

289. Мөслим, «Йыһат», 76.

шул ҡәҙәр көтөлмәгән рәүештә еңелә ки, яу ҡырына алып килгән бар нәмәләре мосолмандарға ҡала. Ҡулға төшөрөлгән ғәниматтең иҫәбе-хисабы булмай.[290]

Һис шикһеҙ, был хәл – бөйөк Аллаһтың мөьминдәргә насип ҡылған оло рәхмәте һәм ниғмәте була. Сөнки улар баштағы мәлдә еңелһәләр ҙә, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡыйыулығы, батырлығы, һалҡын ҡанлылығы һәм Йәнәбел-Хаҡҡа ихлас күңелдән ялбарыуы һәм яҡлау һорауы нәтижәһендә еңеүгә ирешәләр. Аллаһ Тәғәлә был хәҡиҡәтте Ҡөрьәни-Кәримендә түбәндәгесә бәйән ҡыла:

لَقَدْ نَصَرَكُمُ اللهُ فِى مَوَاطِنَ كَثِيرَةٍ وَيَوْمَ حُنَيْنٍ إِذْ أَعْجَبَتْكُمْ كَثْرَتُكُمْ فَلَمْ تُغْنِ عَنْكُمْ شَيْئًا وَضَاقَتْ عَلَيْكُمُ الْأَرْضُ بِمَا رَحُبَتْ ثُمَّ وَلَّيْتُمْ مُّدْبِرِينَ.
ثُمَّ أَنْزَلَ اللهُ سَكِينَتَهُ عَلَى رَسُولِهِ وَعَلَى الْمُؤْمِنِينَ وَأَنْزَلَ جُنُودًا لَّمْ تَرَوْهَا وَعَذَّبَ الَّذِينَ كَفَرُوا وَذَلِكَ جَزَاءُ الْكَافِرِينَ

**«Тәхҡиҡ, Аллаһ күп ерҙәрҙә** (яу ҡырҙарында) **һәм Хөнәйен һуғышында һеҙгә ярҙам итте. Күплегегеҙ һеҙгә үҙегеҙҙе оҡшаттырҙы, ләкин һеҙҙе бәләгә тарыуҙан ҡоткара алманы. Ер йөҙө бөтә иркенлегенә ҡарамаҫтан, һеҙгә ҡыҫан булып сыҡты. Ахырҙа кирегә боролдоғоҙ. Һуңынан Аллаһ үҙенең Рәсүле һәм мөьминдәргә именлек, тыныслыҡ иңдерҙе. Һеҙ күрмәгән ғәскәрҙәр** (фәрештәләр) **ебәрҙе лә кафырҙарға ғазап ҡылды. Бына ошо – ул кафырҙарҙың язаһы»** («әт-Тәүбә», 25-26).

Ысындан да, ул көн мөшриктәр сафында булып та, һуңынан иманға килеүселәр Аллаһ Тәғәләнең мөьминдәргә ҡарата был дай ярҙамы тураһында раҫлаған саҡта, улар быға са һис ҡасан күрмәгән заттарҙың һөжүмгә ҡатнашыуҙарын шаҡ ҡатып һөйләйҙәр.[291]

Еңелгән Хәүәзин ғәскәрҙәренең бер өлөшө – Таифкә, бер өлөшө Нәхләгә юл тота, тағы бер төркөмө Әүтасҡа штаб ҡора.[292]

Хөнәйен һуғышында еңгән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡасып киткән дошмандарҙы эҙәрлекләй барырға ҡуша, әсирҙәрҙе һәм ғәниматтәрҙе иһә Жиранәгә оҙаттыра. Артабан ирешелгән уңышты теүәлләп ҡуйыу өсөн, Әбү Муса әл-Әшғариҙың ағаһы Әбү Ғәмир етәкселендәге бер отрядты Әүтас үҙәнлегенә ебәргәс, үҙҙәре иһә ислам армияһы менән бергә Таифкә йүнәлә.

290. Ибне Һишам, IV, 79.
291. Әхмәт, V, 286; Хәйсәми, VI, 182-183; Ибне Һишам, IV, 79.
292. Ибне Һишам, IV, 84.

### Әүтас һуғышы

(Һижри 8-се йыл шәүүәле / 630 йылдың феврале)

Таиф йүнәлешендәге хәрби походы сәбәпле Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шәхсән ҡатнашмаған әлеге бәрелештә, ислам ғәскәренең командиры Әбү Ғәмир разыйаллаһу ғәнһү шәһит китә, быға яуап итеп дошман командиры ла үлтерелә.

Әбү Ғәмир разыйаллаһу ғәнһү, яраланып, иҫән ҡалыу өмөтө өҙөлгәс, бер туғанының улы Әбү Мусаға: «Эй ҡәрҙәшемдең улы! Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә минән сәләм әйт! Минең өсөн Аллаһтан мәғфирәт һораһын!» – ти.

Ағаһы шәһит киткәс, командалыҡты үҙ ҡулына алған Әбү Муса разыйаллаһу ғәнһү ғәскәрҙең таралыуын туҡтата һәм һөжүм менән камил рәүештә идара итеп, ислам байрағының Әүтаста еңеү еле менән елферҙәүенә ирешә. Яуҙан ҡайтҡас, Аллаһ Рәсүленә ағаһының шәһит китеүе һәм үлем алдынан әйткән васыяты тураһында тапшыра. Шунан һуң Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ һыу килтертеп тәһәрәт ала ла ҡулдарын доғаға күтәреп:

*«Аллаһым! Ҡолоң Әбү Ғәмиргә мәғфирәт насип ит! Уны ҡиәмәт көнөндә ошо Үҙең яралтҡан кешеләрҙең күбеһенән өҫтөн урынға ҡуй!»* – тип үтенә. Әбү Муса һорағанса, уның өсөн дә доға ҡыла (Бохари, «Магази», 55).

### Таифте ҡамалышта тотоу

(Һижри 8-се йыл шәүүәле / 630 йылдың феврале)

Хижәз төбәгенең донъяла йәннәт һанала алырлыҡ бер ҡалаһы – Таифтең бер ҡалҡыулыҡ өҫтөнә һалынған ныҡлы ҡәлғәһе була. Шуға күрә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм алған ҡамалыш шаҡтай ауыр бара.

Был ҡамалышта тотоу ҡасандыр Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡарата ҡылынған золомдар өсөн бер үс алыу түгел, ә Хөнәйен һуғышының дауамы тип ҡарала. Сөнки Хөнәйендән ҡасыусылар барыһы ла, шул иҫәптән йәш башлыҡтары Малик ибн Ғәүф тә, Таиф ҡәлғәһенә йүнәлә. Улар Бану Ҫәҡиф менән бергә яңы һөжүм яуына әҙерләнә.

Ҡамалыш ваҡытында бер нисә төрлө һуғыш тактикаһы һәм яңы һуғыш ҡоралдары ҡулланыла. Ләкин Таиф бик елле ҡәлғә булғанға күрә, һөжүмдәргә шаҡтай ныҡ ҡаршы торалар. Өҫтәүенә, дошманды ҡәлғәнән сығарыу ҙа мөмкин булмай. Хатта Хәлид ибн Вәлид, һуғышыу өсөн берәй алып һорап өндәшкәндә, ҡалалағылар яуап итеп: «Һиңә ҡаршы торорлоҡ берәү ҙә юҡ ҡәлғәбеҙҙә!» – тип, үҙҙәре янынан бер кешене лә ситкә сығармайҙар. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Дошман, төлкө кеүек өңөнә ҡасҡан хәлдә. Инде ошо хәлдәрендә ҡалдырһаҡ, уларҙан бер зарар ҙа теймәҫ!»* – тип, ҡамалышты туҡтатҡан осраҡта, бер ниндәй ҙә зыян булмаясағын белдерә. Сөнки Ул баҫып алыусы, һөжүмсе түгел, бер рәхмәт һәм өндәү Пәйғәмбәре була. Мәккәләләр осрағындағы кеүек, таифлеләрҙең дә һидәйәткә ирешеүҙәрендә бер ярҙамсы булырға теләй. Ысындан да, оҙаҡ та үтмәй, ҡамалышты туҡтата.

Әсхәбе кирам Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән Таиф ҡамалышы ваҡытында мосолмандарға бик күп зыян килтергән ҫәҡиф ҡәбиләһенә бәддоға уҡыуын һорайҙар. Рәхмәт Пәйғәмбәре иһә ҫәҡифлеләрҙең һидәйәте өсөн доға ҡыла:

*«Йә Раббы! Ҫәҡифкә һидәйәт насип ҡыл! Уларҙы беҙгә ебәр!..»* – тип, Хаҡ Тәғәләгә үтенеп, яҡлау һорап, был төбәктән китеп бара. Нәтижәлә был доға бәрәкәте менән тиҙ арала ҫәҡифлеләр мосолманлыҡ ҡабул итеү өсөн Аллаһ Рәсүле янына килә. (Ибне Һишам, IV, 134; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 73/3942).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һижрәткә ҡәҙәр Уның үҙенә ҡарата бик ҡырыҫ мөнәсәбәт күрһәткән, таш атып, һәр яғын ҡан-туҙан эсендә ҡалдырған бер ҡәүемгә бәддоға уҡымау ғына түгел, уларҙың һидәйәткә ирешеүен бик ҙур ынтылыш-теләк менән янып йөрөй. Мәҫәлән, бер йыл һуңыраҡ, үҙҙәре килеп мосолманлыҡ ҡабул итеүҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ һөйөнөс кисерә, уларҙы һыйлап, үҙҙәренә әллә нисә көн ваҡытын бағышлай.

Әлеге ҡамалыштың ул заман өсөн иң әһәмиәтле еңеүе Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мосолманлыҡҡа күскән осраҡта ирекkә сығарыласаҡтары тураһында вәғәҙәһенән һуң, ҡәлғәләге шаҡтай күп ҡолдоң дошман сафтарынан ҡасып, исламды һайлауы һәм шул рәүешле һидәйәткә ирешеүҙәре була.[293]

Әбү Зәрр раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Сәййидүл-Мүрсәлин Әфәндебеҙ Таиф походы ваҡытында, Ҡарны Мәнәзил тип аталған ерҙән киткәндә, дөйәгә ултырып барырға йыйынғас, дөйәһе Ҡасуаны әҙерләнем. Ҡасуаның йүгәнен башта ҡулымда тотоп торҙом, Рәсүлүллаһ менеп атланғас, Уның үҙенә бирҙем һәм эйәрҙең артҡы ултырғысына мин дә мендем. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм атлаһын өсөн дөйәнең арҡаһына ҡамсы менән һуға, һәр һуҡҡан һайын ҡамсы миңә лә эләгеп ҡала ине. Шунан Ул миңә боролоп:

*«Әллә ҡамсы һиңә лә теймәме?»* – тип һораны. «Эйе! Әсәм-атам Һиңә ҡорбан булһын!» – тинем.

293. Бохари, «Магази», 56.

Жиранәгә төшөп еткәс, бер мөйөштә һарыҡ көтөүе йөрөй ине. Ғәнимәт малдары өсөн яуаплы заттан улар тураһында һораштырҙы. Тегеһе һоралған нәмәләр тураһында мәғлүмәт бирҙе. Шунан һуң Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Әбү Зәрр ҡайҙа?»* – тип ҡысҡырҙы.

«Мин бында!» – тинем.

*«Ошо һарыҡтарҙы ал! Кис һиңә эләккән ҡамсылар өсөн түләү!»* – тип әйтте. Һанағас, ул һарыҡтарҙың йөҙ егерме баш икәнен күрҙем. Минең ҡулыма эләккән һәм иң күп файҙа килтергән мал бына шулар булды» (Ваҡыди, III, 939).

Был ваҡиға Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ҡол хаҡы мәсьәләһендәге иғтибарлылығын күрһәтә, киләсәк осорҙарҙы яҡтыртасаҡ үрнәк булып тора.

**Ғәнимәттәрҙе бүлешеү**

Таиф ҡамалышын туҡтатҡан Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ислам ғәскәре менән бергә Жиранәгә килә. Бында ғәнимәттәр һәм әсирҙәр йыйылған була. Был ваҡытта Әбү Муса әл-Әшғари ҙа, Әүтас һуғышында еңеп, шунда килә. Ислам ғәскәре бөтә дошмандарын тар-мар итә. Инде ғәнимәттәр бүлеү эшенә сират етә. Төрлө һуғыштарҙа егерме дүрт мең дөйә, ҡырҡ мең һарыҡ, дүрт мең уҡыййә көмөш ҡулға төшөрөлә, шулай уҡ алты мең кеше әсир итеп алына.[294]

Ғәнимәттәрҙе бүлә башлағансы, әүәл Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай тип бойора:

*«Үҙе менән ғәнимәт малы булғандар нәмә бар, шуны энәһенән ебенә ҡәҙәр кире ҡайтарһын! Шуны яҡшы белегеҙ: ғәнимәт малына хыянат ҡылыу уның өсөн ҡиәмәт көнөндә ғәрлек, ут булыр!»* (*Муватта*, «Йыһат», 22; Әхмәт, V, 316).

Был ваҡытта хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә әсирҙәр араһында һөт ҡәрҙәше хәҙрәти Шәймә булғанлығы тураһында хәбәр килтерәләр. Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шунда уҡ уны үҙ янына килтертеп, еләнен һала ла хәҙрәти Шәймәгә йәйеп бирә. Сүлдә бергә үҫкән был ҡәҙерле һөт туғанына ҡарата Ул олуғ иғтибар һәм тоғролоҡ, шәфҡәтле мөғәмәлә күрһәтеп:

*«Хуш килдең!»* – тип ҡаршы ала. Ул элекке көндәрҙе иҫкә төшөрә, хәтирәләрҙән күҙҙәре йәшләнә. Ата-әсәһе тураһында һораша. Шәймә уларҙың инде вафат булғанлығын әйтә. Аллаһ Рәсүле башҡа туғандары тураһында ла ҡыҙыҡһына. Артабан:

294. Ибне Сәғд, II, 152.

*«Теләһәң, мөхәббәт һәм хөрмәттә беҙҙең менән йәшә! Теләһәң, һиңә малдар биреп, ҡәбиләң янына ҡайтарып ебәрәм. Мин һиңә уныһын да эшләргә әҙер»,* – тип әйтә. Шәймә: «Һин миңә мал бир һәм ҡәүемем янына ебәр», – ти. Шул һүҙҙәрҙән һуң ул мосолманлыҡ ҡабул итә. Аллаһ Рәсүле Шәймә ханымға һәм уның исән ҡалған ғаилә ағзаларына дөйә һәм һарыҡтарҙан өлөш сығара. Шәймәгә шулай уҡ бер ир-ат һәм бер ҡатын-ҡыҙ ҡол бирә. Шәймә иһә уларҙы бер-береһе менән өйләндерә (Ибне Һишам, IV, 91-92; Ваҡыди, III, 913).

Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәниməттәр бүлеүҙе күпмелер ваҡытҡа кисектереп тора. Аллаһҡа бирелгәнлектәре, имандары зәғиф бәндәләр, был хәлдең хикмәтен төшөнә алмайынса, шикәйәт белдерә. Бәҙәүи ғәрәптәр ғәнимәттең бүленеүен талап итә башлай. Һөҙөмтәлә, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе Сәмүрә ағасы аҫтында туҡтаталар. Уның халаты ағасҡа эләгеп ҡала. Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дөйәһен туҡтатып:

*«Халатымды алып бирегеҙ! Әгәр ошо үҙегеҙ күреп торған ағастар һанынса малдарым булһа, уларҙың барыһын да һеҙгә бүлеп бирер инем. Һеҙ ҙә минең һаран, ялғансы һәм ҡурҡаҡ түгеллегемде күрер инегеҙ!»* – тип әйтә (Бохари, «Йыһат», 24).

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәнимәтте бүлгән ваҡытта, уның өҫтөнә өйөлөп, шул ҡәҙәр уңайһыҙлайҙар ки, ахырҙа Ул (әүәлге бер Пәйғәмбәрҙе иҫкә алып) былай ти:

*«Аллаһ Тәғәлә ҡолдарынан бере ҡәүеменә ебәрелә. Ҡәүемендә уны туҡмап, башын яралар. Ул ҡол иһә маңлайынан аҡҡан ҡанды ҡулы менән һөртә-һөртә: «Йә Раббы, ҡәүемемде ярлыҡа! Сөнки улар ни ҡылғандарын белмәйҙәр», – тип доға уҡый»* (Әхмәт, I, 456; Мөслим, «Йыһат», 105).

Әфәндебеҙҙең ғәнимәтте бүлеү эшендә әкрен эш йөрөтөүенең хикмәте Жиранәгә килеүҙең унынсы көнөндә генә аңлашыла. Еңелеүгә дусар булған Хәүәзин ҡәбиләһенән бер делегация Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килеп, мосолманлыҡҡа күсеүҙәрен белдерә. Шул уңайҙан әсирҙәре һәм малдары кире ҡайтарылыуын һорайҙар. Был ваҡытта Сәғд улдарынан берәү, тороп баҫып: «Йә Рәсүлуллаһ! Ошо ҡуләгәләрҙә тороусылар – Һинең һөт апаларың, һөт түтәйҙәрең һәм һиңә һөт имеҙеп үҫтергән ҡатындар! Әгәр беҙ Дамаск йәки Ирак королен имеҙеп үҫтерһәк, хәҙерге ваҡыттағы хәлгә эләгеп, үҙенән шәфҡәт һәм игелек һораған булһаҡ, беҙгә ҡыҙғанмаҫтар ине. Хәлбүки, Һин – һөт имеҙеп үҫтерелгәндәрҙең иң хәйерлеһе!» – ти.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Мин ғәнимәт бүленешен был көнгә саҡлы көттөрҙөм. Ләкин һеҙ шаҡтай һуңланығыҙ! Хәҙер йә әсирҙәрегеҙ, йә малдарығыҙ – икенең береһен һайлағыҙ!..»*

Шунан һуң делегация әсирҙәрен алып китеүгә өҫтөнлөк бирә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин һеҙгә Миңә һәм Ғәбделмотталиб улдары өлөшөнә тигән әсирҙәрҙе кире бирәм. Башкалары өсөн иртәгә өйлә намаҙынан һуң Минең яныма килегеҙ!»* – тип белдерә.

Икенсе көндө Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләрен йыйып, уларға мәсьәләне аңлатып бирә. Үҙ өлөшөнә тигән әсирҙәрҙе ебәргәнен белдереп, былай тип әйтә:

*«Һеҙҙән кемдәрҙер әсирҙәрен түләүһеҙ, күңел ризалығы менән генә биреп, ҡәрҙәштәрен шатландырыуҙан тәм тапһа, шулай эшләһен! Әгәр кемдер үҙ өлөшөнә тигәнде түләүһеҙ бирергә теләмәһә, быны Аллаһ насип ҡыласаҡ беренсе ғәниммәттән түләрбеҙ. Теләгән кеше шулай эшләһен!..»*

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең сәхәбәләргә мөрәжәғәт итеүе әсирҙәрҙең инде улар хаҡы булыу менән бәйле. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙ әсирҙәрен ирекә ебәреп, уларҙан да шуны һорағас, бөтә сәхәбә лә шундай уҡ фазиләттән өлөш алыу мөмкинлеге өсөн ихлас күңелдән һөйөнөп: «Беҙ ҙә әсирҙәребеҙҙе Аллаһ Пәйғәмбәренә бүләк итәбеҙ!» – ти (Бохари, «Магази», 54; Ибне Һишам, IV, 134-135).

Һуғышта ҡулға төшөрөлгән меңдәрсә әсир шул рәүешле ул көн Хәүәзин ҡәбиләһенә һис бер түләүһеҙ ҡайтарыла. Тарихта бындай нәмәнең һис ҡасан булғаны юҡ. Бары шул саҡта ғына тарих бындай ваҡиғаға шаһитлыҡ ҡыла: Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең өммәтенә алып килгән ҡабатланмаҫ ислам әхлағы бәрәбәренә бер минут эсендә алты мең әсир, һис бер донъяуи йолом-түләү алмайынса, ирекә ебәрелә.

Был хәл – имеп үҫкән һөт хаҡына яуап итеп тиңдәшһеҙ рәхмәтлек һәм тоғролоҡ үрнәге күрһәтеү. Бер залим йәмғәткә ни ҡәҙәр матур фазиләт дәресе булып тора. Хәлбүки, бәндә эҙҙәре һөртөлгән, юйылған игелектәре тураһында иҫкә лә алмаҫ. «Тоғролоҡ» кәлимәһе күбеһенсә һүҙлектәрҙәге бер һүҙ генә булып ҡалып килә.

Бындай тиңе юҡ фазиләт һөҙөмтәһендә бөтә хәүәзинлеләр тулыһы менән ислам динен ҡабул итә. Хатта ул ваҡытта Таифтә булған ҡәбилә башлығы Мәлик ибн Ғәүф тә, был хаҡта ишеткәс, ғәжәпкә ҡала һәм Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең саҡырыуын ҡабул итеп, исламға килеү бәхетенә ирешә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уға йөҙ дөйә бүләк итеп, йәнә үҙ ҡәбиләһенә башлыҡ итеп билдәләй.[295]

Был ваҡиғаларҙан алынырға тейешле һабаҡ иң нәтижәле тәблиғ эшенең күркәм әхлаҡ менән бергә булыуынан ғибәрәт. Шулай уҡ зирәклек менән

295. Ибне Һишам, IV, 137-138.

алып барылған сәйәсәттең ни ҡәҙәр ҙур бәрәкәткә нигеҙ була алыуы. Шул уҡ ваҡытта аҡылһыҙ ғәмәлдәр килтереп сығарасаҡ зарарҙарҙың да шул ҡәҙәр ҙур буласағына ишара ҡылына.

❀

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәниммәттәрҙе иң күркәм рәүештә бүлә. Ғәнимәт биш өлөшкә айырыла, шуның дүртеһе ғәскәрҙәргә бирелә, бер өлөшө бәйтүлмалға, йәғни дәүләт ҡаҙнаһына ҡалдырыла. Бәйтүлмал мөлкәтен үҙе теләгәнсә тотоу иһә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хаҡы һанала. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғәнимәт бүлеү эшенә ҡәҙәр үк, дөйәнән бер төк йолҡоп алып, сәхәбәләргә был хаҡта түбәндәгесә аңлатып бирә:

*«Мин һеҙҙең ғәнимәтегеҙгә бер дөйә түгел, хатта бер дөйә төгө хәтле лә ҡыҙыҡмайым... Ниңә сабырһыҙланаһығыҙ? Ғәнимәт малдары, ошо үҙәнлектең (таштары һәм) ағастары саҡлы булһа ла, уларҙы һеҙгә таратасаҡмын. Былар араһынан биштән берен айырып алһам, ул да йәнә һеҙҙең фәҡирҙәрегеҙгә сарыф ителәсәк»* (*Муватта, «Йыһат»,* 22; Әхмәт, V, 316).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ғәниммәттәрҙең илаһи күрһәтмә нигеҙендә үҙенә тапшырылған биштән бер өлөшөнән мүғәлләфи-ҡулүбкә, йәғни кемдәрҙең исламға ҡарата күңелдәрен йылытырға теләйҙәр, шул заттарға ҙур-ҙур өлөш итеп тараталар. Шундайҙарҙан Хәким ибн Хизам разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән миңә ғәнимәт малдарынан бер аҙ өлөш сығарыуын һораным, йөҙ дөйә бирҙе. Тағын бер аҙ һораным, йәнә йөҙ дөйә бирҙе. Ҡабат һораным, тағын йөҙ дөйә бирҙе. Артабан:

*«Эй Хәким! Ысындан да был мал ҡыҙыҡтырғыс һәм татлы. Кем уны хиреслек, һаранлыҡҡа бирелмәйенсә алһа, ул малда уға бәрәкәт бирелер. Ә кем уға күҙен төбәп, хиреслек менән йәбешһә, ул малдың бәрәкәте булмаҫ. Ундай бәндә ашап-ашап та һис туя белмәгән затҡа тиң. Биреүсе ҡул, алыусы ҡулдан хәйерлерәк»,* – тип белдерә.

Шунан һуң мин: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Һине хаҡ дин менән ебәргән Аллаһ менән ант итәм, ҡалған ғүмеремдә Һинән башҡа һис кемдән бер нәмә лә ҡабул итеп алмаясаҡмын», – тинем».

Хәким разыйаллаһу ғәнһү Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм биргән беренсе йөҙ дөйәне ала, башҡаһын ҡалдыра. Бер көндө хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү, ғәнимәт малынан өлөш бүлеп биреү өсөн, Хәкимде саҡыра. Ләкин Хәким уны алыуҙан тыйыла. Һуңынан уны, ҡайһы бер нәмәләр бирер өсөн, хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү өндәшә. Хәким разыйаллаһу ғәнһү был юлы ла тәҡдимде ҡабул итмәй. Шунан һуң хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Эй мосолмандар! Һеҙҙе Хәким алдында шаһит

итеп әйтәм. Мин ошо ғәниməттән Аллаһ тарафынан уға тейешле өлөштө бирәм, ләкин ул алырға теләмәй», – ти. Йомғаҡлап әйткәндә, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафатынан һуң Хәким ғүмеренең һуңына ҡәҙәр бирәүҙән дә бер нәмә лә ҡабул итеп алмай (Бохари, «Вәсая», 9; Ваҡыди, III, 945).

Ҡөрәйеш мөшриктәрҙең абруйлы заттарынан Сафуан ибн Өмәййә мосолман булмаһа ла, Хөнәйен һәм Таиф һуғыштарында Аллаһ Рәсүле янынан китмәй. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Жиранәлә тупланған ғәнимәт малдар араһында, уларҙы ҡарап-күҙәтеп йөрөгән ваҡытта, Сафуан да Аллаһ Рәсүле янында була, дөйәләр, һарыҡтар һәм көтөүселәр менән тулы үҙәнлеккә хайран ҡалып ҡарап тора. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уның был халәтен күҙ сите менән күреп ҡала һәм:

*«Әбү Вәһб! Үҙәнлекте бик оҡшаттыңмы әллә?»* – тип һорай. Сафуан: «Эйе!» – тип яуап бирә.

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ул үҙәнлек тә, ундағылар ҙа һинеке булһын!»* – тип әйтә. Шунан һуң Сафуан, үҙ-үҙен тыйып тора алмай: «Пәйғәмбәрҙән башҡа һис кемдең күңеле был ҡәҙәр йомарт була алмаç», – ти ҙә, шәһәҙәт кәлимәһен әйтеп, мосолманға әйләнә (Ваҡыди, II, 854-855). Һуңынан Сафуан раҙыйаллаһу ғәнһү ҡөрәйешлеләр янына ҡайтҡас: «Эй ҡәүемем! Мосолман булығыҙ. Валлаһи, Мөхәммәт шул хәтлем бүләктәр биреп, игелек ҡыла, ҡытлыҡ-ярлылыҡтан бер ҙә ҡурҡмай», – тип мөрәжәғәт итә (Мөслим, «Фәзаил», 57-58).

Әбү Суфьян, Акра ибн Хабис, Уйәйнә ибн Хысн, Ғәббәс ибн Мирдас, Мәлик ибн Ғәүф кеүек ҡырҡлап мүғәлләфәи-ҡулүбкә шул рәүешле күҙҙәрҙе ҡамаштырырлыҡ дәрәжәлә малдар бирелә.[296]

Ғәббәс ибн Мирдас исемле шағир үҙенә бирелгән ғәнимәт малын әҙ тип табып, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә атап, шелтә рухындағы бер шиғыр һөйләй. Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе был хәбәрҙе ишеткәс, уны саҡыртып килтерә:

*«Һинең телеңде киçәсәкмен!»* – ти. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Билали Хәбәшиҙе шунан алдараҡ:

*«Һиңә уның телен киçергә ҡушҡас, үҙенә бер кейем бир!»* – тип киçәтеп ҡуя. Шунан һуң:

*«Эй Билал! Ҡая әле, алып кил уны, киç телен!»* – тип бойора.

Билал Ғәббәсте ҡулынан тотоп алып килгәс, Ғәббәс: «Йә Рәсүлүллаһ! Телемде киçәсәкме? Эй мөһәжирҙәр, телемде киçәсәкме? Эй ансарҙар, телемде киçәсәкме?» – тип синай-ҡысҡыра башлай. Билал раҙыйаллаһу ғәнһү иһә

296. Ваҡыди, III, 944-947.

Ғәббәсте һөйрәй-һөйрәй алып барыуын дауам итә. Ғәббәс тағы ла күберәк ҡысҡырырға керешкәс, хәҙрәти Билал: «Тауышланма! Рәсүлүллаһ бер кейем биреп, һинең ауыҙыңды яптырырға ҡушты», – ти. Һөҙөмтәлә, Билали Хәбәши тынысланған Ғәббәскә өҫтәп бер күлдәк бирә. Аллаһ Рәсүле уның өлөшөн йөҙ дөйәгә еткерә (Ибне Сәғд, IV, 273; Мөслим, «Зәкәт», 137).

Шул саҡта Сәғд ибн Әби Вәҡҡас раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Жуғәйел ибн Сүраҡа (кеүек фәҡир берәүҙе) ситтә ҡалдырҙың да Уйәйнә, Акра шикелле (бай һәм ҡәүеменең абруйлы) кешеләргә йөҙәр-йөҙәр дөйә бирҙең!» – тип мөрәжәғәт итә.

Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ:

*«Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, Уйәйнә һәм Акра шикелле кешеләр менән ер йөҙө тулып ташыһа ла, Жуғәйел уларҙың барыһынан да хәйерлерәк! Ләкин мин быларҙы исламға яҡынайтыу тураһында ҡайғыртам, Жуғәйелде иһә ул бик яҡын бәйләнгән мосолманлығына һәм әхирәттә уға әҙерләнгән ҙур әжер-бүләктәргә юллайым!»* – тип аңлата (Ибне Һишам, IV, 143; Ибне Сәғд, IV, 246).

Мүғәлләфәи-ҡулүбкә ғәниməттән мул-мул өлөш бирелеү ҡай бер бәндәләр тарафынан дөрөҫ ҡабул ителмәй, уның асылын аңламайҙар. Был иһә сәхәбәләр араһында ығы-зығы ҡуптара. Хатта Тәмим улдарынан Зүл-Хувәйсира исемле берәү, әҙәпһеҙләнеп: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Ғәҙеллек һаҡла!» – тип әйтергә йөрьәт итә. Шунан һуң Аллаһ Рәсүле саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм бик борсоуға һабыша:

*«Шулаймы? Мин дә ғәҙеллек һаҡламаһам, инде кем ғәҙеллек ҡылыр?»* – тип, ҡаршы әйтеүсегә шелтә белдерә Ул (Мөслим, «Зәкәт», 148).

Оҙаҡ та үтмәй был хаҡта аяти кәримә иңә:

وَمِنْهُمْ مَّنْ يَلْمِزُكَ فِى الصَّدَقَاتِ فَإِنْ أُعْطُوا مِنْهَا رَضُوا وَإِنْ لَّمْ يُعْطَوْا مِنهَا إِذَا هُمْ يَسْخَطُونَ وَلَوْ أَنَّهُمْ رَضُوْا مَا آتَاهُمُ اللّٰهُ وَرَسُولُهُ وَقَالُوا حَسْبُنَا اللّٰهُ سَيُؤْتِينَا اللّٰهُ مِنْ فَضْلِهِ وَرَسُولُهُ إِنَّا إِلَى اللّٰهِ رَاغِبُونَ

«(Эй Рәсүлем!) **Уларҙан саҙаҡаларҙың** (бүленеше) **мәсьәләһендә Һине ғәйепләүселәр ҙә бар. Саҙаҡаларҙан уларға ла** (бер өлөш) **бирелһә, ҡәнәғәтләнерҙәр, әгәр уларға саҙаҡанан өлөш сығарылмаһа, шундуҡ ҡыҙып китерҙәр. Әгәр улар Аллаһ һәм Уның Рәсүленең үҙҙәренә биргәндәренә риза булып: «Аллаһ беҙҙең өсөн етер. Яҡын арала беҙгә Аллаһ та үҙ рәхмәтен насип итәсәк, Рәсүле лә. Беҙ бары Аллаһҡа ғына ялбарыусыларҙан!» тиһәләр,** (яҡшыраҡ булыр ине)» («әт-Тәүбә», 58-59).

Әлеге аяти кәримәләрҙә Аллаһ Рәсүленең ҡулы менән башҡарылған ғәнимәт бүлеү эше асылда илаһи бүленеш икәнлеге белдерелә һәм ғафил йөрәк менән ныҡ, саф йөрәк араһындағы айырма аңлатыла.

Ризаһыҙлыҡ белдереүселәрҙең ҙур күпселеге ансарҙарҙан була. Хәлбүки, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әлеге йомарт бүләктәрҙе ғөмүми ғәнимәт малынан түгел, ғәниммәттең «фәй» тип аталған һәм сарыф итеү берҙән-бер Рәсүлүллаһ хоҡуғы булған биштән бер өлөшөнән тарата. Ләкин хатта был да ҡайһы бер йәш ансарҙар араһында тауыш, зар ҡуптара.[297] Былдай протестарҙы туҡтатыу, ризаһыҙҙарҙы тынысландырыу өсөн, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғауға бик ҙурға киткәнсе, бөтә ансарҙарҙы йыйҙыра. Уларҙан башҡа һис кемде ҡатнаштырмаған был йыйылышта, мәсьәләнең асыл мәғәнәһе аңлашылһын өсөн, Йәнәбел-Хаҡтың уларға насип иткән ниғмәттәре тураһында иҫкә төшөрөп, Рәсүлүллаһ былай тип мөрәжәғәт итә:

*«Эй ансарҙар! Минең хаҡымда күңелегеҙҙә тойған борсоу-зарҙы ишеттем. (Ләкин әйтегеҙ әле), һеҙ юлын юғалткан мөшриктәр булғанда, Аллаһ Тәғәлә минең аша һеҙгә тура юлды күрһәтмәнеме? Һеҙ фәҡир заттар булғанда, арағыҙға минең килеүем менән Йәнәбел-Хаҡ барығыҙҙы ла байға әйләндермәнеме? Арағыҙҙағы нәфрәт һәм дошманлыҡ һеҙҙе кимергән сакта, минең килеүем менән хәҙрәти Аллаһ йөрәктәрегеҙҙе татыулаштырып берләштермәнеме?»*

Был һорауҙарҙың барыһына ла ансарҙарҙан: «Бөтә рәхмәт һәм ниғмәт – Аллаһ һәм Уның Рәсүленә!» – тигән яуап алған Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм тәрән мәғәнәле, тәьҫирле сығышын дауам итә:

*«Әй ансар халкы! Һеҙ миңә: «Ҡәүемең Һине ялғансы тип сығарғанда, беҙҙең яныбыҙға килдең! Һине беҙ таныныҡ, раҫланыҡ! Ҡәүемең Һине ташлап киткән сакта, Һиңә беҙ ярҙам иттек! Ҡәүемең Һине ҡыуҙы, беҙ Һине ҡосағыбыҙға алдыҡ! Һин ярлы инең, беҙ Һинең менән малыбыҙҙы бүлештек!..» – тиһәгеҙ, Мин дә һеҙҙең әйткәндәрҙе раҫлап: «Бик дөрөҫ һөйләйһегеҙ!» – тиер инем...*

*Әй ансар халкы! Бер төркөм заттарға Мин биргән донъя малы арҡаһында һеҙҙең тарафтан әйтелгән һүҙҙәр дөрөҫ буламы? Мин бер төркөм заттарҙың йөрәктәрен исламға ҡарата йылытыу өсөн биргән һәм мосолманлығығыҙҙың ҡеүәтенә һәм күркәмлегенә ышанып, һеҙҙе мәхрүм ҡалдырған донъялыҡ нәмәләр арҡаһында йәнегеҙ көйҙөмө? Шул сәбәпле нәфесегеҙгә донъя тар тойола башланымы?..*

*Әй ансар халкы! Һәр кем үҙе алған малдар менән өйөнә ҡайтып киткәндә, һеҙ өйҙәрегеҙгә Пәйғәмбәрегеҙ менән ҡайтырға теләмәйһегеҙме?»*

297. Камил мираҫ, «Тәжрид тәржемәһе», X, 341.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең былдай һүҙҙәренән һуң ансарҙарҙың күҙенә йыйылған йәштәр йылға булып аға башлай. Хәҙер инде улар үкһей-үкһей илай һәм: «Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ Һинең менән барырға теләйбеҙ!» – тип мөхәббәттәрен яңырталар, сафландыралар. Улар менән бергә Аллаһ Рәсүле лә илай. Ансарҙар шул рәүештә буйһоноусанлыҡтарын күрһәткәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларҙы маҡтап-хуплап:

*«Әй ансар халҡы! Әгәр һижрәттең шәрәфе-даны һәм фазиләте булмаһа, Мин, һис шикһеҙ, ансарҙарҙың береһе булырға теләр инем... Әй ансар халҡы! Әгәр һәр кем үҙенең бер юлы менән барһа, мин ансарҙар юлынан китер инем!»* – ти.

Әлеге һағышлы йыйылыштан һуң ансарҙар сафында бары: «Аллаһтың Рәсүле беҙгә етерлектер!» – тигән һүҙҙәр генә ишетелә. Шулай итеп, яңылыш аңлау арҡаһында асылған яра хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк һүҙҙәре менән ҡаплана, бәйләп ҡуйыла (Бохари, «Магази», 56; Мөслим, «Зәкәт», 135; Хәйсәми, X, 31).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең шундай үрнәк ғәмәленән беҙ алырға тейешле күп һабаҡтар бар. Кешенең тәбиғәте шундай , уны игелек һәм бүләк менән еңеп, яулап була. Үҙенә ҡарата игелек ҡылынған зат дошман икән, дошманлығы юҡҡа сығыр; урталараҡ икеләнеп тороусы икән, тағы ла яҡынайыр; яҡында икән, мөхәббәте көсәйер.

Ҡыҫҡаһы, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең иң күркәм, үрнәк шәхес булыуы әлеге ғәнимәт бүлеү процесында бик аныҡ рәүештә сағылыш таба.

❁

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Жиранәлә ун өс көн йәшәгәс, ғөмрә ҡылыу өсөн ихрамға кереп, был ерҙән китеп бара.[298] Шул сәбәпле Мәккә халҡы һәм уның тирәһендә йәшәүселәр өсөн Жиранәлә ихрамға кереп, ғөмрә ҡылыуҙары фазиләтлерәк һанала.

**Бер мосолманды үлтергән өсөн яза**

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мәҙинәи Мөнәүүәрәнән юлға ҡуҙғалғансы, үҙ маҡсаты тураһында дошмандың башын бутау өсөн, Әбү Катағдәне бер отряд ғәскәр менән Нәжид яғына ебәрә. Изам тип йөрөтөлгән ергә килгәс, был отряд Ғамир ибн Адбат исемле бер кешене осрата. Ғамир, мосолмандарға сәләм биреп, шәһәҙәт кәлимәһен әйтеп, иманға килеүен белдерә. Фәҡәт Әбү Катағдә менән бергә килгән Мухаллим ибн Жәссамә,

298. Бохари, «Ғөмрә», 3; Тирмизи, «Хаж», 92/935.

элегерәк ваҡытта ике арала булған ыҙғыш арҡаһында, Ғамир ысынлыҡта мосолман түгел, тип, уны үлтерә һәм әйберҙәрен ғәнимәт булараҡ, үҙенә ала.

Әбү Катағдә отряды Нәжидтән ҡайтҡас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хөнәйен үҙәнлегендә әле генә өйлә намаҙын ҡылдырған була һәм үҙ тирәһенә сәхәбәләрен йыйып, бер ағас төбөндә ултыра. Ғамир ваҡиғаһы тураһында Уға еткерелгәс, түбәндәге аяти кәримә иңә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِذَا ضَرَبْتُمْ فِى سَبِيلِ اللهِ فَتَبَيَّنُوا وَلَا تَقُولُوا لِمَنْ أَلْقَى إِلَيْكُمُ السَّلَامَ لَسْتَ مُؤْمِنًا تَبْتَغُونَ عَرَضَ الْحَيَاةِ الدُّنْيَا فَعِنْدَ اللهِ مَغَانِمُ كَثِيرَةٌ كَذَلِكَ كُنْتُمْ مِّنْ قَبْلُ فَمَنَّ اللهُ عَلَيْكُمْ فَتَبَيَّنُوا إِنَّ اللهَ كَانَ بِمَا تَعْمَلُونَ خَبِيرًا

**«Эй иман эйәләре! Аллаһ юлында йыһатҡа күтәрелгән ваҡытта, мөьминде көфөрҙән айырыр өсөн, яҡшылап тикшерегеҙ. Һеҙгә сәләм биреүсе затҡа, донъялыҡ тормошо мәнфәғәттәрен күҙҙә тотоп: «Һин мөьмин түгел!» – тимәгеҙ. Аллаһ ҡаршыһында ғәнимәттәр күп. Исламға иң әүәл кергән саҡта, һеҙ ҙә шундай инегеҙ. Һуңынан Аллаһ һеҙгә рәхмәтле мөнәсәбәттә булды, шуға күрә яҡшылап тикшерегеҙ. Дөрөҫлөктә, Аллаһ ҡылғандарығыҙҙан хәбәрҙар»** («ән-Ниса», 94).

Шул ваҡытта Ғамирҙың яҡындары килеп, Мухаллимгә дәғүә белдерә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршында оҙон-оҙаҡ тикшереү-һөйләшеүҙән һуң, Ғамирҙың варистары ризалығы менән уның үлеме өсөн йолом түләү тураһында ҡарар сығарыла.

«Мухаллим килһен дә Аллаһ Рәсүле уның өсөн ярлыҡау һораһын!» – ти Ғамирҙың варистары.

Мухаллим килгәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм унан:

*«Ғамир мосолман икәнлеген әйткән килеш тә һин уны үлтергәнһең, шулаймы?»* – тип һорай.

Был юлы Мухаллим: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Минең өсөн ярлыҡау һора!» – тип әйтергә мәжбүр була. Мухаллимдең был һүҙҙәре ғәйеп эште белә тороп ҡылыуын таныуҙы белдерә. Тимәк, мосолман булған һәм һис бер ғәйебе беленмәгән бер затты үлтергәнлектән, уның гонаһы ғәфү ителә алырҙайҙар иҫәбенә кермәй. Әгәр был мәсьәләлә иң кескенә генә ташлама яһалһа ла, һуңынан йәмғиәттә бындай енәйәттәрҙе киҫәтеү мөмкин булмаҫ ине. Ғаләмдәргә рәхмәт итеп ебәрелгән Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шуға күрә Мухаллимдең үҙе ҡылған ошо ауыр гонаһ сәбәпле тәүбә-истиғфар тураһында үтенесен кире ҡаға һәм хатта:

*«Аллаһ һине ярлыкамаһын!»* – тип ҡәтғи яуап бирә.[299]

Был ваҡиғанан ғибрәт алып, шағир Кәмал Әдиб Күркчүоглу хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең күңеленә хуш килмәйәсәк һәр төрлө ғәмәлдәрҙән өммәтте бик күркәм рәүештә киҫәтә:

*Уның хөрмәтенән йыраҡҡа китеү –*
*Ике донъяла етер ғафилға ҡайғы өсөн!..*

Пәйғәмбәрҙең асыу-нәфрәтенә дусар хәлдә ҡалған Мухаллим, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янынан киткәс, өйөнә бикләнеп йәшәй. Бер аҙнанан һуң ҡайғы-һағыштан йән тәслим ҡыла. Мухаллимдең яҡындары уны ерләһәләр ҙә, тупраҡ был жәсәдте ҡабул итмәй. Ҡабат-ҡабат күмһәләр ҙә, ер һәр осраҡта уны тышҡа сығара. Сараһыҙ ҡалған, был хәлгә шаҡ ҡатҡан туғандары хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килеп, вәзғиәтте һөйләп бирәләр. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә:

*«Был тупраҡ унан насарыраҡтарҙы ла үҙ ҡосағына ҡабул иткән, ләкин Аллаһ Тәғәлә һеҙгә бер ғибрәт күрһәтергә һәм «Лә иләһә илләллаһ» ҡәҙерен белдерергә теләй!»* – тип, Мухаллимде ҡабат ер ҡуйынына һалырға, ҡәберенең өҫтөнә таш ҡуйырға ҡуша (Әхмәт, V, 112; Ибне Мажә, «Фитән», 1; Ибне Һишам, IV, 302; Ваҡыди, III, 919).

Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, «Лә иләһә илләллаһ» һүҙҙәренең хаҡын һәм хөрмәтен танымауҙың ни ҡәҙәр ҙур бәлә һәм бер мосолманға ҡарата хаҡһыҙлыҡ ҡылыуҙың, донъяуи мәнфәғәттәр арҡаһында уның йәнен ҡыйыуҙың ни ҡәҙәр ауыр бер гонаһ икәнлеген күрһәтеү өсөн шундай мөнәсәбәт белдергән һәм кешеләрҙе бындай ғәмәлдәрҙән ҡәтғи тыйған.

Әлеге ваҡиға тәүхид кәлимәһен әйткән һәр кемдең мосолман тип ҡабул итергә кәрәклеген белдерә. Ундай кешенең тыштан күренеп торған көфөрлөгө юҡ икән, уның тураһында насар нәмәләр уйлау, һөйләү – харам. Был хәл мосолмандарҙың, хөкөм сығарғанда, тышҡы ҡиәфәткә һәм ғәмәлдәргә ҡарарға тейешлеген һәм әлеге мәсьәләнең ни хәтле әһәмиәтле икәнен күрһәтә. Кешенең тышҡы яғына ҡарап хөкөм сығарыу ихтималы булып та, ләкин асылына төшөнөү мөмкин түгел эске халәткә таяныу вәкәләте бирелһә, кешеләр, шәхси фекерҙәренән сығып ҡына, күп-күп хаҡһыҙлыҡтарға тартылыуҙан ҡотолоп ҡала алмаҫ ине.

Тышҡы яҡҡа нигеҙләнеп хөкөм йөрөтөү рөхсәт бирелеүҙә, башҡа бер сәбәп боҙоҡ ғәмәлле бер төркөм заттарҙың: «Һин минең йөрәгемә ҡара!»

299. Ваҡиғаны бәйән ҡылған сәхәбә былай тип һөйләй: «Беҙ үҙ арабыҙҙа: «Рәсүлуллаһ уның өсөн истиғфар һораны, ләкин ҡылған эшенең яманлығын белдереү һәм кешеләрҙең бер-береһен үлтереүенә кәртә ҡуйыу өсөн, ана шундай мөнәсәбәт күрһәтте», – тип һөйләшә инек» (Әхмәт, V, 112; Ибне Һишам, IV, 304).

кеүек һүҙҙәр менән аҡланырға маташыуҙарына юлды яба. Хәҙерге заманда бик йыш ҡулланылған был ысулды ислам юғарыла билдәләнгән хөкөм һәм уның хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тарафынан ҡулланышы менән юҡҡа сығара. Тышҡы яҡҡа нигеҙләнеп хөкөм йөрөтөү монафиҡтарҙың күпмелер ваҡыт ҡылып килгән күркәм, дөрөҫ ғәмәлдәр менән үҙҙәренең ысын йөҙҙәрен йәшереп, яуызлыҡтарҙы тағы ла үтемлерәк рәүештә башҡарыуҙарына мөмкинлек биргән зәғифлек кеүек күренһә лә, ғәҙеллекте уй-фекерҙәргә генә нигеҙләнеп билдәләү кеүек бик ҙур ҡайғы-хәсрәттәр килтереп сығарырҙай осраҡтарға кәртә ҡуя.

### Мәккәгә вәли һәм мөғәллим билдәләү

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккәнән сығып китер алдынан, ҡала менән идара итеү һәм мосолмандарҙың хаж менән бәйле эштәрен тәртипкә һалыу, көйләү өсөн, Ғаттаб ибне Әсидте вәли итеп билдәләй. Быға са Хөнәйен һуғышына сығып киткәндә лә, уны Мәккәлә вәли вазифаһында ҡалдырған була (Ибне Һишам, IV, 69, 148). Ғаттаб разыйаллаһу ғәнһүгә ул ваҡыттарҙа әле егерме йәш тирәһе генә була.[300] Юғиһә, унда өлкәнерәк һәм фазиләтле кешеләр ҙә юҡ түгел. Әлеге ваҡиғанан аңлашылғанса, урын менән дәрәжә лайыҡлы һәм һәләтле, йәғни игелекле, белемле, фазиләтле, харамдан һәм шикле нәмәнән тыйылған, тәҡүә заттарға бирелергә тейеш.

Шул уҡ рәүештә исламдың быуындан-быуынға тапшырып, бер һидәйәт осҡоно хәлендә хәҙерге көнгә ҡәҙәр ирешеүендә иң ҙур вазифаны башҡарған сәхәбәләрҙең дә күпселеге Ғаттаб ибне Әсид кеүек фазиләткә эйә йәштәр булғанлығы күренә. Мәҫәлән, Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм баҡыйлыҡҡа күскәндә, иң күп хәҙис риүәйәт ҡылған сәхәбәләрҙән Ғабдуллаһ ибн Ғүмәр һәм Ибн Ғәббәс ун өс йәштәрҙә, хәҙрәти Әнәс, Ибн Мәсғуд һәм, айырым алғанда, ҡатын-ҡыҙҙарға исламды өйрәтеүҙә бик мөһим вазифа башҡарған хәҙрәти Ғәйшә ун һигеҙ йәштәрҙә була. Шулай уҡ Ғәҡәбә антында ҡатнашҡан сәхәбәләрҙең күпселеген йәштәр тәшкил итә. Исламды тәблиғ ҡылыу хаҡына Бири Мәғунәлә шәһит киткән Ҡөрьән мөғәллимдәренең күбеһе лә – йәштәр. Был хәл исламдың киләсәгендә әһәмиәтле хеҙмәттәр башҡарасаҡ йәштәргә иғтибар бирергә һәм уларҙың тәрбиәһе мәсьәләһенә бик диҡҡәтле ҡарарға кәрәклеген иҫбатлаған мөһим бер документ булып тора.

❁

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм яңы ғына мосолманлыҡҡа килгән заттарҙың, ваҡытты оҙаҡҡа һуҙмайынса, Ҡөрьән һәм сөннәтте өйрәнеүҙәрен теләй. Шул сәбәпле Уның янына килеүсе кешеләрҙе, бер нисә көнгә генә булһа ла, сәхәбәләре янында, хәҙерге заманса лагерҙарҙағы кеүек, бик интенсив, тиҙәйтелгән рәүештә уҡытыуға ҡалдыра. Таң атып, Уның

300. Ибне Әсир, «Үсдүл-Габә», III, 556.

янына килгәс, уҡығандарының нәтижәһен тикшерә, әгәр ҡәнәғәтләнерлек тип һанамаһа, уларҙы башҡа сәхәбәләренә ебәреп, исламды яҡшылап өйрәтергә ҡуша.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, әлеге иғтибарлылығының бер сағылышы сифатында, мәккәлеләргә фиҡһте (дин хөкөмдәрен) һәм Ҡөрьәни-Кәримде өйрәтһендәр өсөн, Мөғәҙ ибн Йәбәл[301] һәм Әбү Муса әл-Әшғари[302] разыйаллаһу ғәнһүмәне был ҡалала ҡалдыра. Был вәзғиәт тә ислами тәрбиәгә һәм уҡыу-уҡытыуға ни ҡәҙәр әһәмиәт бирергә тейешлегебеҙҙе күрһәтә торған ғәйәт асыҡ дәлил булып тора.

301. Ибне Һишам, IV, 148-149; Хаким, III, 303/5181.

302. Ваҡыди, III, 959.

# ҺИЖРӘТТЕҢ ТУҒЫҘЫНСЫ ЙЫЛЫ

### Үткен тел ҡылысҡа тиң

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм зәкәт бирергә теләмәгән Бәни Тәмим ҡәбиләһенә бер төркөм һуғышсы менән хәҙрәти Уйәйнәне ебәрә. Уйәйнә разыйаллаһу ғәнһү Тәмим ҡәбиләһен көтмәгәндә һөжүм итеп еңә лә, шаҡтай ғәнимәт һәм әсирҙәр менән Мәҙинәи Мөнәүүәрәгә ҡайта.[303]

Был хәлдән һуң Тәмимдең аҡһөйәктәре, әсирҙәрен азат итеү өсөн, ҙур делегация ойоштороп, үҙҙәре менән шағирҙарҙы ла эйәртеп, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына килә. Мәсеттә Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде көткәндә, сабырһыҙланып: «Сыҡ инде беҙҙең янға!» – тип хөрмәтһеҙлек һәм әҙәпһеҙлек күрһәтәләр. Уларҙың шулай ҡысҡырып-баҡырып саҡырыуына Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең кәйефе китә. Шунан һуң иңдерелгән аятта былай тиелә:

إِنَّ الَّذِينَ يُنَادُونَكَ مِنْ وَرَاءِ الْحُجُرَاتِ أَكْثَرُهُمْ لَا يَعْقِلُونَ

«(Рәсүлем!) **Һиңә бүлмәләрҙең артҡы яғынан ҡысҡырыусыларҙың күбеһе –аҡыл кермәҫ бәндәләр»** («әл-Хужурат», 4) (Ибне Һишам, IV, 223, 233).

Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ, өйлә намаҙы ҡылдырғас, мәсет ишек алдына сығып ултыра. Бәни Тәмим делегацияһы: «Һинең менән шиғырҙар әйтешәйек, фәхриәләр (үҙ-үҙеңде маҡтау шиғырҙары) уҡыйыҡ, тип, шағирыбыҙҙы һәм хөтбәсебеҙҙе алып килдек!» – ти. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мин шиғыр һөйләү өсөн ебәрелмәнем. Фәхриә уҡыу тураһында ла әмер алманым. Әммә һеҙ, әйҙә, әйтеп ҡарағыҙ!»* – тип белдерә (Ибне Әсир, «*Үсдүл-Габә*», I, 128).

Бәни Тәмим вәкилдәренән бер кеше тороп баҫа ла матур һүҙле бер хөтбә уҡый. Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләрҙән Сабит ибн Кайс разыйаллаһу ғәнһүгә ым ҡаҡҡас, ул тороп баҫа ла, Йәнәбел-Хаҡтың бөйөклөгө, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең нәбилеге тураһында мөкәммәл бер хөтбә әйтеп, тәмимленән өҫтөн сыға.

303. Ибне Сәғд, II, 160.

Артабан Тәмим улдарынан Зибриҡан ибн Бәдр уҡыған шиғырға яуап итеп, атаҡлы шағир Хассан ибн Сабит раҙыйаллаһу ғәнһү һәм ислам диненең шәрәфлелеге, шаны-даны тураһында сәсәндәрсә импровизация менән ғәйәт тәьҫирле һәм үтемле бер ҡасидә уҡый.

Сәхәбәләрҙең был еңеүе Ҡөрьәни-Кәрим кеүек иҫ киткес тел менән иңгән илаһи Китапҡа бар күңелдәрен биреүенән, шулай уҡ «Жәуамиғуль-кәлим – әҙ һүҙ менән күп мәғәнәләр белдереүсе» зат, бөтә кешеләр араһында иң матур һәм оҫта һөйләүсе булған Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тарафынан тәрбиәләнеүенән килә. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бәндәләргә күңел тыныслығы иңдереү һәләтен шағир бик күркәм тасуирлай:

*Уны бер миҙгелгә күреүселәр – гөл булыр,*

*Һүҙенә шаһит булыусылар – былбыл булыр...*

Был хәҡиҡәтте аңлаған тәмимле шағир Аҡра ибн Хабис: «Был заттың хатибы беҙҙең хатибыбыҙҙан, шағиры ла беҙҙең шағирыбыҙҙан өҫтөн. Уларҙың тауыштары беҙҙең тауыштарыбыҙҙан юғарыраҡ!..» – тип, дуҫтары менән бергә иман килтерәләр. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм делегация ағзаларына мул-мул бүләктәр бирә (Ибне Һишам, IV, 232).

Ул ваҡытта Аллаһ Рәсүле ҡаршында хәҙрәти Әбү Бәкер менән хәҙрәти Ғүмәр үҙ-ара кескенә бәхәс сығара. Шул саҡта түбәндәге аяти кәримәләр иңә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تُقَدِّمُوا بَيْنَ يَدَيِ اللهِ وَرَسُولِهِ وَاتَّقُوا اللهَ إِنَّ اللهَ سَمِيعٌ عَلِيمٌ يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَرْفَعُوا أَصْوَاتَكُمْ فَوْقَ صَوْتِ النَّبِيِّ وَلَا تَجْهَرُوا لَهُ بِالْقَوْلِ كَجَهْرِ بَعْضِكُمْ لِبَعْضٍ أَنْ تَحْبَطَ أَعْمَالُكُمْ وَأَنْتُمْ لَا تَشْعُرُونَ

**«Эй иман эйәләре! Аллаһ һәм Уның Рәсүленә ҡаршы сыҡмағыҙ! Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Дөрөҫлөктә, Аллаһ – ишетеүсе, белеүсе. Эй иман эйәләре! Тауыштарығыҙҙы Пәйғәмбәр тауышынан арттырмағыҙ. Бер-берегеҙгә ҡысҡырған кеүек, Пәйғәмбәргә көслө тауыш менән ҡысҡырмағыҙ; юғиһә һеҙ үҙегеҙ ҙә аңламаҫтан, ғәмәлдәрегеҙ бушҡа китеп барыр»** («әл-Хужурат», 1-2).

Бынан һуң хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм барында һөйләшкән ваҡытта, тауышын шул ҡәҙәр баҫып ҡына һөйләшә башлай ки, Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм уның һүҙен ишетә алмайса, ни әйткәнен үҙенән ҡабатлап һорарға мәжбүр була.[304]

304. Бохари, «Мағази», 68.

Башҡа сәхәбәләр ҙә Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙгә ҡарата олуғ хөрмәт һәм илтифат тоя. Уны уңайһыҙламаҫ, борсомаҫ өсөн, улар бөтә көстәрен сарыф итә. Әйтәйек, хөр тауышлы бер сәхәбә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе уңайһыҙланым, тип ҡурҡып, бик борсоуға төшә һәм өйөнә инеп бикләнә, бары Аллаһ Рәсүле йыуатҡас ҡына тыныслана.[305]

Әсхәбе кирам Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе менән табынға ултырғанда, бер ҡасан да Унан алда ризыҡҡа үрелмәйҙәр.[306] Бүлмәһенең ишеген тырнаҡ осо менән генә шаҡый торған булалар. Уны уңайһыҙларлыҡ һәр төрлө эш-ғәмәлдән ҡәтғи тыйылалар.[307] Уның тураһында һөйләгәндә, һүҙҙәрен бик иғтибар менән, үлсәп кенә әйтәләр, Аллаһ Рәсүлен ай-ҡояшҡа оҡшаталар[308] Уның хәҙистәрен риүәйәт ҡылғанда, бик тәфсилле, ентекле эш йөрөтәләр, хәҙисте иҫкә алғанда, уларҙың төҫө ҡаса, йөҙҙәренән тир аға, күҙҙәре йәш менән тула, муйын тамырҙары ҡабарып сыға.[309] Мәсет тирәһендә булған өйҙәрҙең берәйһендә ҡаҙыҡ йәки ҡаҙаҡ ҡаҡҡанды ишетһәләр: «Рәсүлүллаһты борсомағыҙ!» – тип, шундуҡ хәбәр ебәрәләр. Ҡайһы берҙәре өй ишектәрен Мәҙинә ситенә сыға торған итеп эшләтәләр.[310]

❁

Кәғб ибн Зөһәйер ҙә баштағы мәлдә исламға ҡаршы һуғыш асҡан шағирҙарҙан була. Ул яҙған әсе, төртмәле шиғырҙар арҡаһында, уны ҡайҙа осраһа, шунда үлтереү рөхсәт бирелеп, ҡанын түгеү хәләл тип ҡарар ҡылына. Ләкин мосолман бер туғаны Бужәйр уға нәсихәт рәүешендә бер шиғыр яҙып, былай дауам иткән осраҡта, яҙмышының аяныс тамамланасағын белдерә. Кәғб бик ҙур шик-борсоу тойоп, әсхәбе кирамдан берәү менән бергә хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хозурына килә һәм, исемен дә әйтеп тормайынса, ант килтерә. Уның ҡаршыһына теҙләнеп: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Кәғб ибн Зөһәйер тәүбә итеп мосолман булырға, именлеккә ирешеү өсөн олуғ хозурығыҙға килергә теләй, ҡабул итерһегеҙме?» – тип һорай. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: *«Эйе!»* – тигән яуап яңғырағас, һөйөнөп: «Кәғб – мин ул, йә Рәсүлүллаһ!..» – ти (Ибне Һишам, IV, 152; Хаким, III, 675/6480; Хәйсәми, IX, 393).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең шулай ғәфү итеүенә рәхмәтен белдереп, Пәйғәмбәр ҡаршыһына килгәнсе ижад иткән «Банәт Сүад» ҡасидәһен уҡый башлай. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уның был ғәмәленә ҡәнәғәтлек белдереп, мөбәрәк арҡаһындағы сапанды (Хирҡә-и Шәриф) сисеп, Кәғб раҙыйаллаһу ғәнһүгә кейҙерә. Шул рәүешле

305. Бохари, «Тәфсир», 49/1.
306. Әбү Дауыт, «Әтгыймә», 15/3766.
307. Бохари, «Әдәбүл-Мүфрәд», 316 б.; Хәйсәми, VIII, 40.
308. Мөслим, «Фәдаил», 109.
309. Ибне Сәғд, III, 156; Ибне Мажә, «Муҡаддимә», 38; Дарими, «Муҡаддимә», 28.
310. Касталлани, II, 386.

әлеге ҡасидә, ғәрәп телендә сапан, плащ мәғәнәһен белдерә торған «бөрҙә (бүрдә)» һүҙе менән иҫкә алынып, «Ҡасидәи-Бөрҙә» тип йөрөтөлә.

Кәғбкә бүләк ителгән Хирҡә-и Шәриф, уның вафатынан һуң, хәҙрәти Мүғәүиә тарафынан һатып алына. Бер хөкөмдарҙан икенсеһенә күсә-күсә, хәҙерге көнгә килеп ирешкән һәм Топкапы һарайында һаҡлана торған Хирҡә-и Сәғәҙәт ана шул сапан инде ул.

«Ҡасидәи-Бөрҙә» исеме менән танылған бер ҡасидә тағын бар, уныһы иһә Имам Бусири хәҙрәттәренеке.[311] Ләкин икенсе ҡасидәнең дөрөҫ исеме башҡа – «Ҡасидәи-Бөрғә». «Бөрғә» – ауырыуҙың шифа табыуы тигән һүҙ һәм Имам Бусириҙең шул ҡасидә бәрәкәте менән паралич сиренән ҡотолоуы уңайынан әсәр шундай исем ала. Ваҡиға былай була:

Имам Бусири хәҙрәттәренең ярты кәүҙәһен паралич һуға. Ул иһә «Ҡасидәи-Бөрғә»не яҙып, Йәнәбел-Хаҡтан шифа һорай. Ҡасидәне яҙып бөтөргән төндә төшөндә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде күрә һәм әлеге маҡтау шиғыры – нәғтиҙе Уға уҡый. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә шиғырҙан ҡәнәғәт ҡалып, мөбәрәк ҡулдары менән Имам Бусириҙең параличланған урындарын һыйпай. Уянғас, Имам Бусири, сиренең әҫәре лә ҡалмағанын аңлап, Йәнәбел-Хаҡҡа шөкөр итә. Иртән шатлыҡ һәм рәхмәт хистәре менән мәсеткә барғанда, асыш эйәһе, олуғ вәли Шәйех Әбү әр-Рәжа хәҙрәттәрен осрата. Шәйех: «Йә имам! Ғаләмдәр ғорурлығын маҡтаған ҡасидәне уҡыясаҡһыңмы?» – ти.

Имам Бусири: «Минең бер нисә нәғтием бар. Ҡайһыһы тураһында һорайһың?» – тигәс, Шәйех Әбү әр-Рәжа: «Был төндә Рәсүлүллаһҡа уҡығанды һорайым. Сөнки һин уны уҡығанда, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бик ҡәнәғәт булыуын күрҙем», – ти.

Имам Бусири ғәжәпкә ҡалып, һорап ҡуя: «Был ҡасидә һәм күргән төшөм тураһында берәүгә лә һөйләмәгән килеш, һеҙ быны ҡаян беләһегеҙ?..»

Шәйех Әбү әр-Рәжа яуабында: «Йә имам! Мин дә шунда инем бит!..» – ти һәм ҡасидәнең тәүге ике бәйәтен уҡып күрһәтә:

*Сәләм*[312] *ярандарын иҫкә алдың дамы,*
*Күҙҙәрҙән аҡҡан йәшкә бутайһыңмы әллә?..*

*«Эй күңел, Сәләмлеләрҙе иҫкә алған өсөн, күҙеңдән ҡанлы йәш ағыҙаһыңмы?»*

311. Мухамәд ибне Сәғыйд әл-Бусири Мысыр кешеһе була, XIII быуатта мәмлүктәр осоронда йәшәй (608/1211-694/1296) (Х. Ибраһим Шәнәр, «Ҡасидәи Бөрҙә», «Ҡасидәи Бөрғә» һәм «Һыу ҡасидәһе», 32, 60 б.).

312. Сәләм – Мәҙинәи Мөнәүүәрәлә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ваҡыт-ваҡыт сәхәбәләре менән һөйләшеп тора торған ағаслы бер үҙәнлек атамаһы.

Риүәйәткә күрә, был ҡасидәне хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршында уҡығанда, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе, күңеленә хуш килеүе арҡаһында, бер ағас япраҡтарының һалмаҡ ҡына елберҙәүе кеүек мөбәрәк кәүҙәһе менән сайҡалып тора һәм йөҙөндә йылмайыу балҡый. Ана шул үҙенсәлек сәбәпле был нәғти, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең рухи ярҙамы тиһен өсөн, ауырыуҙарға шифа биреү маҡсатында уҡыла башлай һәм бындай ғәҙәт хәҙер ҙә дауам итә, ауырыу кеше был мәҙхиә менән, Аллаһ Рәсүленә яҡынайып, Йәнәбел-Хаҡта һыйыныу эҙләй.[313]

**Гонаһлының хәбәрен тикшер!**

Һижрәттең туғыҙынсы йылда Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мөстәлиҡ улдарына зәкәт йыйыу өсөн ебәргән Вәлит ибн Ғүҡбә, үҙен ҡаршылар өсөн тупланған бихисап кешеләрҙе күргәс, ҡурҡыуға төшә, яһилиәт осоронда улар менән ике арала килеп сыҡҡан бер ыҙғыш арҡаһында уны үлтерерҙәр, тип уйлай. Кире боролоп, Мәҙинәгә килә һәм вәзғиәтте хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ысынбарлыҡтан тайпылып, йәғни Мөстәлиҡ улдарына яла яғып, бәйән ҡыла: «Эй Аллаһтың Рәсүле! Улар диндәренән йөҙ сөйөргән. Зәкәт бирмәнеләр. Әҙҙән генә ҡалды, мине лә үлтерәсәктәр ине», – ти ул.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Мөстәлиҡ улдары өҫтөнә ебәреү өсөн, хәрби отряд әҙерләй. Бәни Мөстәлиҡ был хаҡта ишеткәс, Вәлитте ҡаршы алыу өсөн йыйылған делегация ашығыс рәүештә Мәҙинәгә килә. Унда үҙҙәренә һөжүмгә ебәрелергә тейешле ислам ғәскәре менән осрашалар. Эштең асылы асыҡлана. Был ваҡытта Йәнәбел-Хаҡ бөтә мөьминдәрҙе, ниндәй генә мәсьәлә булһа ла, тикшермәйенсә хөкөм сығарыуҙан киҫәтеү маҡсаты менән вәхи ебәрә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِنْ جَاءَكُمْ فَاسِقٌ بِنَبَإٍ فَتَبَيَّنُوا أَنْ تُصِيبُوا قَوْمًا بِجَهَالَةٍ
فَتُصْبِحُوا عَلَى مَا فَعَلْتُمْ نَادِمِينَ وَاعْلَمُوا أَنَّ فِيكُمْ رَسُولَ اللّٰهِ لَوْ يُطِيعُكُمْ
فِى كَثِيرٍ مِنَ الْأَمْرِ لَعَنِتُّمْ وَلَكِنَّ اللّٰهَ حَبَّبَ إِلَيْكُمُ الْإِيمَانَ وَزَيَّنَهُ فِى قُلُوبِكُمْ
وَكَرَّهَ إِلَيْكُمُ الْكُفْرَ وَالْفُسُوقَ وَالْعِصْيَانَ أُولَئِكَ هُمُ الرَّاشِدُونَ

**«Эй иман эйәләре! Әгәр бер фасиҡ зат һеҙгә берәй төрлө хәбәр килтерһә, уның дөрөҫлөгөн тикшерегеҙ! Юғиһә, белмәйенсә, бер йәмәғәткә насарлыҡ эшләрһегеҙ һәм һуңынан үҙегеҙ ҡылғандарға үкенерһегеҙ. Һәм белегеҙ: арағыҙҙа Аллаһтың Рәсүле бар. Әгәр Ул бик күп эштә һеҙгә**

313. Илхан Армутчуоғлу, «Ҡасидәи Бөрҙә», Конья, 1983, 8-11 б.

**эйәрһә, ауыр хәлгә төшөр инегеҙ. Ләкин Аллаһ һеҙгә иманды һөйҙөрҙө һәм уны һеҙҙең күңелдәрегеҙҙә биҙәне, матурланы. Көфөрҙө, намыҫһыҙлыҡты һәм ғисъянды иһә һеҙгә бысратып, ерәнгес итеп күрһәтте. Дөрөҫ юлда булыусылар – ана шуларҙыр»** («әл-Хужурат», 6-7).

Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Әй Ғәббәд! Улар менән бергә кит! Зәкәттәрен ал! Малдарының иң шәптәрен генә һайлап алыуҙан тыйыл!»* – тип бойора. Ғәббәд ибн Бишер Мөстәлиҡ улдары янында ун көн йәшәй. Уларға Ҡөрьәни-Кәрим һабағын уҡыта, ислам өйрәтә (Әхмәт, IV, 279; Ибне Һишам, III, 340-341; Ибне Сәғд, II, 161).

Сығанағы фасиҡ, гонаһлы зат булған ялған хәбәр ҡай сак телдән-телгә күсә-күсә, ахырҙа, гонаһһыҙлығы, тоғролоғо раҫланған, ләкин бер аҙ бер ҡатлы бәндәгә килеп етер һәм ул иһә был хәбәрҙе яҡшы ниәт менән һеҙгә килтереп еткерә алыр. Был осраҡта шуны белеү зарур: һөйләүсе намыҫһыҙ зат булмаһа ла, нигеҙһеҙ имеш-мимешкә таянған бер хәбәргә ышанып, уны таратыу өсөн дә яуаплылыҡ ҡаралған. Сөнки хәбәр ысын булып, унан бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ килеп сыҡмаһа ла, башҡа осраҡта, йәғни ялған хәбәр ваҡытында ҡол хаҡына ҡул һуҙыу һәм ғәйбәт кеүек ҙур гонаһтарға тартылыу ҡурҡынысы бар. Шул сәбәпле бары кеше һүҙенә генә таянған һәм имеш-мимеш рәүешендә генә килеп ирешкән хәбәрҙәргә ҡарата һәр ваҡыт һаҡ ҡарау кәрәк.

### ТӘБҮК СӘФӘРЕ – олуғ иман һынауы

(Һижри 9-сы йылдың рәжәбе / 630 йылдың октябрь-ноябрь айҙары)

Тәбүк – Мәҙинә менән Дамаск араһындағы юлдың нәҡ уртаһында урынлашҡан бер ҡала исеме. Был ҡалаға хәрби поход Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шәхсән ҡатнашҡан һуңғы сәфәр була. Әлеге поход Мөьтә һуғышының бер дауамы кеүек. Мөьтә һуғышы ҡалдырған тәьҫир сәбәпле, Византия императоры, ваҡыттар уҙып мосолмандар тағы ла ҡеүәтләнгәнсе, бөтә Ғәрәбстанды яулап алырға ниәтләй. Үҙ маҡсаттарында христиан динендәге ғәрәптәрҙе файҙаланырға теләй. Был мәсьәләлә ул ҡулай, тип уйлаған ғәссәнизәр ҙә быңдай күтәрелеш өсөн күптән әҙер тора. Шундай вәзғиәт урынлашҡас, Мәҙинәгә килеп йөрөгән сауҙа каруандары дошмандың әҙерлектәре тураһында мосолмандарға хәбәр итеп, бик яҡын арала улар йәшәгән ҡалаларҙың һөжүмгә тотоласағын еткерәләр.

Шунан һуң Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм дөйөм мобилизация иғлан итә. Был ваҡытҡа ҡәҙәр эшләнгән ғәскәри операциялар сер итеп һаҡлана, ул хаҡта дошмандың белмәй тороуы хуплана. Ләкин Тәбүк сәфәрендә вәзғиәт айырыла, сөнки йәйҙең иң эҫе көндәре тора. Дошман ҡеүәтле, бараһы ер шаҡтай йыраҡ. Өҫтәүенә, ул йылды Мәҙинәгә килгән ҡытлыҡ арҡаһында мосолмандар иҡтисади яҡтан да ауыр хәлдә була.[314] Был шарттарҙың барыһын да мөмкинлек

314. Ибне Сәғд, II, 165; Бохари, «Тәфсир», 66/2.

итеп ҡабул иткән монафиҡтар, йәнә әүәлгесә фетнә ҡуҙғатып, мөьминдәрҙең рухи халәттәрен, үҙ-үҙҙәренә ышанысын боҙорға керешә. Монафиҡтар башлығы Ғабдуллаһ ибн Үбәй: «Мөхәммәт, Рим дәүләтен бала уйынсығы, тип уйлаймы әллә? Мин сәхәбәләре менән бергә Уның әсир төшкәнен үҙ күҙҙәрем менән күреп торам кеүек!» – тип белдерә. Монафиҡтарҙың бер төркөмө иһә: «Быуындай эҫе саҡта яуға сығалармыни?» – тип һөйләнеп йөрөй башлай. Быларға яуап рәүешендә иңгән аяти кәримәлә:

فَرِحَ الْمُخَلَّفُونَ بِمَقْعَدِهِمْ خِلَافَ رَسُولِ اللّٰهِ وَكَرِهُوا
أَنْ يُجَاهِدُوا بِأَمْوَالِهِمْ وَأَنْفُسِهِمْ فِى سَبِيلِ اللّٰهِ وَقَالُوا لَا تَنْفِرُوا
فِى الْحَرِّ قُلْ نَارُ جَهَنَّمَ أَشَدُّ حَرًّا لَّوْ كَانُوا يَفْقَهُونَ

**«Аллаһ Рәсүленә ҡаршы тороу, киреләнеү өсөн бармай ҡалыусылар** (яуға сыҡмай) **ҡалала булыуҙарына һөйөндөләр; малдары, йәндәре менән Аллаһ юлында йыһат ҡылыуҙан тартынып, уны хурлап: «Был эҫелә яуға сыҡмағыҙ!» – тинеләр. Әйт: «Йәһәннәм уты эҫерәктер!» Аңлаһалар ине улар!» –** тиелә («әт-Тәүбә», 81).

Бәҙәүиҙәрҙең ҡайһы берҙәре, яуҙа ҡатнашмаҫ өсөн, төрлө уйҙырма һылтауҙар менән хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән бармаҫҡа рөхсәт ала. Был хаҡта аяти кәримә былай тип хәбәр бирә:

وَجَاءَ الْمُعَذِّرُونَ مِنَ الْأَعْرَابِ لِيُؤْذَنَ لَهُمْ وَقَعَدَ الَّذِينَ كَذَبُوا
اللّٰهَ وَرَسُولَهُ سَيُصِيبُ الَّذِينَ كَفَرُوا مِنْهُمْ عَذَابٌ أَلِيمٌ

**«Бәҙәүиҙәрҙән** (сәбәп-һылтауҙары булғанлығы тураһында) **әйтеүселәр үҙҙәренә рөхсәт бирелһен, тип килделәр. Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә ялған һөйләүселәр ултырып ҡалды. Улар араһында көфөрлөккә төшөүселәргә интектергес ғазап булыр»** («әт-Тәүбә», 90).[315]

Шунан һуң Ҡөрьәни-Кәрим, мөьминдәр менән монафиҡтар бер-береһенән айырылып торһон өсөн, аныҡ билдәләр күрһәтә:

لَوْ كَانَ عَرَضًا قَرِيبًا وَسَفَرًا قَاصِدًا لَاتَّبَعُوكَ وَلَكِنْ بَعُدَتْ عَلَيْهِمُ الشُّقَّةُ وَسَيَحْلِفُونَ
بِاللّٰهِ لَوِ اسْتَطَعْنَا لَخَرَجْنَا مَعَكُمْ يُهْلِكُونَ أَنْفُسَهُمْ وَاللّٰهُ يَعْلَمُ إِنَّهُمْ لَكَاذِبُونَ

315. Ваҡыди, III, 993-996; Ибне Сәғд, II, 165.

«(Эй Рәсүлем!) **Әгәр яҡын донъя мәнфәғәте һәм еңел бер сәфәр булһа,** (ул монафиҡтар), **һис шикһеҙ, Һиңә буйһоноп, артыңдан эйәрерҙәр ине. Фәҡәт мәшәҡәтле, ситен юл уларға йыраҡ булып тойолдо. Гәрсә улар: «Көсөбөҙ етһә, һис шикһеҙ, һеҙҙең менән бергә барыр инек!» – тип, үҙҙәрен һәләкәткә һалып, Аллаһ менән ант итәсәк. Ысынлыҡта, Аллаһ уларҙың ялғансы икәнлеген ап-асыҡ беләә»** («әт-Тәүбә», 42).

لَا يَسْتَأْذِنُكَ الَّذِينَ يُؤْمِنُونَ بِاللّٰهِ وَالْيَوْمِ الْآخِرِ أَنْ يُجَاهِدُوا بِأَمْوَالِهِمْ وَأَنْفُسِهِمْ وَاللّٰهُ عَلِيمٌ بِالْمُتَّقِينَ إِنَّمَا يَسْتَأْذِنُكَ الَّذِينَ لَا يُؤْمِنُونَ بِاللّٰهِ وَالْيَوْمِ الْآخِرِ وَارْتَابَتْ قُلُوبُهُمْ فَهُمْ فِى رَيْبِهِمْ يَتَرَدَّدُونَ

«(Эй Рәсүлем!) **Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә иман килтереүселәр иһә малдарын һәм йәндәрен биреп һуғышыуҙан** (ҡасып ҡалыу яйы өсөн) **Һинән рөхсәт һорамаҫтар. Аллаһ тәҡүәлек эйәләрен бик яҡшы белә. Ләкин Аллаһҡа һәм әхирәт көнөнә ышанмайынса, йөрәктәре шик-шөбһәгә бирелгәндәр,** (шул) **шөбһәләрендә аҙашыусылар, буталыусылар Һинән рөхсәт һорап йөрөрҙәр»** («әт-Тәүбә», 44-45).

Монафиҡтар яу сығыу өсөн һис ниндәй хәстәрлек ҡылмай. Был хәл дә уларҙың һуғышҡа барыу ниәте юҡлығын ап-асыҡ күрһәтә. Йәнәбел-Хаҡ былай ти:

وَلَوْ أَرَادُوا الْخُرُوجَ لَأَعَدُّوا لَهُ عُدَّةً

«(Рәсүлем!) **Әгәр улар** (Һинең менән бергә һуғышҡа) **сығырға теләһәләр, әлбиттә, быға әҙерләнгән булырҙар ине...»** («әт-Тәүбә», 46).

Монафиҡтарҙың шулай көпә-көндөҙ ҡаршы сығып, ғәскәргә ҡушылырға теләмәүҙәре, асылда, бер илаһи рәхмәт була. Сөнки Ғабдуллаһ ибн Үбәй әлеге яу походында ла Өхөд һуғышында ҡылғандарын ҡабатлап, яуҙан боролоп ҡайта. Шул уңайҙан Йәнәбел-Хаҡ былай ти:

وَلَكِنْ كَرِهَ اللّٰهُ انْبِعَاثَهُمْ فَثَبَّطَهُمْ وَقِيلَ اقْعُدُوا مَعَ الْقَاعِدِينَ لَوْ خَرَجُوا فِيكُمْ مَا زَادُوكُمْ إِلَّا خَبَالًا وَلَأَوْضَعُوا خِلَالَكُمْ يَبْغُونَكُمُ الْفِتْنَةَ وَفِيكُمْ سَمَّاعُونَ لَهُمْ وَاللّٰهُ عَلِيمٌ بِالظَّالِمِينَ

«**...Аллаһ уларҙың ғәмәлдәренән хушланманы һәм уларҙы кире борҙо. Уларға: «Өйҙә ултырыусылар** (ҡатындар һәм балалар менән) **бергә**

**ҡалығыҙ!» – тиелде. Әгәр һеҙҙең менән** (улар ҙа һуғышҡа) **сыҡһалар, һеҙгә арағыҙҙа боҙоҡлоҡ һалыуҙан башҡа һис бер файҙалары булмаç һәм һис шикһеҙ фетнә ҡуптарырға теләп йөрөрҙәр ине. Арағыҙҙа уларға шаҡтай ҡолаҡ һалыусылар ҙа бар. Аллаһ залимдарҙы бик яҡшы белә»** («әт-Тәүбә», 46-47).

Инде хәҙер үк араларҙы боҙорға маташҡан монафиҡтар һуғыш ваҡытында ысындан да шул хәтле зыян һала ки, фетнә, ялған, яла һәм ҡурҡаҡлыҡтары менән бөтә ислам ғәскәренең тыныслығын бөтөрәләр һәм уларҙың һәр береһе төҙәлмәç сиҡан кеүек мөьминдәргә ауырлыҡ, ғазап килтерә. Шуға күрә лә Йәнәбел-Хаҡтың рәхмәте ирешеп, ул сәфәрҙәге бик күп ҡыйынлыҡтарҙың күҙҙәренә ҡурҡыу һалыуы һөҙөмтәһендә, монафиҡтарҙың был яуға ҡатнашыуына мөмкинлек бирелмәй. Сәхәбәләр уларҙың фетнәһенән ҡотола.

Монафиҡтар, берәй төрлө һылтау табып, һуғышҡа бармаçҡа рөхсәт һорай. Әлеге һылтау табыу мәсьәләһендә шул дәрәжәлә арттырып ебәрәләр ки, ҡайһы берҙәре ул яуҙа Византия ҡыҙҙарын күреп фетнәгә бирелергә мөмкинлектәре тураһында әйтеүҙән дә тартынмай. Шул рәүешле гонаһһыҙ бәндә булып күренеп, монафиҡлыҡтарын йәшерергә маташалар. Ләкин Аллаһ Тәғәлә уларҙың был ялғанын асып һала:

وَمِنْهُمْ مَّنْ يَقُولُ ائْذَنْ لِّى وَلَا تَفْتِنِّى أَلَا فِى الْفِتْنَةِ سَقَطُوا وَإِنَّ جَهَنَّمَ لَمُحِيطَةٌ بِالْكَافِرِينَ

**«Уларҙан шундайы ла бар: «Миңә ҡалырға рөхсәт бир, мине фетнәгә төшөрмә!» – тип әйтер. Беләһегеҙ бит, улар инде фетнәгә сумған. Йәһәннәм кафырҙарҙы мотлаҡ урап аласаҡ»** («әт-Тәүбә», 49).

Бер яҡтан монафиҡтарҙы ауыр ғазабы менән киçәткән Йәнәбел-Хаҡ, башҡа яҡтан уларҙың йоғонтоһона эләгеп, бер аҙ йомшаған, хаҡ юлдан тайпылған мөьминдәргә лә һаҡ булырға өндәй:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا مَا لَكُمْ إِذَا قِيلَ لَكُمُ انْفِرُوا فِى سَبِيلِ اللهِ اثَّاقَلْتُمْ إِلَى الْأَرْضِ أَرَضِيتُمْ بِالْحَيَاةِ الدُّنْيَا مِنَ الْآخِرَةِ فَمَا مَتَاعُ الْحَيَاةِ الدُّنْيَا فِى الْآخِرَةِ إِلَّا قَلِيلٌ إِلَّا تَنْفِرُوا يُعَذِّبْكُمْ عَذَابًا أَلِيمًا وَيَسْتَبْدِلْ قَوْمًا غَيْرَكُمْ وَلَا تَضُرُّوهُ شَيْئًا وَاللهُ عَلَى كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرٌ

**«Эй иман эйәләре! Һеҙгә ни булды: «Аллаһ юлында һуғышҡа сығығыҙ!» – тигән ваҡытта, бер урында ҡатып ҡалаһығыҙ?** (Юғиһә) **донъя**

**тормошон әхирәттән өҫтөн ҡуяһығыҙмы? Ләкин** (белегеҙ һәм онотмағыҙ), **донъя тормошоноң** (ваҡытлы) **файҙаһы, әхирәттең** (мәңгелек файҙаһы) **ҡаршында бик әҙ. Әгәр** (кәрәк осраҡта һуғышҡа) **сыҡмаһағыҙ,** (Аллаһ) **һеҙҙе бик ғазаплағыс ҡазалар менән язаландырыр һәм һеҙҙең урынға башҡа бер ҡәүемде алып килер. Һеҙ** (һуғышҡа сыҡмауығыҙ менән) **Уға бер нисек тә зарар килтерә алмаҫһығыҙ. Аллаһ – һәр нәмәгә ҡөҙрәтлелер»** («әт-Тәүбә», 38-39).

اِنْفِرُوا خِفَافًا وَثِقَالًا وَجَاهِدُوا بِأَمْوَالِكُمْ وَأَنْفُسِكُمْ
فِى سَبِيلِ اللهِ ذَلِكُمْ خَيْرٌ لَكُمْ إِنْ كُنْتُمْ تَعْلَمُونَ

**«**(Әй мөьминдәр!) **Еңел булһынмы, ҡыйын булһынмы,** (Аллаһ юлында) **һуғышҡа сығығыҙ! Малдарығыҙ һәм йәндәрегеҙ менән Аллаһ юлында йыһат ҡылығыҙ! Әгәр белһәгеҙ, был һеҙҙең өсөн,** (әлбиттә), **хәйерлерәк»** («әт-Тәүбә», 41).

Әлеге киҫәтеүҙәрҙән һуң мөьминдәр араһында йәнләнеп алыу күҙәтелә. Күңелдәрҙәге йомшаҡлыҡ үкенес тулы бер халәткә алышына. Дәртле иман мобилизацияһы башлана, сөнки дошмандың ислам мәмләкәтенә һөжүме осрағында «йыһат» фарыз-ғайн һанала һәм бөтә мөьминдәр быға буйһонорға бурыслы. Фәҡәт был фарызды ҡылыуҙа яуаплылыҡ йөкләнмәйенсә, ундай эштән азат тип билдәләргә мөмкин заттар тураһында аяти кәримәлә түбәндәгесә бойорола:

لَيْسَ عَلَى الضُّعَفَاءِ وَلَا عَلَى الْمَرْضَى وَلَا عَلَى الَّذِينَ لَا يَجِدُونَ مَا يُنْفِقُونَ
حَرَجٌ إِذَا نَصَحُوا لِلّٰهِ وَرَسُولِهِ مَا عَلَى الْمُحْسِنِينَ مِنْ سَبِيلٍ وَاللّٰهُ غَفُورٌ رَحِيمٌ

**«Аллаһ һәм Унының Рәсүленә ихлас инанғанлыҡтары һаҡланған ваҡытта** (һәм кешеләргә үгет биргән осраҡта)**, зәғифтәргә, ауырыуҙарға һәм** (һуғыш өсөн) **сарыф итерлек бер нәмә лә таба алмаусыларға гонаһ яҙылмай. Игелек эйәләренә ҡаршы ҡуйырлыҡ бер юл** (яуаплылыҡ) **юҡ. Аллаһ – Ғафур, Рәхим ул»** («әт-Тәүбә», 91).

Аяти кәримәнең аңлатмаһына күрә, һуғыштан азат ителгәндәр мәмләкәттәрендә фетнә сығарыуға урын бирмәҫ, ялған хәбәрҙәр таратмаҫ, яуға сығып киткән мөжәһидтәрҙең ғаиләләренә булышһалар һәм игелекле ғәмәлдәр ҡылһалар, һуғышта ҡатнашмау арҡаһында уларға бер гонаһ та яҙылмаҫ. Ләкин быларҙың һуғышта ҡатнашыуҙарын тыя торған бер ниндәй ҙә әмер булмағанға күрә, теләһәләр, ғәскәргә ҡыйынлыҡ тыуҙырмау шарты менән, яуҙа ҡатнаша алалар.

Тәбүк сәфәренә әҙерлек ваҡытында әсхәбе кирамды Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән Аллаһ юлында ғүмерҙәрен ҡорбан итеү мөмкинлегенә бәйле оло ашҡыныу, изге дәрт биләп ала. Ләкин әсхәбе кирам араһындағы фәҡирҙәрҙән ете кеше хәрби сәфәрҙә ҡатнашыу өсөн атланып барырлыҡ хайуан таба алмай. Күбеһенсә ике һуғышсыға, ҡайһы саҡ хатта өс һуғышсыға бер дөйә тура килә һәм дөйәгә сиратлап ултырырға тейеш булалар. Фәҡәт яуҙа ҡатнашыуҙы һәм һәр миҙгелдә Аллаһ Рәсүле менән бергә булыуҙы йән үә тән теләгән осраҡта, сиратлашып булһа ла ултырып барырҙай бер дөйә таба алмаған ярлы сәхәбәләр ҙә бар. Аллаһ Рәсүле янына килеп, улар хәлдәрен һөйләп бирәләр. «Атланып барырлыҡ дөйә юҡ», тигән яуап ишеткәс, илай-илай ҡайтып китәләр. Аллаһ юлында түгелгән был күҙ йәштәре Хаҡ Тәғәлә тарафынан ҡабул ителә һәм аяти кәримәлә асыҡлыҡ кертелә:

وَلَا عَلَى الَّذِينَ إِذَا مَا أَتَوْكَ لِتَحْمِلَهُمْ قُلْتَ لَا أَجِدُ مَا أَحْمِلُكُمْ عَلَيْهِ
تَوَلَّوا وَّأَعْيُنُهُمْ تَفِيضُ مِنَ الدَّمْعِ حَزَنًا أَلَّا يَجِدُوا مَا يُنْفِقُونَ

**«**(Эй Рәсүлем!) **Үҙҙәренә атланыр хайуан биреүеңде һорап, Һиңә килгәс,** (Һин)**: «Һеҙҙе атландырып барырлыҡ бер хайуан да таба алмайым», – тигәндән һуң, сарыф итерлек бер нәмә лә таба алмағанға, күҙҙәренән йәш түгә-түгә ҡайтҡан заттарға** (бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ юҡ)**!»** («әт-Тәүбә», 92).

Аятта илаһи хөрмәткә лайыҡ булған кешеләрҙән Ғәбдеррахман ибн Кәғб менән Ғабдуллаһ ибн Муғәффәл Аллаһ Рәсүле янынан илай-илай ҡайтып барғанда, Ибн Йәмин уларҙан: «Ниңә илайһығыҙ?» – тип һорай. «Атланып йөрөрлөк берәй атмы-дөйәме бирмәҫме, тип, Рәсүлүллаһ янына барған инек. Беҙҙе ултыртып барырҙай хайуан таба алманы. Беҙҙең иһә, атланып, Аллаһ Рәсүле менән бергә изге һуғышҡа сығырлыҡ бер хайуаныбыҙ ҙа юҡ!» – ти.

Ибн Йәмин икеһенә бер дөйә, аҙыҡ сифатында күпмелер хөрмә бирә. Хәҙрәти Ғәббәс илаусыларҙың икеһенә, хәҙрәти Ғосман иһә өсөһөнә атланыр хайуандан өлөш сығара.[316] Бер төркөм мохтаждарҙы һуңыраҡ Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ишәктәр, аттар менән тәьмин итә.[317] Яу сәфәренән азат ителһәләр ҙә, Аллаһ Рәсүленән айырылып ҡалыуҙы ауыр кисергән һәм йөрәктәре Йәнәбел-Хаҡҡа мөхәббәт менән тулған әлеге сәхәбәләр бындай иҫ киткес дәрт-теләк һәм мөхәббәттәренә яуап рәүешендә походта ҡатнашыу ниғмәтенә һәм дәрәжәһенә лайыҡ була.

Юғарыла бәйән ителгән ваҡиға – әсхәбе кирамдың малы менән дә, йәне менән дә Хаҡ юлында ни ҡәҙәр фиҙакәрлек күрһәтеүен һәм уларҙың күңел халәтен тасуирлап биргән иҫәпһеҙ миҫалдарҙың береһе.

316. Ибне Һишам, IV, 172; Ваҡыди, III, 994.
317. Бохари, «Мағази», 78.

Тәбүк походынан ғибрәт тулы тағы бер хәтирә менән Вәсилә ибн Әсҡа раҙыйаллаһу ғәнһү уртаҡлаша:

«Тәбүк сәфәренә сығырға йыйынған көндәрҙә Мәҙинәлә мин: «Ғәниматтән өлөшөм бәрәбәренә кем мине үҙ атына атландырыр?» – тип һөрән һалдым. Ансарҙарҙан өлкән йәштәге берәү, сиратлашып ултырып барыу шарты менән, мине һуғышҡа алып сыға алыуын белдерҙе. Мин шунда уҡ: «Килештек!» – тигәс: «Улайһа, Аллаһ бәрәкәте өсөн алға атла!» – тине. Шул рәүешле хәйерле бер дуҫ менән юлға ҡуҙғалдым. Аллаһ ғәнимәт насип итте; өлөшөмә бер ни ҡәҙәр дөйә тейҙе. Быларҙы (ансариға) алып килдем. Ул миңә: «Дөйәләреңде алып кит», – тине. «Әүәлдән килешеп ҡуйғанса, былар – һинеке», – тинем. Әммә ансари: «Ҡәрҙәшем! Ғәнимәтеңде ал, мин һинең бындай матди пайыңды һораманым. (Мин һинең менән уртаҡ сауапҡа, йәғни рухи әжергә ирешеүҙе генә уйлаған инем)», – тип әйтте» (Әбү Дауыт, «Йыһат», 113/2676).

Әлеге ғибрәтле сәфәрҙә йәндәрҙе һәм малдарҙы әхирәт өсөн капиталға әйләндереп, йәннәтте һатып алыу дәрте шундай юғары сиккә етә, ҡиәмәткәсә өммәткә үрнәк булырлыҡ манзаралар күрһәтелә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тирәһендә хеҙмәт итер өсөн, әсхәбе кирам төндә яҡтыға йыйылған күбәләктәй тартыла, Аллаһ юлында һәр яҡлы фиҙакәрлектәрен улар: **«Әсәм, атам, йәнем Һиңә фиҙа булһын, йә Рәсүлүллаһ!»** – тигән шиғар менән белдерә.

Сәхәбәләрҙең хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тирәһендә үҙҙәрен гүйә бер төн күбәләгеләй бар булмыштары менән ҡорбан итеүен, шағир уларҙың үҙ исеменән ни ҡәҙәр матур тасуирлай:

*Һәр күҙәнәге хаҡлыҡ аҙымы булған затҡа,*
*Йәнем дә фиҙа, тән дә фиҙа, үҙем дә фиҙа!..*

Бындай дәрт һәм рухи күтәренкелекте әсхәбе кирам һуңынан да һаҡлай. Әйтәйек, Ибн Өмми Мәктүм раҙыйаллаһу ғәнһү, юғарылағы аятта бойоролған тәҡүәлек юлын һайлап, ике күҙе лә һуҡыр булған килеш Ҡадисиә һуғышына ҡатнаша, хатта ислам ғәскәрҙәре араһында байраҡсы вазифаһын да башҡара.

Иңгән аяти кәримәләрҙәге киҫәтеүҙәр йоғонтоһо менән, тиҙ арала ҡеүәтле ислам ғәскәре туплана. Унда утыҙ меңдән артыҡ һуғышсы була.[318] Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Малик ибн Нәжжәр улдары байрағын Ғөмәрә ибн Хәземгә тапшыра. Артабан Зәйед ибн Ҫәбитте күргәс, байраҡты Ғөмәрәнән алып уға бирә. Ғөмәрә раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Мине асыуландығыҙмы әллә?» – тип һорағас, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-сәләтү үә-сәләәм:

318. Ваҡыди, III, 1002; Ибне Сәғд, II, 166.

*«Юк! Валлаһи, асыуланманым! Ләкин һеҙ ҙә Ҡөрьәнгә өҫтөнлөк бирегеҙ! Ул Ҡөрьәнде һинән күберәк ятланы! Хәтерендә Ҡөрьәнде күп һаҡлаған затҡа, ул танауы киҫелгән ҡара тәнле ҡол булһа ла, өҫтөнлөк бирелер!»* – тип асыҡлай.

Әүес һәм Хәзрәж ҡәбиләләренә байраҡтарын үҙ араларынан Ҡөрьәнде күберәк ятлаған вәкилдәргә тапшырырға ҡуша. Шунан һуң Ғәүф улдары әләмен Әбү Зәйед, Бәни Сәлимә ҡәбиләһенең байрағын иһә Мөғәҙ разыйаллаһу ғәнһү күтәреп бара (Ваҡыди, III, 1003).

**Ғәскәр хәстәрлеге өсөн инфаҡ ҡылыу**

Сәфәр сығырға йыйынғанда, ғәскәр ихтыяждарын тәьмин итеү өсөн, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләрен бергә инфаҡ ҡылырға, йәғни мал-мөлкәттәренән Хаҡ Тәғәлә юлында өлөш сығарырға саҡыра. Ул ваҡытта Мәҙинә бик ҙур ҡытлыҡ осоро кисерә. Шуға ҡарамаҫтан, әсхәбе кирам, тәрән ышаныс һәм иман дәрте менән, бөтә фани һәм донъяуи мәнфәғәттәре тураһында фекерҙәрен ситкә ҡуйып, олуғ инфаҡ һәм фиҙакәрлек ярышына керешә. Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү бар булған мал-мөлкәтен тулыһы менән алып килә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең:

*«Әбү Бәкерҙең малын ҡулланған хәтле башҡа һис кемдең малынан файҙаланманым...»* тигән һүҙҙәренән һуң күҙҙәре йәшләнгән Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Мин үҙем дә, малым да бары Һинең өсөн генә түгелме, йә Рәсүлүллаһ?!» – тип (Ибне Мажә, «Муҡаддимә», 11), үҙен йәне-тәне, малы-мөлкәте менән хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә бағышлауын һәм Унда ғына ireп, фанилыҡҡа ирешеүен раҫлай.

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең:

*«Бала-сағаңа нәмә ҡалдырҙың һуң, Әбү Бәкер?»* – тигән һорауына ул ныҡлы иман дәрте менән: «Аллаһ һәм Уның Рәсүлен (ҡалдырҙым, йә Рәсүлүллаһ)!..» – тип яуап бирә (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 16/3675).

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү малының яртыһын килтерә. Был юлы ул инфаҡ мәсьәләһендә хәҙрәти Әбү Бәкерҙе уҙҙырырмын, тип уйлаған була, әммә йәнә өлгөрмәй ҡала.

Хәҙрәти Ғосман разыйаллаһу ғәнһү 300 дөйәне, тейешле дирбиәләре менән тулыһынса хәстәрләп, ғәскәргә бүләк итә һәм өҫтәп тағы 1000 динар бүләп бирә. Хәҙрәти Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уның тураһында ла:

*«(Аллаһ юлында шулай фиҙакәрҙәрсә сарыф ҡылыуы сәбәпле), Ғосманға бынан һуң ҡыласаҡ бер ғәмәле лә зарар килтермәҫ!»* – тип (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 18/3700; Әхмәт, V, 63), оло мөхәббәт менән уны Пәйғәмбәр илтифатына, маҡтауына

лайыҡ ҡыла. Шулай уҡ хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһүҙең ғаиләһе лә бөтә йәүһәрҙәрен, ынйы-мәрйендәрен Аллаһ юлында инфаҡ ҡыла. Бөтә ҡатын-ҡыҙ сәхәбәләр ҙә, күпме биҙәнеү әйберҙәре, зиннәтле нәмәләре бар, барыһын да хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм алдына килтерә.[319] Ун бер йәшлек бер кескенә мөьминә ҡыҙ, сабый ҡолағына тағылған алҡаларҙы һала алмағас, тулҡынланыуҙан уларҙы ҡолағын йыртып, тартып ала. Әлеге ҡанлы алҡаларҙы ул Аллаһ Рәсүле алдына килтереп ҡуя.

Ярлылыҡ арҡаһында бирерлек бер нәмә лә таба алмаған сәхәбәләр ҙә йәнең-малың менән фиҙакәрлек ҡылыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырыша. Шулар араһынан Әбү Ғакил раҙыйаллаһу ғәнһү, төнө буйы эшләп, ике үлсәм хөрмә алыуға ирешә. Бер үлсәмен – ғаиләһенә, икенсеһен иһә ғәскәргә тапшыра. Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ һин килтереп биргәнгә лә, үҙеңдә ҡалдырғанға ла бәрәкәт насип итһен!»* – тип доға ҡыла һәм ул алып килгән хөрмәне ғәскәргә ярҙам сифатында йыйылған нәмәләр өҫтөнә бушатырға ҡуша (Табәри, *«Тәфсир»,* X, 251).

Монафиҡтар иһә былай хәйер-саҙаҡаға үҙҙәренсә бәйләнеп, Әбү Ғакилды ике йөҙлөлөктә ғәйепләйҙәр. Ғукбә ибн Ғәмр раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Саҙаҡа тураһында аят[320] иңгәс, арҡабыҙҙа йөк ташып, эшләп тапҡан малыбыҙҙы инфаҡ ҡыла башланыҡ. Шул саҡ бер кеше килде лә мул итеп саҙаҡа бирҙе. Монафиҡтар: «Кеше күрһен өсөн генә шулай эшләй», – тинеләр. Башҡа берәү килде лә бер үлсәм хөрмә тапшырҙы. Монафиҡтар: «Аллаһ бының бер үлсәм хөрмәһенә мохтаж түгел», – тип, йәнә ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. Шунан һуң:

الَّذِينَ يَلْمِزُونَ الْمُطَّوِّعِينَ مِنَ الْمُؤْمِنِينَ فِى الصَّدَقَاتِ وَالَّذِينَ لَا يَجِدُونَ
إِلَّا جُهْدَهُمْ فَيَسْخَرُونَ مِنْهُمْ سَخِرَ اللّٰهُ مِنْهُمْ وَلَهُمْ عَذَابٌ أَلِيمٌ

**«Саҙаҡа мәсьәләһендә мөьминдәрҙән үҙ ирөге менән биреүселәрҙе һәм көстәре еткәндән башҡаны таба алмаусыларҙы ҡотортоп көлөүселәр бар, Аллаһ ана уларҙың үҙҙәрен көлкөгә ҡалдырҙы. Һәм улар өсөн интектергес ғазап әҙерләнгән»**, – аяти кәримәһе («әт-Тәүбә», 79) индерелде» (Бохари, «Зәкәт», 10; Мөслим, «Зәкәт», 72).

319. Ваҡыди, III, 992.
320. Саҙаҡа аяты – күп өлөшө Тәбүк менән бәйле рәүештә индерелгән «Тәүбә» сүрәһенең 103- сө аяты ул:
«(Рәсүлем!) уларҙың малдарынан саҙаҡа ал, уның менән үҙҙәрен паклһаң, ғәмәлдәрен төҙәтерһең. Һәм дә улар хаҡы өсөн хәйерле доға ҡыл. Сөнки Һинең доғаң – улар өсөн именлек, тыныслыҡ сығанағы. Аллаһ – ишетеүсе, белеүсе ул».

Әлеге хәҙистең төрлө риүәйәттәренән аңлашылғанса, күп итеп аҡса алып килгән зат Ғәбдеррахман ибн Ғәүф раҙыйаллаһу ғәнһү, ә бер үлсәм хөрмә тапшырған зат Әбү Ғакил раҙыйаллаһу ғәнһү була.

Фәҡир мосолмандарҙан Ғөтбә ибн Зәйед раҙыйаллаһу ғәнһү төндөң бер өлөшө уҙғас, ятағынан тороп намаҙ уҡый һәм: «Йә Аллаһым! Һин йыһатҡа сығырға әмер бирҙең һәм шуны хупланың. Шул уҡ ваҡытта мине атланып Рәсүлең менән бергә йыһатҡа күтәрелә алырлыҡ бер хайуан эйәһе итмәнең! Рәсүлеңдең ҡулына ла мине атландырып барырлыҡ бер хайуан насип ҡылманың! Мин һәр ваҡыт малымдан, тәнемдән һәм мөлкәтемдән үҙемә йөкләнгән саҙаҡаны биреп килдем. Йә Аллаһым! Ҡолдарың араһында миңә насип иткән ошо бер киҫәк малымды саҙаҡа итеп тапшырам!» – тип ялбарып һорай.

Таң атҡас, ул Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм янына барып: «Йә Рәсүлүллаһ! Ҡулымда саҙаҡа итеп бирә алырҙай бер нәмә лә юҡ. Ошо бер киҫәк әйберҙәремде хәйер итеп тапшырам! **Шуның бәрәбәренә иһә мине ҡайғыға һалыусы йәки миңә әшәкелек һөйләүсе, йәиһә минән көлөүсе зат та үҙемде ғәфү итһен!» –** ти. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һөйөү-мөхәббәт һәм йомартлыҡ менән генә түгел, шәфҡәт-мәрхәмәт менән дә тулы был һүҙҙәргә ҡаршы бары:

*«Аллаһ саҙаҡаңды ҡабул итһен!»* – ти һәм башҡа бер нәмә лә әйтмәй. Икенсе көндө иһә уға:

*«Мин һинең саҙаҡаңды ҡабул иттем. Һиңә һөйөнөслө хәбәр еткерәм! Мөхәммәттең булмышын ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, һин саҙаҡаһы ҡабул ителеүселәр исемлегенә яҙылып ҡуйҙың»,* – тип белдерә (Ибне Хәжәр, *«әл-Исабә»,* II, 500; Ибне Кәсир, *«әс-Сира»,* IV, 9; Ваҡыди, III, 994).

Монафиҡтарҙың бер өлөшө зәғиф иманлы мосолмандарға һаман да үҙ һүҙҙәрен һеңдереп, уларҙың һуғышта ҡатнашыуына ҡомасауларға тырышалар. Ундайҙар Сөүәйлим исемле бер йәһүдиҙең өйөн үҙҙәренең штабына әйләндерә. Был хаҡта хәбәр алған Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәҙрәти Талханы бер нисә сәхәбә менән ебәреп, Сөүәйлимдең өйөн яндырта. Бынан һуң инде монафиҡтар улай берләшергә һәм бындай аҙымға барырға йөрьәт итмәйҙәр.[321] Икенсе яҡтан ҡарағанда, монафиҡтарҙың ошо ғәмәлдәре арҡаһында иңгән киҫәтеү аяттарынан һуң, күңелдәрен илаһи ғазаптан ҡурҡыу биләп алған мөьминдәрҙең барыһы ла берҙәм рәүештә һуғышта ҡатнаша. Был эш шул дәрәжәгә етә ки, Мәҙинәи Мөнәүүәрә буп-буш ҡала. Ләкин һуғыш оҙаҡҡа һуҙыла ала, ә ул арала дәүләт башҡалаһында барған төрлө ваҡиғалар сәбәпле, был дәүләттең ныҡлығы кәмергә, уны һаҡлап ҡалыу ҡыйынлашырға мөмкин. Дингә лә зәғифләнеү ҡурҡынысы янай, ғәскәрҙең көнкүрешен тәьмин итеү ауырая. Шулай уҡ халыҡтарҙың тормошон алып барған аҡыл үҙеге – уның

321. Ибне Һишам, IV, 171.

баш мейен тәшкил иткән төркөмдөң булмауы дәүләттең тарҡалыуына килтерә ала. Быға юл ҡуймау өсөн, Аллаһ Тәғәлә һуғышҡа ҡатнашыу мәсьәләһендә бер сик-сама билдәләй:

وَمَا كَانَ الْمُؤْمِنُونَ لِيَنْفِرُوا كَآفَّةً فَلَوْلَا نَفَرَ مِنْ كُلِّ فِرْقَةٍ مِّنْهُمْ طَآئِفَةٌ
لِّيَتَفَقَّهُوا فِى الدِّينِ وَلِيُنذِرُوا قَوْمَهُمْ إِذَا رَجَعُوا إِلَيْهِمْ لَعَلَّهُمْ يَحْذَرُونَ

**«Мөьминдәрҙең барыһының бер юлы яуға сығыуҙары дөрөҫ түгел. Уларҙың һәр бүлеменән бер төркөмө, диндә** (дин ғилемдәрендә) **гөлдәй сәсәк атыу, асылыу** (киң һәм тәрән белем алыу) **һәм** (һуғыштан) **ҡайтҡас, ҡәүемдәрҙе киҫәтеү өсөн, ҡалала ҡалырға тейеш. Шәйәт, улар һаҡланырҙар»** («әт-Тәүбә», 122).

Әлеге илаһи әмергә ярашлы рәүештә, тылдың именлеген тәьмин итеү өсөн, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү менән Мөхәммәт ибн Мәсләмә раҙыйаллаһу ғәнһүҙе Мәҙинәлә ҡалдыра.

**«Сәғәтү әл-Ғөсрә» – ауырлыҡ осоро**

Ниһәйәт, бөтә ауыр шарттарға һәм ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, ғәскәр мөһабәт бер ҡеүәт рәүешендә юлға ҡуҙғала. Был армия күп төрлө һынауҙар алдында сабырлыҡ һәм сыҙамлыҡ күрһәтергә тейеш була, сөнки уны шаҡтай ауыр һәм ситен шарттар көтә. Әлеге яу сәфәрен ҡыйынлаштырған ҡайһы бер сәбәптәр, ҡыҫҡаса әйткәндә, бына былар:

1. Көслө ҡоролоҡ.

2. Юлдың йыраҡ булыуы һәм йәйәү барыу ауыр булған сүл аша уҙыуы.

3. Уңыш йыйыу, еләк-емеш өлгөргән фасылға тура килеүе.

4. Ҡеүәтле эҫелек.

5. Византия армияһының һан яғынан ҡарағанда бик көслө тип һаналыуы.

Бына ошо бөтә ҡыйынлыҡтар арҡаһында был изге һуғышты «Ғазүәтү әл-Ғөсрә» (ауырлыҡ һуғышы), ундағы ғәскәрҙе «Жәйшү әл- Ғөсрә» (ауырлыҡ ғәскәре), сәфәр ваҡытындағы көндәрҙе иһә «Сәғәтү әл-Ғөсрә» (ҡыйынлыҡ һәм ауырлыҡ ваҡыты) тип атайҙар.

Ислам армияһы юлға сығып, күпмелер ваҡыт уҙғас, хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү монафиҡтар фетнәһе арҡаһында Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде ҡыуып тотоп, һуғышта ҡатнашыу өсөн рөхсәт һорай: «Йә Рәсүлүллаһ! Монафиҡтар мине оҡшатмағанға күрә, ҡалала ҡалдырғаныңды һөйләйҙәр! Миңә лә яуға барыу өсөн рөхсәт бирһәң ине!» – ти ул.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Йә Ғәли! Улар ялған һөйләгән. Мин һине тылымда ҡалыусыларға вәкил итеп билдәләнем. Хәҙер үк кире ҡайт, үҙ ғаиләңә лә, минең йорт әһеленә лә күҙ-ҡолаҡ бул, улар өсөн минең вәкилем бул! Йә Ғәли! (Турға барғанда), Мусаға ҡарата Һарун ниндәй урын биләгән, Минең янымда һин шундай дәрәжәлә торорға риза булмаҫ инеңме? Бер генә айырма менән – минән һуң Пәйғәмбәр килмәйәсәк»,* – тип әйтә (Ибне Һишам, IV, 174; Бохари, «Мағази», 78; Мөслим, «Фәҙаилус-Сәхәбә», 31).

Әлеге илтифатҡа лайыҡ булған хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү биш ҡуллап ризалыҡ менән, һөйөнә-һөйөнә, үҙенә йөкләнгән вазифаға ҡайта.

Сәфәргә сыҡҡан ғәскәр шаҡтай ғына юл үтә. Оҙаҡ ҡына ваҡыт уҙғас, әсхәбе кирамдан Әбү Зәрр раҙыйаллаһу ғәнһү армияны ҡыуып тота. Хәлһеҙ аты юл ғазабына сыҙай алмағанға күрә, ул артта ҡалған була, ахырҙа иһә атланып барған хайуанынан баш тартып, ауыр булһа ла, йәйәүләп ғәскәр артынан ҡыуып етә. Быны күргән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм йылмайыулы йөҙ менән:

*«Аллаһ Әбү Зәрргә рәхмәтен ирештерһен! Ул яңғыҙ йәшәр, яңғыҙ үлер һәм яңғыҙ башына терелтелер»,* – ти. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең әлеге мөғжизә һүҙҙәре, үҙ ваҡыты килгәс, ысынға аша: Әбү Зәрр раҙыйаллаһу ғәнһү бер үҙе йәшәп, яңғыҙлыҡта үлеп китә (Ваҡыди, III, 1000).

Ислам ғәскәренең сәфәре иҫ киткес ситен, мәшәҡәтле бара. Һулышты ҡыҫыр дәрәжәлә эҫелек тора. Өс кешегә бер дөйә генә эләккәнгә, сәхәбәләр дөйәләргә сиратлашып ултыра, был да шаҡтай ғына ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Бер хөрмәне ике кешегә бүлешеп ашарға тура килә. Ҡай саҡ һыу табыу ҙа бик ауыр була. Шунлыҡтан тәһәрәт алған саҡта, ағзалар бер тапҡыр ғына йыуыла. Бер урында йәшәүселәргә тире аяҡ кейеме өҫтөнән көнгә бер тапҡыр, мосафир һаналыусыларға өс көнгә бер мәсех ҡылырға ҡушыла.[322] Бер ваҡыт Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм доға ҡыла һәм бары ислам ғәскәре туҡтаған ергә генә ямғыр яуа.[323]

Ислам армияһы Ҫәмүд ҡәүеме һәләк ителгән Хижер тигән ерҙән уҙғанда, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әсхәбе кирамға:

*«Был үҙәнлектән ҡасыу, ситтә тороу тейеш!»* – тип күрһәтмә бирә (Ваҡыди, III, 1008).

Артабан:

*«Үҙҙәренә золом һалыусыларҙың иленә илай-илай аяҡ баҫығыҙ. Юғиһә, уларҙың башына төшкән бәләләр һеҙҙең дә башҡа төшөргә мөмкин»,* – тип

322. Ибне Мажә, «Таһәрәт», 45; Әхмәт, VI, 27.
323. Ибне Һишам, IV, 177.

бойора. Шунан һуң Ул был ерҙе, башын ҡаплап, тиҙ-тиҙ генә уҙып китә. Был тирәнән алынған һыуҙарҙы түктерә. Исраф мәсьәләһенә бик иғтибарлы булыуына ҡарамаҫтан, шул һыу менән баҫылған ҡамырҙарҙы ла ташлаттыра (Бохари, Әнбиә, 17; «Тәфсир», 15/2; Мөслим, «Зүһд», 39). Бының сәбәбе шунан ғибәрәт: ҡәһәрләнгән урындар үҙҙәре дусар булған фәләкәттең насар тәьҫирен ҡиәмәткә ҡәҙәр һаҡлайҙар. Тимәк, ҡәһәрләнгән, бәлә-ҡазаға дусар ителгән ҡала-ауылдарҙа, ғисьян һәм гонаһ тулы урындарҙа, рухи яҡтан дауам иткән әшәкелектең тиҫкәре йоғонтоһона эләкмәҫ өсөн, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡушҡанса, аҙымдарҙы тиҙәйтеп үтеп китеү кәрәк.[324]

Хижер тип аталған үҙәнлектә уҙҙырған бер төндә Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Был төндә бик ҡеүәтле дауыл ҡубасаҡ. Һәр кем дөйәһен ныҡлап бәйләп ҡуйһын һәм шул ултырған ерендә ултырып торһон, аяҡҡа баҫмаһын!»* – тип киҫәтә. Ысынлап та ул кистә бик көслө дауыл сыға, тәһәрәт алыр өсөн тороп баҫҡан берәүҙе ел ергә күтәреп бәрә, дөйәһен эҙләргә киткән башҡа берәүҙе иһә Тай тауына осороп алып китә (Бохари, «Зәкәт», 54; Мөслим, «Фәзаил», 11).

Тәбүккә бер көн барырлыҡ йыраҡлыҡ ҡалғас, ислам ғәскәре тағы бик ауыр һыуһыҙлыҡҡа тарый. Мөғәҙ ибн Жәбәл раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип тапшыра:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һеҙ иртәгә, иншаллаһ, Тәбүк шишмәһенә барып етерһегеҙ!»* – тине.

(Икенсе көн шишмәгә килеп еткәс), булған һыу услап-услап бер турһыҡҡа йыйылды. Хәҙрәти Пәйғәмбәр шуның менән ҡулдарын, йөҙөн йыуҙы һәм шишмәгә кире һипте. Артабан тимер осло өс таяҡты шишмәгә батырып тыҡты. Шул саҡ (бәллүрҙәй) өс шишмә фонтан кеүек һиптереп аға башлай. Бөтә мөжәһидтәр һыуһынын баҫа. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм (миңә):

---

324. Ҡыйынлыҡтарҙың предметтарға тәьҫире тураһында бер миҫал. Япон ғалимы Масару Эмото туңған һыу кристалдары менән үткәргән тикшеренеүҙәрендә уларҙың тигеҙ, нәфис һәм алтымөйөш рәүешендәге кристалдарҙан формалашыуын һәм әлеге кристалдарҙың кеше ҡулы теймәгән шишмәләрҙә әҙәм балаһын матурлығы менән шаҡ ҡатырырлыҡ тәртипле һәм күркәм икәнлеген билдәләй. Ике айырым һауытҡа алып, шундай һыуҙар менән тәжрибә үткәрә. Ғалим өҫтөнә һөйөү, мәрхәмәт, доға һәм рәхмәт һүҙҙәре уҡылған беренсе һауыттағы һыуҙың кристалдары тәбиғи матурлығын һаҡлап ҡалғанлығын, ә өҫтөнә кәмһетеү-мыҫҡыллау һүҙҙәре һәм «шайтан» кәлимәһе әйтеп торолған һыуҙың кристалдарының иһә төрлө киҫәктәргә емерелеүен һәм бөтә эстетик үҙенсәлеген юғалтып, формаларының боҙолғанын күрә. Шул уҡ һынауҙа һыуҙар матур һәм хуш музыка менән йәмһеҙ, тыныcһыҙлай торған ритмдарға ла төрлө реакция бирә. Үҙе шаһит булған әлеге хәҡиҡәтте раҫлау өсөн, Масару Эмото шуға оҡшаш тикшеренеүҙе бешерелгән дөгө менән дә үткәрә. Айырым банкаларға һалынған дөгөнөң берһенә «рәхмәт», икенсеһенә «тиле» тигән яҙыу ҡуйыла. Банкалар өҫтөнә ундағы ҡағыҙға яҙылған һүҙҙе бер ай дауамында ҡабатлап әйтеп торалар. Япон белгесе беренсе банкалағы дөгөнөң аҡлығы һаҡланыуын, боҙолмауын асыҡлай, икенсеһендәге дөгө иһә ҡаралып, насар еҫтәр тарата (Сафвет Сәних, «Һыу кристалдары сере», «Сызынты», декабрь, 2002, № 287; М. Акиф Дениз, «Тәүге аҙым», февраль, 2003)

*«Эй Мөғәҙ! Ғүмерең оҙон булһа, оҙаҡламай ошо һыу менән был тирәләрҙең баҡсалары һәм йөҙөм баглары туласағын күрер инең!»* – тип әйтте» (Мөслим, «Фәзаил», 10; Әхмәт, V, 238).

Изге Тәбүк яуында бик көслө аслыктан интеккәнгә, сәхәбәләр: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Рөхсәт бирһәң, дөйәләребеҙҙе һуйып ашаһаҡ һәм майын алһаҡ ине?» – тиҙәр. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ярай, шулай эшләгеҙ!»* – тип бойора. Шул ваҡыт Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү килә: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Әгәр дөйәләрҙе һуйырға рөхсәт бирһәгеҙ, армияла атланыр хайуан әҙәйәсәк. Ләкин (теләһәгеҙ), уларға ҡулдарында булған ризыҡтарын алып килергә әмер бирегеҙ, унан инде, шуларға бәрәкәт бирһен өсөн, Аллаһҡа доға ҡылығыҙ. Шәйәт, Аллаһ бәрәкәт насип итер», – ти ул.

Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Якшы, шулай эшләйек!»* – тип белдерә лә бер тире йәймә йәйҙертә. Шунан һуң ҡулдарҙа булған ризыҡтарҙы алып килергә ҡуша. Һуғышсыларҙан ҡайһылары бер ус тары, ҡайһылары бер ус хөрмә, ә ҡайһы берәүҙәр икмәк киҫәктәре килтереп бирә. Йәймә өҫтөндә ысындан да бик әҙ нәмә туплана. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Аллаһтан бәрәкәт биреүен һорап доға ҡыла һәм артабан:

*«Һауыттарығыҙҙы алып килеп, ошонан алығыҙ!»* – тип бойора. Һуғышсылар һауыттарын тултыра. Хатта тултырылмаған бер генә һауыт та ҡалдырмайҙар. Инде туйғансы ашап алалар, ә ашамлыҡтары йәнә шаҡтай арта ғына. Шунан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Минең Аллаһтың Рәсүле булыуыма шәһәҙәт ҡылам. Аллаһтың берлегенә һәм Мөхәммәттең Пәйғәмбәрлегенә шикһеҙ-шөбһәһеҙ инанмайса, Аллаһ ҡаршыһына барған зат, йәннәт(кә кереү) ҙән мотлаҡ тотҡарланыр»* (Мөслим, «Иман», 45).

Ислам ғәскәре Тәбүктә штаб ҡорған саҡта, дошман тарафынан хатта әҙ генә хәрәкәт тә күҙгә салынмай. Сөнки шул хәтлем ҙур ислам армияһын күреп, христиан динендәге ғәрәп ҡәбиләләренең, элегерәк Мөьтәләге өс мең кешелек иман ғәскәре күрһәткән ҡаһарманлыҡтарҙы ла иҫкә алып, һуғышыу дәрттәре һүрелә һәм улар һуғыштан тыйыла. Византия иһә Ғәрәбстанды яулап алыу фекеренән инде күптән ваз кискән була. Сөнки Византия императоры ул ваҡытта Хумуста үҙ дәүләтенең эске мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Шулай итеп, Ғәрәбстандың яулап алынасағы тураһында хәбәрҙәрҙең христиан динендәге Ғәссәни ғәрәптәренең арттырып һөйләнгән һүҙҙәре икәнлеге асыҡлана.

Ләкин был сәфәр менән ислам һәм мосолмандар дан һәм ҡеүәт яулай. Ғәрәбстандың төньяҡ сиктәрендә тулыһынса именлек тәьмин ителә. Әйлә хөкөмдары, Жәрба һәм Әрзуһ халыҡтары, Мәкна йәһүдиҙәре хәҙрәти

Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән жизйә бәрәбәренә именлек һорап, мосолмандар химаяһына инә. Хәҙрәти Хәлид ибн Вәлид дүрт йөҙ егерме атлы һуғышсы менән Думәтү әл-Жәндәлгә һөжүм итеп, христиан батша Укәйдир ибн Ғабделмәликте эләктерә лә уны Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә алып килә. Был хөкөмдар ҙа жизйә түләү бәрәбәренә иҫән-имен ҡалдырыла (Ибне Һишам, IV, 180-182; Ибне Сәғд, I, 276-277; Әхмәт, V, 425).

Ислам ғәскәре Тәбүктә егерме көн йәшәй. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тағы ла йыраҡыраҡ барырға теләмәй, сөнки Ул исламды кешеләргә ҡылыс менән ҡурҡытып таратыу теләген хупламай. Өҫтәүенә, Византия империяһын былай ҙа кәрәгенсә ҡурҡытыуға ирешәләр, мосолмандар ҡаршыһына бер дошман да сығырға йөрьәт итмәй. Сүриәлә ул ваҡыттарҙа чума сире ҡотора. Чума иһә бик йоғошло һәм үлемгә илтә торған ауырыу булғанға, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Бер төбәктә чума булыуын ишетһәгеҙ, унда бармағыҙ! Һеҙ унда икәнһегеҙ, ул ерҙән сығып китеүҙән тыйылығыҙ!»* – тип бойора (Бохари, «Тыйб», 30).

Һуңынан Рәсүлүллаһ, әсхәбе кирам менән кәңәшләшеп, Мәҙинәгә ҡайтырға ҡарар бирә. Шул ваҡыттарҙа Әбү Хайсәмә раҙыйаллаһу ғәнһү ғәскәрҙе ҡыуып тота. Сәфәрҙең ауырлығы арҡаһында ул башта Мәҙинәлә ҡала, ғәскәргә ҡушылмай. Бер көндө баҡсаһындағы сатырҙа ҡатындары үҙҙәренә бик шәп табын әҙерләй, уны ашарға саҡыралар. Әбү Хайсәмә, әлеге манзараны күргәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм Уның сәхәбәләренең хәле күҙ алдына килеп, йөрәге һыҙлап ҡуя һәм ул үҙ-үҙенә: «Улар ошо эҫелә Аллаһ юлында ауырлыҡтарға түҙгәндә, мин шулай эшләп ята аламмы?!» – ти. Үҙе өсөн әҙерләнгән табынға ҡағылып та ҡарамайса, шундай үкенес хисе менән кисекмәҫтән юлға ҡуҙғала, Тәбүктә ислам армияһына ҡушыла. Уның килгәнен күргәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был ғәмәленән хушлана һәм:

*«Йә Әбү Хайсәмә! Әҙҙән генә һәләк булмай ҡалдың!..»* – тип, уны ярлыҡаһын өсөн, Йәнәбел-Хаҡҡа доға ҡыла (Ибне Һишам, IV, 174; Ваҡыди, III, 998).

Йәнәбел-Хаҡ ҡолдарына көстәре етмәҫлек тәкдим яһамаҫ. Ләкин көстәре етә алған эштәрҙе үтәүҙә яуаплылыҡ билдәләр. Асылда, Әбү Хайсәмәнең ҡылған ғәмәле лә көстән килгәнде түләү сифатында ҡарала.

Әлеге ваҡиғалар беҙҙең өсөн йәнле өгөт-нәсихәт булып тора. Матди һәм рухи мөмкинлектәребеҙҙе Хаҡ Тәғәлә юлында ни ҡәҙәр сарыф итә алыуыбыҙҙы үлсәп-самалап ҡарау һәм мөьмин булыуҙың яуаплылығы тураһында фекерләү өсөн бер ҡулай сәбәп тә улар.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Тәбүктә иртән бер хөрмә ағасына һөйәлеп, бер хөтбә уҡый. Аллаһҡа хәмед-ҫәнәләр әйткәс, Ул түбәндәгесә дауам итә:

*«Кешеләрҙең хәйерлеһе – аты йәки дөйәһе һыртында, йәиһә ике аяғы өҫтөндә (йәйәүле хәлдә) үлгәнсе, Аллаһ юлында йыһат кылыусы (Аллаһтың динен һидәйәт көтөүселәргә тәблиғ итеүсе)! Кешеләрҙең насары иһә Аллаһ Китабын укып та, унан һис файҙаланмаған боҙоҡ һәм хөрмәтһеҙ зат.*

*Шуны яҡшы белегеҙ: иң дөрөҫ һүҙҙәр – Аллаһтың Китабы! Йәбешеп тотонорға тейешле иң ныҡлы тотҡа – тәҡүәлектер! Диндәрҙең хәйерлеһе – Ибраһим ғәләйһиссәләм дине (ислам)! Сөннәттәрҙең хәйерлеһе – Мөхәммәттең сөннәттәре! Һүҙҙәрҙең иң шәрәфлеһе – Аллаһты зекер итеү.* ***Ҡиссаларҙың иң матурҙары – Ҡөрьән(дә булғандары).***[325] *Ғәмәлдәрҙең хәйерлеһе – Аллаһ ҡылыныуын теләгән фарыздар. Ғәмәлдәрҙең насары – бидғәттәр. Иң күркәм юл һәм хәл-йүнәлеш – Пәйғәмбәрҙең юлы һәм Уның хәл-әхүәле. Үлемдәрҙең хөрмәтлеһе – шәһитлектер.*

*Һуҡырлыҡтың иң насары – тура юлды тапҡандан һуң, унан тайпылыу. Әҙ булып та еткән нәмә күп булып мәшғүллек арҡаһында Аллаһҡа ғибәҙәттән айырған нәмәнән хәйерлерәк. Ғәфү һорауҙың насары – үлем килеп быуып алған ваҡытта ҡылынғаны. Үкенестең насары – ҡиәмәт көнөндәгеһе. Кешеләрҙең хәйерһеҙе – йомаға (йома намаҙына) иң ахырҙан килеүсе һәм Аллаһты тәнҡитләп телгә алыусы. Хаталарҙы иң күп ҡылыусы – теле ялғанды күп һөйләүсе.*

*Байлыҡтың хәйерлеһе – күңел байлығы. Ризыҡтарҙың хәйерлеһе – тәҡүәлек аҙығы. Хикмәттең башы – Аллаһтан ҡурҡыу. Хикмәтһеҙ (һүҙ һәм) шиғыр – Иблис ғәмәлдәренән. Хәмер (алкоголь) – гонаһтарҙың һәр төрлөһөн бер ергә йыя торған нәмә. (Боҙоҡ) ҡатындар – шайтан тоҙаҡтары. (Тәрбиә эләкмәгән) йәшлек – йүләрлектең бер киҫәгелер. Риба (процент) – керемдәрҙең иң насары. Ашауҙың иң әшәкеһе– йәтим малын ашау. Бәхетле кеше – үҙенән башҡа берәүҙең хәленән ғибрәт алыусы.*

*Һәр ҡайһығыҙ дүрт аршын ергә (ҡәбергә) барасаҡ. Ғәмәлдәрҙең хисабы иһә әхирәткә ҡала. Ғәмәлдәрҙән төп нигеҙ – уларҙың нәтижәләре. Фекерҙәрҙең*

---

325. Ҡөрьәни-Кәримдең өстән беренән күберәге ҡиссаларҙан ғибәрәт. Йәнәбел-Хаҡ Ҡөрьән ҡиссаларының әһәмиәтен белдереп, уларҙа аңлатылған хәҡиҡәттәр тураһында беҙгә фекер йөрөтөргә, тейешенсә ғибрәт алырға һәм уларҙы үҙ хәлебеҙ менән сағыштырып ҡарарға ҡуша. Аяти кәримәләрҙә әйтелә:

نَحْنُ نَقُصُّ عَلَيْكَ اَحْسَنَ الْقَصَصِ بِمَٓا اَوْحَيْنَٓا اِلَيْكَ هٰذَا الْقُرْاٰنَ

«(Рәсүлем!) Беҙ, был Ҡөрьәнде вәхи ҡылып, Һиңә ҡиссаларҙың иң яҡшыларын һөйләйбеҙ…» («Йусуф», 3).

فَاقْصُصِ الْقَصَصَ لَعَلَّهُمْ يَتَفَكَّرُونَ

«Ҡиссаны һөйләп бир, бәлки, уйлап ҡарарҙар» («әл-Әғрәф», 176).

وَلَقَدْ ضَرَبْنَا لِلنَّاسِ فِى هٰذَا الْقُرْاٰنِ مِنْ كُلِّ مَثَلٍ لَعَلَّهُمْ يَتَذَكَّرُونَ

«Тәхҡиҡ, үгет алһындар, тип, был Ҡөрьәндә кешеләргә Беҙ һәр төрлө миҫал килтерҙек» («әз-Зумар», 27).

*насары – ялған-хаталы фекерҙәр. Мөьминде һүгеү – гонаһтыр. Мөьминде үлтереү – көфөрлөктөр. Мөьминдең итен ашау (ғәйбәтен һатыу) – Аллаһ ҡушҡандарға ҡаршы килеү тигән һүҙ.*

*Ялған нәмә өсөн Аллаһ менән ант итеүсе – алданыр. Ғәфү һораған кеше – Аллаһ тарафынан ярлыҡаныр. Әгәр бирәү асыуын еңә икән, Аллаһ уға әжерен бирә. Үҙенә килгән зыянға түҙемлек күрһәткән кешегә Аллаһ әжерен бирер. Аллаһ ауырлыҡтарға түҙгән заттың әжерен ҡат-ҡат арттырыр. Аллаһҡа ҡаршы баш күтәргән кешене Аллаһ ғазапҡа дусар итер!*

*Йә Аллаһым! Мине һәм өммәтемде мәғфирәт ҡыл!*

*Йә Аллаһым! Мине һәм өммәтемде мәғфирәт ҡыл!*

*Йә Аллаһым! Мине һәм өммәтемде мәғфирәт ҡыл!*

*Үҙем һәм һеҙҙең өсөн Аллаһтан мәғфирәт һорайым!»* (Ваҡыди, III, 1016-1017; Әхмәт, III, 37; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* V, 13-14).

**Тәбүк шәһите**

Тәбүк сәфәрендә бер генә сәхәбә шәһит китә. Был сәхәбә – мөшрик ҡәбиләлә йәшәгән килеш ислам менән хөрмәтләнгән Ғабдуллаһ әл-Мүзәни раҙыйаллаһу ғәнһү. Атаһы, үлгәндә, уға бер ниндәй мөлкәт тә ҡалдырмай. Бай ағаһы уны үҙ янына алып үҫтерә һәм мөлкәт бирә. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә һижрәт ҡылған ваҡытта Ғабдуллаһ мосолманлыҡ ҡабул итергә теләһә лә, мөшрик ағаһы арҡаһында быға ирешә алмай. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ Мәккәне яулап, Мәҙинәгә ҡайтҡас, Ғабдуллаһ ағаһына: «Эй ағайым! Мосолман булыуыңды гел көттөм. Һинең һаман да Мөхәммәткә ынтылғаныңды күрмәйем! Улайһа, минең мосолманлыҡҡа күсеүемә рөхсәт бирһәң ине!» – ти. Ағаһы: «Әгәр һин Мөхәммәткә эйәрһәң, өҫтөңдәге кейемеңдән башлап, һиңә биргән нәмәләремдең барыһын да кире тартып алырмын!» – ти. Ғабдуллаһ: «Мин, валлаһи, Мөхәммәткә эйәрҙем! Ташҡа, botҡа табыныуҙы инде ташланым! Ҡулымдағы әйберҙәрҙе алһаң, ал!» – ти. Ағаһы уның һәр нәмәһен, хатта кейемдәрен дә һалдырып ала. Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү кейемһеҙ килеш әсәһе янына бара. Әсәһе ҡалын келәмде ике киҫәккә айыра. Ғабдуллаһ шуның яртыһы менән биленән юғары өлөштө, икенсе яртыһы менән биленән түбән яғын урап ҡуя. Ул үҙ ҡарарында ныҡ тора, мөмкин ҡәҙәр тиҙерәк Мәҙинәгә барып, Аллаһ Рәсүле менән осрашырға теләй. Алдындағы бөтә кәртәләр күҙенә күренмәҫ хәлгә килә. Инде башҡа түҙеп тора алмайынса, үҙен ҡыҫрыҡлаған ҡәүеменән ҡотолоп, ул бер төндө йәшерен рәүештә юлға сыға. Йыраҡ һәм ауыр сәфәренән һуң аяҡ-ҡулдары яраланып бөтә, аслыҡтан һәм һыуһыҙлыҡтан хәле китә, Мәҙинәгә килгәндә бик арыған, йонсоған була. Тулҡынланыуы сиктән аша. Ләкин бер миҙгелдә башынан уй йүгереп уҙа: өҫтөндәге сәләмә, тупаҫ япма менән ул Ғаләмдәр юлбашсыһы ҡаршына бара алмай бит! Аллаһ Рәсүле менән күрешеү

дәрте менән янған йәш сәхәбә, үҙен күреүселәрҙең аптыраған ҡараштары аҫтында Мәсжиди Нәбәүигә керmembership, бер аҙ һулыш ала. Сәхәр ваҡытына ҡәҙәр мәсеттә ята. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм сабах намаҙын ҡылдыра. Йәмәғәтен күҙҙән кисереп, өйөнә ҡайтырға йыйынған миҙгелдә, Ғабдуллаһты күреп ҡала. Үкһеҙҙәрҙең, яңғыҙҙарҙың һәм золомға тарыусыларҙың һыйыныр ҡуйыны булған Рәхмәт Пәйғәмбәре саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ул мөбәрәк сәхәбәне шәфҡәт һәм мөхәббәт менән ҡосаҡлап ала. Исеменең Ғабдүлузза икәнлеген белгәс:

*«Һин Ғабдуллаһ Зүл-Бижадәйн (*ذُو الْبِجَادَيْنِ*: парлы кейем/келәм эйәһе)! Миңә яҡын ерҙә йөрө! Яныма йышыраҡ кил!»* – тип бойора. Ғабдуллаһ разыйаллаһу ғәнһү әсхәбе суффә менән бергә йәшәй, Ҡөрьәни-Кәрим өйрәнә. Ҡөрьәни-Кәримдән күп кенә сүрәләрҙе яттан хәтерендә ҡалдыра.

Аллаһ Рәсүленә һөйөү-мөхәббәт менән бағланған әлеге мөбәрәк сәхәбә Уның янында бер йыһаттан икенсеһенә бара, шәһит китеп, Раббыһының юлында йәнен ҡорбан итеү теләге менән яна. Тәбүк сәфәренә сыҡҡанда, үҙенә шәһитлек насип булһын өсөн, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән үтенеп-үтенеп доға ҡылыуын һорай. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Йә Аллаһым! Уның ҡанын кафырҙарға харам ҡыл!»* – тип доға уҡый. Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин улай һораманым бит!» – ти. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һин Аллаһ юлында һуғышҡа сығып йәки биҙгәк әләктереп үлһәң, шәһит булырһың! Атланған хайуаның һине йығып төшөрөп, муйыныңды һындырһа ла, шәһит булырһың! Борсолма! Былырҙың ҡайһыһы ысынға ашһа ла, шәһитлек өсөн һиңә етәсәк!»* – тип белдерә.

Ысындан да уның шәһитлеге бер мөғжизә шикелле, Аллаһ Рәсүле әйткән рәүештә тормошҡа аша. Ғәскәр кире ҡайтыу мәшәҡәттәре менән мәшғүл бер төндә Пәйғәмбәрҙәр башлығынан һәм Аллаһ менән Уның Рәсүленең ике дуҫынан ғибәрәт өс кеше бер факел яҡтыһында мәйет күтәреп баралар. Был өс кеше – хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәҙрәти Әбү Бәкер һәм хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә, ә улар күтәреп барған йыназа иһә Ғабдуллаһ Зүл-Бижадәйн раҙыйаллаһу ғәнһү була.

Үҙе был манзараны көнләшеп күҙәткән Ғабдуллаһ ибн Мәсғүд раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Төн ҡараңғылығында мөжәһидтәр сатыр ҡорған майҙандың мөйөшөндә бер ут йөрөгәнен күрҙем. Тороп шул яҡҡа таба яҡынайғас, ни күрәм: Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Әбү Бәкер һәм Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә Ғабдуллаһ Зүл-Бижадәйн раҙыйаллаһу ғәнһүҙең йыназаһын күтәреп бара. Бер ергә килделәр ҙә ҡәбер ҡаҙынылар. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә

сәләм ҡаҙылған ҡәбергә төштө. Әбү Бәкер һәм Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүмә йыназаны Әфәндебеҙгә күтәреп биреү өсөн әҙерләнеләр. Аллаһ Рәсүле:

*«Ҡәрҙәшегеҙҙе миңә таба яҡынраҡ ҡуйығыҙ»,* – тип бойорҙо, Ул ҡушҡанса эшләнеләр. Йыназаны ҡосағына алған Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәләм, уны ҡәберҙә ятасаҡ урынына һәм тарафына ҡуйғандан һуң, турайып баҫты һәм былай тип ялбарҙы:

*«Йә Раббы! Мин унан разыймын, гел разый булып торҙом, Һин дә разый бул…»*

Ғабдуллаһ ибн Мәсғүд разыйаллаһу ғәнһү бәйәнен дауам итеп былай ти:

«Әлеге манзара ҡаршында бик тәьҫирләндем. Зүл-Бижадәйнгә көнләштем. Ул саҡта: «Был ҡәберҙең эйәһе мин булһа инем! Их, ана шулай Пәйғәмбәри хөрмәт-илтифат менән ерләнгән кеше мин булһа инем!» – тип шул ҡәҙәр теләгән инем» (Ибне Һишам, IV, 183; Ваҡыди, III, 1013-1014; Ибне Әсир, *«Үсдүл-Габә»,* III, 227).

**Монафиҡтарҙың хыянаты һәм Дырар мәсете**

Ҡайтыу яғына ҡуҙғалғас, монафиҡтарҙан бер төркөм төндә уҙыу ниәтләнгән бер тарлауыҡта Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәләмде үлтерергә план ҡора. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәләм был хаҡта хәбәрҙар була һәм Хөзәйфәтүл-Йәмәнизе уларҙың өҫтөнә һөжүмгә ебәрә. Тарлауыҡ тирәһенә еткәс, Хөзәйфә разыйаллаһу ғәнһү: «Әй Аллаһ дошмандары! Сигенегеҙ, китегеҙ!» – тип ҡысҡырып, монафиҡтарҙың барыһын да ҡыуып тарата (Әхмәт, V, 453).

Ләкин Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәләмде монафиҡтарҙың икенсе бер тоҙағы ла көтә. Исламиәт тамыр йәйгәс, Мәҙинә һәм Мәккәнән сығып киткән Әбү Ғәмир Фасыҡ исемле бер хәзрәжле христиан Византияла һыйыныр урын таба һәм һәр даим монафиҡтарҙы ҡотортоп ята. Был мәкер ҡаҙанын ҡайнатып торған урын итеп, Ҡубә мәсетенән бер аҙ түбәндәрәк бер мәсет төҙөп ҡуялар. Атаҡлы Дырар мәсете була ул...

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәләмде үлтереү ниәтен ысынға ашырыу өсөн, Уны Тәбүк походына саҡлы ла был мәсеткә саҡыралар, ләкин Пәйғәмбәр:

*«Сәфәрҙән ҡайтҡанда, иншаллаһ!»* – тип әйткәс, ислам ғәскәренең яуҙан ҡайтҡанын көтә башлайҙар.

Мәҙинәгә бер көнлөк юл ҡалғас, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәләм янына Ябраил ғәләйһиссәләм килә һәм тышҡы яҡтан бер мәсет итеп һалынған шул фетнә ояһының ысын йөҙө тураһында еткерә. Шул рәүешле мәсеткә ҡаршы мәсетте, дингә ҡаршы динде ҡулланып, Аллаһ Рәсүле

салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, тимәк, бөтә мосолмандарға монафиҡтар тарафынан әҙерләнгән был тоҙаҡ маҡсатына ирешә алмай ҡала. Сөнки Йәнәбел-Хаҡ әлеге хәҡиҡәтте ап-асыҡ белдереп ҡуя:

وَالَّذِينَ اتَّخَذُوا مَسْجِدًا ضِرَارًا وَكُفْرًا وَتَفْرِيقًا بَيْنَ الْمُؤْمِنِينَ وَإِرْصَادًا لِّمَنْ حَارَبَ اللّٰهَ وَرَسُولَهُ مِنْ قَبْلُ وَلَيَحْلِفَنَّ إِنْ أَرَدْنَا إِلَّا الْحُسْنَى وَاللّٰهُ يَشْهَدُ إِنَّهُمْ لَكَاذِبُونَ لَا تَقُمْ فِيهِ أَبَدًا لَّمَسْجِدٌ أُسِّسَ عَلَى التَّقْوَى مِنْ أَوَّلِ يَوْمٍ أَحَقُّ أَنْ تَقُومَ فِيهِ فِيهِ رِجَالٌ يُحِبُّونَ أَنْ يَتَطَهَّرُوا وَاللّٰهُ يُحِبُّ الْمُطَّهِّرِينَ

«(Монафиҡтар араһында мөьминдәргә) **зыян һалыу,** (хаҡты) **инҡар итеү, мөьминдәр араһын боҙоу һәм Аллаһ һәм Уның Рәсүленә ҡаршы һуғышҡан бер кешене көтөү өсөн алдан уҡ бер мәсет һалыусылар һәм: «**(Бының менән) **игелектән ҡала бер ни ҙә теләмәнек!» – тип мотлаҡ ант итәсәк заттар бар. Шул уҡ ваҡытта Аллаһ уларҙың, һис шикһеҙ, ялғансы икәнлектәренә шаһит булыр.** (Әй Рәсүлем!) **уның эсендә** (Дырар мәсетендә) **һис ҡасан намаҙ уҡыма! Беренсе көнөнән үк тәҡүәлек менән һалынған мәсет эсендә** (Ҡубә мәсетендә) **намаҙ уҡыуың, әлбиттә, дөрөҫөрәк. Уның эсендә пакланыуҙы һөйөүселәр бар. Аллаһ та пакланыусыларҙы һөйә»** («әт-Тәүбә», 107-108).

Был юлы мәсьәлә бары ике йөҙлөлөк менән генә сикләнеп ҡалмай, асыҡтан-асыҡ тоҙаҡ ҡороу һәм йәшерен план рәүешен ала. Шуға күрә монафиҡтарҙың битлеген йыртып ташлау һәм мәсет тип мәкер менән төҙөгән биналарының емерелеүе талап ителә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, илаһи әмерҙә ҡушылғанса ғәмәл ҡыла һәм Мәҙинәгә етеүгә, Дырар мәсетен яндырта (Ибне Һишам, IV, 185).

### Кесе йыһаттан – оло йыһатҡа

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡатнашҡан һуңғы хәрби поход – Тәбүк сәфәре – төрлө ауырлыҡтар, төрлө мәшәҡәттәр менән айырылып тора. Ислам ғәскәре мең саҡрым йыраҡлыҡҡа барып ҡайта. Мәҙинәгә яҡынайғанда, ысын-ысынлап килеш-ҡиәфәттәре үҙгәреп бөткән – тиреләре һөйәккә йәбешкән, сәс-һаҡал баҫҡан була. Ошо хәлдә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларға:

*«Хәҙер кесе йыһаттан оло йыһатка ҡайтабыҙ!»* – тип белдерә. Сәхәбәләр аптырап ҡалып: «Йә Рәсүлүллаһ! Хәлебеҙ күҙ алдында! Бынан да олораҡ йыһат бармы?» – тигәс, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Хәҙер оло йыһатҡа (нәфес менән йыһатҡа) ҡайтабыҙ!»* – тип асыҡлай (Сөюти, II, 73).

Нәфес йыһаты – йөрәкте паклау, рухи тәрбиә тигән һүҙ. Уның маҡсаты – юғары әхлаҡҡа ирешеү һәм, кешене рухи яҡтан өлгөртөп, «камил инсан» хәленә килтереүҙән ғибәрәт. Бының юлы – илаһи хәҡиҡәттәр менән һуғарылған аҡыл; иман һәм күркәм әхлаҡ менән биҙәлгән йөрәк; Ҡөрьән һәм сөннәттең рухиәтен нигеҙ итеп алған ғәмәлдәр менән «тәүхидтең миғражына күтәрелеп», камиллыҡҡа ирешеү.

❁

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә килеп еткәс, бөтә халыҡ Уны һәм ислам ғәскәрен тулҡынланып ҡаршы ала. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙҙе Сәнийәтүл-Вәдала (шәһәрҙең көньяҡ һәм төньяҡ тарафында ҡаршы алыу һәм хушлашыу тауҙары) ҡаршы алыр өсөн, хатта бала-сағалар ҙа юлдарға һибелә.[326]

**Тәүбәләре кисектерелгән өс сәхәбә**

Мәҙинәлә ҡалып, Тәбүк сәфәрендә ҡатнашмаған ир-аттарҙы өс төркөмгә айырып ҡарайҙар:

1. Нигеҙле сәбәптәре булғандар. Әүәлерәк аяти кәримәлә телгә алынған был заттар, яу походында ҡатнашырға теләһәләр ҙә, уға ҡушыла алмайҙар, улар тураһында Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ислам ғәскәре алдында:

*«Мәҙинәлә шундай төркөмдәр бар, беҙ барған һәр ерҙә, беҙ үҙған һәр үҙәнлектә улар беҙҙең менән бергә булды! (Сөнки) уларҙы ғәфү итерлек сәбәптәре артта ҡалдырҙы»,* – тип белдерә (Бохари, «Магази», 81; Мөслим, «Имарә», 159).

Шулай уҡ башҡа бер хәҙис шәрифтә лә:

*«Ғәмәлдәр – ниәттәргә күрә!..»* – тип әйтелә (Бохари, «Бәдғуль-Вәхи», 1).

2. Монафиҡтар. Улар төрлө сәбәптәргә нигеҙләнеп, хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был походтан ҡайтмаясаҡ, тип уйлайҙар һәм ғәскәргә ҡушылмайҙар. Ләкин хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һау-сәләмәт килеш, уңышлы еңеү менән ҡайтыуын күргәс, йүгерә-саба Уның ҡаршыһына баралар һәм, мең дә бер ялған һөйләп, ғәфү һорайҙар. Һикһәнләп кеше тәшкил иткән әлеге монафиҡтар тураһында Аллаһ Тәғәлә былай ти:

---

326. Бохари, «Йыһат», 196.

وَيَحْلِفُونَ بِاللهِ إِنَّهُمْ لَمِنْكُمْ وَمَا هُمْ مِّنْكُمْ وَلَكِنَّهُمْ قَوْمٌ يَفْرَقُونَ لَوْ يَجِدُونَ مَلْجَأً أَوْ مَغَارَاتٍ أَوْ مُدَّخَلًا لَّوَلَّوْا إِلَيْهِ وَهُمْ يَجْمَحُونَ

«(Ул монафиҡтар) **мотлаҡ һеҙҙән булғандары тураһында Аллаһ менән ант итерҙәр. Шул уҡ ваҡытта улар һеҙҙән түгел; фәкәт улар** (ҡылыстарығыҙҙан) **ҡурҡа торған бер төркөм. Әгәр һыйынырлыҡ бер ер йәки** (йәшәп торорлоҡ) **мәғәрәләр, йәки** (кереп булырлыҡ) **бер тишек тапһалар, йүгерә-йүгерә, шул тарафҡа китерҙәр ине»** («әт-Тәүбә», 56-57).

يَعْتَذِرُونَ إِلَيْكُمْ إِذَا رَجَعْتُمْ إِلَيْهِمْ قُلْ لَا تَعْتَذِرُوا لَنْ نُّؤْمِنَ لَكُمْ قَدْ نَبَّأَنَا اللهُ مِنْ أَخْبَارِكُمْ وَسَيَرَى اللهُ عَمَلَكُمْ وَرَسُولُهُ ثُمَّ تُرَدُّونَ إِلَى عَالِمِ الْغَيْبِ وَالشَّهَادَةِ فَيُنَبِّئُكُمْ بِمَا كُنْتُمْ تَعْمَلُونَ سَيَحْلِفُونَ بِاللهِ لَكُمْ إِذَا انْقَلَبْتُمْ إِلَيْهِمْ لِتُعْرِضُوا عَنْهُمْ فَأَعْرِضُوا عَنْهُمْ إِنَّهُمْ رِجْسٌ وَمَأْوَاهُمْ جَهَنَّمُ جَزَاءً بِمَا كَانُوا يَكْسِبُونَ

«(Сәфәрҙән) **улар янына ҡайтҡас, һеҙгә ғәфү һорап килерҙәр. Әйт:** «(Юҡҡа) **ғәфү һорамағыҙ! Һеҙгә бер нисек тә ышанмайбыҙ! Сөнки Аллаһ һеҙҙең хаҡта беҙгә хәбәр белдерҙе.** (Бынан һуң) **ғәмәлегеҙҙе Аллаһ та күрәсәк, Уның Рәсүле лә. Бынан ары йәшеренде һәм шаһит ителерлек күренеп торғанды** (йәшерен һәм асыҡ һәр нәмәне) **белеп тороусы** (Аллаһҡа) **ҡайтарыласаҡһығыҙ һәм** (Ул) **ҡылып яткан ғәмәлдәрегеҙ тураһында һеҙгә хәбәр итәсәк». Улар янына ҡайтҡас, һеҙ уларҙан баш тартмаһын** (уларҙы язаламаһын) **өсөн, Аллаһ исеме менән ант итәсәктәр. Инде уларҙан йөҙөгөҙҙө сөйөрөгөҙ! Сөнки улар – мордарҙар. Ғәмәлдәре менән ҡаҙанғандарына** (әшәке, яман эштәренә) **яза булараҡ улар барасаҡ ер – йәһәннәм!»** («әт-Тәүбә», 94-95).

Ошо аяти кәримәләр нигеҙендә монафиҡтар ислам йәмғиәтенән ситләштерелә һәм мордар тигән ҡушамат ала, улар мосолман булып һаналмай башлай. Шулай уҡ ислам өсөн алып барыласаҡ йыһаттарҙа ла уларға ҡатнашыу тыйыла.

3. Аҡларлыҡ сәбәптәре булмағандар. Былар ҙа ике төркөмгә айырып ҡарала:

а. Бер ниндәй ҙә аҡларлыҡ сәбәптәре булмаған килеш, шул уҡ ваҡытта монафиҡтар сафына ла кермәгән хәлдә һуғышта ҡатнашмаусылар. Ләкин был бәндәләр Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әле Тәбүктән ҡайтҡансы уҡ, хаталарын төшөнөп, бик ныҡ үкенәләр. Шул дәрәжәлә ки, ҡылған яңылышлыҡтарының бер язаһы итеп, үҙҙәрен мәсет бағанаһына

бәйләп ҡуялар һәм Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сискәнсе, шулай бәйләнгән килеш ҡалырга ант итәләр. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәфәрҙән ҡайтып, был кешеләр тураһында ишеткәс:

*«Мин дә был хакта бер-бер әмер алмай тороп, уларҙы сисмәйәсәгем тураһында ант итәм»,* – тип белдерә. Шунан һуң түбәндәге аяти кәримә иңдерелә:

وَآخَرُونَ اعْتَرَفُوا بِذُنُوبِهِمْ خَلَطُوا عَمَلًا صَالِحًا
وَآخَرَ سَيِّئًا عَسَى اللّٰهُ أَنْ يَتُوبَ عَلَيْهِمْ إِنَّ اللّٰهَ غَفُورٌ رَّحِيمٌ

**«Башҡалары иһә гонаһтарын танынылар, улар изге ғәмәлде бүтән яман ғәмәл менән бутағандар ине.** (Тәүбә итһәләр), **Аллаһ уларҙың тәүбәләрен ҡабул итер, тигән өмөт бар. Аллаһ – Ғәфү итеүсе** (һәм) **Рәхим ул»** («әт-Тәүбә», 102).

Был аяти кәримә иңгәс, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үкенеүҙәре арҡаһында үҙҙәрен бағаналарға бәйләгән ул сәхәбәләрне сисеп, бауҙан ысҡындыра.

б. Бында өс сәхәбә тураһында һүҙ бара. Улар иһә бер ниндәй ҙә нигеҙле сәбәптәре булмаған килеш, шул уҡ ваҡытта монафиҡтар сафына ла кермәгән хәлдә һуғышта ҡатнашмайҙар, баштан уҡ үкенгән сәхәбәләр кеүек үҙҙәрен бағанаға ла бәйләп ҡуймайҙар. Шағир Кәғб ибн Малик, Мөрәрә ибн Рәбиғ һәм Һиләл ибн Өмәййә исемле был өс сәхәбә монафиҡтар кеүек ялған һөйләмәй. Улар Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә аҡларлыҡ сәбәптәре булмаған килеш һуғышҡа ҡатнашмағандарын аңлатып бирәләр. Ҡылғандарына бик борсолоп, әйтеп бөтөргөһөҙ үкенеү хисе менән, улар Пәйғәмбәр ҡаршында ғәфү һорай.

Илаһи әмерҙәргә буйһоноу мәсьәләһендә бик ентекле, яуаплы эш йөрөткән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был өс сәхәбәне ғәфү итмәй. Илаһи вәхи килмәгәнгә күрә, хатта уларҙың сәләмдәрен дә алмай. Һәр осраҡта Уға эйәргән сәхәбәләре лә шулай эшләй.

Әлеге өс сәхәбә ошоғаса бөтә һуғыштарҙа ла була. Кәғбтән ҡала, икеһе Бәҙер һуғышына ҡатнаша. Шуға күрә лә ул саҡта, Тәбүк яуына ҡатнашмау менән бәйле хаталары сәбәпле үҙҙәренә ҡарата урынлашҡан мөнәсәбәт арҡаһында, донья күңелдәренә бик тар тойола. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең хатта сәләм дә алмаҫлыҡ дәрәжәлә йөҙ сөйөрөүе һөҙөмтәһендә, әйтерһең, улар өсөн ер йөҙө сит мәмләкәткә әйләнә. Хатта ҡатындары ла уларға ят кеше булып тойола. Бер ни ҙә эшләй алмаҫлыҡ хәлгә етәләр, шунлыҡтан, көн-төн йәш түгәләр. Уларҙың хәлен иреп аҡҡан шәмгә тиңләргә була. Улар ысындан да хаталана, тик ихласлыҡ, тоғролоҡ,

эскерһеҙлек, буйһоноу, үкенеү һәм тәүбә кеүек нәмәләрҙән йырағаймайҙар. Шул рәүешле илле көн уҙа. Ниһәйәт, дөрөҫлөктө һөйләгәндәре һәм эскерһеҙ рәүештә тәүбә иткәндәре өсөн бер әжер сифатында ошо аяти кәримә менән ярлыҡауға лайыҡ булалар:

وَعَلَى الثَّلَاثَةِ الَّذِينَ خُلِّفُوا حَتَّى إِذَا ضَاقَتْ عَلَيْهِمُ الْأَرْضُ بِمَا رَحُبَتْ وَضَاقَتْ عَلَيْهِمْ أَنْفُسُهُمْ وَظَنُّوا أَنْ لَا مَلْجَأَ مِنَ اللهِ إِلَّا إِلَيْهِ ثُمَّ تَابَ عَلَيْهِمْ لِيَتُوبُوا إِنَّ اللهَ هُوَ التَّوَّابُ الرَّحِيمُ يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا اتَّقُوا اللهَ وَكُونُوا مَعَ الصَّادِقِينَ

**«Үә Аллаһ** (үҙҙәре тураһында хөкөм) **кисектерелгән өс кешенең дә** (тәүбәләрен ҡабул итте). **Ер йөҙө шул ҡәҙәр киңлегенә ҡарамаҫтан, улар өсөн тар тойолдо, выждандары гел ғазапланы. Ниһәйәт, Аллаһтан** (Уның ғазабынан) **йәнә Аллаһҡа һыйыныуҙан башҡа сара юҡ икәнен аңланылар. Һуңынан элекке хәлдәренә ҡайтһындар өсөн, Аллаһ уларҙың тәүбәләрен ҡабул итте, сөнки Аллаһ – күп ярлыҡаусы, Рәхим ул.** (Улай икән), **эй иман килтереүселәр! Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм садиҡтар менән бергә булығыҙ!»** («әт-Тәүбә», 118-119).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Кәғб ибн Маликка әлеге һөйөнөслө хәбәрҙе былай тип еткерә:

*«Һине тыуған көнөңдән бирле тәүге тапҡыр кисергән иң хәйерле һәм бәхетле бер көн менән тәбрикләйем!..»*[327]

Кәғб ибн Малик раҙыйаллаһу ғәнһү Аллаһтың бындай бөйөк ярлыҡауына шөкрана сифатында: «Йә Рәсүлүллаһ! Мин Аллаһ һәм Уның Рәсүле ризалығы өсөн малымдың барыһын да саҙаҡа итеп бирергә теләйем!» – ти. Ләкин Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Малыңдың бер өлөшөн үҙең өсөн ҡалдыр! Һинең өсөн шулай хәйерлерәк!»* – тип бойора.

Кәғб ибн Малик: *«Улайһа, Хәйбәрҙәге өлөшөмдө ҡалдырам. Эй Аллаһтың Рәсүле! Аллаһ мине был бәләнән бары тоғролоғом, дөрөҫлөктө әйтеүем сәбәпле ҡотҡарҙы. Хәҙер инде мин бынан һуң ғүмерем буйы бары дөрөҫлөк кенә һөйләйәсәкмен!..»* – ти.

Кәғб раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип иҫкә ала: «Аллаһ менән ант итәм, ислам менән хөрмәтләнгәндән һуң, Йәнәбел-Хаҡ миңә биргән иң ҙур ниғмәт – Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ҡаршында дөрөҫлөктө һөйләүемдер һәм шул рәүешле

327. Әлеге һөйөнөслө хәбәрҙән һуң Кәғб раҙыйаллаһу ғәнһү Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ янына барғанда, Талха ибн Ғөбәйҙуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү шунда уҡ Кәғб янына килеп, ҡулын ҡыҫып, уны ҡотлай. Кәғб раҙыйаллаһу ғәнһү уның әлеге самими ғәмәлен ғүмере буйы хәтерләй.

ялған һөйләүселәр менән бергә һәләк булыуҙан ҡотолоп ҡалыуым. Сөнки Тәбүк сәфәренә ҡатнашмайынса, (сәбәп уйлап сығарып) ялған һөйләүселәр тураһында быҒаса һис кем өсөн ҡулланмаған ауыр, ҡурҡыныс һүҙҙәрҙе вәхи итеп, Аллаһ Тәғәлә былай тине:

فَأَعْرِضُوا عَنْهُمْ إِنَّهُمْ رِجْسٌ

**«…Уларҙан йөҙ сөйөрөгөҙ, сөнки улар нәжестер...»** («әт-Тәүбә», 95)» (Бохари, «Магази», 79, «Вәсая», 16, «Йыһат», 103; Мөслим, «Тәүбә», 53, «Мүсафирин», 74).

Әлеге өс сәхәбә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бөтә һуғышҡа ҡатнашһалар ҙа, бары бер һуғышҡа ғына бармай ҡалған өсөн, шул ҡәҙәр ауыр язаға дусар ителә. Был ваҡиға нигеҙле сәбәпһеҙ килеш әмерҙәрҙе, ҡушылғандарҙы үтәмәүселәр, уларҙы танымаусылар һәм Аллаһ юлындағы тәүхид өсөн көрәштән ситтә ҡалыусылар өсөн ни ҡәҙәр ҙур киҫәтеү булып тора.

Ысындан да, бер кешенең сәхәбә сифаттарына эйә булып, исламдың иң көсһөҙ осоронда бер нисә һуғышта, беренсе сиратта, Бәҙер яуында ҡатнашып, үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашыуы, ә шунан Тәбүк шикелле ситен, ләкин бәрелешһеҙ яу сәфәренә нигеҙле сәбәбе юҡ килеш ҡатнашмауы арҡаһында шул дәрәжәлә ауыр мөғәмәләгә дусар ителеүе – ни хәтле ғибрәтле үрнәк!.. Бында аҡыл һәм һиҙгерлеккә эйә заттар өсөн иҫ киткес һабаҡ һәм ғибрәт менән бергә ни ҡәҙәр ҡурҡыныс мәғәнә лә һалынған. Һәр дәүерҙәге кеүек, хәҙерге заманда ла исламдың донъяла өҫтөн сығыуына ирешеү өсөн көрәш алып барыу талап ителгәнлеген иғтибарға алғанда, бындай көрәштә төрлө сәбәптәр арҡаһында бик ауыр, әкрен эш йөрөтөүселәрҙең, был мәсьәләгә иғтибарһыҙлыҡ, илтифатһыҙлыҡ күрһәтеүселәрҙең хәлдәре шул хәтле мөшкөл, үкенесле. Бәҙер һуғышында ҡатнашып, Бәҙер ғазийы дәрәжәһенә ирешкәндәр ундай илтифатһыҙлыҡ өсөн шул дәрәжәлә ҡиммәт түләргә мәжбүр ителгән икән, беҙҙең кеүек кешеләрҙең хәле ниндәй булыр һуң тип фекер йөрөтөү һәм, Аллаһ Тәғәлә ҡушҡанса, тоғролар менән бергә булырға ынтылыу зарур.

Мөьминдәр тиҫкәре йоғонтоларҙан һаҡлана белһен һәм ыңғай тәьҫирҙәр алһын өсөн, Аллаһ Тәғәлә һәр даим тоғро, ихлас заттар менән бергә булырға әмер бирә. Имандарында, анттарында, хаҡ дингә бирелгәнлектәрендә, тоғро, дөрөҫлөклө кешеләр менән ниәттә, телдә йәки ғәмәлдә, йәғни һәр яҡтан бергә булырға, улар менән яҡын мөнәсәбәттәр урынлаштырырға, улар тарафын яҡларға, ҡыҫҡаһы, уларҙан айырылып ҡалмаҫҡа ҡуша. Ер йөҙө күңелдәребеҙ өсөн тараймаһын, выждандар һыҙланмаһын һәм Аллаһ ғазабынан ҡотолоп, Уның ризалығына ирешер өсөн, был – зарури шарт. Хаҡ Тәғәләнең тоғро дуҫтары менән бергә булыуҙың файҙаһын шағир бик матур сағылдырған:

*Юҡ итергә тырышырҙар, инә яңғыҙ булғанда,*
*Ләкин һыу һиберҙәр сылатып, гөл менән бергә булғанда...*

Әлеге әмерҙең Тәбүк һуғышында, йәғни ауырлыҡ-ҡыйынлыҡ походында яңғырауы шаҡтай мәғәнәгә эйә. Аллаһтың тоғро дуҫтары менән бары тыныслыҡ, рәхәтлек ваҡыттарында ғына түгел, ауырлыҡтарға тарығанда һәм Аллаһ юлында йыһатҡа күтәрелгәндә лә, улар менән бергә булыу тейеш. Аллаһтың тоғро дуҫтары түҙгән ҡыйынлыҡтарға күкрәк кереп ҡаршы тороу, улар артынан һуңламайынса барыу кәрәк.

Ғөмүмән алғанда, Тәбүк сәфәре менән бәйле рәүештә иңгән «Тәүбә» сүрәһендә күбеһенсә Аллаһ юлында мал һәм нәфес менән йыһаттың әһәмиәте темаһына иғтибар йүнәлтелә. Сөнки мал һәм йән менән йыһат мосолмандарҙың диндәге тоғролоғона иң ҙур дәлил булып тора. Шул уҡ ваҡытта сүрә мөьмин менән монафиҡ араһындағы айырманы ла асып бирә. Йәнәбел-Хаҡ былай тип белдерә:

إِنَّ اللهَ اشْتَرَى مِنَ الْمُؤْمِنِينَ أَنْفُسَهُمْ وَأَمْوَالَهُمْ بِأَنَّ لَهُمُ الجَنَّةَ يُقَاتِلُونَ فِى سَبِيلِ اللهِ فَيَقْتُلُونَ وَيُقْتَلُونَ وَعْدًا عَلَيْهِ حَقًّا فِى التَّوْرَاةِ وَالْإِنْجِيلِ وَالْقُرْآنِ وَمَنْ أَوْفَى بِعَهْدِهِ مِنَ اللهِ فَاسْتَبْشِرُوا بِبَيْعِكُمُ الَّذِى بَايَعْتُمْ بِهِ وَذَلِكَ هُوَ الْفَوْزُ الْعَظِيمُ

**«Аллаһ мөьминдәрҙән йәндәрен һәм малдарын үҙҙәренә** (биреләсәк) **йәннәт бәрәбәренә һатып алған. Сөнки улар Аллаһ юлында һуғышалар, үлтерeләләр, үләләр.** (Был) – **Тәүратта, Инжилдә һәм Ҡөрьәндә Аллаһтың үҙ өҫтөнә алған бер вәғәҙәһе. Аллаһтан да үҙ һүҙендә нығырак торған тағы кем бар? Ул осракта Уның менән әлеге алыш-бирешегеҙ арҡаһында һөйөнөгөҙ! Ана шул –** (хәҡиҡәттә) **ҙур ҡаҙаныш»** («әт-Тәүбә», 111).

Башҡа бер мөһим мәсьәлә шунан ғибәрәт: һәр осорҙа ла мосолмандар өсөн иң ҙур ҡурҡыныс монафиҡтарҙан янай. Тәбүк һуғышы һәм «Тәүбә» сүрәһе был үҙенсәлекте иң аныҡ рәүештә асып бирә һәм мосолмандарҙы киҫәтеп ҡуя.

Ауырлыҡ заманы – Сәғәт әл-Ғөсрәнән аңлашылғанса, мосолман кеше һис тә ләззәт һәм кәйеф-сафаға күңел бирмәҫкә, ҡаршыһында осраған төрлө бәлә-ҡазалар менән көрәшеп, Аллаһ юлында алға барыуҙан туҡтамаҫҡа тейеш.

**Ер үә күк байлыҡтары – Аллаһтыҡылыр**

Кафырҙарҙың бөтә тырышлыҡтарына ҡарамаҫтан, Аллаһ үҙ динен өҫтөн ҡыла һәм мөьминдәргә улар өҫтөнән еңеү насип итә. Сөнки был – Рәсүленә һәм Аллаһ юлында ихласлыҡ һәм тоғролоҡ менән эш иткән мөьминдәргә Йәнәбел-Хаҡтың илаһи бер вәғәҙәһе була. Тимәк, Аллаһтың дошмандары теләйме-теләмәйме, ошо хәҡиҡәт, әлбиттә, ысынға ашасаҡ. Быны раҫлап, Ҡөрьәни-Кәримдә әйтелә:

هُمُ الَّذِينَ يَقُولُونَ لَا تُنْفِقُوا عَلَى مَنْ عِنْدَ رَسُولِ اللهِ حَتَّى يَنْفَضُّوا وَلِلَّهِ
خَزَائِنُ السَّمَاوَاتِ وَالْأَرْضِ وَلَكِنَّ الْمُنَافِقِينَ لَا يَفْقَهُونَ

**«Улар** (иманды үҙләштерә алмағандар) **– «Аллаһтың Илсеһе янында булыусылар өсөн бер нәмә лә сарыф итмәгеҙ, таралышып китһендәр!» – тиеүселәр. Юҡһа, ерҙәрҙең һәм күктәрҙең хазиналары – Аллаһтыҡылыр. Ләкин монафиҡтар быны аңламаҫ»** («әл-Мүнафиҡин», 7).

Ысындан да, быуаттарҙан бирле кафырҙар тарафынан мосолмандарҙың иҡтисади ҡеүәтен кәметергә тырышлыҡ ҡуйылһа ла, ерҙәрҙең һәм күктәрҙең хазиналары Аллаһтыҡы булғанға күрә, Йәнәбел-Хаҡ мөьминдәргә олуғ йомартлыҡ күрһәтә, ислам ғәскәрен матди һәм рухи яҡтан туплап, тәьмин итеп, тиҙ арала уларға еңеүҙәр насип итә, ә кафырҙарҙы еңелеүгә дусар ҡыла.

Ислам тарихына күҙ һалһаҡ, Аллаһ ярҙамы бәрәбәренә мөьминдәрҙең бик әҙ һандағы ғәскәри көс менән ҙур-ҙур уңыштарға ирешкәне күренә. Бәҙер, Мөьтә, Андалусия, Малазгирт һәм башҡа күп кенә еңеүҙәр – был хәҡиҡәткә дәлилдәр. Икенсе яҡтан ҡарағанда иһә бөтә донъяға «илаһи кәлимәтуллаһ»ты (Аллаһ һүҙен) тараткан бөйөк Ғосманлы империяһын да 400 атлы һуғышсы ҡорған бит. Был да мосолмандарҙың Аллаһҡа ихлас мөхәббәттәренең дәрәжәһенә ҡарап уңыштарға ирешеүен күрһәтә, йәғни ихласлығын юғалтҡандар көсөн дә юғалтыр; ихласлығын һаҡлап ҡалыусылар еңелеү белмәҫ ҡеүәт-ҡөҙрәткә эйә булыр. Ул осраҡта иһә ислам дошмандары ни генә эшләһәләр ҙә, ахыр сиктә мосолманға бер ниндәй ҙә зарар килтерә алмаҫ. Сөнки Йәнәбел-Хаҡ аяти кәримәлә әлеге илаһи яҡлау тураһында белдереп ҡуя:

وَإِنْ تَصْبِرُوا وَتَتَّقُوا لَا يَضُرُّكُمْ كَيْدُهُمْ شَيْئًا إِنَّ اللهَ بِمَا يَعْمَلُونَ مُحِيطٌ

**«…**(Эй мөьминдәр!) Әгәр (башығыҙға төшкән бәләләргә бирешмәйенсә, Аллаһ дине менән йәшәү мәсьәләһендә) (ныҡлыҡ һәм) **сабырлыҡ ҡылһағыҙ һәм тыйылһағыҙ,** (йәғни тәҡүәлек менән Аллаһҡа һыйынһағыҙ һәм тейешле саралар күреп һаҡланһағыҙ), **уларҙың мәкер һәм тоҙаҡтары һеҙгә бер ниндәй ҙә зарар һала алмаҫ! Сөнки Аллаһ уларҙың эштәрен төрлө яҡтан белеп тора»** («Әлү Ғимран», 120).

Ысындан да, Сәғәҙәт быуаты һәм ислам тарихы әлеге аяти кәримәнең бихисап миҫалдарына шаһит.

**Ғибәҙәтһеҙ диндә хәйер юк!**

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙе маҡсат итеп ҡуйған ерҙәрҙе яулап Мәҙинәгә ҡайтыуға, үксәләренә баҫып тиерлек Таиф башлығы

Ғурүә ибн Мәсғүд килеп етә һәм мосолманлыҡ ҡабул итә. Артабан Таифкә ҡайтып, ҡәбиләһен исламға өндәй башлай. Ләкин ҡасандыр үҙҙәренә ислам тәблиғе өсөн килгән хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде лә таш менән ҡыуған был бәндәләрҙең Ғурүәгә ҡарата мөнәсәбәте тағы ла ҡырыҫыраҡ була. Уны уҡ ямғырына тотоп, шәһит ебәрәләр.[328]

Шунан һуң хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хәүәзин башлығы – мосолманлыҡ ҡабул иткәс, үҙенә вазифаһы кире ҡайтарылған Малик раҙыйаллаһу ғәнһүгә таифлеләргә баҫым яһарға әмер бирә. Ошо әмерҙе үтәп, Маликтың ваҡыт-ваҡыт һөжүм итеүе сәбәпле, ҡалғаләрендә бикләнеп, ситкә сыға алмаған таифлеләр ахыр сиктә шаҡтай йонсойҙар һәм ҡәбиләнең абруйлы кешеләрен Мәҙинәгә ебәрәләр.[329]

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҫәҡиф делегацияһын, күңелдәре йомшарһын, тип, мәсеттә ҡунаҡ итә.[330] Ҡәбилә вәкилдәре төндә Ҡөрьәни-Кәрим уҡығанды, сәхәбәләр тәһәжжуд намаҙында сүрәләр уҡығанды тыңлай һәм мосолмандарҙың биш ваҡыт намаҙҙа сафтарға теҙелгәнен күҙәтә.[331]

Ҫәҡиф делегацияһы намаҙҙан азат ителеү шарты менән иманға киләсәктәрен, итәғәт ҡыласаҡтарын белдерә. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларҙың был тәҡдимдәрен:

*«Рөҡуғһыҙ (намаҙһыҙ) бер диндә хәйер юҡ»,* – тип кире ҡаға (Әбү Дауыт, «Харaж», 25-26/3026).

Таифлеләр был юлы Ләт исемле боттарының тағын өс йыл үҙ урынында ҡалдырыу тураһында һорау кеүек йүләрлеккә бара. Был да ҡабул ителмәгәс: «Улайһа бер ай булһа ла янybыҙҙа ҡалһын!» – тиҙәр. Быныһы ла кире ҡағыла. Ниһәйәт, сараһыҙ ҡалып, иманға киләләр. Тик был юлы ла, һис булмаһа, Ләт ботон бәреп төшөрөүҙән үҙҙәрен азат итеүҙе һорай. Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: «Юҡ, бына һеҙ бәреп төшөрөгөҙ!» – тип ҡәтғилек күрһәтмәйенсә, был эш өсөн Әбү Суфъян менән Муғирәне ебәрә.[332] Шуныһы ғәжәп: боттарҙы емергәндә, Ҫәҡиф ҡәбиләһенең ҡатын-ҡыҙҙары өйҙәренән сығып, ҡысҡыра-баҡыра илай, ләкин исламдың бөйөклөгөн һәм әхлаҡи асылын бер төшөнөп, барыһы бергә мосолманлыҡҡа күскәс, боттарының хатта исемдәрен дә оноталар.

Шул рәүешле Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккә дәүеренең 9 -сы йылында, таифлеләрҙең золомона яуап рәүешендә, уларҙың һидәйәткә ирешеүе өсөн ҡылған, бөйөк мәрхәмәттең бер сағылышы булған доғаһы Хаҡ Тәғәлә ҡаршында ҡабул ителеп, ысынға аша.

328. Ибне Һишам, IV, 194; Хаким, III, 713/6579.
329. Ибне Һишам, IV, 138, 195.
330. Әхмәт, IV, 218.
331. Ваҡыди, III, 965.
332. Ибне Һишам, IV, 197; Ваҡыди, III, 967-968.

Ҫәҡиф вәкилдәренә исламдың фарыздары һәм хөкөмдәре өйрәтелә. Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларға рамаҙан айының ҡалған өлөшөндә ураҙа тоторға ҡуша. Билали Хәбәши уларға сәхәр һәм ифтар ризыҡтарын килтереп бирә торған була.[333]

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙенә килеүсе делегациялар менән иртәме-кисме, буш ваҡыты булыу менән, һәр саҡ осрашып торорға, уларҙы борсоған мәсьәләләр тураһында оҙаҡлап һөйләшергә тырыша.[334] Ҫәҡиф делегацияһы менән ғәҙәттәгесә һәр йәстү намаҙынан һуң күрешкән Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ бер тапҡырында, аяғөҫтө баҫып торған килеш әңгәмәләре шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылғанға күрә, кәүҙә ауырлығын әле бер, әле икенсеһенә күсереп ял иттереү ихтыяжын тоя.[335]

Ҫәҡиф вәкилдәренән Әүес ибне Хөзәйфә былай тип иҫкә ала:

«Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер төн йәстүҙән һуң оҙаҡ ҡына ваҡыт янығыбыҙға килмәне. «Йә Рәсүлүллаһ! Ниңә янығыбыҙға һуңлап килдегеҙ?» – тип һораныҡ. Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм:

*«Һәр көн Ҡөрьәндән бер хизб уҡырға вазифа йөкләнде. Шуны үтәмәйенсә килергә теләмәнем»*, – ти. Иртән әсхәбе кирамдан: «Һеҙ Ҡөрьәнде хизблап нисек уҡыйһығыҙ?» – тип һораныҡ. Улар: «Беҙ сүрәләрҙе баштағы өсөһөн бер хизб, һуңынан биш сүрәне икенсе бер хизб, артабан бер-бер артлы ете, туғыҙ, ун бер һәм ун өс сүрәне берләштереп берәр хизб уҡыйбыҙ. Иң ахырҙа «Ҡаф» сүрәһенән килгән тәфсилле сүрәләрҙе бер хизб итеп, Ҡөрьәни-Кәримде (ете өлөштә) уҡыйбыҙ», – тип аңлаттылар» (Әхмәт, IV, 9; Ибне Мажә, «Саләт», 178).

Аллаһ Тәғәләнән килгән бер фарман һәм Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм аманаты булараҡ, әсхәбе кирам Ҡөрьәни-Кәримгә бик ҙур әһәмиәт бирә. Уны намаҙҙарҙа уҡыу менән бергә, сәйәхәт һәм изге һуғыштарында, әңгәмәләрҙә, төнгө намаҙҙарында күп-күп итеп уҡыйҙар. Ҡөрьәндең тәменә һис ҡасан туймайҙар, бер көндәре лә Уны уҡымайынса уҙмай.[336] Көндәрен Ҡөрьән менән башлайҙар, күҙ ауырыуҙарынан интегеүселәргә лә Мусхаф-Шәрифкә ҡарап торорға кәңәш итәләр. Хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү, бик күп уҡыуы арҡаһында, хатта ике Китапты таушалдырып бөтөрә.[337]

Ҫәҡиф вәкилдәре араһында Ҡөрьәни-Кәримде Ғосман ибн Әбил-Ғас айырыуса көслө ярата. Араларында иң йәше булғанға күрә, уны гел арттараҡ, ат-дөйәләр янында ҡалдыралар. Илселәр уның янына ҡайтып, көн эҫеһендә

333. Ваҡыди, III, 968.

334. Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән: «Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мосолмандарҙы ҡыҙыҡһындырған берәй мәсьәлә тураһында Әбү Бәкер менән кисен бик һуңға ҡәҙәр һөйләшәләр ине, мин дә улар менән бергә була инем» (Тирмизи, «Саләт», 12/169).

335. Әбү Дауыт, «Шәһру Рамаҙан», 9/1393.

336. Ибне Сәғд, III, 75-76.

337. Кәттани, II, 197.

йоҡоға талғас, Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү, Пәйғәмбәребеҙ янына барып, Уға дин менән бәйле һорауҙар бирә, Ҡөрьәни-Кәримде тыңлай һәм өйрәнә. Ана шулай итеп, Аллаһ Рәсүленән ҡайһы бер сүрәләрҙе отоп ала, ятлай. Иптәштәре – ҡәбилә вәкилдәренән әүәлерәк йәшерен рәүештә ант итеп мосолманлыҡҡа күскән Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәшғүл саҡта, йә Әбү Бәкер, йә Үбәй ибн Кәғб янына бара, уларҙан һорайһын һорай, уҡырға теләгәндәрҙе уҡый. Уның был ғәмәле Рәсүлүллаһ Әфәндебеҙҙең күңеленә хуш килә һәм Ул уны ихлас һөйә. Ҫәҡиф илселәре тыуған илдәренә ҡайтып китергә теләгәс:

«Йә Рәсүлүллаһ! Арабыҙҙан берәребеҙҙе имам итеп билгелә!» – тип мөрәжәғәт итәләр. Пәйғәмбәр Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһүҙе, йәш яғынан иң йәше булыуға ҡарамаҫтан, уларға имам итеп ҡуя (Ибне Һишам, IV, 185; Ибне Сәғд, V, 508; Әхмәт, IV, 218).

### Тәбүк сәфәренән ҡайтҡас булған башҡа ваҡиғалар

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мысырлы хәҙрәти Мариянан Ибраһим исемле бер улы донъяға килә. Пәйғәмбәрҙең Тәбүк сәфәре теүәлләнгәс, оҙаҡ та үтмәй, хәҙрәти Ибраһим ауырып китә һәм бер аҙҙан вафат була. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм быға бик ҡайғыра. Мөбәрәк күҙҙәренән тауышһыҙ ғына мәрхәмәтле йәш тамсылары аға.

إِنَّ الْعَيْنَ تَدْمَعُ وَالْقَلْبَ يَحْزَنُ وَلَ نَقُولُ إِلَّا مَا يَرْضٰى
رَبُّنَا وَإِنَّا بِفِرَاقِكَ يَا إِبْرٰهِيمُ لَمَحْزُونُونَ

*«Күҙ илар, йөрәк тә ҡайғырыр, ләкин беҙ Раббыбыҙ разый булырлыҡ һүҙҙән башҡаны һөйләмәйек! Валлаһи, эй Ибраһим! Беҙ һинән айырылыуға бик ҡайғырабыҙ!»* – ти Ул (Бохари, «Жәнаиз», 44; Ибне Сәғд, I, 138).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер таш алып килергә ҡуша һәм уны ҡәберҙең башына баҫтырып ҡуя. Хәҙрәти Ибраһим ҡәбере шул рәүешле үҙенә күрә бер тамға менән билдәләп ҡуйыла. Беренсе тапҡыр уның ҡәбере өҫтөнә һыу ҙа һибелә.[338]

Шул ваҡытта ҡояш тотола. Сәхәбәләрҙең ҡайһы берҙәре, бер яһиллыҡ осоро ғәҙәте буйынса, быны хәҙрәти Ибраһимдың вафатына бәйләп ҡарай. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә әлеге тәбиғәт күренеше уңайынан ике рәкәғәт намаҙ ҡыла һәм сәхәбәләренең бындай фекерен хупламауын белдерә:

338. Ибне Сәғд, I, 144; Ибне Ғабдилбәрр, I, 59.

*«Ҡояш һәм Ай – Аллаһ ғәләмәттәренән ике билдә, ғәләмәт. Уларҙың былай тотолоу күренеше берәүҙең үлеменә лә, ғүмеренә лә бәйле түгел. Ай һәм Ҡояш тотолғанын күргәс, Аллаһты зекер итегеҙ һәм намаҙ уҡығыҙ!»*[339] (Нәсаи, «Кусуф», 14).

❁

Рәжәб айы барғанда, Эфиопияның Нәжәшие вафат була. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ике арала диңгеҙ йәйелеп ятыуына һәм ҡоро ерҙән дә әллә нисә көнлөк юл айырып тороуына ҡарамаҫтан, Нәжәшиҙең вафаты тураһында шул көндө үк сәхәбәләренә хәбәр итә һәм:

*«Алыҫ бер ҡалала үлгән ҡәрҙәшегеҙҙең йыназа намаҙын ҡылығыҙ!»* – тип бойора.

Сәхәбәләр: «Йә Рәсүлүллаһ! Кем ул?» – тип һорағас, Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Нәжәши Асхама ул! Бөгөн Аллаһтың изге ҡоло Асхама үлде! Ҡәрҙәшегеҙ өсөн Аллаһтан мәғфирәт һорағыҙ!»* – тип белдерә һәм, шулай ситтән тороп, уның йыназа намаҙын ҡылдыра (Мөслим, «Жәнаиз», 62-68; Әхмәт, III, 319; IV, 7).

Һуңыраҡ иһә Нәжәшиҙең ысынлап та нәҡ Аллаһ Рәсүленә әйткән көндө баҡыйлыҡҡа күскәнлеге билдәле була.

❁

Шәғбән айында иһә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк ҡыҙы, хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһүҙең хөрмәтле ҡатыны – Өммө Гөлсөм раҙыйаллаһу ғәнһә рәхмәтле Рахман хозурына күсә.[340]

❁

Тәбүк сәфәренән ике ай самаһы һуңыраҡ, йәғни зөлҡәғиҙә айында монафиҡтар башлығы Ғабдуллаһ ибн Үбәйҙең фетнә һәм гонаһ тулы ғүмере ахырына етә. Уның үлеме монафиҡтар эшсәнлегенең нигеҙен ҡаҡшата һәм унан һуң ҡалған бүтән монафиҡтарҙың күбеһе, тәүбә итеп, хаҡ мосолмандарға әйләнә.

Монафиҡтар башлығы вафат булғас, улы Ғабдуллаһ, атаһының васыяты буйынса, Аллаһ Рәсүле янына килеп һүҙ ҡуша: «Йә Рәсүлүллаһ! Ғабдуллаһ ибн Үбәй үлде. Күлдәгеңде бирһәң ине, уға кәфенлек итәм. Йыназа намаҙын уҡып, уның өсөн ярлыҡау һораһаң ине!». Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм

339. Хәҙерге заманда ла ҡайһы бер төбәктәрҙә, Ай һәм Ҡояш тотолған ваҡытта, намаҙ ҡылаһы һәм доға уҡыйһы урынға, барабан ҡағыу, мылтыҡтан атыу кеүек ғәҙәттәр күҙәтелә. Был – бидғәт һәм хорафатҡа нигеҙләнгән бер халыҡ йолаһы, уның ислам менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Байғыш, ябалаҡ ҡысҡырыуын да бәхетһеҙлек, тип һанап, йәш түгә башлау ҙа шундай уҡ яңылыш фекер-ғәҙәттәрҙән килә.

340. Ибне Сәғд, VIII, 38.

өҫтөндәге күлдәген сисеп бирә, тейешенсә әҙерләнгәс, намаҙын ҡылдыра. Шунан һуң түбәндәге аяти кәримә иңә:

وَلَا تُصَلِّ عَلَى أَحَدٍ مِّنْهُمْ مَّاتَ أَبَدًا وَلَا تَقُمْ
عَلَى قَبْرِهِ إِنَّهُمْ كَفَرُوا بِاللّٰهِ وَرَسُولِهِ وَمَاتُوا وَهُمْ فَاسِقُونَ

**«Уларҙан үлеүсе берәүҙең намаҙын ҡылыуҙан тыйыл, ҡәбере башында ла баҫып торма! Сөнки улар Аллаһты һәм Уның Пәйғәмбәрен инҡар иттеләр, көфөр булып үлделәр»** («әт-Тәүбә», 84) (Бохари, «Жәнаиз», 23; Ибне Мажә, «Жәнаиз», 31).

Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән ниңә былай эшләгәнлеген һорағас:

*«Күлдәгем һәм мин уның өсөн уҡыған намаҙ уны Аллаһтың ғазабынан һаҡламаҫ! Ләкин мин ошо ғәмәл бәрәбәренә уның ҡәүеменән меңкешенең мосолман буласағына өмөтләнәм»,* – тип аңлата.

Ысындан да, Ғабдуллаһ ибн Үбәйҙең шулай Аллаһ Рәсүле күлдәгенән һәм Ул уның өсөн уҡыясаҡ намаҙҙан шифа һәм шәфәғәт һорауын күргән хәзрәжлеләрҙән мең кеше, мөшриклектән баш тартып, мосолманлыҡҡа күсә.[341]

### Илселәр йылы

Мәккә яулап алына, Хөнәйен һуғышында еңеү насип ҡылына, солғаныштан һуң бер йыл уҙғас, Таиф халҡы мосолманлыҡ ҡабул итә һәм шул ваҡыттарҙа булған бик мәшәҡәтле Тәбүк походы ла уңышлы тамамлана. Хәҙер инде Ғәрәбстан ярымутрауында исламиәт ҡаршында ҡомасау булырлыҡ бер көртә лә ҡалмай.

Шул рәүешле исламдың бөйөклөгөн һәм юғарылығын дөрөҫ рәүештә таныу-белеү мөмкинлеге һәм форсатына эйә булған Ғәрәбстан ҡәбиләләре, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә делегациялар ебәреп, үҙҙәренең буйһоноуҙарын, тоғролоҡтарын белдерә башлай. Йәмән, Хадрамаут, Бәхрәйн, Амман, Сүриә һәм Иран сиктәренән йыйылған был делегациялар йә мосолманлыҡ ҡабул итергә, йә ислам диненә ҡереүҙәре тураһында хәбәр еткерергә тип киләләр һәм Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән үҙҙәренә ислам динен өйрәтерлек мөғәллимдәр, мөршидтәр һорайҙар.

Мәҙинәгә килгән делегацияларҙың исламды Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән шәхсән өйрәнеп, шунда уҡ ҡайтыр юлға ҡуҙғалыуы һәм белемдәрен ҡәбиләләренә тапшырыуы нисбәтенән бик күркәм миҫал – Бәни

341. Ғайни, VIII, 54; Диярбәкри, II, 140-141.

Түжиб вәкилдәре. Уларҙан ун өс кешелек делегация, зәкәт малдарын да алып, Аллаһ Рәсүле янына килә. Уларҙың был ғәмәле Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмдең күңеленә бик хуш килә. Ул делегацияны:

*«Хуш килдегеҙ!»* – тип ҡаршылай. Билали Хәбәшигә уларҙы иң шәп рәүештә ҡунаҡ итергә бойора. Бәни Түжиб делегацияһы: «Йә Рәсүлүллаһ! Малдарыбыҙҙағы Аллаһ хаҡын Һиңә алып килдек», – тиҙәр.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Уларҙы кире алып китеп, фәҡирҙәрегеҙгә таратығыҙ»,* – тип бойора.

Делегация ағзалары: «Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ фәҡирҙәребеҙҙән артҡанды ғына Һиңә алып килдек», – тиҙәр.

Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү: «Йә Рәсүлүллаһ! Ысынлыҡта, ғәрәп делегациялары араһында ошо Түжиб вәкилдәре шикеллеләре юҡ», – тип баһа бирә.

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Һидәйәт Аллаһ Тәғәлә ҡулында. Аллаһ үҙе хәйерен теләгән заттың йөрәген иманға асыр!»* – тип белдерә.

Түжиб делегацияһы Пәйғәмбәребеҙгә Ҡөрьән һәм сөннәт менән бәйле шаҡтай нәмәләр тураһында һорауҙар бирә. Һораған нәмәләрҙең яуаптары яҙмаса үҙҙәренә тапшырыла. Бындай тырышлыҡтары сәбәпле, Ғаләмдәр Әфәндеһенең уларға ҡарата иғтибары һәм ҡыҙыҡһыныуы арта. Бер нисә көндән һуң делегация китергә рөхсәт һорай. Уларҙан: «Ниңә ашығаһығыҙ?» – тип ҡыҙыҡһыналар.

«Артыбыҙҙа ҡалған ҡәүемебеҙ янына ҡайтып, Рәсүлүллаһтан һорай-һорай өйрәнгән нәмәләрҙе һәм күҙәткән-күргәндәрҙе шуларға аңлатасаҡбыҙ», – тиҙәр. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ янына барып, һаубуллашып китәләр. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм уларға Билали Хәбәшиҙе ебәрә. Бүләктәрен тапшырырға ҡуша, башҡа делегациялар менән сағыштырғанда, уларға ҡарата тағы ла йомартыраҡ, ҡунаҡсылыраҡ булыуҙы кәңәш итә (Ибне Сәғд, I, 323; Ибне Ҡаййум, III, 650-651).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм делегацияларға билдәле бер ваҡыт дауамында Мәҙинәлә йәшәп торорға ҡуша, шул рәүешле уларҙың Ҡөрьәни-Кәримде һәм дин нигеҙҙәрен өйрәнеүен, шәхсән Уның үҙ тәжрибәһен, көнкүрешен күҙәтеп, исламдың асылына төшөнөүҙәрен тәьмин итә. Мәҫәлән, Абдул-Кайс делегацияһы килгәс, ансарҙарға уларҙы ҡунаҡ итергә һәм һыйларға бойора. Шул ваҡытта зарури дини белемдәрҙе бирергә, намаҙ өсөн кәрәкле сүрәләрҙе ятлатырға кәңәш итә. Иртән килеп, ҡунаҡтарҙың хәл-әхүәлен, ансарҙарҙың мөғәмәләһенән ҡәнәғәт булыу-булмауҙарын һораша. Тегеләр иһә үҙҙәренең ҡәнәғәтлектәрен белдерә. Артабан Аллаһ Рәсүле

делегация ағзаларын, динде тағы ла тынысыраҡ шарттарҙа өйрәнә алһындар өсөн, берешәр-икешәр итеп сәхәбәләрҙең өйҙәренә тарата. Сәхәбәләрҙең тырышлығы һәм Абдул-Кайс вәкилдәренең белем алырға ынтылышынан бик ҡәнәғәт ҡалған Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, уларҙың һәр береһе менән айырым ҡыҙыҡһынып, «Фатиха» менән башҡа сүрәләрҙе, «Әттәхиййәт»те нисек ятлағандарын һәм сөннәттәрҙе ни ҡәҙәр үҙләштергәндәрен шәхсән үҙе тикшерә.[342]

Шулай итеп, исламиәт көн артынан көн бөтә Ғәрәбстанға тарала. Кешеләр төркөм-төркөм килеп, ислам диненә күсә. Мәҙинә һәр көн яңы килеүсе мосафирҙарҙан ташып тора. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм килеүселәрҙе иң күркәм рәүештә ҡаршы ала, уларға хөрмәт күрһәтеп һәм һыйлап, һәр ҡайһыһының дәрәжәһен, үҙ-үҙен тотошон һәм ғәҙәт-йолаларын күҙ уңында тотоп, әңгәмәләр ҡора, улар йәшәгән төбәктәрҙең хәл-әхүәле тураһында мәғлүмәттәр ала, үтенестәрен тыңлап, һорауҙарына яуап бирә, мәсьәләләрен хәл итә, күңелдәрен исламдың нуры, хозурлығы һәм шатлығы менән биҙәй.[343]

Инде әүәлге ауырлыҡтар үҙ урынын бәрәкәтле игелеккә, йомшаҡлыҡҡа ҡалдырып китә. Шунан һуң Аллаһ Тәғәлә үҙенән иңдерелгән был йомартлыҡҡа, ниғмәткә шөкөр итеү мәсьәләһендә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә һәм Уның йөҙөндә ошо ҡыйынлыҡтар менән һыналған мөьминдәргә түбәндәгесә бойора:

إِذَا جَاءَ نَصْرُ اللهِ وَالْفَتْحُ وَرَأَيْتَ النَّاسَ يَدْخُلُونَ فِى دِينِ اللهِ
أَفْوَاجًا فَسَبِّحْ بِحَمْدِ رَبِّكَ وَاسْتَغْفِرْهُ إِنَّهُ كَانَ تَوَّابًا

**«Аллаһтың ярҙамы һәм еңеү килеп, кешеләрҙең төркөм-төркөм Аллаһ диненә кереүҙәрен үҙең күргән ваҡытта, Раббыңа хәмед-çәнәләр әйтеп, Уны тәсбих ит һәм Унан мәғфирәт һора! Сөнки Ул – тәүбәләрҙе күп ҡабул итеүсе, ярлыҡаусы»** («ән-Наср», 1-3).

Исламдың Ғәрәбстанда шулай тиҙ таралыуының һижрәттән һуң туғыҙынсы йылда ысынға ашыуы һәм Мәҙинәгә хак динде өйрәнеү өсөн төркөм-төркөм төрлө ҡәбилә илселәренең килеүе уңайынан, был йылды «илселәр йылы» тип атайҙар.

### Хаж йолаһы

Һижрәттең туғыҙынсы йылына саҡлы хаж хәҙрәти Ибраһим ғәләйһиссәләмдең хәниф дине ҡушканса башҡарыла, тик шул уҡ ваҡытта

342. Әхмәт, III, 402.
343. Ҡарағыҙ: Нәсаи, «Ғөмрә», 5.

был йолаға мөшриктәр тарафынан бик күп хата ғәмәлдәр өҫтәлә. Ул йылды иһә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хаж буйынса әмир итеп билдәләп, ислами хажды мосолмандарға өйрәтеү өсөн, хәҙрәти Әбү Бәкерҙе өс йөҙ кешелек бер төркөм менән Мәккәгә ебәрә. Пәйғәмбәр үҙе иһә унынсы йылда хаж ҡыласағын белдерә. Ҡорбанлыҡ мал сифатында муйындарына тамға тағылған егерме дөйәне улар менән бергә ебәрә.

Хәҙрәти Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү хажиҙар төркөмө менән юлға сыҡҡан арала, «Тәүбә» сүрәһенең тәүге аяттары иңә. Шул рәүешле боттарҙан арындырылған Аллаһ йортоноң мөшриктәрҙән дә таҙартылыуы әмер ителә. Сөнки ул ваҡытҡа ҡәҙәр мөшриктәрҙең Ҡәғбәлә ғибәҙәт ҡылыуына ҡаршы килмәгән булалар. Ләкин асылына ҡайтарылған Изге Ҡәғбәлә мөшриктәрҙең ҡул саба-саба, шәрә килеш әхлаҡһыҙ рәүештә үҙҙәренә күрә ғибәҙәт ҡылыуҙары, тәүхид күҙлегенән ҡарағанда, һис тә килешле түгел, халыҡ араһында буталсыҡлыҡҡа килтерә. «Тәүбә» сүрәһенең шул ваҡытта иңгән аяттары Ҡәғбәлә тәүхидкә ҡаршы хөрмәтһеҙлеккә сик ҡуйған аяттар була. Аллаһ Тәғәлә былай тип белдерә:

بَرَاءَةٌ مِّنَ اللّٰهِ وَرَسُولِهِ إِلَى الَّذِينَ عَاهَدتُّم مِّنَ الْمُشْرِكِينَ فَسِيحُوا فِى الْأَرْضِ
أَرْبَعَةَ أَشْهُرٍ وَاعْلَمُوا أَنَّكُمْ غَيْرُ مُعْجِزِى اللّٰهِ وَأَنَّ اللّٰهَ مُخْزِى الْكَافِرِينَ وَأَذَانٌ مِّنَ
اللّٰهِ وَرَسُولِهِ إِلَى النَّاسِ يَوْمَ الْحَجِّ الْأَكْبَرِ أَنَّ اللّٰهَ بَرِيءٌ مِّنَ الْمُشْرِكِينَ وَرَسُولُهُ
فَإِنْ تُبْتُمْ فَهُوَ خَيْرٌ لَّكُمْ وَإِنْ تَوَلَّيْتُمْ فَاعْلَمُوا أَنَّكُمْ غَيْرُ مُعْجِزِى اللّٰهِ وَبَشِّرِ الَّذِينَ
كَفَرُوا بِعَذَابٍ أَلِيمٍ إِلَّا الَّذِينَ عَاهَدتُّم مِّنَ الْمُشْرِكِينَ ثُمَّ لَمْ يَنْقُصُوكُمْ شَيْئًا وَلَمْ
يُظَاهِرُوا عَلَيْكُمْ أَحَدًا فَأَتِمُّوا إِلَيْهِمْ عَهْدَهُمْ إِلَى مُدَّتِهِمْ إِنَّ اللّٰهَ يُحِبُّ الْمُتَّقِينَ

**«Һеҙ ант бирешкән мөшриктәргә Аллаһ һәм Унының Рәсүленән бер киҫәтеү!** (Эй мөшриктәр!) **Ер йөҙөндә тағы дүрт ай йөрөп ҡалығыҙ! Шуны яҡшы белегеҙ, һеҙ Аллаһты көсһөҙ итеп ҡалдыра алмаясаҡһығыҙ; Аллаһ иһә кафырҙарҙы хур** (һәм тарҡау) **итәсәк. Был – Аллаһ һәм Рәсүленән Бөйөк хаж көнөндә кешеләргә иғлан. Аллаһ менән Унының Пәйғәмбәре мөшриктәрҙән йыраҡ** (йәғни һәр төрлө элемтәһен өҙә)**. Әгәр тәүбә итһәгеҙ, был һеҙҙең өсөн хәйерлерәк. Һәм әгәр һеҙ йөҙ сөйөрһәгеҙ, белегеҙ: Аллаһты көсһөҙ итеп ҡалдыра алмаясаҡһығыҙ.** (Эй Рәсүлем!) **Кафырҙарға ҡайғы килтерәсәк ғазап тураһында хәбәр ит! Ләкин үҙҙәре менән һеҙ ант бирешкән мөшриктәрҙән** (ант шарттарын үтәгәндәренә) **бер нәмәне лә кәмһетеп ҡарамағандарына һәм һеҙгә ҡаршы көрәштә бер кемгә лә**

**булышмағандарға** (әлеге хөкөм) **ҡағылмай. Улар менән антты ваҡыты сыҡҡансы ахырға ҡәҙәр үтәгеҙ! Аллаһ тәҡүәләрҙе һөйә!»** («әт-Тәүбә», 1-4).

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِنَّمَا الْمُشْرِكُونَ نَجَسٌ فَلَا يَقْرَبُوا الْمَسْجِدَ الْحَرَامَ
بَعْدَ عَامِهِمْ هَذَا وَإِنْ خِفْتُمْ عَيْلَةً فَسَوْفَ يُغْنِيكُمُ اللّٰهُ مِنْ
فَضْلِهِ إِنْ شَاءَ إِنَّ اللّٰهَ عَلِيمٌ حَكِيمٌ

**«Эй иман килтереүселәр! Мөшриктәр – нәжестер. Шуға күрә был йылдарҙан һуң Харам мәсетенә яҡын килмәһендәр! Әгәр ярлылыҡтан ҡурҡаһығыҙ икән,** (белеп тороғоҙ), **Аллаһ теләһә, һеҙҙе үҙ рәхмәте менән бай ҡыласаҡ. Шөбһәһеҙ, Аллаһ – Ғалим, Хаким (хикмәт Эйәһе) ул»** («әт-Тәүбә», 28).

Әлеге аяти кәримәләрҙе иғлан итһен өсөн, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһүҙе хәҙрәти Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү артынан Мәккәгә ебәрә.

Байрамдың беренсе көнөндә хәҙрәти Ғәли таш ырғытыла торған Ғәҡәбә ҡалҡыулығы янында тороп баҫып, Аллаһ Рәсүле уға йөкләгән вазифаны, бер хөтбә һөйләп, еренә еткерә. «Тәүбә» сүрәһенән күпмелер һандағы аяттар уҡығас, Рәсүлуллаһ тапшырған түбәндәге дүрт маддәне бөтә халыҡҡа ишеттерә:

1. (Һәр кем белһен), йәннәткә бары мөьминдәр генә керә аласаҡ.

2. Ҡәғбә бер ҡасан да шәрә килеш тауаф ҡылынмаясаҡ (мөшриктәрҙең шул ҡиәфәттә башҡарған бидғәттәре туҡтатыла).

3. Шул йылдан һуң һис бер мөшрик Бәйтуллаһҡа яҡын килмәйәсәк.

4. Бары Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән ант бирешеп, быға тоғролоҡ һаҡлаған мөшриктәр өсөн генә, билдәләнгән ваҡыт уҙғансы, анттың шарттары ғәмәлдә ҡаласаҡ.

Шул йылдан һуң башҡа бер мөшрик тә хажға бармай һәм уларҙың Ҡәғбәне шәрә килеш тауаф ҡылыу ғәҙәте бөтөрөлә. Шул йылдан һуң ширктең үҙҙәренә бәхетһеҙлек килтергәнлеген төшөнгән һуңғы мөшриктәр ҙә ниһәйәт иман юлын һайлай. Шул йылдан һуң Изге Ҡәғбә боттарҙан арындырылған кеүек, мөшриктәрҙән дә таҙартылып, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең олуғ хажы өсөн әҙер хәлгә килтерелә.[344]

344. Ибне Һишам, IV, 201; Тирмизи, «Хаж», 44/871; Ваҡыди, III, 1077.

# ҺИЖРӘТТЕҢ УНЫНСЫ ЙЫЛЫ

**Ғәди ибн Хәтимдең исламды ҡабул итеүе**

Тайй ҡәбиләһенән Гәдизең атаһы Хәтими Таизең йомартлығы дастандарға кергән. Ғәди ҡәүемендә айырыуса хөрмәтле, дәрәжәле урын биләй, телгә оҫта, һәр һорауға яуап бирергә әҙер, фазиләтле һәм йомарт зат була. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һижрәттең туғыҙынсы йылында хәҙрәти Ғәлиҙе Тайй ҡәбиләһенең бото Фүлсте емерергә ебәргәс, Ғәди Дамаскҡа ҡаса. Һеңлеһе Сәффанә иһә әсирҙәр араһында Мәҙинәгә килтерелә. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ Сәффанәне иректә ҡалдыра; кейем-һалым, атланып барырға хайуан, юллыҡ аҙыҡ-түлек биреп, үҙ ҡәүеменән ышаныслы кешеләр оҙатыуында Дамаскҡа ебәрә.

Ғәди ибн Хәтим һөйләгәндәрҙән:

«Сәффанә аҡыллы ҡатын ине. Унан: «Ул заттың эштәре тураһында фекерең ниндәйерәк?» – тип һораным. Ул миңә: «Валлаһи, һинең тиҙерәк Уға ҡушылыуыңды хуплайым. Әгәр Ул ысындан да Пәйғәмбәр икән, Уға эйәреүҙә башҡаларҙан алғараҡ сығыу һинең өсөн бер фазиләт һәм өҫтөнлөк булыр. Ул бер хөкөмдар икән, Уның ярҙамы менән Йәмәндәге дәрәжәңде, етәкселегеңде һаҡлап ҡалырһың, меҫкенлеккә һәм түбәнлеккә төшмәҫһең! Инде ҡарар һинең ихтыярҙа!» – тине. «Валлаһи, бик урынлы фекер был! Мин әлеге зат янына барырмын. Ул бер алдаҡсы икән, (ялғаны) миңә зарар килтермәҫ. Әгәр дөрөҫ бәндә икән, әйткәндәрен тыңлармын, үҙенә эйәрермен, буйһонормон!» – тинем һәм Мәҙинәгә килдем. Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм янында туған-тумасаларын, ҡатындары һәм балаларын күргәс, аңланым: Унда Хөсрәүҙеке йәки Цезарҙыҡы кеүек зиннәт тә, байлыҡ та юҡ икән!

Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡулымдан етәкләп, мине өйөнә алып килде. Юлда Уны өлкән йәштәге бер хәйерсе ҡатын туҡтатты һәм үҙенең мохтажлығы тураһында һөйләне. Ул иһә оҙаҡ ҡына ваҡыт аяғөҫтө килеш әлеге ҡатындың зарҙарын тыңланы һәм мәсьәләһен хәл итте. Өйөнә ингәс, миңә:

*«Ошоноң өҫтөнә ултыр!»* – тип, хөрмә сүсе тултырылған ҡултыҡ мендәре тәҡдим итте. Мин: «Юҡ! Уның өҫтөнә Һин ултыр!» – тип әйттем.

Рәсүлүллаһ миңә:

*«Юҡ, һин ултырырһың!»* – тип бойорҙо.

Мин – мендәр өҫтөнә, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә ҡоро ергә ултырҙы. Күңелемдән: «Валлаһи, был – хөкөмдар эше түгел!» – тип уйлап ҡуйҙым.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ғәди! Мосолман динендә бул – сәләмәтлек алырһың»,* – тигәс: «Минең динем бар бит», – тип яуап бирҙем.

*«Һинең динеңде һинән яҡшыраҡ беләм!»* – тип белдерҙе Рәсүлүллаһ. «Минең динемде минән яҡшыраҡ беләһеңме?» – тип һорау бирҙем.

*«Әйе! Һин **Рәкуси** түгелме ни?*[345] *Ҡәүемең яулап алған ғәниммәттәрҙең дүрттән берен үзеңә алаһыңмы?»* – тип һораны. «Эйе, шулай», – тинем.

*«Хәкикәттә, был – динеңә күрә һиңә хәләл түгел бит!»* – тигәс, башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне. Рәсүлүллаһ ғәнимәт хаҡында телгә алғас, бик оялдым! «Эйе! Валлаһи, шулай!» – тип, һүҙҙәрен раҫланым. Уның Аллаһ тарафынан ебәрелгән бер Пәйғәмбәр икәнлеген аңланым. Рәсүлүллаһ салләллаһу галәйһи вә сәлләм мине оятҡа һалған һүҙен бүтән ҡабатламаны. Ул әңгәмәне дауам итте:

*«Һинең исламға күсеүеңә ҡомасаулаған сәбәпте беләм. Һин: «Уға меҫкен-зәгифтәр, ғәрәптәр хөрмәт итмәгән көсһөҙ бәндәләр эйәрә», – тип уйлайһың. Һин Хираны беләһеңме?»*

«Күргәнем юҡ, әммә ишеткәнем бар», – тинем.

*«Йәнемде ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ был дәғүәтте ахырына еткерәсәк. Шулай буласаҡ ки: яңғыҙ бер ҡатын-ҡыҙ, Хиранан юлға сығып, Аллаһ йортон тауаф ҡыла аласаҡ. Һуңынан Хөсрәү ибн Хүрмүздең хазиналары яулап алынасаҡ!»* – тип белдерҙе.

«Хосрой ибн Хүрмүздекеме?» – тип ҡабатлап һораным.

*«Эйе, Хосрой ибн Хүрмүздеке!»* – тип раҫланы Пәйғәмбәр. Артабан:

*«Тиҙҙән мал-мөлкәт шул ҡәҙәр күбәйәсәк, һис кем фәкирлектә йөрөмәйәсәк, малдың зәкәтен бирерлек кеше табылмаясаҡ!»* – тип хәбәр һалды.

Мосолманлыҡ ҡабул итеүемә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бик һөйөндө, йөҙөндә бик ҙур шатлыҡ күрҙем. Ансарҙарҙан берәүҙең өйөндә ҡунаҡ булырға ҡушты. Иртә-кис уның өйөнә барып йөрөй башланым. Бер генә намаҙ ваҡытында ла Уны һағынмайса ҡалмай инем!»

Был ваҡиғаны һуңынан бәйән ҡылғанда, Ғәди раҙыйаллаһу ғәнһү былай ти: «Валлаһи, Хиранан дөйәһенә атланып, бер ҡатындың ҡурҡмайынса

345. Рәкусиййә – христианлыҡ менән мандаизм araһындағы, икеһенең ҡатнашмаһынан ғибәрәт бер дини ышаныу.

юлға сығыуын, ошо Бәйтуллаһты хаж ҡылыуын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем! Валлаһи, шулай уҡ Хосройҙоң хазиналарын яулап алыусылар араһында мин дә бар инем. Йәнемде ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, өсөнсө хәл дә, әлбиттә, буласаҡ. Сөнки ул хаҡта Рәсүлүллаһ әйтте» (Бохари, «Мәнаҡиб», 25; Әхмәт, IV, 257, 377-379; Ибне Һишам, IV, 246; Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* V, 62).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм еткергән башҡа хәбәр ҙә ысынға аша. Хәлифә Ғүмәр ибн Ғабдүлғәзиз зәкәт өсөн яуаплы түрәне Африка илдәренә ебәрә. Әлеге түрә малдарын тарата алмайынса, кире алып ҡайта, сөнки зәкәт бирерлек берәүҙе лә таба алмай. Шунан һуң ул был аҡсаларға бик күп ҡол һатып алып, уларҙы азат итә.[346]

## ХУШЛАШЫУ ХАЖЫ – Йәшәйеш нурының тәүге һәм һуңғы хажы

Хаж фарыз итеп билгеләнгәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡылған беренсе һәм һуңғы хаж – Хушлашыу хажы тип йөрөтөлә. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әлеге хажында мосолмандар менән һаубуллашҡас, кешеләр: «Был – Хушлашыу хажы», – тиҙәр һәм ошо исем киң таныла.[347] Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә әлеге сәфәрен «Хажжәтүл-ислам» һүҙе менән телгә ала.[348]

Ғәрәбстан баштан-аяҡ мосолманлыҡҡа ингән һәм исламдың бөйөклөгө һәм хакимлығы иҫ киткес көсәйгән осор – һижрәттең унынсы йылына тура килгән әлеге хажға хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тарафынан бөтә мосолмандар саҡырыла.

Аллаһ һәм Рәсүлүллаһҡа мөхәббәт менән тулып ашҡан йәндәр әлеге саҡырыуҙы берҙәм ҡабул итә. Был хәбәр Мәҙинәнән сит ерҙәргә ирешкәс, кешеләр һәр тарафтан йылға булып ағыла. Юлда уларға ҡушылыусыларҙың иҫәбе-һаны булмай. Тирә-яҡ күҙ күреме йыраҡлығында халыҡ менән тула. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән хаж ҡылыу мөмкинлеге өсөн, донъяның дүрт тарафынан йүгерә-саба килгән мөьминдәрҙең һаны йөҙ егерме мең тирәһенә етә. Улар гүйә бер йөрәк булып тибә, хыял етмәҫлек юғарылыҡтағы манзараға шаһит була.

Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хаж һәм ихрам тураһында ундағыларға ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргәс, юлға ҡуҙғала. Йәшәйеш нуры, хажда ҡорбан итеп салыу өсөн, үҙе менән йөҙгә яҡын дөйә алып бара. Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм сәфәр буйы мосолмандарға гел хаж тураһында һөйләй. Халыҡ алдында уҡыған хөтбәһендә ихрамдың һәм хаждың вәжиб менән сөннәттәрен аңлата. Зөлхөләйфәгә еткәс, Акыйк үҙәнлегендә мосолмандарға былай тип өндәшә:

346. Ҡарағыҙ: Бути, 434 б.
347. Бохари, «Хаж», 132.
348. Хәйсәми, III, 237.

*«Раббым тарафынан ебәрелгән Ябраил был төндә яныма килеп: «Әлеге мөбәрәк үҙәнлектә намаҙ ҡыл һәм «хажға ла, ғөмрәгә лә ниәт иттем», тип әйт!» – тип бойорҙо»* (Бохари, «Хаж», 16).

Әфәндебеҙ унда ике рәҡәғәт ихрам намаҙы уҡый. Аллаһҡа хәмед-çәнәләр, тәсбих һәм тәкбирҙәр әйткәс:

*«Йә Аллаһым! Быны миңә рыяһыҙ һәм ҡыланыуһыҙ (кеше күрһен һәм шөһрәт ҡаҙаныу өсөн эшләнмәгән) хаж итеп, уны хәйерле һәм ҡабул ҡыл!»* – тип доға ҡыла (Ибне Мажә, «Мәнасик», 4).

Зөлхөләйфәлә ихрамға кергәс:

لَبَّيْكَ اَللّٰهُمَّ لَبَّيْكَ، لَبَّيْكَ لَا شَرِيكَ لَكَ لَبَّيْكَ،

اِنَّ الْحَمْدَ وَالنِّعْمَةَ لَكَ وَالْمُلْكَ، لَاشَرِيكَ لَكَ

– тип тәлбиә әйтә башлай (Бохари, «Хаж», 26).

Һуңыраҡ:

*«Һеҙҙән ҡайһығыҙ хаж һәм ғөмрәгә ниәт ҡылырға теләй, ана шулай эшләһен!»* – тип бойора.

Аллаһ Рәсүле ихрамға кереп, тәлбиәгә керешкәс, Ябраил ғәләйһиссәләмдең үҙ янына килеп: «Йә Мөхәммәт! Сәхәбәләреңә тәлбиәлә тауыштарын көсәйтергә ҡуш! Сөнки был – хаждың бер йолаһы!» – тип әйткәнен тапшыра (Ибне Мажә, «Мәнасик», 16).

Ерҙәр һәм күктәр әйтелгән тәлбиә тауыштары менән яңғырап тора; Аллаһҡа буйһоноу, Уның ҡаршында баçалҡылыҡ, тыйнаҡлыҡ хисе, рухи тыныслыҡ һәр ерҙе йәтмәләй ҡаплап ала.

Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләәтү үәс-сәләәм үҙе булған урындарҙа мосолмандарға имам булып, намаҙ уҡыта. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ намаҙ ҡылдырған ул ерҙәрҙә, бер тоғролоҡ һәм мөхәббәт көүҙәләнеше сифатында, һуңынан мәсеттәр төҙөлә.[349]

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Бәйтуллаһты күреүгә, ҡулын күтәреп:

*«Йә Аллаһым! Был Бәйтеңдең дәрәжәһен, бөйөклөгөн, данын һәм изгелеген арттыр. Уға хаж һәм ғөмрә менән хөрмәт күрһәтеүселәрҙең дә дәрәжәһен, данын, изгелеген, хөрмәтте һәм игелеклеген арттыр!»* – тип доға ҡыла (Ибне Сәғд, II, 173).

349. Ибне Сәғд, II, 173.

Халатының бер осон уң яҡ ҡултыҡ аҫтынан алып, һул иңбашына һалған һәм уң беләген асыҡ ҡалдырған хәлдә, Рәсүлүллаһ Харам мәсетенә кереп, Һәжәри әсүәд нигеҙе янына бара һәм уны сәләмләй. Был ваҡытта күҙҙәренә йәш тула. Пәйғәмбәр Ҡара ташты үбә лә, ҡулдары менән уның өҫтөнә ҡағылып алғас, йөҙөн һыйпап ҡуя.

اَللّٰهُمَّ اِيمَانًا بِكَ وَتَصْدِيقًا بِكِتَابِكَ وَاتِّبَاعًا سُنَّةَ نَبِيِّكَ

*«Аллаһым! Һиңә иман килтереп, Китабыңды танып, Пәйғәмбәрҙәреңдең сөннәтенә буйһонop (башлайым)»,* – тип, Һәжәри әсүәд мөйөшөнән тауаф ҡыла башлай (Хәйсәми, III, 240).

Тауафтың тәүге өс әйләнешен Ул, аҙымдарын ҡыҫҡартып, иңбаштарын һелкетеп, тиҙ-тиҙ уҙа. Рүкни-Йәмани һәм Һәжәри әсүәд тирәһенә килгәс:

رَبَّنَا آتِنَا فِى الدُّنْيَا حَسَنَةً وَفِى الْآخِرَةِ حَسَنَةً وَقِنَا عَذَابَ النَّارِ

**«...Йә Раббыбыҙ! Беҙгә донъялыҡта ла игелек бир, әхирәттә лә игелек бир. Беҙҙе йәһәннәм ғазабынан һаҡла!»** – аятын («әл-Бәҡара», 201) уҡый. Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ, тауафтың был өлөшөн тамамлағас, Ҡара ташты үбә, ҡулдары менән уның өҫлөгөнә ҡағылып алғас, йөҙөн һыпыра. Шунан һуң кешеләр араһынан көс-хәл менән үтеп, Ибраһим маҡамына килә. Маҡам менән Бәйтуллаһ араһында ике рәкәғәт намаҙ ҡыла. Артабан, кире боролоп, йәнә Һәжәри әсүәдте сәләмләй һәм хәҙрәти Ғүмәргә:

*«Эй Ғүмәр! Һин – көс-ҡеүәтле бер әҙәм. Һәжәри әсүәд янына килеү өсөн, кешеләрҙе этеп-төртөп, зәғифтәргә уңайһыҙлыҡ, ауырлыҡ килтермә! Үҙең дә яфаланма, башҡаларҙы ла интектермә. Кешеләр күп булмаһа, Һәжәри әсүәдте сәләмлә лә үп, юҡ икән, йыраҡтан ғына «ҡул менән ҡағылып үпкәндәй» ишара яһап, тәүхид кәлимәһен һәм тәкбир әйтеп уҙ!»* – тип бойора[350] (Хәйсәми, III, 241; Әхмәт, I, 28).

Ошонан һуң Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡәғбәнең Бәни Махзум ишегенән сығып, Сафа тауына китә. Шул тирәгә яҡынайғас:

350. Бер кешене лә рәнйетмәҫ, уңайһыҙламаҫ өсөн, хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү, Ҡара ташты йыраҡта ғына сәләмләй. Был – хәҙерге заманда хажға барыусы мосолмандар бик иғтибарлы булырға тейеш бер мәсьәлә. Хажда ирешкән сауаптарҙың мөьминдәрҙе рәнйетеү арҡаһында юҡҡа сығарылмауы мөһим. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм кәңәшен үтәп, Ҡәғбәгә йәки Ҡара ташҡа яҡынайыу өсөн башҡа кешеләрҙе этеү-төртөүҙән, уларҙы уңайһыҙлау кеүек ғәмәлдәрҙән ҡәтғи тыйылыу кәрәк. Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү бер тапҡырында Ҡара ташҡа килеп, уны үбә һәм: «Беләм: һин бер таш ҡына, файҙаң да, зарарың да булмаҫ. Әгәр Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең һине үпкәнен күрмәгән булһам, мин дә үпмәҫ инем», – тип әйтә (Бохари, «Хаж», 50; Мөслим, «Хаж», 251). Сәхәбәләрҙең бындай фекер һөрөшө, бер эштең хикмәте аңлашылып бөтмәһә лә, Аллаһ Рәсүленән үрнәк алырға һәм Уның сөннәтен үтәргә кәрәклеген күрһәтә.

إِنَّ الصَّفَا وَالْمَرْوَةَ مِنْ شَعَآئِرِ اللّٰهِ

**«Дөрөҫлөктә, Сафа менән Мәрүә – Аллаһтың билдәләренән...»** – аятын («әл-Баҡара», 158) уҡый һәм:

*«Аллаһ аятта әүәл иҫкә алғандан башлайым!»* – тип, сәғи йолаһын үтәүҙе Сафанан башлар өсөн, шунда йүнәлә. Бәйтуллаһты күргәс, уға ҡарап, тәһлил һәм тәкбир әйтә. Ул түбәндәге һүҙҙәрҙе өс йәки ете мәртәбә ҡабатлай:

لَا اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ وَحْدَهُ لَا شَرِيكَ لَهُ، لَهُ الْمُلْكُ وَلَهُ الْحَمْدُ يُحْيِ
وَيُمِيتُ وَهُوَ عَلٰى كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرٌ لَا اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ وَحْدَهُ لَا شَرِيكَ لَهُ
اَنْجَزَ وَعْدَهُ وَنَصَرَ عَبْدَهُ وَهَزَمَ الْأَحْزَابَ وَحْدَهُ

*«Берҙән-бер Аллаһтан башҡа һис бер илаһ юҡ. Уның иптәше һәм тиңдәше юҡ. Мөлкәт – Уныҡы, маҡтауҙар – Уға ғына. Ул терелтер, үлтерер. Ул һәр нәмәгә ҡеҙрәтле. Аллаһтан башҡа һис бер илаһ юҡ. Аллаһ вәғәҙәһен үтәне, ҡолона ярҙам итте, Ул йыйылған бөтә дошман ғәскәрҙәрен тар-мар килтерҙе»* (Ибне Мажә, «Мәнасик», 84).

Һуңынан Сафанан Мәрүә тауына табан китә. Сәғи йолаһы башҡарыла торған үҙәнлектең уртаһына еткәс, Аллаһ Рәсүле аҙымдарын тиҙәйтә, был урынды уҙғас тәбиғи тиҙлегенә ҡайта. Шул саҡ:

رَبِّ اغْفِرْ وَارْحَمْ وَاَنْتَ الْعَزُّ الْاَكْرَمُ

*«Йә Раббы! Мине ярлыҡа һәм миңә рәхмәтеңде ҡыл! Һин – иң ғәзиз, иң кәрим!»* – тип доға уҡый (Хәйсәми, III, 248).

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәрүә тауына килгәс, Сафала эшләгәндәрен тулыһынса ҡабатлай. Сафа менән Мәрүә араһында ете мәртәбә уҙып, сәғиҙе Мәрүәлә тамамлай.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәккәлә дүрт көн ҡала. Бишенсе көндө (тәүриә көнө) Бәйтуллаһты тауаф ҡылғандан һуң, дөйәһенә атлана. Минаға барып, өйлә, икенде, аҡшам, йәстү һәм сабах намаҙҙарын уҡый. Ҡояш сыҡҡансы көтөп тора. Зөлхизәнең туғыҙынсы көнөндә иртән Ғәрәфәткә таба юл тота. Минанан Ғәрәфәткә барып еткәнсе, тәлбиә әйтеүен туҡтатмай.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әлеге ғәмәлдәре менән өммәтенә хажды нисек ҡылырға кәрәклеген шәхсән күрһәтеп, бөтә вазифаларҙы үтәгәс, Ғәрәфәттә, хәҙер Нәмирә мәсете торған ерҙә, дөйәһе өҫтөндә атаҡлы «Хушлашыу хөтбәһе»н һөйләй:

*«Эй кешеләр! Һүҙҙәремде иғтибар менән тыңлағыҙ! Белмәйем, бәлки, Мин быйылдан һуң һеҙҙең менән бында, бәлки ҙә, мәңге һеҙҙең арала була алмам!*

*Эй кешеләр! Был көндәрегеҙ ни ҡәҙәр бәхетле, изге көндәр, был айҙарығыҙ ни ҡәҙәр изге айҙар икән, был (Мәккә) ҡалағыҙ ни ҡәҙәр изге ҡала икән, йәндәрегеҙ, малдарығыҙ, намыҫтарығыҙ ҙа шул ҡәҙәр изге! Уларға һәр төрлө һөжүм, тыҡшыныу харам.*

*Сәхәбәләрем! Иртәгә Раббығыҙ менән ҡауышасаҡһығыҙ һәм бөгөнгө һәр эш-ғәмәлегеҙҙән мотлаҡ хисап тотасаҡһығыҙ! Һаҡ булығыҙ, Минән һуң әүәлге хаталарға (аҙашыуҙарға) кире ҡайтып, бер-берегеҙҙең муйынын ҡырмағыҙ! Белеп тороғоҙ, Мин алдан китеп, шишмәнең башында һеҙҙе көтәсәкмен! Башка өммәттәргә ҡарағанда һеҙҙең күплегегеҙгә һөйөнәсәкмен. Һаҡ булығыҙ, (гонаһ эшләп) йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтермәгеҙ!*

*Сәхәбәләрем! Кемдә үҙе менән берәй аманат бар икән, уны хужаһына бирһен! Рибаның һәр төрө тыйылды; улар аяғым аҫтында. Ләкин асыл бурысығыҙҙы түләргә кәрәк. Золом ҡылмағыҙ, үҙегеҙ ҙә золомға тарымағыҙ! Аллаһ әмере менән хәҙер рибасылыҡ тыйылды. Яһилиәт осоронан ҡалған был бысраҡ йоланың һәр төрлөһөн бөтөрәм – улар аяғым аҫтында. Иң әүәл Мин Ғәбделмотталиб улы (ағайым) Гәббәстең процентарын юҡҡа сығарам.*

*Сәхәбәләрем! Яһиллыҡ осоронда ҡулланылған ҡан үстәре лә тулыһынса бөтөрөлә. Иң әүәл Мин (бабам) Ғәбделмотталибтың ейәне (ағайымдың улы) Рәбиғаның ҡан үсен юҡҡа сығарам.*

*Эй кешеләр! Бөгөн шайтан һеҙҙең ошо ерҙәрегеҙҙә яңынан йоғонтоһон йәйеү һәм хакимлығын короу көсөн мәңгегә юғалтты. Ләкин Мин тыйған был нәмәләрҙән ҡала һеҙ ваҡ-төйәк тип ҡараған эштәрҙә уға эйәрһәгеҙ, был да уны һөйөндөрәсәк. Динегеҙҙе һаҡлар өсөн, уларҙан да тыйылығыҙ!*

*Эй кешеләр! Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуктарын һаҡлағыҙ! Уларға мөнәсәбәтегеҙ шәфкәт һәм мөхәббәтле булһын! Уларға мөғәмәләгеҙ мәсьәләһендә Аллаһтан ҡурҡырға кәңәш итәм. Һеҙ ҡатындарҙы Аллаһтың аманаты итеп алдығыҙ; Аллаһ исеме менән вәғәҙә биреп, уларҙың намыҫтарын һәм ғиффәттәрен үҙегеҙгә хәләл иттегеҙ! Һеҙҙең ҡатындар ҡаршында хаҡығыҙ, уларҙың да һеҙҙең ҡаршығыҙҙа хаҡтары бар. Һеҙҙең ҡатындар өҫтөндәге хаҡығыҙ – ғаилә намыҫына уларҙың һис кемгә тап төшөрөргә юл ҡуймауы. Ҡатындарҙың һеҙҙең өҫтөгөҙҙәге хаҡтары шәриғәткә ярашлы рәүештә һәр төрлө ризыҡ һәм кейем-һалым менән тәьмин итеүегеҙҙән ғибәрәт. Бер ҡатындың, иренән рөхсәт алмайынса, уның малынан һис бер нәмәне башка кешегә биреүе хәләл булмаҫ!*

*Ҡолдарығыҙға килгәндә, уларға үҙегеҙ ашағанды ашатыуға, үҙегеҙ кейгәнде кейҙереүгә иғтибар бирегеҙ! Һеҙ ғәфү итә алмаҫлыҡ хата эшләһәләр,*

*уларҙы иреккә ебәрегеҙ! Ләкин уларҙы һис ҡасан ҡыйырһытмағыҙ! Сөнки улар ҙа – Аллаһ ҡоло.*

*Эй мөьминдәр! Һүҙемде яҡшылап тыңлағыҙ һәм яҡшылап иҫтә ҡалдырығыҙ! Мосолман – мосолмандың ҡәрҙәше; шулай итеп, бөтә мосолмандар – ҡәрҙәш. Дин ҡәрҙәшегеҙҙеке булған теләһә ниндәй хаҡ-хоҡуҡты ҡыҫырыҡлау, уға һөжүм итеү тыйыла. Әгәр үҙе хуш күңел менән үҙе бирмәгән булһа ғына...*

*Хаҡһыҙлыҡ ҡылмағыҙ! Хаҡһыҙлыҡҡа ла юл ҡуймағыҙ! Кешеләрҙең хаҡтарын ҡыҫмағыҙ, ҡыҫрыҡламағыҙ!*

*Сәхәбәләрем! Үҙегеҙгә ҡарата ла золом ҡылмағыҙ! Һеҙҙең үҙегеҙ ҡаршында ла хаҡ-хоҡуҡтарығыҙ бар.*

*Эй кешеләр! Һәр енәйәтсе үҙ ғәйебе өсөн шәхсән яуаплы. Һис ҡасан енәйәтсе эшләгән бер ғәйеп өсөн яҙаһын балаһы татымаҫ! Бер баланың да ғәйебе өсөн атаһы яуапҡа тартыла алмай!*

*Эй кешеләр! Аллаһ һәр хаҡ эйәһенә хаҡ-хоҡуҡтарын (Ҡөрьәндә) күрһәтә. Вариҫ өсөн васыят яһауҙың кәрәге юҡ.*[351] *Бала кем түшәгендә тыуған, шуныҡылыр. Зина ҡылыусы өсөн мәхрүм итеү ҡаралған. Атаһынан башҡа берәүҙең нәҫелен дәғүәләүсе ҡәбәхәт йәки хужаһынан башҡа берәүгә киткән рәхмәтһеҙ ҡол*[352] *Аллаһ ғазабына, фәрештәләрҙең һәм бөтә мосолмандарҙың ләғнәтенә тарыһын! Йәнәбел-Хаҡ бындай кешеләрҙең тәүбәләрен дә, тоғролоғон да һәм шаһитлығын да ҡабул итмәҫ.*

*Эй кешеләр! Раббығыҙ – берҙән-бер. Атағыҙ ҙа бер. Барығыҙ ҙа Әҙәмдең балалары. Әҙәм иһә тупраҡтан яратылған. Аллаһ Тәғәлә ҡаршында иң дәрәжәлегеҙ, ҡәҙерлегеҙ – Уның ҡаршында иң тәҡүәлек эйәһе булғанығыҙ. Ғәрәптең ғәрәп булмағандан иһә тәҡүәлек дәрәжәһенән ҡала башҡа бер өҫтөнлөгө лә юҡ.*

*Эй кешеләр! Дауамлы рәүештә барған ваҡыт Аллаһтың күктәрҙе һәм ерҙәрҙе яралтҡан көнгә хәлгә ҡайтты. Бер йыл ай хисабында ун ике айҙан ғибәрәт. Быларҙың дүртеһе – харам айҙар. Быларҙың өсәүһе бер-бер артлы килә: зөлҡәғиҙә, зөлхизә һәм мөхәррәм; дүртенсе иһә – (йомадил-әхир менән шәғбән араһындағы) рәжәб. Быйыл харам айҙар элекке урындарына ҡайтты. Хаж фасылы зөлхизәнең унынсы көнөнә тура килде.*

*Эй мөьминдәр! Һеҙгә бер аманат ҡалдырам, уға ныҡлап йәбешһәгеҙ, юлығыҙҙан һис тайпылмаҫһығыҙ. Ул аманат – Аллаһ китабы Ҡөрьән.*

351. Васыят мираҫ аятына ҡәҙәр фарыз хөкөмөндә була. Был аят иңгәндән һуң, бөтә хаҡ-хоҡуҡтар билдәләнгәнгә күрә, васыят фарыз булыуҙан туҡтай. Ләкин кеше, теләһә, малының өстән бер күләменән артмаған өлөшөн васыят итеп ҡалдыра ала.

352. Ҡоллоҡ мәсьәләһендәге тәфсиллерәк мәғлүмәт өсөн ҡарағыҙ: 151-154 б.

*Эй кешеләр! Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылығыҙ! Биш ваҡыт намаҙығыҙҙы уҡығыҙ! Рамаҙан ураҙаһын тотоғоҙ һәм әмирҙәрегеҙгә буйһоноғоҙ! (Шулай эшләгән осраҡта ғына) Раббығыҙҙың йәннәтенә керерһегеҙ.*

*Эй кешеләр! Сиктән ашыуҙан (ифраттан) тыйылығыҙ! Әүәлгеләрҙең һәләкәткә тарыу сәбәбе – диндә сиктән ашыуҙары ине. Хаж ғәмәлдәрен (тәртибен һәм йолаларын) минән өйрәнегеҙ! Белмәйем, бәлки, Мин быйылдан һуң һеҙҙең менән бында башҡа була ла алмам! Әлеге нәсихәттәремде бында булыусылар бында булмағандарға еткерһен! Шулай ҙа булырға мөмкин: әлеге нәсихәттәр еткерелгән зат (һүҙҙәремде) бында булып ишетеп тороусыға ҡарағанда ла яҡшыраҡ аңлап, хәтерендә ҡалдыра алыр».*

Ошо урында Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йөҙ меңдән артыҡ сәхәбәһенә мөрәжәғәт итеп, һорау бирә:

*«Эй кешеләр! Иртәгә минең турала һеҙҙән һораһалар, ни әйтерһегеҙ?»*

Бөтә әсхәбе кирам: «Аллаһтың илселеген башҡарҙың; вазифаңды үтәнең, беҙгә васыят һәм нәсихәт ҡылдың тип, шаһитлыҡ итербеҙ!» – ти.

Был шаһитлыҡтан һуң Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙ динде тәблиғ ҡылыу тураһында һүҙ ҡуҙғата:

*«Сәхәбәләрем! Ирештерҙемме?.. Ирештерҙемме?.. Ирештерҙемме?..»* – тип, өс мәртәбә раҫлата. Артабан, ҡулдарын күккә күтәреп, Йәнәбел-Хаҡтың шаһитлығын һорай:

*«Шаһит бул, йә Раббы!.. Шаһит бул, йә Раббы!.. Шаһит бул, йә Раббы!..»* (Мөслим, «Хаж», 147; Әбү Дауыт, «Мәнасик», 56; Ибне Мажә, «Мәнасик», 76, 84; Әхмәт, V, 30; Ибне Һишам, IV, 275; Хамиҙуллаһ, *«әл-Вәсаик»,* 360 б.).

❀

Хушлашыу хөтбәһе кешелек мөнәсәбәттәренең низамнамәһе, диндең хисабы, асыл, ҡыҫҡаса эстәлеге һәм шул уҡ ваҡытта үҙенә күрә «Кеше хоҡуҡтары декларацияһы» була. Ысындан да, 1789 йылғы Бөйөк француз революцияһының идеологик нигеҙҙәрен әҙерләүселәрҙән философ Лафайет, атаҡлы «Кеше хоҡуҡтары декларацияһы» баҫылып сыҡҡансы, бөтә хоҡуҡ системаларын тикшерә-өйрәнә. Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хушлашыу хөтбәһендә иғлан иткән, бөтә ғаләмгә бер яҡтылыҡ сығанағы буласаҡ ошо ғәҙеллек һәм кешелеклелек принциптары менән танышҡас: «Эй шанлы Мөхәммәт! Ғәҙеллектә шул ҡәҙәр дәрәжәгә ирешкәнһең, һис кемдең ул юғарылыҡҡа етеүе бөгөнгә саҡлы хәленән килмәгән һәм бынан һуң да була алмаясаҡ!..» – тип әйтә.[353]

353. Ҡарағыҙ: Камил мираҫ, «Тәжриди Сарих Тәржемәһе», IX, 289.

Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе әлеге хөтбәһендә кешеләр белергә тейеш һәм белмәгән осраҡта аҡлана алмаҫлыҡ хөкөмдәрҙе тапшыра. Унда йыйылған күп һанлы халыҡ ярҙамы менән был хөкөмдәрҙең бөтә кешелек донъяһына ишеттерелеүе тәьмин ителә.

❀

Хушлашыу хөтбәһенән һуң Билали Хәбәши раҙыйаллаһу ғәнһү аҙан әйтә. Әфәндебеҙ йәмәғәт ойошторып, башта өйлә намаҙының фарыҙын, шунан ҡамәт төшөрөп, икенде намаҙының фарыҙын уҡыта. Намаҙҙан һуң, дөйәһе Касваға атланып, Рәсүлүллаһ Жәбәлү әр-Рахмә тауы төбөндәге туҡталыш урынына бара. Касваның күкрәген ҡаяларға табан ҡуйып, үҙе ҡиблаға йүнәлә. Ҡояш байып, шәфәк яҡтыһы таралғансы, «вакфә»лә була – шул рәүешле туҡталыш яһай.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вакфәлә бер ҡулы менән дөйәһенең йүгәнен тотоп, икенсе ҡулын күккә асып, ҡоллоғоноң һәм күңел хаятының һиҙгерлеген белдергән оҙон доға уҡый. Был доғаның бер өлөшө түбәндәгесә:

*«Йә Аллаһым! Һиңә үҙең бойорғанса һәм беҙ һөйләгәндән күпкә өҫтөнөрәк хәмед-ҫәнәләр булһын! Йә Аллаһым! Минең намаҙым, ғибәҙәтем, тормошом һәм үлемем Һинең өсөн! Ҡайтыуым да Һиңә!*

*Йә Аллаһым! Ҡәбер ғазабынан, йөрәк вәсүәсәһенән, эштәрҙең тарҡаулығынан Һиңә һыйынамын! Йә Аллаһым! Елдәр килтергән афәт яуызлығынан Һиңә һыйынам!*

*Йә Аллаһым! Күҙемдә бер нур, ҡолағымда бер нур, йөрәгемдә бер нур яралт! Йә Аллаһым! Күкрәгемә киңлек бир! Эшемде йәйлә! Йә Аллаһым! Һаулыҡтың ауырыуға әйләнеүенән, көтмәгәндә килтереп бәрәсәк ғазабыңдан һәм бөтә ғазабыңдан Һиңә һыйынам! Йә Аллаһым! Мине тура юлыңа индер! Үткәнемдә һәм киләсәгемдә ярлыҡа!*

*Йә дәрәжәләрҙе күтәреүсе, бәрәкәттәр иңдереүсе, йә күктәрҙе һәм ерҙе яралтҡан Аллаһым! Өндәр төрлө-төрлө телдәрҙә көсәйә-көсәйә яңғырап, Һиңә таба күтәрелә, Һинән һорай, Һинән үтенә! Минең теләгем иһә – донъя халҡы Мине онотҡан һынау илендә Һинең Мине хәтерҙә тотоуың!*

*Йә Аллаһым! Һин һүҙемде ишетәһең, торған еремде күрәһең, йәшерен һәм асыҡ ни-нәмәм булһа, барыһын да беләһең! Эш-ғәмәлдәремдән һис берейе Һиңә йәшерен түгел! Мин бер бисара, Мин бер фәҡир, Һинән ярҙам һәм яҡлау һорайым! Хата-кәмселектәремде таныйым һәм ҡурҡам! Бер бисара Һинән нисек үтенеп һораһа, мин дә шулай үтенәм! Ерәнгес бер гонаһ эйәһе Һиңә нисек ялбарһа, Мин дә шулай ялбарам! Һинең ҡаршыңда башын эйгән, Һинең өсөн күҙҙәренән йәштәр аҡҡан, Һинең өсөн бөтә булмышын ҡорбан иткән, Һинең өсөн йөҙөн тупраҡтарға батырған бер ҡолоң Һиңә нисек доға*

*ҡылһа, мин дә шулай доға ҡылам! Йә Раббым! Доғамдың ҡабул ителеүендә Мине мәхрүм ҡалдырма! Миңә ҡарата Рәүф (мәрхәмәтле) һәм Рәхим бул, Һин – һорап-ялбарып мөрәжәғәт итеүсе торған заттарҙың иң хәйерлеһе һәм биреүселәрҙең иң йомарты!»* (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* V, 166-168; Хәйсәми, III, 252; Ибне Ҡайййүм, II, 237).

Изге сәләфтәр Ғәрәфәттә уҡый торған доғаларҙың бер өлөшө былай яңғырай:

«Илаһи! Һинең ҡаршыңда кем үҙен маҡтай алыр? Илаһи! Телем гонаһтарҙан тотлоға, көрмәләнә, Һинең ҡаршыңда яҡлау өсөн эшкә ярарлыҡ бер ғәмәлем дә, өмөт-теләктән ҡала бер шәфәғәтсем дә юҡ! Илаһи! Беләм: кәмселектәрем арҡаһында ҡаршыңда дәрәжәм дә, Һинән ғәфү һорарға лайыҡ эшем дә ҡалманы! Ләкин Һин – йомарттарҙың иң йомарты! Илаһи! Мин мәрхәмәтеңде алырға лайыҡ түгел икән, рәхмәтең дә миңә етә ала! Сөнки Һинең рәхмәтең һәр нәмәне солғап алырлыҡ дәрәжәлә киң! Илаһи! Минең хата-кәмселегем ни тикле ҙур булһа, Һинең ярлыҡауың ҡаршыңда вағайып ҡалыр! Һин ул хата-кәмселектәрҙе ярлыҡасы, йә йомартлыҡ эйәһе Аллаһым!

Раббым! Һин бары итәғәт иткән ҡолдарыңды ғына ғәфү ҡыласаҡһың, гонаһлылар кемгә барып һыйынһындар һуң? Раббым! Һин бары тәҡүә ҡолдарыңа ғына рәхмәт һәм мәрхәмәт ҡыласаҡһың, ғәйеплеләр кемдән ярҙам һораһын һуң!

Мин Һиңә һәр миҙгелдә мохтаж! Һинең иһә минән һис бер ихтыяжың юҡ! Һин бары яралтыусым булараҡ ҡына мине ярлыҡарһың! Мине ошо хәҙер торған ерҙән, бөтә ихтыяждарым ҡәнәғәтләндерелгән, үтенестәремә яуап алынған, теләктәрем ысынға ашҡан хәлдә ҡайтар!

Йә һораусыларҙың ихтыяждарына хужа һәм Малик булыусы Аллаһым! Йә өндәшмәүселәрҙең күңелдәренән уйлағанын белеүсе Аллаһым! Йә үҙенән ҡала ярҙам өмөт ителәсәк башҡа Раббы булмаған Аллаһым! Йә үҙенән өҫтөнөрәк ҡурҡып торорлоҡ башҡа яралтыусы булмаған Аллаһым! Йә янына барып һүҙ ҡушырлыҡ вәзире, ярҙамсыһы, ришүәт бирерлек ҡапҡасыһы булмаған Аллаһым! Йә теләктәр күбәйгән һайын йомартлығы һәм киң күңеллеге артыусы; ихтыяждар ишәйгән һайын, фазылы һәм игелеге артыусы Аллаһым! Йә Аллаһым! Һин һәр мосафирҙы ҡаршы алырһың! Беҙ иһә Һинең мосафирҙарың! Беҙҙе йәннәтеңдә ҡабул ит!

Йә Аллаһым! Һәр төркөмгә бүләк, һәр һораусыға хәйер-өләш бирелә, һәр зыярат ҡылыусыға һый тәҡдим ителер! Һәр сауап өмөт итеүсегә сауап бирелер! Беҙ барыбыҙ бергә Һинең Харам йортоңа килдек! Ошо бөйөк урында вакфәлә туҡталдыҡ! Ошо мөбәрәк ерҙәрҙә булдыҡ! Өмөтөбөҙ – Һинең ҡаршыңда әжер-сауаптарға лайыҡ була! Өмөтөбөҙҙө буш итмә, Аллаһым!» (Ғазали, *«Ихья»,* I, 337-338; Бәйхаки, *«Шуабул-Иман»,* II, 25-26).

Нәбиййи Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ғәрәфәттә булған ваҡытта, Уның янына Нәжид халҡынан бер нисә кеше килеп һорау бирә: «Йә Рәсүлүллаһ! Хаж нимәнән ғибәрәт, нәмә менән тамамлана?» Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Хаж – Ғәрәфәт ул. Кем Мөздәлифә төнөндә сабах намаҙына хәтле Ғәрәфәткә килһә, ул хажға өлгөргән булыр. Мина көндәре өсәү. Ашығыслыҡ менән унда ике көн ҡалыусы затҡа гонаһ юҡ. Һуңлаған затҡа ла гонаһ юҡ», –* тип асыҡлай (Ибне Мажә, «Мәнасик», 57).

**Бөгөн динегеҙҙе камиллыҡҡа еткерҙем**

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вакфәлә саҡта, ҡояш батҡанда иңгән аяти кәримә менән диндең теүәлләнеп, камил дәрәжәгә еткерелгәне белдерелә:

الْيَوْمَ يَئِسَ الَّذِينَ كَفَرُوا مِنْ دِينِكُمْ فَلَا تَخْشَوْهُمْ وَاخْشَوْنِ الْيَوْمَ
أَكْمَلْتُ لَكُمْ دِينَكُمْ وَأَتْمَمْتُ عَلَيْكُمْ نِعْمَتِى وَرَضِيتُ لَكُمُ الْإِسْلَامَ دِينًا

**«…Бөгөн кафырҙар һеҙҙең динегеҙҙән** (уны юҡ итеүҙән) **өмөт өҙҙөләр. Хәҙер инде уларҙан ҡурҡмағыҙ, Минән ҡурҡығыҙ! Бөгөн һеҙгә динегеҙҙе теүәлләнем; һеҙгә тигән ниғмәтемде тамамланым һәм һеҙҙең өсөн дин итеп исламды һайланым...»** («әл-Маидә», 3) (Тирмизи, «Тәфсир», 5/3043).

Хәҙрәти Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү, әлеге аяти кәримәне ишетеүгә үк, олуғ зирәклеге менән һәр нәмәне аңлап ала. «Тамамланған ниғмәт» тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен бик тәрәндән тоя. «Диндең камиллыҡҡа етеүе»нән һуң буласаҡ ваҡиғаны күҙ алдына килтерә, һиҙә башлай.

Зирәк аҡыллы кешеләр өсөн был аят Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең баҡыйлыҡҡа күсәсәге тураһында бер төрлө хәбәр була. Аллаһ Жәллә Жәләлүһү бик яҡын арала Йәшәйеш нурын, Хәбибен мәңгелек ғәләменә саҡырасаҡ тигән һүҙ. Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһүҙең күҙҙәре йәш менән тула, әле бүтәндәр бер нәмә лә һиҙмәгән саҡта ла, ул йөрәгенә кергән хушлашыу-айырылышыу ҡайғыһы менән йәшерен генә илай башлай.[354] Ниңә тигәндә, егерме өс йыл дауамында иңгән мөкәддәм аманат ҡиәмәткә тиклем килеп китәсәк өммәткә бер рәхмәт булараҡ ышанып тапшырып ҡалдырыла.

❁

Ҡояш тулыһынса батҡандан һуң, Пәйғәмбәр ғәләйһис-саләтү үә-сәләәм, артҡы үркәстәге эйәргә Усамә ибне Зәйд раҙыйаллаһу ғәнһүҙе ултыртҡан

354. Әлмалылы, III, 1569.

килеш, Ғәрәфәттән Мөздәлифәгә таба ҡуҙғала. Унда йәстү ваҡытында йәмәғәт ойоштороп, бер аҙан һәм ике ҡамәт менән башта аҡшам, артабан йәстү намаҙын ҡылдыра. Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мөздәлифәлә таң яҡтыһы беленә башлағансы ҡала. Көн шаҡтай яҡтырғансы, Мөздәлифәләге туҡталыш урынынан китмәй. Был ваҡытта тәлбиә әйтеүҙе һәм доғалар уҡыуҙы дауам итә.

Мөздәлифәлә Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Минала ташланырға тейешле таштарҙы йыя. Ҡояш сыҡҡансы, Ул Мөздәлифәнән китеп бара. Сәхәбәләренә лә джәмрәлә[355] атыласаҡ таштарҙы йыйырға ҡуша. Шулай уҡ джәмрәләрҙе – ике бармаҡ осо менән тоторлоҡ ваҡ таштарҙы бармаҡ араһына ҡуйырға кәрәклеген дә телгә ала. Рәсүлуллаһ таштарҙың нисек атылырға тейешлеген ҡулы менән ишаралап күрһәтеп, аңлатып бирә.

### Илаһи ҡәһәр ысынға ашҡан урын

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хушлашыу хажында Мина менән Мөздәлифә араһындағы Мөхәссир үҙәнлегенән тиҙ-тиҙ уҙып китә. Аптырашҡа ҡалған сәхәбәләр: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Ни булды, ниңә тиҙләнегеҙ?» – тип һорай.

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Йәнәбел-Хаҡ был урында Әбәбил ҡоштарын ебәреп, Әбрәһәнең фил ғәскәрен һәлӘк итә. Ул ҡәһәрҙең бер өлөшө тейә күрмәһен, тип тиҙләнем»,* – тип аныҡлай (Нәвәви, *«Шәрху Мөслим»,* XVIII, 111; Ибне Ҡаййүм, II, 255-256).

Ысындан да хажда был урында туҡталыш яһалмай.

Рәхмәт һәм ҡәһәр күренеше ҡай саҡ хатта йәнһеҙ нәмәләрҙә лә сағылыш таба. Шуға күрә бер рәхмәт күренеше булған Ҡәғбә, мәсеттәр, изгеләр мәжлесе кеүек урындарҙан файҙаланырға кәрәк. Һәм, киреһенсә, гонаһ һәм ғисъян күҙәтелгән, нәтижәлә илаһи ҡәһәр ысынға ашҡан урындарҙан һаҡланыу талап ителә.

Йәнһеҙ предметтар ҙа тартылыу һәм этелеү ҡанунына буйһона. Әйтәйек, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм өҫтөнә баҫып хөтбә һөйләгән хөрмә төбө шундай нурлы хис-тойғо менән тула ки, Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хөтбәһен башҡа ерҙә һөйләй башлағас, ихлас илап ебәрә.[356] Әлеге ваҡиға тураһында еткергән хәҙис шәрифтәр мүтәватир, йәғни күп кеше тарафынан хәбәр ителгән булып тора.

Мәүләнә Йәләлетдин Руми хәҙрәттәре был мәсьәләлә былай ти:

---

355. Джәмрә – утлы ҡуҙ, күмер, ваҡ ҡырсынташ кеүек мәғәнәләр белдергән һүҙ. Бында – хаж ваҡытында таш атыла торған урын атамаһы. Ваҡ таштарҙы билдәле бер ваҡытта, билдәле бер урында һәм һанда оло жәмрә, урта жәмрә һәм кесе жәмрә тигән урындарҙа аталар.

356. Бохари, «Мәнаҡиб», 25; Бүйюэ, 32.

*«Һауа, тупраҡ, һыу һәм ут – барыһы ла Аллаһ ҡоло һәм Уға итәғәт ҡылалар. Улар һинең менән минең ҡаршыла – йәнһеҙҙәр, фәҡәт Аллаһ хозурында – йән эйәләре».*

❁

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мөхәссир үҙәнлеген тиҙ-тиҙ уҙып киткәс, ҙур Джәмрәтү, йәғни Ғәҡәбә джәмрәһенә килә. Ғәҡәбә джәмрәһендә таштарҙы ҡорбан салыу көнө ҡояш сыҡҡандан һуң ата. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ваҡ таштарҙы баш һәм имән бармаҡтары менән тотоп берәм-берәм ташлаған сағында, кешеләр ҙә джәмрә таштарын ырғытырға керешә һәм халыҡ бик күп булыу арҡаһында, бер-береһе өҫтөнә өйөлә, йығыла башлай. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Эй кешеләр! Бер-берегеҙҙе үлтермәгеҙ! Һеҙ таштарҙы ташлаған ваҡытта ваҡ-ваҡ таштарҙы ике бармаҡ менән тотоп бәрегеҙ!»* – тип бойора[357] (Әхмәт, VI, 379).

Ҡудамә ибне Ғабдуллаһ Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ул миҙгелдәге хәлен түбәндәгесә тасуирлай: «Рәсүл Әкрәм Әфәндебеҙҙе дөйәһе өҫтөндә килеш таштар атҡанда күрҙем. Бер ниндәй һуғыу, этеү-төртөү ҙә, «юл бир, ситкә кит!» тип ҡысҡырыу ҙа юҡ ине!» (Ибне Мажә, «Мәнасик», 66).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм ғүмеренең һәр йылы өсөн бер дөйә иҫәбенән алтмыш өс дөйәне үҙ ҡулы менән ҡорбан итеп салғас, бысаҡты хәҙрәти Ғәлигә бирә. Ҡалған дөйәләрҙе иһә ул сала. Аллаһ Рәсүле һуйылған һәр дөйәнән берәр киҫәк ит алырға ҡуша. Уларҙы бер сүлмәккә һалып бешерәләр. Ғәли разыйаллаһу ғәнһү менән бергә шунан ауыҙ итәләр. Артабан Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәти Ғәлигә дөйәләрҙең ҡалған иттәрен, тиреләрен һәм йөн япмаларын фәҡирҙәргә таратырға бойора.

Ҡорбанлыҡ дөйәләрен салғас, Нәбиййи Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәстарашын саҡырып, башын ҡырҙыра.

*«Ҡатындар ҡырынмаҫ, ләкин сәстәрен киҫтерерҙәр!»* – тип, ҡатындарға баштарын ҡырыуҙы тыя (Дарими, «Мәнасик», 63).

Әнәс ибне Малик разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шайтанды таш ташлап ҡыуыу ғәмәлен тамамлағас, ҡорбан салды һәм сәсен алдырҙы. Бәрбәр уң яҡтағы сәстәрен тотто ла ҡырып алды. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Әбү Талханы саҡырып, был сәстәрҙе уға бирҙе. Артабан бәрбәр һул яҡтағы

357. Бөгөн шайтанды таш бәреп ҡыуыу, ҡыҙғаныс, тейешенсә башҡарылмай, дини хистәрҙең тәрәнлеге һәм ғибәҙәт дәрте менән үтәлмәй. Юғиһә, был ғибәҙәт ғәмәле, Ибраһим ғәләйһиссәләм шайтанды таш менән ҡыуған ваҡыттағы рухи халәтте тойоп, шундай хис менән ҡылынырға тейеш.

сәстәрҙе тотто. Әфәндебеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: *«Киҫ!»* – тигәс, киҫеп алды. Рәсүлүллаһ унынһын да Әбү Талхаға бирҙе:

*«Быларҙы кешеләргә бүлеп тарат!»* – тип бойорҙо» (Мөслим, «Хаж», 323-326; Бохари, «Вуду», 33).

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең маңлай сәстәре киҫелгәндә, Хәлид ибн Вәлид: «Йә Рәсүлүллаһ! Маңлай сәсеңде миңә бир! Был мәсьәләлә берәүҙе лә минән өҫтөн ҡуйма! Әсәм-атам Һиңә ҡорбан булһын!» – тип ялбара.[358] Сәстәр уға бирелгәс, уларҙы күҙҙәренә һыпырып, шлемының эсенә, алғы яҡҡа тығып ҡуя. Шуға күрә ул ҡатнашҡан һуғышта һәр халыҡ еңелеүгә тарый. Быны раҫлап, Хәлид раҙыйаллаһу ғәнһү: «Мин уны ҡайһы тарафҡа йүнәлтһәм, шул ер яулап алынды!» – тип әйткән[359] (Ваҡыди, III, 1108; Ибне Әсир, *«Үсдүл-Габә»,* II, 111).

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ҡорбан байрамының беренсе көнөндә өйлә ваҡытына тиклем, дөйәһенә атланып, «Ифәдә тауаф» (зыярат тауафы) ҡылыу өсөн, Бәйтуллаһҡа юл тота. Тауафты тамамлағас, өйлә намаҙын уҡый. Артабан Зәмзәм ҡойоһона бара. Ул көндө кискә таба Минаға ҡайта. Тәшрик көндәренең төндәрен Минала уҙҙыра. Был кисәләрҙә Бәйтуллаһты ла зыярат ҡылып килгеләй.

Ғаләмдәр ғорурлығы саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡорбан көнөнән һуң килгән беренсе һәм икенсе тәшрик көндәрендә ҡояш көнбайышҡа таба ауышҡас, йәйәүләп, Мина мәсете артындағы тәүге джәмрә урынына бара. Тәшрик көндәренең һуңғыһында өсөнсө тапҡыр таш атып, өйләнән һуң Минанан Мөхәссәбкә[360] юл тота. Мосолмандар, Мөхәссәбтән тирә-яҡҡа таралышырға йыйынғас Рәсүлүллаһ:

---

358. Был ваҡытта хәҙрәти Әбү Бәкер Хәлид раҙыйаллаһу ғәнһүҙең Өхөд, Хәндәк һәм Хөҙәйбиәлә эшләгәндәре тураһында уйлай, ул миҙгелдәге хәленә ҡарап, ғәжәпкә ҡала (Ибне Сәғд, II, 174).

359. Аллаһ Рәсүленең сәс һәм һаҡалына ҡарата хөрмәт күрһәтеү уңайынан бер миҫалды Хикмәт Атан Бәй былай тип бәйән ҡыла:
«1983 йылда Оф ҡалаһынан Ғәли Йүжәл әфәнденән бындай ваҡиға тураһында иҫтәлек тыңланым: «Сулуова үҙәге мәсетендә имам-хатип вазифаһын башҡара инем. Яҡын-тирә ауылдан бер имам әфәнде яныма килеп: «Хужам, минең менән бер ваҡиға булды, уның мәғәнәһен аңламаным», – тип, башынан кисергәнде һөйләп бирҙе: «Бер көн миңә үҙем имамлыҡ ҡылған ауылға яҡын башҡа ауылдан бер нисә кеше бер ҡосаҡ тулы китап менән килде. «Хәҙрәт, атайыбыҙ вафат булды. Уның китаптары беҙгә ҡалды. Ләкин беҙ был китаптарҙы уҡый алмайбыҙ. Һин – хәҙрәт кеше, әлеге китаптарҙан бары һин генә файҙалана алаһың, уларҙы һиңә бүләк итәбеҙ», – тинеләр. Китаптарҙы алдым, уларҙы хөрмәтләп оҙатҡас, гөр-гөр килеп янған усаҡ янында китаптарҙы тикшерә башланым. Уларҙың эсенән вафат булған имам әфәнденең хаттары, конверттары сыҡты. Шәхси хаттар булғанға күрә, барыһын йыйып, усаҡҡа ташланым. Дөрләп янған усаҡ шунда уҡ «псс», тип һүнде лә ҡуйҙы. Ҡотом осто һәм ҡурҡып өйҙән тышҡа сығып ҡастым. Өйгә һуңынан ғына, ҡурҡа-ҡурҡа ғына керә алдым».
Ғәли Әфәнде дауам итте: «Мин иһә ул имам әфәндегә: «Ул конверттар эсендә хөрмәтле һаҡал булған», – тинем. Күпмелер ваҡыттан һуң шул имамды күргәс, миңә һүҙ ҡушты ул: «Хәҙрәт, ул конверттар эсендә хөрмәтле һаҡал булғанлығын ҡайҙан белдең? Китаптарҙы миңә бүләк иткән кешеләр бер аҙ ваҡыттан һуң: «Хәҙрәт, беҙ белмәгәнбеҙ, атайыбыҙҙың китаптары араһындағы конверттар эсендә хөрмәтле һаҡал булған икән, уны беҙгә бирмәҫһеңме?» – тип килделәр».

360. Мөхәссәб – Мина менән Мәккә араһындағы, Мәккәгә ҡарағанда Минаға яҡынымраҡ бер урын атамаһы. Ҡөрәйеш мөшриктәре, көфөрлөк ниәте менән берләшеп, Пәйғәмбәребеҙгә ҡаршы

*«Һаҡ булығыҙ, иң һуңынан Бәйтуллаһҡа бармайынса, берәү ҙә, бер ҡайҙа ла китмәһен!»* – тип бойора (Дарими, «Мәнасиҡ», 85).

Зөлхизәнең ун дүртенсе көнөндә иртәнге намаҙ алдынан Ул Бәйтуллаһты тауаф ҡылырға барыу тураһында иғлан яһарға әмер бирә. Бәйтуллаһҡа барып, Әфәндебеҙ хушлашыу (вәда) тауафын ҡыла. Шул ваҡытта бер кеше килеп, Мәккәлә йәшәп ҡалыу мөмкинлеге тураһында һорай. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Мәккә – йәшәү урыны түгел. Ситтән килеүсе кешеләрҙең, хаж ғибәҙәттәрен башҡарғас, Мәккәлә ҡала торған ваҡыты – өс көн!»* – тип белдерә (Әхмәт, IV, 339).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Харами Шәрифкә бик ҙур хөрмәт күрһәтә. Берәй нәмә ашап алырға йәки хәжәтен үтәргә теләгәндә, ул ситкә сығып, йыраҡыраҡ ергә китә. Биҙеү тойғоһо барлыҡҡа килмәһен һәм хөрмәт итеүҙә кәмселек сыҡмаһын, тип, Бәйтуллаһта бик оҙаҡҡа ҡалмаҫҡа тырыша. Сөнки теләһә ҡайһы бер ҡалала йәшәп, көнделек Бәйтуллаһҡа бағлылығы, унын янында тороп та, көнделек был мөбәрәк төбәкте ниндәйҙер бер ҡала кеүек ҡабул итеүенән, хөрмәтһеҙ-илтифатһыҙ ғәмәлдәр ҡылыуҙан һәм үҙ иленде һағыныуҙан хәйерлерәк.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм һәм мосолмандар, хушлашыу тауафын ҡылғас, Мәҙинәи Мөнәүүәрәгә кире ҡайталар (Бохари, «Хаж», 21, 70, 128; Мөслим, «Хаж», 147; Ибне Мажә, «Мәнасиҡ», 84).

Йәнәбел-Хаҡ ниғмәтен тамамлап, диндә камиллыҡҡа еткергәнгә күрә, инде иң ҙур айырылышыу һәм ҡауышыу ваҡыты етә.

---

ҡулланған бойкот ҡарарын ошонда ҡабул итәләр. Аллаһ Рәсүле бында килгәс, ана шул көндәрҙе иҫкә төшөрә (Бохари, «Хаж», 45).

# ҺИЖРӘТТЕҢ УН БЕРЕНСЕ ЙЫЛЫ

## Ҡауышыу һәм олуғ хушлашыу – «БӨЙӨК ДУҪ» ЯНЫНА ИЗГЕ СӘФӘР

Нәбиҙәр сылбырының беренсе һәм һуңғы ҡулсаһы – Ғаләмдәр ғорурлығы, Рәсүлдәр солтаны, Харамдар имамы, Йәшәйеш нуры, ғаләмдәргә Рәхмәт хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Хушлашыу хажынан һуң бер ауырыу эләктерә. Тәнен уттай ҡайнарлатҡан был сир Уны өммәтенән айырасаҡ, ғүмере буйы үҙе ынтылған Рафиҡи Әғләһе – Бөйөк дуҫы менән ҡауыштырасаҡ үлем хастаһы була. Нигеҙҙә, «Наср» сүрәһенең иңдерелеүе менән әжәленең яҡынлашҡанын төшөнгән Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙер инде ахырғы сәфәренә әҙерләнә. Үлеләр менән дә, тереләр менән дә йәшеренерәк бер рәүештә хушлаша башлай. Әйтәйек, ауырырға бер көн ҡала, Ул Мәҙинәнең Жәннәтүл-Бәҡиғ тип аталған ҡәберстанына бара, үлгәндәр рухы өсөн:

*«Йә бөйөк Аллаһым! Бында ятыусыларҙан мәғфирәтеңде ҡыҙғанма!»* – тип доға ҡыла (Әхмәт, III, 489).

Ҡәберстандан ҡайтҡас, мөнбәргә сығып, Рәсүлүллаһ сәхәбәләренә лә хушлашыу тип бәйәләргә мөмкин түбәндәге хөтбә менән мөрәжәғәт итә:

*«Мин һеҙҙең Кәүҫәр шишмәһенә тәүге ирешеүсегеҙ буласаҡмын һәм һеҙҙе унда ҡаршы аласаҡмын! Һеҙҙең менән осрашыу урыныбыҙ – шул шишмә. Мин был миҙгелдә уны күрәм! Мин һеҙҙең хаҡта шаһитлыҡ итермен! Был миҙгелдә Миңә ерҙең хазиналары һәм уларҙың асҡыстары бирелде. Валлаһи, Минән һуң мөшриклеккә ҡайтырһыҙ тип, һеҙҙең өсөн ҡурҡмайым! Ләкин Мин донъя теләктәренә бирелерһегеҙ һәм шулар арҡаһында бер-берегеҙгә көнләшерһегеҙ, бер-берегеҙҙе үлтерерһегеҙ һәм һеҙҙән әүәлгеләр юҡҡа сығып киткән кеүек, һеҙ ҙә шулай юҡҡа сығырһығыҙ, тип, һеҙҙең өсөн ҡурҡам!..»* (Бохари, «Жәнаиз», 73; Мөслим, «Фәзаил», 31).

Мөнбәрҙән төшкәс, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм арыған, хәлһеҙләнгән аҙымдар менән Сәғәҙәт йортона ҡайта. Уның сире көндән-көн көсәйә бара. Хәле шаҡтай ауырайғанда ла, нәзәкәтлелек, тыйнаҡлыҡ үрнәге булған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡатындарынан рөхсәт алып, хәҙрәти Ғәйшә бүлмәһендә ҡалырға ҡарар ҡыла (Бохари, «Тыйб», 22; Әхмәт, VI, 34, 38; Бәлазури, I, 545).

Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ошоғаса улай нык ауырғаны булмай. Нигеҙҙә, Ул әҙәпле һәм пак тормошо менән үҙенә ауырыуҙы яҡын килтермәй торған тиңһеҙ бер ғүмер кисерә. Ләкин егерме өс йыл дауам иткән һәм бәндә тәҡәтенә һыймаҫлыҡ иң бөйөк һәм ситен нәбилек вазифаһы[361] Уны шаҡтай талсыҡтыра, был дәүерҙең иң башынан бирле төрлө дошмандарҙың мең дә бер әшәкелектәре лә мөбәрәк бәҙәнен талҡый, йонсота. Былар бөтәһе лә Рәсүлүллаһҡа ауырыу эләгеүен мөмкин хәлгә әйләндерә.

Икенсе яҡтан ҡарағанда иһә, әлеге сир Уның өсөн олуғ бер урынға һәм юғары дәрәжәләргә ирешеү булырға тейеш. Был хасталыҡ килеп сығыуға Хәйбәрҙәге ағыулау осрағы ла ҙур тәьҫир яһай. Быны раҫлап, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ауырыу көсәйгән ваҡытта, хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙгә:

*«Әй Ғәйшә! Хәйбәрҙә татыған ағыулы иттең зыянын һәр даим һиҙеп торҙом. Хәҙерге миҙгелдә йөрәк тамырымдың өҙөлгәнен тоям»*, – тип әйтә (Бохари, «Магази», 83).

Әнәс ибн Малик разыйаллаһу ғәнһү ҙә: «Рәсүлүллаһтың кескенә теле өҫтөндә ул ағыуҙың эҙен һәм тәьҫирен гел күрә инем!..» – тигән (Мөслим, «Сәлам», 45).

Йәшәйеш нуры саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм шул ағыу сәбәпле шәһит сифатында вафат була, үҙен Пәйғәмбәрлек менән хөрмәтләгән Аллаһ Тәғәлә Уны шәһитлек менән дә данлай (Ибне Һишам, III, 390; Ваҡыди, II, 678-679; Хәйсәми, VI, 153).

❁

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм биҙгәк арҡаһындағы юғары температура тәьҫирендә, элеп ҡуйылған ҡапсыҡтан һыу ағып торғандай, бик нык тирләй. Уның хәлен белергә килгән Әбү Сәғит әл-Худри: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Биҙгәгегеҙ ни ҡәҙәр көслө икән!» – тип әйтеүҙән тыйылып ҡала алмай. Әбү Сәғит разыйаллаһу ғәнһү һүҙҙәрен былай тип дауам итә:

«Ҡулымды Уның өҫтөнә ҡуйҙым; температураһын йәймәһе аша ла һиҙә инем. «Йә Аллаһтың Рәсүле, температураң бик юғары!» – тинем.

*«Беҙ (Пәйғәмбәрҙәр) шундай. Бәләләр беҙгә күпләтә артып килер, быға яуап итеп әжерҙәре лә ҡат-ҡат арттырып бирелер»*, – тип белдерҙе.

361. Хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә вәхи килгәндә, мөбәрәк тәне бик ауырайып китә. Мәҫәлән, дөйәһенә атланған саҡ икән, ауырлыкты күтәрә алмайса, дөйә сүгәләргә мәжбүр була, аяғында баҫып торорға теләһә, аяҡтары бөгөлә, бына-бына һынып китер шикелле тойола (Әхмәт, II, 176; VI, 445; Ибне Сәғд, I, 197). Зәйед ибн Сабит разыйаллаһу ғәнһү риүәйәт ҡыла: «Бер көндө Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында инем. Кеше күп булғанға, (теҙләнеп ултырғанға) Уның теҙе минеке өҫтөнә тура килде. Шул саҡ Уға вәхи халәте керҙе. Валлаһи, Рәсүлүллаһ ғәләйһиссәләмдең теҙенән дә ауырыраҡ һис нәмә күргәнем юҡ ине. Теҙем иҙелеп бөтәр кеүек тойолдо» (Әхмәт, V, 190-191).

«Йә Аллаһтың Рәсүле! Кешеләрҙең иң күп бәләгә дусар ителгәндәре кемдәр һуң?» – тип һораным.

*«Пәйғәмбәрҙәр!»* – тине.

«Артабан кемдәр?» – тип ҡыҙыҡһындым.

*«Шунан тоғролоҡло, диндар заттар!* – тине һәм асыҡлап ҡуйҙы: – *Уларҙан береһе фәҡирлеккә шул хәтле бирелер, ынтылыр ки, үҙен ҡаплаған бер тупаҫ туҡыманан башҡа бер нәмәһе лә булмаҫ. Һеҙ муллыҡҡа һөйөнгән кеүек, улар бәлә-ҡазаларға ҡыуаныրҙар»* (Ибне Мажә, «Фитән», 23).

Һуңғы көндәрендә Рәсүлуллаһтың ауырыуы йәмәғәт ҡаршына сығырға мөмкинлек бирмәй. Ул хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүҙе йәмәғәткә үҙ урынына имамлыҡ вазифаһына билдәләй. Бер ара үҙен бер аҙ яҡшыраҡ хис итеп, мәсеткә сығып керә. Унда ул әсхәбе кирамға өгөт-нәсихәттәрен еткерә һәм:

*«Шөһрәтле Аллаһ бер ҡолона донъя һәм уның зиннәте менән үҙ ҡатындағы ниғмәттәр араһында һайлау ирege бирҙе. Һәм ул ҡол Аллаһ ҡатындағыларға өҫтөнлөк бирҙе!»* – тип әйтә.

Был һүҙҙәрҙән һуң һиҙгер һәм мәрхәмәтле йөрәк эйәһе – хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең уларға хушлашыу хөтбәһе менән мөрәжәғәт итеүен тойоп ала һәм оло ҡайғыға бата. Йөрәген ҡайғы-һағыш биләп ала; күҙҙәренән йәш аға башлай. Үкһей-үкһей: «Әсәм-атам Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлуллаһ! Һиңә аталарыбыҙ, әсәләребеҙ, йәндәребеҙ, малдарыбыҙ һәм балаларыбыҙҙы фиҙа ҡылабыҙ!..» – ти ул (Әхмәт, III, 91).

Йәмәғәт араһында унан башҡа һис кем хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи вә сәлләмдең тәрән хис дарьяһын төшөнә алмай, ундағы нәфислекте, нескәлекте һиҙмәй, тоймай. Сөнки аяти кәримәлә иҫкә алынған Сәүрҙәге «икенең икенсеһе» бары Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү генә була. Риүәйәткә күрә, Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Уның тураһында:

*«Йөрәгемдә ни булһа, Әбү Бәкергә һеңдерҙем!»* – тип телгә ала.[362]

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ошо ғәзиз дуҫының илауын күргәс, сәхәбәләр бик ғәжәпләнеп, бер-береһенә: «Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Раббыһы менән ҡауышыуға өҫтөнлөк биргән тоғролоҡло кеше тураһында һөйләгәндә, был ҡарттың илауына аптырамайһығыҙмы?!» – тиҙәр (Бохари, «Саләт», 80).

Асылда иһә хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүҙең һиҙгер һәм мәрхәмәтле йөрәге оло хушлашыуҙы һиҙә һәм айырылышыуҙан зар илаған

362. Ҡарағыҙ: Ажлуни, «Кәшфүл-Хафа», том 2, 419 б.

най (ҡурай) кеүек ыңғыраша-һыҙлай башлай. Бары Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ауырыуы етди төҫмөр алғас ҡына, башҡа сәхәбәләр ҙә бөйөк айырылышыу һәм ҡауышыуҙы һиҙеп, йәш түгергә керешә. Мөһәжир һәм ансарҙарҙың мәжлестәре матәмгә күмелә. Тирә-яғындағылар: «Йә Рәсүлүллаһ! Шифа өсөн Аллаһҡа доға ҡылһаң ине!» – тигәндә, һәр ваҡыт сихәт-дауа һорап доға ҡыла торған булған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм был юлы доға уҡымай.

Хәҙрәти Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһә һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм ауырған саҡта, һыйыныу сүрәләрен («Фәләҡ» һәм «Нәс») уҡып, ҡулдарына өрә һәм тәнен һыпыра ине. Сире көсәйгән ваҡытта, мин дә нәҡ шулай әлеге сүрәләрҙе уҡып, ҡулдарыма өрҙөм һәм Уның мөбәрәк тәнен һыпыра башланым.: «Йә кешеләрҙең Раббыһы! Был ауырыуҙы алып ташла! Шифа бары Һинең ҡулыңда. Һинән башҡа шифа биреүсе юҡ. Шундай бер шифа бир, бер ниндәй ҙә ауырыу ҡалмаһын!» – тип, элегерәк бер ауырған сағында Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә Ябраил уҡыған истиғәҙә доғаһын да уҡыным. Ләкин шунан һуң Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, (мөбәрәк башын миңә бороп):

*«Өҫтөмдән ҡулыңды ал! Был уҡыуыңдың миңә (инде) бер файҙаһы ла юҡ! Мин сәғәтем еткәнен көтәм...»* – тине» (Әхмәт, VI, 260-261; Ибне Сәғд, II, 210).

Хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ иҫтәлеген былай тип дауам итә:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хөрмәтле ҡыҙы, тәрән хисле һәм нескә күңелле Фатиманы саҡырҙы. Ул килгәс, сәләмләп, янына ултыртты. Артабан уға йәшерен генә нәмәлер һөйләне. Фатима илап ебәрҙе. Һуңынан уға йәнә йәшереп кенә ниҙер әйтте. Был юлы иһә Фатима һөйөнөс менән йылмайып ҡуйҙы.

Мин ул көндәге кеүек көлөүҙең илауға, шатлыҡтың ҡайғыға шул хәтле яҡын булғанын башҡа һис күргәнем юҡ ине. Фатиманан илауының һәм йылмайыуының сәбәбен һорағас: «Йоҡторған ауырыуы арҡаһында вафат буласағын хәбәр итте. Шуңа иланым. Артабан иһә ғаиләһенән үҙе менән беренсе булып ҡауышасаҡ кешенең мин икәнен әйтте. Быға иһә һөйөндөм», – тине» (Бохари, «Мәғази», 83).

Ауырыу осоронда Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәле еңеләйеп киткәндә, йәмәғәткә бер нисә тапҡыр намаҙ ҡылдыра ала. Пәйғәмбәрҙәре менән айырылышыу хисе арҡаһында күңелдәрен бик ҙур хәсрәт йәймәһе ҡаплаған әсхәбе кирамға шундай намаҙҙарҙың береһендә Ул былай тип мөрәжәғәт итә:

*«Эй кешеләр! Ишетеүемсә, һеҙ Пәйғәмбәрегеҙҙең вафат буласағынан ҡурҡаһығыҙ икән! Минән әүәл ебәрелеп тә, өммәтендә мәңгегә ҡалған берәй Пәйғәмбәр бармы һуң, шулай булғас, мин һеҙҙең арағыҙҙа нисек һәр даим ҡалайым? Минең Раббым менән ҡауышасағымды яҡшы аңлағыҙ! Уның менән*

*һеҙ ҙә ҡауышасаҡһығыҙ! Һис шикһеҙ, бөтә эштәр бөйөк Аллаһ рөхсәте менән үтәлер.*

*Шуны яҡшы белегеҙ: Мин һеҙҙән алда китеп, һеҙҙе көтөп торасаҡмын! Иғтибар итегеҙ: (киләсәктә әхирәттә) һеҙҙең менән осрашыу урыныбыҙ – Кәүсәр шишмәһе башы. Иртәгә Минең менән осрашырға теләүсе ҡулын һәм телен гонаһтан тыйһын! Эй кешеләр! Гонаһ ниғмәттәрҙең үҙгәртелеүенә килтерер. Халыҡ яҡшы булғанда, етәкселәре лә яҡшы булыр. Насар халыҡтың идарасылары ла яман булыр. Булмышымды ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, ошо сәғәттә Мин шишмә өҫтөндә торам, ошо баҫҡан еремдән шишмәгә ҡарайым...»*

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һүҙенең ошо урынында үкһеп илаған Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһүгә күҙ ташлап:

*«Эй Әбү Бәкер! Илама!..»* – тип бойора һәм дауам итә: *«Эй кешеләр! Бәндәләр араһынан йәнендә, малында, дуҫлығында Миңә ҡарата Әбү Бәкерҙән дә фиҙакәрерәк һәм йомартыраҡ мөнәсәбәттә булған һис кем юҡ! Әгәр Раббымдан ҡала, кешеләрҙән берәй дуҫ табырға теләһәм, һис шикһеҙ, Әбү Бәкерҙе дуҫым итер инем... Мәсеткә асыла торған был ишектәрҙе ябығыҙ! Бары Әбү Бәкерҙең ишеге генә асыҡ ҡалһын! Мин Әбү Бәкерҙең ишеге өҫтөндә бер нур күрәм»* (Бохари, «Саләт», 80; Ибне Сәғд, II, 227).

*«Сәхәбәләрем! Ахыр сиктә, Мин дә бер кеше. Арағыҙҙа ҡайһы берәүҙәрҙең хаҡтары боҙолған булырға мөмкин. Мин ҡайһы кешенең тәненә ҡағылған булһам, бына минең тәнем! Килһен, ул да ҡағылһын, үҙенә тейешле хаҡты алһын! Кемдең арҡаһына һуҡҡан булһам, бына һеҙгә һыртым! Килһен, һуҡһын! Кемдең малынан өлөшкә керһәм, бына малым! Ул да килеп алһын!*

*Йә Аллаһым! Мин бары бер бәндә генә. Мосолмандарҙан ҡайһы кешегә берәй ауыр һүҙ әйткән йәки һуҡҡан булһам, йәиһә ләғнәт уҡыған булһам, һин быны уның өсөн бер паклыҡ, әжер һәм рәхмәт сәбәбенә әйләндер!»* (Әхмәт, III, 400).

*«Аллаһым! Ҡайһы мөьмингә берәй ауыр һүҙ әйткән булһам, Һин ул һүҙемде ҡиәмәт көнөндә шул мөьмин өсөн Һиңә яҡынлыҡ өсөн сәбәп ит!»* (Бохари, «Дәғүәт», 34; Дарими, «Муҡаддимә», 14; Ибне Сәғд, II, 255; Табәри, «Тарих», III, 191; Халәби, 463-464).

Шул рәүешле Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм гүйә мосолмандар менән бәхилләшә, йәғни уларҙың хаҡын ҡайтара. Әлеге сығышынан һуң Ул бик арыған хәлдә ҡабат бүлмәһенә ҡайта. Бүтән инде намаҙға сыға алмай. Бары бер тапҡыр ғына, үҙендә бер аҙ еңеллек тойоп, хәҙрәти Әбү Бәкер артында намаҙ ҡыла.

Һәм бына рабиғүл-әүүвәлдең ун икеһе көнө, дүшәмбе иртәһендә Рәсүлүллаһ үҙендә йәнә бер еңеллек һиҙә. Ләкин йәмәғәт янына сығырға хәле етмәй. Шунан һуң бүлмә ишегенең пәрҙәһен күтәреп ҡуялар һәм Аллаһ Рәсүле

ул ваҡытта хәҙрәти Әбү Бәкер имамлығында сабах намаҙы ҡылыусы һөйөклө сәхәбәләрен һуңғы тапҡыр ҡарап тора. Уларҙы теҙелешеп сафҡа баҫҡан килеш, йәмәғәт менән намаҙ уҡыған хәлдә күреүҙән ҡәнәғәт ҡалып, йөҙөн шатлыҡ йылмайыуы биләй. Бер яҡтан көслө ауырыу арҡаһында һыҙланһа, икенсе яҡтан Ул үҙенән һуң тоғролоҡло заттарҙан ғибәрәт бер йәмәғәт ҡалдырыу һәм Аллаһ тарафынан бирелгән вазифаны үтәү ҡыуанысын кисерә (Бохари, «Мәгази», 83, «Аҙан», 46, 94; Мөслим, «Саләт», 98; Нәсаи, «Жәнаиз», 7).

Был ваҡиға тураһында һөйләгән хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ ҙә юғарылағыларҙы раҫлай: «Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм сәхәбәләренең намаҙ ҡылыуын йылмайып күҙәтте. Аллаһ Рәсүлен бер ҡасан да шундай һөйөнгән хәлдә күргәнем юҡ ине» (Ибне Һишам, IV, 331).

Аллаһ Тәғәлә Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә әүәлге Пәйғәмбәрҙәренә бирмәгән бер ҙур ниғмәтте насип итә. Аллаһ Рәсүле вафатына ҡәҙәр үҙе башҡарған тәблиғ вазифаһының уңышын күрә. Ул Ғәрәбстан ярымутрауын ширктән арындыра. Боттар шәхсән уларға табынған бәндәләр тарафынан ҡырыла һәм юҡ ителә. Ҡыҙҙарын тереләй ергә күмә торған кешеләр мәрхәмәтлелектә иң юғары дәрәжәгә ирешә. Сөнки Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әҙәм балаларын тәрбиәләүҙә иң юғары дәрәжәгә күтәргән һәм кешене иң камил мәхлүк хәленә еткергән иң ҙур педагог-тәрбиәсе була.

Был иртәлә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм элегерәк үҙе әҙерләгән, ләкин ауырыуы арҡаһында сәфәре кисектерелгән ғәскәргә юлға сығырға бойора. Үҙе билдәләгән командир Усамә ибн Зәйдкә:

*«Аллаһтың бәрәкәте өсөн өйләгә ҡәҙәр юлға ҡуҙғалығыҙ!»* – тип кәңәш бирә (Ваҡыди, III, 1120).

Ул көндә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Ғәйшә раҙыйаллаһу ғәнһәлә булған алты-ете динарҙы фәҡирҙәргә таратырға ҡуша. Бер аҙ ваҡыттан һуң динарҙарҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһына. Уның сире сәбәпле хәҙрәти Ғәйшәнең был аҡсаларҙы таратырға онотҡанын белгәс, динарҙарҙы һорап алып, усына ҡуя. Артабан:

*«Аллаһтың Пәйғәмбәре Мөхәммәт былар фәҡирҙәргә таратылмайса, был аҡсалар үҙендә булған килеш Раббыһы менән күрешеүҙе дөрөҫ тип ҡабул итмәй!..»* – тип, уларҙың барыһын да ансарҙарҙан биш фәҡир ғаиләгә тарата. Һәм:

*«Бына хәҙер тынысландым!..»* – тип, еңелсә йоҡоға тала[363] (Әхмәт, VI, 104; Ибне Сәғд, II, 237-238).

363. Был уңайҙан Имам Касталлани былай ти: «Ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһ Тәғәләнең Хәбибе, Пәйғәмбәрҙәрҙең иң ҙурыһы, уҙғандағы һәм киләсәк хаталары ярлыҡанған Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм шулай уйлаған икән, өҫтәрендә мосолмандарҙың ҡандары һәм үҙҙәрендә харам малдар тотҡан килеш Аллаһ ҡаршына килеүселәрҙең хәлдәре нindәй булыр, фекерләп ҡара!» (Касталлани, II, 480-481).

Бына ул бөтмәҫ-төкәнмәҫ инфаҡ – Аллаһ юлында сарыф итеү...

Ул көндө Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әһеле бәйтенә былай тип мөрәжәғәт итә:

*«Эй кешеләр! Ут ялҡынланды. (Иғтибар итегеҙ): Төн ҡараңғылығы кеүек ҡурҡыныс фетнәләр килә!.. (Әйтерһең, киләсәктәге ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереп ҡуялар). Мин бары Аллаһ китабы булған Ҡөрьән хәләл тигәнде генә хәләл, ул харам тигәнде генә харам ҡылдым!*

*Эй Мөхәммәт Рәсүлуллаһтың ҡыҙы Фатима! Эй Сафия! Аллаһ ҡаршында ҡабул булырлыҡ эштәр эшләгеҙ! (Изге ғәмәлдәрегеҙ булмаһа, Миңә ышанып тормағыҙ), сөнки (һеҙ ғибәҙәт ҡылмаған осраҡта), Мин* һеҙҙе *Аллаһтың ғазабынан ҡотҡара алмам!»* (Ибне Сәғд, II, 256; Бохари, «Мәнаҡиб», 13-14; Мөслим, «Иман», 348-353).

Ул көндә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Зинһар! Намаҙҙы, намаҙҙы туҡтатмағыҙ! Зинһар! Ҡул аҫтындағы кешеләргә яҡшы мөнәсәбәттә булығыҙ! Уларға ҡарата мөғәмәләлә Аллаһтан ҡурҡығыҙ! (Уларҙы кейемдәрҙән мәхрүм итмәгеҙ! Тамаҡтарын туйҙырығыҙ! Уларға йомшаҡ һүҙ менән өндәшегеҙ!)»* – тип бойора (Әбү Дауыт, «Әҙәп», 123-124/5156; Ибне Мажә, «Васәя», 1).

Ул көн Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бик тырышып мисүәк ҡуллана. Хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ һөйләгәндәрҙән: «Рәсүлүллаһ тештәрен мисүәк менән таҙартҡанда, Уның элегерәк шул ҡәҙәр хуш мисүәк ҡулланғанын күргәнем юҡ кеүек инем!» (Бохари, «Мәғази», 83; Ибне Сәғд, II, 261).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм янында бәләкәй бер һыу һауыты була. Ғаләмдәр ғорурлығы Әфәндебеҙ ваҡыт-ваҡыт ҡулдарын шул һауыт эсенә тығып алып, йөҙөн еүешләй һәм:

*«Лә иләһә иллаллаһ, шикһеҙ, үлемдең иҫереклеге (аҡылды бутаған кеүәте һәм тетрәндереүҙәре) бар!»* – тип әйтә (Бохари, «Мәғази», 83).

Ул көн Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Йәнәбел-Хаҡҡа былай тип ялбара:

*«Йә Аллаһым! Мине мәрхәмәтең менән солғап ал! Мине Рафиҡи Әғлә менән ҡауыштыр! Йә Аллаһым! Мине мәрхәмәтең менән солғап ал! Миңә рәхмәтеңде насип ҡыл! Мине Рафиҡи Әғлә менән ҡауыштыр!»* (Бохари, «Мәғази», 83; Әхмәт, VI, 126).

Ул көндө Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡыҙы хәҙрәти Фатиманы:

*«Эй ҡыҙым! Илай күрмә! Мин үлгәс:* اِنَّا لِلّٰهِ وَاِنَّا اِلَيْهِ رَاجِعُونَ*, тип әйт!»* – тип йыуата (Ибне Сәғд, II, 312).

Ул көндә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Өхөд яуының иң ауыр ваҡыттарында «Рәсүлүллаһ үлде», тигән ығы-зығы арҡаһында тарҡаулыҡҡа бирелә яҙған сәхәбәләргә киҫәтеү рәүешендә индерелгән түбәндәге аяти кәримәне уҡый:

وَمَا مُحَمَّدٌ إِلَّا رَسُولٌ قَدْ خَلَتْ مِنْ قَبْلِهِ الرُّسُلُ أَفَإِنْ مَّاتَ أَوْ قُتِلَ انقَلَبْتُمْ عَلَى أَعْقَابِكُمْ وَمَنْ يَنْقَلِبْ عَلَى عَقِبَيْهِ فَلَنْ يَضُرَّ اللّٰهَ شَيْئًا وَسَيَجْزِى اللّٰهُ الشَّاكِرِينَ

**«Мөхәммәт бары Рәсүл генә. Унан әүәл дә рәсүлдәр килеп китте. Хәҙер Ул үлһә йәки үлтерелһә, һеҙ (имандан) кире ҡайтасаҡһығыҙмы? Кем шулай кире сикһә, әлбиттә, Аллаһҡа һис нисек зарар биреүсе булмаҫ. Аллаһ шөкөр һәм сабыр итеүселәргә әжерен бирәсәк»** («Әлү Ғимран», 144).

Ул көн Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, вәхи фәрештәһе Ябраил ғәләйһиссәләм килеп: «Һиңә сәләм булһын, йә Аллаһтың Рәсүле! Был – Һинең өсөн ергә һуңғы мәртәбә аяҡ баҫыуың!» – ти (Ибне Сәғд, II, 259). Ул көндө Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әүәл үҙе әйткән:

*«Йәннәттәге туҡталасаҡ урынын күрмәй тороп, һис бер пәйғәмбәрҙең йәне алынмаҫ! Артабан иһә шул туҡталышына барыуы уның теләгенә ҡалдырылыр!»* – тигән һүҙҙәрҙең ысынға ашыуын үҙ күҙе менән күрә (Бохари, «Мәгази», 83, 84; Әхмәт, VI, 89).

Ул көндө Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә Ғазраил ғәләйһиссәләм килә һәм янына кереү өсөн рөхсәт һорай. Рөхсәт алғас, Ғаләмдәр Әфәндеһенең ҡаршыһына баҫып: «Йә Рәсүлүллаһ! Йә Әхмәт! Аллаһ Тәғәлә мине Һинең янына ебәрҙе. Һинең һәр әмереңә буйһонорға ҡушты. Әгәр Һин теләк белдерһәң, йәнеңде аласаҡмын! Теләмәйһең икән, йәнеңде Һиндә ҡалдырам!» – ти. Шул саҡта улар янында булған Ябраил ғәләйһиссәләм дә һүҙ ҡуша: «Йә Аллаһтың Рәсүле! Аллаһ Тәғәлә Һине һағына!». Ул көндө Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм үҙенән рөхсәт һораған үлем фәрештәһенә:

*«(Эй Ғазраил!) Аллаһ ҡатында булыусы хәйерлерәк һәм даимирәк! Эй үлем фәрештәһе! Әйҙә, үҙеңә ҡушылған эште үтә, ал йәнемде!»* – тип әйтә (Ибне Сәғд, II, 259; Хәйсәми, IX, 34-35; Бәлазури, I, 565).

Шунан һуң мөбәрәк ҡулдарын үҙ янындағы һыу һауытына тығып алып еүешләгәс, йөҙҙәрен һыпыра һәм, илаһи һағыш менән тулы ғүмеренең ҡауышыу ҡапҡаһынан уҙғанда, тәүхид кәлимәһен әйтеп:

*«Йә Аллаһым! Бөйөк дуҫ, Бөйөк дуҫ!»* – тиә-тиә, мөбәрәк рух шәрифтәрен тәслим ҡыла. Йөҙөн сылатҡан мөбәрәк ҡулы янындағы һыу һауытына аҫылынып төшә... (Бохари, «Мәгази», 83).

Күп йылдар элек иңдерелгән:

إِنَّكَ مَيِّتٌ وَإِنَّهُمْ مَّيِّتُونَ

**«**(Эй Рәсүлем!) **Һин дә үләсәкһең, улар ҙа үләсәктәр!»** – аяти кәримәһе («әз-Зумар», 30) ысынға аша.

**Йә Аллаһым! Әфәндебеҙ Мөхәммәт Мостафа салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, Уның әһеленә һәм сәхәбәләренә салауаттарыбыҙ булһын; (барыһын да) мөбәрәк ҡыл һәм (уларға) сәләм еткер!.. Һәм был даими ирешеп торған сәләм-салауатыбыҙ булһын!..»**

❁

Рәсүлуллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ рух шәрифен тәслим ҡылғас, ғаиләһенең күҙ йәше сил булып аға. Шул саҡ, һис кемде күрмәһәләр-һиҙмәһәләр ҙә, ҡайғыларын уртаҡлашҡан һәм йыуатҡан бер тауыш ишетәләр: «Һеҙгә Аллаһтың сәләме, рәхмәте һәм бәрәкәте насип булһын!»

Әһеле бәйт тә нәҡ шулай уҡ яуап биргәс, теге тауыш ҡабат яңғырай:

كُلُّ نَفْسٍ ذَآئِقَةُ الْمَوْتِ وَإِنَّمَا تُوَفَّوْنَ أُجُورَكُمْ يَوْمَ الْقِيَامَةِ فَمَنْ زُحْزِحَ
عَنِ النَّارِ وَأُدْخِلَ الْجَنَّةَ فَقَدْ فَازَ وَمَا الْحَيَاةُ الدُّنْيَا إِلَّا مَتَاعُ الْغُرُورِ

**«Һәр йән үлемде татыясаҡ. Ҡиәмәт көнө әжерҙәрегеҙ, кәметелмәйенсә, һеҙгә биреләсәк. Кем уттан йыраҡлаштырылып, йәннәткә ҡуйылһа, ул инде, һис шикһеҙ, маҡсатына ирешеп тигән һүҙ. Донъя тормошо нәфес алданыуынан башҡа бер нәмә түгел»** («Әлү Ғимран», 185).

«Шуны яҡшы белегеҙ: һәр ҡайғының Аллаһ ҡатында бер йыуанысы, һәр үлеүсенең бер алмашы (уның урынына килеүсеһе) һәм һәр вафат булыуҙың бер түләүе, бәйәһе бар! Аллаһ диненә тотоноғоҙ һәм көткән нәмәгеҙҙе Унан өмөт итегеҙ! Ысын ҡайғыға тарыусы – сауаптан мәхрүм ҡалыусы ул. Һеҙгә Аллаһтың сәләме, рәхмәте һәм бәрәкәте булһын!» (Ибне Сәғд, II, 259).

Ибн Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмә: «Был һүҙҙәрҙе әһеле бәйттең барыһы ла, Мәсжиди Нәбәүиҙә булғандар һәм юлдағылар ишетте», – тип тапшырған (Бәлазури, I, 564). Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү иһә был тауыш эйәһенең Хыҙыр ғәләйһиссәләм икәнлеген белдерә (Ибне Сәғд, II, 260).

Йәннәт ханымдарының әфәндеһе Фатима әсәбеҙ мөбәрәк атаһы – Рәхмәт Пәйғәмбәренең фани донъянан айырылыуына шул ҡәҙәр ҡайғыра ки: «Ғаләмдәр ғорурлығының баҡыйлыҡҡа күсеүе менән өҫтөмә шундай ҡайғы-хәсрәттәр ишелеп төштө, әгәр был ҡайғы-хәсрәттәр көн өҫтөнә ҡапланһа, ул

нурлы яҡты көндәр ҡап-ҡара төнгә әйләнер ине», – тип сағыштырып күрһәтә (Диярбәкри, II, 173). Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән һуң йәшәгән алты айлыҡ хаятында Фатима әсәбеҙҙең бер тапҡыр булһа ла көлгәне күҙгә салынмай (Камил мираҫ, *«Тәжрид тәржемәһе»,* XI, 25-26).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Мәҙинәгә ҡайтыуынан һуң ун өс көн самаһы дауам иткән ауыр сире һөҙөмтәһендә, миләди 632 йылдың 8 июне, һижри 11-се йылдың 12 рабиғүл-әүүәле, дүшәмбе көн Уның өсөн гүзәллек офоҡтары асыла, һәм Хәбиб Рафиҡи Әғлә, йәғни иң бөйөк дуҫы булған Аллаһ Тәғәлә менән ҡауыша.

Әсхәбе кирам хис иткәнсә, мәшриҡтә тыуып мәғрибтә батҡан ҡояштың һис үҙгәрмәй торған яҡтыһында ниндәйҙер бер йәшерен нәмә һүнә. Шул көндән һуң Пәйғәмбәрҙең мәзине Билал Хәбәши разыйаллаһу ғәнһү күктәрҙе ҡаплаған матур тауыш менән бүтән аҙан әйтә алмай. Үҙенән бик һорағас, аҙан әйтергә ниәтләһә лә, михрабта Аллаһ Рәсүлен күрмәгәс, хәҙрәти Билалдың тамағына төйөр тығыла, тауышы ҡыҫыла һәм ул йәнә аҙанын әйтә алмай ҡала. Эстән көйҙөргән һөйөү утын һүндереү өсөн, сәхәбә Мәҙинәнән алыҫҡараҡ, Дамасҡҡа китеп бара. Бер көндө төшөндә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде күрә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ: «Нәмә инде был айырылышыу, йә Билал! Мине зыярат ҡылыр ваҡытың әле һаман етмәнеме ни?» – тип шелтәләп ҡуя. Билал разыйаллаһу ғәнһү һағыш-хәсрәтле килеш уянып китә һәм шунда уҡ юлға сыға. Ғаләмдәр Әфәндеһенең хөрмәтле ҡәберен зыярат ҡылыу өсөн, Мәҙинәгә бара. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршында илап, йөҙөн Уның ҡәберенә терәгән ваҡытта, хәҙрәти Хәсән менән хәҙрәти Хөсәйен килә. Билал разыйаллаһу ғәнһү уларҙы ҡосағына ҡыҫып, үбә башлай. Улар: «Эй Билал! Аҙаныңды бик ишетергә теләйбеҙ!» – тип бик ялынып һорағас, аҙан әйтә башлай. Шул миҙгелдә Мәҙинә тетрәнеп ҡуя. «Әшһәдү әннә Мөхәммәдүр-Рәсүлүллаһ», – тиеүгә, бөтә кешеләр – ир-аттар ҙа, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, Аллаһ Рәсүле терелде, тип уйлап, Мәсжиди Нәбәүи юлына ағыла. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафатынан һуң, Мәҙинәлә кешеләр был ҡәҙәр йәш түккән көн башҡа булмағандыр (Ибне Әсир, *«Үсдул-Габә»,* I, 244-245; Зәһәби, *«Сийәр»,* I, 357-358).

Әнәс ибн Малик разыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Мин Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән Әбү Бәкер Мәҙинәгә килгән көндән дә нурлыраҡ һәм матурыраҡ көндө бер ҡасан да күрмәнем! Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм вафат булған көндө лә күрҙем! Ул көндән дә ҡараңғыраҡ, хәйерһеҙерәк, йәмһеҙерәк көндө күргәнем юҡ! Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мәҙинәгә кергән көндә Мәҙинәнең һәр нәмәһе яҡтырып китә, вафат булған көндә иһә Мәҙинәнең һәр нәмәһе дөм-ҡараңғыға әйләнә! Уның ҡәҙерле жәсәден, үлеменә ышана алмайынса, бик

теләмәй генә дәфен ҡылдыҡ» (Әхмәт, III, 221, 268, 287; Тирмизи, «Мәнаҡиб», 1/3618; Дарими, «Муҡаддимә», 14).

Бынан һуңғы ҡайғы-хәсрәттәр һәм бәләләр мосолмандар өсөн инде юҡ дәрәжәһендә ваҡ була. Ысындан да Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Ниндәйҙер бер ҡайғы-хәсрәткә тарыған мосолмандар Минең вафатым сәбәпле баштарына төшкән ҡайғыны күҙ алдына килтереп, йыуаныс тапһындар һәм сабыр итһендәр»,* – тип әйткән була (*Муватта*, «Жанаиз», 41; Дарими, «Муҡаддимә», 14).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм былай ти:

*«Һаулығым һеҙҙең өсөн хәйерле: һеҙ Минең менән һөйләшә алаһығыҙ; Мин дә һеҙҙең менән гәпләшермен! Вафатым да һеҙҙең өсөн хәйерле: ғәмәлдәрегеҙ Миңә тәҡдим ителер, хәйерле ғәмәлдәрегеҙҙе күргәс, шуның менән Аллаһҡа хәмед-маҡтау әйтермен; яман ғәмәлдәрегеҙҙе күргәс иһә һеҙҙең өсөн Аллаһтан мәғфирәт һорармын»* (*Хәйсәми, IX, 24*).

❁

Хәҙрәти Ғәйшә разыйаллаһу ғәнһә тапшырғанса, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең һуңғы миҙгеле бары тәсбих, тәнзиһ, тәүбә һәм хәмед-ҫәнәләр менән уҙа. Ул:

*«Сүбхәналлаһи үә бихәмдиһи әстәғфируллаһи үә әтүбү иләйһ: Мин Аллаһты илаһилыҡ дәрәжәһенә ярашмаҫ сифаттарҙан паклап иҫкә алам һәм Уға хәмед-ҫәнәләр әйтәм. Аллаһтан мине ярлыҡауын һорайым һәм гонаһтарымдан тәүбә итәм»,* – тип йыш-йыш ҡабатлай (Бохари, «Аҙан», 123, 139; Мөслим, «Саләт», 218-220; Әхмәт, I, 392; Ибне Сәғд, II, 192).

Унын ике ҡалаҡ һөйәге араһында нәбилеген белдерә торған илаһи бер тамға була. Сәхәбәләрҙең бик күбе әлеге миңде үбеп алыу теләге, ынтылышы менән янып йәшәй. Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙ баҡыйлыҡҡа күскән ваҡытта, мөбәрәк йөҙөндә бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙелмәгәнгә, әсхәбе кирамда Унын әхирәткә китеүенә шик тыуа. Шунан һуң Әфәндебеҙҙең яҡындарынан Әсма бинт Ғомәйс разыйаллаһу ғәнһү Рәсүлдең арҡаһындағы мөбәрәк нәбилек мөһөрөн тикшерә. Тамғаның юғалғанын күргәс, Пәйғәмбәрҙең баҡый донъяны шәрәфләндергәне ҡәтғи таныла.[364]

Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үлгәс, үҙенән һуң бер динар ҙа, дирһәм дә, ҡол да ҡалдырмай. Бары атланып йөрөгән аҡ ҡасыры, ҡоралы һәм юлаусылар өсөн тапшырған ер кишәрлеге (Фәдәктә һәм Хәйбәрҙә) генә ҡала.[365]

364. Ибне Сәғд, II, 272; Ибне Кәсир, «әл-Бидая», V, 231.

365. Бохари, «Мәғази», 83.

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм дүшәмбе көн вафат була һәм шишәмбе көн ер ҡуйынына иңдерелә. Кешеләр намаҙын айырым-айырым уҡый (йәмәғәт менән түгел), берәү ҙә имам булып баҫмай. Уларҙың бер өлөшө: «Мөнбәр янына дәфен ҡылынһын», – тип, икенселәре: «Бәҡиғ» зиратына ерләнһен», – тип тәкдим итә. Хәҙрәти Әбү Бәкер раҙыйаллаһу ғәнһү килә лә: «Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләтү үә-сәләәмдең:

*«Һәр Пәйғәмбәр үлгән еренә дәфен ҡылыныр»,* – тигәнен ишеткән инем», – ти. Шунан һуң Ул вафат булған урында ҡәбер ҡаҙыйҙар.[366]

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде йыуырға йыйынғас, күлдәген һалдырырға теләйҙәр. Шул ваҡыт: «Күлдәкте һалдырмағыҙ!» – тигән тауыш килә. Шунан һуң Уның жәсәден өҫтөндә күлдәкле килеш йыуалар.[367]

Ғабдуллаһ ибн Мәсғуд раҙыйаллаһу ғәнһү риүәйәт ҡыла:

«Беҙҙең һөйөклөбөҙ Пәйғәмбәребеҙ вафаты тураһында бер ай алдан хәбәр итте. «Йә Рәсүлүллаһ! Һинең йыназа намаҙыңды кем ҡылһын?» – тип һорау бирҙек тә илап ебәрҙек. Ул үҙе лә иланы һәм:

*«Әкрен, ҡабаланмағыҙ, Аллаһ һеҙгә рәхмәтен ирештерһен! Һеҙгә Пәйғәмбәрегеҙ арҡаһында хәйере менән әжерен бирһен! Һеҙ мине йыуғас һәм кәфенләгәс, ошо такта ятағым өҫтөнә, ошо өйөм эсендәге ҡәберемдең ситенә ҡуйығыҙ! Артабан күпмелер ваҡытҡа Минең янымдан сығып китегеҙ! Сөнки Минең өсөн иң әүәл ике дуҫым – Ябраил һәм Микаил, һуңынан Исрафил, унан иһә янында мәләк сафтары менән бергә үлем фәрештәһе намаҙ ҡыласаҡ! Шунан һуң төркөм-төркөм керегеҙ ҙә, янымда намаҙ уҡып, сәләм-салауат әйтегеҙ! Ләкин маҡтап, ҡысҡыра-ҡысҡыра саҡырып, Мине тынысһыҙламағыҙ!*

*Башта ғаиләмдәге ир-аттар янымда намаҙ ҡыла башлаһын! Һуңынан уларҙың ҡатындары уҡыһын! Уларҙан һуң һеҙ уҡырһығыҙ!*

*Сәхәбәләремдән бында булмағандарға сәләм әйтегеҙ! Ҡиәмәт көнөнәсә динем аша Миңә эйәргән заттарға ла Минән сәләм тапшырығыҙ!»»* (Хәйсәми, IX, 25; Ибне Сәғд, II, 256-257).

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әйткәнсә эшләйҙәр. Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм өсөн имамһыҙ йыназа намаҙы уҡыла аламы?» – тип һис кем шөбһәләнмәһен! Ул иҫән сағында ла, вафат булғас та, имамығыҙ булып тора!» – ти һәм Пәйғәмбәр

---

366. Гыйаз ҡазый: «Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡәбере урынлашҡан урын ер йөҙөнөң иң фазиләтле урыны булғанлығы бәхәс уятмай», – тигән («Шифа», II, 96).
Имам Бусири иһә хис-кисерештәрен былай тасуирлай: «Йән һәм йыһан солтаны Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең мөбәрәк жәсәден бәгерендә һаҡлай торған тупраҡ кәҙәр хуш бер еҫ тә юҡ. Ни кәҙәр бәхетле һәм изгелекле ки ул мөбәрәк тупраҡты еҫкәп үпкән кеше!» («Ҡасидәи Бүрдә», Бәйт № 58).

367. Муватта, «Жанаиз», 27; Әхмәт, VI, 267.

ғәләйһис-салəәтү үәс-сәләәм менән йәнәшә баçып, доға ҡыла: «Йә Рәсүлүллаһ! Һиңә Аллаһтың сәләме, рәхмәте һәм бәрәкәте булһын! Йә Аллаһым! Беҙ Һин Уға иңдергәндәрҙе тәблиғ иткәнлегенә һәм өммәтенә нәсихәт ҡылғанлығына, Аллаһ динен өçтөн сығарғансы һәм һүҙен тамамлағансы, Аллаһ юлында һуғышҡанлығына шаһитлығыбыҙҙы белдерәбеҙ! Йә Аллаһым! Беҙҙе Уға индергән нәмәләргә эйәреүселәрҙән ит! Унан һуң да беҙгә был юлда тоғролоҡ, ныҡлыҡ бир! Беҙҙе Уның менән ҡауыштыр!». Был ваҡытта йәмәғәт: «Әмин! Әмин!» – тип тора (Ибне Сәғд, II, 291).

Ер ҡуйыны өсөн ниндәй ҙур бәхет – ул Ғаләмдәрҙең Әфәндеһен бәғерендә һаҡлай. Шағир быны шундай матур тасуирлаған:

*«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм – һайлап алынған бер Пәйғәмбәр һәм ғаләмдәргә рәхмәт ул. Ер йөҙө: «Уның ҡәбере миндә», – тип әйтер, күктәр ҡаршында маҡтанып. Ябраил ғәләйһиссәләм Аллаһ Рәсүленең «баҡса»һын зыярат ҡылып: «Был – Ғәден йәннәте. Был ерҙәргә мәңге ҡалыу өсөн керегеҙ!» – тигән».*

М. Раиф тә күктең ергә ҡыҙығыуын түбәндәге матур шиғыр юлы менән белдерә:

*«Эй ҡояш йөҙлө! Күк ер йөҙөнөң Һинең менән биҙәлгәнлеген күреүгә, шыңшый-шыңшый (хисләнеп): «Аһ, тупраҡ булһам ине!» – тип* («ән-Нәбә», 40) *ҡайғырыр икән».*

Дин камиллыҡҡа ирешә, сәхәбәләрҙән тәблиғте таныуҙары шәхсән раçлатыла һәм Йәнәбел-Хаҡҡа был турала шаһитлыҡ белдерелә. Шунан ғына Йәшәйеш нуры салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм мәңгелек донъяға саҡырыла. Хәҙер Ул мәхшәр көнө сират күпере һәм Кәүçәр шишмәһе янында өммәтен көтә.

*Шәфәғәт ҡыл, йә Рәсүлүллаһ!*
*Ярҙам-мәдәд бир, йә Рәсүлүллаһ!*
*Именлек-ярҙам ҡыл, йә Рәсүлүллаһ!..*

❁

12 рабиғүл-әүүвәл, дүшәмбе көн тыуып, Рәсүлүллаһ донъяны хөрмәтләй һәм 12 рабиғүл-әүүвәл, дүшәмбе көн Аллаһ тарафынан Уға нәбилек вазифаһы йөкләнә. Әбү Катағдә былай тип риүәйәт ҡыла:

«(Хәҙрәти Пәйғәмбәрҙән) дүшәмбе көн ураҙаһы тураһында һорайҙар. Ул иһә яуабында:

*«Был – минең тыуған көнөм һәм Пәйғәмбәр итеп ебәрелгән көн...»* – тип асыҡлыҡ кертә» (Мөслим, «Сыйам», 197-198).

Йәнә бер 12 рабиғүл-әүүәл көнөндә, дүшәмбе иртәһендә, Мәҙинәгә инеп, яңы ҡоролған һәм ҡиәмәткә ҡәҙәр йәшәйәсәк ислам дәүләтенә нигеҙ һала. Һәм ахырҙа иһә, 12 рабиғүл-әүүәл, дүшәмбе көнө әхирәт донъяһына күсә. Хәҙер Ул баҡыйлыҡта шәфҡәт-мәрхәмәте менән шәфәғәт ҡылыуы өсөн, өммәтен көтә.

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең донъялыҡтан мәңгелек сәғәҙәт ғаләменә күсеше сәбәпле, Унан мәхрүм ҡалған донъяның тоғролоҡһоҙлоғон, бивафалығын Ғәзиз Мәхмүд Хүдайи бындай шиғри юлдар менән тасуирлай:

*Кем өмөт итер һинән тоғролоҡто,*
*Ялған донъя түгелме һин?*
*Мөхәммәт әл-Мостафаны*
*Тартып алған донъя түгелме һин?*

**Ғаләмде һарыған ҡайғы**

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафат булғас, хәҙрәти Фатима раҙыйаллаһу ғәнһә:

يَا أَبَتَاهْ مِنْ رَبِّهِ مَا أَدْنَاهُ

يَا أَبَتَاهْ أَجَابَ رَبًّا دَعَاهُ

يَا أَبَتَاهْ مَنْ جَنَّةُ الْفِرْدَوْسِ مَأْوَاهُ

يَا أَبَتَاهْ إِلٰى جِبْرِيلَ نَنْعَاهُ

*«Йә Раббыһына үҙеңдән дә яҡыныраҡ һис кем булмаған атайым! Йә Раббың саҡырыуына буйһонған атайым! Йә урыны фирҙәүес йәннәте булған атайым! Йә вафат булыуы тураһында беҙ Ябраилға хәбәр иткән атайым!»* – тип илай. Әфәндебеҙ ерләнгәндән һуң, ул Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһүгә: «Эй Әнәс! Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм өҫтөнә тупраҡ ташлауға күңелегеҙ нисек риза булып тора алды!» – ти (Бохари, «Мағази», 83; Дарими, «Муҡаддимә», 14). Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһү был һорауға һүҙ менән яуап бирмәй, ләкин бар ҡиәфәте: «Юҡ, йә Фатима! Күңелебеҙ бер ҙә риза булманы, фәҡәт беҙ Рәсүлүллаһ ҡушҡанға буйһоноп, был эште үҙебеҙҙе көсләй-көсләй башҡарҙыҡ», – тип әйтеп тора (Камил мираç, *«Тәжрид тәржемәһе»,* XI, 25).

Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең вафатынан һуң, мосолмандар мәсеттә илай башлай. Хәҙрәти Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Берәүҙән дә «Мөхәммәт ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм үлде!» тигән һүҙҙе ишетәһе булмайым! Юғиһә, ҡылысым менән муйынына сабырмын! Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи

үә сәлләм Муса ғәләйһиссәләм кеүек һушын юғалтҡандыр!..» – тип һөйләүен дауам итә, хатта һөйләй-һөйләй ауыҙы күбекләнеп сыға.

Хәҙрәти Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү, ҡайғылы хәбәрҙе алғас, атына атланып, кисекмәҫтән Мәҙинәгә килә. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең йөҙөн асып ҡарай. Шунан өҫтөнә ҡапланып, илай-илай маңлайынан үбә лә: «Валлаһи, Рәсүлуллаһ вафат булған! «Иннә лилләһи үә иннә иләйһи раджиғүн» – беҙ Аллаһтыҡы! Беҙ Аллаһ ҡолдары! Һәм беҙ ҡабат Уға ҡайтыусылар! Атам-әсәм Һиңә ҡорбан булһын! Аллаһ менән ант итәм, Хаҡ Тәғәлә Һиңә бер ҡасан да үлем әсеһен ике тапҡыр татырға бирмәйәсәк! Һин бер мәртәбә үлеп, тәҡдиргә яҙылған үлем хәлен кисергән булаһың! Бынан һуң Һинең өсөн башҡа үлеү юҡ! Һай, минең Пәйғәмбәрем!» – тигәндән һуң, эйелеп, Йәшәйеш нуры Әфәндебеҙҙең битен үбеп ала. Башын күтәргәс: «Һай, дуҫым!» – ти һәм, эйелеп, Ғаләмдәр Әфәндеһенең маңлайынан үбә. «Һай, һайлап алынған кешем!» – тип, ҡабат маңлайынан үбә. «Һин иҫән сағыңда ла матур инең, вафатыңдан һуң да матурһың! Һинең иҫәнлегең дә, үлемең дә ни ҡәҙәр матур!» – тип, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең йөҙөн ҡаплаған япманы ҡаплағас, тышҡа сығып китә.

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү әле һаман Пәйғәмбәребеҙҙең үлеме тураһындағы сығышын туҡтатмаған була. Хәҙрәти Әбү Бәкер уға: «Ултыр инде, Ғүмәр!» – тип өндәшә. Хәҙрәти Ғүмәр ултырырға ашыҡмай. Хәҙрәти Әбү Бәкер һүҙен ике-өс мәртәбә ҡабатлай һәм үҙе сығыш яһай башлай: «Аллаһ Тәғәлә Пәйғәмбәренә, әле Ул арағыҙҙа ваҡытта уҡ, үлем хәбәрен ирештергән ине. Һеҙҙең дә (әжәлегеҙ еткәс) үләсәгегеҙҙе хәбәр иткән ине. Рәсүлуллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафат булды! Һеҙҙән дә һис кем иҫән ҡалмаясаҡ. Мөхәммәткә эйәреүселәр, ышаныусылар белһен, Мөхәммәт ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм вафат булды! Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыусылар иһә шуны белһен: һис шикһеҙ, Аллаһ – Хәйй, үлемһеҙ Ул! Аллаһ Тәғәлә:

وَمَا مُحَمَّدٌ إِلَّا رَسُولٌ قَدْ خَلَتْ مِنْ قَبْلِهِ الرُّسُلُ أَفَإِنْ مَّاتَ أَوْ قُتِلَ انْقَلَبْتُمْ عَلَى أَعْقَابِكُمْ وَمَنْ يَنْقَلِبْ عَلَى عَقِبَيْهِ فَلَنْ يَضُرَّ اللهَ شَيْئًا وَسَيَجْزِى اللهُ الشَّاكِرِينَ

**«Мөхәммәт бары Рәсүл генә. Унан әүәл дә рәсүлдәр килеп китте. Хәҙер Ул үлһә йәки үлтерелһә, һеҙ (имандан) кире сигерһегеҙме ни? Кем шулай кире сикһә, әлбиттә, Аллаһҡа һис нисек зарар биреүсе булмаҫ. Аллаһ шөкөр һәм сабыр итеүселәргә әжерен бирәсәк», –** тип әйткән («Әлү Ғимран», 144)».

Кешеләр был аятты ишеткәс, Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафат булғанлығына инде ныҡлап инана. Улар шул дәрәжә аптырашта ҡалалар

ки, әйтерһең, Әбү Бәкер разыйаллаһу ғәнһү уҡығансы, был аяттың иңгәнлеген бөтөнләй белмәгәндәр.

Хәҙрәти Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһү: «Валлаһи, ул көнгә саҡлы әлеге аятты гүйә һис ишетмәгән инем! Уны Әбү Бәкер ауыҙынан тыңлағас, ҡурҡыуға баттым. Аяҡтарым тотмаҫ булды. Теҙҙәрем йомшарып, торған еремдә йығылып киттем», – тип иҫкә ала (Ибне Сәғд, II, 266-272; Бохари, «Мағази», 83; Хәйсәми, IX, 32; Ғабдүррәззаҡ, V, 436).

Хәҙрәти Әбү Бәкерҙең сығышынан һуң хәҙрәти Ғүмәр Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм өҫтөнә эйелеп, маңлайынан үбә. Йәшле күҙҙәре менән ул былай тип һөйләй: «Атам-әсәм Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ! Һин өҫтөнә таянған хөрмә төбө, мөнбәрең барлыҡҡа килгәс, Һинән айырылыуға түҙеп тора алмайса, ыңғыраша башлай, ҡулыңды уның өҫтөнә ҡуйғанда иһә тынып ҡала ине. Юғиһә, өммәтең Һине юғалтыуға илау-һыҡтауға унан лайыҡыраҡ бит! Атам-әсәм Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ! Раббың:

مَّنْ يُطِعِ الرَّسُولَ فَقَدْ أَطَاعَ اللّٰهَ

**«Кем Рәсүлүллаһҡа итәғәт ҡылһа, Аллаһҡа итәғәт ҡылған булыр…»** – тип («ән-Ниса», 80), Һиңә буйһоноуҙы үҙенә буйһоноуға тиңләп, үҙ ҡаршында өҫтөнлөгөңдө иң юғары дәрәжәгә күтәрҙе!

Атам-әсәм Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ! Аллаһ, Һине Пәйғәмбәрҙәрҙең ахырғыһы итеп ебәргәндә, Һиңә иман килтереү һәм ярҙамлашыу мәсьәләһендә әүәлге пәйғәмбәрҙәрҙән ант иттереп,[368] Һинең үҙ ҡаршындағы фазиләтеңде иң юғары дәрәжәгә күтәрҙе!

Атам-әсәм Һиңә ҡорбан булһын, йә Рәсүлүллаһ! Йәһәннәм халҡының, ғазапҡа тотолғанда:

يَا لَيْتَنَا أَطَعْنَا اللّٰهَ وَأَطَعْنَا الرَّسُولَا

**«…Аһ! Аллаһҡа итәғәт ҡылған булһа инек, Рәсүлүллаһҡа итәғәт ҡылған булһа инек!»** – тип («әл-Әхзәб», 66), Һиңә буйһонмаған өсөн ҡайғырыуы, үкенеүе, Һинең Аллаһ алдында фазиләтеңде иң юғары дәрәжәгә күтәрҙе!» (Касталлани, II, 492).

Өммө Сәләмә разыйаллаһу ғәнһә инәбеҙ һөйләгәндәрҙән:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафат булған көндө Уның тирәһенә йыйылып иланыҡ. Ул төндө йоҡлай алманыҡ. Аллаһ Рәсүле өйөбөҙҙә булғас, Уға ҡарап йыуаныс таба инек. Сәхәр ваҡытында ер ҡаҙыған тауыштарҙы

368. Ҡарағыҙ: «Әлү Ғимран», 81.

ишетеүгә, үкереп илап ебәрҙек. Мәсеттәге йәмәғәт тә үкереп-үкереп йәш түкте. Бар Мәҙинә бер ҡайғынан тетрәнде. Айырыуса Билал раҙыйаллаһу ғәнһүҙең, аҙан әйткәндә, «Әшһәдү әннә Мүхәммәдүр-Рәсүлүллаһ», тип, Рәсүлүллаһтың исемен телгә алыуға үкһей-үкһей илауы – хәсрәтебеҙҙе тағы ла көсәйтеп ебәрҙе. Кешеләр ҡәбер янына уҙыу өсөн һөжүмгә күскәс, йорт эсендәгеләр ишекте бикләп ҡуйҙы. Был ниндәй ҙур ҡайғы ине! Бынан һуң ниндәй ҙә булһа берәй бәлә-ҡазаға тарығанда, Рәсүлүллаһтың үлемен иҫкә алып, шуның менән сағыштырып, инде ул хәсрәткә иғтибар ҙа бирмәй инек» (Ибне Кәсир, *«әл-Бидая»,* V, 256).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән айырылышыу әсхәбе кирам өсөн бик ауыр була, сөнки Уны һәр нәмәнән һәм һәр кемдән нығыраҡ яраталар. Шуға күрә сәхәбәләр араһында Уны күрмәйенсә, Уны ишетмәйенсә һәм, ғөмүмән, Унһыҙ тормошта йәшәргә теләмәгәндәре лә була. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ уларҙың бындай хәлен түбәндәге хәҙис шәрифе менән алдан уҡ белдереп ҡуя:

*«Мөхәммәттең йәнен ҡөҙрәтле ҡулында тотоусы Аллаһ менән ант итәм, бер көн килер, Мине күрә алмаясаҡһығыҙ. Ул ваҡытта һеҙҙән берегеҙ Мине үҙе янында күреүҙе ғаиләһе һәм малынан һөйөклөрәк һәм өҫтөнөрәк, тип ҡабул итәсәк»* (Мөслим, «Фәзаил», 142; Бохари, «Мәнаҡиб», 25).

Улар ғүмерҙәрен Аллаһ Рәсүле менән ҡабат бергә буласаҡ һәм Ғаләмдәрҙең Әфәндеһен яңынан күрә аласаҡ көндәрен көтөп уҙҙыра.

Хәҙрәти Ғосман раҙыйаллаһу ғәнһү былай тип бәйән ҡыла: «Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм йән тәслим ҡылғас, әсхәбе кирам араһында уның үлеменә иң ныҡ ҡайғырған зат, шөбһәһеҙ, мин инем. Башҡалар ҙа ҡайғырҙы. Хатта ҡайғы-хәсрәттән вәсүәсәгә бирелеүселәр ҙә булды. Бер ҡәлғә күләгәһендә ултырғанда, Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү янымдан уҙып киткән һәм миңә сәләм биргән икән. Ҡайғым арҡаһында уның үтеп киткәнен дә, сәләм биргәнен дә һиҙмәнем. Ғүмәр Әбү Бәкер янына бара ла: «Ғосманды осраттым, сәләм бирҙем, сәләмемде алманы, бынан да шаҡ ҡаттырырлыҡ берәй нәмә була алырмы?» – тип аптыраштa ҡалыуын белдерә. Шунан һуң Әбү Бәкер менән бергә яныма килеп, мине сәләмләнеләр. Артабан Әбү Бәкер: «Ҡәрҙәшең Ғүмәр килеп, һиңә сәләм биреүе һәм уның сәләмен алмауың тураһында һөйләне. Бының сәбәбе низә?» – тип һораны. «Мин бер ҙә ундай нәмә эшләмәнем», – тигәс, Ғүмәр шунда уҡ ҡаршы төштө: «Валлаһи, һин шулай эшләнең!» «Валлаһи, мин һинең уҙып киткәнеңде лә, сәләм биргәнеңде лә күрмәнем!» – тип яуап бирҙем. Шунда йәнә Әбү Бәкер һүҙгә ҡушылып: «Ғосман дөрөҫөн һөйләй», – тине» (Әхмәт, I, 6).

Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм вафат булғас, хәҙрәти Әбү Бәкер Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүгә һүҙ ҡуша: «Тор, Әфәндебеҙҙең яҡын кешеһе булған Өммө Әймән янына барайыҡ, Рәсүлүллаһ кеүек беҙ ҙә уны

зыярат ҡылайыҡ». Яндарына килеүгә, Өммө Әймән раҙыйаллаһу ғәнһә илай башлай. «Ниңә илайһың? Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм өсөн Аллаһ ҡаршындағы ниғмәттәрҙең күпкә хәйерлерәк икәнен белмәйһеңме әллә?» – тиҙәр ҡатынға. Өммө Әймән: «Мин уның өсөн иламайым. Аллаһ ҡаршындағы ниғмәттәрҙең Рәсүлүллаһ ғәләйһис-саләәтү үәс-сәләәм өсөн, әлбиттә, хәйерлерәк икәнен беләм. Мин вәхи килеүҙең өҙөлөүе сәбәпле илайым», – ти. Уның шундай хисле фекер йөрөтөүе Әбү Бәкер менән Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһүмәне лә тәьҫирләндерә. Өммө Әймән менән бергә улар ҙа илай башлай (Мөслим, «Фәҙаилүс-Сахабә», 103).

Тирә-яҡты тикшереү-күҙәтеү ниәте менән ҡала урамдарында йөрөгәндә, Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү төндә бер өйҙәге ҡәндилдә ут яныуын күреп ҡала. Әлеге йортҡа яҡыныраҡ килгәс, өлкән йәштәге бер ҡатындың йөн эрләй-эрләй, былдай эстәлектәге шиғыр һөйләүен ишетә: «Тоғро, изге заттарҙың сәләме һәм доғаһы Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә булһын, Йә Рәсүлүллаһ! Бөтә һайланып алынғандар Һиңә рәхмәт уҡыһын. Һин төндәрен ғибәҙәт ҡыла, сәхәр ваҡыттарында күп-күп илай инең. Әммә үлем аҙым-аҙым, баҫҡыс-баҫҡыс һәр кемгә килә. Аһ! Бер белә алһам ине, әхирәт донъяһы мине һөйөклө Пәйғәмбәрем менән осраштырасаҡ микән?»

Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү, ултырып, күпмелер ваҡыт илап ала. Артабан ишек шаҡый. Ҡарсыҡ «кем унда?» тип һорағас: «Ғүмәр ибн Хаттаб», – тип үҙен таныта. «Ғүмәрҙең миндә ни эше бар, ошо ваҡытта бында ни эҙләп йөрөй?» – тип борсола ҡарсыҡ. «Аллаһты һөйәһең икән, ишегеңде ас, ҡурҡма!» – ти хәҙрәти Ғүмәр. Әбей кеше ишекте асҡас, уға: «Бынан алдараҡ һөйләгән шиғырыңды тағын ҡабатла әле!» – ти. Ҡарсыҡ йәнә һөйләй. Һуңғы юлға еткәс, Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү: «Мине лә үҙ арағыҙға кертеүҙе үтенәм!» – ти. Шунан һуң ҡарсыҡ аҙаҡҡы шиғыр юлын былай тип уҡый: «Аһ! Бер белә алһам ине, әхирәт донъяһы һөйөклө Пәйғәмбәрем менән мине һәм Ғүмәрҙе осраштырасаҡ микән? Йә Ғаффар булған Аллаһым! Ғүмәргә мәғфирәт ҡыл!» Ғүмәр раҙыйаллаһу ғәнһү иһә күңеле булып, ҡайтып китә (Ғәли әл-Мүттәҡи, XII, 562/35762).

Әнәс раҙыйаллаһу ғәнһү: «Бер төн дә төшөмдә һөйөклө Пәйғәмбәремде күрмәй ҡалмайым», – тип илай торған була (Ибне Сәғд, VII, 20).

Юғарылағы риүәйәттәрҙәге кеүек, әсхәбе кирам, Рәсүлүллаһ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм тураһында телгә алғанда, йыш ҡына «хәбиби (һөйөклөм)», «хәлили (дуҫым)» кеүек мөхәббәттәренең дәртен, сафлығын белдергән ғибәрәләр ҡуллана.[369] Улар даими сәләм-салауаттар әйтеп, бөйөк Пәйғәмбәргә ҡарата һөйөүҙәрен һәм ихлас бағлылыҡтарын күрһәтәләр. Ләкин Уны иҫкә алыуҙары бары сәләм-салауаттар менән генә сикләнмәй. Рәсүлүллаһ

369. Бохари, «Тәһәджүт», 33; «Саум», 60; Мөслим, «Мүсафирин», 85; Ибне Мажә, «Саҙаҡат», 10; Дарими, «Саум», 38; Әхмәт, V, 159; Ибне Сәғд, IV, 229.

салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм юлынан барыуҙары, Уның сөннәтенә эйәреүҙәре һәм хәҙис шәрифтәре тураһында фекер алышыуҙары ла уларға һәр ваҡыт Рәсүл Әкрәмде хәтерләтә.

Әбү Зәрр раҙыйаллаһу ғәнһү ҙә быны раҫлай: «Валлаһи, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әхирәткә күскәндә, беҙҙе шундай халәттә ҡалдырҙы ки, берәй ҡош күктә ҡанат ҡаҡһа ла, уның был хәрәкәте беҙгә Рәсүлүллаһтың берәй хәҙисен иҫкә төшөрә ине. Сөнки Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе беҙгә: *«Йәннәткә яҡынайтҡан, йәһәннәмдән йыраҡайтҡан нәмә бар, барыһы ла һеҙгә асыҡланды»,* – тип әйткән ине» (Әхмәт, V, 153, 162; Хәйсәми, VIII, 263).

Рәсүл Әкрәм салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде донъялағы һәр кемдән һәм һәр нәмәнән нығыраҡ һөйөү, Уның ҡушҡандарын һәм тыйғандарын үҙ теләктәребеҙҙән өҫтөн ҡуйыу һәм Уның бөтә һүҙ үә ғәмәлдәренә эйәреү барлыҡ мосолмандар өсөн дә бер дини бурыс, вазифа булып тора.

# ИҢ КАМИЛ ҮРНӘК

Үҙе яралтҡан мәхлүктәр араһында Аллаһтың илаһи исемдәренән тулыһынса файҙаланыу мөмкинлеге, шундай юғары дәрәжә бары кешегә генә насип ителгән. Шул уҡ ваҡытта Йәнәбел-Хаҡ илаһи һынау ниәтендә бәндәгә боҙоҡлоҡ һәм тәҡүәлек нигеҙҙәренә юлды асыҡ ҡалдыра; унда хәйерлегә лә, яуызлыҡҡа ла һәләтле холоҡ сифаттары булдыра.

Был күҙлектән ҡарағанда, диндең маҡсаты шундай ҡапма-ҡаршы һәләттәргә, ынтылыштарға эйә әҙәм балаһындағы тиҫкәре холоҡ сифаттарын юҡҡа сығырлыҡ дәрәжәлә әҙәйтеүҙән һәм быға ҡаршы күркәм сифаттарҙы камиллыҡҡа күтәреүҙән ғибәрәт. Ләкин әлеге маҡсат ысынға аша алһын өсөн, кеше шәхси үрнәккә, йәғни «үсвәи хәсәнә» тигән ғибәрә менән белдерелгән иң күркәм миҫал-өлгөгә мохтаж. Пәйғәмбәрҙәрҙең ергә ебәрелеүендәге хикмәттәрҙең барыһы ла уларҙың кешеләр өсөн үҙенә эйәрерлек мөкәммәл үрнәк шәхсиәткә эйә булыуына бәйле. Аллаһ Тәғәлә әйтә:

وَمَا أَرْسَلْنَا مِنْ رَسُولٍ إِلَّا لِيُطَاعَ بِإِذْنِ اللهِ

**«Беҙ барлыҡ Рәсүлдәрҙе лә Аллаһ рөхсәте менән уларға итәғәт ҡылһындар, тигән маҡсатта ғына ебәрҙек...»** («ән-Ниса», 64).

Былдай сифат Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Әфәндебеҙҙә иң юғары дәрәжәлә була һәм шуға күрә Йәнәбел-Хаҡ аяти кәримәлә былай ти:

لَقَدْ كَانَ لَكُمْ فِى رَسُولِ اللهِ أُسْوَةٌ
حَسَنَةٌ لِمَنْ كَانَ يَرْجُو اللهَ وَالْيَوْمَ الْآخِرَ وَذَكَرَ اللهَ كَثِيرًا

**«Тәхҡиҡ, Рәсүлүллаһта һеҙҙең өсөн Аллаһҡа һәм әхирәт көнө киләсәгенә инанғандар һәм Аллаһты йыш зекер итеүселәр «үсвәи хәсәнә» – камил үрнәк бар»** («әл-Әхзәб», 21).

Хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм – тарихта ғүмере бөтә нескәлектәренә тиклем ентекләп, тәфсилләп өйрәнелгән берҙән-бер Пәйғәмбәр һәм берҙән-бер кеше. Уның бөтә ғәмәлдәре, һүҙҙәре һәм хис-кисерештәре һүҙгә-һүҙ теркәлеп, маҡтаулы бер сәхифә булып тарихҡа инде. Уның тормошо ҡиәмәткәсә килеп-китәсәк нәҫелдәргә үрнәк булып тора. Ҡөрьәни-Кәримдең «Ҡәләм» сүрәһендә Уның тураһында:

وَإِنَّكَ لَعَلَى خُلُقٍ عَظِيمٍ

**«Дөрөçлөктә, Һин – юғары әхлаҡ эйәhе!»** – тип әйтелә («әл-Ҡәләм», 4).

Рәсүлүллаh салләллаhу ғәләйhи үә сәлләмдең тормош рәүеше hәм мөбәрәк шәхесе тулыhынса бәндәсел аң ҡыçаларына hыя алған күренештәре менән дә бәндәсел эш-ғәмәлдәр, мөнәсәбәттәр системаhының тиңдәшhеҙ юғары дәрәжәhен, өлгөhөн тәшкил итә. Сөнки Аллаh Жәллә Жәләлүhү ул мөбәрәк йән эйәhен бөтә кешелек өсөн бер «үсвәи хәсәнә», йәғни иң камил үрнәк сифатында бүләк ҡыла. Шуға күрә Уны кешелек йәмғиәте эсендә ғажизлыҡ, меçкенлек яғынан иң түбән баçҡыс – «йәтим балалыҡ»тан башлатып, хаяттың бөтә баçҡыстарынан уҙҙыра, ҡөҙрәт hәм хоҡуҡлылыҡ күҙлегенән ҡарағанда, иң юғары, йәғни пәйғәмбәрлек hәм дәүләт башлығы дәрәжәhенә ҡәҙәр күтәрә. Кешеләр, ҡайhы ғына дәрәжәлә hәм вәзғиәттә булhалар ҙа, Унан үҙҙәре өсөн иң камил эш-ғәмәлдәрҙе үрнәк итеп алып, мөмкинлектәре hәм hәләттәре нисбәтендә эйәрергә, үтәргә тырышhындар. Был иhә Уға ҡарата мөхәббәт hәм Уның рухиәте менән төрөнә алыуға бәйле рәүештә тормошҡа аша.

Аллаh Рәсүле салләллаhу ғәләйhи үә сәлләм дини юлбашсы булараҡ та, дәүләт етәксеhе булараҡ та үрнәк; илаhи мөхәббәт баҡсаhына кереүселәр өсөн дә үрнәк, Аллаhтың ниғмәттәренә тиенгән саҡтарҙа шөкөр hәм ғибәҙәттәрен арттырыуҙа ла үрнәк. Ауыр ваҡыттарға hәм урындарға тарығанда, сабырлығы hәм буйhоноусанлығы менән үрнәк. Ғәнимәт менән эш иткәндә йомартлығы hәм киң күңеллеге менән үрнәк. Ғаиләhенә шәфҡәтлелеге менән үрнәк. Көсhөҙҙәргә, үкhеҙҙәргә, йәтимдәргә, ҡолдарға ҡарата мәрхәмәте менән үрнәк. Ғәйеплеләргә, гонаhлыларға ҡарата кисереүле мөнәсәбәте hәм мәрхәмәтлелеге менән үрнәк.

Әгәр мал-мөлкәткә эйә бер бай кеше икәнhең, бөтә Ғәрәбстанға хаким булған, бөтә ғәрәп алдынғыларын үҙенә ҡарата мөхәббәт менән бағлаған ул бөйөк Пәйғәмбәрҙең тыйнаҡлығы hәм йомартлығы тураhында уйлап ҡара!

Әгәр көсhөҙ, меçкен буйhоноусыларҙың береhе икәнhең, Мәккәлә залим hәм яуыз мөшриктәр идараhында, шулар иҙеүендә йәшәгән Пәйғәмбәрҙең тормошонан үрнәк ал!

Әгәр яңы ерҙәр яулаған еңеүсе икәнhең, Бәҙер hәм Хөнәйендә дошманынан өçтөн сыҡҡан Пәйғәмбәрҙең ҡыйыулыҡ hәм илаhи буйhоноусанлыҡ менән тулы тормошонан ғибрәт ал!

Әгәр бер еңелеүгә тарыhаң, Аллаh hаҡлаhын, ул ваҡытта Өхөд hуғышында шәhит киткән йәки яраланып ергә йығылған сәхәбәләре араhында ҡурҡыу белмәç батыр рәүештә йөрөп торған Пәйғәмбәрҙең Аллаhҡа тәүәккәл ҡылыуын иçеңә төшөр!

Әгәр мөғәллим икәнһең, мәсеттә Суффә сәхәбәләренә нәзәҡәтле, түбәнселекле һәм һиҙгер күңеленең бәрәкәте менән илаһи әмерҙәрҙе өйрәткән Пәйғәмбәр тураһында уйла!

Әгәр уҡыусы, студент икәнһең, үҙенә вәхи алып килгән Ябраил ҡаршында ултырған Пәйғәмбәрҙе күҙалла!

Әгәр өгөт-нәсихәт биреүсе вәғәзсе һәм ышаныслы мөршид, шәкерт икәнһең, Мәсжиди Нәбәүи эсендә сәхәбәләренә хикмәт таратыусы Пәйғәмбәрҙе тыңла! Уның татлы тауышына ҡолаҡ һал, күңелеңде ас!

Әгәр хаҡлыҡ, ғәҙеллек һаҡларға, хәҡиҡәтте тәблиғ ҡылырға, таратырға теләйһең, был мәсьәләлә һиңә бер ярҙамсы ла юҡ икән, Мәккәлә һәр төрлө ярҙамдан мәхрүм килеш залимдар ҡаршыһында дөрөҫлөк, ғәҙеллек тураһында иғлан итеп, уларҙы һидәйәткә өндәгән Пәйғәмбәрҙең тормошона ҡара!

Дошмандан өҫтөн сығып, уның билен һындырһаң, көндәшеңдең үжәтлеген еңеп, уны отһаң, батылды тар-мар ҡылып, хаҡлыҡты иғлан итһәң, Мәккә яуланған көндө, еңеүсе бер командир була тороп та, изге ҡалаға олуғ тыйнаҡлыҡ менән дөйәһе өҫтөндә, гүйә сәждә ҡылғандай эйелеп кергән шөкөр итеүсе Пәйғәмбәрҙе күҙ алдыңа килтер!

Әгәр бер ер, ферма хужаһы булып, ундағы эштәреңде яйлап ебәрергә теләйһең икән, Бану Нәдир, Хәйбәр һәм Фәдәк ерҙәренең эйәһенә әйләнгәс, уларҙы ашлап, тәрбиәләп, иң күркәм ысул менән идара итәсәк кешеләрҙе етәксе итеп ҡуйған Пәйғәмбәрҙән үрнәк ал!

Әгәр бер үкһеҙ, йәтим икәнһең, Ғабдуллаһ һәм Әминәнең йәтиме, бәғер киҫәктәре булған гонаһһыҙ сабый, нурлы Йәтим тураһында уйла!

Әгәр үҫеп еткән бер йәш кеше икәнһең, Мәккәлә көтөү көтөп пәйғәмбәрлеккә ебәрелгән йәш егеттең нәзәҡәтле, әхлаҡлы тормошона иғтибар ит!

Әгәр әҙәп-әхлаҡлы бер ғаилә ҡорорға теләүсе йәш кеше икәнһең, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең ғаилә тормошона һәм кәңәштәренә иғтибар бир! Тәҡүәлеккә өҫтөнлөк бирһәң, ике йыһан бәхетенә ирешер инең!

Әгәр сауҙа каруандары менән юлға сыҡҡан бер сауҙагәр икәнһең, Сүриәнән Бусраға барыусы төркөмдөң иң олуғы булған заттың хәле тураһында фекерләп ҡара!

Әгәр ҡазый һәм хаким икәнһең, Мәккә аҡһөйәктәре бер-береһе менән һуғышырға йыйынған арала, Ҡара ташты Ҡәғбәләге урынына урынлаштырыу мәсьәләһендә Уның ғәҙел һәм зирәк ғәмәлдәре тураһында уйла!

Һәм, йәнә күҙеңде тарихҡа йүнәлтеп, ҡытлыҡ кисергән фәҡир менән мөлкәт эйәһе бай ҡаршында үҙен бер төрлө дәрәжәлә тотоп, Мәҙинәләге Мәсжиди Нәбәүиҙә ултырған килеш, кешеләр араһында иң ғәҙел рәүештә хөкөм сығарыусы ул Пәйғәмбәргә тағын бер ҡарап баҡ!

Әгәр бер ғаилә башлығы, ир икәнһең, хәҙрәти Хәҙисә менән хәҙрәти Ғәйшәнең ире булған ул мөбәрәк заттың пак тормош рәүешенә, тәрән хиссиәтенә һәм шәфҡәтлелегенә, бөтә ҡатындары араһында ғәҙел мөғәмәләһенә диҡҡәт ит!

Әгәр бала атаһы икәнһең, Фатиматүз-Зәһраның атаһы һәм хәҙрәти Хәсән менән хәҙрәти Хөсәйендең олатаһы булған был заттың уларға ҡарата мөнәсәбәтен өйрән!

Һинең сифатың, хәл-әхүәлең ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, иртәһен дә, кисен дә – һәр ваҡыт һәм һәр миҙгелдә хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде үҙең өсөн иң камил остаз һәм иң күркәм юламан итеп табырһың...

Ул шундай бер остаз ки, Уның сөннәттәре ярҙамында һәр хатаны төҙәтә алырһың... Яйы киткән эштәреңде юлына ҡайтарып, көйләп ебәрерһең… Уның нуры һәм юламанлығы бәрәбәренә тормош ҡыйынлыҡтарынан ҡотолоп, ысын бәхетте табырһың!..

Әгәр үҙеңде малға, әйбергә хиреслектән ҡотҡарып, рухи тормош менән йәшәргә теләһәң, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе тәрбиәләгән Билал, Йәсир һәм Сәүбәндәрҙе тап! Улар менән бергә бул һәм уларға тоғролоҡ һаҡла, шул ваҡытта һиҙгер, нәзәкәтле, йомшаҡ һәм игелекле йөрәк эйәһенә әйләнерһең. Онотма: яһилиәт кешеләре Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм аралашлығы менән һидәйәткә ирешеп, Уның тирәһендә төн күбәләгеләй тупланғандары өсөн тоғролоҡ ҡаҙандылар. Әсхәбе Кәһф Кетмере лә тоғро йәндәрҙең мөхәббәтенән үҙенә өлөш насип булғанға күрә, ни саҡлы ҙур ниғмәткә лайыҡ табыла. Бының киреһе булараҡ, хәҙрәти Луттың ҡатыны һәм хәҙрәти Нухтың улы Кәнан, боҙоҡ һәм залимдар менән аралашыуҙары нәтижәһендә, илаһи ҡәһәргә тарыйҙар. Улар һәм улар кеүектәр, нәфес соңғолдарында батып, залимдар йәмғиәте менән бергә һәләкәткә дусар була.

Ул осраҡта ғүмер календары сәхифәләрен Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең тоғро һәм изгелекле ғашиҡтары булған зекер әһелдәренә яҡынлыҡ менән тултырырға тырыш, ғафилдарҙан була күрмә!

Беләһең булыр: Уның тормош рәүеше – бик һирәк осрай торған, күҙ яуын алырлыҡ матур һәм мисктәй хуш еҫле гөл сәскәләр менән биҙәлгән бер гөлбаҡса ул. Уның ғәжәйеп рухи барлығының камиллығы кеүек, тән төҙөлөшөнөң матурлығы ла тиңһеҙ. Уның әлеге юғары дәрәжәһе менән бәйле рәүештә Аллаһ Тәғәлә былай ти:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تُقَدِّمُوا بَيْنَ يَدَىِ اللّٰهِ وَرَسُولِهِ

وَاتَّقُوا اللّٰهَ إِنَّ اللّٰهَ سَمِيعٌ عَلِيمٌ يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَرْفَعُوا أَصْوَاتَكُمْ

فَوْقَ صَوْتِ النَّبِيِّ وَلَا تَجْهَرُوا لَهُ بِالْقَوْلِ كَجَهْرِ بَعْضِكُمْ لِبَعْضٍ

أَنْ تَحْبَطَ أَعْمَالُكُمْ وَأَنْتُمْ لَا تَشْعُرُونَ

**«Эй иман эйәләре! Аллаһ һәм Уның Рәсүленә ҡаршы сыҡмағыҙ! Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Шөбһәһеҙ, Аллаһ – ишетеүсе, белеүсе. Эй иман эйәләре! Тауыштарығыҙҙы Пәйғәмбәр тауышынан арттырмағыҙ. Бер-берегеҙгә ҡысҡырған кеүек, Пәйғәмбәргә көслө тауыш менән ҡысҡырмағыҙ; юғиһә, һеҙ үҙегеҙ ҙә аңламаҫтан, ғәмәлдәрегеҙ бушҡа китеп барыр»** («әл-Худжурат», 1-2).

Был аяти кәримәләр бөтә мөьминдәрҙе хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡарата әҙәпле мөнәсәбәткә өндәй. Әйтәйек, Ҡөрьәни-Кәримдә бүтән Пәйғәмбәрҙәргә исемдәре менән мөрәжәғәт ителгән хәлдә, хәҙрәти Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә «Йә Мөхәммәт!» тип өндәшеүе бер ҙә осрамай, Уға «йә Нәби, йә Рәсүл» рәүешендә мөрәжәғәт яһала. Шул рәүешле Йәнәбел-Хаҡ бөтә мөьминдәргә лә бындай әҙәп ҡағиҙәһен үтәргә ҡуша:

لَا تَجْعَلُوا دُعَاءَ الرَّسُولِ بَيْنَكُمْ كَدُعَاءِ بَعْضِكُمْ بَعْضًا

«(Эй мөьминдәр!) **Пәйғәмбәрҙе үҙ арағыҙҙа бер-берегеҙҙе саҡырған кеүек саҡырмағыҙ!..»** («ән-Нур», 63).

Әлеге аяти кәримә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бары исеме менән генә иҫкә алыныуын өммәт әҙәбенә, өммәт тәрбиәһенә тура килмәгәнлеген белдереп, Уның исеме менән бергә изге һәм олуғ сифаттарының да әйтелергә тейешлеген бойора. Тимәк, Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Нәби, Рәсүл, Рәсүлүллаһ, Хәбибуллаһ, Ғаләм ғорурлығы, Рәсүл Әкрәм һәм шуларға оҡшаш исем-сифаттары менән иҫкә алынырға тейеш, шулай уҡ «Әхзәб» сүрәһенең 56-сы аяти кәримәһендәге илаһи фарманға ярашлы рәүештә, Уның хөрмәтле исеме телгә алынған һәр урында Уға сәләм-салауат әйтеү кәрәк. Был – Пәйғәмбәр саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡарата Йәнәбел-Хаҡ теләге һәм бойороғо менән бөтә өммәткә билдәләнгән әҙәп ҡағиҙәһе. Аяти кәримәлә:

إِنَّ اللهَ وَمَلَائِكَتَهُ يُصَلُّونَ عَلَى النَّبِيِّ يَا أَيُّهَا الَّذِينَ

آمَنُوا صَلُّوا عَلَيْهِ وَسَلِّمُوا تَسْلِيمًا

**«Дөрөҫлөктә, Аллаһ һәм фәрештәләре Пәйғәмбәргә күп итеп салауат әйтәләр. Эй мөьминдәр! Һеҙ ҙә Уға салауат әйтегеҙ һәм, тулыһынса буйһоноп, сәләм бирегеҙ!»** – тиелә («әл-Әхзәб», 56).

Ул Ҡөрьәнде һүҙгә-һүҙ өйрәтеүсе мөғәллим генә түгел, бер үк ваҡытта Ҡөрьән менән йәшәүсе тере үрнәк була. Жабир разыйаллаһу ғәнһүҙән риүәйәт ҡылынған бер хәҙис шәрифтә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Аллаһ Жәллә Жәләлүһү Мине күркәм әхлаҡты тамам камиллаштырыу өсөн ебәрҙе»,* – тип әйтә (*Муватта, «*Хүснүл-Хулуҡ», 8).

1400 йылдан артыҡ тарих дауамында ижад ителгән бөтә ислами әҫәрҙәр бер китапты, йәғни Ҡөрьәни-Кәримде, һәм бер кешене, йәғни хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде аңлатыу, яҡтыртыу маҡсатын күҙ уңында тота. Йәнәбел-Хаҡ бары Уның өсөн генә: لَعَمْرُكَ **«Һинең ғүмерең менән ант итәм…»** – тип («әл-Хижер», 72), Уның тормошо менән вәғәҙә биреүен белдерә.

Мөхәммәт, ислам хәҡиҡәтенә аҡылдан бигерәк мөхәббәт һәм ғашиҡлыҡ менән генә яҡыная, төшөнә алырға мөмкин. Бөтә серҙәр Мөхәммәттең хәҡиҡәте аша сиселә ала. Был иһә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең «үсвәи хәсәнә»һе – камил үрнәгенән үҙенә тейешлене ала белеү, нәфес донъяһы теләктәренән йырағайып, ғибәҙәт, буйһоноу һәм мәғрифәт серҙәренә ирешеү аша ғына мөмкин. Кеше ислам, Мөхәммәт рухиәтенән үҙ өлөшөн үҙләштерә башлағас, нәфислек, матурлыҡ өлгөһө һәм камил әҫәр рәүешен ала, илаһи күренештәрҙең серҙәре, нурҙары һәм хәҡиҡәттәре уға кереп урынлашыр.

Һис шикһеҙ, Ҡөрьән серҙәре Аллаһ Рәсүле рухиәтенә төрөнгән йөрәк серҙәренә күрә асылыр. Сөнки беҙҙең өсөн берҙән-бер «үсвәи хәсәнә» булған Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә эйәреү, буйһоноу мәсьәләһендә Аллаһ Тәғәлә аяти кәримәләрҙә былай тип белдерә:

وَمَا آتَاكُمُ الرَّسُولُ فَخُذُوهُ وَمَا نَهَاكُمْ عَنْهُ
فَانْتَهُوا وَاتَّقُوا اللّٰهَ إِنَّ اللّٰهَ شَدِيدُ الْعِقَابِ

**«…Рәсүл һеҙгә ни бирһә, шуны алығыҙ! Һеҙгә нәмәне тыйһа, шунан һаҡланығыҙ һәм Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Сөнки Аллаһтың ғазабы көслө»** («әл-Хәшр», 7).

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا أَطِيعُوا اللّٰهَ وَأَطِيعُوا الرَّسُولَ وَلَا تُبْطِلُوا أَعْمَالَكُمْ

**«Эй иман килтереүселәр! Аллаһҡа итәғәт ҡылығыҙ һәм Пәйғәмбәргә итәғәт ҡылығыҙ, ғәмәлдәрегеҙҙе елгә осормағыҙ!»** («Мөхәммәт», 33).

وَمَنْ يُطِعِ اللهَ وَالرَّسُولَ فَأُوْلَئِكَ مَعَ الَّذِينَ أَنْعَمَ اللهُ عَلَيْهِم مِّنَ النَّبِيِّينَ
وَالصِّدِّيقِينَ وَالشُّهَدَاءِ وَالصَّالِحِينَ وَحَسُنَ أُولَئِكَ رَفِيقًا

**«Кем Аллаһҡа һәм Рәсүлгә итәғәт ҡылһа, ана шулар Аллаһ ниғмәт биргән Пәйғәмбәрҙәр, сиддиктар, шәһиттәр һәм изгелекле заттар менән бергәлер. Улар ниндәй күркәм дуҫ**(тар)**»** («ән-Ниса», 69).

قُلْ إِنْ كُنْتُمْ تُحِبُّونَ اللهَ فَاتَّبِعُونِى يُحْبِبْكُمُ اللهُ وَيَغْفِرْ لَكُمْ ذُنُوبَكُمْ وَاللهُ غَفُورٌ
رَّحِيمٌ قُلْ أَطِيعُوا اللهَ وَالرَّسُولَ فَإِنْ تَوَلَّوْاْ فَإِنَّ اللهَ لَا يُحِبُّ الْكَافِرِينَ

**«**(Әй Рәсүлем!) **Әйт: «Әгәр Аллаһҡа мөхәббәт тотһағыҙ** (Уны һөйәһегеҙ икән)**, миңә эйәрегеҙ – Аллаһ та һеҙҙе һөйһөн һәм гонаһтарығыҙҙы ярлыҡарға бойорһон». Аллаһ – Ғафүр** (һәм) **Рәхим ул.** (Әй Рәсүлем!) **Әйт: «Аллаһҡа һәм Рәсүлгә итәғәт ҡылығыҙ! Әгәр йөҙ сөйөрһәгеҙ, ысынлыкта, Аллаһ кафырҙарҙы һөймәҫ!»** («Әлү Ғимран», 31-32).

وَمَنْ يُطِعِ اللهَ وَرَسُولَهُ وَيَخْشَ اللهَ وَيَتَّقْهِ فَأُوْلَئِكَ هُمُ الْفَائِزُونَ

**«Кем Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә итәғәт ҡылыр һәм, Аллаһтан ҡурҡып, Уның ғазабынан һаҡланһа, бына шулар – ҡотолоуға ирешеүселәрҙән»** («ән-Нур», 52).

وَالْمُؤْمِنُونَ وَالْمُؤْمِنَاتُ بَعْضُهُمْ أَوْلِيَاءُ بَعْضٍ يَأْمُرُونَ بِالْمَعْرُوفِ وَيَنْهَوْنَ
عَنِ الْمُنْكَرِ وَيُقِيمُونَ الصَّلَاةَ وَيُؤْتُونَ الزَّكَاةَ وَيُطِيعُونَ اللهَ
وَرَسُولَهُ أُوْلَئِكَ سَيَرْحَمُهُمُ اللهُ إِنَّ اللهَ عَزِيزٌ حَكِيمٌ

**«Мөьмин ир-аттар һәм мөьмин ҡатын-ҡыҙҙар – бер-береһенең дуҫы, яҡлаусыһы; улар игелеккә өндәйҙәр, яманлыктан тыялар, намаҙ уҡыйҙар, зәкәт бирәләр һәм Аллаһ менән Уның Рәсүленә итәғәт ҡылалар. Бына шуларға Аллаһ рәхмәтен һәм мәрхәмәтен бирәсәк. Шөбһәһеҙ, Аллаһ – Ғәзиз** (һәм) **Хаким ул»** («әт-Тәүбә», 71).

مَّنْ يُطِعِ الرَّسُولَ فَقَدْ أَطَاعَ اللهَ وَمَنْ تَوَلَّى فَمَا أَرْسَلْنَاكَ عَلَيْهِمْ حَفِيظًا

**«Кем Рәсүлгә итәғәт ҡылһа, Аллаһҡа итәғәт ҡылған булыр. Ә кемдәрҙер баш тарта икән,** (эй Рәсүлем, бел), **беҙ Һине улар өҫтөнән көтөүсе итеп ебәрмәнек!»** («ән-Ниса», 80).

أَلَمْ يَعْلَمُوا أَنَّهُ مَنْ يُحَادِدِ اللّٰهَ وَرَسُولَهُ فَأَنَّ لَهُ نَارَ
جَهَنَّمَ خَالِدًا فِيهَا ذَلِكَ الْخِزْيُ الْعَظِيمُ

**«Белмәнеләрме әллә: кем Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә ҡаршы дошманлыҡҡа ҡуҙғалһа, шуның өсөн эсендә мәңге ҡаласаҡ йәһәннәм уты бар. Бына ошо ул – ҙур хурлыҡ»** («әт-Тәүбә», 63).

وَأَطِيعُوا اللّٰهَ وَرَسُولَهُ وَلَا تَنَازَعُوا فَتَفْشَلُوا وَتَذْهَبَ
رِيحُكُمْ وَاصْبِرُوا إِنَّ اللّٰهَ مَعَ الصَّابِرِينَ

**«Аллаһҡа һәм Рәсүлгә итәғәт ҡылығыҙ! Бер-берегеҙ менән ыҙғышмағыҙ! Юғиһә, ҡурҡыуға** (нигеҙһеҙ уй-борсоуҙарға) **бирелерһегеҙ ҙә** (көс-ҡеүәтте, дәүләтегеҙҙе һәм үҙегеҙ эйә булған ниғмәттәр ҡулдан) **ысҡындырырһығыҙ. Сабыр итегеҙ, сөнки Аллаһ сабыр итеүселәр менән бергә»** («әл-Әнфәл», 46).

Ысында, йәнен нәфескә ҡараған бөтә күренеш-бәйләнештәрҙән арындырған, Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм мөхәббәте алдында илаһи тетрәнеү һәм тиңһеҙ матурлыҡ тойғоларын кисергән ваҡытта ғына, мөьмин Уның һөйөүенән һәм үрнәк шәхесенән үҙ өлөшөн алыу юлына баҫҡан булыр.

❁

Уның мөбәрәк шәхесенән үрнәк өлөштө алып, өммәттең Унда ереп берләшкән ҡыйыу ир-аттары Аллаһ Рәсүленең ҡиәмәткәсә мөхәббәтенә ниндәй күркәм үрнәктәр күрһәтә. Улар Аллаһ Рәсүле хәҡиҡәтендә – ислам хәҡиҡәтендә үҙҙәренә йәшәйеш таба. Алтмыш өс йәшендә үҙенә ҡәбер кеүек бер урын ҡаҙытып, тормошон һәм ғибәҙәттәрен шунда уҙҙырған, шунда үтәгән: «Был йәштән һуң миңә ер өҫтөндә йөрөү харам», – тигән олуғ һөйөү һәм илаһи дәрт ҡаһарманы Сәйиид Әхмәт Йәсәүи – шундай ереп берләшеү юлында исемен мәңгеләштергән заттарҙың береһе. Үҙе ғүмер кисергән ергә мөнәсәбәтле рәүештә уны «Хәҙрәти Төркөстан» тип йөрөтәләр.

Вәйсәл Ҡаранигә Өхөдтә Рәсүлүллаһтың бер теше һыныу тураһында хәбәр килгәс, ҡайһы теше һынғанын белмәгәнгә күрә, уның үҙ тештәренең бөтәһе лә сит булып тойола. Ул тештәренең барыһын да алдыртып, Уның

менән берҙәй булыу һәм Унда иреп берләшеү серен боҙасаҡ әлеге билдәһеҙ теш йөгөнән ҡотолоп, күңелен тынысландыра (Фәридүддин Аттар, 23 б.).

Имам Малик разыйаллаһу ғәнһү ҙә Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән тиңләшеү, Уның кеүек булыу дәрте менән янып йәшәй. Шуға күрә Мәҙинәи Мөнәүүәрәлә ат-дөйә өҫтөнә атланмай. Мәҙинәнең харам ерҙәрендә хәжәтен үтәмәй. Раузала имамлыҡ ҡылғанда, һәр ваҡыт тауышын баҫып һөйләшә. Шул дәүер хәлифәһе Әбү Жәғфәр Мансур көслө тауыш менән һөйләшһә: «Йә хәлифә! Был урында тауышыңды күтәрмә! Аллаһтың киҫәтеүе һинән күпкә фазиләтлерәк кешеләр өсөн инде!», – тип белдерә һәм түбәндәге аяти кәримәне уҡый:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا لَا تَرْفَعُوا أَصْوَاتَكُمْ فَوْقَ صَوْتِ النَّبِيِّ وَلَا تَجْهَرُوا لَهُ بِالْقَوْلِ كَجَهْرِ بَعْضِكُمْ لِبَعْضٍ أَنْ تَحْبَطَ أَعْمَالُكُمْ وَأَنْتُمْ لَا تَشْعُرُونَ

**«Эй иман килтереүселәр! Тауыштарығыҙҙы Пәйғәмбәр тауышынан арттырмағыҙ. Бер-берегеҙ менән һөйләшкән кеүек, тауышығыҙҙы Пәйғәмбәрҙекенән дә күтәреп ебәрмәгеҙ; юғиһә, һеҙ үҙегеҙ ҙә аңламаҫтан, ғәмәлдәрегеҙ бушҡа китеп барыр»** («әл-Худжурат», 2).

Имам Малик хәҙрәттәре үҙенә золом ҡылған Мәҙинә губернаторын: «Мәхшәр көнө Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ейәне булған бер затҡа ҡарата дәғүәсе булыуҙан ҡыйынһынам!..» – тип ғәфү итә.

❁

Бәзми Ғаләм Валидә солтан:

*«Мөхәббәттән Мөхәммәт булды хасил,*
*Мөхәммәтһеҙ мөхәббәттән ни булыр хасил?!»* –

тип, йән ризығының бары Рәсүлүллаһ мөхәббәте генә икәнлеген ни ҡәҙәр матур һүрәтләгән.

Ғашиҡ Юныс та хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә ҡарата мөхәббәт менән яныуын былай телгә ала:

*«Эҙләй-эҙләй тапһам эҙеңде,*
*Эҙеңдең туҙанына йөҙөмдө тиҙерһәм,*
*Хаҡ Тәғәлә насип ҡылып, күрһәм йөҙөңдө,*
*Йә Мөхәммәт, йәнем юҡһына, теләй Һине...»*

Шағир Йософ Нәби 1678 йылда дәүләт түрәләре менән бергә хаж сәфәренә ҡуҙғала. Төркөм Мәҙинәгә яҡынайғас, тулҡынланыуҙан Нәбиҙең йоҡоһо ҡаса. Хажиҙар төркөмөндәге бер генералдың, иғтибарһыҙлыҡ менән онотолоп

китеп, аяғын Мәҙинәи Мөнәүүәрәгә таба һуҙғанын күрә. Был ғәмәлдән бик тәьҫирләнгән Нәби бер нәғти яҙа башлай.

Иртәнге намаҙ ваҡытындараҡ төркөм Мәҙинәи Мөнәүүәрәгә яҡынлашҡанда, Нәби үҙе яҙған, түбәндәге мәғәнәләге нәғтиҙең Мәсжиди Нәби манараһынан уҡылыуын ишетә.

*«Йәнәбел-Хаҡ күҙәтеп торған һәм Уның һөйөклө Пәйғәмбәре хәҙрәти Мөхәммәт Мостафа саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең урыны һәм ҡалаһы булған был ерҙә әҙәп ҡағиҙәләрен үтәмәүҙән тыйылығыҙ!..*

*Эй Нәби, Ошбу дәргәһкә әҙәп ҡағиҙәләрен үтәгән килеш кенә кер. Был урын – фәрештәләр тирә-яғын ут янындағы төн күбәләктәреләй ҡамап алған һәм бөтә Пәйғәмбәрҙәр буҫағаһын түбәнселек менән үпкән мөбәрәк бер урын».*

Бындай хәлдән бик тулҡынланған Нәби шунда уҡ мөәзинде эҙләп табып: «Был нәғтиҙе кемдән һәм нисек өйрәндегеҙ?..» – тип һорай.

Мөәзин һөйләп бирә: «Был төндә Аллаһ Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм төшөбөҙҙә беҙгә:

*«Өммәтемдән Нәби исемле бер шағир Мине зыярат ҡылырға килә. Был зат Миңә иң юғары дәрәжәлә һөйөү-мөхәббәт менән тулы. Был ғашиклығы сәбәпле уны Мәҙинә манараларынан үҙ нәғтиен әйтеп ҡаршылағыҙ!..»* – тип бойорҙо, беҙ иһә Нәбиҙең әлеге әмерен үтәнек».

Нәби үкереп илай башлай. Йәш аралаш ул былай тип таҡмаҡлай: «Тимәк, миңә Аллаһтың Рәсүле саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм «өммәтем», тине! Тимәк, Ике йыһан ҡояшы Әфәндебеҙ мине үҙ өммәтенә ҡабул итте!..»

❁

Мәүлит тураһында ҡасидә яҙған шағир Сөләймән Чәләби: *«Тирәһендә ҡояш бөтөрөлөп йөрөгән бер ғәжәп нур кем ул...»* – юлы менән ҡояштың Аллаһ Рәсүле тирәһендә яҡтыға килгән төн күбәләгеләй бөтөрөлөп йөрөүен, йәғни хатта йәнһеҙ нәмәләр ҙә Уға ғашиҡ икәнлеген ни ҡәҙәр матур тасуирлап бирә.

Мухибби ләҡабы менән яҙған Кануни Сөләймән солтан Йәшәйеш нурына былай тип ялбара:

*«Бөгөн Ғаләм нуры Һин һәм дә Хоҙай дуҫы,*
*Ғашиктарҙы бер миҙгелгә лә ишек төбөңдән айырма…»*

Хәҙрәти Ғәли раҙыйаллаһу ғәнһү һөйләгәндәрҙән:

«Мин Мәккәлә Аллаһтың Рәсүле менән йөрөй инем. Бер көндө бергәләп Мәккәнән ҡала ситенә сыҡтыҡ. Беҙ ҡаршыһынан уҙып киткән һәр таш һәм

ағас Уға: «Салауат һәм сәләм Һиңә булһын, йә Аллаһтың Рәсүле!..» – тип сәләм бирә башланы» (Тирмизи, «Мәнаҡиб», 6/3626).

Йәнһеҙ нәмәләрҙең бындай һөйөү-мөхәббәтен раҫлаған тағын бер күренеш былай һүрәтләнә:

Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер сәфәр ваҡытында осратҡан бәҙәүизе тәүхид дингә өндәй. Бәҙәүи, Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бындай саҡырыуынан һуң, Унан пәйғәмбәрлеген раҫлай торған бер дәлил һорай. Хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм иһә алдағы бер ағасҡа ымлап, уға үҙ янына килергә ҡуша. Ағас, Пәйғәмбәр әмеренә буйһоноп, тупраҡты яра-яра, Уның янына килә һәм Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм ҡаршында шәһәҙәт кәлимәһен өс тапҡыр ҡабатлай. Артабан йәнә Пәйғәмбәр әмере менән кире урынына ҡайта. Әлеге мөғжизәне хайран ҡалып күҙәткән бәҙәүи, ҡәүеменә ҡайтырға боролғас: «Әгәр ҡәүемем миңә эйәрһә, уларҙы Һиңә алып килермен, юҡ икән, мин үҙем ҡабат килеп, Һинең менән бергә булырмын», – тип әйтә (Хәйсәми, VIII, 292).

❁

Йәнһеҙ әйберҙәр генә түгел, хайуандар һәм башҡа мәхлүктәр ҙә Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмде таный һәм итәғәт ҡыла. Бындай үҙенсәлекте Жабир ибн Ғабдуллаһ раҙыйаллаһу ғәнһү түбәндәге риүәйәтендә бәйән итә:

«Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм менән бергә бер сәфәрҙән ҡайтып бара инек. Мәҙинәлә Нәжжар улдарының баҡсаларына еткәс, уларҙың береһендә һис кемде эскә кертмәгән, кергән һәр кемгә йәбешә торған бер дөйә булғанын белдек. Хәлде хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә һөйләп биргәс, Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе шул баҡсаға юл тота, эске яҡҡа керә һәм берәүҙе лә яҡын килтермәгән ул дөйәне үҙ янына саҡыра. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм тауышын ишеткән дөйә, иренен ергә тигеҙерлек итеп башын эйгән килеш, Уның янына килә һәм ҡаршында ергә сүгә. Аллаһ Рәсүле салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

*«Миңә йүгән килтерегеҙ!»* – тип бойора.

Алып килгән йүгәнде дөйә муйынына һалып, уны хужаһына тапшыра. Шунан унда шаһит булыусыларға асыҡлап уҙа:

*«Кире, баш бирмәҫ ендәр һәм кешеләрҙән ҡала, ер һәм күктә булған бөтә мәхлүктәр Минең Аллаһ Рәсүле икәнлегемде белә»»* (Әхмәт, III, 310).

Уйлап ҡарайыҡ әле, йәнһеҙ нәмәләр һәм хайуандарҙағы был бөйөк мөхәббәт халәте менән сағыштырғанда, беҙ Аллаһ Рәсүленә ни ҡәҙәр буйһоноусанлыҡ күрһәтәбеҙ, Уның юлында күпме фиҙакәрлек ҡыла алабыҙ?! Ҡыҫҡаһы, бөгөнгө көнөбөҙҙә Уның рухиәтенә беҙ ни ҡәҙәр мохтаж... Шағир:

«Тор, йә Ғаләмдәрҙең Әфәндеһе, ҡиәмәт ҡубып ята!..» – тип тасуирлаған ығы-зығылы, болғауыр заманда йәшәйбеҙ бит юғиһә!..[370]

Салауаттарыбыҙ, йәғни Уның менән сәләм бирешеүебеҙ һәм Уға ҡарата мөхәббәтебеҙ беҙҙең өсөн ниндәй ҙур йыуаныс сығанағы булып тора... Рәсүлүллаһ хәҡиҡәтенә яҡынайыу өсөн, Уның рухиәте тирәһендә тупланған нәфис, йомшаҡ йәнле, һиҙгер күңелле мөьминдәр, Уның юлында үлемгә килеүҙе донъяның иң ҙур ниғмәте һанап, илаһи ләззәттәргә лайыҡ була.

❁

Беҙ бында сикле мөмкинлеккә эйә һүҙҙәр ярҙамында тасуирлап бирергә тырышҡан шундай үҙенсәлектәр, юғары сифаттар – Йәшәйеш нурын танып белеүебеҙҙең бер тамсыһы, бер бөртөгө генә. Хаҡты танып белеүҙең сере Аллаһ китабына һәм Йәшәйеш нурының сөннәти-сәнийәһенә, йәғни юғары әхлаҡ һәм эш-ғәмәлдәренә ихлас күңел менән яҡыная алыуҙан, Аллаһ һәм Уның Рәсүле һөйгәндәргә – мөхәббәт, улар яратмаған, ҡаршы булған нәмәләргә нәфрәт тойоуҙан ғибәрәт. Әлеге ике хис араһындағы айырма ожмахтың иң юғары дәрәжәһе менән иң түбән баҫҡыс – тамуҡ араһындағы кеүек сикһеҙ. Аллаһ Рәсүленә мөхәббәт һәм Ул яратмаған нәмәләргә ҡарата нәфрәт – Уның рухиәтен ҡулланыу мөмкинлегенә төп этәргес, төп сәбәп.

Тарих дауамында хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең «үсвәи хәсәнә»һенән үҙенә өлөш, үрнәк алған мөбәрәк мөьминдәр иманға бәйле үҫештәрен иң камил юғарылыҡҡа ирештерәләр, тәбиғәттән бирелгән изге һәләттәрен камиллаштырып, кешелек өсөн олуғ маяҡтарға әйләнәләр.

Ғажиз авторҙың Мөхәммәт хәҡиҡәте мәсьәләһендә таныу-төшөнөүенә һәм ул ҡуллана алған һүҙҙәрҙең сикләнгән ҡыҫалары эсенә һыя алған нәмәләр бына шулар!..

Әлбиттә, беҙ таныйбыҙ булыр: һүҙ ярҙамында әлеге кескәй генә хеҙмәттең билдәле үә билдәһеҙ уҡыусыларына тәҡдим ителгән һәм уның ике тышлығы араһында урын алған мәғлүмәттәр – сикһеҙ бер океандың бер нисә тамсыһы кеүек кенә. Һәм был һүҙ-ғибәрәләр төпһөҙ тынлыҡ, һүҙһеҙлектең зиннәтле, матур ишеге төбөндә бына тамамланды ла...

**Йә Раббы! Сикле мөмкинлеккә эйә һүҙҙәр менән аңлатырға беҙ йөрьәт иткән был бәйәнде беҙҙең өсөн бер рәхмәт һәм бәрәкәт сәбәбе ҡылып, Мөхәммәт хәҡикәтенән өлөш алыуҙы рәхмәтең менән насип ит! Беҙҙе мөхәббәт гәүһәре һәм сығанағы булған Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бөйөк шәфәғәтенә ирештер!**

**Әмин!..**

370. Әлеге хәҡиҡәтте тикшергән, аңлатҡан көнбайыш философы Бернард Шоу: «Проблемалар өҫтө-өҫтөнә өйөлгән хәҙерге заманда, бөтә проблемаларҙы ғәйәт еңел һәм уңайлы рәүештә сисә торған хәҙрәти Мөхәммәткә мохтажбыҙ», – тип әйтә.

# ҺҮҘ АХЫРЫ

Ислам бар йыһанды солғай торған донъяға ҡараш рәүеше булғанға, унда хоҡуҡ, әхлаҡ, иҡтисад кеүек бәндәсел мөнәсәбәттәрҙе билдәләгән, тәртипкә һалған бөтә ғилем ҡағиҙәләренең урын алыуы тәбиғи. Әлеге ҡағиҙәләр иң ябайынан башлап иң камилына, иң аныҡтан алып иң абстрактына, иң ғөмүмиенә хәтле һәр мәсьәләне үҙ эсенә алырға тейеш. Бындай ислами принциптарҙың бер өлөшө һәр кемгә ҡағылған ябай һәм донъяуи мәсьәләләр булып тора, шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер принциптар – хатта оло дәрәжәләге аңдарҙы ла меҫкен, ғажиз ҡалдырырлыҡ ҙур тәрәнлектәрҙе, киңлектәрҙе солғаған хәҡиҡәттәр. Ана ошо мәсьәләләрҙе (айырыуса билдәһеҙ уҡыусыларға мөрәжәғәт итеүҙе күҙ алдында тотҡан китап рәүешендә) күтәреп, уларҙы тикшереүҙәге ауырлыҡтар тураһында әйтеп тороуҙың кәрәге юҡ.

Был эш, бер ҡарағанда, тау бите буйлап өҫкә үрмәләү һәм менгән һайын һыуһау хисе тойорға әҙер булыу тигән һүҙ. Ысынбарлыҡта, әлеге ҡатмарлы һәм дөйөмләштерелгән хәҡиҡәттәрҙе аҡыл, фән һәм телдең мөмкинлектәре ярҙамында әйтеп-аңлатып бирергә маташыу бик күп кеше баш тарта алмаясаҡ бер дәрәжә булһа ла, был осраҡта, һүҙҙең тулы мәғәнәһендә, асыл уңышҡа ирешеү мөмкин түгел.

Икенсе яҡтан иһә был мәсьәләләр бәндә мөмкинлектәре сигенән сығып китһә лә, тулыһынса яулап булмай торған нәмәнән бөтөнләй баш тартыу, йәғни ҡулыбыҙға төшөргәндән ваз кисеүҙең дә ярамаҫлығы ислами бер ҡағиҙә тәшкил итә. Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, беҙҙе лә шул ҡағиҙәгә буйһонған тип бәйәләп, аңлатыу-төшөндөрөүҙәге, танытыуҙағы кәмселектәребеҙҙе ғәфү итерҙәр, тип өмөтләнәбеҙ.

Тағы шуны ла билдәләп үтәйек: бәндәсел аң һәм хөкөм беҙ был ғаләмдән алған тәьҫирҙәр аша формалаша. Шуға күрә тулы мәғәнәлә күреп булмаған абстракт хәҡиҡәттәр өсөн яңылышлыҡ ебәрмәү йәки уларҙы етешһеҙлекһеҙ аңлата алыу мөмкин булмаған кеүек, яратылыштың үрнәге Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҡиҡәте һәм илаһи исемдәрҙең мөкәммәл күренеше-сағылышы – Ҡөрьән йәүһәренең бәндә көсө, ихтыяры менән камил ҡабул ителеүе һәм аңлатып бирелеүе лә мөмкин түгел. Мәҫәлән, йәннәт, йәһәннәм һәм шуға тиң тасуирламалары – асылы бары Хаҡ Тәғәлә ғилемендә генә булған хәл, сифаттың беҙҙең аң-аҡылыбыҙға күрә һүрәтләү тигән һүҙ. Диндең бөтә метафизик хәҡиҡәттәр мәсьәләһендә аҡыл һәм сәләмәт күңел менән бирелгән баһаламалар дөрөҫ, ләкин кәмселеклелер. Дөрөҫ, сөнки был ғаләмдән алынған хис-тойғоларға күрә аңлатыу һәм ҡабул итеү бары

шул ҡәҙәр генә. Кәмселекле, сөнки был донъяла күргән, тойған оҡшаш эш-хәлдәр, сифаттарҙы сағыштырыу өсөн нигеҙ итеп ҡулланып, беҙ таный, аңлай беләбеҙ, тип уйлаған күренештәр араһындағы айырма күп мәртәбә хисапһыҙ. Бындай хәҡиҡәттәрҙе ирештереү өсөн, башҡа төрлө аң-аҡылға, башҡаса ҡабул итеүгә һәм, мөмкинлек бар икән, ярҙамсы сараларға ихтыяж ҙур. Мәҫәлән, Аллаһты әхирәт донъяһында күреү, күҙәтеү тигәнде белдергән «руйәтуллаһ» төшөнсәһе... Әхирәт мөьминдәр өсөн ысынға ашасаҡ был күренештең «руйәт» (күҙәтеү, ҡарау, тикшереү) һүҙе менән генә белдереү кәмселекле, сикле түгелме? Ни хәл итәһең, кәмселекле, ләкин аңлатҡанда әлеге кәлимәне ҡулланыу бер заруриәт булып тора.

Шуға күрә кешеләрҙең, хәҡиҡәт бер океан шикелле киң, тип, уға сумдырған һауыт күләменән күберәк шыйыҡлыҡ алыуы мөмкин түгел! Бер стаканға бер даръяны һыйҙырып булмаған кеүек... Тел дә бер һауыт, баш мейе лә бер һауыт, күреү мәсьәләһендә күҙ ҙә һауыт ҡына... Һәр яҡта ғажизлыҡ!

Әйтәйек, Йәнәбел-Хаҡ аяти кәримәлә үҙенең бәндә аңы менән төшөнөү мөмкин булмаған бөйөклөгөн былай тип тасуирлай:

قُل لَّوْ كَانَ الْبَحْرُ مِدَادًا لِّكَلِمَاتِ رَبِّى
لَنَفِدَ الْبَحْرُ قَبْلَ أَنْ تَنْفَدَ كَلِمَاتُ رَبِّى وَلَوْ جِئْنَا بِمِثْلِهِ مَدَدًا

**«Әйт: «Раббымдың һүҙҙәре өсөн даръя яҙыу ҡараһы булһа һәм шул ҡәҙәр өҫтәһәк тә, Раббымдың һүҙҙәре бөткәнсе, диңгеҙ төкәнәсәк»** («әл-Кәһф», 109).

Уйлап ҡарау зарур: һис сикһеҙ илаһи идара һәм бөйөклөк ҡаршында бәндә һауытының күләме ни хәтле һуң? Башҡа тарафтан фекер йөрөтһәк, аңлау, ҡабул итеү һәм аңлатыуҙарҙың зәғифлеге арҡаһында хәҡиҡәткә сикләнеү ҡурҡынысы янамай бит!..

Тағы бер яҡтан ҡарағанда, һәр һүҙ белдергән мәғәнә уны һөйләүсенең аң, ҡабул итеү дәрәжәһенә бәйле рәүештә билдәле бер йөкмәткене тапшыра. Шул уҡ ваҡытта ҡай бер төшөнсәләрҙең мәғәнәһе сикһеҙ тәрән. Мәҫәлән, Аллаһ, тәбиғәт, йән кеүек һүҙҙәрҙең… Уларҙы һөйләмдә һәм текста ҡулланыусылар үҙ аңдары мөмкинлек биргән тәрәнлеккә ҡәҙәр төшә ала. Был осраҡта уҡыусыларҙың ҡабул итеү дәрәжәһен үҙендеке менән сағыштырып фекер йөрөтөү зарури. Мәғәнәһе шундай хатта күҙаллап та булмаған тәрәнлеккә эйә төшөнсәләрҙең бер өлөшөн иһә хәҙрәти Пәйғәмбәр салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк исемдәре тәшкил итә. Ул исемдәрҙең эстәлеген тапшырыуҙа ғажизлығымдың һәм беҙ еткергәнде ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ тарафынан ҡабул ителеүендә етешһеҙлектәрҙең ғәфү ҡылыныуын һорап, Раббыбыҙға ялбарабыҙ һәм Уның рәхмәтенә өмөт итәбеҙ.

Был хәлдә хәҡиҡәтте солғау мәсьәләһендә иң киң мөмкинлеккә эйә тынлыҡҡа, һүҙһеҙлеккә кире ҡайтып, һүҙебеҙгә ошо урында нөктә ҡуйырға мәжбүрбеҙ...

Ғаләмдәр ғорурлығы салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм рухиәтенә төрөнөү, Уның рухиәте менән һуғарылыуҙан башҡа сарабыҙ юҡ! Бөтә ғажиздарҙың, меҫкендәрҙең берҙән-бер сараһы – Аллаһ Тәғәлә.

Ғажизлыҡ даръяһында «ярҙам ит, йә Раббы!..»

Һиңә һыйынам, йә Рәсүлуллаһ!..

# БИБЛИОГРАФИЯ


Абдуррәззак бин Хәммам, Мусаннәф, I-XI, Бәйрут, 1970.

Аҗлуни, Исмаил бин Мухаммәд, Кәшфүл-Хафа, I-II, Бәйрут, басылу елы юк.

Ахмәд бин Ханбәл, әл-Мүснәд, I-VI, Истанбул, 1992; Китабүз-Зүһд, басылу елы юк.

Али әл-Мүттаки, Кәнзүл-Уммал, I-XVI, Бәйрут, 1985.

Алуси, Әбүс-Сәна Шәһабеддин Махмуд бин Абдуллаһ, Рухул-Мәани фи Тәфсирил-Куръанил-Азим вәс-Сәбьил-Мәсани, I-XXX, Бәйрут, Дару Ихьйаит-Түрасил-Араби, басылу елы юк.

Асим Әфәнди, Камус, I-IV, Истанбул, 1305.

Айни, Әбу Мухаммәд Бәдреддин Махмуд бин Ахмәд, Умдәтүл-Кари Шәрху Сахихил-Бухари, I-XXV, Бәйрут, Идарәтүт-Тыбаатил-Мүнириййә басылу елы юк.

Бәлазури, Әбул-Аббас Ахмәд бин Йахйа, Әнсабул-Әшраф, Мисыр, 1959.

Бәйхаки, Әбу Бәкир Ахмәд бин әл-Хүсәйн, әс-Сүнәнүл-Күбра, I-X, Дарул-Фикр, басылу елы юк; Шуабул-Иман, I-IX, Бәйрут, 1990; Дәлаилүн-Нүбүввә вә Маэрифәти Ахвали Сахибиш-Шәрьиййә I-VII, шәрехләмә: Абдүлмүти Калъаҗи, Бәйрут, 1985; Китабүз-Зүһдил-Кәбир, Бәйрут, 1996.

Бухари, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Исмаил, әл-Җамиъус-Сахих, I-VIII, Истанбул, 1992; Әдәбүл-Мүфрәд, Бәйрут, 1989; әт-Тарихул-Кәбир, I-IX, Хәйдәрабад, 1958; әт-Тарихус-Сагыр, I-II, Каһирә, 1977.

Бути, Саид Рамазан, Мин Рәваиил-Куръан, Бәйрут, 1996.

Җәһандә, А.-Чәтин, Н. (тәмамлау), Мәгариф министрлыгының Ислам энциклопедиясе, «рәҗәз» маддәсе, Истанбул, 1964.

Дарәкутни, Әбул-Хасән Али бин Өмәр, Сүнән, I-IV, Бәйрут, 1986.

Дарими, Әбу Мухаммәд Абдуллаһ бин Абдиррахман, Сүнәнүд-Дарими, I-II, Истанбул, 1992.

Дәйләми, Әбу Шүҗаэ Шируйә бин Шәһридар, әл-Фирдәвс би-Мәэсурил-Хитаб, I-VI, Бәйрут, 1986.

Дийарбәкри, Хүсәйин бин Мухаммәд, Тарихул-Хамис, I-II, Бәйрут, басылу елы юк.

Әбу Давуд, Сүләйман бин Әшъас әс-Сиҗистани, Сүнәни Әби Давуд, I-V, Истанбул, 1992.

Әбул-Хасан Алаэддин әл-Әмири Али Ибни Бәлбан, Әл-Ихсан би Тәртиби Сахихи Ибн Хиббан, I-X, әзерләде: Кәмал Йусуф әл-Хут, Бәйрут, 1987.

Әбу Нуайм, Ахмәд бин Абдиллаһ, Хилйәтүл-Әвлийа, I-X, Бәйрут, 1967; Дәлаилүн-Нүбүввә, Хәйдәрабад, 1369.

Әлмалылы М. Хамди Йазыр, Хак Дини Куръан Дили, I-X, Истанбул, 1971.

Фәридуддин Аттар, Тәзкирәтүл-Әвлийа, Тәһран, 1372.

Газали, Әбу Хамид Мухаммәд бин Мухаммәд, Ихйау Улумид-Дин, I-VI, Бәйрут, 1990.

Хаким, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Абдиллаһ ән-Нәйсабури, әл-Мүстәдрәк аләс-Сахихайн, I-V, Бәйрут, 1990.

Халәби, Әбул-Фәрәҗ Али бин Ибраһим, Инсанул-Уйун, I-III, Мисыр, 1964.

Халиди Багдади, Мәктубаты Мәвлана Халид, Истанбул, 1993; Рисаләтүр-Рабыта, (Мәвлана Сафиййүдин, Али бин Хүсәйин, Рәшахат, Истанбул, Саринииздә Ташдестигяһы 1291/1874 хамишиндә); Диван, (Садреддин Юксәл тәрҗемәсе), Истанбул, 1977.

Хамидуллаһ, Мухаммәд, Хазрәти Пәйгамбәрин Савашлары, Салих Туг тәрҗемәсе, Истанбул, 1991; әл-Вәсайикус-Сийасиййә Бәйрут, 1985; Ислам Пәйгамбәри, I-II, Истанбул, 1995.

Хәйсәми, Хафыз Нуреддин Али бин Әби Бәкир, Мәҗмауз-Зәваид вә Мәнбаул-Фәваид, I-X, Бәйрут, 1988.

Х. Ибраһим Шәнәр, Касыйдә-и Бүрдә Касыйдә-и Бүръә вә Су Касыйдәси, Измир, 1995.

Ибни Абдилбәр, Әбу Өмәр Йусуф бин Абдуллаһ бин Мухаммәд, әл-Истиаб фи Марифәтил-Асхаб, I-IV, Каһирә, басылу елы юк; әд-Дүрәр фи Ихтийарил-Мәгази вәс-Сийәр, Шәвки Дайф ред., Каһирә, 1966.

Ибни Асакир, Әбу Касым Али бин Хасан, Тариху Димәшк, басылу елы юк.

Ибни Әби Шәйбә, Әбу Бәкир Абдуллаһ бин Мухаммәд, әл-Мусаннәф, I-VII, Хәйдәрабад, 1976.

Ибни Әсир, Әбул-Хасән Али бин Мухаммәд, әл-Камил фит-Тарих, I-XIII, Бәйрут, 1979-1982; Үсдүл-габә, I-VII, Каһирә, 1970.

Ибни Хабиб, Китабүл-Мухаббер, Элиза Лихтен-Стадтер ред., Хәйдәрабад, 1942.

Ибни Хаҗәр әл-Аскалани, Шиһабүддин Ахмәд бин Али, әл-Фәтхул-Бари Шәрхи Сахихил- Бухари, I-XXVIII,. Дарул-Фикр, Фуат Абдүлхаки нәшри, басылу елы юк; әл-Исабә фи Тәмйизис-Сахабә, I-IV, Бәйрут, 1328; әл-Мәталибүл-Алийә I-IV, Кувәйт, 1973.

Ибни Хиббан, Әбу Хатим әл-Бусти, Сахиху Ибни Хиббан, I-XVIII, Бәйрут, 1993.

Ибни Һишам, Әбу Мухаммәд Абдүлмәлик бин Һишам, әс-Сирәтүн-Нәбәвиййә I-IV, Бәйрут, 1937.

Ибни Хузәймә, Әбу Бәкир Мухаммәд бин Исхак, Сахихли Ибни Хузәймә, I-IV, Бәйрут, 1970.

Ибни Исхак, Мухаммәд бин Исхак бин Йәсар, Сирәтү Ибни Исхак (Китабүл-Мүбтәдәи вәл-Мәбъаси вәл Мәгази), Конья, 1981.

Ибни Каййым әл-Җәвзиййә Мухаммәд Әби Бәкир, Задүл-Мәад, I-VI, Бәйрут, 1995.

Ибни Кәсир, Имадүддин Әбул-Фида, Тәфсиру Куръанил-Азим, I-V, Бәйрут, 1988; әл-Бидайә вән-Ниһайә I-XV, Каһирә, 1993; әс-Сирәтүн-Нәбәвиййә I-IV, Каһирә, 1966.

Ибни Маҗә, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Йәзид әл-Казвини, Сүнәнү Ибни Маҗә, I-II, Истанбул, 1992.

Ибни Сәййдиннас, Уйунул-Әсәр фи Фүнунил-Мәгази вәс-Сийәр, I-II, Бәйрут, 1992.

Ибраһим Җанан, Хадис Ансиклопедиси, I-XVIII, Истанбул, басылу елы юк.

Илхан Армутчуоглу, Касыйдә-и Бүрдә, Конья, 1983.

Имам Малик бин Әнәс, Муватта, I-II, Истанбул, 1992.

Кади Ийаз бин Муса, әш-Шифа би-Таърифи Хукукил-Мустафа, I-II, Истанбул, басылу елы юк.

Камил Мирас, Сахихи Бухари Мухтасары Тәҗриди Сарих Тәрҗүмәси вә Шәрхи, I-XIII, Анкара, 1972.

Кашани, Әбү Бәкр Алауддин бин Мәсъуд, Бәдиаус-Санаи фи Тәртибиш-Шәраи, I-VII, Бәйрут, 1982.

Касталлани, Әбул-Аббас Ахмәд бин Мухаммәд, әл-Мәваһибул-Ләдүннийййә I-II, Мисыр, 1281; әл-Мәваһибул-Ләдүннийййә Тәрҗемәси, I-II, Шаир Абдүлбаки тәрҗемәсе, Тургут Улусой, Истанбул, 1984.

Кәттани, Мухаммәд Абдүл-Хайй, Низамүл-Хукумәтин-Нәбәввийййә (әт-Тәратибүл-Идарийййә), I-II, Бәйрут, 1996.

Куртуби, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Ахмәд, әл-Җами ли-Ахкамил-Куръан, I-XX, Бәйрут, 1985.

Мухаммәд Илйас Абдүлгани, Тарихy Мәккәтел-Мүкәррамәти Кадимән вә Хадисән, әл-Мәдинәтүл-Мүнәввәррррә, 2001.

Мехмәд З. Пакалын, Османлы Тарих Дейимлери вә Тәримләри Сөзлүгү, I-III, Истанбул, 1971-1972.

Мухаммәд Абдуллаһ Драз,Ән-Нәбәүл-Азим, Даруд-Каләм, басылу елы юк.

Мустафа Асим Көксал, Ислам Тарихи, I-XVIII, Истанбул, 1987.

Мүнави, Мухаммәд Абдүррауф, Фәйзүл-Кадир Шәрхул-Җамиис-Сагыйр, I-VI, Бәйрут, 1994.

Мүслим, Әбул-Хүсәйин бин Хаҗҗаҗ әл-Кушәйри, әл-Җамиус-Сахих (Мухаммәд Фуад Абдүлхаки шәрехләмәсе), I-III, Истанбул, 1992.

М. Акиф Дениз, Илк Адым, февраль, 2003.

Нәби Бозкурт, DIA, «Мәккә» маддәсе, Анкара, 2003.

Нәсаи, Әбу Абдиррахман Ахмәд бин Шуайб, Сүнәнүн-Нәсаи, I-VIII, Истанбул, 1992.

Нәвәви, Әбу Зәкәрийййа Йахйа бин Шәрәф, Рийазүс-Салихин (Йашар Кандәмир, Исмаил Лүтфи Чакан, Рашит Күчүк тәрҗемәсе һәм шәрехләмәсе), I-VIII, Истанбул, 1997; Шәрху Сахихи Мүслим, I-XVIII, Мисыр, 1981.

Осман Нури Топбаш, Күллийат, Әркам Йайынлары.

Рамазаноглу Махмуд Сами, Ухуд Газвәси, Истанбул, 1984.

Рази, Фахруддин Мухаммәд бин Өмәр, Мәфатихул-Гайб (әт-Тәфсирул-Кәбир), I-XXXII, Бәйрут, 1990.

Рудани, Әбу Абдуллаһ Шәмсүддин Мухаммәд бин Сүләйман, Җәмъул-Фәваид мин Җамиил-Усул вә Мәҗмауз-Зәваид – Бүйүк Хадис Күллийаты, I-V Наим Әрдоган тәрҗемәсе, Йусуф Өзбәк басмасы, Истанбул, басылу елы юк.

Садык Дана, Күллийат, Әркам Йайынлары.

Сафвәт Сәних, «Су Кристалләринин Сырры», Сызынты, декабрь, 2002, № 287.

Сәмхуди, Вәфаүл-Вәфа, I-IV, Бәйрут 1997; I-II, Мисыр, 1326.

Сүһәйли, Әбул-Касым Абдуррахман бин Абдуллаһ, әр-Равдул-Үнф фи Тәфсирис-Сирәтин-Нәбәвииййә ли-Ибни Һишам, I-IV, Таһа Абдуррауф Саъд шәрехләмәсе, Бәйрут, 1978.

Сүйүти, Әбул-Фазл Җәлаледдин Абдуррахман бин Әбу Бәкир, әл-Җамиус-Сагыр, I-II, Мисыр, 1306; Мифтахул-Җәннә фил-Ихтиҗаҗ бис-Сүннә, Бәйрут, 1987.

Шаһ Вәлииййуллаһ Диһләви, Хүҗҗәтуллаһил-Балига, Бәйрут, 1990.

Шәфик Җан, Мәснәви Тәрҗүмәси, I-VI, Истанбул, 1997.

Шинаси Гүндүз, «Мисйонерлик вә Христийан Мисйонерләр», Дийанәт Илми Дәрги, том 38, 2 нче сан, 2002.

Табәрани, әл-Хафыз Әбул-Касым Сүләйман бин Ахмәд, әл-Муҗәмул-Кәбир, I-XXV, Бәйрут, 1983.

Табәри, Әбу Җафәр Мухаммәд бин Җәрир, Җамиул-Бәйан ан Тәэвили Айил-Куръан, I-XXX Бәйрут, 1995; Тарих, I-XI, Мисыр, басылу елы юк.

Таһирул-Мәвләви, Әдәбийат Лүгати, әзерләде: Кәмал Әдиб Күркчүоглу, Әндәрун Китабәви, Истанбул, 1973.

Тирмизи, Әбу Иса, Мухаммәд бин Иса, Сүнәнүт-Тирмизи, I-V, Истанбул, 1992; әс-Шәмаилүл-Мухаммәдииййә Бәйрут, 1968.

Вахиди, Имам Әбул-Хасән Али бин Ахмәд, Әсбабү Нүзулил-Куръан, Кәмал Бәсйуни Заглул ред., Бәйрут, 1990.

Вакиди, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Өмәр, Мәгази, I-III, Бәйрут, 1989; Мисыр, 1948.

Йакуби, Ахмәд бин Әбу Йакуб бин Җафәр, Тарихүл-Йакуби, I-II, Бәйрут, 1992.

Зәхәби, Әбу Абдиллаһ Мухаммәд бин Ахмәд, Сийәру Аламин-Нүбәла, I-XXIII, Бәйрут, 1986-1988.

Зәкаи Конпара, Пәйгамбәримиз, Истанбул, 1987.

Зәмахшәри, Әбул-Касым Җаруллаһ Махмуд бин Өмәр бин Мухаммәд, Тәфсирүл-Кәшшаф ан Хакикатит-Тәнзил вә Уйунил-Әкавил фи Вужуһит-Тәэвил, I-VI, Мухаммәд Мәрси Амир ред., Каһирә, 1988.

# ЭСТӘЛЕК


ҺҮҘ БАШЫ ..................................................................................................... 5

**ҺИЖРӘТТЕҢ БЕРЕНСЕ ЙЫЛЫ / 9**

Рәсүлүллаһтың Мәҙинәи-Мөнәүүәрәгә тәүге урынлашыуы ............................... 9

Рәсүлде ҡунаҡ итеүсе – Әбү Әйүб әл-Ансари разыйаллаһу ғәнһү ................ 10

Әнәс ибне Маликтың Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә хеҙмәт итеүе ......................... 12

Муахат – мөһәжирҙәр һәм ансарҙар араһында ҡәрҙәшлек килешеүе............ 13

Мөһәжирҙәр менән ансарҙарҙың фазиләттәре ................................................. 16

Мәҙинә шәһәре һәм Мәҙинә низамнамәһе ....................................................... 25

Мәҙинәне харам ҡала тип иғлан итеү ............................................................... 29

Мәҙинә баҙары һәм сауҙа эшенең тәртипкә һалыныуы .................................. 30

Пәйғәмбәр мәсетен һәм бәхет Йортон төҙөү ................................................... 33

Йәмәғәт менән намаҙ ҡылырға өндәү ................................................................ 39

Беренсе аҙан........................................................................................................ 43

Әсхәбе суффә – ғилем һәм танып белеү мәктәбе .............................................. 46

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең хәҙрәти Ғәйшә әсәбеҙ менән никахлашыуы .......... 51

Мәҙинәләге хәл-әхүәлдәр.................................................................................. 52

Һугышҡа рөхсәт биреләеүе –
«Һеҙгә һуғыш башлағандарға һеҙ ҙә һуғыш иғлан итегеҙ!»............................ 55

Аллаһ юлында йыһат.......................................................................................... 59

Ҡайһы бер хәрби яуҙар...................................................................................... 64

**ҺИЖРӘТТЕҢ ИКЕНСЕ ЙЫЛЫ / 67**

Ҡайһы бер һуғыштар һәм Батн Нәхел сәфәре ................................................... 67

Ҡибланың үҙгәреүе............................................................................................. 69

Ураҙа, фытыр саҙаҡаһы һәм зәкәт ..................................................................... 73

Иғтикәф............................................................................................................... 81

Бөйөк Бәҙер Һуғышы ......................................................................................... 83

Фәрештәләр ярҙамы............................................................................................ 95

Бәҙер арыҫландары ........ 98
Бәҙерҙән ҡайтыу ........ 102
Әсирҙәргә ҡарата мөғәмәлә ........ 103
Ғәниməттәр тураһында хөкөм ........ 111
Шәһитлек дәрәжәһе ........ 113
Пәйғәмбәребеҙҙең ҡыҙы хәҙрәти Зәйнәбтең Мәҙинәгә килтерелеүе ........ 118
Йәһүдиҙәр һәм Бану Ҡәйнукағ һуғышы ........ 119
Сәвик һуғышы ........ 124
Хәҙрәти Ғәли менән хәҙрәти Фатиманың никахлашыуы ........ 125
Әһли бәйт һәм уның мөхәббәте ........ 129

### ҺИЖРӘТТЕҢ ӨСӨНСӨ ЙЫЛЫ / 132

ӨХӨД ҺУҒЫШЫ – ғибрәтле күренештәр менән тулы бәрелеш ........ 132
Сәхәбәләрҙең шәһитлеккә ынтылышы ........ 134
Шәһиттәр әфәндеһе – Хәҙрәти Хәмзә ........ 138
Аҡланыу ҡапҡаһын бикләгән сәхәбә – Сәғед ибне Рәбиғ ........ 146
Өхөд шәһиттәре ........ 147
«Беҙ Өхөдтө яратабыҙ, Өхөд тә беҙҙе ярата!» ........ 152
Өхөд һуғышынан алынырға тейешле һабаҡтар ........ 153
Хәмрә әл-Әсәд походы ........ 154
Мираҫ мәсьәләһе ........ 156

### ҺИЖРӘТТЕҢ ДҮРТЕНСЕ ЙЫЛЫ / 159

Рәжи ваҡиғаһы ........ 159
Биғри Мәғүнә ваҡиғаһы ........ 162
Бәни Нәдирҙең мәкерле планы ........ 164
Хәмер һәм ҡомарҙың тыйылыуы ........ 170
Ҙәт әр-Риҡағ ........ 173
Бәдри Сугра ........ 177

### ҺИЖРӘТТЕҢ БИШЕНСЕ ЙЫЛЫ / 179

Сәлмән әл-Фәрисиҙең мосолманлыҡ ҡабул итеүе һәм ирекkә сығарылыуы... 179
Баланы уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыу ғәҙәтенең бөтөрөлөүе ........ 184

Ғәүрәт ҡаплауҙың фарыз ҡылыныуы ........ 187
Мүрәйси бәрелеше ........ 189
Тәйәммүм ........ 190
Яла (ифтира) ваҡиғаһы ........ 191
Улар – дошман; уларҙан һаҡлан! ........ 197
ХӘНДӘК ҺУҒЫШЫ – сыҙап булмаҫлыҡ ауырлыҡтар, бәлә өҫтөнә бәлә ... 201
Хәндәктә бирелгән хәйерле хәбәр ........ 204
Хәҙрәти Жабирҙың бәрәкәтле ризығы ........ 205
Хәндәктә кисерелгән ауырлыҡтар ........ 207
Хәндәк һуғышындағы ҡаһарманлыҡтар ........ 210
Һуғыш – хәйлә ул ........ 213
Бану Ҡурайҙа һуғышы ........ 215

## ҺИЖРӘТТЕҢ АЛТЫНСЫ ЙЫЛЫ / 219

Хөдәйбиә килешеүе – еңеүҙәр асҡысы.
Ҡәғбә сағышы менән башланған сәфәр ........ 219
Бәйғәт әр-Ридуан – Аллаһ разыйлығын ҡаҙанған ант ........ 221
Хөдәйбиә килешеүе – исламға өндәүҙең яңы этабы ........ 224
Ап-асыҡ еңеү – ҡат-ҡат артҡан һидәйәт бәрәкәте ........ 230

## ҺИЖРӘТТЕҢ ЕТЕНСЕ ЙЫЛЫ / 234

Хөкөмдарҙарҙы исламға саҡырыу ........ 234
Йәһүдиҙәрҙең Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә сихыр һалыуы ........ 247
Хаин һәм фетнәсе йәһүзигә һуңғы һөжүм – Хәйбәрҙе яулау ........ 248
Ҡол хаҡы мәсьәләһендә талапсанлыҡ ........ 255
Дәүеслеләрҙең Мәҙинәгә килеүе ........ 256
Эфиопия мөһәжирҙәренең ҡайтыуы ........ 257
Йәһүдиҙәрҙең Пәйғәмбәребеҙҙе ағыуларға маташыуҙары ........ 258
Мутғә мәсьәләһе ........ 260
Хәйбәрҙән ҡайтҡанда ........ 261
Ҡаза ғөмрәһе ........ 263

## ҺИЖРӘТТЕҢ ҺИГЕҘЕНСЕ ЙЫЛЫ / 268

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең ҡыҙы хәҙрәти Зәйнәбтең вафаты ........................ 268
МӨЬТӘ ҺУҒЫШЫ (Жәйшүл-Үмәра) – бер төркөм сәхәбә яҙған дастан .... 268
Хәлид ибн Вәлидтең командирлыҡ оҫталығы ................................................ 273
Хаҡ килде, батыл сигенде. МӘККӘНЕ ЯУЛАП АЛЫУ ............................. 276
Ғәфү итеү байрамы ........................................................................................... 286
Мәккәлеләр анты................................................................................................ 290
Аманатты эйәһенә тапшырығыҙ! ..................................................................... 292
Тиңдәшһеҙ тоғролоҡ ......................................................................................... 295
Хөнәйен һуғышы ............................................................................................... 296
Әүтас һуғышы .................................................................................................. 300
Таифте ҡамалышта тотоу ................................................................................. 300
Ғәниməттәрҙе бүлешеү ..................................................................................... 302
Бер мосолманды үлтергән өсөн яза ................................................................ 309
Мәккәгә вәли һәм мөғәллим билдәләү ............................................................ 312

## ҺИЖРӘТТЕҢ ТУҒЫҘЫНСЫ ЙЫЛЫ / 314

Үткен тел ҡылысҡа тиң.................................................................................... 314
Гонаһлының хәбәрен тикшер! ......................................................................... 318
ТӘБҮК СӘФӘРЕ – олуғ иман һынауы ............................................................. 319
Ғәскәр хәстәрлеге өсөн инфаҡ ҡылыу............................................................ 326
«Сәғәтү әл-Ғөсрә» – ауырлыҡ осоро............................................................... 329
Тәбүк шәһите...................................................................................................... 335
Монафиҡтарҙың хыянаты һәм Дырар мәсете ................................................ 337
Кесе йыһаттан – оло йыһатҡа .......................................................................... 338
Тәүбәләре кисектерелгән өс сәхәбә ................................................................ 339
Ер үә күк байлыҡтары – Аллаһтыҡылыр ....................................................... 344
Ғибәҙәтһеҙ диндә хәйер юҡ! ........................................................................... 345
Тәбүк сәфәренән ҡайтҡас булған башҡа ваҡиғалар...................................... 348
Илселәр йылы..................................................................................................... 350
Хаж йолаһы ....................................................................................................... 352

## ҺИЖРӘТТЕҢ УНЫНСЫ ЙЫЛЫ / 355

Ғәди ибн Хәтимдең исламды ҡабул итеүе ........ 355
ХУШЛАШЫУ ХАЖЫ – Йәшәйеш нурының тәүге һәм һуңғы хажы ........ 357
Бөгөн динегеҙҙе камиллыҡҡа еткерҙем ........ 366
Илаһи ҡәһәр ысынға ашҡан урын ........ 367

## ҺИЖРӘТТЕҢ УН БЕРЕНСЕ ЙЫЛЫ / 371

Ҡауышыу һәм олуғ хушлашыу – «БӨЙӨК ДУҪ» ЯНЫНА ИЗГЕ СӘФӘР. 371
Ғаләмде һарыған ҡайғы........ 384

## ИҢ КАМИЛ ҮРНӘК / 390

## ҺҮҘ АХЫРЫ / 402

## БИБЛИОГРАФИЯ / 405

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................

................................................................................................................................................